# АҒИҘЕЛ

Өфө,
октябрь
2010

10(1050)

ӘҘӘБИ-НӘФИС ҺӘМ ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ ЖУРНАЛ
ЛИТЕРАТУРНО-ХУДОЖЕСТВЕННЫЙ
И ОБЩЕСТВЕННО-ПОЛИТИЧЕСКИЙ ЖУРНАЛ

Ойоштороусылары:

Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте,
Башҡортостан Яҙыусылар берлеге,
Редакция коллективы.

Учредители:

Правительство Республики Башкортостан,
Союз писателей Республики Башкортостан,
Коллектив редакции.

1923 йылдың март айынан башлап сыға.
Башҡорт телендә айына бер тапҡыр баҫыла.
Издается с марта 1923 года.
Выходит один раз в месяц на башкирском языке.

АҒИҘЕЛ ● АГИДЕЛЬ

***Баш мөхәррир***

Әмир ӘМИНЕВ

***Мөхәрририәт:***

Мөхәмәт БАҒЫШАЕВ,
Рауил БИКБАЕВ,
Рәмил ЙӘНБӘК *(баш мөхәррир урынбаҫары)*,
Марат КӘРИМОВ,
Фәнил КҮЗБӘКОВ *(бүлек мөхәррире)*,
Ноғман МУСИН,
Ғайса ХӨСӘЙЕНОВ,
Сабир ШӘРИПОВ *(бүлек мөхәррире)*,
Әмир ЮЛДАШБАЕВ.

***Редакция хеҙмәткәрҙәре:***

Гөлназ Ҡотоева *(яуаплы сәркәтип)*,
Мәхмүт Хужин *(бүлек мөхәррире)*,
Ләйсән Мараҡанова *(өлкән мөхәррир)*,
Харис Сәғитов (баш мөхәррирҙең хужалыҡ эштәре буйынса урынбаҫары),
Гүзәлиә Тутаева, Әлфиә Махиянова *(корректорҙар)*,
Рәйсә Ҡамалетдинова, Ләйсән Ишембәтова *(компьютерҙа йыйыусылар)*,
Роза Шәйнурова *(компьютерҙа нәшергә әҙерләүсе)*,
Рима Нәзифуллина, Зөлфиә Биктимерова *(бухгалтерҙар)*.

Журнал Элемтә, мәғлүмәт технологиялары һәм масса коммуникациялары өлкәһендә күҙәтеү
буйынса федераль хеҙмәттә 2009 йылдың 14 авгусында теркәлде.
Таныҡлыҡ ПИ № ФС-37206.

---

Журнал редакцияла компьютерҙа йыйылды • һәм биттәргә һалынды.
Баҫырға ҡул ҡуйылды 01.10. 2010. Офсет ҡағыҙы. Форматы 70х100 1/16.
"Times" гарнитураһы. Офсет ысулы менән баҫылды.
Шартлы баҫма табаҡ 15,6. Иҫәп нәш. табаҡ 18,1.
Тиражы 3 651 экз. Һатыуҙа хаҡы ирекле. Заказ № 2.0140.10.

---

**Беҙҙең адрес:** 450001, Башҡортостан Республикаһы,
Өфө ҡалаһы, Октябрь проспекты, 2, 4-се ҡат.
«Ағиҙел» журналы редакцияһы.
**Наш адрес:** 450001, Республика Башкортостан,
г.Уфа, проспект Октября, 2, 4-й этаж.
Наш адрес в Интернете: Agideljurn@mail.ru.
http://agidel.pressarb.ru.

---

Баҫма Матбуғат һәм киң мәғлүмәт коммуникациялары буйынса федераль
агентлыҡтың финанс ярҙамында сығарылды.
Выпуск издания осуществлен при финансовой поддержке
Федерального агенства по печати и массовым коммуникациям.

---

Башҡортостан Республикаһының «Өфө полиграфкомбинаты»
дәүләт унитар предприятиеһында баҫылды.
(450001, Өфө ҡалаһы, Октябрь проспекты, 2).
Отпечатано в Государственном унитарном предприятии
Республики Башкортостан «Уфимский полиграфкомбинат».
(450001, г.Уфа, пр.Октября, 2).

---

Банкыла беҙҙең реквизиттар: журнал «Агидель» ИНН 0274014887
р/с 40602810200830000004, к/с 30101810600000000770
филиал ОАО «Урало-Сибирский» банк г.Уфы, БИК 048073770

**© «Ағиҙел», 2010 (10,1050)**

# БЫЛ ҺАНДА:

СӘСМӘ ӘҪӘРҘӘР

**Гөлнур Яҡупова.** Ҡатындар. Трилогия.
Бер һөйгәнем өсөн. Икенсе китап. ....................................................5

ШИҒРИӘТ

**Мәүлит Ямалетдин.** Ғүмер кисем. Шиғырҙар. ........................67

**Шәүлиә Зөлҡәрнәева.** Индәремдә – йылдарым. Шиғырҙар. ...76

**Эдгар Вилданов.** Заманы шулай инеме? Шиғырҙар. ................82

СӘСМӘ ӘҪӘРҘӘР

**Сабир Шәрипов.** Эшһеҙгәрим. Хикәйә. ..................................88

ӘҘӘБИ ТӘНҠИТ

**Әнғәм Хәбиров.** “Ямауһыҙ ине йөрәк...” *(Риф Мифтаховтың яңы быуат башындағы шиғриәтенә бер ҡараш).* ..........................95

*Башҡортостан яҙыусыларының сираттағы съезы алдынан*

Әҙәбиәт тормош дәреслегеме бөгөн? **Әмир Әминев, Гөлсирә Ғиззәтуллина** менән әңгәмә. ......................................................102

БАШҠОРТ ХӘТЕРЕ

**Рәүеф Насиров.** Ярҙам эҙләп – Шәреҡкә. ...................................125

ҠӘЛӘМДӘШТӘР ТӨҪӨ

**Хәлит Ғафури.** Хәлит мин, Ғафуриҙың ейәне, Әнүәрҙең улы. .....139

**Миңниса Баһуманова.** “Башҡорт... матур йәшәргә тейеш.” ......142

*2010 – Бөтә Рәсәй халыҡ иҫәбен алыу йылы*

**Мәхмүт Хужин.** Быуаттар туплаған тәжрибә. .............................147

РУХИ ХАЗИНАЛАР

**Сәлимйән Бәҙретдинов.** Тыйыу йолаһы. ...................................151

ДИН ҺӘМ ФӘН

**Хәлил Барлыбаев.** Фән, философия һәм йәмғиәт: Башҡортостан үлсәме. .................................................................164

МУЗЕЙҘАР – МӘҘӘНИӘТЕБЕҘ КӨҘГӨҺӨ

**Фәнис Янышев.** Рухи хазиналар йыйып... .................................170

СӘНҒӘТ

**Миләүшә Иҙрисова.** Яҡты күҙ йәштәре... *(Мәғәфүр Хисмәтуллиндың тыуыуына 95 йыл).* ..........................174

*2010 – Бөтә Рәсәй халыҡ иҫәбен алыу йылы*

**Мәхмүт Хужин.** Һеҙгә иҫәп алыусы килде. ..................................182

«АҒИҘЕЛ»ГӘ ХАТТАР КИЛӘ

ӘҘӘБИ-МӘҘӘНИ МӨХИТ

# В НАШЕМ НОМЕРЕ:


ПРОЗА И ПОЭЗИЯ

**Г. Якупова.** Женщины. *Трилогия.* Ради единственной любви. Вторая книга.
**Маулит Ямалетдин, Ш. Зулькарнаева, Э. Вильданов.** *Стихи.*
**С. Шарипов.** Бездельник. *Рассказ.*

ЛИТЕРАТУРНАЯ КРИТИКА

**А. Хабиров**. «Сердце без заплаток» *(о поэзии Рифа Мифтахова).*

*Встречая съезд писателей Башкортостана*

Является ли литература учебником жизни? Интервью с **А. Аминевым, Г. Гиззатуллиной.**

ПАМЯТЬ БАШКИРА

**Р. Насыров.** За поддержкой – на Восток.

ЖИВАЯ ПАМЯТЬ

**Халит Гафури.** Я – Халит, внук Гафури, сын Анвара.
**М. Багуманова.** «Башкир… должен жить достойно».

*2010 – год Всероссийской переписи населения*

**М. Хужин.** Опыт, накопленный веками.

КОРНИ ДУХОВНОСТИ

**С. Бадретдинов**. Запреты.

РЕЛИГИЯ И НАУКА

**Х. Барлыбаев.** Наука, философия и общество.

МУЗЕИ – ЗЕРКАЛО КУЛЬТУРЫ

**Ф. Янышев.** Собирая духовные сокровища.

ИСКУССТВО

**М. Идрисова.** Слезы радости *(95 лет со дня рождения Магафура Хисматуллина).*

*2010 – год Всероссийской переписи населения*

**М. Хужин.** К вам пришел переписчик.

ПИСЬМА В «АГИДЕЛЬ»

ЛИТЕРАТУРА, КУЛЬТУРА…


---


**Телефондар:**
Баш мөхәррир — 277-76-88 (факс)
Баш мөхәррир урынбаҫары һәм яуаплы сәркәтип — 274-89-65
Баш мөхәррирҙең хужалыҡ эштәре һәм подписка буйынса урынбаҫары —292-77-60 (факс)
Шиғриәт һәм сәнғәт, тәнҡит, публицистика бүлектәре —277-87-73
Проза бүлеге — 277-87-50
Бухгалтерия — 277-78-90 (факс)



● Редакция фекере авторҙар фекере менән тап килмәҫкә лә мөмкин.

● Редакцияға килгән ҡулъяҙмалар рецензияланмай һәм кире ҡайтарылмай.

● Журналда сыҡҡан яҙмаларҙы күсереп баҫҡанда «Ағиҙел»дән алынғанлығын күрһәтеү мотлаҡ.

● Нәшриәт ғәйебе менән киткән етешһеҙлектәр өсөн редакция яуап бирмәй. Улар хаҡында 223-76-62 телефоны менән хәбәр итергә кәрәк.



Гөлнур
ЯҠУПОВА

# КАТЫНДАР

ТРИЛОГИЯ

## Бер һөйгәнем өсөн...

### Икенсе китап

17

Алыҫ-алыҫта нимәлер гөрһөлдәне – йоҡо аралаш ишеттем дә уяныр-уянмаҫ тыңлап яттым бер арый, ҡабатланырмы тип. Ҡабатланманы. Тынысланып, таңғы татлы йоҡоға сумдым ғына тигәндә, дөмбөрҙәп күк күкрәне, гүйә. Уңарсы булмай, шарт та шорт килгән дәһшәтле тауыш тәҙрәләрҙе зыңҡылдата ҡағып үтте. Әллә өрләгөбөҙ ишелдеме?!

Йоҡом осто. Өй имен былай, ҡояштың сибек нурҙары өрлөктө күгелйем һары төҫкә мансыған. Көн яҡтыһында үҙгәреп юҡҡа сығасаҡ был сәйер төҫтө туйғансы күреп тә өлгөрмәнем, тыштан ҡартәсәйем ҡабаланып килеп инде. Инешләй үк электр лампочкаһын тоҡандырҙы. Һис тә улай ҡыланмай торғайнысы: тотоп ингән ҡомғанының ҡорһағын көлдөксәнән бер ус ҡом алып ышҡып, эсле-тышлы сайҡағас, бисмиллаһын әйтеп, яңы һыу тултырып, битен-ҡулын сайып ала ла уны түргә, теге мәрүәт эсле оло көршәк янына, мендереп ултыртып ҡуя, шунан, шымбаҫар бесәйҙәй ипле йөрөп, тәҙрә пәрҙәләрен тартып асҡас, һике ситенә намаҙлығын йәйә ғәҙәттә. Ә мин шуларҙы ишетә-тоя, доға көйөнә бәүетелеп, йоҡо ләззәтенә сумам… Әле лә шул ләззәткә тамшанып ҡарайым да, юҡ, сума алмайым, ҡалҡыуыс кеүек ҡалҡам да сығам өҫкә – һиҫкәндереп уятҡан таңға.

– Күрәнле айбарлана, боҙо ҡуҙғалған! – Ҡартәсәйем әллә һөйөнсөләй, әллә хафалана.

---

*Шағирә һәм прозаик Гөлнур Якупова "Катындар" тип аталған трилогия тамамланы. Әҫәрҙең беренсе китабы «Ҡыҙ бала» журналдың 2009 йылғы 7-8-се һандарында баҫылды.*
*Хәҙер «Ағиҙел» уҡыусыларын икенсе китап менән таныштырабыҙ.*

– Ул хәтлем һөрән һалырлыҡ нимә булған, ә? – Тороп ултырҙым, мыжып ҡына.

– Бар, тим, йүгер, боҙ киткәнен күреп ҡалырһың. Әтеү ни, төндә генә егә башланы арбаһын Күрәнле…

– Бергә барырбыҙ, ҡартәсәй, намаҙыңды тиҙ генә уҡый һал да.

– Тиҙ генә, тисе, намаҙҙың үҙ тәртибе ләһә, ҡолоҡасым. Бар, һуҙмаланма, Татар әбекәйеңә иптәш булырһың, исмаһам, ул, бисараҡай, күптән яр буйында буҙлап торалыр.

– Таң атмаҫ борон Татар әбекәйгә унда ни ҡалған, бәс?

– Кем ҡалған, тиһәңсе… Әдисәйен юҡһына Таһура еңгә…

Ҡапыл йөрәгем ярһып тибә башланысы? Һынағаным бар: тиккә түгел был. Һәләт кенә кейендем дә Күрәнле яғына ашыҡтым.

Уянған Толпарлы: танауыма торбаларҙан сыҡҡан төтөн әсеһе һирпелә, ҡолағыма аҙбарҙа көнгә сығырға теләп түҙемһеҙләнгән мал мөңрәгәне салына. Ике күҙем – йылға ярында, әллә ҡайҙан шәйләп киләм унда яңғыҙ һерәйеп торған һынды. Сырамытам да: Татар әбекәй шул, көйәнтәгә оҡшап баҫҡан – ғүмер баҡый теген машинкаһы артында ултырыуынандыр, алға иңкәйеберәк ҡалған. Атылып барып уны ҡосаҡларға уҡталдым да, ҡыймай, туҡталып ҡалдым. Бер кемдә, бер ниҙә эше юҡтай, йылғала аяуһыҙ айҡашҡан боҙҙарға ҡараған да ҡатҡансы?! Эргәһендә генә байтаҡ көтөп торҙом, өндәшерме, юҡмы тип. Ләм-мим. Әйтерһең, ул – бер үҙе бер утрауҙа, утрау, тиемсе, яңғыҙы бер ҡитғала, хатта ки ғаләмдә! Шулайыраҡ итеп тойҙом халәтен…

Ҡулына йәп-йәшел ботаҡ тотоп алған: бармаҡ битендәй генә кескәй япраҡтарынан таныным – килен ағасыныҡы. Бик иртә япраҡ ярған? Татар әбекәй, әлеге ботаҡты гөлдәй күреп, күкрәк түренә терәп тотҡан килеш, ҡымшанмай тороуын белә. Әллә?! Әллә бер-бер зиһене зәғифләнгәнме? Ҡасандыр үҙенән ишетепме, ҡолағыма яғылып, хәтеремә эләгеп ҡалған һүҙ телемә килеп инде шул минутта:

– Йәнкиҫәк!

– Әү, бәгрым, Әдисәй! Әү, жаным! Монда жанкисәгең…

Шулай тип өҙөлөп өндәште лә, Татар әбекәй аҫҡа, ажғырып ятҡан йылғаға табан төшә башланы. Ярай ҙа, ары-бире тотонорға ваҡ ҡыуаҡтар – кәзә талы, суҡ тал, һары тал – һәммәһе бар Күрәнле ярында, улар таңғы өшәнестән, һеҙөшөп үрәпсегән боҙ шаҡмаҡтарынан ҡурҡып дерелдәй һымаҡ. Ә мин, ауылымдың егәрле, һөнәрле килендәренең береһе, сабый сағымдан үҙ иткән кешемдең ғүмере ҡыйылып ҡуймаһын яҙғы хәтәрҙә тип, ҡалтырап төштөм. Әлдә яр йылғаға уҡ барып убылмаған, саҡ-саҡ һеҙәгәйеп, табан терәр ер ҡалдырған, әйтәгүр. Татар әбекәйҙән бер тотам ҡалманым, шәленең осонан матҡып тотоп, ярышлап килеп баҫтым.

Бына бер яҫы ғына боҙ шаҡмағы беҙҙең аяҡ осона тиерлек килеп терәлде шул саҡ. Татар әбекәй ҡапыл алға ынтылды, йылғаға ташланамы, тип ҡотом осоп, беләгенә йәбештем. Юҡ, ташланманы, баяғы килен ағасының ботағын эйелеп боҙға һалды ла турайып баҫты. Башымды алғараҡ һоноп, йөҙөнә күҙ һалдым: һағышлы ҡараштарын һаман әлеге боҙҙан алмай тороуы (зиһене имен һымаҡ?). Ә боҙ, ана, урта төштә ағып китеп бара, уның һалҡын, зәңгәрһыу аҡ һыртында ятҡан йәшел ботаҡ, һәләк булырға дусар тере йәндәй, үҙәкте өҙә. Бәлки, таныш түгел алыҫ яҡтарҙа берәй тупраҡҡа төртөлөп, тамыр ебәреп тә ҡуйыр ул?..

Күҙем ахырҙа яҙлыҡты теге боҙ шаҡмағынан. Ҡояш тау арьяғынан яртылаш күренде, тирә-йүн күҙ сағылдырғыс яҡтыға сумды. Яр буйына, күпер тирәһенә,

бала-саға эркелде, уларҙы ҡурсып килгән ололарҙың тауышы ишетелде. Беҙ арыраҡ баҫып торабыҙ. Ниһайәт, Татар әбекәй миңә табан боролдо, ҡосаҡлап уҡ алды:

– И, Нуриякәем, син икәнсең. Борчылма, акылдан язмадым. – Ҡәҙимге үҙем белгән, салт аҡыллы Татар әбекәй ине янымда.

– Йәнкиҫәк! – тинем тағы ла, шулай өндәшкем килеп тик торасы уға. – Ҡотомдо алдың…

– Аллаһының мәрхәмәте киң! Яр башынан ҡартәсәйем тауыш бирҙе, түҙмәгән, килеп еткән. –Үрмәләгеҙ өҫкә, йә-йә!

Баяғы өшөп-күшегеп дерелдәшкән талдарға йәбешеп ярға күтәрелдек, ботаҡтарында йәшәү һуты уянғанлығын айырым асыҡ һиҙҙек. Тиртҡән бөрөләрҙең сабыйҙарҙыҡылай саф һулышы иһә тотош һауаға таралғайны.

Ҡартәсәйемә ым менән генә белгерттем дә Татар әбекәйҙе оҙата киттем. Ҡайтышлай Яңы өйгә инеп, ундағыларҙың хәлен белешеп тә сығырмын. Юҡ, ҡартәсәйемә, Атай йортона, бөтөнләй күсенеүем түгел, сығарылыш имтихандары алдынан ваҡытлыса йәшәп тороуым. Әсәйем үҙе ҡушты, игеҙәктәр башыңды ҡатыра бында, ҡәйнәмдә тыныс, иркенләп уҡы һабағыңды, тине.

Татар әбекәйҙең өйөнә инеү менән, тәҙрә ҡырындағы ултырғысҡа ҡуйылған биҙрәлә күпереп япраҡ ярып ултырған йәшел ботаҡтар күҙемә салынды.

– Килен ағасымы? – тип һораған булдым, танып торһам да.

– Бүтәннәр, март җитсә, тал чыбыгын суга куеп көчекләндерә, ә мин менә – үз агачымны…

– Үҙ ағасыңды?

– Акация ул. Беләсеңдер лә?

– Ҡырҙан килгән уҡытыусы Әлфиә апа бер ваҡыт аптырап әйтеп ҡуйғайны дәрестә, нишләп акацияны был яҡта килен ағасы тип йөрөтәләр ул, тип, беҙ ни, килен ағасы булғас килен ағасы инде, тинек тә ҡуйҙыҡ. Апа төпсөнөп торманы, шул көйө онотолдо.

– Кырымнан, туган җиремнән, алып килгән идем нәни генә бер үсентесен, Әдисәй җаныкаем йорт алды бакчасына утырткан иде, үсте дә китте, ә бит юлда күпме көннәр кесәмдә йөрттем, корымаган. Аңа да, миңа да шушында тамыр җибәрергә язган… Әүвәл бу тарафларда ят куак булгангамы, толпарчыкканнар аны “килен агачы” диеп атады да куйды. Бәлки, бирнәсез төшкән килен булуыма ишарә итүләре булгандыр… Бала-чагага бер мәзәк, көзләрен килен агачының кузагын сыбызгы итеп сызгыртып бер булалар ич.

– Шул бер ҡыҙығы инде уның – һыҙғыртҡысы, сәскәһе сәскәме, ташҡа үлсәйем, ваҡ һары күбәләк ҡунған кеүек, ни емеш бирмәй, исмаһам. – Килен ағасын шулай тип хурланым да ташланымсы ҡапыл, уф! Ысын шулай уйлай торғайным ауыл тултырып үҫкән был ҡыуаҡ хаҡында. Уйлау – бер, әйтеү – икенсе ләһә! Тиҙ генә йүнәтергә ашыҡтым: – Иҫтәлекле ағас икән… Иветә, Татар әбекәй?

– Истәлекле… Өстемдәге бер кат күлмәгем белән урлап качты мине Әдисәем…– Шаҡ ҡатып ҡарап тороуымды күреп, өҫтәп ҡуйҙы: – Үземнең ризалыгым белән анысы... И, балакай, бер сөйгәнем өчен алтмыш сөймәгәнне сөярмен, диләрме әле толпарчыкканнар? Нәкь шул мәкаль әнә минем хакта…

Шунан, бик мөһим эше иҫенә төшкәндәй, ҡабаланып машинкаһы артына ултырҙы ла нимәлер тегә башланы. Һорауҙарым ифрат күп ине лә, нишләмәк, хушлашып ҡайтып китеүҙән башҡа сара ҡалманы.

«Бер һөйгәнем өсөн…» Төбөнә төшөп үк аңлай алманым, әллә шуға был һүҙҙәр ҡолағымда яңғырап тик торҙо. Бер нисә көн ошо маҙанан айырыла алмай хитланғас, түҙмәнем, ҡартәсәйемдән һораштым, ниндәй мәғәнәлә әйтелгән ул мәҡәл, тип. Һынамсыллап ҡарап торҙо ла, нимәләр уйлап йөрөүемде үтә күреп торғандай, һөйләп алып китте:

– Әдисәй ағайҙың, бынағайыш, үҙ исеме Фәсхетдин дәһә, әрмегә киткәнен әлеп-сәлеп кенә хәтерләйем, миңә биш-алты йәш кенә булғандыр ул саҡта. Шул китеүенән мең туғыҙ йөҙ егерме икенсе йылда ғына әйләнеп ҡайтты, унынын яҡшы иҫләйем.

– Сөнки кәләш урлап алып ҡайтҡайнымы? – тип ҡыҫтыра һалдым.

– Урлағанмы ни?! Әлләсе… Ул хаҡта тәүләп һинән ишетеп торам. Бирнәһе лә юҡ, тип һөйләнде халыҡ һөйләнеүен. Ул йылды, егерме икелә, тим, илдә ҙур ваҡиға булды, оноторлоҡ түгел: СССР ойошторолдо…

– Килен ағасын алып килгән дәһә теге кәләш.

Ҡартәсәйем өнәмәне минең шулай сыпраңлап һүҙен бүлеүемде, тыңлай белмәгәс, әтеү, һорашма бүтән, тигәндәй, ҡулын һелтәне. Түрбашта эленеп торған киндер тоҡсайҙы сөйҙән алып, эсендәге ваҡ орлоҡ һуғанын батмусҡа бушатты ла кипкән-серегәнен аралап таҙартырға тотондо. Мин дә ҡатышып киттем һәм һүҙҙе икенсе яҡтанырaҡ ялғап ебәрҙем:

– Ниткән ҡушамат ул Әдисәй, әҙәм ишетмәгән?

– Ана шул әҙәм ишетмәгән әкиәт хәбәр һөйләргә әүәҫ булғаны өсөн йәбештергән дә халыҡ уға ҡушаматын. Башта Фәсхи-Әдисәй ине, тора-бара мулла ҡушҡаны бөтөнләй төшөп ҡалды. Дәү ағас ат яһап, шуның ҡорһағына ғәскәр йәшереп дошман ҡәлғәһенә индергән әллә ниндәй түпәгүҙ дейеүҙәр менән көрәшеп йөрөгән Әдисәй тигән бер батыр хаҡында әкәмәт тарихтар бәйән итер-итер ҙә: ”Мин Әдисәйҙән әҙ гиҙмәнем диңгеҙҙе!”– тип маҡтанып ҡуйыр булған үҙе. Эйе, кисмәгән түгел, кискән диңгеҙҙе. Батша әрмеһендә Ҡара диңгеҙҙә матрос булған еренән ун етенсе йылғы инҡилапҡа инеп киткән, йәмғеһе ун йыллап йөрөгән ситтә.

Күпме генә тырышһам да, тағы өндәшмәй ҡала алманым, сөнки ҡапыл ҙур сер асылды миңә:

– Бәс, беләм дәһә мин ул Әдисәйегеҙҙе!

– Нимә уйлап сығарҙың, йә? – Ҡартәсәйем башын сайҡап ҡуйҙы. – Һин түгел, атайың тыумағайны әле ул саҡ.

– Һы, һин үҙең дә тыумағанһың ул заманда, белгең килһә, беҙҙең дәүергәсә йәшәгән Одиссей хаҡында һөйләгән дәһә Әдисәй бабаҡай! Ҡара диңгеҙҙә ишетеп ҡайтҡан, моғайын… Хәйер, Одиссей Урта диңгеҙҙә йөҙгән. Бер утрауҙың батшаһы булған, атаҡлы Троя ҡалаһын яуларға тип ғәскәр әйҙәп барған еренән, төрлө мажараларға юлығып, егерме йылдан һуң ғына әйләнеп ҡайтҡан үҙ иленә. Ә ҡатыны Пенелопа уны шунса йыл көткән.

– Беҙҙең Таһура еңгә ише… – Ҡартәсәйем ауыр һулап ҡуйҙы ла баяғы мәҡәлгә килтереп терәне һүҙен: – Бер һөйгәне, берҙән-бере өсөн дарьялар кисеп килеп, ят төйәктә ерегеп, сит ҡәүемгә берегеп, йәғни ҙә тағы алтмыш һөймәгәнде һөйөп, йәғни ҙә үҙ итеп, холоҡ-фиғелдәренә яраҡлашып, күнеп йәшәп китеүе еңел булған тиһеңме ни уға?! Әй,ҡатын-ҡыҙ яҙмышы…

Улай икән. Бер һөйгәнең өсөн уның ата-әсәһен, нәҫел-нәсәбен, ил-йортон да һөйөү зарур, шулаймы? Бына һиңә Татар әбекәй, бына һиңә Толпарлы Пенелопаһы! “Әдисәй бабакаең турында сөйләрмен әле үзеңә, үсә төшкәчтен!”– ти торғайны ул, их! Теҙеп-теҙеп һөйләтәсәкмен хәҙер, яҙып аласаҡмын хатта.

Шулай йөрәкһенеүемә ҡартәсәйем йөпләп баш ҡағып торҙо: ул, моғайын, минең бәйәнсе булырымдан һаман да ваз кисмәгән.

«Уф, көнө бөгөн түгел, бәйәндәр көтөп торор. Аттестат алырға кәрәк, институтҡа инергә. Шунан… кейәүгә барырға…» – Ошо уйға төртөлдөм дә, үҙемәүҙем ғәжәп итеп, ҡыҙыу атлап мәктәп ҡапҡаһынан инеп барған еремдән шып туҡтап ҡалдым. Ләкин уйымды туҡтата алманым, ул, ауыҙлығын сәйнәп өҙгән арғымыҡтай, алыҫҡа, Өфөгә үк, сабып сығып китте. Ә унда – Кәбир!!! Тап шул мәлдә зыңғырлап ҡыңғырау тауыш бирҙе, уның тантаналы һәм талапсан саҡырыуы аңымды йәһәт ысынбарлыҡҡа бороп ҡуйҙы, теге арғымаҡ тып итеп Толпарлыға ҡайтып төштө: Әмин абый класҡа өтәләнеп килеп инеүгә парта артында ултыра инем инде. Ул күҙлеген тынын өрә-өрә ҡат-ҡат һөртөп кейгәнсе, зәңгәр күҙҙәрен туп-тура миңә төбәгән Фатихҡа ҡараш һирпеп, Әсмәнең класта юҡлығына борсолоп, Мәүлиҙәнең эсенә һыймай тышына сыҡҡан һөйөнөсөн тойоп өлгөрҙөм. Әхирәттәремдең береһе, айыуҙан да ҡурҡмаған урман ҡыҙы, бөгөн математиканан контроль эштән шөрләп килмәгән, ахырыһы, икенсеһе теге бөҙрә сәсле Дон казагы Олексийҙан хат алғандыр, моғайын. Ә бынау Фатихына ни булған, быңғаса ул минең яҡҡа йәшертен генә күҙ һалғылай торғайны, хәҙер ҡайһылай ҡыйыуланған?

Уңарсы абый класс таҡтаһын аҡбур менән ҡап уртаға бүлеп, вариантлап мәсьәләләр яҙырға тотондо. Себен безелдәһә, ишетелер ине, безелдәмәй: әллә ҡышҡылыҡҡа мәрткә киткәненән терелмәгән, әллә, быларға ҡамасауламайым тип, берәй мөйөшкә боҫҡан. Шыма ҡара таҡтала аҡбур һыҙылғаны ғына ишетелә һәм, ниңәлер, тешкә тейеп зымбырлата был хәрәкәт...

Әсмә һаман уҡырға килмәне. Мәүлиҙә менән аптырашып һөйләшеп алдыҡ: сатлама һыуыҡта ла, ыжғыр буранда ла дәрес ҡалдырмаған әхирәтебеҙгә бербер хәл булдымы әллә? Ниһайәт, Сәкинә апа, хәҙер ул директор, дәрес барған ерҙән класҡа килеп инде лә асыҡлыҡ индерҙе: Әсмәнең атаһы ҡапыл ғына вафат булып киткән. Күмәкләп аһ итеп ҡуйҙыҡ, былай ҙа биш-алты йәшенән әсәйһеҙ ҡалып, атай тәрбиәһендә үҫеүен беләбеҙ ҙәһә синыфташыбыҙҙың.

Йәкшәмбе көндө “Беларусь” менән Әшрәф килеп туҡтаны ҡапҡа төбөнә – ауыл профтехучилищеһын тамамланы, көҙҙән бирле үҙебеҙҙең колхозда механизатор. Айыусыға ултыртып алып барам, әҙерлән, тип кистән әйтеп сыҡҡайны шул, һүҙендә торған. Кабинаһынан һонолоп ҡарай-ҡарай сигнал бирә. Уңарсы Әсмә үҙе беҙгә килеп инеп кенә тора ине. Тәҙрәне асып өйгә саҡырҙым:”Ин, ул бында!”

Әхирәтемдең күңелен Артур яулап өлгөрҙө шул, Әшрәфтең мөхәббәте яуапһыҙ ҡалды. Шулай тип көйөнөп алдым өтәләнеп килеп ингән Әшрәфкә ҡарап. Табылыр әле уға ла үҙ ише. Әммә һиҙәм: Әсмә уның өсөн меңдәр араһында берәү. Ә, бәлки, был – тәүге кисереш, ысын һөйөү алдынан була торған, йәшлектә һис кемде лә урап үтмәй торған хистер? Тәүге күкрәү, наҙлы ләйсән ямғыры… Бер билдәле ғалим-психолог гәзиттә яҙып сыҡты лаһа, кеше, имеш, үҙ ғүмерендә һигеҙ тапҡыр ғашиҡ булырға һәләтле, ә беренсе мөхәббәт күптәр өсөн мотлаҡ кисерелә һәм үтеп китә торған “сир”, мәҫәлән, ҡыҙылса кеүек, тип. Һы…

– Әйҙә, тракторҙы бушҡа ебәрмәйек, Италияны барып күрәйек! – тип һалмаһынмы шул саҡ әхирәтем. Һаташамы әллә? Ҡайғы шаяртмай ул… Әшрәф тә, шулай уйлаптыр, ағарынып киткән. Йәнен бүлеп бирер ине егет ошо минутта

һөйгәненә! Ә Әсмә үҙе беҙгә ғәжәпләнеп ҡарап тора: – Бәс, белмәйһегеҙме әллә, Күрәнленең айырса үҙәнендә яңы Италия асҡандар бит?

– Кем асҡан, ҡасан?!

– Вертолетсылар асҡан. Әй, баштан һөйләйем. Беҙҙең леспромхозды ябырға уйлашалар, уныһын ишетмәнһегеҙҙер? Берәй төштә ҡырҡылмаған ағас ҡалмағанмы икән тип, вертолет менән һауанан ҡарап сыҡҡандар тотош тирә-яҡ урман-тауҙы, шунда иғтибар иткәндәр…

– Бар, тиҙәрме ағасты?

– Тауҙарҙа кәмендә бер йыл ҡырҡырлыҡ ҡайын бар, ти, тик унда техника үтерлек түгел икән. Италия хаҡында әйтергә бирмәй бынау Нурия, бүлдерә лә бүлдерәсе.

– Әй, Италия…

– Күрәнлегеҙҙең айырсаһын күргәнегеҙ бармы?

– Бар, – тине Әшрәф. – Алыҫ бит ул, Үҡтау яғында. Йылға ҡапыл бүленеп ике үҙәнгә төшөп ағып китә лә, Еҙемгә барып ҡушылырға әҙ генә ҡалғас, тағы тоташа.

– Ана шул айырса уртаһында – утрау, ти.

– Бар унда ҡоро ер, – тип йөпләне Әшрәф Әсмәне.

– Ана шул ҡоро ер тигәнең юғарынан ҡарағанда хас та итек формаһында, ти.

– Итек булғас, Италия шул! – Ҡысҡырып ебәрҙем, әйтерһең, ысынлап та географик асыш яһаным, ә ғәмәлдә әхирәтемдең һаташмағанын асыҡлап ҡыуанып тороуым. –Тик беҙҙеке – утрау, ә теге – ярымутрау…

– Киттек үҙебеҙҙең Италияға сәйәхәткә! – тине Әшрәф.

– Әйҙә?! – Әсмәнең күҙҙәренә ҡараным: һағышы төпкәрәк йәшеренгәндәр, баяғыса уҡ йәл ҡиәфәттә түгел ине әхирәтем. Дөм яңғыҙ түгеллеген, иҫен терәр, йыуатыр дуҫтары барлығын аңланы булыр. Ҡартәсәйем күптән беҙҙең һөйләшеүгә ҡолаҡ һалып, өндәшмәй генә сәй хәстәрләп йөрөй ине, әле килеп тауыш бирҙе: «Сәфәрегеҙ яҡын уҡ түгел, тамаҡ туйҙырып алығыҙ башта. – Шунан, миңә ҡарап алды ла өҫтәп ҡуйҙы: – Әсмә, балаҡай, уҡыуың бөткәнсе беҙҙә йәшәп торорһоң, Нурияны ла, имтиханға иркенләп әҙерләнһен тип, килен миңә ебәреп торҙо әле». Ниәт-теләгемде алдан иҫкәртеп тора ул шулай гелән, рәхмәт төшкөрө, Зирәк Рәйхана бит, ни әйтәһең.

Тиҙүк тырылдатып барып еттек Италияға. Әшрәфте тыңлап, әллә итек кейеп алғайныҡ. Икегә айырылғас, йылға был төштә әллә ни киң дә, тәрән дә түгел, әммә яҙғы ташҡын ҡайтып уҡ бөтмәгән, ялан аяҡ кисһәң, һалҡын һыу, үткер бысаҡ кеүек, телеп аласаҡ балтырҙы. Ун аҙымлап былтырғы көҙҙән һынып йығылған ҡамыштар, һарғайып кипкән күрән өҫтөнә сыҡҡан һыуҙан атларға кәрәк – уныһы йөҙләктән генә, артабан нисектер? Һыуы һарҡығанырaҡ күрәндәр араһынан ап-аҡ умырзаялар ҡалҡып сыҡҡан, Әшрәф уларҙы өҙөп, беҙгә тоттора һалды. Ә күк шундай аяҙ, әйтерһең, уның көмбәҙенә әле генә өр-яңы зәңгәр сатин тартып ҡуйғандар!

Әшрәф беҙҙе етәкләп алды ла утрауға (Италияға!) әйҙәне. Ҡамыштар аша үткәндә, үлеп ятҡан баҡаларға тап булып, сар-сор килеп алдыҡ.

Утрауға аяҡ терәнек, ниһайәт. Әллә ни ҙур түгел Италиябыҙ, сиктәре алыҫ китмәгән, тоҫмаллана. Ҡалҡыуыраҡ ерҙе һайлап, ҡартәсәйем тотторop ебәргән иҫке турпышаны йәйҙек тә түңәрәкләп ултырҙыҡ. Телгә, нишләптер, бер һүҙ килмәй, күҙҙәребеҙ генә һөйләшә: Әсмәнең оло ҡайғыһын уртаҡлашыу, тормошобоҙға ярһып яҡынайған йәшлектә йәшеренгән серҙәр, беҙҙе ошо минутта үҙ

ҡосағына һыйындырып үҙгәләндергән илаһи тәбиғәт – бөтәһе лә ҡараштарыбыҙға яҙылғандыр шул.

– Шымығыҙ! – Шулай тип ҡәтғи шыбырлаған Әсмәгә сәйерһенеп текләнек, былай ҙа шып-шым ултырабыҙ ҙаһа? Ул эйәге менән генә ярға ымланы: унда теҙелешеп, еҫкәнә-еҫкәнә, алты-ете бүре һыу эсеп тора! Эсеп туйҙылар, ахырыһы, уйнай башланы былар: томшоҡтарын һыуға сумырып алалар ҙа баштарын сайҡайҙар, сумырып алалар ҙа сайҡайҙар – ҡояш нурында аҫылташтай ялтыраған һыу тамсылары елкәләренә, арҡаларына сәселгәс, тотош кәүҙәләре менән һелкенеп алалар. Был ғәжәйеп күренеште әллә күпме ҡарап торор инең дә, әгәр йөрәгеңде ҡурҡыу ҡоршап алмаһа! Мин ни өсөндөр Әшрәфтең түгел, Әсмәнең беләгенә йәбештем, ул ғына ҡотҡара алыр һымаҡ анау йыртҡыстарҙан. Йөҙөндә тәүәккәллек сағыла. Мин дә тыныслана төштөм, Әшрәф иһә тирә-йүнгә күҙ йүгертә, моғайын, таяҡ йә таш-фәлән эҙләй.

Бына бер мәл бүреләр утрау яғына бер нисә аҙым яһап ҡуйҙы. Йөрәктең табанға төшөп китеүе буш һүҙ түгел икән, шуны белдем! Ярай ҙа, бая беҙҙе сарылдатҡан үлек баҡалар тәгәрәшеп ятҡан тапҡырҙа туҡтап ҡалды йыртҡыстар. Томшоҡтары, алғы тәпәйҙәре менән мәхлүктәрҙең һөрһөгән мәйеттәрен яр ситенәрәк этәрҙеләр ҙә, шуларҙың өҫтөнә ятып аунашырға тотондолар – әллә уйнауҙары, әллә аслыҡтан аҡылдан яҙыуҙары? Әсмәгә ҡараһам, ул йылмайып торасы. Тимәк, әллә ни хәтәр юҡ. Йөрәгем урынына ултырҙы һымаҡ.

Бәс, бүреләр бер мәл теге баҡаларҙы кемуҙарҙан һоғона башламаһынмы! Ҡыш буйы асҡа ҡаҡланғандыр бахырҙар… Шунан былар ҡырҡа боролдо ла, тағы теҙелешеп баҫып һыу эсеп алғас, көтөүе менән тау яғына ҡарап тоҡойҙо.

– Йыраҡҡа киттеләр микән?

– Бик йыраҡҡа түгелдер, бүреләр һыуға яҡынырыҡ төйәкләнә, ти атайым. – Шулай тине лә әхирәтем, йүнәтеп ҡуйҙы: – Ти торғайны...

– Абау, иветә, анау бүреләр, нисек ашайҙар һөрһөп ятҡан имәнес баҡаларҙы, фу! – Һүҙҙе башҡа яҡҡа шылдырырға тырышҡайным да, киреһенсә килеп сыҡты:

– Атайым урмандағы барлыҡ йыртҡыстың ҡылығын белә ине, – тип әхирәтем төпкәрәк төшөп хәтерләй башланы,– бүренең иң яратҡаны үләкһә-фәлән, шуға ла ул емтектең өҫтөнә аунай-аунай еҫкәй, ти… Ярай ҙа, шул баҡаларға юлыҡтылар, юғиһә йылғаны йөҙөп сығыу уларға бер ни тормай.

– Көн йылына төшкәс, Айыусыға зыярат ҡылырға барырбыҙ, Әсмә. Ҡартәсәйемде эйәртербеҙ, доғаларын уҡыр.

– Үҙем алып барырмын, тракторға ултыртып, – тип ҡушылды Әшрәф тә. Әсмә икебеҙгә лә алмаш-тилмәш ҡарап алды ла тәрән итеп тын алды. Мин дә уның ыңғайына һемереп яҙғы һауаны һуланым – һуңғы көндәрҙә күкрәк ситлеген ҡыҫып торған ҡулса ысҡынды, буғай.

Ҡайтырға йыйындыҡ. Яр ситендәге һыу шул арала байтаҡ сигенгән, аҡ ҡалпаҡлы умырзаялар, былай ҙа күҙ сағылдырғыс зәһәү нурға сорналған көнгә яҡтылыҡ, нәзәкәтлек өҫтәп, күгүләндә ялан аяҡ баҫып торалар. Былай самими сафлыҡ тик яҙҙарға ғына хас кеүек…

* * *

Аллаһ Тәғәлә ошо осор өҙлөкһөҙ яуған боҙ ҡатыш өшәнес ямғырҙы 9 май алдынан ғына тымыҙып ҡуйҙы, байрам таңында күккә сағыу ҡояшты тәгәрәтеп сығарҙы. Бөйөк Еңеүгә – 20 йыл! Орден-миҙалдарын теш порошогы менән ялтыратып тағып алған фронтовиктар һуғышта һәләк булған ауылдаштар иҫтәлегенә ҡуйылған обелиск янына ағылды. Көләс йөҙлө ағайҙарға күҙ һалдым:

күпселеге әле ҡарт түгел, 40 – 45-тәрҙә, йәшәү дәрте, иртәгәге көнгә ышаныс бөркөлә уларҙан. Шуға ла иғтибар иттем: Сталин барельефы һуғылған миҙалдарын берәү ҙә өйҙә ҡалдырмаған (Хрущев заманы түгел), тағып килгән.

Аяҡ өҫтө тороп радионан Брежневтың тантаналы телмәрен тыңланыҡ: Сталинды хурламаны, Жуковтың хәрби батырлығын таныны һәм Бөйөк Ватан һуғышында 20 миллион совет кешеһенең һәләк булыуын әйтте. Фронтовиктар төркөмөндә йәнләнеү һиҙелде, улар устары менән бер-береһенең яурындарына шапылдатты, ҡосаҡлашты. «Элек 7 миллион тиҙәр ине, шунда ғына торамы ни илдең ҡорбандары?» – тине кемдер, ярһып, бүтәндәре теләктәшлек белдереп баш ҡаҡты. Леонид Ильичтың Мәскәү менән Киевҡа герой-ҡала исемен биреү тураһындағы һүҙҙәре алҡыштарға күмелде. Пионер бүлмәһендәге стендта элекке герой-ҡалаларҙың исемлеге бар: Ленинград, Севастополь, Одесса, Волгоград (Сталинградҡа әйләндермәнеләр барыбер), хәҙер тағы ике ҡаланы өҫтәп яҙырға кәрәк, тип үҙемдең хәтеремә киртеп ҡуйҙым.

Ҡайтҡас та оҙаҡ арына алманым Еңеү байрамы тәьҫораттарынан. «Правда» гәзитен айырым бер илтифат менән ҡулыма алып уҡып сыҡтым. «20 миллион, 20 миллион, 20 миллион...» Уның һәр юлы миңә шулай тип ҡысҡырғандай тойолдо. Кәнсәләр йыйыштырғанда, ир-аттың гәптәрен әүәҫ тыңлап йөрөгәндә ишеткәндәрем яңынан зиһенемде айҡаны: йылға булып аҡҡан ҡан, ерҙең аҫтын өҫкә аҡтарған гранаталар, пушка йәҙрәләре, бомбалар яуғанда автомат тотҡан килеш окоптарҙа тереләй күмелеп ҡалған һалдаттар... Радионы тоҡандырһам, унда ла – һуғыш ауаздары. Танкистар отрядында хеҙмәт иткән санитарка һөйләй: «... Миңә ун туғыҙ ғына йәш ине, бәләкәс буйлы сибек кенә ҡыҙ баламын. Танкыларҙың яғыулығы кәрәсин бит инде, фашистар утҡа тотһа, тоҡана ла китә. Танкистарҙың иҫән ҡалғаны, дөрләп яна-яна, ергә һикерә, мин улар янына йүгерәм, ерҙә тәгәрәтеп, утты һүндерергә тырышам. Үҙемде лә әллә нисә ҡат ялҡын ялманы... Тәнгә үтеп инһә, ҡотолоу юҡ, ит яна башлай... Шул тиклем йәл, йәп-йәш егеттәр, имәндәй ирҙәр ғазапланып йән бирә, ҡотҡарып булмай! Илайым, бүре шикелле олойом, кем ишетһен ул мәхшәрҙә...»

Уф! Радионы тымыҙҙым да район гәзитен ҡулға алдым. «Ҡурай һәм мылтыҡ» тигән мәҡәләне уҡырға тотондом. Фронтовик ауыл хәбәрсеһе яҙған. Эсенә инеп киттем мәҡәләнең, шулай тасуири ине. «...Көнбағыш баҫыуында боҫоп, атакаға приказ көтәбеҙ. Күктә фашист самолеттары өйөрөлә. Алыҫта беҙҙең зениткалар тыҡылдай... Бер тимер ҡоҙғондо бәреп төшөрҙөләр, беҙҙән алыҫ та түгел килеп ҡоланы ла шартланы. Башҡалары күпмегәләр юғалып торҙо. Күккә ҡарап һөйләшмәй-нитмәй ятабыҙ. Көн эҫе, һауа томра, түҙәбеҙ, ҡымшанмайбыҙ ҙа хатта. Шул саҡ, арыраҡ ятҡан фронтташ дуҫыма иғтибар иттем, бер көнбағыштың һабағын киҫкеләп, юнғылап-тишкеләп хитлана. Башҡорт ул, Ырымбурға сиктәш бер ауылдан. Ҡурайсымын, ти. Еҙ ҡурайы булған да, өйөндә ҡалдырған. Улым үҫә, ун дүрт йәштә, уға аманат, ти... Яҡташ булғас, ныҡ дуҫлаштыҡ, әлбиттә. Иҫән ҡайтһаҡ, ҡунаҡҡа йөрөшәрбеҙ, ҡоҙа булышырбыҙ, тип һүҙ беректерҙек: уның улы, минең ике ҡыҙым бар. Ята торғас, эҫегә мәлйерәп йоҡлап киткәнмен. Төш күрәм: сәскәле аҡланда ҡайырып бесән сабам. Ҡайҙалыр, кемдер ҡурай тарта. «Азамат»ты һыҙҙыра... Ҡурай тауышы яҡыная башланы, көсәйгәндән-көсәйҙе. Уянып китһәм, ни күрәм: яҡташым тубыҡ сәнсеп миңә һөйәнеп ултырған да ҡурай тарта. Төштә тигәнем өндә, имеш. Көнбағыш һабағының эсен нисек итеп ҡыуышлатҡандыр, үҙе генә белә. Ҡурай оҙонлоҡ итеп киҫкән дә бармаҡ уйнатырға уйымдар тишеп, һәттойоҡ көй сығара. Бар

рота шым ҡалған, ҡурайҙың нимә икәнен белмәгәндәр ҙә моңға арбалған... Шул саҡ беҙҙең флангыға танкылар килеп терәлде, «Атакаға!» тигән фарман яңғыраны. Ике көн инде бер ҡалҡыулыҡты ала алмайбыҙ, ике урында немецтың таш дзоты ут сәсә...»

Артабан – ҡәҙимге һуғыш картинаһы. Атыш, ҡырылыш. Балыҡ ҡармаҡлағандай, үҙемде ҡыҙыҡһындырған мәғлүмәтте генә эләктереп алдым: ҡурайсы һәләк булған, ә иҫән ҡайтҡан дуҫы уның ғаиләһен барып күргән, ебәрергә өлгөрмәгән хатын тапшырған. Һәм, бәрәкалла, ике ҡыҙын да эйәртеп алып барып, ҡурайсының егет ҡорона ингән улына күрһәткән. Береһен һайлаған егет! Атаһының еҙ ҡурайында уйнай, ти үҙе.

***

Тәүлектә 24 сәғәт инде – аксиома. Әммә берсә ул күҙ асып йомғансы үтеп китә, берсә йөҙ сәғәткә һуҙылып талсыҡтыра. Айырыуса төндөң оҙонлоғо төрлөсә була. Бөгәсәге төн үҙенең эсенә тотош быуатты һыйҙырған кеүек тойолдо миңә. Етмәһә, анау Ай урағы аптырашҡа һалды: Гөлбикә апайҙың мунса артында үҫкән йөҙйәшәр шыршының осона, уғына ғына, килгән дә ҡырын төшөп ятҡан! Берсә ул Ай мөнтәлгән һары ҡауын ҡыйырсығына ла оҡшап ҡуя, әйтерһең кемдер уны мәҙәк өсөн генә бейеккә атып бәргән дә, ҡабырғаһы менән шыршы энәләренә ҡаҙалып эләгеп ҡалған. Икенсе ҡараһаң, әкиәти карапҡа ла тартҡан был Ай, сихри алтын Ай…

...Диңгеҙ ярында баҫып торам. Иге лә юҡ даръяның, сиге лә юҡ, күктәр менән тоташҡан ул, йөйө лә күренмәй. Аҡсарлаҡтар балыҡ сүпләп туйған, күрәһең, – тулҡындарҙың бәллеү түштәрендә бәүелеп йоҡомһораған мәлдәре. Күҙҙәрем талғансы, йотолоп бағам ыуылйым монарҙарға. Һауаларға олғашҡан алыҫ офоҡ өнһөҙ ялбарыуыма яуап бирә һымаҡ :уф, юҡ...уф, юҡ...Сәфәренән ҡайтмай ҙа ҡайтмай һөйгәнем.

Мин – Пенелопа. Ир ҡатынымын, ул әсәһемен. Йәрем – батырҙарҙан батыр Одиссей. Утта янмаҫ, һыуҙа батмаҫ аҫыл йәремде оҙаҡ йылдар өмөт өҙмәй көтәм, тоғро көтәм. Тирә-яғымда ҡоҙғон кеүек өйөрөлгән димселәр, Одиссейҙың батшалығына нәфселәрен һуҙып йөрөгән ир йораттары ахырҙа хәйлә уйлап таптылар: уның ҡатынын яулап алыу өсөн ярыш ойошторҙолар. Йәнәһе, батша тәхетенең шунса ваҡыт буш тороуы ил мәнфәғәттәренә зыян итә. Нишләргә миңә?! Шарт ҡуйҙым, берҙән-бер сарам шул ине:

– Бына Одиссейҙың уҡ-һаҙағы, ана – сәптәре. Ярышығыҙ, булдыра алһағыҙ!

Һөйгәнемдең ҡоралына көстәре етмәҫенә, уҡтарын бихисап дүңгәләктәр аша үткәреп сәпкә тейҙерә алмаҫтарына иманым камил да ул, барыбер ҡурҡам, әгәр берәйһе ниндәйҙер мөғжизә менән шартты үтәй ҡалһа?

Бер кейәү сыға, икенсеһе, өсөнсөһө... Саҡ ҡуҙғатып, ян керешен тартырға көсәнәләр. Ғәрлектәренә сыҙамай үрһәләнәләр. Шул саҡ һәләмә кейемле бер байғош та бәхетен һынап ҡарарға булды. Мыҫҡыллы көлөүҙәргә иғтибар ҙа итмәй, уҡ-йәйәне еңел генә күтәреп алды ла һығылдырып кереште тартты, әйтерһең дә, сиртеп кенә ебәрҙе һәм... ярабби! – һөйәк башлы осҡор уҡ дүңгәләктәр эсенән һыҙғырып үтеп сәпкә ҡаҙалды. Барыһы ла шаңҡып ҡалды, шып-шым булдылар. Шул тынлыҡта кемдер, үҙ-үҙенә ышанмай ғына: “Одиссей?!” – тип шыбырланы. Ә минең йөрәгем уны күптән танығайны.

– Одиссей! – Йәнасыҡҡа ҡысҡырҙым да, шул ыңғайға уянып киткәс, тауышымдың төштә генә шулай көслө яңғырауына ҡыуандым. Ҡартәсәйем һике

түрендә тыныс ҡына йоҡлап ята. Тәҙрәгә күҙ һалдым: Ай урағы ыршы осонда юҡ, әллә ҡолап төштө микән?

Ай… Төндөң күҙелер ул? Күҙе… Шул уйға эйәреп, һыңар күҙле Циклоптың ҡараңғы, әшәүәтһеҙ ҙур мәмерйәһенә барып ингәнемде һиҙмәй ҙә ҡалғанмын – абау! Бер көтөү һарыҡы бар, имеш, ул имәнес йән эйәһенең, миңә һырығыпмы-һырығалар бисараҡайҙар, тегенән ҡурҡалар. Ҡурҡмаҫһыңмы, әле генә берәүһен ботарлап ашаны ла ер тетрәтеп ғырылдап йоҡлап китте. Нисек ҡотолорға һуң был хәлдән? Баш вата торғас, уйлап таптым: анау һарыҡтарҙың ҡорһаҡ аҫтына йәшеренеп, йөндәренә йәбешеп сығырға була лаһа мәмерйәнән! Тик тәүҙә нисек тә Циклопты һуҡырайтырға кәрәк, ә таң атҡас, һарыҡтар көтөүгә сыҡҡанда… Әһә, ана ята ул түпәгүҙҙең көтөү ҡыуа торған таяғы. Шуны алдым да осло башы менән киҙәндем тегенең маңлай түренә! Уф, тейҙерә алмайым да ҡуям! Уңарсы асыуынан үкереп уянды был, аҡшайған күҙенән, гүйә, ут сәсрәне, битем, бөтә тәнем түҙеп торғоһоҙ булып бешә ләһә!..

Баяғыса тағы мине – йоҡо, ә йоҡомдо мейемдә ҡайнашҡан уй-тәьҫораттар еңгән. Ҡартәсәйем икмәк мейесенә ут яҡҡан да, шуның ялҡыны бәрелеп, әҫегә сыҙамай уянып киттем бына.

Одиссей ғәскәренең, мәшһүр Троя ҡалаһын ҡолата алмай, ун йыл һуҙымында ҡәлғә ҡапҡаһы төбөндә серәшеүе, теге “Троя аты” арҡаһында ғына еңеүгә ирешеүе, иленә ҡайтышлай тағы ун йыл буйы, төрлө мажараларға дусар ителеп, сәйәхәт ҡылырға мәжбүр булыуы хаҡында мин, эйе, белә инем. Ҡайҙанмы? Ә, Мәүлиҙәнең өлкән апаһы арҡаһында. Ул, техникум тамамлап, Республика китапханаһында эшләй башланы, шунан беҙгә елле-елле китаптар алып ҡайтып биргеләй. Тиҙ генә уҡып сығабыҙ ҙа кире ебәрәбеҙ. Беҙҙән алда Әмин абый эләктерә һала, әлбиттә. Була бит уҡыуҙан туймаған әҙәмдәр, тип асыу килеп китә уға ҡай саҡ, оҙаҡ тоторға ярамай ҙаһа ваҡытлысаға ғына килтерелгән китапты. Бер нисә тапҡыр миңә түгел, Мәүлиҙәгә сират етмәй ҡалды, апаһы ашыҡтырып алып китте – француз әҙибе Виктор Гюгоның “Собор парижской богоматери” тигән әҫәренән шулай ҡолаҡ ҡаҡтыҡ. Унда Квазимодо исемле бөкрө егеттең һылыу сиған ҡыҙы Эсмеральдаға үлеп ғашиҡ булыуы хаҡында яҙылған, ти. Их!.. Уның ҡарауы, боронғо Грецияның бөйөк шағиры Гомерҙың “Илиада” тигән үлемһеҙ әҫәрен уҡыу, уның геройы Одиссейҙың яҙмышы менән танышыу бәхете тәтене. Теле русса, йөкмәткеһе ярайһы ҡатмарлы булһа ла, бер һыуһында уҡып сыҡтым.

Уҡығандарыңды ҡайта-ҡайта уйлай китһәң, беҙҙекеләр, толпарлыларҙы әйтәм, бик күптән, Әдисәй бабаҡайға тиклем үк, Одиссей тураһында хәбәрҙар һымаҡ? Теге Циклоп Одиссейҙан: «Һин кем?» – тип һораған бит инде, уныһы, хәйләләп: «Мин бер кем дә түгел», – тип яуаплаған. Аҙаҡ, һыңар күҙенән дә яҙып илап ултырғанында, Циклоптың ҡәрҙәштәре: «Кем һине шулай итте?» – тип һорағас, был бахыр:«Бер кем дә түгел», – тигән. Толпарлыла ла бер лаҡап бар ҙаһа. Имеш, борон заманда Ебәк юлынан урап ҡайтҡан сауҙагәр егет, һөйгәнен күҙләп, тирмә тирәһендә тапана икән дә, ҡыҙҙың атаһы шәйләп ҡалып:«Һин кем? – тип һорағас: «Бер кем дә түгел» ,– тигән дә китә һалған. Күпмелер ваҡыттан һуң ҡыҙҙы һоратып килгән был. Атай кеше үткер күҙле генә түгел, йор һүҙле лә булған, күрәһең: «Бер кем дә түгел»гә тотторап ебәрергә артыҡ ҡыҙым юҡ», – тип һатыулашып ҡыланған башта, ә үҙе эсенән харап ҡыуанған: егет булдыҡлы, бай ҙаһа.. Ҡойоп ҡуйған Одиссей хәбәре түгелме ни әлеге лаҡаптың елегендә? Миңә шуныһы ғәжәп әле…

«Һеҙгә ни бында, төпкөл ауылда…» Үҙ сәғәтен көтөп кенә торғандай, ошо йән көйҙөргөс һүҙҙәр, уларҙы әйткән кеше – атайым, гелән янымда, күҙ алдымда булмаһа ла, исеме-есеме йөрәгемә уйылған Баязит моряк – тағы аңымды биләп алды. Донъя күреп, диңгеҙ гиҙеп ҡайтҡан ғына сағы ине. «Үҙең ҡайҙанһың, бәй?!» – тип ҡаршы төшкәйне ҡартәсәйем, асырғанып. Ана, даръялар аръяғындағы Грецияла хан заманда йәшәгән Одиссей яҙмышын белә төпкөл толпарлылар, унан да былайы – үҙ Әдисәйҙәре, үҙ Пенелопалары бар!

Шул уҡ көндө ауылым һәм ауылдаштарым өсөн ғорурлыҡ тойғоһон тауҙай итеп күтәреп ҡуйған тағы бер сәбәп булды, башым күккә ашты, гүйә. География дәресендә Әлфиә апа (ул төп ошо фәнде уҡыта, өҫтәп ботаниканы ла йөкмәткәндәр) иҫ киткес яңылыҡ асты: «Толпарлы республикабыҙҙың ҡап уртаһында урынлашҡан, – тип торҙо ла артабан йомаҡ әйткән һымаҡ дауам итте, – ә Башҡортостан – Европа менән Азияны арҡа һөйәгеләй ҡуша йәбештереп тотоп торған Уралда, тимәк, планетаның ниндәйерәк төшөндә йәшәйбеҙ?» Ашҡынып ҡул күтәрҙем, башымда ҡайнашҡан яуаптарҙы барлап та сыҡмағайным, шуғалыр, тулҡынланып, ҡысҡырып әйттем: “Толпарлы – Ер кендеге!”

Уҡытыусы яуабымды кире ҡаҡманы, иҫбатламаны ла, уратыбыраҡ осланы фекерен: ”Һәр кем үҙ төйәген донъя тотҡаһы тип инанырға тейеш. Һәр ҡитға, һәр ил, һәр ауыл Ерҙең кендегенә бәйләнгән ул”. Мин шымайып ҡалған синыфташтарыма күҙ йүгертеп алдым: хатта иң шаян малайҙарыбыҙ ҙа уйға талған. Бәс, әле килеп саҡ күҙем асылдымы – класта бер малай ҙа юҡсы, тик егеттәр генә ултыра!

Хәтергә төштө, сабый саҡта, йәшеренеп Әмин абыйҙың глубосы менән уйнағанда, ул шарҙы сырмап-сырмап ураған һыҙыҡтарҙы күреп аптырағайныҡ Мәүлиҙә менән икәүләп – уртаға ғына, кендеккә генә, гүйә, барып тоташҡандар, әллә, киреһенсә, шунан сыҡҡандар. Үҫкәс белдек: меридиан икән ул һыҙыҡтар, ә кендек һымағы – Ер күсәре. (Төпкөлдә түгел, планетаның үҙәгендә беҙҙең Толпарлыбыҙ, атай, тим, ишетәһеңме?! Хәйер, һин быны белмәй түгелһеңдер...)

Башыма үҙемә күрә арыу уй килһә, шуны ҡағыҙға теркәп ҡуйырға ғәҙәтләнеп барам. Мәктәптән ҡайтып инеү менән, онотмаҫ борон тип, кәштәләге ҡалын дәфтәремде барып алдым, ундағы “Ауылым тарихы” тигән бүлеккә уҡытыусымдың һүҙҙәрен теркәнем дә, арыраҡ “Үҙебеҙҙең Одиссей” тип яҙып ҡуйҙым. Шунан тағы “Толпарлы Пенелопаһы” тигәнде өҫтәп, хәтеремде ҡабат байҡап сыҡтым, төйөндәрен төйнәп-төйнәп ҡуйҙым. Ҡасан да бер тағатырмын, сисермен дәһә?

## 18

Ҡулымда – өлгөргәнлек аттестаты. Ун бер синыф уҡығас, өлгөрҙөмдөр инде? Әллә шул... Дуҫтарымдың, исмаһам, иртәгәге көнгә аныҡ маҡсаттары бар: Мәүлиҙә математик булмаҡсы, Олексий ҙа бар уның теоремалары араһында, әлбиттә; Әсмә, Өфөгә барып, ашнаҡсылар курсына документтарын тапшырып та ҡуйған; Әшрәф күҙ алдында эшләп йөрөй; Әхиәр төҙөүсе-ташсы һөнәренә эйә булды, Стәрлелә бейек-бейек йорттар һала; Сабир Салауат педагогия училищеһын киләһе йыл тамамлаясаҡ; Харис менән Фатих медицина институтына инергә һүҙ ҡуйышҡандар, егеттәргә стаж кәрәкмәй икән. Кәбирме? Ә Кәбирҙең тағы ике йыл уҡыйһы бар әле. ”Бөйөк рәссамдарҙың маһирлыҡ серҙәрен отҡом килә, әммә үҙ йөҙөмдө, үҙ буяуҙарымды табыу минең хыялым; ҡулымдан, стилемдән, ҡылҡәләмдең һелтәнешенән таныһындар ине картиналарымды! – тип

яҙа хаттарында һәм гелән тиерлек бер үк һорауҙы ҡабатлай: – Ә һин нисек уйлайһың, Нурия?" Баштараҡ, алдан иҫкәртмәй ҙә Өфөгә китеп барыуына үпкәләп, яуап бирмәй йөрөнөм. Ә ул барыбер яҙҙы, туҡтаманы. Ахырҙа иренем – ярата лаһа мине берәү. Шунда күңелемдең тәрән төпкөлөндә йәшеренгән, һәр хис-ҡылығымды белеп, тәфтишләп торған серле көс минән һорап ҡуйҙы: "Ә һин үҙең уны яратаһыңмы?" "Ярат..." – тинем дә эсемдән генә, туҡтап ҡалдым, тултырып әйтә алманым: иләҫ-миләҫ хистәремә берсә ышанам, берсә юҡ. Сәмем дәһә тынғы бирмәй, игәпме игәй, бүтәндәр, ана, мөхәббәт йәһәтендә лә өлгөргән, һин генә ҡаңғыраһың, ти. Ҡаңғырам шул! Бер һөйгәнем өсөн, уның хаҡына алтмыш һөймәгәнде үҙ итергә, ҡәҙер күрһәтергә, ҡайҙа тиһә шунда эйәрергә, сит ерҙә ерегергә хатта – әҙерменме? Мәүлиҙә, мәҫәлән, әҙер: «Олексий саҡырһа, Украинаға китәм дә барам, ер сиге түгел әле", – тип һөйләнә...

– Нурия, әү, Нурия! – Кемдер шул минутта еңемдән тартты, – шырлыҡҡа инеп аҙаштыңмы әллә?

Бәс, Бүреһуҡҡан олатай, Һарыгүҙ, мин – өсәүләп Сәтләүек урманына китеп барыуыбыҙ ҙаһа. Уйға һабашып, онотолоп килеүем, ғәҙәтемсә. Олатай ошоно нығытып та ҡуйҙы:

– Үҫкәнһең, әммә әллә ни үҙгәрмәгәнһең, ҡыҙым. Үҙгәрмә лә. Һәр кемдең үҙ фиғеле. Мин дә бына лесник сағымдағы өйрәнеш иткәндәремде ташлай алмайым, кем ҡушҡан, юғиһә, ошолайтып урман ҡыҙырып йөрөргә, ҡайҙа нимә үҫкән, нимә үҫмәгән, тип тикшереп, кейек барлап. Ә һин, йәш кенә башың менән, уй-хыял урманын гиҙергә әүәҫһең, беләм. Һаҡ бул улай ҙа, ундағы сатра-сатраштарҙа юл тапмай яфаланыусылар ҙа осраштыра, тим.

Олатай элеккесә елпелдәтеп шәп атламай. Оҙон бишмәтенең төймәләрен дә яйлап ҡына эләлер – салғыйҙары салыш-малыш тормай. Әкренәйҙе ул. Ә зиһене шул көйө генә, хәтер офоҡтары иһә, үҙе әйтмешләй, асыла, яҡтыра төшкән. Бына әле лә шул офоҡтарҙы байҡап килеше:

– Йот йылында, егерме беренселә, ошо сәтләүеклек ҡотҡарып ҡалды беҙҙе аслыҡтан, ышанаһығыҙмы-юҡмы? Яҡын-тирә төбәктәрҙә үҫмәй сәтләүек ағасы, бары беҙҙә генә...(Миңә генә түгел, тағы ла кемдәргәлер төбәлгән, ахырыһы, уның был һүҙҙәре). – Сәтләүек – үҙе бер байлыҡ, әгәр эшеңде биреп йыйып, киптереп алһаң. Бер төшө бер телем икмәккә тора, туҡлыҡлы. Бигерәге, был тирәлә тейендәр үрсей, ана шул матурҡайҙар йылына ике-өс тапҡыр балалай, бишәр-унарҙы. Ите, тағы тиреһе – үҙҙәре, бәләкәй генә булһалар ҙа, файҙалары ифрат та ҙур уларҙың. Ышанаһығыҙмы-юҡмы...

– Ышанам-ышанам, һөйлә-һөйлә! – Ара-тирә олатайҙы шулай йөпләп тә алғылайым, әтеү, тауыш бирмәһәң, ярты һүҙҙә туҡтап та ҡуя торған.

– Халыҡты тыйып тотоуы, ай-һай, ауыр булды ул йотлоҡта: һунар ярамаған мәлде лә уйлап тормай бәғзеләр, ҡыра ғына кейекте, уңлы-һуллы... Ышаныслы бер нисә азаматҡа, ҡуна-төшә, урманды һаҡлап торорға ла тура килде. Әмәлгә таянғандай, тау аша ғына бөтөнләй иген сәсмәгән халыҡ асҡа бөгөлә – ҡатайҙар... Уларға ла көн күрһәттек, сәтләүек йыйырға рөхсәт иткеләнек. Үҙебеҙгә ниндәй көн килмәҫ... Толпарлылар белекле улар, йомартлыҡтары ла бар. Борондан төпләнгән бында халыҡ, быуын-быуынға йыйған аҡылына, фәһеменә таянып донъя көтә. Ояты ҡаса башлағандарҙың арт һабағын уҡытып та ҡуялар ҡай саҡ. Бер осор, әлеге аслыҡтан һуң, Николаевка урыҫтары (ошо урында мейессе Уста знакум менән Әбизәтелнә бабайҙың һөйләшкәне иҫемә төшөп, саҡ ҡысҡырып көлөп ебәрмәнем: көлкөмдө быуып өлгөрҙөм, тамағым сатнап, танауым эстән

әсетеп бер булды аҙаҡ) шашып алды, күрше-тирә ялан башҡорттарын тирмәндәренә индермәй, ярты юлда бороп ебәреп ҡыландылар. “Һеҙгә мосолман автономияһы кәрәк инеме ни әле, ана шунда барығыҙ!”– тип күсәк күтәреп торалар, ти. Шунан ни, тегеләр беҙҙең тирмәнгә йөрөнөләр, алыҫтараҡ ятһаҡ та. Көндөҙ ситтән килгән ҡәрҙәштәр он тарттыра, төнөн – үҙебеҙ.

– Шунан, теге урыҫтар? – Был йәһәттә уғата ныҡ ҡыҙыҡһыныуымды белгертеп, һорау ҡыҫтырҙым, олатайҙың телмәрен ҡыҙыулатып ебәрҙем.

– Шунан ни, ҡыш етеү менән быларға балы, йәнлек тиреһе, бурһыҡ майы, сана табаны, йүкә-фәләне кәрәк була башланы. Унан да былайы беҙҙең тимерлеккә төшә көндәре. Башҡорттан оҫта тимерсе донъяла юҡ, булат ҡоросон да беҙҙекеләр ҡойған, вәт!

– Вәт?!

– Ызнакумнарҙы арыу ғына ваҡыт инәлтеп, аҡылдарына ултырттыҡ та тағы әүәлгесә йәшәп киттек. Донъя тар түгел дәһә... Нишләйһең, ҡасандыр уларҙы ата-бабалар үҙ еребеҙгә һыйындырғас.

– Ерҙе бер әсмүшкә сәйгә һатҡандар?

– Шундай замандар булған, тоҡомоңдо һаҡлап ҡалыу зарурлығы башты ла эйҙергән. Батырша яуынан һуң ти, батша йәнәптәре аяуһыҙ үс алған, беҙҙең иң матур ҡыҙҙарыбыҙҙы тоғро ярандарына таратып биргән, шул хаслыҡҡа барып еткән. Һарыҡ бәрәсендәй итеп, белмәгән-күрмәгән, зат-ырыуы әллә кемдәргә тотторол ебәргәндәр меңәрләгән ҡыҙ баланы. Халыҡ онотмай ундай ваҡиғаларҙы, хәтерендә, телендә һаҡлай, зыялы инсандары яҙып ҡалдыра.

– Олатай, һин һөйләгәндәрҙе мин дә...

– Сеү! – Сәтләүек урманы ауыҙына килеп индек тигәндә, ҡарт урмансы ҡапыл туҡтап ҡалды, ҡулын маңлайына ҡуйып арыраҡҡа, әллә һауаға, төбәлде. Мин дә ҡарашымды шунда йүнәлттем. – Күрәһеңме, тегендә-бында ағас баштары һелкенгеләй?

– Ел һелкетәлер.

– Һинеңсә, ел ағастарҙы һайлап йөрөп һелкетәме?

– Әлләсе...

– Әлләсе шул! Осар тейендәр ҡайтҡан сәтләүеккә, иншалла!

– Осар тейен?!

– Үҙ күҙең менән күрерһең, насип булһа.

Урмандың уртаһына барып еттек, әммә ҡанатлы тейендәр һаман күҙгә салынманы, үргә ҡарап бара торғас, муйын ауырта башланы ахырҙа. “Беҙҙе шәйләп, ҡарағайлыҡ яғына осҡандарҙыр”,– тип ҡуйҙы олатай. Ә үҙе шундай шат, ҡәнәғәт, уның ыңғайына мин дә һөйөнөп киләм, бәй.

Туҡтап, саған ҡүләгәһендә тамаҡ ялғап алдыҡ. Олатай арҡаһын бер төмөзгә терәп серемгә китте. Мин алан-йолан ҡаранам: тирә-яҡта туҡтауһыҙ хәрәкәт барғанын тоям. Ят тынды һиҙеп, эргәләге ҡыуаҡ төбөнән пырылдап бер ҡош осоп сыҡты. Алыҫ китмәне үҙе, шул тирәлә урала, төрлө ҡыуаҡҡа барып ҡунған була, үҙенең ояһынан күҙ яҙҙыра, йәнәһе. Шул арала шым ғына былтырғы саған япрағы итәгемә килеп ятты, баш осондағы берәй ботаҡта көҙҙән эленеп ҡалған, күрәһең, – ҡыш торған, яҙ торған, әле уны, моғайын, йәш япраҡтар этеп төшөргәндер. Матур, семәрле ошо саған япрағы, бер ҡараһаң, ҡул суғына ла оҡшап ҡуя. “Һаумы!”– тинем дә уны усыма алып һыйпаным.

– Урмандың күҙе бар, ҡолағы бар, Нурия, сәләмеңде ишетеп тора,– тине Бүреһуҡҡан олатай, мине хуплағандай. Серем итеп тә алған. Шул саҡ эргәбеҙҙә

һуҙылып ятҡан Һарыгүҙ башын ҡалҡытты ла өрә башланы. Олатай юғарыға ымланы: ярабби, бер түгел, өс тейен осоп бара! Аҫтан яҡшы күренә, алғы тәпәйҙәре кәүҙәләренә киң йоҡа тире менән беркетелгән, гүйә, ағастан ағасҡа һикергәндә шул тире ҡанат кеүек кирелеп китә лә, оса тейенкәй, оса!

– Былтыр сәтләүекте ялағай һуҡты бит, төшө ҡара янып сыҡты. Ризыҡ улай ҙа ҡалған икән быларға. Эргәлә генә, ана, ҡарағай урманы, осар тейендәр ҙә, ҡәҙимгеләре лә шунда ҡышлайҙар. Көҙҙән ҡыуыштарына тубырсыҡ, ҡайын алҡаһы йыялар. Сәтләүекте бигерәк ярата инде улар, ашап та, ҡышҡылыҡҡа тип ташып та бер булалар.

– Әле нишләп йөрөйҙәр икән бында, сәтләүек өлгөрмәгән дәһә?

– Разведкаға килгәндәр, бына һинең менән минең кеүек.

– Олатай, ундай тейендәр тураһында китаптан да уҡығаным юҡ ине.

– Һирәк йәнлек тәһә. Бәлки, ошо беҙҙең төбәктә генәлер әле үрсеме. Нурия, бар, берәй ҡуш ус сәтләүек йыйып килтер, төрлө ҡыуаҡтан өҙ, ҡарайыҡ.

Тиҙүк йыйҙым. Минең ҡуш усымдағы олатайҙың һыңар усына һыйҙы ла ҡуйҙы.

– Ҡулың ҡайһылай дәү,– тинем, ғәжәпләнеп. Олатай башымдан ғына һыйпап ҡуйҙы. Хәҙер ул һәр хәбәремде ялғап, аңлатып тормай, кәрәк тапҡанын һайлап ҡына һөйләй.

– Сәтләүек була быйыл, уңа,– тине, бөтә емештәрҙе лә тешләгәнен тешләп, һелкеткәнен һелкетеп, усында тәгәрәткеләп ҡарап бөткәс.

Ҡәнәғәт ҡалды олатай был сәфәрҙән. Ҡайтышлай Абдрахман олатайым тураһында һүҙ сығарҙы:

– Йәйҙе Балбабайҙарҙа уҙғарам, умарталыҡта, үҙеңә мәғлүм, шунда өс солоҡ ҡарағайы бар, өсәр быуат, ти йәштәре. Шуларҙы һинең ҡан олатаң, ысын олатайың, һайлап, күс ҡундырған икән.

– Һин дә – ысын олатайым, ып-ысын! – тип әйтмәй булдыра алманым. Бүреһуҡҡан олатай ҡандаш-ҡоҡомдашлыҡ тураһында сурытып торманы, ары дауам итте һүҙен:

– Абдрахман ҡурайсы бөрйәндәрҙән бит, ә улар солоҡсолоҡта – иң айбары, бик күп таһылдарға өйрәткән икән Балбабайҙарҙы, әйтәгүр, – Шулай тине лә, ерле юҡтан һорап ҡуйҙы: – Һин кемгә уҡымаҡсыһың, Нурия?

– Белмәйем,– тинем. Алдашманым. Һуңғы араларҙа уйлағаным шул: ниндәй һөнәр һайларға, ҡайҙа тапшырырға документтарымды?

Берауыҡ һөйләшмәй атланыҡ. Шәмдәй төҙ ҡарағайҙар, зифа ҡайындар парлашып теҙелеп баҫҡан, өҫтәрәк өйкөм имәнлек үҫкән тау ҡыразынан бара һуҡмаҡ, шунда өсөбөҙ ҙә – олатай ҙа, мин дә, Һарыгүҙ ҙә – туҡтап, ҡолаҡ һалдыҡ: “Туҡ-туҡ, туҡ-туҡ!”– Туҡтауһыҙ бер көйгә тумыртҡа туҡылдай.

– Урмансы егеткә әйтергә кәрәк, килеп ҡараһын әле, ҡарышлауыҡ баҫҡанмы әллә урманды? Тумыртҡа бал ҡорттарын да сүпләй торған, был тирәлә күрше совхоздың түмәр умарталары бар, шуларға эйәләмәһен. Хәйер, йәй уртаһында улай ҡыланмаҫ...

– Тумыртҡа бал ҡортон ашаймы?

– Ҡыштарын мутлаша ул, солоҡ ағасын – йә ҡарағай йә имән инде уныһы – туҡылдатырға тотона: бал ҡорттары тауышҡа сыға башлай, ә был сыҡҡан береһен эләктереп тора.

– Бәлки, үҙенә ҡыуыш соҡойҙор? Ул бит йыл һайын яңыны эшләп инә, иҫкеһенә һыҫар оялай – үҙең бер һөйләгәйнең шулай тип. Әлдә эйәрттең бөгөн, олатай, тағы әллә күпме ҡыҙыҡлы нәмәләр ишеттем һинән.

– Белмәгәндәрең бармы ни һаман? – Олатайҙың тауышы көләмһерәп сыҡты.

– Донъя серҙәрен күберәк асҡан һайын, белемемдең әҙ һәм һай икәненә ышана барамсы, әллә нишләп...

Олатай яурыныма  ҡулын һалып, бармаҡтары менән ҡыҫып ҡуйҙы, – аңлайым, тиеүе.

* * *

Күпме генә зирәк булма, тәҡдирҙе алдан белеү мөмкин  түгел икән. Ҡартәсәйем әйтеп ҡуйғайны бер: “Төш юрарға өйрәтермен, һәләтең дә бар быға, ә бына киләсәкте үтә күрергә ынтылма!”  Заманында уға тап шулай тип имам ҡайныһы ла ныҡытҡан. Барыбер тотмай ул бәғзе ваҡыт  ҡайны һүҙен, беләмсе. Бына яңыраҡ ҡына,  Фариза еңгәм сәйер бер сиргә һабышып алғас, ҡартәсәйем, шундай бәләне лә күңелем  алдан һиҙҙермәнесе, ҡартайыу касафатылыр инде, тип аптыраны. Ә белгәс, хәлде яҙмыштың ыңғайына һыпырып ҡуйманы, ҡыҫылды, ҡаршы сыҡты!

Ултырмаға һирәк йыйылдыҡ уҙған ҡыш. Гуля-Гөлсөм апай ғына кис һайын тиерлек йөрөгән, ҡыҙҙарын эйәртеп. Шунда бер арала Фариза еңгәм уға  сер сискән, ахырыһы, буйымда бар, тигән. Илленең өҫтөндәге ҡатын – йөклө? Гуля-Гөлсөм апай башта шикләнгән быға, аҙаҡ ышана яҙып ҡуйған: еңгәнең күңеле болғана, ерле бушҡа кәйефе ҡырылып бара, ти. Яҙға табан, бәпескә йән керер ваҡыт етәрәк, еңгә: “Тибенә, бына үҙең ҡулыңды ҡуйып ҡара!”– тип Гуля-Гөлсөмдө тамам ышандырған. Уңарсы аулаҡ өй “ябылған”, еңгә йәйләүгә йөрөп эшләй башлаған, тегеһе – сөгөлдөргә төшкән. Күпмелер ваҡыттан магазиндамы-ҡайҙа осрашһалар, Гуля-Гөлсөм ни күрә: Фариза еңгә һаман нәп-нәҙек. Әллә ауыры төшөп ҡуйҙымы икән, уф, тип уйлап, һорарға ҡыймай торһа, еңгә быны тағы шаҡ ҡатырған: ”Бишенсе айға киттек, ташмая башланым, күр, – тип, ҡорһағын кирә биреп торған була, ти.

–  Фельдшерға күрендеңме? –  тип һораған, Гуля-Гөлсөм, аптырағас.

– Барырым әле, декреты кәрәк тәһә...

Ана шул кисте Гуля-Гөлсөм апай ҡабаланып ҡартәсәйемә килеп инде. Һөйләшкәндәрен ишетеп ултырҙым, мейес артында картуф әрсей инем.

– Моғайын, алдаҡ гөмандыр, – тине ҡартәсәйем әллә нindәй ҡолаҡ ишетмәгән ят телдә.– Бала  хыял иткән ҡатындарҙа һирәкләп осрай ул... Йәсәле, өшкөрөп ҡарарғамы икән? Бик көслө доғалар бар-барлыҡҡа, артыҡ тәрәнгә китмәһә...

Ниндәй “гөман” икән,  ҡайҙа тәрәнгә китә ул? Йән тынысլығым юғалды. Юҡ йомошомдо бар  итеп, ҡышын һыу менән ултырып ҡалып төбө тирткән биҙрәне алдым да шуны сүкеттерергә киттем еңгәмдәргә. Ундай эш менән тимерлеккә, Хәйрулла ағайға, барырға тейешмен дә – күрәләтә өйҙәренә йүнәлдем. Еңгәм һауындан ҡайтҡан, өҙә баҫып йорт эштәрен бөтөрөп йөрөй. Тулыланып алған саҡ ҡына, бит остары янып тора, күҙҙәре нурлы – һылыулығы арта төшкән кеүек. Ниңәлер, төшлөктәге ҡояшҡа тура ҡарағандай, күҙемде сылт-сылт йомоп алдым – шулай сағыу матур был ҡатын. Юҡ шул, ауырлы түгел еңгәкәйем, осалары түңәрәк тә, кесе йыһаны буш... “Ағайым күҙ һалһын әле, эшкиндереп булмаҫмы ошоно?”–  тип һөйләндем дә биҙрәмде ҡалдырып ҡайтып киттем.

– Ҡартәсәй, еңгәм үҙен-үҙе алдап йөрөй, Гуля-Гөлсөм апай дөрөҫ шикләнә,– тип, йүгереп килеп ингән килеш хәбәр һалдым да,  иларға йыйынған ерҙән, күҙ йәштәремде эскә йотоп ебәрҙем: игеҙәктәр бында ине.

– Иртәгә иртүк йәйләүгә барып әйләнербеҙ,– тине ҡартәсәйем сабыр ғына тауыш  менән.

Бер сама тынысланып, игеҙәктәрҙе эйәртеп, Зөлхизә өләсәйем янына Яңы өйгә йүнәлдем. Мин ике арала шулай кәлеп һалам, ике ил мөнәсәбәттәрен яйға һалыусы илсе шикелле. Улай уҡ тигәс тә, әрләшеп, дәғүәләшеп йөрөүсе юҡсы. Өләсәйем Гөлшәһүрә инәйгә әле лә барғылай, юл ыңғайы ҡартәсәйемә лә һуғыла, уныһының нығ күңеле була, ҡоҙағыйын ҡайҙа ултыртырға белмәй. Әммә үҙе Яңы өйгә һирәк аяҡ баҫа, берәй ҙур ваҡиға уңайы менән генә: игеҙәктәр мәктәпкә төшкәндә килгәйне һәм бына яңыраҡ, мин аттестат алған көндө.

Һөйләшкәнсә, таң һыуынан сәй ҡайнатып эскәс тә йәйләүгә тип сыҡтыҡ. Ҡартәсәйем киндер тоҡсайға дарыу үләндәре һалып алды, бер нисә төрлөнән. Бергә ойоштороп бутағас, үләндәргә күкрәк тынын сығарып ихласлап өрә-өрә, доғалар уҡыны, "шөф-шөф" тип шифалы ел ебәреп, тоҡсайҙың ауыҙын бәйләп ҡуйҙы.

Йәйләүгә тура һуҡмаҡ Ҡырластау һыртынан бара, мал ҡыуа торған оло юл аҫтараҡ, урауыраҡ. Һыртлау әллә ни текә булмаһа ла, шөрләп ҡуям: ҡабырғанан бүҫелеп-бүҫелеп сыҡҡан яҫмаҡ таштар ҡубаралып килеп төшмәҫ тимә бер саҡ! Юҡ-юҡта былай ҙа ваҡ таштар аяҡ аҫтына тәгәрәп тора...

– Ҡартәсәй, хәтәр, иветә? – тим, шул таштарҙы аҫҡараҡ тәгәрәтеп ебәреп.

– Үҙен тамырҙары менән тотоп торған үлән-ҡыуаҡтар барҙа, ишелмәй ул тау, ҡурҡма.

– Нимә генә инде ул үлән остоғо, бынауындай тау ҡаршында?

Ҡартәсәйем шунда нәҙек кенә бер үләнде үрелеп өҙөп алды ла миңә һондо, осонда кескәй генә аҡ сәскәләре лә бар икән.

– Күр, тау тишеп үҫеп сыҡҡан был тәүәккәл үлән, тамырҙары тәрәнгә киткән уның, тау-ташты тотоп тора. Уйлаһаң, хәҙер әйтәһең һин уның исемен.

– Таутотар үләнме? Таутишәрме әтеү?

– Таутишәр шул, тап өҫтөнә баҫтың, отҡором, ҡолоҡасым! Ана нисек оҫта нарыҡлай беҙҙең халыҡ, бәләкәс кенә ҡырағай гөлдөң дә үҙенә тейәр исеме бар.

– Әй, батыр гөл, таутишәр, һинһеҙ ҡалһа, тау нишләр? – тип һамаҡланым да ҡулымдағы сибек һабаҡты ташлы ергә сат йәбешеп үҫкән сәнскеле селек ҡыуағының күләгәһенә иплэп кенә һалып киттем. Ҡартәсәйемдең маҡтауына күңелем үҫеп китте, һуҡмаҡ шулай тар һәм текә булмаһамы, ҡолонсаҡтай һикергәләп тә алыр инем. Тик килешерме миңә, өлгөргән ҡыҙға?

Беҙ барып етеүгә, еңгәм иртәнге һауынын тамамлап, биҙрәләрен йыуып түңкәреп кенә тора ине.

– Килен, мыҙыҡараҡ әхирәттәрең эшен ослағансы һөйләшеп алайыҡ әле, – тине лә ҡартәсәйем, ҡайын төбөндәге оҙон яҫы эскәмйәгә барып ултырҙы. Үҙе һынсыл итеп еңгәмдең күҙенә ҡараны, уныһы, ғәйепле кешеләй, ҡарашын ситкә алды.

– Тамсы ла ғәйебең юҡ. – Һүҙһеҙ ҙә аңлай кешене был ҡартәсәйем. – Уңғанлығыңды, тоғролоғоңдо яратам һинең, килен, шуға ла ситтән ҡарап тора алмайым был хәлеңә, – тип дауам итте ҡартәсәйем.– Кил, ултыр янымa.

Фариза еңгә, бала-сағалай, күндәм генә тыңланы. Шунан ҡартәсәйем еңгәмдең яулығын һалдырып, башын һыйпаны, доға уҡып, сәс төптәренә тынын өрҙө лә киренән бәйләп ҡуйҙы. Артабан уның балауыҙ кеүек ирeп киткән һылыу кәүҙәһен тотанаҡлы ғына һыпырғылап, көйләп дауаланы: имсе бит ул, эйе, табибә. Устарын еңгәмдең ҡорһағына ҡуйып, йылытҡандай, тотоп торҙо ла, көйләп тәсбих әйтә-әйтә, етәкләп Зәңгәр шишмәгә алып китте. Ә еңгәм, әйтерһең, йоҡлаған? Күҙҙәре асыҡ былай... Ҡартәсәйем уны, галоштарын систереп,

ялан аяҡ көйөнә шишмәнең уртаһына индереп баҫтырҙы (үҙе итек кейгәйне: алдан уйлаған, йәй уртаһында нишләп итек кейҙе, тиһәм?), шунан сисенеп, ус-тарына әҙләп-әҙләп һыу алып, доға уҡый-уҡый, башынан ҡойондорорға тотон-до. Зәңгәр шишмәнең һыуы һалҡын ғына, ә еңгәм шылт та итмәй түҙә. Бына бер мәлде ҡартәсәйем тауышын шәбәйтеберәк тәкрарлай башланы: “Гөманың” тигәнен айырам...» Һәм, ниһайәт, Фариза еңгәм, гүйә, йоҡоһонан уянып, нин-дәйҙер оло хәсрәте иҫенә төшкәндәй, үкһеп илап ебәрҙе. «Ыҫҡындырҙы, иншалла!» – тине ҡартәсәйем. Аңлап торам: еңгәм үҙенең сәйер хәстәһенән ҡотолдо. Ә мин “гөман”дың кесе йыһандағы яралғы икәнен аңғарып алдым – боронғосалыр?

Ярға сыҡтылар. Ҡартәсәйем: «Рәхмәт, Зәңгәр шишмә, ҡотоң үҙең менән!» – тине лә, кеҫәһенән тәңкә алып, һыуға һалды, ә еңгәм әллә ҡайҙарға ашығып туҡтамай йүгергән йылғыр тулҡындарға ҡараны ла: «Ағып китте...» – тип моңайып башын эйҙе.

– Ныҡ бул, Фариза килен, Хоҙай һиңә теләгәнеңде бирер! – тинесе шул минутта ҡартәсәйем, күрәҙәлек ҡылғандай?

Күҙ алдында булған мөғжизәгә шаһитлыҡ ҡылдым. «Доға ҡөҙрәте, ағын һыу дарманы, ихлас теләк ғәйрәте» – ошондай ябай ҙа, ҡатмарлы ла һүҙҙәр урғылды тел осомда. Әммә өндәшмәнем, бәғзе ваҡыт уйыңды буйыңа һеңдереү хәйерле-рәк икәнен беләм дәһә.

Еңгәмдең ошо араларҙа иң теләгәне бала икәнен белә тороп, ҡартәсәйем ниңә булмаҫтайҙы инселәне әле уға?!

Аҙна-ун көн үттеме-юҡмы, еңгәм менән Гуля-Гөлсөм апай икәүләп килеп инделәр ҡартәсәйемә. Әсәйем менән мин дә бәрәңге баҡсаһын утап сығып, сәй эсергә инеп кенә тора инек. Беҙҙән сер йәшереп торманылар: «Бер уй беркетеп килдек әле», – тип белгертә һалдылар.

– Әй, Рамай,әй, дыуамал баш улан, һәләк итте бит үҙен, сабыйын да ҡыҙғаныл торманы, – әсенеп һамаҡлап алды ҡартәсәйем, ни әйтерҙәрен алдан аңлап тор-ғандай. – Ниәтегеҙ изге, тик...

Ул ошо урында туҡтап ҡалған арала, мин Аҡназар ағайҙың ҡолаҡ төбөнә йоҙ-роғон ҡундырған ағайҙы күҙ алдыма килтерҙем: башта уның йәшен утынан һәләк булған ҡатынының кәүҙәһе һалынған ылауға ҡатар бәпес күтәреп атлап килгәнен, шунан матәм митингыһындағы баш китерлек ҡылығын, шунан... – юҡ, уның кәүҙәһенең ҡарама ботағында аҫылынып торғанын күрмәнем... Йәш кенә ағай ине, буйға мыҡты, имәндәй. Ҡартәсәйем әйтмешләй, эстән йомшаҡ булғандыр... Туҡмаҡтай ғына сабыйын (ҡыҙ бала, ти) үкһеҙ йәтим итеп, олоға-йып бөткән сирләшкә әсәһе ҡулына ҡалдырып китмәҫкә ине! Былтыр, теге йә-шенле йәйҙән һуң күп тигәндә бер ай үткәс, булды ул фажиғәле хәл. Инде ҡыҙ-сыҡ атлап йөрөйҙөр. Теле лә асылғандыр? Минең телем “атай” тип асылғайны...

– Тик силсәүит нимә әйтер?– тип ослап ҡуйҙы ҡарт әсәйем.

– Сәмиғуллиным әйтә, тулы ғаиләгә, тормошо етеш кенә булһа, тәрбиәгә бала алырға закон рөхсәт итә, ти. – Гуля-Гөлсөм апай уйынса, Сәмиғуллин – торғаны бер донъя тотҡаһы.

Тулы ғаилә – ирле-бисәле, тимәк, быны беләм... Һүҙ – иң көслө ҡорал, тип белмәй әйтмәгәндәр, көтмәгәндә иң ауыртҡан ереңә килтереп бәрә ул, ҡылыс-тай киҫә, күҫәктәй дөмбәҫләй: беҙҙең ғаилә тулы түгел шул, атайыбыҙ бергә булмағас. Бөтәү ярам тағы асылды, тағы ҡанһыраны. Хәҙер-хәҙер, тәрән итеп тын алам да баҫам әрнеүемде.

Өлкәндәр баяғы сабыйҙың яҙмышын хәл итеү тәңгәлендә оҙон һүҙгә юлыҡтылар, ә мин Сәмиғуллин хаҡында баҫылып уйлап алып киттем. Бына бит, ят бауыр, тип әйт һин уны! Толпарсыҡҡандың иң ғәҙел, иң тоғро кешеләренең береһе ул ғәмәлдә. Һәр кемдең яҙмышын, холҡон белә, йәштәрҙе иһә үтә күрә, алдан киҫәтә яңылыштарын. Мәктәптә йыш була, әңгәмәләр уҙғара. Үҙенең "шыйыҡ" сағында, ФЗО-ла уҡығанда, ҡала шпаналарына эйәреп саҡ юлдан яҙмай ҡалыуын да йәшермәй һөйләгәнсе, 5 – 8-се синыф малайҙарын айырым йыйып алып. Ишбирҙе тиште быны ҡолаҡҡа. Унышынан юрамал һорағайным (икеләнеүем дә бар ине), Сәмиғуллин үҙенең абруйын үҙе төшөргәнме шулай тип, көтмәгәнсә яуап бирҙе:

– Киреһенсә, хәҙер ул – минең кумир. Ун берҙе бөткәс, милиция мәктәбенә уҡырға керәм. Унда спорт ныҡ кәрәк, ти, ә миңә физрук абый "3"-тән артығын ҡуймай, дисциплинам аҡһай, имеш... Аҡһамаҫҡа тура килер, иветә?

– Бәс, һин бит шаян ғына, бөткән хулиган түгел! – Шулай тип нығытып ҡуйҙым Ишбирҙенең күңелен. Уның шуҡлыҡтары сиктән тыш булып та ҡуйғылай шул. Былтыр, мәҫәлән, дуҫ малайҙары менән Күрәнлелә йөҙөп йөрөгән ҡаҙҙарҙың береһен тотоп муйынын бороп, арлы-бирле йөнөн йолҡоп, япраҡ-фәләнгә урап тупраҡҡа күмеп, өҫтөнә ут яғып бешереп ятһалар, быларҙы Мәүлиҙә барып тапҡан. Әмин абый, белгәндәй, ҡустыңды хәҙер үк эҙләп алып ҡайт, тип бойорған икән. Әхирәтем малайҙарҙы «сволочь»тан ҡырҡып әрләгән (тимәк, ныҡ ҡыҙған, анау юлы Толпарсыҡҡанда һыу ингәндә Ишбирҙене "юғалтҡандағы" кеүек), сейле-бешле ҡаҙҙы тупраҡтан һөйрәп сығарып, шуның менән бәргесләгән өҫтәүенә теге шилмаларҙы.

Эйе, Сәмиғуллиндың әңгәмәһе арҡаһында бер Ишбирҙе генә йүнәлеп киткәндә лә – ҙур изгелек бит. Етмәһә, ул, ен ботағы, үҙ артынан унарлаған тиҫтерен эйәртергә һәләтле, бына хәҙер әйҙәһен ыңғай яҡҡа.

Рәхмәт инде Гуля-Гөлсөм апайға, шундай арыу кешене үҙенә ғашиҡ иттергәне, Толпарлыға еректергәне өсөн. Уның да ғәзиз йәнтөйәге, Стәрлебаш яҡтары бар ҙаһа – Күндерәкәй тигән йылғаһын һөйләп-һөйләп ала, ти, йыш ҡына.

Сәмиғуллинға бәйле, ауылыбыҙҙың яманатлы Хәйри буры менән булған ваҡиғаларҙы берәй иҫләрмен, әле үҙебеҙҙең баштан кискән хәл хәтеремдә айҡай.

...Бәғзеләр әсәйем, уға ҡушып Фариза еңгә хаҡында ла, спекуляция менән шөғөлләнә, көнбағыш, мамыҡ шәл һатып байый, ҡаланан әйбер алып ҡайтып ҡиммәткә осора, тип ғәйбәт тарата. Үткән ҡыш ул ғәйбәттең төйөнө сиселде, ниһайәт. Әсәйемдәр Стәрлегә йыйынып ҡына торалар (теге юлы Еҙемгә бата яҙғандан һуң Белоретҡа йөрөмәҫ булдылар), көнбағыш тултырып, ауыҙы тегеп ҡуйылған тоҡ ишек төбөндә ултыра, артмаҡларға тигән бауы ла эргәһендә әҙер генә ята ине. Кисен, һуң ғына, Гуля-Гөлсөм апай тәҙрә сиртте. Кемдер районға әсәйемдең өҫтөнән ялыу яҙған да, иртәгә шуның эҙенән тикшереү килергә тейеш, тисе. Бар, Гәүһәрҙе иҫкәрт, тип Сәмиғуллин ҡатынын үҙе ебәргән. Әсәйем ҡойолоп төштө. Нишләргә?! Теге тоҡто Гуля-Гөлсөм апай менән икәүләп ике ҡолағынан тотоп берсә баҙға төшөрөп йәшерҙеләр, берсә өй башына мендерҙеләр ҙә кире төшөрҙөләр – тиҙүк табасаҡтар. Ахырҙа аҙбар ҡыйығына, бесән араһына, күмделәр.

Иртәгәһенә, абау, беҙгә ысынлап та тентеү һалдылар. Мейес башын, карауат аҫтарын, соланды-кәбәркәне тотош ҡарап сыҡтылар. Баҙға уҡ төшөп торманылар. Йә Хоҙай, бер арый былар ҡыйыҡ яғына ла оҙаҡ ҡына ҡарап тапанып торҙолар, әммә күрәләтә терәп ҡуйылған баҫҡыс шик тыуҙырманы, күрәһең, унда үрмәләп торманылар. Һорау алдылар, ҡағыҙ тултырҙылар.

– Семечка сәсәһегеҙме? – тип һораны минән дә килгән ике кешенең береһе.

– Сәсәбеҙ әҙерәк, – тинем. – Ярамаймы ни?

– Үҫтерергә ярай, һатырға рөхсәт юҡ, – ти был кеше.

Сәмиғуллин шунда миңә уҫал ғына итеп ҡарап алды ла тик торғандан бер хәбәр сығарҙы:

– Аҡназар Сәйетовтың ҡыҙына һин һаттыңмы сәскә ҡаҙай торған заколканы?

– Миңзифағамы? Һатманымсы, ялтыр ҡайышҡа алмаштым, – тинем дә, һорауҙың төбөнә төшөп аңлағас, өҫтәп ҡуйҙым: – Маһибикә апай Өфөнән ундай ҡайыштарҙы күп итеп алып ҡайтҡайны. Заколкаларым бераү генә түгел дә ул, Шәрифә апайым бүләк итеп тора, ә Миңзифаның күҙе осло, иң кәттәһенә ҡыҙышты, йәл булһа ла, ҡайыш кәрәк булғас, алмаштым да ҡуйҙым. Ә Менәүәрәнең сәсенә өләсәһе иҫ киткес матур кәкре тараҡ ҡаҙаған, пенсия аҡсаһына эсбүкләмдән һатып алдым, рәйес бисәһенән, ти.

Түрәнең исеме телгә алыныу менән, теге кешеләр китә башланы. Ишектән сыҡҡанда Сәмиғуллин тура миңә боролоп ҡараны, күҙҙәренән атайҙарса бер йылылыҡ бөркөлдө.

Теге ялыуҙы көнсөл Маһый апай яҙған булып сыға? Сәмиғуллин ишара бирҙе бит. Ҡарға күҙен ҡарға суҡымаҫ, колхоз рәйесе бисәһен тикшермәҫтәр, тигәндер, беҙҙең хаҡҡа уны "һатҡандыр". Их, Маһый апай, ҡайһылай яман икәнһең? Ҡыҙыңды ҡойоп ҡуйған спекулянтка итеп бараһың түгелме? Яңыраҡ ул мәктәп буйлап һатып йөрөгән ҡайыштар ауыл магазинына ла килеп тулды. Өсләтә осһоҙораҡ! Һиңә, машиналы түрә ҡатынына, ҡала яҡын шул, алданыраҡ өлгөрәһең. Шым ғына һинд сәйе һатып ятыуыңды ла беләм, улайға ҡалһа. Асыуымды килтерһәң әле! Үҙебеҙ үҫтергәнде аҡса иткән өсөн исем күтәрергә ни? Ҡулыңдан килһә, үҫтер, һат көнбағышты һин дә! Үҫтереүе бер – аҙаҡ эш итеүе мәшәҡәтле уны – эшләпәһен киҫеп алып, ҡояшта һурыҡтыраһың, шунан туҡмаҡ менән емешен туҡмап төшөрәһең, сүп-сарҙан аралап, көн битендә елләтәһең дә мейестә тотоп алаһың, кипкәс, һелкәүестә елгәрәһең, тағы бөртөкләп таҙартаһың. Шунан ғына тоҡҡа тултыраһың. Буштан-бушҡа һарыуың ҡайнап, ир күҙәтеп йөрөүҙән башҡа ни килә ҡулыңдан? Ай, артығын ҡыҙып киттем: йәсләлә ашнаҡсы лаһа, арыу ғына эшләй, тиҙәр. Бәс, нимәгә ҡаныҡты һуң ул минең әсәкәйемә?

Һорауыма яуап үҙ аяғы менән килде лә инде беҙҙең ихатаға көндәрҙән бер көндө – Маһибикә апай! Ярты йыллап ваҡыт уҙғайны шөт теге тентеү ғәрлегенә. Әсәйем, уны олоға һанлап, тупһаға уҡ ҡаршы алырға сыҡты. Ә ул, артынан ҡапҡа ябылыр-ябылмаҫтан, яулығын башынан һыпырып ергә бәреп тороп, сәрелдәргә тотонмаһынмы:

– Уйнашсы! Ир кәрәк булғас, үҙеңдекен эргәңдән ебәрмәҫкә ине! Бирермен мин һиңә иремде, тот! Эсбүкләм!

Әсәйем аптырап ҡалды, ағарынып китте. Тегеһе уның һайын ярһый. Ҡартәсәйем анау ваҡыт Салпа Сәғүрәгә ҡаршы барған кеүек, мин дә, күкрәгемде ҡалҡан итеп, әсәйемдең алдына сығып баҫтым:

– Үҙең ул спекулянт, итәк аҫтынан һатыу итәһең, бишләтә хаҡҡа! Әбей-һәбейҙең бөтә пенсияһы һинең кеҫәңә кереп тора, бөртөклө сәйһеҙ йәшәй алмай ҙаһа улар. Райкомға яҙам! Ireңде эшенән алырҙар ҙа, өйҙә бикләп тоторһоң!

Шулай тинем дә, үҙ-үҙемде белешмәй ярһып, апайҙың туҙанда ятҡан яулығын тапап-тапап, ҡапҡа аша ырғыттым. Һаҡлыҡҡа тип, өләсәйемдең шунда һөйәүле торған таяғын ҡулға алдым: ҡоторған даһа Маһый апай, йә өҫкә ырғыр.

Ырғыманы, галошын шарпылдатып һөйрәп сығып китте ҡапҡанан. Йәл дә үҙе? Көнләшеү әллә берәй сирме икән, кешене аҡылдан яҙҙыра торған?

Әлдә өләсәйем өйҙә юҡ ине, игеҙәктәр уны клубҡа колхоз ветерандарын хөрмәтләү кисәһенә алып киткәйне.

Түҙмәнем, ҡартәсәйемә барып бушаттым эсемде. “Ир бирмәк – йән бирмәк”, – тип кенә ҡуйҙы ул, артығын сурытманы. Әсәйемдең гонаһһыҙ икәнен беләсе? Ир менән йән бер буламы, ир ҡайғыһы – итәктә ләһә?

Барыбер аңламайым Маһый апайҙы, үҙ күҙе менән күргәндәй ҡылана? Анау юлы, Гөлбикә апай менән әсәйемде бутап хыялый була яҙған көнөмдә, берәү ҙә шәйләмәне Аҡназар ағайҙың беҙҙең урамдан сыҡҡанын. Шәйләһә лә ти, рәйес кеше кемдең өйөнә һуғылмаç, бәс. Ауыл ғәҙәтен белгәс, ҡурҡышымдан улай ҙа аңдып йөрөгәйнем шул араларҙа – ләстит таралманы. Тимәк, Маһый апай иренең әсәйемә күҙе төшкәнен һиҙенгән? Ә күҙе әсәйемә төшкәс, нишләп Аҡназар ағайҙың йөнлө ҡулы Гөлбикә апайҙы ҡосаҡлаған?

Ошо урында, фекерем ҡаяға ҡаҡлығып ағымын үҙгәрткән йылғалай, ҡапыл әлеге минутта барған ваҡиғаға боролдо. Фариза еңгәм ҡартәсәйемә кәңәш итергә, фатиха алырға килгән дәһә, ана ҡайһылай мөлдөрәп ҡарап тора уға. Гуля-Гөлсөм апай ҙа, әсәйем дә сабыр ғына ҡартәсәйемдән һүҙ көтәләр. Тик минең түҙемем етмәне, телемә килгәнде ярҙым да һалдым:

– Һинән дә шәберәк әсәй табылмаясаҡ ул ҡыҙыҡайға, еңгәкәйем, алаһың үҙенә, үçтерәһең, олоғайған көнөңдә изгелек күреп ултыраһың!

Ҡартәсәйем ҡарашы менән шелтәләһә лә (өлкәндәр эшенә тығылдым бит), һүҙе менән йөпләп ҡуйҙы: “Нурия әйткәс, раç инде, тәүәккәллә, килен”.

Күрәҙәлек ҡылдыммы? Хисле асылым – еңгәм һигеҙ йәшемдә үк шулай нарыҡлағайны – фараз еткерҙеме? Күңел күҙем күрҙеме? Күңел күҙе күрмәһә, маңлай күҙе – ботаҡ тишеге, тиҙәр. Ә ҡайһы төштәрәк икән ул күңел күҙе? Ни өсөн был юçыҡҡа ҡайырылып киттемме – әлеге лә баяғы Әмин абыйҙың һандығындағы журналдарҙың касафаты инде. “Наука и жизнь” тигәнен дә алдыра башлаған абый, шунда өсөнсө күҙ хаҡында ғәжәп фекерҙәр яҙылған. Һәр кемдең дә бар, имеш, өсөнсө күҙе, әммә бик һирәктәрҙеке генә асылған, ти. Ҡартәсәйем әйткән күңел күҙе түгел микән шул “третий глаз”? Фариза еңгәмдең ҡыҙ баланы бәпләп ултырыуы, уны мәктәпкә оҙатыуы, кейәүгә биреүе – күҙ алдымдан үтеп китте ләһә, биллаһи...

19

Әсәйем, бер һүҙ әйтмәй тороп ҡалһа ла, Маһибикә апайҙың нахаҡ һүҙҙәренә ныҡ тетрәнде – һәр күҙәнәгем менән тойҙом. Шул осор ҡартәсәйемә лә һирәк барҙым, әсәйемде ҡурсаланым. Уның һаман да бөтәшеп бөтмәгән йөрәк яраларын яңыртты лаһа яһил апай. Әллә ниңә, үҙ күҙем менән күрмәһәм дә, Рамай ағайҙың ҡарама ботағында аçылынған кәүҙәһе хәтергә төшөп тик торҙо: әсәйем ғәрләнеп бер-бер хәл ҡылып ҡуймаһын!

Байтаҡ ваҡыт эстән көйҙө ул, шунан, аныҡ бер ҡарарға килгәндәй, башын текә итеп күтәреп ҡуйҙы ла бүтәнсә әймәне. Иç киткес үҙгәреш бара уның хәсиәтендә – күренеп тора. Бик сиселеп бармай шул, уйын уртаҡлашмай, уның кеүектәрҙе тешләм холоҡло, тиҙәр. Өс бала менән яңғыҙ ултырып ҡалыуы еңел булғанмы ни уға?! Кескәй саҡтарында игеҙәктәр Свердловскиҙан килгән посылка йәшниктәрен “Атай!” тип барып ҡосаҡлағанда, үҙемдең йөрәгем ярыла яҙа торғайны...

Йәнем әрнеп, өҙгәләнеп йөрөгәндә, беҙгә көпә-көндөҙ бер ағай килеп инде – сырамытам  һымаҡ үҙен. Йөрәгем һеркелдәп ҡуйҙы, ҡапыл күҙем (теге өсөнсө күҙ!) асылып киткәнен тойҙом: әсәйемде алып китергә уйлаша был ағай, ниәте маңлайына яҙылған!

Әсәйем, ҡаушабыраҡ ҡалһа ла, ағайҙың маҡсатын белә ине шикелле.  Килеүенә риза булғанға, хатта ки шатланғанға оҡшай. “Маҡтап йөрөйһөң, Самат ағай, самауырыбыҙ ҡайнап ҡына сыҡҡайны, үтеп кит”, – тип ҡунаҡты түргә саҡырҙы. Исемен дә белә, ә бит был кеше беҙҙең ауылдыҡы түгел. Өләсәйем дә аптырап ҡалған, йәшел бәрхәт камзулынан юҡ сүпте эҙләп, һыпырғылап бер була – уны беҙ хәҙер көн дә шулай байрамса итеп кейендерәбеҙ, ҡулынан ҡаты эш төшкән инде, ҡупшыланһа ла ярай.

Сәй эскән арала белдек: ағай Таллы ауылынан икән.  Мәңге онотолмаҫ йәшенле йәй фажиғәһенән һуң уҙған матәм митингыһында күргәйнем шул уны, иҫемә төштө. Тимәк... Инде шигем ҡалманы, ағай тәғәйен әсәйемде һоратырға килгән. Тол ир... Парһыҙ көн итеүгә күнер йәштә түгел, әсәйемдән саҡ ҡына өлкәнерәктер.

Күңелемдә, тәрәндә-тәрәндә ятҡан хис-тойғолар боларырға тотондо: был кешегә минең әсәйемдән башҡа яңғыҙ ҡатын бөткәнме ни донъяла, алһын, ана, Ҡарағаш Мәсрүрәне, уның малайы ла атай менән үҫер! Хәйер, ҡырҡҡа етеп тапҡан бер бөртөгөн үгәй атайға һыйындырмаҫ уныһы. Бәс, беҙ ҙә был ағайға үгәй булабыҙ ҙаһа... Үҙ атайыбыҙ иҫән була тороп... Ә ҡайҙа һуң ул – атай?! Әсәйем ғүмерлеккә нахаҡ һүҙ бысағынан язаланырға дусар ителһенме? Ысвикла бисәләре араһында төрлөһөн ишетеп йөрөгәс, беләм:  иң асыуы килгән ҡатындарҙы «ир рәхәте күрмәгере» тип ҡарғайҙар... Уф! Әйтерһең, минең асылымда прокурор менән адвокат алыша. Кем еңер? Ғәмәлдә икеһе лә – үҙем инде. Ысынсы, миндә ул «үҙем»дәр әллә нисәү, йыуашы ла, уҫалы ла, бәғзе мәлдә салпаһы ла тауыш биреп ҡуя. Илағы ла  бар, әҙәм ғәрлеге. Мине бер  бөтөн итеп, нисектер  һыйышып йәшәй  «үҙем»дәр...

Игеҙәктәр уйнарға сығып китте, әсәйем уларҙы туҡтатманы. Ә мине,  Мәүлиҙәгә барып килергә йыйынғас, күҙ ҡарашы менән генә тыйып ҡуйҙы. Һөйләшәһе һүҙҙә мине лә ҡатнаштырырға уйлайҙар икән, хуп, тыңларға кәрәк.

Ағай бер өләсәйемә, бер миңә ҡарап алды ла һүҙ башланы:

– Зөлхизә инәй, Нурия һеңлекәш, оҙон  һүҙҙең ҡыҫҡаһы: мин Гәүһәргә өйләнер инем, әгәр һеҙҙең яҡтан да ризалыҡ булһа?

Әтеү, минең дә ризалығымды һорағас, был ағайҙы бороп сығарып ебәрә алам? Нишләргә?! Былдай ҙа яуаплы бурыс торғаны юҡ ине әле алдымда былғаса.  Әсәйемә утыҙ  ете генә йәш, беҙ тип ултыра, ҡыуарған гөлдәй. Ҡыуармағансы, сәскәһен дә ҡоймаған әле!  Атайым өйләнде...

– Мин риза,– тинем өҙөп кенә. Бәғеремдә  бер нескә еп ныҡ итеп  киерелде, ауыртты, ләкин  өнөмдө  тышҡа сығарманым, күҙемдә сағылғандыр шул, әсәйем, хәлемде  күреп, “аһ” тип ҡуйҙы.

Ошо һүҙҙе әйтер өсөн икһеҙ-сикһеҙ кисерештәр даръяһын йөҙөп сыҡҡанымды әсәйем, уңған, һылыу, үҙенсә сәмле лә, хисле лә әсәкәйем, барыбер аңлап етмәгәндер һымаҡ. Ул халәттә ҡартәсәйем генә тоя мине. Эйе, Таллы ағайының әсәйемде үҙ йортона  алып  китерен, өләсәйемдең дә, игеҙәктәрҙең дә минең итәгемә йәбешеп ҡалырҙарын, ҡартәсәйемдең хәсрәттәрен – бөтәһен дә уратып уйлап сыҡтым. Быйыл (ә, бәлки, бер ҡасан да) институтҡа уҡырға бара алмаҫымды ап-асыҡ аңлап, тағы нығытып ҡуйҙым бая әйткәнемде:

– Ризамын. Әммә, ағай, һүҙҙең тураһы кәрәк: әсәйемде рәнйетһәң, уны яҡлар кеше бар – бына мин!

– Ун өс йәшлек улым, ун йәшлек ҡыҙым үҫә. Ғаян менән Лира. Әсәйҙәре... теге йәшенле йәйҙә... – тине лә ир кеше, һүҙен тоҡос ҡына итеп ослап ҡуйҙы: – Эйе.

Ышаныслы, аҡыллы күренде ул миңә. Шул саҡ ҡартәсәйемдең, төйөнсөгөн күтәреп үҙ нигеҙенә ҡайтырға йыйынғанда, “килендең дә йәшлеге зая үтә, мин уның юлын бикләп ятҡас, мүкләнгән таш кеүек...” тигәне иҫемә төштө...

* * *

Мәүлиҙә менән Толпарсыҡҡан яғына барып әйләнергә һүҙ ҡуйышҡайныҡ. Көн салт аяҙ. Йүкәлек яғынан йылы ел иҫә, шипкерт кенә бал еҫтәре һирпелә ул елдән. Әле тап бал ҡыуа торған осор.

Ана, әхирәтем миңә ҡул болғаны ла йүгерә-атлай Толпарсыҡҡан һуҡмағына ыңғайланы. Моғайын, әлеге Ишбирҙенән эҙ яҙҙырыуы. Икәү-ара ғына серләшергә итәме? Күр-күр, ҡайһылай оҙон аҙымлай, ҡулдарын ҡырҡа һелтәй, бара торғас, үҙен үҙе йүпләгәндәй, башын ҡағып ала – ниндәйҙер ҡарарға килгән бит был?

Әхирәтем биләндең уртаһында, биләндә генә, туҡтап мине көтөп алды ла, беләгемдән һелкетә тотоп, алға әйҙәне:

– Тиҙ бул, әйҙә, һинең Шаһимаран түмәләсенә, тоғролоғоңа һынау бар! – ти. Теге юлы үҙебеҙҙең Италияға эйәртмәгәнгә үпкәләгәс, Мәүлиҙәгә күл ҡырындығы үҙем генә белгән кескенә ҡалҡыулыҡ хаҡында һөйләп, берәй күрһәтермен, тип аҡланғайным, шуны онотмаған. Ниндәй һынау икән ул тағы?! Тоғролоҡҡа, тисе? Ауыҙымды асырға ла бирмәй, әхирәтем дауам итте: – Нурия, мин Олексий эргәһенә китәм!

– Ҡасып китәһеңме?– Шаҡ ҡатһам да, Мәүлиҙәнең хәбәре мине аяҡтан йыҡманы, киреһенсә, юрағаным юш килгәндәй, ирәйеп киттем. – Шулай булырын һиҙгәйнем, ҡыҙый...

– Хат яҙыштыҡ, уртансы апайым район үҙәгендә больницала санитарка бит, беләһең, медицинскийға инер өсөн уға ике йыл стаж кәрәк, шуны эшләй, уның аша хәбәрләштек. Украинанан хаттар бында яуа башлаһамы – үҙең уйлап ҡара! Әлдә тәүгеһе һиңә юлыҡҡан, Нурия!

– Йә, тиҙ генә минең тоғролоҡҡа һынау үткәрә һал да, өйҙә эш күп,– тинем. Әллә нимәгә ҡапыл йән көйҙөсө?

– Һыу инмәйбеҙме ни, Толпарсыҡҡанға килеп етеп тә, унда йөҙмәй ҡайтҡан юҡсы?

Мәүлиҙә тиҙүк тота ялғанды. Кәҙәләнеүемдең сәбәбен дә аңғарған:

– Бәхеттерме, бәхетһеҙлектерме – ашҡынам шул сит яҡҡа,– тип төшөнкө генә тауыш менән өҫтәп ҡуйҙы. Яҡшы белә холҡомдо, миңә кешене йәлләргә генә ҡуш, утҡа-һыуға инеп ярҙам итерҙәй булам да китәм.

– Унда нишләрһең һуң? Кейәүгә...

– Юҡ-юҡ, кейәүгә барырға ырғып тормайым, ышан, Нурия, ә Олексийҙы бик күрәһем килә, төштәремә керә бөҙрәләре сукынғандың!

– Бәс, суҡынғандыр ул ысынлап та?– Уф, телемдән осто ла сыҡты был хәбәр. Әхирәтем үҙе лә бик ҡаты уйланған, күрәһең, тап ошо хаҡта, өҙөп кенә яуапланы:

– Хоҙай – берәү!

Шылдым был теманан:

– Мәүлизә, шул һәләтеңде әрәм итеп, уҡымай ҡалырһыңмы? Әмин абый күҙ терәп тора лаһа, биш йәшеңдән синус-косинустары менән сихырлап ҡуйғайны үҙеңде, хәтереңдәме?

– Әтеү. Олексий яҙа, Донецкиҙа быйыл ғына университет асылды, унда математика факультеты ла бар, тип. Шунда инәм!

– Бер генә күрҙең дәһә шул сәсрәмәгер хохолды, уныһы ла бәләкәй генә сағында?– тип әйтмәй булдыра алманым.– Шуны шулай яратаһыңмы?!

– Шулай яратам шул! Бер күҙ ташлау менән йөрәгем ҡабынды... Ҡабынды ла һүнмәне лә ҡуйҙы.

– Әсмә, исмаһам, Артуры менән үбешеп ҡалған, ә һин?

– Уныһы булманы! Булһа, һин белер инең тип нисә әйттем, һаман ышанмайсы.

– Хаттарын да уҡытҡыланың, йәшермәнең. Күҙҙәреңә ғашиҡ булдым, ти ҙә яҙа ул казак, иветә? Олена... Күҙҙәрең матур шул, ысын, ҡыҙый, керпектәрең ҡуйы, оҙон, ҡоралайҙыҡы кеүек... Ә шулай ҙа, Алеша һине нисек ғашиҡ итте үҙенә, әйт әле?

– Шундай итеп ҡараны ул миңә, Нурия, йөрәгемә үтеп инде ҡарашы, тием дәһә, тағы ҡайһылай аңлатайым?

– Шунан?

– Хушлашҡанда, баҫыуҙа, ҡолағыма шыбырланы: “Коханна!” Ҡайнар тынына яңағым янып сыҡты. Тотош тәнем дерелдәп китте, ҡурҡтым хатта...

– Ҡараны, тиһең, беҙҙең Фатих әҙ күҙләнеме ни һине үҙенең матур зәңгәр күҙҙәре менән? Партаһын да һине күреп ултырырлыҡ итеп һайлай торғайны.

– Миңә ҡарап ултырҙымы Фатих? Уф, һаташма! Һиңә ғашиҡ булған ул, мин – албырғатҡыс ҡына, белгең килһә.

– Юрамал әйтәһеңме? Бер Сабиры ла еткән... Уның, исмаһам, һиҙелә ине миңә күҙе төшкәне. Әлдә, ана, училищеһында бер ҡыҙға ғашиҡ булған, үҙе һөйләне: ”Баштараҡ бик ғазапланғайным, һин миңә иғтибар ҙа итмәгәс,– ти,– һиңеҙлегемде яратмайҙыр, тип спорт менән шөғөлләнә башланым... Ҡыҫҡаһы, мөхәббәтем мине училищела көткән! Ә тәүге хистәрем, һине Кәбирҙән көнләшеүемә сыҙамай хаслыҡ эшләп йөрөүҙәрем, иҫеңдәме, киптерергә ҡуйған кирбестәреңә кемдер “Н+К” тип соҡоп яҙып сыҡҡайны – мин ул, шулар барыһы ла үҫмер ашҡыныуҙары, ысын мөхәббәткә репетиция булған, күрәһең...”

– Репетиция, тиме, шул Сабир әйтәме?– Әхирәтем ышанмайыраҡ торҙо бер арый. Шунан баяғы һүҙен өҫкә сығарып ҡуйҙы: – Ә Фатихтың һине яратыуына шикләнмәйем, бына күрерһең!

Был йәһәттә хәбәрҙе ошонда туҡтаттыҡ та һәр ҡайһыбыҙ үҙ асылыбыҙға сумдыҡ. Ғашиҡ булыу өсөн бер ауылда үҫеү, бер синыфта уҡыу һис кенә лә мотлаҡ түгел – күптән аңланым, Фариза еңгә менән Хәйрулла ағай яҙмышынан уҡ. Татар әбекәй менән Әдисәй бабаҡай һуң?! Ана, атайым ҡырҙа тапты ишен... Уйымды ошонда уҡ шарт өҙҙөм. Етер ҙәһә ғүмер буйы һыҡтарға атай тип. Уҙған аҙнала хаты килде ҡартәсәйемә: “Әсәй, һинең менән уртаҡлашмай буламмы был шатлыҡты – ҡыҙыбыҙ тыуҙы, Майя (беҙҙеңсә Мәйсәрә) тип исем ҡуштыҡ. Киленең башҡорт милләтенән, ҡалала тыуып-үҫкәнгәләр, урыҫлашҡан, телде онотҡан тиерлек, әммә Майяны өйрәтәсәкмен туған телендә һөйләшергә. Әҙерәк үҫә төшһөн дә, алып ҡайтып күрһәтермен һиңә, таныштырырмын апайҙары, ағаһы менән. Баш иҫән булһа...”

Ҡайт, атай, ҡайт, тип үсекләштем шунда эстән генә, әсәңә, бындағы балаларыңа үҙеңде лә күрһәт! Ә теге Майя (ата бер туғаным даһа) кемгә оҡшаған икән? Барыбер Камил кеүек аҡыллы, Камила кеүек һылыу түгелдер! Йәпле, ҡыҙ бала тыуған, Камил – берҙән-бер Ҡарамырҙин. Хәйер, ул да – Аҡсурин, минең һымаҡ. Ә Майя, моғайын, атайым фамилияһын йөрөтәлер?

– Нурия, һин миңә сер һандығы бул,– тине Мәүлиҙә, урау уйҙарымдан ҡайтарып. Фекеремде әммә төйнәп өлгөрҙөм: әсәйемде, Самат ағайҙан бала тап, тип өгөтләйәсәкмен!

– Ҡайҙа киткәнемде тик һиңә генә әйтәм. Апайҙарым атайымдан йәшерә алмаясаҡ, Ишбирҙе иҫәп тә түгел, әсәйемде беләһең – ебеп төшәсәк. Уҡырға ингәс, хәбәр итермен өйгә: институт тигәндә, атайыма барыбер, ҡайҙа уҡыһам да.

– Әйтеп кит, шулай булғас?

– Алдан әйтһәң, Башҡортостанда бөткәнме ни институт, тиәсәк, бармаҡ бөгөп һанарға тотонасаҡ: Өфө, Стәрле, Бөрө... Ә Донецкиҙа уҡырға индем, конкурс беҙҙәгенән икеләтә ҙур ине, тип тә ебәрһәм, ғорурланып китәсәк хатта.

– Ә инә алмаһаң уҡырға?

– Инәм!– тине Мәүлиҙә, икеләнеп тә торманы.

Мин дә икеләнмәйем быға, һораным инде, тәртип өсөн генә.

– Бер кемгә лә әйтмәй шылһаң булмаймы?

– Юҡ, улай әллә нисек, хыянат кеүек. Атайым алдында аҙаҡтан аҡланырға кәрәк тәһә, Нурияға әйтеп киттем, тиермен.

– Таптың дәү дәлил, Әмин абый мине әрләйәсәк, ер һелкетеп ҡысҡырасаҡ.

– Ҡысҡырыр ҙа аҙаҡ маҡтар, тоғро дуҫ икәнһең, тип. Ә һин үҙең документтарыңды ҡайҙа тапшыраһың, Өфөгәме, Стәрлегәме?– Ниһайәт, миңә күсте иғтибар.

– Быйыл бер ҡайҙа ла бармайым.

Мәүлиҙә быны тыныс ҡына ҡабул итте:

– Гәүһәр апай Таллыға күсһә, һиңә ҡала инде ике ҡарсыҡ, игеҙәктәрең... Стаж эшләрһең дә, педвузға бер йыл да етә, ти, ситтән тороп уҡырға керерһең. – Үтә күреп тора мине әхирәтем... Әсәйем хаҡында ла ишеткән (ауыл белә, тимәк), әллә ошо Толпарлының кешене керпек тә ҡаҡмай күҙәтеп торған “өсөнсө күҙе” бар?

– Шулай ҙа уйлап ҡуям... Әле килеп, һин дә әйткәс, нығындым: заочно уҡыу минең өсөн иң ҡулайы булыр.

– Ҡыҙый, әтеү һиңә институтҡа тип Баязит ағай һалған аҡсаңды үтескә биреп тор, алыҫ юл бит – Украина... Миңә Өфөләк кенә тотторҙолар.

– Атайым илле һум ебәргәйне, ҡартәсәйем бирҙе биш тәңкә – байыттылар. Ярар, күпме кәрәк һиңә?

– Ун һум бирһәң...

– Кискә инеп сыҡ, утыҙ итеп бирермен. Сит яҡта аҡсаһыҙ тилмереп йөрөмәҫһең.

Ҡапыл ҡосаҡлашып илап ебәрҙек. Хәсрәттән түгел. Шатлыҡтанмы? Әлләсе.

Толпарсыҡҡанда һыу ҡойоноп алғас, тыштан да, эстән дә таҙарғандай тойҙом үҙемде. Мәүлиҙәгә ҡарап һоҡландым: һомғолланып киткән, сәстәре ҡуйырған, элек үрмес ҡушып нәҙек кенә бер толом үрә ине, хәҙер – тос ике толом. Ә керпектәре?! Мәүлиҙәнең бөгөлөп торған, ҡуйы, бәрхәттәй күренгән керпектәренә күҙе ҡыҙмаған ҡыҙ һирәктер. Белгәндәй, шундай оҫта итеп елпелдәтә ул шул

матур керпектәрен. Үҙгәргән әхирәтем (миңә генәме ни әйләнгән һайын үҙгәрергә?), осҡон сәсеп торған һоро күҙҙәрендә тәүәккәл саялыҡ бар. Саян йондоҙлоғо уға ныҡ йоғонто яһай башланы, ахырыһы. Әлеге төҫ-башын күрһәме, йығылып китәсәк теге Дон казагы, биллаһи.

Етәкләшеп алдыҡ та биләндән йүгереп төштөк. Түбәнгә йүгерһәк тә, ниндәйҙер бейеклеккә үрләгәндәй булдыҡсы? Алда торған маҡсаттарҙы самалаған күңел халәтелер был, моғайын...

Ҡайтышлай атай йортона һуғылырға булдым. Ҡартәсәйем теге хәбәрҙе, Таллы ағайының әсәйемде һоратыуын, беләлер, күҙендә шул яҙылғандыр? Ярар, барғас күрермен. Әлегә тарҡауыраҡ булған уй-тәьҫораттарымды барланым. Мәүлиҙәнең ниндәй оҫта мутлашыуына хайран ҡалдым бит: алдамай ҙа, ҡапылда дөрөҫөн дә әйтмәй тора. Шәп ҡатын сығасаҡ унан. Ә минән? Әллә... Донъя көткәндә кәрәк ҡайһы бер таһылдар, холоҡ һығылмалылығы, мәҫәлән, етмәй миндә. Бының тулы ғаиләлә үҫмәүем, ир-ат булмышына яраҡлаша белеү мәктәбен үтмәүем арҡаһында икәнен аңлайым.

Ҡапҡа асыуыма, болдорона сығып ҡаршылап торған ҡартәсәйем мине тәү ҡарашҡа ваҡ хәбәр менән таң ҡалдырҙы:

– Камиланы төшөр Биксәнәй юлына, ҡолоҡасым, бәләкәй көйәнтә-биҙрәләрең соланда тора, шул көйөнсә генә, хәҙер ул ташыр миңә эсәр һыуҙы. Күрәнле яҡын, тотонорға һыуҙы шунан Камил да йүгертеп килтереп ҡуя, ике ҡулына ике биҙрә тота ла. Бер кәҙәм дә ун тауығым...

Мин ҡапылда әсәйем хаҡында өндәшмәйерәк торҙом. Инде һүҙ сыҡмаҫмы тиһәм, сыҡты барыбер:

– Игеҙәктәрҙе әкренләп эшкә күндер, тим, улар йәшендә үҙеңдең белмәгәнең юҡ ине. Ике донъяны бер үҙең көтә алмайһың даһа?! Бына ҡайҙа барып олғашты теге ваҡ һүҙҙең осо. Ҡартәсәйем тауышын күтәрә биреп ҡуйҙы ла уң ҡулы менән һул яҡ түшен һыйпап алды. Йөрәгенә тейгән теге хәбәр, теймәҫлекме һуң? Миңә лә еңел түгел, әсәң һынлы әсәңде ят кеше алып китһенсәле. Былтыр орғасы башмаҡты Әнкәләр осондағы берәүҙәргә тотторол ебәрҙек, юҡһынып ҡалдыҡ артынан. Башмаҡ түгел дәһә, әсәйебеҙ сығып китәсәк был юлы урамыбыҙҙан. – Көсөм барҙа, – тип дауам итте ҡартәсәйем, – таян миңә, ҡурҡма, ҡолоҡасым. Беҙ, дүрт ҡатын (өләсәйем менән Камиланы ла иҫәпкә алды), бирешмәҫбеҙ. Баязитты көтмәне түгел, көттө, йөҙҙә ҡыҙартманы мир алдында. Үпкәм юҡ. Саматулланың нәҫелен беләм, арыу, эшсән улар. Уңып китер әсәйең.

– Иншалла, ҡартәсәй. Минең әсәйемә лә ир рәхәте күрергә яҙһын,– тинем дә телемде тешләнем. Тиҙ генә икенсе яҡҡа, үҙем дә көтмәгән яҡҡа, борҙом хәбәр тәртәһен: – Һин бигерәк йәшләй ҡалғанһың ҡартатайымдан, тағы ла тормошланырға башыңа инеп сыҡманымы? Әй, бер һорағайным шикелле, бәләкәй саҡта.

– Инмәне. Инмәгәс, сыҡманы ла, – тип көлөмһөрәгәндәй булды ла баяғыны үҙенсә һығымталап ҡуйҙы ҡартәсәйем: – Утын-бесән тип ҡайғырмаҫ килен, нахаҡ һүҙ күтәрмәҫ. Ирленеке – замана ул һәр дәүерҙә лә.

Бына тағы бер фәлсәфә: ирленеке – замана?

Әсәйемде Таллыға күсереп алып ҡайтып китте Самат ағай. Улын-ҡыҙын эйәртеп, арбаһына ҡупшы балаҫ йәйеп, ат егеп килгән. Ризалығын белдереп, ҡартәсәйем уны оҙатырға килде, әсәйемдең йөҙөнә шулай нур ҡундырҙы, рәхмәт төшкөрө. Самат ағайҙың ҡыҙы игеҙәктәр менән бергә уҡый икән.

Улының – һонторайып үçмер ҡорона инеп барған малайҙың – күҙендә тәрән моңһоулыҡ бар, һайығыр микән бер саҡ? Тиҙ генә үтә тиме ни ғәзиз кешеңде юғалтыу хәсрәте. Үҙемдән беләм: атайым ҡырға сығып киткәс, күпме һығылдым, һаман да эстән әрнейем... Ә был балаларҙың әсәйҙәре ҡайтмаçҡа, мәңгелеккә киткән.

Кисен Мәүлиҙә килеп китте, усына аҡса йомдорҙом, иçтәлеккә сәсемдән алып ҡаптырма бүләк иттем – көмөш төçөндә ялтыраған шул биҙәүескә күҙе ҡыҙа ине гелән. Әхирәтем топ-тойоҡтан һорап ҡуйҙы:

– Ҡыҙый, һинең ҡоралайҙы күргәнең бармы ни?

– Юҡ әлегә, ә ниңә һорайһың?

– Үҙең дәһә, керпектәрең ҡоралайҙыҡына оҡшаған, тинең...

– Ә-ә... Әсмә һөйләгәйне ҡоралай тураһында, ул күргән, атаһы менән һунарға барғанда. Ҡаршыларына килгән дә баçҡан бер ҡоралай! Атаһы йәһәт кенә мылтығын төҙәгән – реакция, Бүреһуҡҡан олатай әйтмешләй. Бәләкәй генә сатаҡ мөгөҙлө, оҙон нәҙек аяҡлы, һомғол кәүҙәле кейек, ти. Атаһы: “Был һаҡ, сапсан хайуанҡай нишләп улай күрәләтә аҡланға, кеше барлығын белә тороп, сабып сыҡты әле?”– тип аптыраған да мылтығын ергә һалған. Ә теге ҡоралайҙың күҙҙәрендә мөлдөрәмә йәш, ти... Шунда иғтибар иткән Әсмә, керпектәре шундай оҙон, төҙ, ти.

– Атҡандармы шул матурҡайҙы?!

– Юҡсы, атмағандар. Ҡоралайҙың имсәгенән һөтө сөрләп ағып киткәнен күргәс, Әсмәнең атаһы аңлап алған: быны балаһына бер-бер хәл булған, моғайын. Ысынлап та, киренән урманға инеп киткән ҡоралай артынан эйәреп барһалар, бәләкәсе ҡапҡанға эләккән, ти! Ысҡындырып, яралы аяғын бинт менән бәйләп киткәндәр.

– Һунарсының ни, дарыу-фәләне үҙе менән икән, ни хәл ҡупмаç урманда, иветә, ҡыҙый. –Теорема иçбатлағандай, шулай нығытып ҡуйҙы ла, Мәүлиҙә һүҙҙе башҡа юçыҡҡа борҙо: – Айыусыны ысынлап та бөтөрәләр, ти бит. Ярты халҡы район үҙәгенә барып төпләнгән инде, унда башҡорт мәктәбе асыласаҡ икән. Тағы бер нисә урман ҡасабаһынан да, булған делянкаларҙы ҡырҡып бөткәс, кешеләр шунда уҡ күсенәсәк, ти. Район үҙәгендә башҡорттар арта инде, әтеү, иветә?

– Әсмә, бер үҙем тороп ҡалһам ҡалам, Артурҙы көтөп алмайынса Айыусынан китмәйем, ти. Уҡыуы бер йыллыҡ ҡына бит уның, киләһе майға тиклем. Артуры: ”Жди, Асенька, жди, моя лесная фея, первым делом к тебе приеду!” – ти ҙә яҙа. Ә Суфия апайҙарҙы теге Тубыл ҡалаһындағы ҡыҙҙары килеп алып киткәйне былтыр уҡ.

– Уф, ҡыҙый, ниндәй яҙмыштар көтәлер инде беҙҙе киләсәктә! – Бер тауыштан шулай оран һалдыҡ та оҙаҡ итеп бер-беребеҙгә ҡарашып торҙоҡ. Күңелемә килгәнде фараз иттем:

– Һин бик оҙаҡҡа китәһең Толпарлынан. Әммә әйләнеп ҡайтасаһың, бик күп йылдарҙан һуң...

Мәүлиҙә яуап бирмәне. Күренеп тора: әле уға китеү мөһим, ҡайтыу тураһында уйламай.

Ике көндән ул райондан Өфөгә үтешләй ауыл осонда туҡтай торған автобусҡа ултырып китеп тә барҙы. Әхирәтемдең ҡайҙа юл тотҡанын донъяла мин генә белә инем. Хәйер, тағы берәү, миңә әҙәбиәт аша ғына таныш Дон йылғаһы аҡҡан тарафтарҙа үçкән егет, моғайын, беләлер. Көтәлер?!

* * *

Тауыҡтарҙың йәшереп һалған йомортҡаларын эҙләп алайым тип аҙбар башына менеп барышлай, баҫҡыстан тирә-яҡты байҡап торғанда, Әнкәләр осонда бер һыбайлы күҙгә салынды. Әллә Кәбир?! Ул ғына елә шулай: кәүҙәһен төп-төҙ көйөнсә саҡ ҡына алға иңкәйтеп, эйәренән ҡалҡынып-ҡалҡынып. Хәйер, башҡа берәүҙең нисегерәк елгәнен иғтибарлап ҡарап торғаным да юҡ. Төймәләрен ысҡындырғандыр – күлдәге елкән кеүек елферҙәп бара. Ә артынан, бер тотам ҡалмай, бөҙрәләнеп саң күтәрелә – эргәһендә тормаһаң, саң бағанаһы ла матур күренә, имеш.

Кәбир әле каникулда. Көн дә тиерлек күрә-күрә йөрөйөм. Юҡ-юҡ тигәндә лә осрашабыҙ, һөйләшәбеҙ һәм... осрашҡан һайын бер-беребеҙҙән алыҫлашабыҙ кеүек. Уға нисектер, миңә шулай тойола. Ул инде ҡала егете, кейенеүе, һөйләшеүе лә бүтәнсәрәк. Беҙҙең ише «анта - мынта»лап ҡатырып һалмай, әҙәби телдә «унда, бында» тип еренә еткереп һөйләй. Йыш ҡына Ҡарауылтауға үрләгәнен күрәм, яурынына ниндәйҙер дүрткел нәмә аҫып алған була. Моғайын, һүрәт төшөрәлер. Иҫемә төштө: аҫып алғаны мольберт тип атала. Ҡарауылтауҙан ауыл, сөгөлдөр баҫыуы, Һыҙа буйҙары ус төбөндәгеләй күренеп ята. Артабан – иген баҫыуҙары, унан да арыраҡ – машиналар зыйлап торған Оло юл. Шул юлды сәғәттәр буйы күҙәтеп торғаным булды бала саҡта. Атайымды алып китте лә ҡайтарманы... Әй, юл ике яҡҡа ла тигеҙ ята лаһа: теләһәң – кит, теләһәң – ҡайт! Юлға ни барыбер, уның үҙ бурысы был тормошта.

Һәр таңды Биксәнәй һуҡмағындамын. Аяҡтарыма ошонан да алыҫыраҡ юл төшмәй тора әлегә. Уның ҡарауы, оҙон-оҙон уйҙарым бар, улар тап ошо һуҡмаҡта һәлмәк итеп, сейәләнмәй генә берсә тағатыла, берсә йомғаҡҡа ҡабат йомарлана. Ул йомғаҡта хәтерҙән юймаҫҡа тип төйнәлгән төйөндәр күбәйгәндән-күбәйә.

– Матурһың, Нурия!

Ғәҙәтемсә, биҙрәләремде мөлдөрәмә тултырып, көйәнтәмде яурыныма ҡуйҙым да, Биксәнәй көҙгөһөнә теклəп, буй-һынымды бағып тороуым ине. Боролоп ҡарамай торҙом ҡапылда. Кәбир тиһәм, ҡалын ирҙәр тауышы сыҡты. Барыбер беләм, һәр күҙәнәгем: "Ул, ул – Кәбир!" – тип ҡысҡыра.

– Тәү тапҡыр ишетәм, имеш тә, матурмын? – тип шаяртҡан булдым.

– Мин беренсе булып әйтергә тейешмен дә һиңә был хаҡта!

"Нишләп, тап – һин?"– тиһәм, "Сөнки – яратам!"– тип яуапларын ап-асыҡ тоям, хатта йөрәгенең ярһыу һөрәнен ишетәмдәй. "Мин дә яратам!"– Бынытын минең йөрәк өндәшә, дөрөҫөрәге – шулай өндәшергә әҙер генә тора. Юҡ, миңә Кәбирҙән ул һүҙҙәрҙе әйттерергә ярамай!

– Әй, алдашам, өләсәйем, ҡартәсәйем, әсәйем – йөҙ әйткәндәрҙер әле, уларса мин донъя сибәре булып та китәм, һы...

– Нурия, был юлы һинең менән асығын һөйләшмәй китмәйем.– Кәбирҙең тауышы ҡалтыранды, һүҙен шаяртыуға бороруға тырышыуыма иғтибар ҙа итмәне. – Арабыҙҙа күҙгә күренмәҫ кәртә тора, аңламайым, нилектән? Кил бөгөн кискә Әнкәләр осона.

– Үгеҙ йөҙәк уйнаған ергәме?

– Эйе.

Башымды ғына ҡаҡтым да юрғаланым Биксәнәйҙең бер кешелек кенә тар һуҡмағынан. Кәбир шым ғына көйләп һыҙғырып ҡалды. Таныш көй: «... Килмәй ҡалма, Нурия!» Хәйрулла ағайҙың йыры. Йөрәгем күкрәк ситлегенән һикереп

сығып, утлы күмерҙәргә барып төшкәндәй булды! Ярар һуң, үҙең әйтмешләй, асығын һөйләшербеҙ һуң, Кәбир... Ошо уй, әйтерһең, ҡуҙҙа ятҡан йөрәгемде һалҡын һыуға сумырып алды. Хәйрулла ағай ҡыҙған тимерҙе һыуға һалғас, шажлап быу сыҡҡайны, тимерлек эсен, гүйә, томан баҫҡайны бер мәлгә – мин дә әле ҡапыл томан эсендә шаңҡып ҡалғандай булдым, әммә туҡтаманым, аяҡтарым өйрәнгән һуҡмаҡтан яҙлыҡманы, юрғаланым да юрғаланым...

Ҡайтып, биҙрәләремде күрәләтә ҡыйыҡтан аҡҡан ямғыр һыуына тип улаҡ аҫтына ҡуйылған мискәгә бушаттым да тағы барҙым Биксәнәйгә. Кәбирҙең эҙҙәрен эҙләне күҙҙәрем, тик эҙҙәр үлән араһында юғалған, юйылған ине инде. Июлдә үлән ныҡ, көслө, һығылмалы була – баҫып та үтәһең, турайып та өлгөрә. Кәбир, дуҫҡайым һинең әле йәш, йәшел үлән кеүек сағың, һынмаҫың, мөхәббәтемде ҡабул итмәне берәү, тип ни. Аңлаһаңсы, үҙемде лә аямаясаҡмын, шытып ҡына килгән нескә хистәремде лә.

Ҡартәсәйем баяғы ҡылығымды әлдә күрмәй ҡалған. Икенсе тапҡыр алып ҡайтҡан һыуҙы теге ап-аҡ эсле көршәккә ҡойғас, унда ошо минуттағы үҙемде күргем килеп оҙаҡ ҡарап торҙом. Юҡ, мине күрһәтмәне көршәк, үҙенең саф аҡ булмышын ғына иҫбатлап тик торҙо: һыуы шулай үтә күренә.

Соландағы ҡупшы көйәнтәне, бәләкәй биҙрәләрҙе ҡул осона сығарып ҡуйҙым: иртәгә Камиланы Биксәнәйгә эйәртәм. Ҡартәсәйем урынына ҡунаҡлаған, тәҙрәнән баш ҡағып ҡалды, хуплай, йәғни, эш-көшөмдө.

Урамға сығыуыма, Гөлбикә апайҙың ҡапҡаһындағы аҡҡоштар талпынғандай итте лә, Менәүәрә йүгереп килеп сыҡты тышҡа.

– Нурия апай, тороп тор, йомошом бар! – тип ҡысҡыра. – Гөлбикә инәй һинән дә яҡшы кәңәшсе булмаҫ, ти, бына йәпле осраттым, мә!

Бәс, ҡулыма дәфтәр килтереп тотторҙо был. Асып күҙ һалһам, әллә шиғырҙар? Ым менән генә һорайым: кемдеке? Бармағы менән үҙенә төртөп күрһәтте лә йылт итеп баяғы ҡапҡанан инде-китте ҡыҙыҡай. Бынағайыш...

Атай йортона ҡабат боролдом. Уҡытҡыһы, фекер ишеткеһе килә ләһә берәүҙең. Байрам-фәләнгә, стена гәзитенә шиғыр-миғыр яҙғаным бар, шуға бирҙелер Менәүәрә был дәфтәрҙе миңә.

Алғы бүлмәгә инеп ултырҙым, тәүге битте астым, уҡыным. Шунан тағы, тағы... Ун ике битлек кенә дәфтәргә күпме хис һыйған! ” Ярабби, шағирә бит был Менәүәрә! “ – Һикелә миңә күҙ һалғылап, өндәшмәй генә еп ойоҡ һүтеп ултырған ҡартәсәйемә әйттем, эсемә һыймай ҙаһа һоҡланыуым. Ике-өс шиғырын уҡып та ишеттерҙем:

*Әлдә һин бар, бәърем-Аҡбейек,*
*Яратыуым һине хаҡ, бөйөк!*
*Аҡ ҡаяңды һөйгән бөркөт кеүек,*
*Тоърологъом һиңә, Аҡбейек...*

***

*...Йөрәгемде сәптәй күреп аттың.*
*“Һин ъәйепле!”– тиеп әйтеүҙәрең*
*Уҡтай ҡаҙала бит...*
*Мин түҙермен,*
*Еңеләйһә, әсәй, әрнеүҙәрең.*

– Аҡбейеккә, бәғрем, ти, яратыуым хаҡ, ти, бөйөк, ти... Мин дә яратам Аҡбейекте, ә ошолайтып әйтә белмәйем?! Әсәһенә арналғанын иламай уҡып булмай!

– Шик юҡ, сәсәниә ул бала, – тине ҡартәсәйем.– Ғазапты иртә татыу эҙһеҙ ҡалмай – тән яраһы нимә, йәне яралы Менәүәрәнең, Аҡбейеккә һыйына...

– Минең ул “Һаумы, Яңы йыл! Яуһын ҡарҙарың, ап-аҡ юрғанға төр һин ҡырҙарҙы” кеүек шиғырҙарым таҡмаҡ икән дәһә? Әй, үҙемде шағирәгә һанағаным да юҡсы.

– Һин – бәйәнсе, тинем дәһә бер?

– Әй, бәйәнем дә, ҡағыҙға төшмәгән әле... Өләсәйем матур һөйләй бит, теҙеп, бәйнә-бәйнә һүрәтләп, уға эйәреп маташам инде бәғзе берҙә. Ә нишләп икән, ҡартәсәй, бик һирәк ваҡиғалар, айырым кешеләр генә йоға хәтергә,башҡалары онотола ?

– Йоғоп ҡалғанын юйма, ҡолонсағым. Хәтер үҙе шулай һайлай, тос орлоҡтарҙы кәбәктән айырған кеүек. Күкрәк түреңә бер инеп ятҡас, ҡасан да ғәмәлгә сыға ул хис-тойғо. Ә ҡоҙағыйҙың йырсылығы ла бар, һүҙҙе лә ҡойоп ҡуя, эйе. Тыңлап йөрө уны, яҙа китмәҫ.

Менәүәрәнең дәфтәре һушымды алды. Кәбир хаҡында әҙгә генә онотоп ҡуйғанмын хатта. Һүҙ тәьҫирен, һүҙ көсөн белмәйем түгел дәһә – былай уҡ хаттин ашып әҫәрләнгәнем юҡсы? Яман һүҙҙе Салпанан, көнсөл Маһыйҙан ишетеп ғәрләнеп үлә яҙыуым, Нәркәс менән Һәүбән хаҡында уҡып хыялланып йөрөүҙәрем булды... Ә был ҡыҙыҡай, әллә эргәлә үҫкән ябай берәү булғанға, хайран ҡалдырҙы. Юҡ шул, ябай түгел ҡыҙсыҡ, – шағирә! Әлүктән шулай яҙа, артабан белеме ҡалыная, аҡылы үҫә төшкәс, ниҙәр күстәрер?

Шуға күңелем булды тағы, Менәүәрәгә тамсы ла көнләшмәнем. Хоҙай биргән уға һәләтте, сумырып биргән. Ә Хоҙай биргәнгә көнләшеүҙән ни фәтүә?

Ҡайтырға сығыуыма Менәүәрә тышта көтөп тора, күҙемә төбәлгән дә ҡатҡан:

– Нисек?

– Шәп! Әйҙә, күсереп яҙ ҙа, “Ленинсы” гәзитенә һалып ебәрәйек. Баҫасаҡтар! Мин уны уҡып барам, һинеке кеүек шәп шиғырҙар бигүк йыш осрамай.

– Исмаһам, район гәзитенә йә “Пионер” журналына, тиең, Нурия апай.

– Юҡ, һин “Пионер”ҙан уҙғанһың, мотлаҡ “Ленинсы”ға! Ә район гәзитенә, эйе, һалайыҡ хат менән. Үҙебеҙҙекеләр ҙә таныһын йәш шағирәләрен.

– Ысын әйтәһеңме?!

– Бәс, алдап тораммы, әтеү! Кит, йәнде көйҙөрөп... Бар, тим, хәҙер үк күсереп ҡуй матур итеп, ә быныһын һаҡлыҡҡа Гөлбикә апайҙа тот,юғалмаһын. Хис бит ул ағым һыу кеүек, һәр тулҡыны тик бер генә ҡаға, аҙаҡ – тот ҡойроғон. Минең башҡа яңыраҡ елле генә бер шиғыр килгәйне, әй, онотмаҫмын әле, тип яҙып ҡуйманым – аҙаҡ иҫләп ҡараным да, ҡайҙа, ти, ул – осҡан.

– Мин дә әллә нисә ҡат шулай йышылдым, – тине Менәүәрә (маҡтанғанымды әлдә һиҙмәгән), – хәҙер шундуҡ дәфтәргә теркәйем. Анау күгәрсендәр хаҡында бер шиғыр тыуып килә әле күңелдә. – Менәүәрә ҡапҡалағы теге аҡҡоштарға ымланы.

– Күгәрсенме ни, мин, аҡҡошмо, ҡаҙмы, тип баш ватам.

– Кем нисек күрә, – тип кенә ҡуйҙы ҡыҙыҡай. Һы...

** *

Кәбир менән осрашыуға тыныс күңел менән барҙым. Хоҙай ярҙамы булдылыр был Менәүәрәнең юлыма сығыуы. Үҙемдең әлегәсә икеле-микеле уйҙарымдың дөрөҫ икәненә инандым да ҡуйҙым. Эйе, еңел булмаҫ миңә күңел түремдә бөрөләнеп кенә килгән һөйөү гөлөн үҙ ихтыярым менән һәләк итеү... Әммә әрнеүғазаптарҙың сыныҡтырғыс илаһи көсөн күрһәтте түгелме миңә Хоҙайым?

Ана, беҙ теҙелеп ултырып үгеҙ йөҙөк уйнаған йыуан имән бүрәнә, уға ямғыр ҙа, ҡар ҙа ҡурҡыныс түгел, бешегеп ҡоростай нығынып алған да ята бирә. Нисә быуын үҫкәндер ошонда фантиктар менән уйнап? Хатта бүрәнә осондағы кесерткән дә – мәңгелек, мин Кәбирҙе үпкәндә балтырымды сағып алғайны, яһиллашып. Тапайҙар, йолҡалар, әрләйҙәр ул кесерткәнде, ә барыбер, яҙ һайын баш ҡалҡыта, сөнки тамыры шунда... Кәбир, ултырып сыҙаймы инде, бүрәнә тирәһендә туктауһыҙ йөрөп тора – Кәйҙеремлеген ташламаған. Ҡыҫҡа еңле аҡ футболка кейгән, ҡояшта янған беләктәренән көс-ҡеүәт бәреп тора, гүйә. Ихтыяр ҡуйһам, шул беләктәр мине ҡаҙ мамығындай еп-еңел итеп күтәреп алыр ине?! Тәнемдән эҫеле-һыуыҡлы зымбыр үтеп китте. Әллә ҡайҙан бәйләнде миңә ошо осор шул халәт?

Кәбир, түҙмәй, ҡаршыма атланы, етәкләргә ынтылды. Ток һуҡҡандай, ҡулымды ҡапыл тартып алдым. Ошонда беҙ әҙ йөрөнөкмө етәкләшеп, хыялдарыбыҙҙы уртаҡлашып?! Бала саҡта, үҫмер саҡта...

Бүрәнәгә барып ултырҙыҡ. Шыма, үҙе йылы ул, һыйпап ҡараһаң,– өләсәйемдең усы кеүек. Эйе, нимә хаҡында уйлаһам уйлайым, тик хәҙер буласаҡ һөйләшеүҙе башыма индермәҫкә ҡарышам.

– Ун беренсене бөткәс барып булмай инеме ни училищеға?– тип һораным Кәбирҙән, унан ишетәсәк һөйөү һүҙҙәрен кире ҡағыр өсөн сәбәп эҙләүем үҙемсә,– йә туғыҙҙан һуң китер инең. Понимаешь, Искәндәр әйтмешләй, – ни алтары, ни палтары...

Кәбир ул ҡылығын ентекләп аңлатты. Бөркөтсөләр тураһында яҙырға килгән Өфө журналисы уның йәштәр ижады конкурсында еңгән бер нисә һүрәтен бик абруйлы рәссамға күрһәткән дә, уныһы училище директорына шылтыратҡан, яңы талант астым, тип. Икәүләп кәңәшләшеп, РОНО аша юллап, Кәбирҙе уҡырға саҡырғандар. Икенсе курсҡа алғандар, тәүге йыл училищела һөнәри дәрестәр күп түгел икән, ә мотлаҡ кәрәк темаларҙы айырым уҡытҡандар, дәрестән һуң ҡалдырып. (Тимәк, Кәбирҙең киләсәгенә унда айырым өмөт бағлайҙар?)

– Ыласынды осормаҫ элек үк булған хәл икән... Фотоларығыҙ өлкә гәзитендә баҫылғайны.

– Баштуҡ һиңә әйтергә торҙом да, алдан ҡыҫҡырмайым, тип кире уйланым. Саҡырыу килгәс ни атайым да дәртләнеп китте, нәҫелдән, исмаһам, берәү уҡыһын, тигәндер. Бүреһуҡҡан бабай фатиха бирҙе. Ә һин, нисәмә уҡталдым аңлатырға, тыңламаның да ҡуйҙың, үпкәләнең...

– Бирәм тигән ҡолона – сығарып ҡуйыр юлына, ти ҡартәсәйем. Һиңә лә Хоҙай үҙе юл асҡан, Кәбир, шул форсатты кире ҡаҡһаң, гонаһ булыр ине.

– Нурия, нимә һин йөҙ йәшлек ҡарсыҡ кеүек һөйләнәһең, юрамалмы? Мине, хыялый малай, тимәксеһеңме?

– Хыялый түгел, ә хыяллы! – Бүреһуҡҡан олатай шулай тигәйне һинең картиналарыңды тәү күргән көндө.

– Күрҙеңме ни? Өндәшмәнеңсе.

– Кәбир, мин шунда уҡ һинең һәләтеңде самалағайным. Ысын сәнғәтте наҙан да танырҙыр. Үҙемә күрә зауығым да барҙыр, моғайын, Әмин абый алдырған журналдарҙы алып тороп уҡыйым,ҡарайым – унда бөтә донъя художниктары тураһында ла яҙалар, Лувр, Эрмитаж музейҙарында, Третьяков галереяһында ҡуйылған картиналарҙың репродукцияларын баҫалар.

– Эйе, Париж, Ленинград, Мәскәү... – Кәбир тәьҫоратҡа бирелеп, ҡарашын алыҫҡа, тонйорап ҡояш байып барған офоҡҡа төбәне. Ә мин уның күҙҙәрендә шул

серле офоҡтарҙың һүрәтен күрҙем. Йыраҡта-йыраҡта ине дуҫымдың хыялдары, был минутта ул мине оноткайны, Толпарлы сиктәренән ашып, серле ижад күгендә талпына ине уның күңел ҡанаттары.

Раббым, әлдә төшөндөрҙөң Кәбирҙең хәсиәтен, әлдә күрһәттең миңә уның офоҡтарын! Юғиһә ҡанаттарына таш булып тағылыуым да ихтимал ине. Ул мине ярата, йөрәгем менән тоям. Тик... Үҙемдең шәхсән бурыстарымдың әлегә ошо ауылға, хатта ки Әнкәләр осондағы ошо бүрәнәгә (игеҙәктәр уйнай хәҙер бында) бәйләнгәнен дә ап-асыҡ аңлайым. Ә Кәбир? Осһон ул, осһон минең бөркөтөм!

– Һин – иркле, ос! – тип ҡысҡырып әйтеп торам, имеш, уйымдағын. Ҡулдарымды күккә һуҙғанмын, әйтерһең дә, ситлектәге ҡыйғыр ҡошто юғарыға сөйгәнмен.

– Һөйөүемде кире ҡаҡма, Нурия! – тине Кәбир, йөрәкһенеп, – ысын мөхәббәт ғүмергә бер генә осрай.

– Беләм, миңә бирәү генә татый уны,– тинем дә ниңәлер өҫтәп ҡуйҙым:– Ҡартәсәйем әйтә. – Ниңәлер, тиеп танмайым әле, аңлы рәүештә, махсус өҫтәнем, сөнки Зирәк Рәйхананың фиҙакәр рухына таяныу миңә әлеге минутта ифрат та кәрәк ине.

– Беҙ шул миңә бирәүҙәр рәтендә, тоймайһыңмы ни?.. Тояһың! Һин бит минең тиңем, хисле, фантазиялы ишем! – Кәбирҙең дөп-дөрөҫ әйткәнен белһәм дә, үҙ уйҙарымды үҙем кино итеп күҙаллап, хәтер сәсмәүерендә ҡиссалар үреп йөрөһәм дә, "эйе" тимәнем. Ә ул һаман ныҡышты, бөгөн һәм аныҡ яуап кәрәк уға:

– Әйт, Нурия, хат яҙырһыңмы?

– Хат? Яҙырмын, бәс...

– Мөхәббәт хаттары?!

– Бала саҡтан бергә үҫкән дуҫымамы?

– Үтте бит бала саҡ, Нурия, ас күҙеңде, йәшлек килде, һөйөү килде!

– Ә миңә килмәне!

Уф, ҡотолдом артабан яуап биреүҙән. Ниндәй ауыр икән ул алдашыу, күрәләтә тәүге хистәреңдән баш тартыу?! Ә мин шулай хәл иттем. Күңелемдәге үлсәүҙәрҙә алдан уҡ үлсәп ҡуйғайным инде барыһын да...

– Һин үҙеңде генә яратаһың! – Кәбир минең хаҡта шулай уйлай икән? Бәлки, беҙ икебеҙ ҙә, теге ғалим фараз иткәнсә, "беренсе мөхәббәт ҡыҙылсаһы" менән генә сирлелер? Үтер-китер... Йәшәй-йәшәй, асыҡланыр әле барыһы ла. Ә хәҙер бәғерҙе өҙгән ғазаплы әрнеүгә түҙергә генә кәрәк.

Ғәжәп итәм: шулай ныҡышырға ҡайҙан алған был Кәбир сабырлыҡты, ул бит күптән өҙә һуғып боролоп ҡайтып китергә тейеш, мин белгән Кәйҙерем булһа. Бүрәнәнән, эйе, ут ҡапҡандай үрһәләнеп, күптән һикереп торҙо, әммә сигенмәй, һаман дәғүәләшә:

– Сабирҙы һайланыңмы?

– Нишләп?

– Ул да һиңә ғашиҡ. Фатих та...

– Сабир уҡыған ерендә тапҡан мөхәббәтен, үҙе әйтте,– тинем дә, шулай аҡланып тороуыма асыуым килепме, өҫтәп ҡуйҙым: – Һөйөү, мөхәббәт, ғишыҡ – ул өсәүҙе кем күргән?!

– Мин күрҙем, һөйөүем дә, мөхәббәтем дә, ғишҡым да – һин, Нурия!

Шулай тине лә Кәбир, көтмәгәндә, мине ҡыҫып ҡосаҡлап алды. Йөрәге дөп-

дөп тибә, тәне көсөргәнгән әллә нисек – саҡ ҡотолдом был ҡоршауҙан. Барыбер һаман иңдәремдән тотоп тора егет, йотлоғоп күҙемә баҡҡан үҙе. Бер мәлгә генә Кәбиргә һыйынғым, уны күҙ нурҙарыма ҡойондорғом килде. Тир бәреп сыҡҡан маңлайына усымды ҡуяһы, тулҡынлы ҡара сәстәренән һыйпап йыуатаһы ине: абау, әллә миндә уға ҡарата әсәлек тойғоһо ла бармы?!

Күпме генә үҙемде бала-саға кеүек ҡыланмаҫҡа тип ныҡытып килһәм дә, һынаттым шул: ҡапыл Фариза еңгәмдәр яғына йүгереп киттем дә барҙым. Кәбир бер-ике аҙым атланы ла туҡтап ҡалды, ҡулымдан тотоп өлгөргәйне лә, йомшаҡ ҡына итеп ысҡындырҙы...

Иртәгәһенә таң һарыһынан, көтөү ҡуҙғалмаҫ борон уҡ, уяндым да күтәрмәгә сығып баҫтым. Кисә кистән башыма, йөрәгемә уралған уй-хистәр шул көйөнсә генә ойошоп урынында ята. Был минутта минең кеүек тә болоҡһоған әҙәм юҡтыр. Бар икән, ана ул, Ҡарауылтау үрендәге таш һикәлтәлә баҫып тора – Кәбир!

Тағы ике аҙна уны көн дә шул һикәлтәлә күрҙем. Тиккә йөрөмәй, беләм, һүрәт төшөрә. Хатта шаулап ямғыр яуғанда ла! Баш осона кескәй генә лапаҫ ишараты ҡороп ҡуйған да туҡтамай эшләй. Бәлки, ямғыр һүрәтен дә төшөрәлер? Ә бер көндө, эре күҙле ҡыя ямғыр ҡойғанда, иҫ киткес киң, сағыу йәйғор дуғаһы Кәбир баҫып торған яҡтан һуҙылып минең аяҡ остарыма килеп терәлде. Шул күперҙән йүгереп барырҙай булдым янына! Тулҡын-тулҡын булып яурынына төшә яҙып торған бөҙрәләре күҙ алдыма килеп тик торҙо. Элек, гел ҡыҫҡартып-киҫтереп торғанғалыр, ул бөҙрәләр күҙгә салынмаған. Ә хәҙер – иҫтән сыҡмай йөҙәтәләр.

Таңдарҙан бер таңды Ҡарауылдың һикәлтәһендә таныш һынды шәйләмәнем... Яңағымдан йымырлап тәгәрләгән күҙ йәштәремде һөртмәнем дә – ҡайнарлығы менән өтөп, әсе тоҙо менән әрнетеп язалаһын мине улар!

20

Бер көндө, кеше күҙенән йәшеренеп кенә, ҡара күҙле остоҡай ҡыҙсыҡ менән алты малай ҡасандыр сорлауыҡ уйнаған әрәмәлеккә барып әйләндем. Дегәнәк араһына боҫоп ултырҙым да, шым ғына сорлап ҡараным хатта. Үҙемде шаян, телдәр кескәй ҡыҙыҡаймын тип алдарға иткәйнем дә, оялдым тура һүҙле бәләкәс Нуриянан: ул ошолай ебеп төшөр инеме?!

Мине генә көтөп торғандай, Күрәнле бөгөлөндә мөншөгөр өңкөлдәп үкереп ҡуйҙы. Ошолай күҙ көйөгө булып ултырыуым былдағы тереклеккә ҡамасаулай, өркөтә, әлбиттә. Ҡайтырға ҡуҙғалдым. Хәл иткес аҙым эшләргә йыйынғандай, тәрән итеп тын алдым. Һаҙанаҡ сәскә атҡандыр, әскелтем хуш еҫе әллә ҡайҙан, Толпарсыҡҡан яғынан, килеп танауға бәрелде. Ә бында өйкөм генә ҡыҙыл бәшмәк үҫкән, элек күҙгә салынмай инесе. Юл ыңғайы, мәҙәк өсөн, шул бәшмәктәрҙең эшләпәһенә йыйылған ямғыр һыуын усыма алып, түгеп-түгеп киттем. Күҙҙәрем иһә, иләҫләнеп китеп, бала саҡ эҙҙәрен эҙләне,әммә тапманы...

Әрәмәлектән туп-тура Әмин абыйға юл тоттом. Мәүлиҙә тураһында һорашып ҡуйыр тип, уның күҙенә салынмаҫҡа тырышҡайным быҒаса. Кәңәш кәрәк миңә, бәлки, арыу ғына итеп әрләп тә алыр – тик ярҙам ғына итһен әлеге бошонҡо халәтемдән арынырға.

– Эш таптым һиңә, Нурия, тап һин эшләй торғанды таптым! – Әмин абый шулай тип ҡаршы алды. – Ситтән тороп уҡырға булғанһың икән?

– Бәс, абый, ниндәйерәк эш ул?

– Пионервожатый апайың декретта, алмаштырып торорһоң. Артабан күҙ күрер. Китапханасы ҡатынҡай ҙа кейәүгә сығырға йөрөй, тегенеһе килеүгә, быныһы китер оҙайлы отпускыға, бисә-сәсә күп булған коллективта шул инде... Уңарсы уҡып та бөтөрһөң институтыңды. Ризаһыңмы?

– Әлбиттә, абый, рәхмәт инде.

– Бара һал директорға, мин уның ҡолағына төшөрөп ҡуйҙым, көтөр. РОНО-ға хәбәр итеп,тарификацияға инеп ҡалырға кәрәк. Бәпесләмәҫ элек пионервожатый апайың да арлы-бирле эш тәртибен өйрәтеп өлгөрһөн, бүлмәһенән асҡысты бирһен. Асҡыс тигәндәй, унда ваҡ-төйәк әйбер күп кенә ул, борғо, барабан-фәләндәр, күҙҙән һанап ал, ҡултамға менән актлап, йәме.

– Уныһын әлдә әйттең, абый.

Хоҙайҙың һөйгән һөйәгемен улай ҙа! Была нисек ыңғай хәл ителде яҙмышым. Сөгөлдөргә барырмынмы, тип эстән ҡалтырап йөрөй инем. Миңә бит уҡырға кәрәк, әлегә бер ысвикла бисәһенең дә контроль эштәр эшләп, ҡалаға имтихандарға барып йөрөгәнен күргән юҡ. Хәйер, мин беренсе булыр инем, барыбер уҡымай ҡалмаҫҡа үҙемә һүҙ биргәнмен дәһә.

– Ә, Нурия, ни бит әле... – Әмин абый, нимәнелер әйтергә икеләнеп ҡалһа, елкәһен тырнай башлай, ҡолағын ыуалай – ғәҙәтен беләм, әле лә шулай итә.

– Абый, әйт тә ҡуй,– тинем ахырҙа.

– Эйе шул... Нурия, һин хәҙер балалар тәрбиәсеһе булып китәсәкһең, иҫеңдә тот...

– Әйтеп бөтөр, абый?

– Совет мәктәбендә Аллаһы Тәғәләне телеңә алма, эсеңдә генә тот. Рәйхана апай үҙенең ейәнсәренә дин тәғлимәтен һеңдермәй ҡалмағандыр, әммә уҡыусылар араһында – ләм-мим! Атеистар үҫтерәбеҙ бит, эттәгенәһе. (Гуля-Гөлсөмдөң Сәмиғуллинға татарса әйткән берҙән-бер һүҙе ауылдың теленә ингән.)

– Аңлайым... Ярар, ҡолағыма кирттем.

Әлдә әхирәтем хаҡында һүҙ сыҡманы, тиһәм, абый үҙе башланы: «Мәүлиҙәнән хат килде,– ти,– Өфөлә документын алмағандар, пландары тулған икән. Бигерәк тә медалистар күп, имеш. Бер ҡыҙ менән Донецкиға сыҡҡандар ҙа киткәндәр, шунда тапшырасаҡтар имтиханды. Шау русса һөйләргә бит инде. Керә алыр микән? Һиңә әйтеп киткән дәһә, институтҡа инмәй ҡайтмайым, Мәскәүгә барып етһәм етәм, тип?»

– Мәүлиҙә керә алмаған институт була, тиме, – тип тәтелдәп алып киттем, һуңғы һөйләменән тиҙерәк албырғатыр өсөн,– тотош Украинаны шаҡ ҡатырасаҡ әле әхирәтем, нимә улар, кукуруз баштар... – Абыйҙың һынап ҡарап тороуын һиҙеп, шып туҡтаным да тая һалдым янынан.

Харис менән Фатих мединститутҡа инә алмай ҡайттылар. Әллә ни эстәре бошмаған һымаҡ, армиянан һуң беҙгә конкурс булмай, уҡырбыҙ әле, тиҙәр. Көҙгө призывта китерҙәр инде. Әшрәф һалдатҡа алынмай, унда «плоскостопие» тапҡандар. Комиссиянан ҡайтҡас, егеттәр уны үҙ-ара «яҫы табан» тип үсекләп йөрөнө, ахырҙа тынысландылар. Атлауында бар шул бер ғиллә, аяҡтарын ҡалтағай кейгән кеүегерәк йөрөтә. Әсмәне оҙата барырға теләгән икән бер мәл, уныһы: «Айыусы урманында һинән башҡа ла алпан-толпан тайыш табандар туп-тулы» – тип биҙҙергән. Әй, Әшрәфкә был ғына кәмселектең (сир түгел дәһә) бер зыяны ла юҡ, ана, тракторын да, комбайнын да зыйлатып йөрөтә. Кәбир ҙә армиянан ҡала икән быйылға, уҡыған еренән юллағандар, училищены тамамлаһын тип. Харистар уны

барып күргән: уҡыу башланмаҫ элек үк саҡырып алып, бер остазы шәхсән уның менән оҫтаханала шөғөлләнә, ти. «Егеттәр, һеҙҙең дә Кәбир һымаҡ маһирлығығыҙ юҡмы?”– тип һораған шул остаз. Рәссамдарҙы беҙҙә сәсеп үҫтерәләрҙер шул... Әхиәрҙән әлегә хәбәр юҡ, эштән башы сыҡмайҙыр ул төҙөүсенең. Аҡназар ағайға, Ҡырластауҙан таш ташытып ҡуйһағыҙ, отпускыға ҡайтҡан арала берәй келәт һалып бирәм колхозға, тимер тешле сысҡан да тишеп инә алмаҫлыҡты, тип хат яҙғанын ишеттек, шул хәбәр түгелме ни? Сабирға повесткаһы, училищеһын тамамлағас ебәрерҙәр, моғайын.

Ә Харис менән Фатихтың химиянан имтиханды насар биреүҙәре ғәжәп тә түгел. Беҙҙе был фәндән уҡытҡан абый хаҡында, дипломды һатып алған, тигән имеш-мимештәр йөрөп алды. Егеттәребеҙ конкурсҡа ла барып етмәҫ, тип һиҙенгәйнем дә. Хәйер һиҙемдең бында ҡыҫылышы юҡтыр – логикалыр. Әлеге Әмин абый Мәүлиҙә менән мине логик фекерләргә өйрәтеп бер булды, бына – һөҙөмтә, ҡайһы бер хәлдәрҙе ап-аныҡ төҫмөрләйем дә ҡуям. Мәүлиҙәлә иһә – логиканың логикаһы, һәр нәмәне нигеҙләп, иҫбатлап ҡуя. Барыбер, Олексий-Алешаға шулай мөкиббән ышаныуының логикаһын күрмәйем – саҡ-саҡ ҡына танышлыҡтары бар, шуны мөхәббәт ти бит әхирәтем. Әллә мин ул хисте аҡыл үлсәүҙәренә һалып, уңын да, тиҫкәреһен дә тикшереп ҡарағым килеп, яңылышамдыр?

* * *

Август уртаһында мәктәпкә эшкә сыҡтым. Шул арала Мәүлиҙәнән өйҙәренә ”Уҡырға индем, дөйөм ятаҡта урын бирәләр”, тип телеграмма килде. Аҙна тигәндә миңә лә хаты килеп төштө. Өс табаҡ дәфтәр битен тултырғансы яҙған. Ике табағы – Олексийҙың бөҙрә сәстәре, үҙенең “коханна” булыуы хаҡында. Армия хеҙмәтен тултырғас, егет техникумға ингән, шахтала инженер-техник буласаҡ икән. Әхирәтемдең хатын мендәр аҫтына һалып йоҡланым. Әллә шуға шат йөҙлө студенттар Күрәнленең арғы ярында миңә ҡул болғайҙар, ҡағыҙ күгәрсен осоралар, имеш, тип төш күрҙем. Студент тормошон минең ситтән генә, башҡа ярҙа баҫып күҙәтеремә, хыялдарымдың, ҡағыҙ ҡоштар кеүек, алыҫҡа оса алмаҫына ишарамы?

Мәктәптә был осорҙа эш күп түгел, төштән һуң – өйҙәмен. Бер арала өләсәйемде хәтер урманында гиҙҙереп алдым. Толпарлы Әдисәйе хаҡында күңелемдә яҙыла ятҡан бәйәнгә мәғлүмәт йыйнәүем инде һаман да.

– Сөкөрҙәшәйек, тиһеңме? Боронғоно юллатырға итәһеңдер, һинең шул булыр. Йә һуң, һораша башла, әләйһәң, – тип ихлас ҡына ризалашты ул.

– Әйҙә, анау эскәмйәгә барып ултырайыҡ та...

– Семетә баҫып йөрөүҙәре һаман күҙ алдында ғына әле ул килендең, – тип тағатып ебәрҙе хәтер йомғағын өләсәйем, Татар әбекәй хаҡында ҡыҙыҡһыныуымды белгәс тә. Әлбиттә, уның йомғағына үҙенең яҙмышы ла уралған, бергә һүтелә, шуға ла мин яңы мәғлүмәтте генә һөҙөп ултырам. Бына әле лә өләсәйем: – Зәйнуллам тыуған йыл ине… – тигәс тә: ”Әдисәй бабаҡай алыҫ яҡтан кәләш етәкләп ҡайтҡан”, – тиеберәк фекерен һаплап ҡуйҙым. – Ы-ы шул, матрос булып хеҙмәт иткән еренән. Тилнәшкә кейгәйне…Әй…Ул замандарҙа кейем юҡ, аслыҡ тырнағынан саҡ йолоноп тора инек, шул тилнәшкәһенән сыҡманы ул Әдисәй ҡәйнеш.

– Ҡәйнеш, тисе? Әй, өләсәй, һиңә был ауылда үҙеңдән йәшерәк бөтә ир-ат ҡәйнеш инде, бабайыңдың нәҫеле ләһә, ҡайҙа ҡарама.

– Бәс, Толпарлыла лаһа хәҙер минең тоҡомом, тамырым ошонда... Мына һин,

һапам... – Тик торғандан тамаҡ ҡырып алдым. Өләсәйем һүҙен кәрәкле яҡҡа борҙо: – Әдисәйҙең атаһы япон һуғышында һәләк булғайны, мин килен булып төшкәйнем инде, шуңа беләм. Ҙур ауылдың ни, байтаҡ ятугиры әйләнеп ҡайтманы, ҡайтҡандары – йә аяҡһыҙ, йә ҡулһыҙ. Японнар аяуһыҙ туп атҡаннар, ти бит...

– «Порт-Артур» тигән йыр бар ҙаһа,– тип ҡушылдым өләсәйемә һәм көйләмәй генә ҡабатлап ҡуйҙым, иҫтә булғанын: “Порт-Артур тигән таш ҡала, күп ҡалаға баш ҡала... Японлар туп аталар, ҡайһы аяҡһыҙ, ҡайһы ҡулһыҙ тилмерешеп яталар...” Шунан, был тирәһен һөйләп торма, уларын беләм, тигәнде аңлатырға була, әйтә һалдым: – Анау килен ағасы икән Татар әбекәйҙең берҙән-бер бирнәһе.

– Бар инесе бирнәһе... Теген машинкаһы һуң? Ул саҡта ауылда юҡ ине әле ундай әйбер. Ситтән төшкәнде кәпкәкләргә тиһәң...

Артабан тәгәрләне йомғаҡ. Етмеш нисә йыл буйына йомарланған хәтер-ядлауҙары лаһа, ниндәй генә ҡыҙыҡтар, хәсрәттәр, аянныслы хәлдәр – ғәмәлдә тормош фәһемдәре уралмаған уға! Йомғаҡ йор ғына тәгәрләй ҙә әҙгә генә туҡтап ҡала, шул арауыҡта мин һүтелгән тарихты күҙаллайым.

...Әдисәй бабаҡайҙың диңгеҙ кисеп ҡайтыуын әсәһе лә көтөп ала алмаған икән, бисара, йот осоронда вафат булып ҡуйған. Ҡарауһыҙ тороп сүгә, ҡыйшая башлаған өйҙөң тәҙрәһенә арҡыс-торҡос ҡағылған таҡталарҙы һурып алып, әҙәм буйы булып үҫкән кесерткәнде сабып, эскә инә йәштәр. Килен тупһа аша атлағанда уға мендәр һалып, ауыҙына бал да май ҡаптырып теләк теләп тороусы ла булмай. Берҙән, хәбәрһеҙ килеп төшкәндәр, икенсенән, кешеләр ауыр йылдар эҙемтәһенән саҡ баш күтәреп тора...

– Тиҙүк терәкләнеп киттеләр,– тип дауам итә өләсәйем. Минең уйҙы тотоп ала ҡай саҡ шулай. – Әдисәй балта эшенә оҫтарған икән әрмис хеҙмәтендә, әй шул матрослығында, ә Таһура килен тегенселеге менән аҡса эшләне. Аҡсаһынан бигерәк, быларға нәҫелгә ҡош-ҡортмо, һарыҡ бәрәсеме бирәләр инте, һауыт-һабамы, – ҡыҫҡаһы, донъя кәрәге. Әдисәй яңы йорт һалырға тотонғас, тотош ауыл ярҙам итте: киленгә көнө төшмәгән кеше юҡ таһа! Ана шул машинкаһы һаман бар, гел тегенеп ултырып, бөксәйҙе ахырҙа. Күңел йыуанысы лаһа, аҡса ла бик алмай, тиҙәр... Әдисәйеме? – Өләсәйем минең күҙемдәге һорауҙы уҡып тора. –Татыу булды улар, көпә-көнтөҙ етәкләшеп йөрөрҙәр ине... Төрттөрөүсе табыла инде лә, кеше һүҙенә төшә торған ир Әдисәй түгел. Минең бабайым менән харап дуҫ булдылар, береһе – балыҡсы, икенсеһе – форсат сыҡҡан һайын һыу буйында. Диңгеҙҙе һағынам, тиер булған. Һыу алып китте лә уны...

– Күрәнлеме?

– Күрәнле. Әүәле киң, үҙе тәрән ине ул, боҙ киткәндә хәтәр ҡурҡыныс була торғайны... Яҙ мәлендә ташыулап, хәҙер ҙә ғәйрәтен ыраҫлап алғылай ҙаһа.

Эйе, ғәйрәтле ул Күрәнле. Әйтәгүр... Күптән түгел күҙ алдымда булған хикмәтле хәл ҡайтанан тетрәндерҙе: үрәпсеп ағып киткән боҙ шаҡмаҡтары, килен ағасының нәни ботағы, Татар әбекәйҙең: ”Әдисәй, жаным!”– тип өҙгәләнеүҙәре ҡабаттан иҫемә төштө. Шул тәьҫоратҡа бауланып, өләсәйемдең бәйән иткәндәре мине үҙ артынан эйәртеп алып китте.

...Күрәнле ярында халыҡ геүләшә, боҙ китеүен тамаша ҡылырға йыйынғандар.Тора-бара кешеләр шымып ҡалды: һәр кем тәбиғәт ҡөҙрәте алдында үҙен көсһеҙ, кескәй йән эйәһе итеп тойоп алдымы, аҡтарылған боҙҙарға, улар менән ағып киткән сүп-сарға ҡарап уҙған ғүмере хаҡында уйландымы, шул сүп-сар

кеүек һыуға ағып китһен ине бар хәсрәт, бар үкенесле ҡылыҡтар, тип юранымы – бер Хоҙай белә.

Шул мәл кемдеңдер әсе тауышы һауа ярҙы:

– Ҡотҡарығыҙ! Бата!.. Улым!..

Ярҙағы төркөмдән айырылып сығып, йылға ағышы ыңғайына бер ҡатын йүгерә. Башынан сисеп алып шәлен болғай, һаман ҡысҡыра, һаман йүгерә. Бына ул ҡапыл ярҙан йүгереп төшә башланы. Уны бер ир ҡыуып етеп туҡтатты, үҙе, күҙен сағыу ҡояштан кәртәләптер, ҡулын маңлайына ҡуйып, йылғала айҡашҡан боҙҙарҙы байҡап алды: ана ул тыңлауһыҙ шуҡ малай, ҡото осҡандыр, өнөн дә сығармай боҙ шаҡмағында йөҙөп килә. Тап шул тирәлә боҙҙар тығылышты, инде бер береһен вата-емерә алға ырғылалар, ирек даулайҙар. Малай баҫып торған яҫы ғына боҙ шартлап уртаға сатнаны. Теге ҡатын тағы һөрән һалды, тағы һауа ярылды... Ярҙағы халыҡ Күрәнленең ҡырыҫлығын белә, уның менән алышырға йөрьәт итеүсе бик юҡ. Уф, улай ҙа табылды берәү! Баяғы ир, көпөһөн һалып ҡатынға тотторҙо ла иң ситкә килеп терәлгән боҙға һикерҙе. Тельняшка кейгән, кем булһын – Әдисәй матрос. Халыҡ тын да алмай күҙәтә: бына ул урта төштә һөҙөшкән боҙ шаҡмаҡтарына барып етте, ниһайәт, иҫенә килеп шайылдап илап ебәргән малайҙы ҡултығына ҡыҫтырып күтәреп алды ла, боҙҙан боҙға һикерә-атлай, кирегә йүнәлде. Бына-бына ярға килеп етәсәк, бына-бына ҡаҡ ергә... Тик... Көтмәгәндә аҫтан урғылып һыу бағанаһы күтәрелде, аяҡ терәгән боҙҙары түңкәрелде лә, быларҙы батырып, өҫтән ҡапланы ҡуйҙы. Тағы ҡысҡырҙы теге ҡатын. Тағы шаңҡыны һауа... Шул минутта боҙҙар араһынан малайҙы өҫкә күтәргән ике ҡул күренде лә, ярабби, яр яғына киҫкен һелтәнде, биленән йылға ситендәге һыуға кереп баҫҡан әсәһе малайҙы эләктереп өлгөрҙө...

– Ана шул малай ҙаһа әле Саҡмайылғала йәшәгән Сәғәҙәт, Фариза килендең әхирәте Хәтимәнең ире, тим. Ерле юҡҡамы ни, Татар киленгә ярҙам итә, һаман һыйырынан яҙҙырмай, бесәнде урамына килтереп өйөп ҡуя. Улынан күрмәй бәғзеләр ундай игелекте. Шунда ныҡ ҡурҡыуынандыр, ул бала ара-тирә бите тартышып, күҙен сылт-сылт йомор булып ҡалды, әрмегә алынманы.

– Әдисәй бабаҡай шулай һәләк булған икән... – тинем, мине бөгөнгөгә ҡайтарып баҫтырған был һүҙҙәрҙе ҡапылда башҡаса ялғап алып китә алманым.

– Яҙмыштан уҙмыш юҡ. – Өләсәйем ауыр һулап ҡуйҙы: – Диңгеҙ кискән, батша ғәлийәнәптәрен ҡолатҡан, яу утында янмай, даръя һыуында батмай, тыуған иленә ҡайтҡан, ә Күрәнленең боҙо алып китте. Кәүҙәһен бер бөгөлөндә ярға сығарып һалған йылға, тәүҙә тилнәшкәһе табылған – тал ботағына эләгеп тора, ти, һыпырылып ҡалған инде. Исмаһам, балалары булманы, байтаҡ ҡына йәшәнеләр ҙәһә?.. – Өләсәйем арып китте, күрәһең, ошонда туҡтаны. Күп һорауҙарым һауала эленеп ҡалһа ла, ҡуйып торҙом. Әллә ни кәрәге булмаһа ла, көйәнтә аҫып Күрәнлегә һыуға киттем. Ярҙан юрғалап аҫҡа төшәм дә йылғаның уртаһына тиклем кисеп, көйәнтәмдән туғармай ғына һирпеп таҙа һыу алам ғәҙәттә, шунан, Гөлбикә апай өйрәткәнсә, осаларымды һәлмәк кенә бәүелдереп юрғалайым. Бөгөн дә шулай итермен, әлбиттә. Әлегә ярҙа туҡталып баҫып торам, Күрәнленең йор тулҡындарына ҡарап Әдисәй бабаҡайҙың яҙмышын – белгән хәтлемен – ҡайтанан күҙаллайым, белмәгәнен фаразлайым һәм күңелемдә һоҡланғыс та, тетрәндергес тә ҡисса үрелә башлағанын һиҙемләп тулҡынланам. Татар әбекәйҙең Ҡырымға ҡайтып китмәүе ғәжәпләндерә, унда туғанырыуы ҡалған даһа?.. Эйе, асыҡлайһы әйберҙәр бар был тәңгәлдә. Үҙемде тағы теге ваҡыттағы, Зөлхизә ҡиссаһын ижад иткәндәге кеүек, оя ҡорорға йыйынған ҡош халәтендә тойҙом: суҡышыма йәнә ниндәй йүрмә эләгер?

21

Әсәйем Таллыға күскәне бирле ҡартәсәйемә һирәгерәк бара башланым. Һыуҙы уға Биксәнәйҙән хәҙер Камила ташый, кәзәһен Камил көтөшә. Игеҙәктәр әсәйемдең яңы ғаиләһендә ҡунаҡта саҡта көн дә инеп сығам, әлбиттә. Бына бөгөн дә… Солан ишеген астым да туҡтап ҡалдым: тыуған тупһам, атай тупһаһы! Ҡартәсәйем тауыш биргәнсе тип, йылт ҡына кәбәркәгә индем, теге «Казбек» ҡумтаһын табып, ҡулыма алдым. Йөрәкһенеп ҡапҡасын астым, хатта әҙгә генә күҙемде йомоп торҙом, әйтерһең, унда затлы аҫылташтар ята һәм улар, ҡапыл ялтлап, күҙ ҡоросомдо сағылдырасаҡ. Башта бармаҡтарым менән һыйпаным: наҙлы, йомшаҡ – әкиәти Шаһимаран булып хыялымды биләгән аҡ таҫмам даһа! Шунан, һағындырған, атайымды тәү тапҡыр күргән көнөмдөң бер төҫмөрө булып ҡалған еҫтең нығыраҡ аңҡыуын көҫәп, ҡумтаны танауыма уҡ терәнем, ләкин ул шәйләнмәне – осоп юҡҡа сыҡҡандыр. Ҡомартҡы ҡумтам да бына-бына иҙрәп саңға әйләнер… Былай ҙа ун ике йыл түҙә – ун ике көн түгел дәһә!

Атайым тураһындағы уйҙарым, һағыштарым ғына туҙмай, киреһенсә – яңыра ғына. Һәм үҙгәрә… Бала саҡтағыса уҡ әрнеүле түгел улар, ә күңелемдә түкмәй-сәсмәй яҙылып барған хәтер дәфтәренең асылмышы, уҡылмышы, гүйә. Әммә, баҫылһа ла, сабый йөрәгемдең өҙгәләнеүҙәре эҙһеҙ юғалмаған, улар үҙ аҡылым юллаған фәлсәфәгә, тормош һабаҡтарына әүерелә бара. Атайым менән әсәйемдең, ғәмәлдә һәр ҡайһыһы матур, мөхәббәтле, бәхеткә лайыҡ ғәзиз кешеләремдең, яҙмышын ҡабатламаҫ өсөн мин ошо һабаҡтарҙы онотмаҫҡа тейешмен. Бурыслымын! Балаларымды атай тупһаһында, атай йортонда, атай икмәге ашатып үҫтерәсәкмен! (Әсәй тапҡан икмәктең ниндәй әсе икәнен беләм дәһә, сөнки уға күҙ йәштәре, нахаҡ һүҙ үте, йоҡоһоҙ төндәр зары ҡушылған…) Ә быны өсөн миңә атайым кеүек ситкә сителәсәк кешегә ғашиҡ булырға ярамай. Киләсәгемдең ҡапҡаларына ошо һабаҡтарҙы ҙур хәрефтәр менән яҙып ҡуйҙым мин, эстән генә үҙемә үҙем ант бирҙем. Һәм ошо антымды боҙҙорорға һәләтле иң етди ҡаршылыҡты еңдем: Кәбирҙең мөхәббәтен кире ҡаҡтым. Минме аңламайым уның юлы ҡайҙарҙа ятҡанын – ижад мөхитендә, дан мөхитендә. Ул да, атайым һымаҡ, "Мин ҡала тормошо өсөн тыуғанмын, ауылда миңә иш юҡ" тип әйтәсәк бер мәлде. Кәрәкме миңә әсәйем кисергән хәсрәттәр аша үтеү? Кәрәкмәй! Теләйемме ғәзиз баламдың атайлы – арҡалыларға ҡарап ынйыуҙарын? Теләмәйем! Тимәк, дөрөҫ хәл иттем, дөрөҫ систем К+Н = ? тигән мәсьәләне: К+Н = тиң түгел! Юҡ, барыбер икеләнәмсе, "тиң түгел"де һыҙып ырғытып, һорау билдәһен әлегә, бәлки, ҡалдырып торорға кәрәктер?

Ишек шығырланы, ҡартәсәйем, көтөп көтөк булған да өйҙән сығып килә. Уға ҡаршы атылып барҙым да битемде түшенә терәнем, бәләкәй саҡтағылай. Тик хәҙер, башым тап уның күкрәк тәңгәленә тура килһен өсөн, миңә ныҡ ҡына бөгөлөргә кәрәк, ҡартәсәйем күпкә тәпәшәгерәк.

– Күңелең үҙгәләнгән, ҡолоҡасым? – тине ҡартәсәйем, тын алышымдан һиҙеп торалыр.

– Ҡартәсәй, мин үҙемде яратҡан, ғаиләһе хаҡына бар нәмәнән баш тартырға һәләтле кешегә генә кейәүгә сығасаҡмын! – Уға шау дөрөҫөн һөйләп өйрәнгәнмен бәләкәйҙән, әле лә нисәмә көн мейемдә уралған ҡарарымды әйттем дә һалдым.

– Кейәүгә?! – Ҡартәсәйем сайҡалып китте, шулай тетрәнде.

– Әлүк түгел дәһә, берәй ваҡыт...

– Ай, Аллам! Үҙен аңлар, күркәм холоҡло йәр насип ит ошо балаға! – тип теләк теләгәс, ҡәтғи генә өҫтәп ҡуйҙы: – “бар нәмәнән баш тартырға” тигәнеңде өнәмәйем, башыңдан сығар уныһын...Улай уҡ ирекһеҙләргә ярамай ир-атты... ҡатын-ҡыҙҙы ла, бәс! – Шунан оҫта ғына итеп һүҙҙе икенсе яҡҡа шылдырҙы: – Менәүәрә балаҡай ниҙәр ҡыҫтәрә? – Күреп торам, башҡа хәбәргә әүрәргә тырышһа ла, төн йоҡламай уйланасаҡ ул минең «кейәү» хаҡында.

Ә Менәүәрәнең тормошонда яңыраҡ бер мәҙәк булған, үҙе һөйләне. Өлкән синыфтар мәктәп ихатаһын йыйыштырырға барған, шунда уның кеҫәһенә ус иңеләй ҡайын туҙы һалып ҡуйғандар. Футболка өҫтөнән кейгән кофтаһын кәртәгә элеп торған икән, шул арала өлгөргәндәрҙер. Саҡырып, Әлфирә әхирәтенә күрһәтәйем генә тиһә, Маһый апайҙың ҡыҙы Миңзифа ҡарсығалай атылып килеп, теге туҙ киҫәген ҡулынан тартып алған да ҡасҡан. Эштән туҡтап, көлөшөп торған башҡа ҡыҙҙар араһына инеп, һөрән һалған: «Хат таптым, ғишыҡ хаты!» Ысынлап та, туҙҙың ап-аҡ ҡына битенә »Яратам. М». тип яҙылған, ти. Хәҙер киткән сутырҙашыу – кем яҙған, кемгә?

– Менәүәрәгә! Мөдәрис яҙған! – тип һикерәнләп торған Миңзифаны күмәкләп уратып алғандар, теге туҙ остоғон ҡулдан-ҡулға йөрөтөп ҡарайҙар икән. Дәррәү эш менән мәшғүл малайҙар ҙа ҡыҙығып килеп еткән, Мөдәрис кенә бер ситтә баҫып ҡалған. Тиҙ генә хәлде аңлап алған Әлфирә: “Мин бөтәгеҙҙең дә почеркын таныйым, бирегеҙ әле! – тип туҙға яҙған хатты ҡулына төшөргән дә юрамал иғлан иткән: – Был бит Миңзифаның яҙыуы, “М” хәрефе – уныҡы! Үҙе яҙған да Мөдәрискә, бүтәнгә япһара.” Хәҙер инде күмәкләшеп Миңзифаға бармаҡ төртөп күрһәтеп, көйләп-көйләп көлөшөргә тотонғандар: “Мөдәристе ярата, ах, Миңзифа, Миңзифа!..”

– Хаяһыҙ ҡыланмаһын, әсәһенә оҡшап ни...– тине ҡартәсәйем, ошоларҙы ишеткәс. – Туҙға яҙған хат, тиһең ә? Әтеү ысынлап та Мөдәристе уйлай булып сығамы ул Миңзифа ?

– Юҡсы, башҡаға күҙе төшкән уның – Әшрәфкә.

– Менәүәрәгә ниңә көнләшә әтеү?

– Яҡшы уҡығаны, синыфташтары менән татыу булғаны өсөн...– Сәбәп түгелме ни?

– Әстәғәфирулла...

Анау Мөдәрисен әйт, Фатихтың ҡустыһы бит әле, нимәгә башы еткән?! Фатих Мәүлиҙәгә (әллә миңә?) нисәмә синыф буйы ҡарап ултырҙы зәңгәр күҙҙәре менән, туҙға хат яҙырға булдыра алманы. Ә ҡыҙыҡ булыр ине?! Мөдәрисенең дә күҙҙәре ағаһыныҡы кеүек, тик ҡуйыраҡ зәңгәр, ҡарашы ҡыйыуыраҡ.

– Вәт мәлғүн малай, ә? – тигән булдым. Ҡартәсәйемә был хәбәрҙең ҡыҙығы бөткән, һүҙемә бәйләнеп алды:

– Әҙәм балаһына улай тимә, мәлғүн тип Иблис ғәләйһи Ләғәнәгә генә әйтергә була. – Ҡылт итеп иҫкә килеп төштө: Аҡназар ағай һымаҡҡамы? Өндәшмәнем, уйлап ҡына ҡуйҙым.

Ҡартәсәйемде бер сама күреп туйғас, Яңы өйгә ашыҡтым. Унда – мин донъя тотҡаһы хәҙер. Үҙем ашығам, үҙем Менәүәрәләрҙең мажараһын тағы күҙ алдына килтерәм. Бала-саға ниҙәр ҡыҫтәрә, күр әле? Ромео менән Джульетта булып уйнайҙар, саҡ һигеҙенсегә төшкән баштары менән. Бәс, уйлап ҡараһаң, Ромео – етенсе, Джульетта бишенсе синыфта ғына уҡыр йәштә булған, һәм уларҙың мөхәббәте шул дәрәжәлә ысын, донъя әҙәбиәтендә ҡалырлыҡ бөйөк тәһә! Шәп-

шәп атлап барған еремдән туҡтап ҡалдым хатта, бынағайыш, бөгөн генә беләм түгел дәһә ул ғашиҡтарҙың йәшен-тарихын, ә төпсөп илтифат итмәгәнмен. Мөдәристең туҙға яҙған хаты асты был юлы күңел күҙемде.

Ә күптән түгел пионер линейкаһында Муса исемле бер малайға шелтә бирҙек. Хеҙмәт дәресендә синыфташ ҡыҙыҡайының һыңар толомон ҡайсы менән ҡырҡ-ҡан да ҡуйғансы, иҫәүән. Етмәһә, алып ҡасып, ул толомдо ҡайҙалыр йәшергән, кире килтереп тә бирмәй. Һөйләшеп тә ҡарағайным, ыҡҡа килмәй: «Тиремде тунаһағыҙ ҙа бирмәйем, йәшерҙем, бер кем дә таба алмаясаҡ»,– ти. Кем уның тиреһен тунарға тора, хулиган! Әллә ул да, алтыла уҡыған малай, ғашиҡ булған теге ҡыҙыҡайға?!

Ошо осор һәр тарафта мөхәббәт тынын тоям. Фәсхи-Әдисәй менән Татар килен Таһура ҡиссаһы өҙөк-мөҙөк хәтирәләрҙән йүрмәлеп тыуып килә башымда – Менәүәрәләр, Мусалар, баштары йәш, көтөп торһондар әле... Тик йыш күрешеп булмай Татар әбекәй менән, эштән бушамайым. Шулай ҙа һуғылдым бер арала уға.

– И Нуриякәем, сөбханалла, бигрәк чибәрсең лә үзең! – тип ҡаршы алды Татар әбекәй, татлы теле менән арбап. – Менә, Гадилә каенсеңелнең Купшыкаена бәрхет муеынчак теккән идем, мәрҗәен басып, алып барып житкерә алмыйм, аяклар да сызлаштыра, өйдән чыгып булмый азапланам. Тапшырырсың, юл уңай?

– Матур ҡайһылай! – Ихлас һоҡландым ҡара бәрхәткә аҡ мәрйендән сәскәләр нағышланған муйынсаҡҡа – үҙемдең муйыныма тағып алырҙай булдым, шундай нәзәкәтле. Ғәҙилә инәй ҡыуаныр инде, бесәйе уның берҙән-бер йыуанысы, өйҙәше, һаҡсыһы. Йәйен-ҡышын икәүләп ҡапҡа төбөндә сәғәттәр буйына баҫып торалар, һуғыштан ҡайтмаған Рәшит ағайҙы көтөп...

– Олыгаям, балакай, ялгызыма авыр да. Килен булып төшеп, ияләнеп кенә киткән идем бу җиргә, Әдисәй бабакаең ташлап та китте... Һич югы төсе булып баласы калса икән?! Күрәнле суы тартып ҡайтарған аны (тыуған тупраҡ һымаҡ, һыу ҙа тарта микән?). Кара диңгезне аркылыга-буйга кичкән иде дә минем матросым-җаныкаем, кечкенә елганы кичеп чыга алмады... Очрашканда аңарга егерме җиде яшь иде, миңа – унтугыз. Исмем белән дәшмәде ул, Җанкисәк дип кенә йөртте. Төнлә төшемә керде. Ул боз өстендә йөзеп бара, матрос кимендә, ә мин яр буйлап, имеш, йөгерәм. Чакыра, Җанкисәк, курыкма, сикер минем яныма, ди. Сикердем, әй... Кочагына алды. Шунан ни, киттек йөзеп боз өстендә, авыл ераклаша бара, ераклаша бара... Көтә бабакаең мине, Нуриякаем, юксына. Болай да озак көтте ич...

– Татар әбекәй, ә нишләп Ҡырымыңа ҡайтып китмәнең икән?

– Төшемне юрап куйдыңмы, Рәйхана оныкачы? Тәүге никахың белән кавышалар ди анда, өске доньяда, ә Фәсхетдин бәгрым минем бердән берем! Нигә кайтып китмәдемме? Ул фаҗигәне кат-кат сөйлисе түгел, авылда андый вакыйгаларны әлдән-әле исләп, хәтердә яңартып торалар, бер булмаса бер ишеткәнсеңдер? – Яуабымды көтөп тә торманы, һөйләп алып китте: – ...Куркып йөрәге алынган кечкенә малай шакмак-шакмак бозлар актарылып аккан елгага ничек барып кергән, берәү күрмәгән. Бала-чагалар җыелып киткәннәр дә чарасыз калып карап торалар икән. Аңарчы, йөрәге сизгәндерме, теге малайның әнисе елгага йөгереп килгән, яр башында өзгәләнеп кычкыра, ди, мескенкәем... Фәсхетдиннең болай да, боз китә бугай, Күрәнле үкерә, дип, киенеп чыгып баруы иде, колакка теге хатынның җан тетрәткеч сөрәне чалынгач, мине дә көтеп тормый, ашыгып чыгып китте. Күреп калган да теге бичара баланы, сикергән

бозга. Баланы әнисенә тоттырып өлгергән... Мин барып житкәндә язмыш галиҗәнаплары шул хәлне аткара иде: Әдисәем ташкын су астына төшеп югалды да, икенче бер төштән калкып чыгып, кычкырып өлгерде: «Җанкисәк!» диеп...

Ташлап китмәдем, каберен тәрбияләп тордым. Авылыгызны да үз иттем, халык яхшы монда. Кырымда әнкәм исән, абыем гаиләсе белән яшәп калган иде. Әтиебез, кечкенә чакта әле, бер корабка утырып китте дә кайтмады. Күрше марҗа апа аркасында жан асрап калдык, тормышы хәлле иде, үзе мәрхәмәтле булды. Аннары... базарда йөргәндә, Фәсхетдин җаныкаем очрады. Порт калачыгында анда матрослар адым саен очрый, ә бу – язмышым булган, күрәсең...

Татар әбекәй ни йомош менән килеүемде төпсөнмәне. Йомошом юҡ та ине, Әдисәй рухы әйҙәгәндер, инеп сыҡ минең Йәнкиҫәгем янына, тип эшкәрткәндер? И, ҡәҙерлеләрем, Толпарлы Әдисәйе, уның тоғро Пенелопаһы, һеҙҙең мөхәббәтегеҙҙең тарихын бәйнә-бәйнә тергеҙәсәкмен! Саҡ ҡына өҫтәп, күпертем ебәрһәм дә, үпкәләмәҫһегеҙ, йәме?

Әлегә әбекәйҙең төшөн үҙем теләгәнсә бороп юрап ҡуйҙым: өс көндән дә түгел, өс йылдан да түгел, утыҙ йылдан һуң килер бойомо! Мин был төштөң тәүге юраусыһы, тап минең юрауым юш килһен, тип ырымланым.

***

Сөгөлдөр майҙандарын беҙҙең колхоз кәметмәй, арттырһа арттыра. Дөрөҫтөр уныһы, татлы тамыр беҙҙең яҡтарҙа уңа, яҡшы табыш бирә, эш тә байтаҡ еңеләйҙе. Рәт араларын сүптән таҙартыуҙы, хатта бер сама һирәкләүҙе лә техника атҡара (әммә еренә еткереп тәпкеләп, ҡул менән берәмләп һирәкләмәй ҙә булмай барыбер). Былтыр көҙ шундай тракторҙар килде: тағылма ҡулайламалары татлы тамырҙарҙы күтәртеп кенә ҡалмай, ә бер ыңғайҙа яртылаш таҙартып, өйөп тә китә. Артабан ҡырҡылмай ҡалған япраҡтарҙы киҫеп, дүрт-биш өйөмдө берәү итергә генә ҡала. ”Генә“ тиһәң дә, барыбер ауыр ысвикла бисәләренә. Быйыл көҙгә тейәгес техника ла килә, тип торалар тороуын. Көҙгө батҡаҡҡа унығы ла батып ултырһа? Әйткәндәй, һалдаттар башҡаса беҙгә килмәне. Көткәйнек...

Теге оло фажиғә колхоз етәкселәренә бер сама аҡыл булды: һәр звено тапҡырына таҡта будка эшләп ултыртылды. Ары-бире бәҙрәфтәр ҙә күренә. Ултыртып тамаҡ ялғарға баҫыу ситендә оҙон өҫтәл, эскәмйәләр ҡуйылған. Бөтә хужалыҡтарҙа ла сөгөлдөрсөләргә уңайлы эш шарттары булдырырға, тип райондан ғына түгел, Өфөнән күрһәтмә бирелгән хатта. Ә Аҡназар ағай рәйеслегенән ҡолаҡ ҡаҡманы, шелтә алып ҡына ҡотолдо. Халыҡ та уға әллә ни ҡаныҡманы, күктән төшкән бәлә бит, тип аҡланылар.

Әле килеп, тағы толпарлыларҙы үҙенә ҡаршы ҡуйҙы хужа: иген баҫыуҙарын көтөүлектәр иҫәбенә киңәйтергә тотондо. Юғарынан бойороҡ килгән, ти. Шәкетауға еткәнсе һөрөп ташланылар ерҙе. Ғүмер буйы йылҡы тибене өсөн тотолған яландарға, ҡуян-төлкө һымаҡ кейектәр үрсегән, ҡоралайҙар елгән Ҡырластау битләүҙәренә ниңә тейергә? Ололар, шул иҫәптән Бүреһуҡкан олатай ҙа, әйтеп ҡарағандар, был тупраҡта бойҙай түгел арыш та үҫмәйәсәк, заманында Малик бай әҙ генә сәсеп һынап ҡарағайны, тип. Тәбиғәт тә риза булмаҫ, рәнйеше төшөр, тип тә киҫәткәндәр.

Оло һүҙен тыңламаған – оронған да бәрелгән, тигән мәҡәл бойомға килмәһенме берҙән-бер көндө! Башта Шәкетау бүреләре үҫ алды: һарыҡ фермаһына

һөжүм иттеләр. Сентябрь аҙағында улар ас йөрөймө ни көтөүе менән килеп, ялан кәртәләге малды боғаҙлап китергә?

Аҡназар ағай умарталыҡтан Бүреһуҡҡан олатайҙы саҡыртып алған, бүреләрҙе ҡырырға кәрәк, ҡоторғандар, тип әйткән.

Олатай үҙе инеп сыҡты бер арала пионер бүлмәһенә. Мине, оло кешегә һанап, хәл белергә. Рәйестең хаслығын, Шәкетау бүреләрен дә һөйләне бер ыңғайҙан.

– Ваҡ ҡыуаҡлыҡтар, уймаҡ-уймаҡ һаҙлыҡтар – тотош аҡтарып тигеҙләнгән, Рамай ҡарамаһы ғына һерәйеп ултырып ҡалған: тракторсының ҡулы бармағандыр, ҡәберҙәге ядкәрташ кеүек иҫтәлекле ағас ул хәҙер ауыл өсөн, – тип әсенде. – Рамай аҫылынған ботағы ҡороған икән бахыр ҡараманың. Ағастың теле генә юҡ, тере ул, аңлай ул... Аҡназар ҡусты алйотлоҡ эшләне ул яланға тейеп, борон-борондан андыҙлыҡ ине унда.

Бүреһуҡҡан олатай яҡшы белә шул бүреләрҙең холоҡ-фиғелен. Нисек һунар итергә, нисек сигендерергә кеше йәшәгән төйәктән – өйрәткән, ҡотҡарған ауылды ҡорбан көсәгән йыртҡыстарҙан. Әйтерен әйтмәй ҡалмаған рәйескә лә, әйткән, тәүҙә әҙәм ҡотора, шунан ғына – йыртҡыс, тип.

– Кәрәккән-кәрәкмәгәнгә ҡан ҡойошҡа бара торған януар түгел бүре, зитына тейһәң генә ҡон ҡайтармай ҡалмаҫ,– тип минең ҡолаҡҡа ла киртте бер ыңғайҙа, – ныҡ ас булғанда ла ҡапыл йәбешмәй ҡорбанына, оҙаҡ баҫтыра. Кәрен самалай, артта ҡалып, хәлһеҙ йығылғанын ғына тамаҡлай. Урман санитары тип юҡҡа атамағандар. Ә был юлы, эйе, күҙҙәрен ҡан баҫҡан йыртҡыстарҙың, арт һабаҡтарын уҡытмай яраманы.

Олатай һәүетемсә генә тасуирлай нисек бүреләрҙе аулағандарын, ә минең хәтер таҫмама был хикәйәт үҙенән-үҙе яҙыла бара. Әйтерһең, магнитофон таҫмаһы. Хәйер, магнитофондағын юйып, өҫтөнә бүтәнде яҙҙырып та була, ә кеше хәтере – ғүмерлек, быуындан быуынға аманат итеп тапшырылһа – мәңгелек.

...Шәкетау итәгенә етәрәк, йыш-йыш итеп, эстә борғаҡлап-борғаҡлап тар ғына һуҡмаҡ ҡалдырып, бағаналар ҡатып, аҙаштырғыс (лабиринт инде торғаны) ҡороп, шунда ҡапҡандар һалып, арыраҡ бер мөйөштә кәзә бәрәсен бәйләп, бүреләрҙе әүрәтәләр. Бигүк алыҫта түгел мылтыҡ тоҫҡап һунарсылар ҙа әҙер тора. Бына бер мәл урман ауыҙынан ашҡынып бүре өйөрө килеп сыға. Теге көндәге һуйыштан һуң күҙҙәре алар ған, тағы ҡан көҫәйҙәр. Һаҡ, таһыллы, күҙәтеүсән януар ҙа кешенән аҡыллыраҡ түгел – теге аҙаштырғысҡа алданып барып инәләр. Бисара кәзә бәрәсе лә үҙенең ролен яҡшы үтәй, мәәлдәпме мәәлдәй... Бүреләр тар, ҡатмарлы лабиринтта ҡапҡанға эләгә, улай ҙа ирекkә килеп сыҡҡан состарын дүрт тарафтан мылтыҡ сәпкә алып тора.

– Береһе лә ысҡына алманы! – Олатайҙың күтәренке тауышы күҙ алдына килеп баҫҡан күренештәрҙе өркөттө. – Йорт тирәһен ҡараштырам да тағы умарталыҡҡа китәм. Бәрәңгене баҡсама Мөхәрләм бүләре Ильяс ултыртты. Һай, егәрле егет ул. Миңә ни, ҡышҡылыҡҡа ашарлыҡ ғөшөрөн бирһә... Ана шул Ильяс та, Аҡназар ағай андыҙлыҡты һәләк иткән, андыҙ барҙа ат үлмәй, тигәнде белмәй микән, тип асыулана. Ат йәнле бала икән, тоҡомдары менән шундай улар. Улай ҙа андыҙҙы күпмелер төп ҡаҙып алып, Зәңгәр шишмә үҙәненә күсереп ултыртып ҡараған егет, ерегеп китһә... Тамыры ҡеүәтле бит уның, тарбайланып тәрәндә ята, ҡаҙғанда ныҡ зәғифләнмәһә, мандып та ҡуйыр. Ул тирәлә, шишмә үргә, Дөйә үркәсенә аҡҡан урындан алыҫ түгел, һирәкләп эре юшан да үҫкәнен беләм, уны ла ат яратып юшай. Иншалла, ул ике үлән бергәләшеп үрсеп тә китер. – Шулай тине лә миңә текләне олатай.

– Икенсе йылға ситтән тороп уҡырға инәм, стажһыҙ алмайҙар документты,– тинем, күҙендәге һорауҙы күреп, аңлап торғанымды белдереп.

– Ярар, тынысландырҙың күңелде, әләйһәң. Һин наҙан ҡалырға тейеш түгелһең. Диплом кәрәк, тиеүем, ул булмаһа, зирәклегең нисшут!

Көлөп ебәрҙем, Бүреһуҡҡан олатай әүәлдән шулай урыҫ һүҙен ҡыҫтырып ебәрә ҡай саҡта. Иң яратҡаны әлеге “нисшут”, командирынан ҡалған “реакция” һәм “любой дүрәк” була торғайны. Ул да булмай, өҫтәп тә ҡуйҙы: – Кеҫәһендә диплом ятһа, башында тауыҡ сүпләрлек белеме булмаған любой дүрәк тә әллә кем булып йөрөй. Ниндәй аҡыллы егеттәр шундайҙар арҡаһында уҡырға инә алмай ҡалды, Харис менән Фатихты әйтәм.

– Армиянан ҡайтҡас, барыбер уҡыйбыҙ, ти улар.

– Донъялар ошолай ғына торһа, иншалла, уҡырҙар. Һуғыш ҡына булмаһын. Америка шаша бит, ҡораллана ла ҡораллана. Беҙҙекеләр ҙә тик ятмай ҙа, күпме аҡса китә ул аждаһаның тамағына – һуғыш аждаһаһының, тим. – Шул минутта ҡотһоҙ дәү ауыҙын ерҙән күккәсә асып, тоҡ-тоҡ аҡсаларҙы, тау-тау ризыҡтарҙы ғөддәһенә йотоп торған аждаһа күҙ алдыма килеп, ҡалтыранып ҡуйҙым.

– Реакцияң яҡшы,– тине Бүреһуҡҡан олатай һәм хушлашып китеп тә барҙы. Тормошта үҙенең кәрәклегенә, тәжрибә-таһылдарының кешеләргә ярап ҡалыуына ҡәнәғәт булыуы олатайҙың атлауына сыҡҡайны. Иҫемә төшөп, артынан ҡысҡырып һорашып ҡалдым:

– Әй, олатай, теге ҡалҡыулыҡҡа, Дөйә үркәсенә, тим, Зәңгәр шишмә нисек аға икән ул, йылғалар үргә аҡмай ҙаһа, аға алмай...– Байтаҡ атлап өлгөрһә лә, ишетте, туҡтамай, башын бороп ҡына яуап ташлап китте:

– Ә нишләһен, аҡмай сараһы юҡ!

Үргә аҡҡан йылғалар... Ана ниндәй үрнәктәр күрһәтә тәбиғәт, күҙеңә төртөп күрһәтә!

Бүреһуҡҡан олатай менән аралашыу бер ҡасан да эҙһеҙ үтмәй минең өсөн. Инде үҫтем, өлгөрөп еттем тигәндә лә. Аҡһаҡалдың артынан алыҫлашҡансы ҡарап ҡалдым. Осланмаған эштәре, әйтелмәгән һүҙҙәре уны шулай дәртләндереп, йәүкәләп йөрөтә был донъяла, күңел төшөнкөлөгөнә бирелеүҙән ҡурсалай. Татар әбекәйгә лә эс бошоуҙан ҡотолдоролоҡ берәй мәшәҡәт өйөргә ине? Бәс, уйлап та таптым!

“Пионер” журналындағы фотола күреп ҡалғайным: ҡала ҡыҙҙарының формалары бигерәк тә матур икән. Аҡ кофтаһы, ҡыҙыл галстугы, ярай, беҙҙекеләрҙең дә бер иш, район универмагынан һатып алалар. Ә бына тегеләрҙең юбкаларына күҙ ҡыҙҙы: ҡуйы зәңгәр төҫтәге тауарҙан складкалап тегелгән. Ҡыҙҙарға күрһәтһәм?

Юл ыңғай магазинға һуғылдым. Кеҫәмдә – өләсәйемдең пенсияһы, үҙем әле аҡса алып өлгөрмәнем. Беҙҙең магазинда сәйе-кәнфите лә, шырпыһы-тоҙо ла, кейем-һалымы ла бергә һатыла. Уҡыу кәрәк-яраҡтары ла шунда уҡ. Тауар төргәктәрен ҡуҙғатҡылап ҡараным: миңә кәрәклеһе лә ята!

– Шевиот, яҡшы тауар, тик беҙҙә уны кем алһын, ҡиммәтле,– тип ҡуйҙы һатыусы Сәхи ағай, кемгәлер крәндил үлсәп торған еренән.– Сәмиғуллин әйтә, бындай тауарҙан офицерҙарға китель тегәләр, ти.

– Киңлеге күпме?

– Киңлеге – мул, метр ҙа ҡырҡмы, иллеме...

– Миңә етмеш сантиметр етәлер, итәккә?

– Етә-етә,– тип эргәмә килде Сәхи ағай. Ул ғүмер буйы ошонда эшләй, кемдең тәҙрәһенә нисә метр селтәр кәрәклегенә тиклем белә.

Аҡсамды самаланым да киҫтереп алдым. Иртәгәнән дә ҡалмай, Йәнкиҫәк Татар әбекәйгә теге журналды күрһәтеп, заказ бирәйем.

* * *

Магазинда халыҡ дәррәү шул хаҡта гәпләшә ине: ауылыбыҙҙың атаҡлы Хәйри буры иреккә сыҡҡан. Ниҙәр күргәндер уның дыуамал башҡайы төрмәлә, бөтөнләй аяҡтан яҙып ҡайтҡан, ти. Аяҡтары бар ҙа, быуынһыҙ, ти, баҫа алмай. Электән дә, бала сағынан, полиартрит булыпмы, ай буйы ныҡ ауырып, иҫе инерле-сығырлы һаташып ятып, һылтыҡлап ҡалған булған, шунлыҡтан һуғышҡа алынмаған икән.

Толпарсыҡҡандың ғәҙәте – бурын да, иҫәрен дә үҙенеке итеп таный, йәлләй. Ҙур ауылдың яҡшыһы ла, яманы ла бәләкәй ауылдыҡына ҡарағанда күберәк була, тип әллә аҡланалар, әллә аҡлайҙар?

Ҡайтып инһәм, Яңы өйҙә лә шул уҡ хәбәр: Гөлшәһүрә инәй менән өләсәйем Хәйри бурҙың малай сағын иҫләп ултыралар.

– Солтанай сәсәниә әйткән, ти бит, Хәйривараның әсәһенә, алдан ал, насар ғәҙәте бар баланың, тип. Хәстәле ул, өшкөрт, тигән. Тыңламаған инде, мына лаһа...– Бер тауыштан шулай сөкөрҙәшә ике көндәш һин дә мин.

Ауыл яңылыҡтары бер килке баҫылып тора ла, күпмелер ваҡыт үткәс, тағы урғып ҡалҡып сыға. Хәйри бурҙы ла, берсә әрләп, берсә ҡыҙғанып, онотоп торғайныҡ, күпмелер ваҡыттан үҙен тағы иҫкә төшөрҙө. Һуғым мәле еткәйне: ҡаҙ өмәләре үткән, хәҙер эре мал һуялар – һарығын, башмағын, йылҡыһын... Хәйри бурҙың ҡатыны Ғилмиә апай иртүк күршеһенең ҡапҡа тышына үҙҙәренең һарыҡ тәкәһен алып барып бәйләгән, бер ыңғай салып бирегеҙсе, тип. Өйҙәрендә – ике еткән ҡыҙ ҙа аяҡһыҙ ир бит инде. Ул ҡыҙҙар сөгөлдөр эшләй, кейәүгә сыға алмайҙар һаман, шул атайҙарының алама даны һирпеләләр, күрәһең. Ҡыҫҡаһы, Хәйри бур күршеһенең бағанаһына бәйле һарыҡты һағалап, ахырҙа урлап алып ҡайтҡан: “Берәйһен саҡырып, тиҙ генә һуйҙыр!”– тип әйтә икән бисәһенә. Уныһының һушы киткән иренең туңғаҡ ерҙән имгәкләп барып, урлашып йөрөүенә. Үҙҙәренең малы икән тип белмәй, танымай ҙаһа... Дөрөҫөн әйткәс, илаған, мин урлашмай тора алмайым, тип. Төрмәлә үҙенең әйберен үҙе урлап бер булған: кейем-фәләненме, кеҫәһенә йәшереп алып ҡалған икмәк киҫәгенме камералашының матрас аҫтына үҙе йәшерә лә аҙаҡ үҙе урлай... Сирле тип Солтанай сәсәниә дөрөҫ әйткән.

Быны ишеткән халыҡ оторо ҡыҙғанды үҙенең атаҡлы бурын. Һуғышта ике аяғын ҡалдырған Йәнсура бабайҙың (мин бәләкәй саҡта уҡ вафат булды) тәгәрмәсле арбаһын килтереп биргәндәр, өйҙә төңкәлеп зарыҡмаһын, йәнәһе. Ул арбала йәйен-ҡышын йөрөргә була – ултырырға ярҙам итһәләр, тәгәрмәсен ҡул менән әйләндерәһең дә... Ғилмиә апайҙың ҡото осҡан: тағы урлашырға тотонасаҡ таһа Хәйри, былайтып “аяҡланғас”! Уныһы Йәнсура бабай арбаһында зыйлатып ауылды көнөнә өс урай, ти.

Күп тә үтмәй, Ғилмиә апайҙы Сәмиғуллин саҡыртып алған.

– Ҡойолоп төшмә улай, ҡурҡма, кәңәшләшергә тип кенә өндәштем, Хәйривара алдында һөйләшә торған һүҙ түгел,– тигән Сәмиғуллин.– Уны ҡабат төрмәгә япһаң, шул китеүенән иҫән ҡайтмаясаҡ, аңлайһыңмы?

– Инвалидҡа төрмә була тиме? Әҙәмдән оят, шуныһы ҡыйын...

– Йәмғиәткә зыяны булһа, инвалид та яуап тота.

– Сәмиғуллин ағай (үҙенән ололар ҙа уға шулай өндәшә), зинһар, төрмәлә сереməһен инде бахырҡайымдың башҡайы!..

– Теге юлы ул колхоздың бер өйөр йылҡыһын ҡыуып алып китеп, икенсе бер эрерәк бурға тапшырып торғанда тотолдо. Өйөрҙә Күк юрға тоҡомо ла бар ине, ә ул үҙе генә лә – машина хаҡы. Оҙаҡҡа ултырҙы. Ә унда зэктар, заключенный-ҙар инде, ауыл мужигын шундуҡ бөгөп ала, үҙең күрәһең һөҙөмтәһен.

– Нишләйем һуң?!

– Мин һиңә бер кәңәш бирәм, берәүгә лә әйтмәҫкә һүҙ бирһәң.

Килешкәндәр. Кәңәш шунан ғибәрәт икән: ире нимә генә урлап алып ҡайтһа ла, тотонмаҫҡа, шундуҡ Сәмиғуллиндың үҙенә хәбәр итергә. Ул килеп протокол төҙөй ҙә урланғанды хужаһына тапшыра, уныһы ҡаршы ғариза биреп тормаһа.

– Урлаша ла, шундуҡ үкенә бит ул, үҙе лә кире ҡайтарыр ине,– тип илап ебәргән Ғилмиә апай.

– Ҡайһы бер осраҡта, әйҙә, кире ҡайтарһын, көтөңкөрәп торорбоҙ. Ауылдан сығып китеп, тирә-яҡта урлашып, колхоз мөлкәтенә тейеп йөрөй алмай ҙа инде ул хәҙер?

– Ошо хәлендә ҡайҙа, ти, улай йөрөү... Бәлки, ташлар ҙа уғрылығын, тим. Һуғыш ваҡытында урлашманы , башын баҫып эшләне фермала.

Ғилмиә апай был һөйләшеүҙе, бәлки, бер генә кешегә һөйләгәндер, сер итеп. Утыҙ ике теш араһынан сыҡҡас инде, тотош ауыл белгән. Һәм һәр кем ризалашҡан Сәмиғуллиндың аҡыллы кәңәше менән. Унан да бигерәк кәрәкмәгәнерәк ваҡ-төйәкте кәртәгә элеп тә киткеләйҙәр хәҙер, Хәйри бур күрһен, тип. Тағы шуны һынағандар: нимәлер урлағандан һуң, ул өс-дүрт айға “боҫа” икән, бер нәмәгә лә теймәй. Эйе, ауылдың күҙе үткер, ҡолағы сос,– хәҙер нисәнсегә шуға инанам.

Ә Сәмиғуллинға ихтирамым артҡандан-арта. Шундай кешеләрҙе атайҙарҙыр ҙа “ысын коммунист” тип, ошо һүҙ гәзиттәрҙә йыш күҙгә салына. Аптырап та ҡуям, айырым кешеләргә ҡарата ғына шулай әйтелгәс, кеҫәһендә партбилет йөрөткән бәғзе коммунистар ысын уҡ түгелме, улайһа?

22

Тиҫтерҙәремә армияға сират етте. Харис менән Фатих, Әхиәр хеҙмәткә алынды. Бер сәғәт эсендә егеттәребеҙҙе, хәрби марш музыкаһын яңғыратып, машинаға тейәп алып та киттеләр. Бөтәһе һигеҙ призывник. Уларҙы оҙата сыҡҡан кешеләргә иғтибарлап ҡарап сыҡтым. И, илаһыҡайым, Ғәҙилә инәй тора бер ситтәрәк, Ҡупшыҡайын ҡосаҡлап. Рәшитен иҫләйҙер инде. Балбабай менән Бүреһуҡҡан олатай ҙа бында. Татар әбекәй ҙә бар, күҙҙәрен яулыҡ осо менән һөрткөләп ала. Арбаһына ултырып Хәйри бур ҙа килгән. Һалдатҡа киткәндәрҙең ата-әсәләре, туған-тыумасалары, дуҫтары – кәнсәләр алдындағы майҙан халыҡ менән тулған. Бәс, Сабир менән Кәбирҙең атайҙары ла күренә, улдарының дуҫтарын оҙата сыҡҡандарҙыр. Әшрәф бойоғоборaҡ баҫып тора, уның эргәһендә Миңзифа һырпалана.Тап шул минутта Айыусынан Әсмә килеп етте: «Уф, ҡыҙый, өлгөрмәнем!» – тип беләгемдән ҡултыҡлап алды. Әшрәф беҙҙең яҡҡа талпынды, Миңзифа уның юлына арҡыры төшөп албырғатты. Шул арала ҡустыһы Әшрәфкә гармун килтереп тотторҙо, ул, башын саҡ ҡына ҡырын һалып, уйнап ебәрҙе – Толпарлы һауаһына таныш түгел моңло көй урғылды. Үҙе

сығарғандыр был көйҙө. Әсмәгә булған мөхәббәте унан, мәктәптә йыр дәресенән саҡ-саҡ өлгөргән, нотаны ҡолағына ла элмәгән малайҙан, һуңғы берике йыл эсендә гармунсы яһаны. Көйө лә уға – йөрәген башҡаға биргән урман ҡыҙына бағышланалыр? Ошо минутта күңелем төпкөлөнән сәмем тауыш бирҙе: һине лә берәү картинаһына төшөргәйне, һин дә берәүҙе рәссам булырға ҡанатландырғайның! Әммә Әшрәфтең моңо был тауышты тиҙ баҫты, шул дәрәжәлә илаһи ине ул сөнки.

Татар әбекәйҙе, Бүреһуҡҡан олатай менән Балбабайҙы ҡартәсәйем сәйгә саҡырҙы. Әсмә менән мин дә эйәрҙек, бер ыңғайҙан серләшеп тә алырбыҙ, тип ҡыуаныштыҡ. Ғәҙилә инәйгә лә өндәшкәйне, ул: «Әрәхмәт, Әрәйхана күршем, ашығам, Әрәшитем ҡайтып төшһә, өйҙә булайым», – тип өйөнә ашыҡты.

Олатай менән Балбабай сәйҙән һуң умарталыҡҡа юл тотто. Әсмә лә ҡайта һалып китте, ауылында хәҙер ҡарт-ҡоро ғына йәшәп ҡалған, шуларға ярҙамлаша,ҡышҡылыҡҡа утыны ла юҡ икән бер ҡарсыҡтың. Мин Татар әбекәйҙе оҙатып ҡуйҙым, теге тауарҙан итәк тегеү тураһында килештем бер ыңғайҙа.

Ә ҡолағымда, гүйә, баяғы хәрби марш шаңдауы яңғырай:мейемде борсоулы уй быраулап, йәнемде хәүеф ҡоршағайны. СССР үҙенең киң ҡанаты аҫтына Төньяҡ Вьетнамды алды, Көньяғын АҠШ ҡурсалай. Тағы, меңдәрсә саҡрымдарҙа ятҡан ил сәйәсәте өсөн Америка менән Советтар Союзы һуғыша. Американдар бомба яуҙыра, беҙҙең зениткалар самолеттарын бәреп төшөрә…

Немец фашистарын еңгән быуынға һаман йән тынyслығы юҡ – уларҙың улдарын һәм ейәндәрен Вьетнам һуғышы көтәме?!

Ауылға көҙгө туҡлыҡ, һиллек килде. Ашлыҡ – бураларҙа, бәрәңге – баҙҙа, сөгөлдөр – шәкәр заводында, мал-тыуар – ҡурала. Атайымдың бер һүҙе иҫемә төштө: штиль. Диңгеҙҙең шып-шым, шып-шыма торған сағы икән ул – штиль. Ә еллләй, дауыллай башлаһа, тулҡындарҙы үрә баҫтырып, шторм ҡотора… Дауыл уҡ ҡупмаһа ла, тормоштағы тынлыҡ-тымыҡлыҡ оҙаҡҡа бармай. Был юлы шомло елдәр беҙҙең ике донъябыҙға бер ыңғай килеп бәрелде – Яңы өйгә лә, Атай йортона ла. Ҡар төшөр алдынан ғына Шәрифә апайым ҡайтып әйләнде. Ике көн генә торҙо. Етеп килгән ҡыштың һалҡынлығын алданыраҡ ҡалдырып китте ул беҙгә… «Нәҫелдә булмағанды». Апайымды оҙатҡанда ла, аҙаҡ та ҡартәсәйем ошо һүҙҙе ҡабатланы ла йөрөнө.

Әлтәф еҙнә малай ғына көйөнсә ФЗО-ға сығып киткән дә, шул булған ҡалала тороп ҡалыуы. Ҡупшы кейенеп, апайымды һоратырға килеүен онотмағанмын, миңә ялтыр ептәр менән ҡайылған үтә күренмәле яулыҡ бүләк иткәйне. Әле лә иҫтәлекле әйберҙәр араһында һандыҡта ята ул яулыҡ, әрһеҙләп туҙҙырманым, матур булғас. Шул йәй отпускыһын ауылда үткәреп, апайымдың башын әйләндерҙе: туйын үткәрә һалып, ЗАГС-лап алып та китте Өфөгә. “Әүрәтте баланы… Баязитымдың армиянан ҡайтҡанын да көтөп торманыларсы…”– тип үртәлеп йөрөп, саҡ баҫылды ҡартәсәйем.

Ә мине: «Ҡыҙ баланың ваҡытында кейәүгә барыуы һәйбәт, ҡартайып-фәлән ултырып та ҡалыр, егермеһе тулған даһа инде»,– тип ышандырғайны, апайымды һағынып илағас. Бүтәнсә иламаным. Миңә, ун бармаҡлыҡ һандың ғына осона сыға алған өс йәшлек ҡыҙсыҡҡа, егермене тултырыу – ҡартлыҡ башланыу ине.

Йыл тигәндә, апайымдарҙың малайҙары тыуҙы. «Әллә ниндәй Рубес тигән исем ҡушҡандар сабыйға,– әлеге ҡартәсәйем тағы әсенеп һөйләнде. – Исем атау – яҙмышыңа фатиха менән бер ҙәһә»... Күп тә үтмәне, Әлтәф еҙнә машина менән ҡайтып, әсәһен – Орҡоя ҡоҙағыйҙы ҡалаға күсереп алып китте. Ҡартәсәйем, йортон һатма, кейәү, йәйҙәрен ҡоҙағый ҡайтып торор, исмаһам, тип ҡарағайны ла, тыңламаны. Һәм бына оло кешенең һүҙен йығыуҙың һөҙөмтәһе! Сит кешегә ҡағылһа, бәлки, шулай тип нотоҡлап та алыр инең ҡапылда, тик үҙебеҙгә ҡаҡлыға бит был юлы. Рубестары насар юлға баҫҡан! Ете йәшкә тиклем берҙән-бер бала булып, иркәнән шашып үҫкәс ни... Икенсе улдары Русландың (иҫкесә – Арыҫлан тип, ҡартәсәйем был юлы риза булды) алтыһы тулған, ағаһына – ун өс йәш. Милицияға учетҡа алғандар, ти, шул әле алтынсыла ғына уҡып йөрөгән малайҙы. “Берәй йәшкә өлкәнерәк булһа, ултыртып та ҡуйырҙар ине”,– тип үкһеп иланы Шәрифә апайым.

Өс үҫмер ҡала буйлап бала-сағаның велосипедтарын тартып алып, кеҫәләрендә булһа, ваҡ тиндәрен дә һыпырып, ҡурҡытып йөрөгәндәр.

– Өйҙә ике велосипед тора: “Пионер” тигәнен Русланға ҡалдырҙыҡ, өлкәненә өр-яңы ҡиммәтле спорт моделен алдыҡ, нимә етмәйҙер?!

Апайымдың был һорауына ҡартәсәйем ҡаты ғына итеп яуапланы:

– Ҡайыш етмәй!

– Атаһы һыҙырып та ҡараны, ысҡынып сығып китте лә шул төндө өйҙә ҡунманы... Хәҙер ҡот осоп тора, бөтөнләй юлдан яҙмаһын, тип. Подвалдарҙа эскеселәр, наркомандар тулып ята. Ҙур ҡалала кешене эҙләп табырлыҡмы? Уф, әсәй!

– Кәңәшемде тотманығыҙ, тип кәпкәкләп тормайым инде... Үҙем дә ғәйепле, Баязиттың балаларын ғына бала күрҙем, атайһыҙ үҫтеләр бит. Ҡайыштың билгә быуа торғанын әйтмәйем, ә ата ихтыяры, әсә күҙе, ҡара тирҙе сығарған эш ҡайышы, тим, етмәгән. Бер ҡарсыҡҡа һалышып ни. Ҡоҙағый үҙе лә Әлтәфенә баш була алманы, йомшаҡай. Унының әлдә һөнәр алды, эшкә бирелде. Ирең аҡса тапҡан, малайҙарға ваҡыт тапмаған, ә үҙең ни ҡараның?! – Ҡартәсәйем, ҡулын һул яҡ түшенә ҡуйып, үҙенең йөрәк ҡағышын тыңлағандай, бер арауыҡ өндәшмәй торҙо ла өҙөп-өҙөп әйтте: – Арыҫланды бында килтерегеҙ, уҡырға төшкәнсе торһон ауылда, Камил ағаһы ыңғайына аҡылға ултырыр, эшкә лә таһылланыр. Арҡа һөйәген нығытырбыҙ. – Шунан, апайыма һынсыл ҡарап, өҫтәп ҡуйҙы: – Өлкән баланы яҡшы тәрбиәләһәң, бәләкәйерәктәрен ул эйәртә лә бит, аһ, уйлап еткермәгәнһегеҙ. Әйткәндәй, ҡоҙағыйҙы ла алып килегеҙ, бергә ҡыштырҙарбыҙ ошонда. Ә һеҙ, кейәү менән икегеҙ, бөтә уйығыҙ-хәсрәтегеҙ Рубеста булһын, ишетһен ҡолағығыҙ! Күҙ яҙҙырмағыҙ! Ошо мәлдә, эҫе мәлендә, айырып алмаһағыҙ яман юлдан, һуң булыр!

– Мәктәбен алмаштырайыҡмы, тип аптырап торабыҙ.

– Алмаштырығыҙ. Исемен дә алмаштырығыҙ! Өфөлә оло мәсет бар, муллалар бар, әҙәмсә ататығыҙ баланың атын.

– Ишеткәс, Әмин абый үсекләгәйне: «Ребус тиһәләр, ҡолаҡҡа ятышлыраҡ булыр ине», – тип.

Мин тик торғандан шул һүҙҙе ҡыҫтырып ҡуйҙымсы?

– Ребус булды ла инде ул беҙгә, Нурия туғаным.

– Шәрифә апай, Ребусты, әй, Рубесты ла йәйге каникулға килтерегеҙ Толпарлыға, мин уны колхоздың пионер лагерына алып барырмын, Толпарсыҡҡан

күлен, Сәтләүек урманындағы осар тейендәрҙе, тау үренә аҡҡан шишмәне күрһәтермен. (Үҙебеҙҙең Италия, Шаһимаран түмәләсе тураһында әйтеп тормаһым, апайымдың былай ҙа ҡатҡан башын бутап ни.) Ә ул беҙҙең пионерҙарҙы русса һөйләшергә өйрәтер.

– Эйе шул. – Апайымдың тауышында өмөт һиҙелде.

– Кейәү нимә тиер әле? – Ҡартәсәйем апайыма тағы һынап күҙ һалды.

– Риза булыр. Булмай ҡараһын, донъяла мин дә бар әле! Гелән уның яйына ҡуйҙым бығаса, хәҙер улай булмаясаҡ, хулиганлыҡтан йолҡоп аласаҡмын улымды!

– Иншалла, балам, бергәләп тотонһаҡ, бер малайлыҡ ҡына булырбыҙ.

Шәрифә апайым, ике-өс аҙнанан Руслан менән ҡәйнәмде алып килербеҙ, тип Өфөһөнә ҡайтып китте. Ә беҙгә ул ҡалдырған хәүефле хәбәрҙән оҙаҡ ҡына өшәнес булып торҙо.

Ошо арала ғына күпме кисерештәр һуғарҙы күңелемде: Менәүәрәнең шиғырҙары “Ленинсы” ла баҫылып сыҡты, Әлфиә апаның “Ботаника мөйөшө” район мәктәптәренә үрнәк итеп ҡуйылды, беҙҙә уҡытыусылар кәңәшмәһе уҙғарылды. Әшрәфтең ҡустыһы Илдар шахмат буйынса үҫмерҙәр араһында район чемпионы булды. Ағаһының түбәһе күккә тейгәнен күреү үҙе ни тора: Илдар бит уның нәҫелендә лә уҡыуға зирәктәр барлығын иҫбатланы!

– Институтта уҡытасаҡмын ул Ботвинникты!.. – тине Әшрәф, ауыҙы ҡолағына етеп. Әммә шул арала етдиләнде, хатта моңһоуланды.

– Әсмә хат яҙамы? – тип һораны, күҙемә туп-тура ҡарап.

– Яҙа. Бөтә белгән-күргәндәргә сәләм әйтә. – Әшрәф һаман ниндәйҙер һүҙ көтә. Өҫтәйем, күптән ишеткәнемде: – Кулинарныйҙа бәрәңгенән егермеләп блюдо әҙерләргә өйрәтәләр икән. Бер йыллыҡ, ти, уҡыуҙары.– Юҡ, егет минән күҙен алмай, әхирәтем хаҡында тулыраҡ мәғлүмәт өмөт итә. Нишләмәк, күңелен яраламай ҡалып булманы, асыҡлыҡ индерҙем: – Артур армиянан ҡайтыуға уҡып бөтәсәк.

Әшрәфтең артынан бойоғоп ҡарап ҡалдым. Бынау Әсмәһен әйтер инем, ошондай ҙа эшсән, баҫалҡы егетте һанламай, әллә ҡайҙан килгән Артурға ғашиҡ булды, иҫәүән! Нисек ҡабынып китһәм, шулай тиҙ һүндем: мөхәббәт ҡошо үҙе генә беләлер ҡайһы күктә ҡанат ҡағырын, моғайын. Үҙем дәһә иҫәүәндең дә иҫәүәне – ситлегемә үҙ ирке менән инергә теләп торған бөркөттө осороп ебәрҙем. Хаҡлымынмы, түгелме?!

Ошо һорауға берәй төрлө яуап килерме-юҡмы тип, бер нисә көн төпкөл аңымды, асылымды көндәм генә тыңлап йөрөнөм. Юҡ, үҙемә үҙем яуап бирә алманым... Асыл тигәндәй, ҡартәсәйем әсәйемә төбәп бер әйтеп ҡуйғайны лаһа: «Баязитым аса алманы уның асылын...» – тип. Бына шуға дәлил таптым. Шәрифә апайымды күрергә әсәйем менән Самат ағай килеп, киске сәғәттә оҙаҡ ҡына һөйләшеп ултырҙылар. Мәктәптән ҡайтышлай мин тағы инә һалып сыҡтым улар янына. Шунда әсәйем йырланы. Самат ағай гармунын тотоп килгән, уйнай икән.

*Тәҙрә төбөм ҡаты бал,*
*Ашайһың килһә, ватып ал...*

...Әсәйем тәҙрәнән ҡарап йырлап тора. Уның ҡулдарына беҙ – мин, игеҙәктәр, өләсәйемдәр, сат йәбешкәнебеҙ. Аяҡтарын тышаулағанбыҙ. Ҡанат остарына

(ҡанаттары бар икән!) таш таҡҡанбыҙ. Ул ирекҡә ынтыла, күктә кәйелеп осҡан аҡ күгәрсендәрҙе күҙәтә, түгелеп илай. Күгәрсен тигәнем атайымдың хаттары, имеш. Бер мәлде ҡартәсәйем ысҡындырҙы әсәйемдең ҡулын, шунан – мин... Шул саҡ берәү тәҙрә төбөндә гармун тартты!

*Һөйөүҙәрең ысын булһа...*
*Тәҙрәңдән тартып ал!*

– Тартып алдың  инде... – Ҡартәсәйемдең шулай мығырҙағанын мин генә ишеттем. Әммә әсәйемде ҡыҙғанманым Самат ағайҙан: бәхетле иткән, асылын асҡан бит, рәхмәт!

– Тағы берҙе, еңгәкәйем, беҙҙекен, йырла инде! – тине Шәрифә апайым. Әсәйем инәлтеп торманы, “Шахта”ны башланы:

*Китә ҡаҙҙар, китә ҡаҙҙар,*
*Китә ҡаҙҙар Донбасҡа,*
*Мин дә уйлап торам әле*
*Шул ҡаҙҙарҙан ҡалмаҫҡа...*

Бына тағы бер ғәжәп: әсәйем элек был көйҙө бошонҡо итеп көйләй торғайны, ә әле күтәренке кәйеф менән өҙҙөрөп һалды. Ә минсе, йөҙ тыңлаған һүҙҙәрҙе “Китә ҡыҙҙар, китә ҡыҙҙар, китә ҡыҙҙар Донбасҡа...” – тип эсемдән үҙгәртеп ултырам. “Шахта” ниңәлер атайымды түгел, ә Донбасс яҡтарындағы  Мәүлиҙә исемле ҡыҙҙы хәтерләттесе?

* * *

– Төн сыҡҡансы сумырып ҡар яуған. – Әллә һөйөнөп, әллә көйөнөп, шулай һөйләнде лә өләсәйем бер төйөнсөк килтереп тотторҙо: – Ошо йомғаҡтарҙы эшеңә барышлай ҡоҙағыйға индереп сыҡ. – Үҙе хәҙер бейәләй-фәлән бәйләй алмай шул, бармаҡтары кәкрәйгән, һарыҡ йөнөн тетеп, иләп-сирата ла ҡартәсәйемә тапшыра. Икеһе бер кешелек булалар .

Тыҡрыҡтан минән алда бер-ике кеше генә уҙған, ҡарҙы саҡ йырып сыҡтым. Ҡартәсәйемә боролор алдынан Гөлбикә апайҙың күгәрсенле ҡапҡаларына, Фәҙилә инәйҙең өйөнә лә күҙ һалып өлгөрҙөм. Атаҡ... Фәҙилә  инәй өй алдындағы эскәмйәһенә таң менән сығып ултырған? Ҡупшыҡайы аяҡ осонда һуҙылып ята, инәй уны ҡосағынан сығармай торғайнысы? Ҡартәсәйемә йомғаҡтарҙы тотторҙом да, әлеге күргәнемде һөйләй һалып, эшкә ашыҡтым.

– Хәҙер үҙем сығып беләм күршекәйемдең хәлен,  һин тоҡарланма! – тип ҡалды ҡартәсәйем. – Икеһе бергә китеп барҙылармы икән, бисаралар? Йәсәле...

“Китеп барҙылар?”  Фәҙилә инәй менән Ҡупшыҡайҙы әйтәме? Аһ! Икеһе бергә?! Аңланым...

Яңғыҙ тигәс тә, олоғара ауыл эсендә бөтөнләй үк әҙәм күҙенән төшөп ҡалмай инде ул берәү ҙә. Фәҙилә инәйгә лә күрше-күләне, Байҙар урамында йәшәгән ике туған ҡустыһы Һөйөнгән Зәйет бабай ингеләп йөрөй. Байҙар урамының атамаһы миңә “Зөлхизә вә Абдрахман” ҡиссаһынан уҡ таныш – Малик бай урамы. Әле лә унда нәҫел-нәсәбе йәшәп ята, улар, әлбиттә, башҡаларҙан байыраҡ түгел, әммә халыҡ телендә тарихтары тере әле. Ә бына Һөйөнгән тигән ҡушамат Зәйет бабайға тиктән генә йәбешмәгәндер ?

Әй, Фәҙилә инәй... Күптән түгел мин дә тимурсылар менән барып сыҡҡайным уға ярҙамға. Хыялыйлығы күңелендә генәлер, донъяһы бөхтә, тәҙрәләрендә бәйләм селтәрҙәр, мейесе ағартылған. Бала-сағаны ҡоймаҡ ҡойоп һыйлап

ҡайтарҙы. Улай ҙа бер малайҙы: «Мин мәшәҡәтләнгән арала күпер яғын ҡараштыр, Әрәшитем ҡайтып төшмәҫме», – тип ҡапҡа алдына сығарып баҫтырып ҡуйҙы... Бысып ярылған утыны ята ине, малайҙар шуны соланына индереп өйҙө. Ҡыҙҙар һыу килтерҙе, иҙән йыуҙы.

– Хөкүмәт ҡарай, Аллаға шөкөр, – тине инәй,– утын-бесәнен килтертә. Кәзәм бар ҙаһа, бына Ҡупшыҡайым менән икебеҙгә һөтө етеп тора. Туғаныма рәхмәт инде, Зәйетемә, ул йөрөй сатан аяғын аямай миңә ярҙам һорап, кәнсәләр тупһаһын йөҙ тапап...

Мин әлеге Зәйет бабай хаҡында уйландым, ә бер малай бөтөнләй башҡа һүҙгә иғтибар иткән: “Хөкүмәт менән Алла бабай бер кәнсәләрҙә ултыра, был әбейсә, “ – тип бөтәһен дә көлдөрҙө. Бәйләнмәнем уға, дөрөҫөрәге, төплө генә итеп ни әйтергә белмәнем. Әмин абыйҙың киҫәтеүе лә иҫемдә: атеистар тәрбиәләй мәктәп.

Әй, Fәҙилә инәй... Бәхил бул, исмаһам, ысын донъя рәхәтен күр, ғәзиз балаңдың нурлы рухы менән осраш – яуҙа шәһит үткәндәр сират күперенән атлап түгел, осоп ҡына уҙа ла тура ожмахҡа әләгә, ти. Һин дә, инәй, ожмах түрендә ултырырһың – кемгә зыяның тейгән был фани донъяла?!

Бәғзе ҡалын нәҫелле бәндәне лә шулай күмәкләшеп оҙатмайҙар һуңғы юлға, Fәҙилә инәйҙе оҙатҡан ише. Һуғыштан ҡайтмаған улын көтөп һарғайған, тоғроларҙан-тоғро әсәләрҙең үрнәге бит ул. Ҡупшыҡайға ла хөрмәт күрһәтелде: уны ауыл осондағы мал зыяратын уратып алған ҡайынлыҡҡа күмделәр.

– Ҡупшыҡайым ауырый, ошо арала ике тапҡыр ташлап ҡараны ла, мине йәлләп, кире ҡайтты, тип торғайны Fәҙилә күрше яңыраҡ. Бесәй өйөнән китеп юғалып үлә бит, ғәҙәттә. Кистән сығып ултырғандар микән? Ҡупшыҡайы алдан йән биргәндер, юғиһә, итәгенән тешләп тартып өйөнә индерер ине. Мәхлүк, бесәйен әйтәм, хужабикәһенең аяҡ осонда тәгәрәп ята. Төнгө һалҡында ни, туңмаҫлыҡмы, ҡапыл шаҡрайтты лаһа... – Мәрхүмәнең өсөн уҡытып ҡайтҡан ҡартәсәйем шулай тип әсенде.

– Колхозда эшләнеме Fәҙилә инәй берәй ваҡыт? – Хәсрәтен еңеләйтмәк, уны һорауға күмә башланым.

– Эшләмәй ни! Ҡайҙа ҡушһалар, шунда эшләне. Ун биш-ун алты йыллап барҙыр – өйҙә. Зиһене ҡаҡшаны бахырҙың тамам, Рәшитенең ҡайғыһынан арына алманы ла ҡуйҙы.

Зөлхизә өләсәйемде күҙ уңында тотоп, икешәр улын юғалтҡан кешеләр ҙә бар, тиергә уйланым да, Абдрахман олатайымды, әсәйемде иҫләп, өндәшмәнем. Башҡа миҫал килтерҙем.

– Таллы ауылындағы Мөхлисә инәйҙең өс улы һуғышта ятып ҡалған, ти, ул бирешмәгән?

– Һәр кемдең дә йөрәк көсө, зиһен ҡеүәһе бер иш кенә түгел, ҡолоҡасым. –Ҡартәсәйем Fәҙилә инәйҙәр яғына ҡараған тәҙрә янына барып баҫты ла. – Һүнде... – тип ҡуйҙы.

– Ҡартәсәй, анау Һөйөнгән Зәйет бабайҙың ҡушаматы ҡайҙан килеп сыҡҡан, һөйлә әле?

– Һы... Һиңә ҡыҙыҡ булһа, һөйләйем һуң, хәтереңә теркәп ҡуй, әләйһәң.

– Ҡыҙыҡ, ныҡ ҡыҙығам!

– Һуғыштан һуң ир-аттың күпселеге әйләнеп ҡайтманы, ҡайтҡаны ла – ғәрип-ғөрәбә, имен-һауҙары бик әҙ. Ағзалары теүәленең дә күңеле имгәнгән инде

ул... – Ҡартәсәйем шулай алыҫтан башланы. Уны йәүкәләп ҡуйҙым:

– Сулаҡ Мансур ағай, ике аяҡһыҙ ҡайтҡан Йәнсура бабай мәрхүм... (Кәнсәләр йыйыштырған осорҙа халыҡты тотош танып бөттөм тиерлек). Ә был Һөйөнгән Зәйетте бик белмәйем?

– Уның эштән башы сыҡмай, гәп һатып йөрөргә ваҡыты юҡ. Ә ҡушаматымы? Һуғыштан ҡырҡ икенсенең башында уҡ яраланып ҡайтты: һыңар аяғы бәкәленән өҙөлгән, уң ҡулының ике бармағы юҡ. Сатанмын тип торманы ул, ағас аяҡ яһатып кейҙе лә колхоз эшенән ҡалманы. Ә ҡушаматы ҡайтыу менән тағылды, гел бер үк хәбәрҙе һөйләүе арҡаһында. Мин дә бер ишетеп торҙом, һүҙмә-һүҙ тигеләй иҫтә ҡалған, тыңла, тап унынса бәйән итәм:

– Беҙҙе штрафбаттыҡылар артынан күтәрәләр ине атакаға, ә уларҙы фронттың иң ҡурҡыныс урынына тығалар. Мин яраланған көндө лә... Өс көн, өс төн туҡтауһыҙ алыш барҙы. Пушкалар ата, гранаталар шартлай, миналар ярыла, автоматтар тырылдай – әллә нимес үлемесле ут яуҙыра, әллә үҙебеҙҙекеләр, айырып алырлыҡ түгел. Шул саҡ мина ярсығы прикладтағы ике бармағымды, баш бармаҡ менән һуҡ бармаҡты, ҡыйып үтте, һиҙмәй ҙә ҡалдым, хатта ауыртманы ла кеүек. Бер ҡарағанда бармаҡтарым ерҙә ҡыймырлап ята ине, икенсе ҡараһам – тупраҡ баҫҡан. Ҡулымдың тотош һулҡылдап һыҙлай башлауына, аяғыма пуля килеп тейҙе, итегем тиҙүк ҡанға тулды... Күҙемде асһам, һул аяғымды киҫкәндәр, гангренанан ҡурҡытып. Уң ҡулда ике бармаҡ юҡ,уныһы ярай инде... Аяҡһыҙ нишләрмен! Эргәлә ятҡан яралы урыҫ һалдаты, өҙгәләнеүемде күрептер, әйтеп ҡуйҙы: «Бармаҡһыҙ ғына ҡалһаң, браток, трибуналға эләгер инең. “Үҙенә үҙе атып, аяҡ-ҡул бармаҡтарынан яҙыусылар бар икән, уларҙы дезертирҙан яман хөкөм итәләр, ти, шуны белдем. Эй, һөйөндөм, әлдә аяғыма тейгән пуля, тип. Ысын һөйөндөм...

Ҡартәсәйем теге көн мин индереп сыҡҡан йомғаҡтарҙы һикегә тәгәрәтте, хәҙер урам яҡ тәҙрә янына менеп ултырып, көн яҡтыһында ойоҡбаш бәйләйәсәк. Ә миңә Яңы өйгә йүгерергә кәрәк. Йүгерҙем.

Өләсәйем Fәҙилә инәйҙе оҙатырға бара алманы. Көн һыуытһа, аяҡһыҙ булып ултыра ул, фермала алған “ырматизы” ҡуҙғала. Ҡултыҡлап ишек алдына сығарып ҡараным, юҡ, ары атлай алманы. Көн дә аяҡтарын камфора менән ыуып, һарыҡ тиреһенә урап ултыра торғас, әкренләп ысҡындыра торған ул сир...

Кисләтеп кенә Татар әбекәйгә юл тоттом. Журналымды, тауарымды ҡалдырып, тиҙ генә инеп сығарырмын, тиһәм, Татар әбекәй тотҡарланы:

– Үлчәмеңе алыйм, Нуриякәем.

– Бар ҙа инде һиндә?

– Әллә кайчангы бит ул үлчәмнәр, син хәзер үскән кыз ич, тотып кияүгә бирерлек.

– Кейәүең үҙеңә булһын, Йәнкиҫәк! – Шулай тип әйттем дә ҡуйҙымсы. Көтмәгәндә.

– Ә-ә, бигүк алыс китмәгәнсең әле теге кечкенә кызчык Нуриядән. Җанкисәк дигәнеңә рәхмәт алай да. Кил әле, билеңне үлчик!

– Бик оҙон итмәйек, хәҙер ҡыҫҡараҡ итәк модала.

– Бәрәч, иелгәндә оятың күренерлек булмасын. Тоташ складкаларга җитми, алдан икәүне, арттан икәүне салабыз да, – тип һөйләнде Татар әбекәй һәм тауарҙы маҡтап ҡуйҙы: – Бу бөтәрләнми, бер үтүкләсәң, тора инде. Затлы әйбер затлы инде ул, югыйсә, толпарчыканнар әйтмешли, “очсызлының чулпасы татсыз”...

* * *

Бер генә буш минут юҡ – шыршы байрамына әҙерләнәбеҙ: мәктәптә лә, өй эсендә лә. Камила маскарадҡа ҡупшыланып мәш килә. Принцесса булғыһы килә уның. Индианка итеп кейендерергә өгөтләп ҡарайым да – яҡын да килмәй, ситсанан сари кейәләрме, затлы тауар бирегеҙ, әтеү, ти. Әйткәндәй, мин үҙем шаршауҙы ла сари итеп кейә инем, маңлайыма буяу төртәм дә... Уф, яңыраҡ ҡына белдем: ул буяу “тика” тип атала икән, ирле ҡатын булыуға ишара, имеш. Абау, әлдә бер кем шуға иғтибар итмәгән, көлмәгән минән. Бына әле үҙемдән үҙем көлөп торам, аңһыҙҙан хур булыуы оҙаҡ түгел, юғиһә. Бәс, теләй икән, принцесса булһын минең һеңлем! Тик принцессаға кәттәһе кәрәк тәһә кейемдең? Әмәлен тапҡан ҡыҙыҡай: тәҙрә селтәренән, мендәр япҡысынан, һандыҡ төбөндә ятҡан теге ялтыр епле үтә күренмәле яулыҡтан, киҫмәй-тураҡламай ғына, килештереп күлдәк теккән. Аҙаҡ һүтеп бирәм, ти. Сәй ҡурғашынан таж да яһап кейҙе башына. Әсәйемдең ҡыҙыл быяла мунсағын теҙеп йәбештергәйне, оҡшай яҙҙы ысын тажға. “Кәртинкәһең инде, батша ҡыҙынан да матурыраҡһың”! – Өләсәйем шулай тип тә ебәргәс, Камила бер-ике көн маҡтанып йөрөнө, бөтә ҡиәфәте менән беҙҙең ише ябай әҙәмдәр араһында йөрөгән аҡһөйәк икәнлеген күрһәтте. Торғаны артистка! Һөнәре кем булыр, әммә хәҙерҙән үк ун ике йәшлек кенә был ҡыҙыҡайҙың киләсәктә шәп ҡатын булыры төҫмөрләнә. Үҙенең затын әлүктән аңлай һәм һанлай белә. Камилдың иһә бер бәләһе юҡ, мыштым ғына ҡушҡанды эшләп тик йөрөй. Ана, әле лә әсәйемдең иҫке яһалма тунынан Татар әбекәйҙән тектереп алған айыу костюмын кейергә риза, еңен-балағын оҙонайтып бирәһе генә. Өс йыл кейә инде шуны, һис мыжымай. Шуларҙы әйтһәң, Камила: «Малай кешегә бара ул», – тип кенә ҡуя. Әллә маҡтауы, әллә түбәнһетеүе? Һуңғы осор һеңлем минең иғтибарҙы ныҡ тарта башланы. Мыжыҡлығы менән теңкәгә теймәй хәҙер, киреһенсә, ҡыҫылмаған эше юҡ, бөтәһен бер юлы белергә теләй. Самат ағай Ғаян менән Камилды Толпарсыҡҡанға быраулап уйылған кескәй мәкеләрҙән балыҡ ҡармаҡларға алып барғайны, шунан ҡайтып сәй эсеп ултырғанда, өләсәйемдең быларҙы йүпәтләп: “Егет кешегә етмеш төрлө һөнәр ҙә әҙ” – тип әйтеүенә Камила: “Ә ҡатын-ҡыҙға етмеш ете төрлө һөнәр ҙә әҙ – етмешен ул тыуғанда уҡ белеп тыуа!” – тип сирттерҙе. Малайҙар, уны ишетмәгәндәй, һаман балыҡ емләү, балыҡ ҡарпытыу хаҡында һөйләште. Самат ағай иһә миңә күҙҙәрен ялтыратып ҡарап ҡуйҙы, һин нисек уйлайһың, тигәндәй. Өндәшмәнем. Сөнки был тәңгәлдә тәғәйен фекер йөрөтөп ҡарағаным юҡ ине әлегә. Ә Камила уйланған...

Ошо һөйләшеүҙән һуң һеңлем уғата сәмләнеп китте. Өләсәйемдең ай-вайына ҡуймай, йөн иләргә, сиратырға өйрәнде. Йомғаҡ йомарлау етмәгәнме – ошоғаса шул ине шөғөлө. Ҡышҡы каникулда Татар әбекәйҙән кейем бесергә, тегергә өйрәнергә иҫәбе бар, етмәһә. Әсәйем бер барғанында Белореттан иҫке генә “Зингер” машинкаһын һатып алып ҡайтҡайны, баштараҡ, игеҙәктәр бәләкәй саҡта, әҙ-мәҙ тегенеп маташты ла ташлап ҡуйҙы, текелдәүе эсемде бошора, тип. Татар әбекәй, машинканың тауышы йәнемде тынысландыра, тисе? Шул онотолған “Зингер”ҙы Камила бер мөйөштә ябыулы торған еренән алып, энәһен күҙәүләп ҡуйҙы. Ысын тегенсе кеүек ҡылана ҡыҙыҡай...

Өй эсендәге кескәй донъяла ла, эйе, туҡтауһыҙ үҙгәрештәр бара, тормош ҡаҙаны ҡайнай. Ул ҡаҙан тотош ауылда сағыштырһыҙ дәүерәк һәм урғылып-

ташып тора. Ҙур донъяла – илдә, ғөмүмән Ер шарында (һәм Оло йыһанда) барған хәл-ваҡиғаларҙан да ситтә ҡалмайбыҙ. Бөйөк Ватан һуғышы, Хиросима фажиғәләре, Гималай тауҙарындағы ҡар кешеһе Йети, джунглиҙа бүре өйөрөндә тәрбиәләнеп үҫкән малай Маугли – был турала радио һөйләп тора, бер нисә йортта телевизор бар хатта, гәзит-журналдар хаҡында әйтеп тә тораһы юҡ. Ә элек? Томана булған халыҡ... Бәс, минең ауылымда белмәгәндәрме ни һуғыш афәтен – беҙҙекеләр ҙә унда баш һалған, Хиросима ҡайғыһына беҙме битараф – үҙебеҙҙәге Ҡыштым шул хәлдә. Ҡар кешеһенең эҙен, ана, Айыусы һунарсылары үҙ күҙҙәре менән күргән дә хатта. Урал урмандарында инә бүре имеҙеп үҫтергән малай тураһындағы риүәйәтте ҡайһы башҡорт хәтерләмәй? Һәр йәһәттән хәбәрҙарбыҙ. Сөнки Толпарлы борон-борондан дүрт тарафҡа илткән юлдар менән бәйле.

Миңә ҡалһа, ауыл – донъя кендеге ул. Шул кендек бөтә ғәләмде ризыҡ менән туйындыра, мәңге юйылмаҫ ҡан хәтере, тел байлығы, рухиәт менән һуғара һәм, моғайын, тап ошо бәйләнеш аша ҡайтарыла уға ғаләм шаңдауҙары. (Кеше өсөн әсә ҡарыны кесе йыһан булһа, кешелектең кесе йыһаны – ауылдыр.)

Башымды тағы эшкә сумырҙым. Татар әбекәй тиҙүк тегеп биргән итәгемде кейеп барҙым да отряд вожатыйҙарына мода күрһәттем, ныҡ оҡшаттылар. Өлкән синыф ҡыҙҙарына шыбырлағыҙ, пионер бүлмәһенә килеп күрһендәр яңы фасонды, тинем, көтөүе менән йөрөмәһендәр, икешәр-өсәрләп кенә.

Ул көндө ишек ябылманы. Иртәгәһенә Сәхи ағайҙың йыуан төргәк тауарын алып та бөткәндәр, ҡиммәтле тип тормағандар. Шунан ни, билдәле, Татар әбекәйҙе баштан-аяҡ заказға күмгәндәр. Бөтәһенә лә тиҙ кәрәк! “Йөз юбканы ничек тегеп өлгертим сезгә, җен карчыгымы мин әллә!” – тип әйтә, ти, тегенсе. Һанап сыҡҡандар, йөҙ үк түгел, егерме ете генә, ти. “Менә чиратыгыз, килгән берегезне, үлчәме-исеме белән, язып бардым дәфтәргә – каникулдан соңга килеп алырсыз, аннан да алда булмый!” – шулай ҡырт киҫкәс, үҙемдекеләр, йәғни пионеркалар, менән ныҡлап һөйләшеп ҡуйҙым: заказдарын ашыҡтырмаҫҡа, Совет Армияһы көнөнә дружина сборына яңы форма менән килергә. Комсомолкалар нишләр, үҙҙәре ҡараһын.

Бер арала инеп, Татар әбекәйҙе лә тынысландырҙым: “Күҙендә бөтөрөп, көнөтөнө тегенеп ултырма, Йәнкиҫәк, 23 февралгә тиклем өлгөртһәң, таман булыр”.

– Әл дә искәрттең, Нуриякәем, гаҗиз булып утыра идем... – тип еңел һулап ҡуйҙы тегенсе, ике айлап ваҡыт барлығын белгәс.

Ауыл үҙенең тел тирмәнендә тартып алғандыр ул ҡиммәткә төшкән фасонлы итәктәрҙе лә. Бер-ике көн әйләндерә-тулғандыра ла ул быңдай хәбәрҙе, онота, елгә осороп ебәрә. Туҡтауһыҙ эшләп тора тирмәне... Мәҫәләнме? Хәйри бурға тип шул тирәләге кәртәгә элеп ҡуйылған күн бейәләйҙе бер малай күреп ҡалған да эйәһенә алып барып биргән. Теге химия уҡытҡан абыйҙыҡы икән, ундай һирәк әйбер таныулы була инде ул. Абый үҙенсә йәлләгәндер Хәйривара ағайҙы: ҡышҡы һалҡында тәгәрмәсте ҡулы менән әйләндереп йөрөгән кешегә күн бейәләй ҡулайыраҡ таһа. Быңа геүләп алды ауыл, теге малайҙы маҡтап, “белеме һай булһа ла, эсе тар түгел икән” тип, абыйҙы хуплап.

Торараҡ, яңы ваҡиға иғтибарын яуланы Толпарлының. Закир Мөслөйөнә ике яҡтан алимент аҡсалары яуа башланы. Почталағылар, алимент ул тәртиптә ебәрелмәй, тип ҡараһалар ҙа, хатта ки был аҡсаларҙың кемдән һәм ҡайҙан

икәнлеген белһәләр ҙә, ауылдың үҙ тәфтише – һалдаттар сөгөлдөр ташыған мәлде ҡайтанан иҫкә төшөрөргә, полковниктан малай тапҡан Ҡарағашты, самогонсы Сәмәй ҡарсыҡты ла ҡалдырмай, йәшенле йәй фажиғәһен дә ҡуҙғатып, хәтер барлап сығырға форсат тыуҙы.

...Теге юлы, Мөслимә апайҙың хәрби частан килгән хаттарҙы йыртып ырғытып тороуын почтальонка Зөмәрә апай аша белгәс, Мәүлиҙә менән икәүләп Олексийҙан сер тартып ҡарарға булдыҡ: кем менән осрашып йөрөнө икән ул беҙҙең Сафура һылыуыбыҙ? Алданып, хур булды бит, тыума бала күтәреп ултыра. Ундайҙарҙың хәҙер тетмәһен тетәләр ауылда, һуғыштан һуңғы ир-атҡа ҡытлыҡ заман түгел дәһә, тиңдәштәре тубыҡ тиңенән – табыр ине кейәүҙе үҙебеҙҙә лә, бәс.

Ә ҡыҙ, ысынлап та, һылыу ине, аҡ йөҙлө, ҡыйғас ҡашлы, һомғол буйлы. Етмәһә, ифрат оҫта бейеүсе, анау тансаларға йөрөп кенә һәләк иткәндер үҙен? Ниһайәт, Олексийҙың яуабы әлеге апаһы аша Мәүлиҙә ҡулына килеп инде. Күрәнле буйына самауыр йыуырға тип барҙыҡ та шунда аулаҡта уҡыныҡ хатты.

– Шул Ҡандра татарылыр, тип уйлағайным да! Урыҫ-мурыҫ менән йөрөргә Сафура улай уҡ үткер, аҙғын ҡыҙға оҡшамаған. Татар барҙа – хәтәр бар! – Ҡыҙып киткән еремдән шып туҡтаным. Мәүлиҙәнең мине ҡултыҡлап торған ҡулы ағас кеүек ҡатты ла ҡуйҙысы? Абау, эргәмдә урыҫ һыңары украинды һөйгән әхирәтем тора лаһа, уны үпкәләтәм дәһә. – Әй, мөхәббәткә маңҡа мешать итмәй инде, нимәгә ярһыйым, – тинем дә махсус өҫтәп ебәрҙем: – Үҙемә берәһе лә ҡарамағас, көнләшеп киттемсе.

– Һин бәләкәс булып ҡалдың, быйыл булһа, үҙеңде урлап ҡасырҙар ине әле, – тип хәлемде еңеләйтте Мәүлиҙә. – Мин Олексийға кейәүгә барғас, йыл буйына һөйләрҙәр, атайымдың бәрейе ҡубыр инде, ә, Нурия?

– Ҡубыр ҙа... Ҡайғырма, Әмин абый тиҙ тыныслана ул. Бөгөн барырға тормайһың да кейәүгә? Алам, тиме ни?

– Юҡсы. Ике-өс хат алышып ҡына... Ул алмаһа, Нурия, бел, башҡа берәүгә лә бармайым, ирһеҙ ҡартайһам ҡартаям!

– Белдем...

Шуны ла белдем: атай менән үҫкән ҡыҙҙар “кейәү”, “ир” тигән һүҙҙе теленә алыуҙы бер ни күрмәй. Моғайын, был төшөнсәләр улар өсөн тәбиғиҙер.

Сафураның үҙенә алдан өндәшмәй торҙоҡ, Мөслимә апайҙың хаслығын да, Олексийҙың хатын да әлегә сер итеп тоттоҡ. Апайыраҡ та беҙгә, мәктәпте ун йыллыҡ сағында бөтөп ҡотолдо – йә әрләп ташлар. Унан килеп, теге һалдат таууш бирерме, юҡмы әле. Алеша, уға дөрөҫөн яҙҙым, ҡыҙҙың хәлен аңлаттым, тигән дә ул...

Беҙ Сафураның күңелен аяп йөрөгән арала, ауыл зыҡ ҡупты: Ҡандра егете хат-фәлән яҙып маташмаған, үҙе килгән дә төшкән!

Ваҡыт тиҙ үтә шул, һалдат армиянан ҡайтҡан, өйләнеп тә өлгөргән. Ҡандра үҙебеҙҙә – Башҡортостанда ла бит... Тик... Яҡын араларҙы ла барып етә алмаҫлыҡ итеп алыҫайта торған сәбәптәр була икән. Сафураны килен итеп төшөрә алмай Ҡандра ере.

Хәбәр бер сама иләктән иләнеп, ләстит кәбәге осоп китеп, хәҡиҡәт тосо күренгәс, шулар асыҡланды: егет бик ныҡ үкенгән, Сафура мине көтһә, килеп алыу ине ниәтем, ә ул хаттарыма яуап бирмәне, тип өҙгәләнгән.

Беҙҙең яҡта һылыуҙарыбыҙҙы рисуай иткәндәрҙең арт һабағын уҡытырға ла күп һорамайҙар, әммә Ҡандра егетен битәрләп ҡалманы Толпарлы. Сабыйын күкрәгенә ҡыҫып яратҡан да Сафураға әйткән, ти бит: «Малай минеке, минем күзләр... Җаным, гафу ит! Теләсәң, алиментка бир, баш тартмыйм. Үзара ризалык белән булса, яхшырак булыр иде, даими ярдәм итәргә әзермен. Шикләнмә, җаным... Нигә соң хатларыма җавап язмадың? Загслап ала идем сине, анттыр менә, җаным!»

Ҡандра кейәүенең (ауыл уны кейәү тип таныны хәҙер) был һүҙҙәрен әлеге почтальонка Зөмәрә апай ишетеп торған, бер-бер бәхәс килеп сыҡһа, Сафураны яҡлашырға тип өйҙәренә махсус барған, ти. Уның ҡолағына ингән хәбәр халыҡ-ҡа тиҙ барып етә, билдәле. Ахырҙа, телдән-телгә тирбәлдереп, өҫтәп-ҡабартып йөрөтә торғас, Толпарлы был ваҡиғанан “Кейәү жаным” тигәнде генә йолҡоп алып ҡалды. Имеш, Мөслимә апай Ҡандра егетенә, юхаланып, шулай тип өндәшкән. Закир ағай тап шул көндө йомош менән Стәрлегә киткән булған, төртмә телдәрҙән ҡотолған, әйтәгүр. Ә Закир Мөслөйөнә килгәндә, юхаланды-рырһың уны, әллә ниндәй үҙ һүҙле апай ул, кире сигенәһе башы юҡ. «Ятатһаң, армияңдан тура бында килер инең, өйләнеп ятмаҫ инең,– тип шартлатып әйтеп тора, ти, егеткә, – ҡыҙ яуап бирмәгән, имеш, кеше может үлгәндер йә ауырып киткәндер – бел тәүҙә!» Ошонаһона ышанам: сөгөлдөрҙә эшләгәндә мин уның холҡон һынаным, һындырырлыҡ түгел.

Ана шунан һуң баяғы аҡсалар килеп керҙе лә инде Мөслимә апайҙарға. Бер яҡтан «Кейәү жаным» ебәргән, икенсе яҡтан – Сафура үҙе. «Мә, һинең арҡала етем ҡалды был бала!» – тип малайын әсәһенә тотторған да Себергә, Надым ҡа-лаһына, эшкә сыҡҡан да киткән дәһә, шунан һалған алиментты. Бәс, һүҙҙең дө-рөҫө кәрәк, баланды ҡараған өсөн бирелгән аҡсаны тағы ҡайһылай атарға? Хә-йер түгел дәһә. Ә Закир Мөслөйө почтала уҡ алиментдарҙы кассаға һалып ҡуй-ған, ейәнемә үҫкәс кәрәк булыр, тип. Әйтәм дәһә шундай ныҡ апай ул, үҙ туҡһаны туҡһан. Сафураһы малайын бөтөнләй ташлап ҡуйһа ла, өләсәһе һау булһын, кеше итәсәк ейәнен.

* * *

Толпарлыла ла, бар Ер йөҙөндәге кеүек, кешенең ниндәйе генә юҡ: яҡшыһы – яманы, иманлыһы – иманһыҙы, матуры – йәмһеҙе. Иң иманһыҙы Хәйри бурҙыр, тиһәм, түгел икән? Сәмәй ҡортҡаға рәнйей халыҡ, ир-атты эскесегә әйләндереп бөтә ләһә шул самогонкаһы менән, тип. Тотанаҡһыҙыраҡ ҡатын-ҡыҙ ҙа әүрәп бара ул шайтан эсемлегенә. Ярай инде, һуғыштан тән яраһы алып, ғәрипләнеп ҡайтҡан ағайҙар, һыҙланыуҙарын баҫыр өсөн эскеләй, уларҙың нервылары ла ҡаҡшаған. Ә шап-шаҡтай ике ир эсеп үлгәс (колхоздың иҫке силос соҡоронда аунап ятҡан ерҙәренән тапҡандар), ауылдың түҙеме сигенә етте! Унлаған ҡатын Сәмәйҙе «хөкөм итергә» барған. Ҡапҡаһын эстән бикләп, ҡасып ҡотолған. Өй ишегендә лә йоҙаҡ эленеп тора, ти. Моғайын, кемдер иҫкәрткән ҡортҡаны. Ҡа-тындар самогонсыны эт ишетмәгән яман һүҙҙәр менән әрләп,тәҙрәләренә таш бәргесләп, үстәрен ҡайтарған бер сама. «Йәшенеп өлгөргән, ҡулға эләкһәме, сәсен йолҡор инек албаҫтының, шашты бит, үҙ башына булғыры!» – тип ҡырсы-налар, ти.

Халыҡты былай сығырынан сығарғас, Сәмәйҙең көнө бөттө Толпарсыҡҡанда. Бәс, Сәмиғуллин ҡайҙа ҡарай? Ошо арала ғына ике килеп тикшергән, самогон

аппаратын тартып алырға тип. Закон юҡ тиктомалға кеше өйөнә тентеү һалырға, тип ҡаршылашҡан әле Сәмәй, етмәһә. Мин үҙем – закон, тигән дә Сәмиғуллин, бының донъяһына овчаркаһын индереп ебәргән. Эт бер ерҙе ҡалдырмай еҫкәп сыҡҡан, әммә теге  аппараттың эҙенә төшмәгән. Иң ғәжәбе – тамсы ла самогон юҡ, ти, өйҙә, исмаһам. Тотош ихатаны еҫкәп сыҡҡан овчарка, Сәмәйгә яза бирҙертерлек дәлилдәр, гүйә, елгә осҡан? Шунан ни, нишләһен, үҙен аҡлаптыр, Сәмиғуллин: «Минең Вулканға (этенә инде) санкция кәрәкмәй!» – тигән. Уның менән килгән Сәкинә апа – ҡатын-ҡыҙҙар советы рәйесе лә –  «Ай, эттәгенәһе!» тип бот сапҡан. Һис  аптырап бармаған, үҙе хаҡында үҙе гелән, мин – математик, мин – конкрет кеше, мине тишек шүмәнгә ултыртыуы ҡыйын, тигән апаны ла һемәйткән был Сәмәй ҡортҡа.  Шүмән тигәненә ултырып шыуғандар икән  әүәле:  ҡабыҡтан йәки  туңған мал тиҙәгенән яһалған «сана» икән дәһә. Ҡаты тиҙәкте йомро ҡулса эсенә тултырып, өҫтөнә һыу ҡойоп туңдыраһың да, ҡуптарып алаһың – шүмәнең әҙер.  Мәрәкәләр ул тауҙан туп-тура түгел, ә өйрөлөп-өйрөлөп, зыр-зыр шыуып төшөүҙәре?

Сәмиғуллин да, Сәкинә апа ла мәсьәләнең төбөнә төшмәй ҡала торғандарҙан түгел. Тентеү һөҙөмтә бирмәгәс, береһе эскелек менән мауыҡмаған ир-атты йыйып кәңәш ҡорған, икенсеһе бисә-сәсәне ойошторған:нисек тә Сәмәйҙе фашларға! Ҡортҡаның өйөндә самогон юҡ, магазинға ла араҡы килтерелмәне шул арала, ә  эскәндәр эсеүенән туҡтамайҙар. Ҡайҙан алып эсәләр? Сәкинә апа миңә лә комсомол, пионер активын эҙәрмәнлеккә йәлеп итергә ҡушты.

Ниһайәт, тотолдо Сәмәй! Ысын албаҫты икән шул: төн йөҙөндә, кеше аяғы һил булғас, йылт ҡына өйөнән сыға ла юҡ була, ти. Күршегә лә инмәй, үҙенә лә ҡайтмай...  Шул тирәлә осрашып йөрөгән ике ғашиҡ иғтибар иткән:  артынан һепертке менән эҙен һепереп бара, әллә ен ҡарсығы микән,тип ҡурҡҡандар ҙа һөйләгәндәр кемгәлер. Сигнал тиҙүк Сәмиғуллинға барып еткән. Баҡса артлаш күршеләренең ташландыҡ иҫке мунсаһында ҡыуа, имеш, ҡортҡа самогонын. Күршеләре күҙ ҙә йоммай танған, белмәмеш тә күрмәмеш ҡыланалар, ти. Яңы мунсаны яғабыҙ, иҫкеһенә аяҡ та баҫҡаныбыҙ юҡ, һүтеп ташларға ҡул етмәй тора, тигәндәр. Кем белә, бәлки, алдамайҙарҙыр? Сәмәй тотош утыныбыҙҙы яғып бөтөргән,  тип бәлә яғалар, ти бит .

Шунан ни ҡалғаны ла асыҡланды. Төндә ҡыуып, шешәгә тултырып, ҡайтышлай уҡ теге силос соҡорона, шунда сереп, һаҫып ятҡан ҡалдыҡ силос араһына тығып йәшереп китә икән. Алдан уҡ аҡсаһын биреп ҡуйған ағайҙар кистән шунда “ҡыйыш тейәргә” баралар... Баяғы мәрхүмдәр, береһе  Мәҡсүт ағай (ҡатыны Кәшифә апай менән сөгәлдөрҙә эшләгәйнек, баҫыу өҫтөндә сирләп йығылғайны), шешәләрен өҫкә алып менеп тә тормай, соҡор төбөндә эскәндәр...

Сәмиғуллиндың Вулканы силос араһынан ун буш шешә, өс тулы шешә соҡоп сығарған. Экспертизаға биргәс, Сәмәйҙең самогонға тауыҡ тиҙәге ҡушҡаны асыҡланған. Шулай итһәң, эсемлек зәһәрерәк, ғәйрәтлерәк була, тиме.

Ахырҙа Сәмәй ҡортҡаны район үҙәгенә алып киттеләр – енәйәт эше ҡуҙғатылған. Әммә ауылдың үҙ ҡануниәте лә бар. Әллә нисә йыйылышта тикшерҙеләр был фажиғәне. Ике кеше үлеп ҡалды, ауыр йылдарҙа ла, хатта йот осоронда ла йөҙөн ҡарайтмай, күрше-тирә халыҡҡа ла terәк була алған, атаҡлы муллалары булған, мәғрифәт, мәҙәниәт нуры тараҡан мәшһүр Толпарлыбыҙға хурлыҡ яғылды лаһа. Миңә ҡатын-ҡыҙҙар ултырышында ҡатнашырға тура килде,

Сәкинә апа саҡырҙы, тыңлап ултыр, район гәзитенә яҙырһың, тип. Унан хәбәрсе килеп, үҙенсә тасуирлап, ауылыбыҙҙы донъяға рисуай иткәйне инде итеүен. Ярар, мин үҙ күҙлегемдән ҡарап яҙырмын, ғүмер буйы намыҫ менән йәшәгән Бүреһуҡҡан олатай, алтын ҡуллы Хәйрулла ағай, Күк юрға тоҡомон һаҡлап ҡалған егәрле Мөхәрләм нәҫеле хаҡында иҫкәртермен, ҡырҙан төшкән килендәрҙе лә ситкә тибәрмәгән илгәҙәк кешеләребеҙ хаҡында һөйләрмен. Орденлы Зөлхизә өләсәйемде лә телгә алырмын, бәс! Белһендәр Толпарлының лайыҡлы кешеләрен, бер Сәмәй өсөн бәҫебеҙҙе төшөрөп ташламаһындар әле!

Ҡатын-ҡыҙҙар советында Сәмәйҙең ысын исеме яңғыраны – Хәлисә. Самогонсылығынан Сәмәйгә әйләнгәнлеген күптән белһәм дә, тағы бер ғәжәп иттем: ҡушаматты оҫта тағалар беҙҙә, әйтәгүр. Абай булайым үҙем дә, йәбешһә лә арыуы йәбешһен, тим, ҡушаматтың. Әлегәсә Нуриямын, шөкөр, Баязит ҡыҙы тип үҙәгемде өҙөп алалар ара-тирә… Атайым хаҡындағы уйыма эйәреп әллә ҡайҙа китә алманым, самогонға яһалған экспертиза тәңгәлендә һүҙ сығыуға, Мәҡсүт Кәшфийе үкһеп илап ебәрҙе:

– Әйтәм, күҙенә күренеп йонсоно бахырымдың, айбалта күтәреп батша һаҡсылары баҫтыра, ти ҙә ҡайҙа кереп боҫорға белмәй сәбәләнергә тотона. Карауат аҫтына ла инеп китә… Ниндәй батша, ниткән айбалта? Аптырашымдан Әүхәт ағайҙы ла саҡырғайным бер көндө, бсих булған, тисе.

– Психикаһы боҙолған, эсеүҙән, белая горячка йәғни. – Фельдшер ағай тыныс ҡына тауыш менән йүнәтеп ҡуйҙы, ултырышҡа уны ла өндәшкәйнеләр. – Ана шул тауыҡ тиҙәге галлюцинация биргән дә инде, йәғни күҙенә күренгән. Әүхәт ағайҙың һүҙ ыңғайы "йәғни"һен ҡалдырмай, медицина телен аңғартып ҡуя торған шәп ғәҙәте бар. Мәктәптә йыш ҡына лекциялар менән сығыш яһай ул. Бала-сағаға ҡыҙыҡ түгел бит уның төрлө сирҙән һаҡланыу, дауаланыу тураһындағы хәбәрҙәре, шуға күрә теләһә ниндәй һорауҙар биреп албырғатырға әүәҫтәр. Бер шулай, алтынсы синыфта инек шикелле, беҙгә лә килгәйне. «Инфаркт миокарда, йәғни йөрәк инфаркты, тәмәке тартҡандарҙа йыш осрай», – тип кенә башлағайны, Айыусы ҡыҙҙары ултырған яҡтан ҡысҡыра һалдылар: «Үҙең тартаһың бит, ағай!» Шунан ни фельдшер һуғышта ҡатнашыуын, хәрби госпиталдә көнө-төнө операция өҫтәле артында баҫып тороуын,аяҡ өҫтө йоҡлап китмәҫ өсөн тәмәке тартырға мәжбүр булыуын һөйләп алды. Әҙерләнеп килгән темаһына тағы һүҙ ялғағайны, Әшрәф һорау бирҙе: «Кешенең йөрәге йоҙроғо дәүмәллек була, тиҙәр, шул ысынмы?» Әүхәт ағай әйтеүенсә, ысын икән: йөрәк – бер йоҙроҡ, ә баш мейеһе ике йоҙроҡ ҙурлыҡта, ти. Уңарсы звонок шылтыраны, малайҙар кемуҙарҙан йоҙроҡтарын үлсәшә, үсекләшә-төртөшә башланы…

Ултырышта ишеткәндәрҙе яҙып барам, ыңғайында бала саҡтағы хәлдәр ҙә хәтер офоғонда ялтлап алғылай шулай. Сәмәй ҡортҡа йәшлеге һуғыш йылдарына тап килеп, кейәү сыҡмай ҡыуарған ҡарт ҡыҙҙарҙың береһе икән. Ҡырҡ алтыла ғына, имеш, үҙе, ә "ҡортҡа" рәтендә йөрөй, ҡотһоҙ үҙе килеп. Баҫыуҙа аңһыҙҙан лобогрейка ҡанаты аҫтына кереп китеп ҡазаланған да, уң ҡулы терһәгенән бөгөлмәй ҡалған, шуға колхоз эшенә сығарып бармайҙар уны. Самогон ҡайнатырға бер ҙә ҡамасау түгел зәғифлеге? Ана шул аламалығы арҡаһында һөймәлеге лә юҡтыр уның: эсе йәмһеҙҙең тышы йәмһеҙ.

Анау "биләмә"ләренә лә индермәнеләр ирҙәр ошо Хәлисәне, исмаһам, һарыуы ҡайнап боҙолдо ул, тип йәлләп тә ҡуялар ине ҡайһы берҙә. Әлегәсә һаман

ярлыҡау эҙләне ауыл... Ә хәҙер уны яҡлаусы, ҡыҙғаныусы юҡ! Күрәләтә тыйылған сикте ашатлап үтте ләһә: бисә-сәсә күпме инәлде, өгөтләне, әрләне-ҡарғаны – туҡтаманы, ҡомһоҙлоғона баш булманы. Ала бына хәҙер яҙаһын.

Нишләптер, суд ҡарары көтөлгәнсә ҡаты булманы, шартлы рәүештә генә хөкөм ителде Сәмәй. Ә бына яҙаның Күктән төшөрөлгәне һәр кемде тетрәндерҙе: көпә-көндөҙ ҡортҡаның йорто нигеҙе-нийе менән баҙына убырылып төшөп китеп ҡыйралған, абау! Күргән кеше лә бар, ти: ҡыйығына һауанан ҙур суҡмар һуҙылып килеп төшкән дә, өй ҡапыл юҡ булған. Күҙ асып йомғансы. Бурама аласығы, әбрәкәйе генә һерәйеп ултырып ҡалған. Өйҙә булһа, үҙен ер йотор ине микән?

Хаҡ Тәғәлә хөкөмөмө был, ярабби?! Мәктәп китапханаһында төрлө журналдар өйөлөп ята, шуларҙың береһенән уҡығайным. «Ҡарғыш төшә» тигәндә мистикаға һанаған фән үҙенсә аңлата: һәр кемдең ҡеүәтле энергетик көсө бар һәм шул көс, бигерәк тә күп кешенең тупланма энергетикаһы, бер нөктәгә йүнәлтелһә, шул нөктәне яндырып, емереп юҡ итеүе лә ихтимал. Тимәк, халыҡтың энергетик ҡеүәте бергә ойошоп, Сәмәйҙең өйөнә барып төшкән? Ә ул ҡеүәтте әҙәм балаһына кем биргән? Аллаһ таһа! Хәйри бурҙың (уныңише бәғзеләрҙең) сирле икәнлеген дәлилләгән мәҡәләгә лә юлыҡтым һәм ғалим фекеренә мөкиббән ышандым: клептомания тигән уғрылыҡ сире бар икән шул. Уның менән ауырыған кеше урлашмайса түҙә алмай, ә ваҡытында дауалаһаң, үтеүе ихтимал, имеш. Хәйривара ағайҙы кем врачҡа, етмәһә психологҡа, алып барып йөрөһөн инде әүәл замандарҙа. Хәҙер һуңдыр, ауырыуы шашҡан, уҙынғандыр... Шул ыңғайҙа нишләптер бер һорау тыуҙы башымда: әгәр Хәйривара ағай түгел, ә Ғилмиә апай шул хәстәгә тарыһа, төрмәгә эләкһә – ҡатынын йәлләр, түҙемлек менән көтөп алыр, ҡәҙер күрһәтер инеме икән уға ир кеше?

23

Ҡартәсәйем бар ихласлығын хәҙер намаҙ уҡыуға, дарыу үләндәре йыйыуға һәм Атай йортона тамам эйәләшеп алған Камилаға үҙенең холоҡфиғелен «йоҡтороу»ға бирә. Төш юрауын, ҡот ҡойоуын да ташлап ҡуймаған, унан тоҙ өшкөртөп, шифалы төнәтмәләр яһатып алыусылар ҙа етерлек. Бала таба алмай яфаланған биҙәү ҡатындар хатта тирә-яҡ ауылдарҙан килеп эсен һыйпата... Әлдә генә һөнәре күп ҡартәсәйемдең, ҡул ҡаушырып, уфтанып ултырырға ваҡыты юҡ.

Һеңлемдә үҙемдең бала сағымды төҫмөрләйем. Торғаны мин түгел, әлбиттә, уның хыялдары әллә ҡайҙарға олғашып осоп йөрөмәй, ә яҡындараҡ, тормошсанырак кеүек. Хәйер, тотош беләм Камиланың хәсиәтен, тип әйтә алмайым, эсенә инеп сыҡмағаным даһа.

– Шәрифә апайымдар өй эсе менән килеп төштөләр! – Быны шул осҡор Камилабыҙ килеп әйтте. Ҡышҡы каникул мәле, ике малайы ла килде микән? Бәләкәсе – Русланы йәйгә тиклем ҡалырға тейеш ине, теге юлы килешкәнсә. Ҡоҙағыйҙы ла эйәрткәндәрҙер?

Камил шундуҡ йүгерҙе ҡартәсәйемдәргә. Мин мал-тыуарҙы тәрбиәләп, аҙбарҙы ябып индем – көн кискә тартҡан, ҡояш сыуағы һүрелгән сәғәт. Мәшәҡәтле булһа ла, һыйырҙан яҙмауыбыҙға һөйөнөп бөтә алмайбыҙ, өҫтәлебеҙгә һөт-ҡатыҡ килеп ултырған һайын Самат ағайға эстән рәхмәт уҡыйбыҙ, бесән мәсьәләһендә ул ышандырмаһа, оло малды аҫырай алыр инекме ни? Ике

һарығыбыҙ, тауыҡ-ҡаҙыбыҙ бар тағы. Ҡаҙ ҡарау, бигерәк тә күкәй баҫтырыу, себеш сығартыу минең ҡулдан килмәй, өләсәйемдең бурысы уныһы. Яҙ етә башлаһа, уйы-хәсрәте шул. Ана, әлүктән ҡайғырта башлаған: "Нурия, ҡаҙҙарҙың аҫтына ла һалам ырғытҡыла, ата ҡаҙыбыҙ өшөп, эшкинмәй ҡуймаһын!"– тип иҫкәртеп ултыра.

Атай йортона өләсәйемде лә эйәрттем, ырматизы баҫылып тора ошо осор. Шәрифә апайымдарҙың эс бошорғос хәлдәрен ул да белә, борсола лаһа. Беҙҙең ике донъя (әсәйемдәрҙеке менән өсәү инде хәҙер) араһында, шөкөр, һүҙ йәшереү юҡ.

Бызмырлап барып етеүебеҙгә, түңәрәкләп ултырып сәй эсергә йыйыналар ине. Әлтәф еҙнәм үҙе лә килгән шул, ҡоҙағый ҙа ҡунаҡлаған түргә – өй эстәре менән килгәндәр, тип Камила дөрөҫ әйткән.

Сәй эскән арала ҡоҙағый зарланып алды:

– Ҡалала ни, тышҡа балкондан ҡарап, ситлектәге ҡош кеүек ултырам. Үткән-һүткәндең осо-ҡырыйыы юҡ та, исмаһам, бер таныш әҙәм күҙгә салынһа икән...– Шуны ғына көткәндәй, ҡартәсәйем әйтә һалды:

– Йәй һайын ҡайт, ҡоҙағый, бына лаһа арандай өй, көңгөр-ҡаңғыр көн итербеҙ икәүләп. Уландар ҙа унда саң йотоп, бушты бушҡа auҙарып йөрөмәһен. Ял итерҙәр, Күрәнлене, Толпарсыҡҡанды бер итеп һыу инерҙәр, балыҡ тоторҙар. Ҡулдарынан килерлек эше лә табылыр, донъя көтөп ятҡан булабыҙ ҙаһа. Күптән әйтәм дә, тыңламайһығыҙ...

Үҙҙәренең баҡсаһына таш төшкәнен һиҙеп, Әлтәф еҙнә тамаҡ ҡырып алды, әммә ҡайтарып бер һүҙ ҙә әйтмәне, Шәрифә апайым һауыт-һаба йыуырға тотондо.

Камил малайҙар менән шундуҡ уртаҡ тел тапты, илгәҙәк бит ул. Тегеләр ҙә ҡырыҫ уҡ түгелдәр, буғай."Тегеләр" тип уйлауымдан үҙемә ҡыйын булып китте: ҡатышмаһаң, туғаның да ситкә әйләнә. Ә бит был малайҙар, Рубес менән Руслан, яҡын, бик яҡын туған миңә – дихаят түгел.

Рубес Камилдан өлкәнерәк. Шуны белгерткеһе килепме, үҙенсә ҡыланып алды. Сумкаһынан шаҡтырлатып шахматтарын килтереп сығарҙы ла: «Уйнайыҡмы?» – тине. Камил баш ҡаҡты, риза йәғни.

– Беҙҙең мәктәптә шахмат-шашка түңәрәге бар,– тине ҡустым, үҙ бәҫен төшөрмәй генә. – Ғаян ағайым менән дә уйнайбыҙ ул... – Эсем көтөрҙәп ҡуйҙы: үгәй атаның балаһын «ағай» ти. Ә кем тиһен, бәс.

Малайҙар шахмат менән мәшғүл, Камила ла шунда урала. Ә беҙ, өлкәндәр, төкөтмәлә әңгәмә ҡорҙоҡ. Шәрифә апайым башта минең дә араға инеп ултырыуыма аптырағандай ҡарап алды ла йылмайып ҡуйҙы, тиң хоҡуғымды таныны, тимәк.

– Ҡәйнәм, Рубесты анау урам хулигандарынан йолоп алырға ине, юлдан яҙып бара бит! – тип һүҙ башланы Әлтәф еҙнә, тамағын ҡырғылап ултыра торғас. – Каникулдан һуң бүтән мәктәпкә бирәбеҙ, фатирҙы ла шул тирәгә алмаштырабыҙ, ҡаланың икенсе осона. Мәктәбен белештек, барып күрҙек, оҡшаны. Математика көслө уҡытыла икән, шуғалыр, малай ҡаршылашманы, шул фәнгә һәләте бар уның. Ана, шахматҡа ла тартыла.

– Еҙнә, беҙҙең бер малай – шахмат буйынса район чемпионы. Һүҙгә йәпле генә ҡушылып киттем мин дә, – хәҙер баш ҡалала көсөн һынап ҡарамаҡсы.

– Шул бала менән таныштырырға, сәмләндерергә ине Рубесты! – Минең фекерҙе еҙнәм шундуҡ элеп алды.

– Мотлаҡ эшләйбеҙ уны, пионер бүлмәһендә тотам да шахмат турниры ойошторам. Каникулда ла балаларҙы күҙ уңынан ысҡындырмағыҙ, мәктәптә төрлө саралар ойоштороғоҙ, тигәйне директор былай ҙа.

Байтаҡ нәмәләр хаҡында уртаға һалып һөйләштек.Ҡартәсәйем әлеге лә баяғы Рубес тигән ҡолаҡҡа ятмаған исем юҫығында һүҙ ҡуҙғатты. Динислам тип ҡушайыҡ, тигән тәҡдим индерҙе.

Ул арала малайҙар шахмат уйнап туҡтаны. «Слабак әле»,– тине Рубес, Камил яғына ымлап. Кәйефе шәп икәнлеген күрә-тора, быға әллә исем мәсьәләһен әйтеп ҡарарғамы, тип елкенеп ҡуйҙым. Ҡартәсәйем күҙ ҡарашы менән генә ниәтемде хуплап ултырғандай? Ярҙым да һалдым хәбәрҙе, «реакция» тиер ине тағы Бүреһуҡҡан олатай, ишетеп торһа:

– Рубес туғаным, һин алдаҡсы егеткә оҡшамағанһың, дөрөҫөн генә әйт: тиҫтерҙәрең үсектереп бер буламы исемең арҡаһында?

– Еще как! – тип ихлас яуап бирҙе Рубес, «егет» тигән йүкә шына ярап ҡалды быға. – Надоели уже!

– Ә ниңә алмаштырмайһың уны берәй модный исемгә?

– Беҙҙең класта бар ул современный исемдәр: Ники, Серж, Дани, Алекс.

– Николай, Сергей, Данил, Алексеймы?

– Нияз, Сергей, Данияр, Алексей .

Шунда зиһенемдә бер фекер ойошто ла ап-асыҡ итеп ҡартәсәйем теләгәндең бойомо күҙалланды, шатланып телемә лә сығарҙым уны:

– Дэн тигән исем оҡшаймы һиңә? Тулыһынса Динис, Динислам була инде.

– Дэн? Клевый исем, оҡшай! Динис – бара…

– Әтеү, әйҙә, бөгөндән Динис тип йөрөтә башлайбыҙ һине, ауылда әлегә Рубесты белеүсе юҡ таһа.

– Ҡайтҡас, исем ҡағыҙыңды алмаштырырбыҙ,– тип күтәреп алды минең һүҙҙе Әлтәф еҙнә. – Һөйләшә белһәң, тиҙүк эшләп бирәләр уны. Яңы мәктәбеңә яңы исем менән барырһың да ултырырһың.

– Эйе шул,– тип килеште Рубес менән минең диалогты тын да алмай, ҡыҫылмай тыңлап ултырған ҡор.

– Мөғәллимә ләһә! – Ҡартәсәйем ифрат та риза булған, мине шулай ҙурҙан һалып маҡтап ҡуйҙы.

Камила баянан бирле баҫҡан ерендә сыҙай алмай нимәлер әйтергә уҡтала ине, ниһайәт, ауыҙын асты:

– Ә һин бая хәрәмләштең, хәрәмләштең! – Шулай тип һикерәнләне лә өҫтәп ҡуйҙы: – Дэн! Шәп булғас, беҙҙең Толпарлы Ботвинникгы менән ярыш! – Игеҙәге өсөн ҡайһылай сәмләнгән минең сая һеңлем.

– Давай! – тине Рубес, әй Динис тәһә хәҙер. Күҙҙәре янып тора малайҙың.– Иртәгә үк!

Быны ҡыҙыҡҡан, ылыҡҡан шөғөлө бар, ҡайҙа барып бәрелергә белмәй йөрөгән хулигандарҙан айырырға мөмкиндер әле… Шулай уйлап, еңел һулап ҡуйҙым.

Иртәгәһенә тәүге эшем шул булды: Әшрәфтәргә барып, уның ҡустыһы Илдар менән шахмат турниры уҙғарыу тураһында һүҙ беркеттем.

– Апа, мин яңы ход өйрәндем, шуны һынап ҡарайым ул ҡала малайы менән, – тип дәртләнеп риза булды беҙҙең чемпион. ”Апа”. Һы... Апа шул мин хәҙер.

* * *

Быйыл, 1966-ла, беренсе тапҡыр 8 Март көнегелгән матур байрам ғына түгел, ә ял көнө лә – Указ сыҡты. Халыҡ-ара ҡатын-ҡыҙҙар көнөн бөтә ил айырыуса ҙур күтәренкелек менән билдәләй – барлыҡ гәзиттәр ҙә шулай тип яҙҙы, уларҙың биттәре “Әсә – ғорур яңғырай”, “Дан һеҙгә, әсәләр”, “Ҡатын-ҡыҙ – донъя күрке” кеүек яңғырауыҡлы һүҙҙәр менән күҙҙе ҡамаштырҙы, йөрәкте йылытты. Ирҙәр менән тиң хоҡуҡа эйә совет ҡатын-ҡыҙҙарының коммунизм төҙөүҙәге баһалап бөткөһөҙ роле тәмле итеп сурытылды, гүзәл затҡа көн буйы мәҙхиә йырланды.

Мәктәптә кисә уҙғарҙыҡ, уҡыусылар концерт ҡуйҙы. Аҙаҡтан уҡытыусылар йыйылышып, сәй эстек. Әҙерәк эс бошто шунда: егерме дүрт (мине иҫәпләһәк, 25 инде) уҡытыусының бишәүһе генә ир-ат: Әмин абый, тарихсы, химик, физкультурник һәм хеҙмәт дәресен алып барыусы балта оҫтаһы Мәүлит ағай. Бәғзе малайҙарҙың өйҙә лә атайһыҙ, олатайһыҙ үҫеүен иҫкә алһаң, эс бошоу ғына түгел, илағы килә. Бөтә балаға ла минең Бүреһуҡкан олатайым кеүек кеше табылып тормай ҙаһа. Юҡ, был уйымды тәрәнгә ебәреп, тантана кәйефен ҡыйратмайым әле...

Байрам алдынан Мәүлиҙәгә тигән бүләгемде – үҙем бәйләгән мамыҡ башлыҡты, посылкағыҙға бергә ҡыҫтырып ебәрерһегеҙ тип, Әмин абыйҙарға инеп сыҡҡайным. Рабиға апай өйҙә юҡ, абый, фекер алышырға кеше тапҡанына һөйөнгәндәй, баш ҡағып ҡына иҫәнләште лә, ҙур бүлмәләренең уртаһына баҫып, ярһып һөйләргә тотондо:

– Белеп булмай, ҡайһылайыраҡ боролоп китер донъялар – ил бит, ҙур ил. Һәр кимәлдә лә тартыш бара, Нурия! Ана, беҙҙең мәктәптә сәғәтте, йәғни эш хаҡын күберәк алырға, звание-фәлән тип ҡыйышалар, ә унда, юғарыла, – власть өсөн баш етмәҫлек интригалар, хыянаттар, баш ашауҙар …– Шулай тигәс, абый, һуҡ бармағын өрләккә табан күтәреп, оҙаҡ ҡына өндәшмәй торҙо һәм, ҡапыл тауышын баҫып, ҡулын һелтәне: – Сәйер халыҡ бит беҙ, бер ҡараһаң – бөйөк, икенсе ҡараһаң… Мына һинең пионерҙарың “Куба – любовь моя!” тип йырлап йөрөймө? Халыҡтар дуҫлығы, эттәгенәһе. Башта, ана, Шәкетау битләүен ҡотҡар райкомдың һайт тигәненә тайт тип торған Аҡназар кеүек әпкәләйҙәрҙән, төйәгенә хаслыҡ эшләүселәрҙән. Тыуған ереңде, илеңде, халҡыңды ҡурсала, шунан инде мәйлең – ярат Кубаны ла… Үҙ балаңдың ауыҙынан тартып алып, үҙ кәреңде бөтөрөп, һуңғы ҡабымыңды ситкә ебәреү – һантыйлыҡ, минеңсә. Артығын, эйе, бир, бүлеш, ә ҡасан беҙҙең ул тиклем муллыҡта йәшәгән бар? Хыялда, коммунизм тигән әкиәттә…

– Абый, коммунизмға мин ышанамсы?!

– Ышан, кем ҡуша ышанмаҫҡа. Башта, исмаһам, берәй төбәктә төҙөп күрһәтһендәр отдельный коммунизмды, барып ҡарарбыҙ. Әйткәндәй, колхозға зоотехник булып Таллынан Әхмәт исемле кешенең улы ҡайтасаҡ, тип ишеттем әле, шул алдан уҡ хәбәр ебәргән ауылына, коммунизмда йәшәтәсәкмен мин һеҙҙе, туғандар, тип. Ҡыланып ҡараясаҡ, ул шундай нәҫелдән. Атаһы ла авантюраға әүәҫ ине, бер мәлдә, 102 йәшлек олатаһының инерле-сығырлы аҡылына ышанып, шул тирәләге ҡалҡыулыҡтарҙы ҡаҙып-аҡтарып бөттө шул Зәхмәт,

ҡушаматы мас ҡына үҙенә. Имеш тә, шул түбәләстәрҙең береһенә Сыңғыҙ хан үҙенең бик яҡын күргән бер сардарын, ғәскәр башлығын йәғни, ерләгән. Яуҙа алған яраларынан миктәп ҡалып, күтәрелә алмай донъя ҡуйған ул сардар, кәүҙәмде атайсалыма – Таллы тупрағына алып ҡайтып тапшырығыҙ, тип васыят әйткән, ти. Башҡорт булған, тимәк. Сардар ҡәберенә бер йөк алтын-көмөш, уның булат ҡылысы, аҫылташтар менән биҙәлгән көмөш ҡыны, затлы ҡәмәре һәм башҡа шәхси монаяты ла ҡуша күмелгән, ти.

– Бәс?! – Ауыҙымды астым да йома һалдым, түҙмәй, ҡулдарымды сәбәләндерҙем, әммә, абыйҙы бүлдергәнем өсөн ныҡ оялып, башымды эйҙем. Бала-саға кеүек ҡыланамсы, уф.

– Йә-йә, ни әйтерһең, телеңде тешләмә!

– Бәс… Солтанай сәсәниә йырлаған даһа, өләсәйем хәтерләй…

– Нимә тип?

– «Ағарып та торған аҡ ташына Аҡташ хандыр ҡылыс ҡаҙаған…” тигәне иҫтә ҡалған, “Зөлхизә вә Абдрахман” ҡиссаһынан. Аҡбейектең аҡ ташына микән, тим? Әлеге сардар шул Аҡташ хан түгел микән, тим?

– Микән, микән… Кем яҙған ул ҡиссаны?

– Яҙмаған әле, яҙыр.

– Аҡташ хан, тәк-тәк, Аҡташ хан, – тип устарын ыуып алды абый, нимә менәндер бик ҡыҙыҡһынып китһә, ул гелән шулай итә,– ҡайҙандыр уҡығайным, ҡасандыр. Ҡыҙыҡайға әйтәйем әле, ул боронғо ҡулъяҙмалар бүлегендә эшләй ҙәһә, ҡараштырһын. Сыңғыҙхандың ғәскәр башлығы булған микән, Аҡташ хан башҡорт микән, ысын микән?!

– Ә теге Зәхмәт тапҡанмы берәй нәмә?

– Таба һиңә… Ауыл малайҙарын ҡоторта, баштарын бутай, тип халыҡ ғауғалай башлағас, ҡалаға һыпыртҡан, үҙе менән Таллының иң сибәр ҡыҙын алып. Минән өлкәнерәк ул, әле иҫән микән? Һуғыштан ҡайтҡан, донъя күргән, йәше лә утыҙға етеп барған ир шул ҡомартҡы тип зәхмәтләнеп йөрөгән, ә? – Абый тағы устарын ыуып алды ла өҫтәп ҡуйҙы: – Вәт, шуның улы, атаһының балаһы түгел, тимә уға, әйтәгүр, отдельный коммунизм яһарға ҡырсына, ти, Таллыла.

* * *

Күрәнле быйыл да боҙ китеү тамашаһын йәшермәне, көпә-көндөҙ күрһәтте. Йәкшәмбе ине. Шуғалыр бар бала-саға, уларҙы ҡурсалап килгән өлкәндәр яр буйында геүләште. Татар әбекәйҙе етәкләп, мин дә барҙым. Игеҙәктәр, ай-вайына ҡуймай, өләсәйемде, юл ыңғайы ҡартәсәйемде лә ҡуҙғатып алып китте, беҙҙән алда уҡ.

Йылғамы – йылға, боҙмо – боҙ, китәме – китә. Бер уйлаһаң, ғәҙәти күренеш. Әммә толпарлылар унан ниндәйҙер ғәм, яңы тамаша таба. Үҙҙәре, элек ине ул йылғаның айбарлы сағы, хәҙер ни – кәре ҡайтты, һайыҡты, тип һөйләнә…

Татар әбекәй менән халыҡ ҡуйы урындан саҡ ҡына арыраҡ барып баҫтыҡ. Көн шундай сыуаҡ. Ҡояштың йылы ипкене йылға өҫтөндә монар булып дерелдәй. Боҙ шаҡмаҡтары аяғүрә баҫып һөҙөшөп, ҡапыл гөрҫ итеп ауа ла, тирәяҡҡа һыу бағаналары күтәрелә, тамсылар гәүһәрҙәй ялтырап күҙҙең яуын ала. Шундай бер мәлде әбекәйҙең беләгемә йәбешеп торған уң ҡулы алға һонолдо ла ҡатып ҡалды. Үҙенә ҡараным – өндәшмәй, һонолған ҡулы йүнәлешенә

төбәлгән дә телһеҙ ҡалған. Мин дә шул яҡҡа баҡтым: ярабби, унда, яҙғы монарҙа, ниҙер бар!

– Әдисәй… – тине шым ғына, ышаныр-ышанмаҫ хәлдә Татар әбекәй. – Әллә уның һүҙе, әллә хәтеремдә йөрөгән матрос бабаҡай образы фантазиямды уҙындырып ебәрҙе – күрҙем: тельняшка кейгән ир һыны?! Күҙ асып йомғансы ғына пәйҙә булған ул һын ҡапыл, ватылып ҡойолған гәлсәр кеүек, юҡҡа сыҡты. Әйтерһең, һаташыу ғына булды. Татар әбекәйҙең алға һуҙолған ҡулы ихтыярһыҙ һәленеп төштө, үҙе миңә ҡараған да ҡатҡан. Күҙҙәрендәге һорауҙы һүҙмә-һүҙ уҡыйым: “Күрҙеңме? Ысын булдымы?..”

– Күрҙем, Йәнкиҫәк,– тинем, алдаманым. Йәнкиҫәктең битендәге йыйырсыҡ бураҙналары буйлап күҙ йәштәре тәгәрәне. Минең йәштәрем туп-тура муйыныма ағып төштө. Быны мин аңлата алам һиңә, физика дәресендә үткәйнек, ныҡ иҫтә ҡалған.

– Аңлат, Нуриякәем, аңлат, зинһар!

– Мираж тип атала ундай күренештәр, башҡортса – һағым инде, дөрөҫөрәге – сағымдыр әле, сағыла бит. Һыу өҫтөндә йышыраҡ күренә, ти, сағымдар. Моряктарҙың, мәҫәлән, әллә ҡасан батҡан караптарҙы, палуба тулы матростары менән бергә, күреп шаҡ ҡатҡаны бар икән. Сүллектәрҙә, селлә томраһында, боронғо ҡалалар, хозур баҡсалар пәйҙә була ла, каруандар шунда боролоп аҙашып та ҡуя, ти.

– Аңлат, Нуриякаем, аңлат, зинһар!

– Тәбиғәт мөғжизәһе инде. Һауалармы, һыуҙармылыр, ҡасандыр, нимәнеңдер, кемдеңдер күсермәһен алып ҡала ла ҡайһылыр бер сәғәттә шуны күрһәтә. Фотоға төшөргән кеүек микән, үҙем дә аптырайым. Яңыраҡ гәзиттә уҡыным: бер ботаник, Курск ҡалаһынан алыҫ түгел, шикелле, аҡландағы сәскәләрҙе, ҡыуаҡтарҙы фотоға төшөрөп йөрөгән дә, ҡайтып, пленкаһын эшкәртеп, ҡағыҙға сығарып ҡараһа, үҙ күҙенә үҙе ышанмай торған: ҡайһы бер фотоһүрәттәрҙә автомат тотоп йүгергән һалдаттар төшкән, ти. Бер фотола – кәүҙәһе яртылаш тупраҡҡа күмелгән санитар яралы һалдаттың башына бинт урай,ти…

– Ярабби!

– Теге ботаник та шулай тип ҡысҡырып ебәргәндер, тим, Татар әбекәй. Ғәжәп хәл дәһә. Ул аҡланда совет һалдаттары немец фашистары менән үлемесле алышҡа ингән. «Курск дуғаһы» тигәнде ишеткәнебеҙ бар ҙаһа – тотош һуғышҡа һынылыш яһалған унда, беҙҙекеләр еңгән. Аҡландың хәтерендә ҡалған… Ғалимдар, төрлө белгестәр, әлеге фотоларҙы күргәс, ботаникты эйәртеп теге урынға барып йөрөгәндәр: шул уҡ аҡлан, шул уҡ сәскәләр, ти, ә фотолағы күренештәрҙең эҙе лә юҡ – гүйә был ерҙә бер ҡасан да туптар шартламаған, пулялар һыҙғырмаған.

– И Ходаем, адәмнәрең хәтерен җуймасын өчен нинди генә могжизалар күрсәтмисең! И Аллам!

– Эйе шул! – Татар әбекәй әйткәнгә мин дә инанып ҡушылдым.

*(Дауамы бар.)*



**Мәүлит ЯМАЛЕТДИН**

## Ғүмер кисем

*Ер йөҙөнә һибелә торған түбә сәсем,*
*Ишегемде туҡылдатты алтмыш йәшем.*
*Таңға ҡарап танһығым да ҡанманы бит,*
*Эй, илаһым, етте ләме ғүмер кисем?*

*Шулдыр инде тормош тигән ғали йәнәп:*
*Был донъяға килеү түгел, китеү ғәжәп.*
*Һис юғында берәй кеше үкенесһеҙ*
*Булды микән, ер йөҙөндә йәшәп-йәшәп?*

*Мин дә ошо әҙәмдәрҙең сафындамын,*
*Ғүмеремдең икенделе яғындамын.*
*Бөгөн барһың, иртәгә — юҡ донъяларҙа,*
*Үткәнемә байҡау яһар сағымдамын.*

*Тормош юлым һүтелә барған йомғаҡ булды,*
*Ятҡа түгел, үҙемә лә йомаҡ булды.*
*Бар йәшәлгән йылдарымды уйға һалһам,*
*Ярты көндәй ваҡыт уҙған һымаҡ булды.*

*Ғүмерҙең шул алтынға тиң өлөшөндә*
*Бар хәлемсә ҡыймылданым ил эшендә.*
*Әҙәбиәт түрен биреп бармаһа ла,*
*Урын табыр, бәлки, берәй мөйөшөндә.*

---

*Мәүлит Ямалетдин (1947) Учалы районының Аһылай ауылында тыуған. Өфө музыка-педагогия училищеһын, БДУ-ны, Мәскәүҙә әҙәби курстарҙы тамамлай. Музыка дәрестәренән уҡыта, матбуғат баҫмаларында эшләй. Учалы ҡалаһында йәшәй.*

*Буш ваҡытта яҙған булдым, һыҙған булдым,*
*Араһында моңло йырҙар һуҙған булдым.*
*Ғүмеремдең күп өлөшөн үҙ-үҙемде*
*Хыял менән ымһындырып уҙған булдым.*

*Яҙғандарым йөрәгемдән ҡайнап сыҡты,*
*Моңға тиртқән былбыл булып һайрап сыҡты;*
*Ҡешелекте әлмисаҡтан эҙәрләгән*
*Һағыштарҙан яраланып, ҡанап сыҡты.*

*Күп йырҙарым тыуҙы күңел ҡабыныуҙан,*
*Ер-һыуыма мәжүсиҙәй табыныуҙан;*
*Был донъяның гүзәллеген ер өҫтөнән*
*Китмәҫ борон өҙөлөп-өҙөлөп һағыныуҙан.*

*Халҡым тиғән булып, һүҙҙе илгә борһам,*
*“Ҡалай ҙурҙан ҡупҡан” тиғән һүҙҙән ҡурҡам.*
*Йә, улайһа, кешеләр, тип өндәшәйек,*
*Айырма юҡ — аңлағаны аңлай торған.*

*Инанғаным — әүәл Алла, һуңынан — һеҙ,*
*Һеҙҙең менән — ҡиблам дөрөҫ, уйҙарым төҙ;*
*Алдымдағы Ямантауҙай ҡаршылыҡтар*
*Түбәләскә әүерелә — юлым тигеҙ.*

*Ваҡыт — дөлдөл: тынғы күрмәй тибенгеһе.*
*Аҡшам етер, уҡылғас та икендеһе.*
*Үткән — бөткән.*
*Ҡиләсәкте кисергән юҡ.*
*Әле миңә ҡәҙерлерәк бөгөнгөһө.*

*Был шиғырҙы оҙаҡ яҙҙым — күп һыу аҡты,*
*Өмөт булып балҡып, хәтһеҙ таңдар атты.*
*Барығыҙға оло рәхмәт!*
*Һеҙ булғанға,*
*Тантаналы шәфәҡ төҫлө, рухым яҡты.*

## Буранбай сәсәндең хаты

Табаҡ та ғына табаҡ, ай, аҡ ҡағыҙ,
Буранбайҙың яҙған хаттары...
*Башҡорт халыҡ йырынан*

*Һаумыһығыҙ, илкәй, тыуған еркәй,*
*Ғәзиз туғандарым, дуҫтарым!*
*Ҡағыҙ бите һеҙгә тукмәй-сәсмәй*
*Илтһә ине һағыныу хистәрен.*

*Ниҙәр уйлап, ниҙәр кисергәнде*
*Һөйләй алһа ҡағыҙ мин булып,*
*Зарға сатнап, Урал ҡаялары*
*Шаурап төшөр ине уйылып.*

*Уйҙарымда көн-төн тыуған илем —*
*Ирәндегем, Яйыҡ, Һаҡмарым.*
*Ҡайҙа ҡалды, еркәйемде данлап,*
*Йыр сығарып йөрөгән саҡтарым?*

*Хәлдәремде әгәр һораһағыҙ,*
*Хәлгенәйем минең бер сама.*
*Үҙем иҫән.*
*Тик Ибраһим ғына*
*Вафат булып ҡалды был йома.*

*Заты-ырыуына еткерегеҙ:*
*Аят уҡытһындар ҡырҡына.*
*Яңғыҙ ҡалдым.*
*Әжәлдәрем етһә,*
*Кем килтерер мине шартына?*

*Ярай.*
*Әгәр ул-был була ҡалһа,*
*Ҡурҡмайым мин — шулдыр тәҡдирем.*
*Илем, халҡым иҫән ҡалһын өсөн*
*Мин кисерер инем мең үлем.*

*Себер тарафтары — ҡара урман,*
*Ыңғырашып шаулай елдәргә.*
*Был донъяның хәлен белеп булмай,*
*Етә торһон һүҙем илдәргә:*

*Мин барыбер һеҙгә бер ҡайтырмын,*
*Өмөт өҙмәйенсә көтөгөҙ;*
*Ҡөнө генә уның бөгөн түгел,*
*Бирешмәгеҙ, сабыр итегеҙ.*

*Өйөп кенә өйөп ҡарҙар яуа,*
*Себер урмандарын тултырып.*
*Эскенәйем бошоп йөрөгәндә*
*Хаттар яҙҙым һеҙгә, ултырып.*

*Йә, хуш инде, барлыҡ ҡәрҙәштәрем,*
*Һау булығыҙ, дуҫтар.*

*Хуш, ауыл.*
*Хат артынан үҙем йүгерер инем,*
*Тирә-яғым минең — ҡарауыл.*

*Һүҙем тамам.*
*Эстәремдә ҡайнап,*
*Тағы бер йыр сыҡты урғылып.*
*Мин ҡайтырмын ҡурай моңо булып,*
*Мин ҡайтырмын һеҙгә йыр булып.*

## *Ер һатыуға ҡарата*

*Ҡайҙа баҡма — алыш-биреш китте,*
*Ҡайҙа баҫма — китте ер һатыу;*
*Ер һәм ирек өсөн башын һалған*
*Батырҙарҙың рухын кәмһетеү.*

*Ерҙе һатыу — ҡанун пәрҙәһенә*
*Ышыҡланып ҡылған енәйәт.*
*Етмәгәнме шул арҡала илгә*
*Элек килеп тулған ете ят?*

*Ер бит түгел әҙәм балаһының*
*Юҡтан хасил иткән үҙ милке!*
*Бетеүлектә тупраҡ ҡалмаҫ тимә,*
*Йәшәй бирһәк шулай бер килке.*

*Ерен һатҡан бәндә — көнәлгәре*
*Үҙ ҡәберен һатҡан әҙәм ул.*
*Ундай мөртәттәргә был донъяла*
*“Кеше” тигән исем әрәм ул.*

## *Алты егет, ете ҡыҙ*

Алты егет бергә килгән,
Инһендәрме, еңгәкәй?..

*Башҡорт халыҡ йырынан*

*Кем белмәй башҡорт йырының*
*Йән тетрәтер тылсымын?*
*Күңелең моңға тулыша,*
*Әйтеү менән исемен.*

*Унан тыш, илдең үткәнен*
*Аңғарта йырҙарыбыҙ:*
*Алты егет кәләш күҙләй,*
*Бейеп йөрөй ете ҡыҙ.*

*Ул саҡта ла алты егет*
*Булғандыр ете ҡыҙға;*
*Юҡһа, ҡайҙан килеп инһен*
*Был һандар йырыбыҙға?*

*Өҫтәүенә, Байғужаның*
*Бисәһе бар — абышҡа,*
*Сураҡолда бисә тормай —*
*Йә ваҡсыл, йә һуғышҡаҡ.*

*Сәлихйәнен һайлар инең —*
*Аты ла юҡ егергә;*
*Иштуғаны иш булалмай,*
*Күңел тартмай Хәйҙәргә.*

*Алты егет араһынан*
*Лайыҡ тик бәләкәйе.*
*Ете ҡыҙҙың ҡайһыһының*
*Булыр ул кейәүкәйе?..*

*Ә бөгөн һуң нисә егет*
*Тап килә ете ҡыҙға?*
*Кәләш күҙләп кемдәр килә*
*Ҡыҙы бар йортобоҙға?*

*Килмәй Хәйҙәр, Иштуғандар,*
*Килмәй Сәлихйәне лә,*
*Һис юғында, исем өсөн*
*Анау елкенсәге лә.*

*Килмәй хатта Сураҡолы,*
*Хатта теге абышҡа,*
*Сөнки улар ҡул һелтәгән*
*Демографик торошҡа.*

*Ауыл һайын кәлеп һала*
*Бер өйөр буйҙаҡ егет,*
*Донъя көтәһе урынға —*
*Эт менеп, бесәй егеп.*

*Берҙән-бер уй-хәстәрҙәре —*
*Яртылыҡ аҡса табыу.*
*Ҡайҙа инде кәләш күҙләп,*
*Ҡыҙҙар артынан сабыу?!.*

*Киләсәктә ете ҡыҙға*
*Тап килер нисә егет?*
*Шуны уйлаһаң, күңелдәр*
*Һис тә йылынмай, ибет?*

## ***Яҙмағандыр***

*Бер көн миңә хәбәр килеп төштө:*
*“Рәсәй.*
*Өфө.*
*Мәүлит әфәндегә.*
*Фәлән көндә Стокгольм көтә —*
*Премия тапшырыла һеҙгә...”*

*Булыуҙары бының мөмкин түгел! —*
*Һеҙҙе король үҙе көтә, тигән.*
*Аптырайым тағы: бер һөмһөҙө*
*Шаяртамы шулай, фәлән-төгән?!.*

*Улай тиһәң, конверт сит илдеке,*
*Адрес менән штамп — ят ләғәттә.*
*Аңлатыуы ҡыйын ниҙәр уйлап,*
*Ниҙәр кисергәнде шул сәғәттә.*

*“Ҡалайтырға?” тигән һорау менән*
*Йүгереп барҙым тәүҙә йөрәгемә.*
*Ҡәлбем әйтте: “Бар, бар!*
*Ундай бәхет*
*Әҙиптәрҙең тейә һирәгенә”.*

*Йөрәктән һуң, шул уҡ һорау менән*
*Мөрәжәғәт иттем аҡылыма.*
*Зиһен әйтте: “Ҡуй, йөрөмә, ҡустым,*
*Мине тыңла.*
*Һәм ҡайт асылыңа —*

*Йә, был хәбәр дөрөҫлөккә сығып,*
*Тапшырылһа Нобель миллиондары,*
*Илһам утын байлыҡ томалаһа,*
*Нигә ынтылырһың унан ары?..”*

*Һәм хат яҙҙым: “Барып булмаҫ, Король.*
*Хәстәрлегең өсөн бик ҙур рәхмәт.*
*Һеҙгә барыр өсөн самолетын*
*Биреп тормай күршем Нуриәхмәт.*

*Ә цӡемдең ике самолет та*
*Ремонтта шул әле, шайтан алғыр!..*
*Ярай, һау бул, Король, көйәләнмә.*
*Нишләтәһең инде — яӡмағандыр".*

## *Әхмәдин Әфтәхкә*

*(Дуҫтарса шаяртыу)*

*Әхмәдингә "ижад" һүҙен ҡушһаң,*
*Килеп сыға — Әхмәдинижад.*
*Иран президенты Әхмәдингә*
*Ҡайһы яҡтан орпаҡ, ҡайҙан зат?*
*Беҙҙең Әфтәх шағир инде былай,*
*Фарсынык̧ы — ябай президент.*
*Урындарын алмашайыҡ микән,*
*Икеһе лә барыбер Әхмәдин?*
*Иран Әхмәдине, риза булып,*
*Күсеп килһә әгәр Абҙаҡҡа,*
*Унан өркөп, Магнит урыҫтары*
*Ҡасыр ине, бәлки, ян-яҡҡа.*
*Путин менән саңғы шыуған саҡта*
*Ҡырҡты тауҙың иңләп көн битен,*
*Уйлашырҙар ине, нисек итеп*
*Йүгәнләргә Рәсәй йәһүден.*
*Ә Әхмәдин китһен Фарсиәгә,*
*Уның урыны тап шул — Теһеран.*
*Унда һәйбәт: ҡулда власть, аҡса...*
*Ҡышҡы һыуыҡтар юҡ, юҡ буран.*
*Ул, исмаһам, фарсы халҡын бер аҙ*
*Ижад серҙәренә өйрәтер;*
*Бәғзе берәү һымаҡ, трибунанан*
*Закон түгел, шиғыр сурытыр.*
*Юҡһа, ана, донъя йәһүдтәре,*
*Бар ғаләмгә шаулап, саң ҡаға;*
*Йәнәһе лә, Иран президенты*
*Эйә булды тәки бомбаға.*
*Ә Әхмәдин, трибунаға сығып,*
*Шиғыр уҡый — бер... өс... биш шәлкем!..*
*Һәм йәһүдтәр ҡойола ла төшә,*
*Һәм сәләмләй: "Шолом алейхем!.."*
*Ҡыҫҡаһы, күп инде өйрәтәһе*
*Иран халҡын, Иран дәүләтен.*
*Әллә бармаһынмы?— Әфтәх китһә,*
*Кем ҡурсалар башҡорт милләтен?!*

## Өлкәр

Учалы яҙыусылар ойошмаһы ағзаларына

*Йәй ғүмере ҡыҫҡа — күҙҙәр етте,*
*Оҙон төндәр ятты ҡыҡтәргә.*
*Тышҡа сыҡҡан һайын, әйләнәм дә*
*Күҙҙәремде һирпәм Өлкәргә.*
*Иҫкә төшә туҡһанынсы йылдар —*
*Егерменсе быуат аҙағы;*
*Тормош ҡанундары үҙгәреүгә*
*Күнә алмауҙарҙың ғазабы.*
*Иҫкә төшә беҙҙең ойошҡан саҡ*
*"Өлкәр" альманахы тирәләй;*
*Үҙебеҙҙе тойоп йөрөгән саҡ*
*Таж-тәхеткә менгән түрәләй.*
*Иҫкә төшә йәнә сәмләнешеп,*
*Дәртләнешеп ижад иткән саҡ;*
*Киләсәктән шиғри образ көүек*
*Мөғжизәле көндәр көткән саҡ.*
*Ул дәүерҙәр үтте — елдәр иҫте,*
*Алҡынышып аҡты һыуҙары,*
*Кире ҡайтмаҫ яҡҡа ҡанат ҡаҡты*
*Көн артынан айы, йылдары.*
*Беҙ ҙә хәҙер элеккеләр түгел —*
*Эҙһеҙ үтәме ни ваҡыттар?!*
*Әүәлгеләй төрлө төҫтә түгел*
*Беҙҙе ымһындырған бәхеттәр.*
*Күп хыялдар, селпәрәмә килеп,*
*Әүерелде көлгә, күмергә.*
*Ҡәләмдәштәр!*
*Һеҙ нисектер, ә мин*
*Үкенмәйем үткән ғүмергә.*
*Ә һағышмы?*
*Ул ни — була, бөтә,*
*Төн һарылған төҫлө ҡуктәргә.*
*Һағыш баҫҡан саҡта, минең кеүек,*
*Күҙ һирпегеҙ һеҙ ҙә Өлкәргә.*

## Әйләнә лә бер ҡош...

Буранбай Исҡужин иҫтәлегенә

*Әйләнә лә бер ҡош тауыш бирә,*
*Үҙе алыҫ, үҙе эргәлә.*
*Һабантурғай тиһәң... Әле яҙҙың*

*Ҡуңыр мәле яҡын-тирәлә.*
*Әйтсе, ҡошсоҡ, ҡайҙан килеп сыҡтың? —*
*Яҙ бит бында яңы моронлай.*
*Өнөң зарлы.*
*Бер-бер хәбәр бармы?*
*Әйт тиҙерәк!*
*Нимә?*
*Буранбай?!*
*Аһ, Буранбай!*
*Шундуҡ: “Был — ҡош түгел,*
*Минең йәнем”, — тиһәң, ни була?*
*Юҡһа уйлағайным: “Ул ниндәй ҡош*
*Иртә таңдан уйнай нервыла?”*
*Баҡтиһәң, ул — һинең йәнең икән...*
*Бәхилләшер өсөн килдеңме?*
*Шағирҙарҙың шағиры, тип һине*
*Һанағанды минең белдеңме?*
*Һин белмәгән нәмә булды микән,*
*Даръя ҡошо, ғорур аҡсарлаҡ!*
*Ә аҡсарлаҡ диңгеҙендә тиңһеҙ,*
*Ҡоро ерҙә иһә — асарбаҡ.*
*Аһ, Буранбай!..*
*Сәсән телле минең*
*Бәлки, ҡустым, бәлки, ағайым.*
*Һине юҡһыныуҙы аңлатырға*
*Ниндәй генә һүҙҙәр табайым?*
*Ҡара менән аҡтың сиген үтеү*
*Килеп еттеме ни һиңә лә?*
*Һин, Буранбай, унда ныҡ шаярма,*
*Зәмзәм һыуын ҡалдыр миңә лә...*
*Әйләнә лә бер ҡош тауыш бирә,*
*Үҙе алыҫ, үҙе эргәлә.*
*Офоҡ арьяғында әллә бер ҡул,*
*Әллә яҙғы монар тирбәлә.*
*Уларҙан да ары — Буранбайҙы*
*Юғалтыуҙың һары һағышы;*
*Аҡсарлаҡтың, бер тыңлаһаң, көлгән,*
*Бер тыңлаһаң, көйгән тауышы...*



Шәүлиә
ЗӨЛҠӘРНӘЕВА

# ИҢДӘРЕМДӘ – ЙЫЛДАРЫМ

## *Тәбиғәт – бөйөк зәркән*

*Тәбиғәт ул — ғәжәп бөйөк зәркән,*
*Ҡайҙа күҙ һал — тотош гүзәллек.*
*Ерҙең шарын ҡалай семәрләгән! —*
*Һәр есемдә уның — теүәллек.*

*Ҡайһы саҡта оҫта, дер һелкетеп,*
*Оҡшамаған эшен юҡ итә.*
*Ҡабатланмаҫ яңы биҙәү таба...*
*Бының өсөн бары көн етә.*

*Ә беҙ — уның хеҙмәт емештәрен*
*Бәрәкәтһеҙ иткән бер яман.*
*Ялҡып китеп, беҙҙе елкәһенән*
*Һелкеп төшөрмәҫме бер заман?*

***

*Иңдәремдә —*
*Йылдарым.*
*Үткәнемдә —*
*Юлдарым.*

---

*Шәүлиә Зөлҡәрнәева (1946) Учалы районы Ахун ауылынан. Стәрлетамаҡ педагогия институтын тамамлай, Күмертау педагогия училищеһында рус һәм башҡорт телдәрен уҡыта. Бер нисә шиғыр һәм проза китаптары авторы. Учалы ҡалаһында йәшәй.*

*Юл башында —*
*Бер ҡатлы,*
*Бер сабыймын.*
*Диҡҡәтле:*

*Ҡабул ҡылам*
*Һәр һүҙҙе.*
*Яҡшы күрәм*
*Һәр йөҙҙө.*

*Имеш, юлдар*
*Тик тура.*
*Эй, ышандым*
*Мин шуға.*

*Ҡыйыҡ-мыйыҡ*
*Икән дә.*
*Тура барам*
*Тиһәң дә.*

*Тура баҫтым —*
*Ҡыҫтылар.*
*Баҫҡыстарым*
*Быстылар.*

*Үҙәккә йоттом —*
*Түҙемле.*
*Рухым көслө*
*Үҙемдең:*

*Юлдарымды*
*Нур иттем.*
*Әрнеүҙәрем*
*Йыр иттем.*

*Иптәш иттем*
*Моңдарым.*
*Еңеләйҙе*
*Юлдарым.*

## *Белдем*

*Белдем бәхетте,*
*Белдем байлыҡты.*
*Күрҙем аҡыллы,*
*Күрҙем алйотто.*

*Белдем бәхеттең*
*Һөйөү икәнен.*
*Белдем хыянат —*
*Көйөү икәнен.*

*Белдем тормоштоң*
*Әсәй икәнен.*
*Арҡаңдан һөйөп,*
*Үпәй иткәнен.*

*Белдем тормоштоң*
*Сая икәнен.*
*Асалы ҡамсы*
*Сөйҙә икәнен.*

*Белдем: уйҙарҙан*
*Йәндең туҙғанын,*
*Йән әсендереп,*
*Ғүмер уҙғанын.*

## *“Мөхәббәт күпере”*

Ахундың юғары яғындағы күпер

*Ай нурында иҙрәй әрәмәләр —*
*Һандуғастар бында моң сукей.*
*Аға йылға әрәмәләр йырып,*
*Быуып алып билгә бер күпер.*

*“Мөхәббәт күпере” тиҙәр уны —*
*Беҙҙең эҙҙәр унда яғылған.*
*Әрәмәлек — беҙҙең көлөүҙәрҙе,*
*Бейеүҙәрҙе күпер һағынған.*

*Һағынған ул тальян ҡыңғырауын,*
*Йыр-моң һуҙып йәштәр ҡауышҡан.*
*Онотмаған һөйөү, наҙ серен дә —*
*Күпме йөрәк бында табышҡан.*

*Ай нурында иҙрәй әрәмәләр —*
*Һандуғастар һаман моң сүкей.*
*Тальян һүнгән, йәштәр килмәй хәҙер,*
*Етемһерәп ҡалған был күпер.*

*Үткәндәргә — тик хыялда ҡайтыу,*
*Хәтер йомғаҡтарын һүтеүҙәр.*
*Юлдаш булһын башҡа йәштәргә лә*
*Мөхәббәтле шундай күперҙәр.*

### *Урман күле**

*Зәңгәр күлем, һинең ярҙарыңдан*
*Нисә тапҡыр икән буйланым.*
*Сайпылышып ятҡан тулҡындарҙың*
*Серләшеүен тыңлап туйманым.*

*Илаһи ҙа инде тынлыҡтары —*
*Тик тәбиғәт бында һөйләшә.*
*Суп-суп балыҡ, япраҡ ҡыштырҙауы,*
*Аҡҡоштарға өйрәк өндәшә.*

*Сулпы таҡҡан әрәмәләр көйөн,*
*Ҡамыштарҙан сыҡҡан сыңдарҙы,*
*Ҡарағайҙар шауы ҡушылғанды*
*Бер моң күреп хайран тыңланым.*

*Хәтеремдә тотор өсөн бағам:*
*Тындар алып ята һыу-даръя.*
*Күлгә төшкән, ана, аҡ болоттар...*
*Мин ҡайтырмын әле был ярға.*

***

*Үтеп бара йәйҙең “егет” сағы —*
*Күкте телеп үтмәй йәшендәр.*
*Күкрәүҙәр ҙә ерҙе дер һелкетмәй —*
*Ярһыуҙары киткән, йәшенгән.*

*Үтеп бара йәйҙең “килен” сағы —*
*Сәскә шауы ҡайҙа үҙәндең?*
*Төҫө шиңгән йәйҙе йәй итеүсе*
*Быуындары ҡатҡан үләндең.*

---

* *Фәрүәз Ғарипов музыкаһы*

*Үтеп бара тәмләкәскә бай йәй —*
*Бешкән сейәләре, еләктәр...*
*Оҙон ҡышта күҙ алдына килер*
*Йәйҙә ҡалған нурлы биҙәктәр.*

## Ҡәнәферҙәр

*Ҡәнәферҙәр тотоп баҫтың*
*Күпме йыл үткәс, иркәм.*
*Сәскә тотҡан һындарыңды*
*Тиҙ сығармамын иҫтән.*

*Ялҡын көсө бәрҙе ҡабат —*
*Ҡулыма ҡағылышың...*
*Тиңһеҙ яратҡан саҡтарҙың —*
*Үткәндең сағылышы.*

*Ҡәнәферҙәр арабыҙҙа*
*Бәйләүсе булған икән.*
*Һинең кеүек, мин дә шулай*
*Тәүәккәл булһам икән...*

*Болғансыҡлы араларҙы*
*Ҡәнәферҙәр таҙартты.*
*Ерҙе ләйсән яңыртҡандай,*
*Ваҡ шиктәрҙе таратты.*

*Ҡәнәферҙәр эреттеләр*
*Һалҡын тартҡан наҙ ҡылын.*
*Яраталар икән һаман!*
*Һауаларҙа яҙ тыны.*

## Йөрәгем

*Йөрәгем —*
    *ныҡлыҡҡа ныҡ ине.*
*Ул хәҙер —*
    *сыҙамай, кителә.*
*Ҡот осҡос*
    *донъяуи мәхшәрҙән*
*Йөрәгем*
    *мең киҫәк киҫелә.*
*Йөрәгем —*
    *ояльан ҡыҙ кеүек,*
*Ишеген*
    *бер ая аса ул.*

*Эй, әрһеҙ,*
*ҡайҙа һин шул хәтлем!*
*Йөрәгем*
*быңдайҙан ҡаса ул.*

*Йөрәгем –*
*таждағы бер ысыҡ.*
*Ә таждар*
*гөлдәрҙә түгелме?*
*Һеҙ, елдәр,*
*һағыҙаҡ, һағыраҡ...*
*Ысыҡтың былай ҙа*
*ғүмере...*

## Ҡайтҡым килә

*Һағынамын ҡай саҡ бала саҡты –*
*Үкереп тә килә илайһы.*
*Иң бәхетле сағым шунда булған,*
*Тыуған йортҡайымда, илаһым.*

*Бала саҡтың иле – ожмах иле,*
*Тик ҡояшлы килә күҙ алға:*
*Атай йөрөй алма баҡсаһында,*
*Түтәлдәргә әсәй күҙ һала.*

*Әсәйемдең ҡулы ҡалай наҙлы,*
*Йылы ине атай ҡосағы.*
*Һаман баҙлай йылығыҙҙың ҡуҙы –*
*Тотоп килә ғүмер усағым.*

*Шундай һағынамын бергәләшеп*
*Бесән сапҡан саҡты, геү килеп.*
*Ҡояш менән тулған көндәремде... –*
*Их, әйләнһен ине бер килеп.*

*Баҫып торам яңғыҙ тормош тигән*
*Тик дауыллап торған яланда.*
*Ҡайтҡым килә йәп-йәш әсәй булған,*
*Атай ҙа шәп булған заманға.*



Эдгар
**ВИЛДАНОВ**

## *Заманы шулай инеме?*

*Заманы шулай инеме? —*
*Бер ҡатлы булып үҫтек.*
*Дуҫыбыҙ һыуға ингәндә,*
*Беҙ ҙә шул һыуҙы кистек.*
*Эш атҡарһаҡ, үҙебеҙ тип*
*Файҙаға ҡайырманыҡ.*
*Ололарҙы аҡыллыға,*
*Иҫәргә айырманыҡ.*
*Бер ҡатлы булып үҫтек шул,*
*Күңелебеҙ саф ине.*
*Кешелекле булып йәшәү*
*Барыбыҙға хас ине.*
*Донъя шундай матур ине —*
*Ҡара яғын күрмәнек.*
*Хәйләләүҙең, алдашыуҙың*
*Ни икәнен белмәнек.*
*Бер ҡатлы булып үҫтек шул,*
*Хәҙер тормош үҙгәрҙе.*
*Тәгәрәтә, тәкмәсләтә*
*Ул беҙҙең кеүектәрҙе.*
*Аҙым һайын алданабыҙ,*

---

*Эдгар Вилданов (1951) Учалы районының Учалы ауылында тыуған. Тау техникумын тамамлай. Әлеге мәлдә Учалы төбәк яҙыусылар ойошмаһын етәкләй.*

*Был донъяға ни булған?*
*Кирегә ҡайтыр юлдар юҡ,*
*Ә алда — шырлыҡ, урман.*
*Һәрмәнеп донъя көтәбеҙ:*
*Ҡайҙа ҡара, ҡайҙа аҡ?*
*Баш осонда — хәйлә, мәкер,*
*Ә тормош — ҵҙе йомаҡ.*

## Малайҙар

*Ййыҡтың ялтыр йөҙөнә*
*Бәреп таштың йәлпәген,*
*Кәләш алабыҙ... Донъяның,*
*Эй, бирәбеҙ кәрәген.*

*Зыҡ ҡубабыҙ, шау киләбеҙ,*
*Онотолоп китҡәнбеҙ.*
*Кәләш алырға беҙ шулай*
*Оҫта ғына икәнбеҙ.*

*Ишмөхәмәт кҵкрәк ҡаға,*
*Мин алдым, тип, ун бисә.*
*Фәсих әйтә: "Мин ун биште*
*Алған инем,— тип, — кисә".*

*— Кисәге бисәләреңде*
*Бөгөн һанама улай,*
*Улар инде айырылған, —*
*Тип ҡаршы төшә Юлай.*

*Әдиптең бәргән таштары*
*"Суп" итеп һыуға бата.*
*— Бер генә кәләш алдым, — тип*
*Тағы ла таштар ата.*

*Геҵ киләбеҙ, таш атабыҙ,*
*Кәләштәр һаны арта.*
*Уйланмайбыҙ: киләсәктә*
*Ниндәй яҙмыштар ята.*

*Өйләнештек... бик кҵптәрҙе*
*Ҡатындары ир итте.*
*Хатта өҙөлөп һөйгәндәр ҙә*
*Үҙ ирҙәрен ер итте.*

*Арабыҙҙан бер нисәүебеҙ*
*Өсәр ҡатынға етте.*
*Кемдер — үҙе, ә кемделер*
*Ҡатыны ташлап китте.*

*Кемделер әжәл, йәлләмәй,*
*Йәшләй үҙенә алды.*
*Яйыҡта һикергән ташы*
*Яйыҡ төбөндә ҡалды.*

*Хыял — хыял ғына инде,*
*Күп саҡта була ялған.*
*Маңлайға ни яҙылғанын*
*Кем белһен инде алдан.*

*Ғүмеркәйҙәр — ағып китер*
*Яйыҡ һыуҙары икән.*
*Йылға буйында йөрөгән*
*Кем малайҙары икән?*

*Таш аталар, зыҡ ҡубалар —*
*Шау килә йылға яры.*
*Бәхетле генә булһындар*
*Ауылым малайҙары.*

## ***Тиҙерәк йүгер***

*Ялан аяҡ йүгерәбеҙ*
*Өй артлап тау үренә.*
*Ҡояш нурҙарын сағылтып,*
*Унда ниҙер күренә.*
*Алтындыр ул, әйҙә инде,*
*Тиҙерәк йүгер, малай.*
*Мендек. Ята алдыбыҙҙа*
*Яртылаш тутыҡ ҡалай.*
*Әле һаман, ялтыр күрһәк,*
*Сабабыҙ аҡыл юйып.*
*Был ғүмерҙәр үҙа инде*
*Тутлы ҡалайҙар йыйып.*

## ***Ҡешелек***

*Бик йыш ҡына хәтер алып ҡайта*
*Бала сағым, тыуған яҡтарға.*
*Яйыҡ һыуҡайҙарын диңгеҙ итеп*
*Кәритәлә йөҙгән саҡтарға.*

*Ҡулдар — ишкәк, ялғаш карап ине,*
*Капитандар инек үҙебеҙ.*
*Уйын ине, батһаҡ, батырһаҡ та,*
*Һис тә китмәй ине иҫебеҙ.*
*Ул миҙгелдәр үтте инде күптән...*
*Хәҙер беҙ бит өлкән ағайҙар.*
*Ә ағайҙар батыу, батырыуҙы*
*Икенсерәк итеп аңлайҙар.*
*Бата, батыралар, һис аяу юҡ,*
*Хәйләһеҙҙәр сума иң элек.*
*Бер-беренең башын ашай-ашай*
*Ғүмер итә икән кешелек.*

## ***Нигеҙ***

*Был йортта һалма киҫкәндәр,*
*Был йортта бала тыуған.*
*Был йортта керҙәр йыуғандар,*
*Был йортта түйҙәр уҙған.*
*Был йортта кемдер кемгәлер*
*“Яратам” тип әйткәндер.*
*Юлға сыҡһа: “Көтөгөҙ, — тип, —*
*Ҡайтырмын”, — тип киткәндер.*
*Был йорттоң тупһаһы аша*
*Ауылдаштар үҙғандыр.*
*“Һаумы, күрше” тиеп ҡулын*
*Күрешергә һуҙғандыр.*
*...Йорттан бары нигеҙ ҡалған...*
*Баҫкан әрһеҙ кесерткән.*
*Ундай нигеҙҙәр ауылда*
*Ах! Күп икән, күп икән.*
*Ҡырҡ ямаулы йорт ултыра...*
*Нигеҙ буйында — ҡарсыҡ.*
*Бүрәнә араһын һылай,*
*Ҡулдары ҡыҙыл балсыҡ.*
*Ауылда бары ҡарт-ҡоро*
*Ғүмер итә баш баҫып.*
*Йәштәр киткән төйәгенән,*
*Хәйерселектән ҡасып.*
*Дац-доц итеп көй яңғырай*
*Ауылда, үрге яҡтан.*
*Тыуған ауылын һағынып*
*“Себер байҙары” ҡайтҡан.*
*Сыр-сыу килешеп, балалар*

*Бейей сит ил көйөнә.*
*Сит-ят йәндәр йыйылғандай*
*Ошо ҡунаҡ өйөнә.*
*Үҙебеҙсә һөйләшеү юҡ —*
*Ситтә йөрөү нишләтә.*
*Балаларҙың ауыҙынан*
*Урыҫ телен күрһәтә.*

## Беҙҙең халыҡ

*Ҡайҙа йылы — ҡоштар шунда,*
*Ҡайҙа тәрән — шунда балыҡ.*
*Тик ниңәлер ҡайҙа ауыр —*
*Һәр саҡ шунда беҙҙең халыҡ.*

## Ҡырҡҡа ярылам инде

*Ҡырҡҡа етеп ғашиҡ булдым,*
*Ҡырҡҡа ярылам инде.*
*Йөрәгем — ут, ялҡынынан*
*Үҙем ҡабынам инде.*

*Ниҙәр генә эшләйем һуң?*
*Һүнәлмәм, дөрләп янам.*
*Күбәләктәй, шул уттарға*
*Кереп барам бит һаман.*

*Төн менән көнөм буталды,*
*Аҡылдан яҙам инде.*
*Ҡырҡҡа етеп ғашиҡ булдым,*
*Ҡырҡҡа ярылам инде.*

## Фәрештә лә, иблес тә

*Кешеләр сәскә үҫтерә,*
*Кешеләр бала һөйә.*
*Ғашиҡтар, һурып, йөрәген*
*Йондоҙло күккә сөйә.*
*Кешеләр ғәйбәт йөрөтә*
*Быс(ы)раҡ яға-яға.*
*Бәхетлененң бәхетенән*
*Көнләшеп ҡара яна.*
*Кешеләр йырҙар яҙалар*
*Хыялыйҙар итерлек.*
*Хистәр ташып күҙҙәренән,*
*Йәштәр ағып китерлек.*
*Кешеләр бер-береһенә*

*Ярҙам ҡулдарын һуҙа.*
*Йәндәр изге, күңелдәр киң —*
*Шундай саф, шундай таҙа.*
*Кешеләр кешене талай,*
*Ҡол итә, аҫа, һуя.*
*Ерҙәге иң аҡыллы зат*
*Алйый, зиһенен юя.*
*Фәрештә лә, иблес тә һин —*
*Икеһе бер үҙеңдә.*
*Ни хәтлем һин бөйөк, кешем,*
*Шулай уҡ түбәнһең дә.*

## *Көтә-көтә*

*Көҙгө рашҡы. Ел йә ямғыр.*
*Кешеләр ҡышты көтә.*
*Теләһәң, теләмәһәң дә,*
*Ҡыш үҙе килеп етә.*
*Ҡыштың сатлама һыуығы*
*Ҡура, үҙәкте өтә.*
*Ялҡытты, ялҡытты, тиеп*
*Кешеләр яҙҙы көтә.*
*Ғүмер итәбеҙ донъяла*
*Нимәлер көтә-көтә.*
*Яҙ ҙа етә, йәй ҙә етә,*
*Ә ғүмер үтә, үтә.*

## *Тормош китабы*

*Ғүмеркәйем — минең үҙем өсөн*
*Хәтеремә яҙған китабым.*
*Ярты быуат элек башланым да*
*Әле яҙам уның дауамын.*
*Ул китаптың һәр бер хәрефенә,*
*Һәр һүҙенә ҡулым ҡағылған.*
*Тик шуныһы ғына үкенесле:*
*Бик хаталы итеп яҙылған.*
*Шул биттәре йөрәгемде өтә,*
*Күңелемдә йөрөй йөҙәтеп.*
*Тик булмай шул тормош китабының*
*Хаталарын ғына төҙәтеп.*



**Сабир**
**ШӘРИПОВ**

# ЭШҺЕҘГӘРИМ

**хикәйә**

Алыҫ командировканан ҡайтып килешләй машинабыҙ сығынланы. Өндәшмәҫерәк водителгә яҡындағы ауылда туҡтарға кәңәш бирҙем. Ике-өс юл саты киҫешкән ерҙә шиномонтаж-фәлән барҙыр, тип тә өҫтәнем.

Бар икән – туҡтаныҡ. Берәй сәғәткә һуҙылмаҡсы ремонт мәшәҡәттәре. Ваҡыт уҙғарыр өсөн, ветровкамды беләгемә элеп, яҡын-тирәне байҡап әйләнергә ниәтләнем. Таныш күпер... Эргәһендәге ятыу ҙа таныш. Ҡасандыр бер йәй, юлда эсергәнеп, шунда тәс-тәс сумып сыҡҡан хәтерҙә. Әле – май аҙағы, һыу һалҡынсараҡ, ну, нисауа, бирешмәм, сайынайым әле.

Ә юҡ, «Волга»ны ҡараштырғанда автослесарҙан таныш-тоноштарҙы белештем дәһә тәүҙә. Элекке фермала ҡасандыр күрше ауылдан күсеп киткән ҡоҙа тейеш уҙаман йәшәй ине – вафат икән. Артыҡ дуҫ күрмәһәм дә, участковыйҙы һораштым. Йәшлегендә ул, минән аҙаҡ педучилищела уҡытыусылыҡҡа диплом алып, комсомол саҡырыуы буйынсамы, милиция хеҙмәтенә юлыҡҡайны. Отставкала, имеш, райүҙәктә йәшәй, бындағы йортона йә ялға, йә аҙна араһында баҡсаһын һуғарырға ҡайтҡылай, ти, хәҙер.

Күпергә еттем, тик оҙаҡҡа туҡтаманым. Ҡайҙа ла шыптыр тоҡсайҙар, ҡағыҙ ҡаптар, шешә-мешә... Үткән-һүткән машиналар, ығы-зығылы ҡаланы иҫкә төшөрөп, дөмбөр-дамбыр йәнгә тейә. Өҫкәрәк күтәрелдем, кем нисектер, тура килһә, бала саҡтан уҡ ағында, хатта ки шарламала, һыу инергә яратам. Ә унда, ауыл ситендә, нәҡ шаршы шәйләнә. Кемелер ҡармаҡ һалып торамы?

– Һаумы, дуҫҡай, ҡабамы?

– Ажаучиктар эләгә... – Туғыҙ-ун йәшлек тәбәнәк малай, танырға теләгәндәй, миңә төбәшеп ҡарай.

– Ә бәрҙе? Суртан? – Үҫмер йылдарҙы һағынып, ҙурҙан ҡубам һәм көтөлгән яуапты ишетәм.

---

*Сабир Шәрипов (1948) – Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, Белорет ҡала һәм район хакимиәтенең Яныбай Хамматов исемендәге әҙәби премияһы лауреаты.*

– Ололар  һөҙә лә бөтөрә  шул.  Апа[*], кемгә килдең? – Ауыл балаһы «һеҙ»гә өйрәнмәгән, әммә тауышы әрһеҙ түгел, шуға ипле генә  үткенсе икәнлегемде әйттем.

–  Ремонтҡа туҡтаныҡ та... Сайынып алырға ине.

– А-анауҙа өйрәлмәк муйынға етә.

– Кемдекенә етә? – Шаяртҡанды һиҙеп, малай ҙа ирәбеләнде:

– Минеке-нә-ә!

Ысынлап та, буръяғыраҡ һыу апаруҡ һыуыҡ, шуға сөмәкәйҙә оҙаҡ шаптырламаным. Өйкөм генә томбойоҡ араһында сисенгәйнем, шунда кире  йүнәлдем. Ҡырсындан яй ғына атлайым. Күрәм: өйкөм таллыкта еңел һөйәкле ир заты бәләкәйерәк  шешә ауыҙынан һәләт кенә  ниҙер һемерҙе лә, еңелсә көйшәнеп, бер ни булмағандай, дәү генә  йәйпәк таш өҫтөнән балыҡсылаған малай тапҡырына сүгәләне  һәм тәмәке борҡотоп ебәрҙе. Кейендем дә  ветровка кеҫәһенә һалып торған сәғәтемә баҡтым – ваҡыт яй үтә.

Кейенде лә китте хушлашмай ҙа, тимәһен өсөн, малай эргәһенә етеп боролорға ниәтләнем.

–  Прив-э-эт, абзый!– Йәше уҙып барған егеткә,  йылғыр  һорғолт күҙҙәре менән нык ҡына төбәлеп  сәләмләгәс, үҙем дә ихлас ҡына яуапланым:

– Әс-сәләм, туған. Һыу инеп, еңеләйеп алдым әле.

– Минән старшы кеүекһең... Әллә берәйҙе йотаһыңмы? Шпи-ирт бар миндә... – Уйлап әйттеме, уйнап әйттеме – абайламаным, ҡәтғи генә баш һелктем. Тәмәке лә тәҡдим итте, мин үҙемдекен ҡабыҙҙым; һорамай-нитмәй, о-о, шәп, тип был да минекен ҡаптан сырт сиртеп  кенә сығарып тоҡандырҙы. Бармаҡтарының  һыртына тыуған йылы – «198...» татуировкаланған, беләгенә ҡаялағы яңғыҙ ҡарағай һынландырылған. Күргән кеүекменсе. Бәй, әлеге ауыл осондағы ташлы битләү мороно лаһа, ана, ултыра ҡарағайы еләҫкә еңелсә бәүелеп. Уңып бөткән йәшкелт футболка кейгән егетем  сигәрит төпсөгөн, эйәген  һоноп, малайҙың ҡалҡыуысы уйнаҡлаған  тобаға өрөп елгәргәйне, йәлпәшкән төпсөктө ялт та йолт ажаусыҡтар сирткеләне.

–  Бир әле, бездельник, үҙемә... Селәүеңде әпир... – Малай  быға хан заманғы муйыл ҡыуалын  тотторҙо.

Һап-ап – апаруҡ сабаҡ, һо-оп –  сиректәй ажау. Оҫта-а! Китергә уҡталған ерҙән мин дә бер аҙға туҡтаным.  Малайҙы һөйөндөрөп, егет балыҡтарҙы уның аяҡ аҫтына ырғытты.  Шул саҡ шарламанан  өҫтәрәк кер сайҡарға әҙерләнгән ҡатындың тәүҙә ҡарлыҡҡанырaҡ тауышы ишетелде, шунан ҡул  иҙәгәне шәйләнде: «Ҡайт, Рә...»...  Әллә Рәмис, әллә Рәлис тине, бөткәнме хәҙер яһалма исем. Малай теләр-теләмәҫ кенә саҡырған яҡҡа шылырҙан алда: «Ҡармаҡты  ошонда йәшерегеҙ», –  тип кесерткән ҡатыш  алабута сатырына ымланы. Йәшерегеҙ, тине  шул, гүйә, мин юлаусы ла – эшһеҙгәрим.

...Ошо  һүҙ иҫкә  төштө ҡапыл ғына, уны тик минең йәнтөйәктә генә әйтәләр, буғай. Мәғәнәһе – эшһеҙ ҡаңғырған  йоҡа елкә. Әйтәгүр, ауылымда борон Кәрим  исемле үтә ялҡау йәшәгән. Яңғыҙ әсәһе бай ғына булған, ҡустылар (ялсы, батрак) тотҡанмы, әлләсе.

Тиҙҙән балыҡсы «Быңдай пүстәкте...» тип  төкөрөндө лә ҡармаҡ һабын эйәһе әйткән урынға  һалды һәм йәлләткес юҫыҡта инәлергә кереште.

– Абзый, ней, бер  пивалыҡ ҡына бир әле. Баш зәңкей...

---

[*]*Апа —  атайҙан ололарға өндәшеү (Тамъян һөйләше).*

– Хәйерсене теләнсе талаған, тиҙәрме? – Көлөмһөрәп ебәрҙем.– Төҙәттең дәһә әле генә.

– О-ох, абзый, күҙең шә-әп! Етмәйерәк ҡалды шул... Кисә...

– Көпә-көндөҙ эсеп йөрөмәһәң?! – Һуҡранған булдым, үҙем уйландым: «Әллә бирәйемме икән? Ветровка кеҫәһендә һумдар барлығын һиҙенәлер был...».

– Ней, абзый, почтанан һалырмын. Йә икенсе тапҡыр һуғылырһың, а-анау ҡарағайға яҡын өйҙә торам. Оҙаҡламай арыу ғына кәсеп сыға, Алла бойорһа.

– Алкашҡа әйләнәһең дә былай! – тинем асыулы итеп, ниңәлер үҙен ҡапыл ғына яҡын энемдәй күреп. Ыңғайҙан беләгендәге һүрәттәргә лә һарыуым ҡайнағанды белгерттем. – Алла тиһең, ә бит мосолмандарҙа тәнгә һүрәт төшөрөү – оло гонаһ. Етмәһә, энә төртөп...

– «Зэк» бит мин, абзый... Уйламағанда бәләгә тарылды. Балыҡҡа ғына барған ерҙән, йә... – Хәбәрен раҫлар өсөн исемен дә белмәгән әҙәм нәҙек, әммә ярайһы тарамышлы беләген һелккеләне. – Зоналағы художество, так што...

Тик торғандан ләпелдәргә кереште был. Әйтәгүр, еренә еткереп, хатта ки тәмләп һөйләй. Ирекһеҙҙән туҡталдым, ҡабат тәмәке ҡабыҙҙыҡ.

– Катушкалы ялтырмаға мастер мин. Алты йыл элек... Велик менеп елдерҙем туранан, өс бөгөл аша барып төштөм Иҙелгә. Баландың сәскәле сағы. Сунтандарҙың ҡайҙараҡ ятҡанын тоям бит инде. Һелтәүем була ялтырманы ҡамышлы йә күрәнле сөмәкәйгә – ха-ап! – теге ялт-йолт үрәпсей ҙә һөйрәп тә сығарам. Кило ярымдай берәүһенең арҡаһына тройник үҙенән-үҙе ҡаҙалды...

«Булғылай... – Тынымды тәрәнерәк алып, хискә бирелдем. – Балан сәскә ҡойғанда сунтандар ҡомһоҙлана шул, ялтырма һыуға төшөр-төшмәҫтән уҡтай атлыға...». Диҡҡәтләнеүемде һиҙгән хөрәсән, ҡулын болғай-болғай, бытылдығын сыға.

– Электән ятаҡкан бер ятыуға етһәм, күрәм: ҡырсында – йәшел «Нива», сирәмдә ике буржуй ҡырын ятып мәжлес ҡорған. Ҡармаҡтарын, ауҙарын, хатта мылтыҡтарын тырым-тырағай бырактырғандар. Сүрәгәй өйрәк йолҡҡандар, дуплет менән атҡанды ишеткәйнем. Туҡта, мәйтәм, ҡыҙыҡ итәйем: тапҡырҙарына еткәс, һелтәп ебәрҙем тирәк тамыры һерәйгән болаҡҡа – һуҡты ауыҙын крокодил балаһылай асып, елле генә балыҡ – эй ҡаршылаша, эй дулай. Бушата бирәм дә катушканы, тағы өйрөлтәм, үҙем юрамал теге отдыхающийҙар эргәһенәрәк тартылам. Маҡтанғы килә шул ҡай саҡ ят күҙҙәр алдында. Сығарғанда уҡ һиҙҙем: дөңкөлдәп ҡапты, моғайын, йәшәмеш алабуғалыр йә елле судактыр тигәйнем, ысынлап та, ике килолай һыла, имеш. Һирәк балыҡ беҙҙә. Рюкзагыма тығып торһам, ярҙан ишетәм: «А ну-ка, браконьер, поди сюда!» – Бармаҡ бөгөп кенә саҡыра бит билгә тиклем шәрә бүгәй. «Улов конфискуем! Знаешь, кто я? Челябинский... опер... убой...» Аңғарманым, оҙон әйтте, ышанмаһаң тигәндәй, кабинаһының эстән элеүле майор формаһынан ҡыҙыл танытмаһын һурып, тышын ғына күрһәтте лә, ҡупая биреп, кире тығып ҡуйҙы. Күҙлекле, сибек кенә иптәше тыйып та ҡарай, быныһы ыжламай ҙа.

– Вәт, нахал! Вәт, тәртип вә хоҡуҡ һалдаты! – Үҙем дә һиҙмәҫтән, йәмһеҙ ваҡиғаның шаһитылай булғандай баш сайҡауым булды, әкрен генә йәнәшләгән «зэк» бөтөнләй туҡраны.

– Ана шуға йәнем көйҙө: допрос алғандай, һаман төпсөнә. Нимә эшләп йөрөйһөң? Был бит – запретзона, ти. Бутала буйтым, аяғы – бында, аҡылы – Силәбе яғында шәт. Һеҙҙең менән ваҡыт әрәм иткәнсе, тип янтая башлағайным, арттан тағы һөрәнләй был: «А ну вернись, падла, оставь улов!» Китер ҙә инем, ҡушкөбәгенә патрондар тыға был. Берәүһен һауаға сәпәне – шауҙырап картечь яуҙы ятыуға. Ҡуянмы ней мин теләһә кемдән шөр ебәреп ҡасырға? Падла, ти бит,

етмәһә, коренной башҡортҡа! Кире барҙым да, штурмовканың иҙеүен сисеп, түш кирҙем: «Стреляй, фашист!...»

Мин тын да алмай тыңлайым.

Егетем миңә күҙ һаламы-юҡмы, һуҡмаҡ ситенән ҡыу көпшә һындырып алды ла ҡапыл татуировкалы күкрәгенә терәне.

– Бына ошолай торабыҙ, братан, ғәфү, абзый. Теге бүгәй бәүеләсайҡала курогын инде ултыртҡайны – тарт та ал мин пушкаһын – и раз ҡына үҙенә төбәнем. Ҡурҡмай, сволочь, айныгып киткәндәй, кабинаға яурыны менән терәлде даже. Пистолетын һәрмәй иш-ишу. Кем өлгөр? Үлге килмәй, кәнишне. Шунан ни деү-ү – елкәһенә. Торған килеш йән бирҙе...

Өндәшмәйем, зиһенде бераууыҡ көфөр уй биләне: «Йәтеш иткәнһең, маладис!» Мәгәр был фекер нисек тиҙ керһә, шулай тиҙ осто.

– Яшыҡ иптәше трусиктан ғына килеш шыптыра ғына урман яғына. Артынан атайым тип сүкәйгәйнем – сырт ҡына итте бая бүгәй начальнигы һауаға атҡан көбәк. Шунан ни, яһауһыҙ мылтыҡты ситкә бырағтырҙым. Торам өңшәйеп... Яртылаш бүҫкәргән араҡыларын ғорлаһынан һемергәс, ярты кәүҙәмде бер аҙ һыуға тығып торҙом, имеш, әле. Нисектер тынысланған кеүек тә булдым.

– Дә-ә ...– тип ҡуйған булдым, ни әйтергә белмәй. Теге ҡабаланып дауам итте.

– Нишләргә? Тау аша аңҡы-тиңке атлап, күрше ауылға барҙым. Апайым йәшәй унда. Еҙнәм, элекке уҡытыусы, өйҙә ине, уха бешерттем. Тамаҡҡа бармай... Әҙерәк эсергәйне, вис кенә һөйләп бирҙем тегеңә.

– Еҙнәң нимә тине инде? – Күңелдә ниндәйҙер йәлләү тойғоһо яралды.

– Сдавайся, тине, ҡулың менән эшләгәнде иңең менән күтәр, тине. Тыңланым пенсионерҙы, – ә мин, маладис, ҡартлас, дөрөҫ эшләгән, тип уйланым. – Клубҡа инеп, звонить иттем райотделға. Тиҙ үк алып киттеләр. Бығаулап... Күҙлекле Һонтор, баҡһаң, мин киткәнсе ағас араһында боҫоп ултырған да рациянан шылтыратҡан икән. Эй, абзый, ел – ағас башынан, бәлә – әҙәм башынан...

– Ярай һуң, һөйөнөп йәшә, иҫән-һау ҡайтҡанһың...

Әңгәмәсем, мине китеп барыр типме, баяғы йомошон хәтерләтте.

– Йә, абзый, һорағанды бир ҙә – үпкәләштән булмаҫ.

– Күрмәгән-белмәгән ҡустыға аҡса тоттороу әллә нисек тәһә. – Һуаландым, икеләндем. – Өфөлә бер актер йәшәне. Эс-бауырға инеп, күҙгә ҡарап йә, бар бит кеҫәңдә, бар, һаранланма, һиндәй аҫыл ирҙе һыҡмырлыҡ биҙәмәй, ти торғайны. Ул, исмаһам, талант ине. Ә һин – хас... ас күгәүен! – Нәҡ шунда яланғас терһәккә ҡуңырға маташҡан ат күгәүенен сос ҡына сиртеп осорҙом. «Зэк» та аптырап ҡалманы, йәһәт кенә һүҙен ялғаны.

– Аҙағын тыңла, абзый, бөтмәне әле...

Бармаҡ һырттарындағы күкшел һандарҙан йәшен самаланым: йылдан... мең дә ун... мең туғыҙ йөҙ һикһән... алһаң, егерме ете йәш була. Армияға ла саҡырмай торғандар зэктарҙы. Йәл... Асыҡ-ярыҡ ҡына бит әле үҙе.

Ҡотолоп булмаҫ һинән тигәндәй, сәғәткә ҡараным да, сатырлы муйыл күләгәһенә баҫып, тегенең хәтәр хәтирәләрен күҙ алдына баҫтырырға тырыштым.

– Фи-и, ете йыл ғына бирҙеләр. Самооборона, сүтәки. Теге мент үҙе погонлы әүермән булып сыҡты. Взятканы ҡайырған ғына! Ҡатынын, балаларын туҡмап йәшәгән. Шулары ла судта түлке яманлап показание бирҙе. Ә-ә... теге очкаригы мине яҡлашҡандай итте. Әгәр башкирец – мине әйтә – майорҙың мылтығын тартып алмаһа, үҙенең йәне ҡыйылыр ине, кем белә, свидетель булараҡ, үҙе лә

расходҡа... Сөнки аҙаҡ майор былар “бер-береһен бах-бах иткән” һымаҡ эшләр ине. Запрысты... Срогым бөткәс, юлым Силәбе аша уҙҙы. Туҡта, мәйтәм, майорҙың супругаһына инеп сығайым, тинем. Адресы ныҡ иҫтә ҡалғайны суд барышында. Таптым, арлы-бирле кҫтәнәс һондом. Әйҙүкләмәне лә, ҡыуып та сығарманы. Шунан ни дачаһына киттек бының. Камин-фәләнен, электр-маҙарын рәтләнем, уны-быны соҡоном.

– Камины ла булғас, бай ғыналыр дачаһы? – Исем өсөн генә һораным быны.

– Буржуйский донъя, тик ир ҡулы етмәгәне беленә. Һый мул, мунса... Аҙаҡ хәзәйкәм менән... Киноларский! Ғәфү, абзый, артығын ысҡындырҙым, шикелле.

Ҡолаҡҡа элмәнем, шулай ҙа сытыйып, унан бигерәк шикләнә яҙып ҡуйҙым, ә ләпелдәк ҡустыҡайым хыялланып алды.

– Яңыраҡ хат яҙып ебәргәйнем, ныу-у ҡыуанған, саҡыра-а...

– Һуң?.. – Йәнәһе, нимә көтәһең, ниңә китмәйһең, тимәксе инем, күпер ауыҙында машина бипелдәне һәм таныш сигнал мине ҡабаланырға, ят ҡустыны ла өтәләнергә мәжбүр итте.

– Ней, абзый, һаранлыҡ... биҙәмәй, тигәйнең үҙең? Уфимскийҙар йомарт була торған...

– Дә-ә? Ҡай әбсәң әйтте быны? – Уфылдап-ухылдап ветровка кеҫәһендәге икеөс унлыҡты, тинлектәрҙе ҡырып-һепереп усына йомдорҙом.

– Ней, абзый, икенсе юлы әбизәтельне бирәм, йәме. Осрашырбыҙ әле, ғүмер булһа...

– Осрашырбыҙ, һиндә йомош та бар әле минең. – Ниндәй йомош икәнен төшөндөрмәнем, әлеге лә баяғы, һуңғы осор ярайһы ишәйә барған эшһеҙгәримдәр, асарбаҡтар, теләнсе-фәләндәр хаҡында берәй нәмә сыймаҡлау теләгенән әйтеп ташланым: ниңә яҙмаҫҡа? Улар ҙа кеше ләһә, улар ҙа замана геройы, дөрөҫөрәге, әҙәби герой була ала.

* * *

Минән күрмәксе, шофер дуҫым тиҙ-тиҙ генә яҡындағы бөгөлдә сумып-сайынып сыҡты.

Күперҙән эшһеҙгәримдең йүгерә-атлай ауылға йырбандауын шәйләнем. Яңы юлдарҙың ауыл уртаһынан уҙғандары ла осрай. Ҡурҡыныс. Әҙәм балаһына ла, йорт малына ла. Бынан асфальт ауылға инмәй, осонан, өҫтәүенә, яңы күперҙән, уҙа. Яҡшы, тик баяғы «күгәүен»дән биҙрәп, тамаҡ ялғау хаҡында онотоп ебәрелгән. Үҙемдән бигерәк, водителде ҡайғыртыуым. Ярай, алдараҡ юл кафеһы бар, буғай.

Бәй, шунда етәрәк, юл патруле «Волга»быҙға туҡтарға бойорҙо.

– Редакция машинаһымы? «Ҡымыҙ»ныйҙа өс-дүрт минут көтөүегеҙҙе һорайҙар.

Эйәк ҡаҡтым, ә лейтенанттың миңә итәғәтле өндәшеүенә ғәжәпһенгән водитель мөңгөрҙәп ҡуйҙы: «Йылмайып һөйләшәсе...»

Әҙ-мәҙ шөбһәләнһәм дә, элекке участковыйҙың этлегелер тип тә юраным. Ике-өс йыл элек, отставкаға оҙатылыр алдынан, гәзиттәрҙең береһендә уның хаҡында яҙылған һүрәтләмәнең – әлбиттә, ул шау маҡтауға ҡоролғайны – ташҡа баҫылыуын тиҙләтеү буйынса тел ярҙамым тейгәйне, бәлки, шуны онотмайҙыр.

Юрағаным юш килде. Арлы-бирле заказ биреп, буш өҫтәлдәрҙең ҡарағай

йәйеге күләгәләгәненә терәлеп тә өлгөрмәнек, күк иномарканан ашығыс төшөп, йәшлектәге һабаҡташым килеп күреште. Күлдәксән, яҫы бейсболкала, барсетка тотҡан. Ҡәнәғәт сырайлы, тулы кәүҙәле – олпатланған, тоталҡаһын юғалтмаған да кеүек. Бары тик һүҙсәнләнгән һымаҡ.

– Гаражды асып торһам, күршем әйтте: уфимскийҙар һине шиномонтажда һорашты. Яңы ғына, ти. Хәтерләп ҡалған номерығыҙҙы, организацияғыҙҙы. Һиндер, тинем. Посҡа шылтыраттым: өлгөрһәм, күреп ҡалырмын, өлгөрмәһәм, ҡымыҙ апҡайтырмын...

Беҙҙекенә өҫтәп өс шешлеккә, яртышар ҡымыҙға заказ бирҙе был. Оҙаҡларға иҫәп юҡ ине лә, йәйелеп ултырырға тура килде. Теге ҡымыҙҙы маҡтай, мин өндәшмәйем. Шыйыҡ, артый башлаған... Дала ҡымыҙына етмәй барыбер. Табында байтаҡ гәпләштек, ә водитель, әҙ-мәҙ ял итер өсөн, дүрт ишеге лә асыҡ кабинаһына сумды.

– Өй бар бит ауылда. Баҡса...

Ауылда... Көтмәгәндә иҫләнем бит баяғы «зэк»ты.

– Детективҡа әллә ни барымым юҡ, сүтәки фәһемле сюжетҡа юлыҡтым, буғай. Геройы – һинең ауылдаш. Икенселәй алдан килешеп, һиндә ҡунып сығырға тура килер микән? Командировка эләккеләй ул...

– Һыпыртайыҡ һуң кирегә, короче, ҡаты «ҡымыҙ» ҙа бар. Китабыңды алып уҡыным, шуға автограф яҙырһың... Маҡтанырмын...

– Бөгөн түгел.

Хәбәремдең айышына төшөнмәҫ борон уҡ ихлас ризалашты, шунан ғына мин бая шарламала осратҡан егетте белеште.

– Кем һуң фамилияһы?

– Әлләсе... Фамилияһын түгел, исемен дә белмәйем. Рәхмәт һыйыңа, әпәр итәйек.

Ҡулйыуғысҡа ыңғайланыҡ. Ҡайҙа тап иткәнемде ҡыҫҡаса һөйләп бирҙем, зэктың аҡса теләнселәүе хаҡында ваҡланманым.

– Бер мафиозникты, бығәйбә, һинең чиндағы ментты атып йыҡҡан. Дөрөҫө – мәжбүр булған. Ете йыл ултырған, буғай.

Отставкалағы майорҙың ҡараштары теремекләнде, гүйә, булмышында эҙәрмәнлек елкенеүе ҡабынды.

– Сла-б-о-о! Ә портреты нисегерәк?

– Ҡаҡса, метр етмеш тирәһе, ҡарасманыраҡ йоморо битле, ҡоңғорт күҙле.

– Кем икән, беҙҙә зэктар юҡ, ай-һай...

– «Абзый, ғәфү» тип таҫма телләнә. Бармаҡ һырттарына тыуған йылы тат... тат...уировкаланған. Эшһеҙгәрим инде бер.

– Һи-и, иseme улай түгел. – Эшләпә күңелсәкләнде, көлөмһөрәп миңә таҫтамал һондо. «Эшһеҙгәрим» һүҙен исем тип уйланы, ахырыһы, үҙе лә мыҫҡыллыраҡ атамалар тапты. – Фу-у, хөрәсән, ну-у алдарбай! Профтехучилищела уҡып йөрөгәндәме, горыдтан отдыхающий ҡарттың резина кәмәһен урлаған. Төндә, үҙе һымаҡ шалопай менән. Йәй ине, ошолай... Ул саҡ сборҙа инем, ҡайтыуыма быларға «дело» асҡандар...

Инде мин «фу-у»лап ебәрҙем, хатта әҙ генә ситкәрәк тайшандым. Валлаһи, үҙемде ауыҙынан тәмле кәнфите тартып алынған ыштанһыҙ малай хәлендә тойҙом. Мине аңлағандай, элекке участка инспекторы хәбәрен осларға ашыҡты. Шоферыбыҙ иһә ишектәрҙе тауышһыҙ ғына яба ине был мәлдә.

– Бер-ике йыл колония йә условный ала ине, атаһы теге ветерандың, короче, бывший «силовик»тың, бал-май бирепме, күңелен күргән.

– Татуировка?..

– Тә-әк, Магнитка домнаһына йөрөштөрҙө, буғай. Ятаҡта йәшәһә, әллә кемдәр менән аралашһа, татуировка ла ҡаҙатҡандыр. Кстати, һине әүрәткән «героик фантазия»ны берәй бывший зэктан ишетеүе бик тә ихтимал.

– Әле нисек, эшләйме? Өйләнгәнме?

– Юҡ шул, эше лә, кәләше лә юҡ. Иртәрәк китте атаһы, ярты йәтим үҫте. Егерме етеләргә етәлер... Бер күҙгә зәғиф әсәһен ҡарай инде былай, һүҙ юҡ. Пенсияһы арыу, шикелле, ғүмер буйы доярка булды. Күҙен һыйыр һөҙгәнме... Ике ҡыҙы ҡырҙа, үҙҙәре семьяға батҡан...

– Әсәһен ҡарағас, яҡшы. Ҡарамағандар ҙа күбәйә хәҙер... – Машинаға табан атланым. Минең ыңғайға оҙатыусым да ауылдашын ыңғай яҡтан ҡылыҡһырлап ташланы.

– Оҫта үҙе, суҡынғыр. Ул телевизор, ул быттехника – йүнәтә лә бирә. Ҡарт-ҡоро ни, буш итмәй, һыйлап та ебәрәләр. Короче, ратҡаны бар, яратмағаны... – Әһә, мәйтәм, һыу буйында ҡармаҡсы малайына ҡул болғаған ҡатынҡай «яратмаған»дар иҫәбенә керәлер, буталмаһын, әйҙә, улыҡайы уғры яманаты сыҡҡан эшһеҙгәрим тирәһендә, тигәндер. – Телгә лә шыма. Бәғзе писәтелдәр кеүек, фальшивканы ла булдыра! Короче, дөйөм фекер йөрөтөүем... – Ҡасандыр шиғырҙар яҙғылаған әшнәмдең былдай ғына фекер төйнәрлек хаҡы бар ине, әлбиттә. Танышым бер аҙ элекке һөнәренә ҡупайып ҡуйҙы. – Һы-ы... Ментты үлтергән өсөн ете йыл ғына бирмәҫтәр ине. Власть вәкиленә ҡаршылыҡ күрһәтеү, ишшу үлтереү бөтә илдәрҙә строго карается.

Йылы ғына, йылдам ғына хушлаштыҡ. Килде-киттеле әлеңгә әңгәмәнең шауҡымы зиһенендә һаман зиңкегәндерме, көтмәгәндә, ә юҡ, кәрәкмәгәнгә дуҫым уйынлы-ысынлы мин исемен дә белмәгән, тик ни ғилләһе менәндер күңеләмә яраған ауылдашын ҡабат телгә алды.

– Иманын уҡытайым маңҡаның, бөгөн үк... Кешене һемәйтергә оҫтарып бара, короче...

Бүлдерҙем үҙен, ҡапыл ғына башыма һуҡҡан уй-тәҡдимем менән уртаҡлаштым:

– Короче, улай итмә, ярамай улай. Һис зыяны теймәне миңә. Иманын уҡытҡансы, никахын уҡыт: үҙенән уҫалыраҡ кәләш әпиреш. Ҡатын-ҡыҙ ҡарамаҫлыҡ түгел дәһә?! Көлмә, көлмә...

– Көлмәйем. Әсәһе лә әйтә, ти, килен-маҙар апҡайтһа, иҫке өйҙә йәшәрмен, тип. Эйе, дворҙарында – ике өй, атаһы мәрхүм ошо улына яңы йорт күтәргәйне. Сыбыҡ осо затлығы бар ине миңә ул ағайҙың.

– Шәп сатирик йә әртис сығыр ине ҡустыңдан. Йәл... Рәхмәт, туған, хуш-һау әлегә.

– Пока. Икенселәй туҡталһаң, үҙеңә йөҙләгән сюжет барлап ҡуям. Күп ул беҙҙә: драмаһы ла, комедияһы ла...

...Юҡ-юҡта йәшкелт футболка кейгән шул егетте иҫкә алғылайым. Йөҙө-киәфәте онотола бара, тик ҡыу көпшә тотоп ҡыланғаны, йөрәкһеп һөйләгән мажараһы һаман хәтерҙә.

## «ЯМАУҺЫҘ ИНЕ ЙӨРӘК...»

*(Риф Мифтаховтың яңы быуат башындағы шиғриәтенә бер ҡараш)*

Риф Мифтаховтың һуңғы ете-һигеҙ йылда «Ағиҙел» биттәрендә донъя күргән әҫәрҙәренә таянып яҙылған был мәҡәләгә исем эҙләгәндә, миңә уның "Килегеҙ!" тигән шиғыры ярҙам итте. Оло быуын шағирҙарының күпселегенә хас булғанса, Риф Мифтахов та әлеге шиғырында, антитеза алымын ҡулланып, беҙҙең кисәгебеҙҙе бөгөнгөбөҙ менән сағыштырған:

*Ямаулы кейем кейһәк тә,*
*Ямауһыҙ ине йөрәк.*
*Көнөбөҙ ине яҡтыраҡ,*
*Күгебеҙ — зәңгәрерәк.*

Иғтибарҙы үҙенә тартып тороу менән бер ҡатарҙан, был юлдар тәрән уйға ла һала. Ирекһеҙҙән һуңғы егерме йылда беҙҙең кинематографта ҡый үләне шикелле үрсегән сериалдар теҙмәһе күҙ алдына килеп баҫа. Хәтерегеҙгә төшөрөп тораһы юҡ: улар ике тамсы һыу кеүек бер-береһенә оҡшаштар. Был фильмдарҙа төп урынды биләп тороусы персонаждар, халыҡты алдап, илде талап, иҫ китмәле байлыҡ (күҙеңдең яуын алырлыҡ виллалар тиһеңме; сит ерҙәрҙән ҡайтарылған ҡиммәтле еңел автомобилдәр тиһеңме; бассейнлы сауналар, төрлө сортлы спиртлы эсемлектәрҙән өҫтөңә ауырға торған буфеттар тиһеңме) туплаһалар ҙа, күп осраҡта уларҙың ғүмере ҡыл өҫтөндә ҡала: байлыҡтарын артабан арттырыу өсөн барған үҙ-ара иҫәпһеҙ-хисапһыҙ бәрелештәрҙә бер-береһен аҫалар-киҫәләр; атып йә сәнсеп үлтерәләр, тереләй баштары менән һыуға сумдырып тонсоҡторалар; һис юғында сит илгә сығып ҡасалар.

Ни ҡылаһың, урлашып-мутлашып йыйған байлыҡ игелекле булмай икән шул — кешегә бәхет тә, шатлыҡ та, күңел тыныслығы ла килтермәй. Энәнән-ептән сыҡҡан кейем кейеп йөрөүең мәғәнәһен, күңелеңдә ҡара бесәй ҡотороп, йөрәгеңдә дауыл уйнағас! "Килегеҙ!" шиғырын ижад итеп ултырғанда, Риф Мифтахов та, бәлки, ошондай хистәр кисергәндер. Юл ыңғайында шул да мәғлүм булһын: "Ямаулы кейем кейһәк тә, ямауһыҙ ине йөрәк"кә тартым тәрән мәғәнәле афористик һөйләмдәр уның ижадында, бигерәк тә һуңғы осорҙа ишәйеп киткән ике һәм дүрт юллыҡ шиғырҙарында, йыш ҡына күҙгә салына.

Был фекергә асыҡлыҡ индереү өсөн ҡайһы бер фактарға таянырға, шулай уҡ шағирҙың үҙенә лә мөрәжәғәт итергә мөмкин. «Ағиҙел»дең 2003 йылғы 11-се һанында, мәҫәлән, ул тик дүрт, ике юллыҡтар менән генә сығыш яһаны. Туҡһан шиғырҙы эсенә алған был шәлкемде автор "Һүҙ ҡеүәте — тапҡырлыҡта" тип атаған. Шәлкемгә кескенә инеш һүҙе лә бирелгән. Унда Риф Мифтахов былай тип яҙған: "Өс тиҫтәнән ашыу ҡуйын дәфтәрҙәремдәге төрлө мәҡәлдәр, әйтемдәр, бөйөк шәхестәрҙең фәһемле фекерҙәре, бигерәк тә үҙемдең тормош

күҙәтеүҙәрем, тәжрибә һығымталарым, кеше һәм яҙмыш һынамыштарым — уҡығандан, ишеткәндән, күреп белгәндән, үҙ фәлсәфәмдән тыуған яҙмалар... Мин уларҙы ғүмер буйы йыйҙым, йыям, ҡат-ҡат уҡып ләззәт, һабаҡ алам, үҙемә, әйтер һүҙемә күп нәмәләр асам. Бигерәк тә мәҡәлдәр менән әйтемдәргә мөкиббәнмен. Улар — һүҙҙең биҙәге лә, елеге лә. Өҫтәүенә, икеһе лә (бигерәк тә мәҡәлдәр) — поэзияның күп сифаттарын алған ярым шиғри әҫәрҙәр. Юҡтан ғына бөйөк В. Белинский, поэзия мәҡәлдәрҙән башлана, тимәгәндер".

Р. Мифтаховтың "Ҡояш шаһит" (1999) тигән йыйынтығына күҙ ташлаһаҡ, уның дүрт һәм ике юллыҡтар менән мауыға башлауы туҡһанынсы йылдарҙың аҙағына тура килгәнлеген шәйләрбеҙ. Был китапҡа ингән дүрт юллыҡтарына ул — "Ут ҡабыҙ!", ә ике юллыҡтарына "Матурлыҡ көсө" тигән исем ҡушҡан. Артабанғы йылдарҙа иһә бындай шиғырҙар ижад итеү — мауығыуҙан даимилыҡҡа, рухи талапҡа, көндәлек йән аҙығына әүерелгән, тиергә мөмкин. Сөнки яңы быуат башында «Ағиҙел»дә баҫылған шәлкемдәрҙең күбеһендә, ғәҙәти шиғырҙар менән бергә, дүрт һәм ике юллыҡтар ҙа байтаҡ урын алып тора. Кимәлдәре буйынса улар — төрлө юғарылыҡта. Әммә шуныһы ҡыуаныслы: Р. Мифтахов шиғриәтендә һис шикһеҙ "тапҡыр һәм ҡыҫҡа, тәрән һәм киң мәғәнәле" дүрт һәм ике юллыҡтар өҫтөнлөк итә. Уларҙың абсолют күпселеге ысын мәғәнәһендә һүҙ ҡеүәтенең тапҡырлыҡта икәнлеген иҫбатлап тора. Бында күп кенә миҫалдар ҙа килтерергә булыр ине. Тик ваҡыт һәм урын тығыҙлығы форсат бирмәй. Шуға күрә уҡыусы был дүрт һәм ике юллыҡтарҙы үҙе уҡыһын, ләззәтләнһен, фәһем алһын, шәхсән баһаһын бирһен, тигән теләктәр менән сикләнергә ҡала.

Шағирҙың ижад лабораторияһы миңә яҡындан таныш булмаһа ла, ошо урында уның күҙгә бәрелеберәк торған ҡайһы бер үҙенсәлектәренә бәйле фекерҙәрем менән уртаҡлашырға баҙнат итмәксемен. Үрҙә телгә алынған инеш һүҙендә Р. Мифтахов, һуңғы йылдарҙа "афористик ҡыҫҡа" шиғырҙар уның поэтик ижадында төп нигеҙ ташына әүерелә барыуын һыҙыҡ өҫтөнә алып, быны бер сәбәбен "хәҙер оҙон, күләмле әҫәрҙәр уҡыу осоро үтте" тигән заман шауҡымы менән аңлатмаҡсы.

"Заман шауҡымы"н инҡар итеү һәм уға ҡаршы тороу — еңел түгел, әлбиттә. Тик бөтә бәләне уға ғына япһарыу ҙа дөрөҫ булмаҫтыр. Күләмле әҫәрҙәрҙе элек тә артыҡ киң даирә уҡымағандыр. Ләкин быға һылтанып ҡына Ғ. Сәләм дә, Р. Ниғмәти ҙә, Б. Бикбай ҙа, М. Кәрим дә, Н. Нәжми ҙә, М. Ғәли ҙә төшөнкөлөккә бирелмәгәндәр бит — үҙҙәренең киң ҡоласлы эпик поэмаларын яҙыуҙан туҡтап ҡалмағандар. Бөгөн был жанр беҙҙә һүнеп бара түгелме һуң?

Уртаҡлашырға ниәтләгән фекеремдең икенсеһе. Күпселек шағирҙарҙан айырмалы буларaҡ, Р. Мифтахов үҙ әҫәрҙәренә "ҡәләм төртөргә" (был һүҙбәйләнеште ул үҙе уйлап сығарҙы һымаҡ, тик ҡайҙа осратҡанымды ғына әйтә алмайым) яратыусан. Шик юҡ, әҫәрең өҫтөндә ныҡышмалы эшләү, уны торған һайын камиллаштырыу — маҡтауға лайыҡ. Типография ысулы менән баҫтырып сығарғанға тиклем Лев Толстой үҙенең "Һуғыш һәм солох"он, әгәр хәтерем яңылышмаһа, ҡулдан ете тапҡыр аҡҡа күсергән, тиҙәр. Уйлап ҡарағыҙ әле: ҡалын-ҡалын дүрт китаптан торған романды, төҙәтә-төҙәтә, камиллаштыра-камиллаштыра, ҡулдан ете тапҡыр күсерер өсөн күпме көс, сыҙамлыҡ һәм түҙемлек, ижадҡа шул тиклем дә бирелгәнлек кәрәк!

Р. Мифтаховтың "ҡәләм төрткән" әҫәрҙәре артыҡ күп булмаһа ла, осраштырып тора. Бәғзеһенең исемен үҙгәртеп ҡуя ул, бәғзеһендә строфалар һаны кәмей төшә. Ҡайһы

берҙә ике юллыҡтар ғәҙәти шиғыр эсенә инеп китә. Бәхәсһеҙ, былар бөтәһе лә әҙәбиәтселәрҙә ҡыҙыҡһыныу уятырлыҡ. Сөнки быңдай осраҡта, бер үк әҫәрҙең төрлө варианттарын сағыштырып, шағирҙың ижад процесын, ижад манераһын аныҡыраҡ итеп күҙаллау мөмкинлеге тыуа. Тик ябай уҡыусы быға нисегерәк ҡарай икән?

Һис шикһеҙ, әҙәби әҫәр — тәү сиратта авторҙың хосуси милке. Бер генә тәнҡитсенең дә ижадсыға күрһәтмә яһарға, бойорорға йәки фарман бирергә хаҡы юҡ — ул фәҡәт үҙенең уй-фекерҙәре менән бүлешергә генә мөмкин. Шулай ҙа, "ҡәләм төртөү"гә ҡарағанда, уны, Толстой үрнәгендә, әҫәрендә уҡыусы ҡарамағына тапшырғансы ҡәләм төртмәҫлек хәлгә еткереү хәйерлерәк түгел микән?

Әҙәбиәт, мәҙәниәт өлкәһендәге дәрәжәле һәм маҡтаулы исемдәр Риф Мифтахов өсөн үҙмаҡсат түгел. Шул уҡ ваҡытта һуңғы осорҙа был исемдәрҙең бер аҙ ваҡланып, арзанайып китеүенә өнһөҙ ҙә ҡала алмай ул. «Ағиҙел»дең 2006 йылғы 9-сы һанында донъя күргән "Шағир даны" тигән шиғыр быға асыҡ дәлил була алырлыҡ. Икешәр юллы һигеҙ строфанан торған был шиғырға автор эпиграф урынына "Шәйехзада Бабич хаҡында уйланыу" тигән һүҙҙәр яҙып ҡуйған. Шиғырҙа быңдай юлдар бар:

*Шағирлығың — йәштәр*
*өсөн исем-шөһрәт,*
*Тик бар бәлә — лайыҡтары*
*үтә һирәк.*
*Баҫып алды ижад тауын*
*һөнәрселек,*
*"Мин — нур!" тиеп күҙҙе*
*алдай һәр бер сөрөк.*

Р. Мифтаховтың үрҙә телгә алынған ҡайһы бер кешелек сифаттарына уның итәғәтлеген дә өҫтәр инем. Күҙаллауымса, ул барына шөкөр итеп, әҙҙән дә ҡәнәғәт була белә шикелле. Үҙе тураһында әйтелгән кескенә һүҙгә лә иғтибар итмәй һәм мөнәсәбәтен белдермәй ҡалмаҫ ул. Был сифат уға әҙҙең төбөндә намыҫлы һәм көсөргәнешле хеҙмәт емеше ятҡанлығын яҡшы аңлауҙан киләлер, тип уйлайым. Уйымды йөпләү өсөн "Йырҙарымда ғүмер бар һымаҡ" тигән шиғырында туҡталырға мөмкин. Билдәле булыуынса, шөһрәт ҡаҙанған арҙаҡлы шәхестәр менән осрашыу кисәләрендә уларға ғәҙәттә шундай һорау биреүсәндәр:

— Әгәр донъяға яңынан килһәгеҙ, тормошта ниндәйерәк юл һайлар инегеҙ?

Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, күп осраҡта яуап бик ихлас булмай, һәм шуға күрә ул бер төрлөрәк яңғырай:

— Бер нәмәнән дә баш тартмайынса, нисек булған — шулай ҡалдырыр инем.

Ә бына "Йырҙарымда ғүмер бар һымаҡ"тың лирик геройы башҡасараҡ фекер йөрөтә:

*Ултырамын уҙған ғүмеремдең*
*Юл-һуҡмағын урап уйҙарға...*
*Мин уларҙы һайлап уҙар инем,*
*Мөмкин булһа ҡабат уҙарға.*

Шағир, ғүмер юлын яңынан уҙырға мөмкин булһа, уны һайлабыраҡ уҙырға теләүенең ҡайһы бер сәбәптәрен дә асып һалған. Әйтәйек, донъя мәшәҡәттәре, төрлө ваҡлыҡтар арҡаһында ҙур эштәр атҡарырға уның дарманы етмәгән; ижад сәме алға әйҙәп торһа ла, арғымағына эйәрен дә ҡыйыр-ҡыймаҫ ҡына һалған; һөйөү гөлө иртә япраҡ ярһа ла, был өлкәлә лә бөтәһе лә ал да гөл булмаған; тормош хәҡиҡәтен дә һуңлабыраҡ аңлаған ул. Уҙған ғүмер уҙған инде, нисек уҙһа ла, уны кире ҡайтарып булмай, тигән ныҡлы һығымтаға килә лирик герой. Һәм хәҙер уның иң ҙур теләге:

*Яҙһын ине ҡалған тормошомдо*
*Аҙашмайса дөрөҫ уҙарға.*

"Хоҙайҙан ҡурҡыу" тигән шиғырҙа авторҙың тормош позицияһы уғата ла сағыу итеп күрһәтелгән. Әҫәрҙең формаһы ла уңышлы һайланған: лирик герой, йәнәһе, Хоҙай менән

диалог ҡормаҡсы, ләкин ҡыйыулығы етмәй. Уның характер үҙенсәлеге, йәшәү принцибы түбәндәге юлдарҙа ышандырырлыҡ асып бирелгән:

*Алдашманым, урлашманым,*
*Хәләл көсөм — тапҡаным.*
*Түргә менергә самалап,*
*Түрәгә йән һатманым.*

*Ялландым бары халҡыма*
*Йән хеҙмәтсеһе булып.*
*Һайраным йөрәк йырымды,*
*Күңел талына ҡунып.*

Күләмле, метафораларға бай был шиғыр юмор сатҡыларынан да мәхрүм түгел. Лирик герой ҡасан да булһа бер хаҡ хөкөм өҫтөнлөк итеренә өмөтөн өҙмәһә лә, ғәҙеллек һағында торорға саҡырылған Тәңрегә үҙенең үпкәһен белдерергә лә онотмай, лайыҡлыны ер өҫтөндә сағында күрергә, тейешле баһаны ла уға шунда сағында бирергә өндәй.

Р. Мифтахов ижадында мөхәббәт темаһы ҙур урын алып торғанлығы күптән билдәле. Уның сәсмә әҫәрҙәрен берләштергән бер китабы юҡҡа ғына "Ғишыҡ тотоу — ут йотоу" тип аталмағандыр. Был тема шағирҙың лирикаһында ла һирәк түгел. Ҡайһы берҙә, әйтәйек, "Яҙа алмай ҡалам шат хәбәр" тигән шиғырҙы уҡыған, мөхәббәт темаһына ул иреҡһеҙҙән мөрәжәғәт итмәй микән, тип тә уйлап ҡуяһың. Һигеҙ генә юлдан торған был шиғырҙа беҙҙең заманға хас хәл-ваҡиғалар бик оҫта тотоп алынған: тышта йөрөгәндә лирик герой тирә-йүндәге һиллеккә, тәбиғәт матурлығына һоҡланып бөтә алмай; өйгә инеп, телевизорын асып ебәрҙеме, был тойғоларҙың эҙе лә ҡалмай, сөнки унда һуғыш, ҡан ҡойош, зәһәрлек хөкөм һөрә. Ә шағирҙың ул турала яҙаһы килмәй. Бәлки, шуға ла ул үҙенең күңел һандығында ҡаҙынырға мәжбүрҙер.

Риф Мифтаховтың мөхәббәт лирикаһы бай йөкмәткеле. Өҫтә иҫкә алып киткәнсә, мөхәббәт тойғоһо лирик геройҙан ут та йотторорға мөмкин; йәшлектә кисергән хистәрҙе лә атлаған һайын яңыртып торорға һәләтле икән ул һөйөү-яратыу тигән тойғо; һөйгәне берәй ары китһә, лирик геройҙың һағыштарға түҙә алмаған йөрәге селпәрәмә килеп ватылмаҫ, ә ул ҡайтһа, донъяһы ҡояштай балҡып китмәҫ тимә һ.б. Шуны һыҙыҡ өҫтөнә алып әйтергә кәрәк: был үтә ҡатмарлы, ҡайһы саҡта хатта һүҙ менән генә аңлатып бирә алмаҫлыҡ үтә нескә хис-тойғолар хаҡында һүҙ барғанда, Р. Мифтахов уларға һис кенә лә ҡара тап төшөрмәҫ. Киреһенсә, уның мөхәббәт лирикаһы башлыса сафлыҡ, тоғролоҡ, ихласлыҡ кеүек ыңғай сифаттар менән һуғарылған һәм шағир ошо сифаттарҙы яҡлап сығыш яһай, уларға дан йырлай.

"Көтмәгәндә осраштыҡ беҙ бер көндә..." тигән шиғырҙың лирик геройы, мәҫәлән, үҙ ғүмерен урталайға бүлгән. Уның тәү яртыһы һөйгәненән башҡа үткән, шуға күрә ул көйһөҙ, нурһыҙ, шишмәһеҙ, гөлһөҙ булған һәм лирик геройҙың йәне кипкән. Икенсе яртыһы бәхетле, өмөтлө, йырлы булған, бер көнө хатта миҙгелдәрҙән оҙон тойолған. Ғүмере урталайға бүленгән мәлде лирик герой яңынан тыуыуға тиңләй. "Үҙгәргәнһең, ләкин ваҡыт барыбер...", "Осрашҡас...", "Өҙөлмәҫ йыр", "Һинең менән булды төрлө саҡтар...", "Сер һөйләр төн", "Осрашҡанда күҙҙәр ялҡын һипһә...", "Юлдарымда күпме аҙашманым...", ''Уйлай китһәң, бары әүәлгесә...", "Ҡулдарың һүҙ", "Көймәйек", "Һин килгән кис ҡәҙер кисе ине...", "Хәтеремдә икәү бергә саҡта....", "Йылдар һине тик иркәләп киткән...", "Ике йылға", "Һине күргәс, мин күктәргә мендем..." тигән шиғырҙарҙа ла тәрән хистәргә бирелергә һәләтле лирик геройҙың эске халәте оҫта һәм ышандырырлыҡ тасуирланған.

Әлбиттә, Р. Мифтаховтың был әҫәрҙәрендә һүрәтләнгән лирик геройҙар өсөн мөхәббәт — уларҙы

ғүмер буйы оҙата барған гел бәхетле минуттар ғына, тип уйлаһаҡ, тормош диалектикаһына ҡаршы килер инек. Сөнки тормош тигәнең, билдәле булыуынса, кеше яҙмышына үҙенең төҙәтмәләрен бер туҡтауһыҙ индереп кенә тора. "Осрашҡас..." тигән шиғырҙа, мәҫәлән, бер-береһен яратып та, ҡауыша алмаған ике мөхәббәттең яҙмышы Саҡ менән Суҡ яҙмышына тиңләнгән. Бындай яҙмышты автор Хоҙай ҡарамағына тапшырған. "Осрашҡанда күҙҙәр ялҡын һипһә..." тигән шиғыр ҙа күптәнге, тормошҡа ашмаған мөхәббәт хаҡында. Ә бына "Сер һөйләр төн"дең лирик геройы, йәш сағынан уҡ килгән, ләкин тормошҡа ашмаған мөхәббәтен хәтерләп, йөрәгендә һаҡланған ғәзиз сере менән уртаҡлашмаҡсы:"Мөхәббәтем ысын икәнлеген әйткем килә, һуңлап булһа ла", — ти ул. Шиғыр былай тамамлана:

*Әле булһа көтөп йәшәйем мин*
*Икәү генә ҡалыр бер төндө.*
*Миҙгелдәрҙе миҙгелдәргә ялғап,*
*Мин көтмәнем шулай бер кемде.*
*Тик һин генә аңларһыңдыр кеүек*
*Үҙем менән серер серемде.*

Шағирға, ("Юлдарымда күпме аҙашманым..." һәм "Йылдар һине тик иркәләп киткән..." тигән шиғырҙарға ҡарағанда, лирик герой менән автор араһында айырма юҡ тиерлек, сөнки улар икеһе лә — шиғыр яҙыусылар) әле һаман тынғы бирмәйенсә, ваҡыты-ваҡыты менән бер ни тиклем үкенеслерәк уйҙар ҙа уятып ҡуйған мөхәббәт тураһындағы миҫалдарҙы артабан да килтерергә булыр ине. Ләкин реаль ысынбарлыҡта, ҡайнар хистәр менән бер ҡатарҙан, аҡыл, бурыс, намыҫ тигән төшөнсәләр ҙә йәшәй бит әле. Риф Мифтахов шулар хаҡында ла онотмай. "Ҡулдарың һуҙ" тигән шиғырҙа, әйтәйек, һүҙ "яҙмыш йылғаһының ҡауыштырмаҫ ике ярында" ҡалған ике заттың ғүмер буйы балалары һәм намыҫтары алдындағы бурысты үтәүҙәре хаҡында бара. Автор шиғырҙың тәүге ике юлында уҡ был фекергә асыҡлыҡ индергән: лирик геройҙың йәшләй һөйгәне тәне менән бүтән эргәһендә, ә үҙе йәне менән башҡа янында. Әҫәрҙең һуңғы дүрт юлында тормошта, ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, юҡ-юҡ тиһәң дә осраштыра торған драматик хәл сағылыш тапҡан:

*Ҡулдарың һуҙ: һинең йылмайыуҙан*
*Бәхет хисе дөрләр ҡанымда...*
*Тимәк, беҙгә уның яҙғаны шул*
*Мөхәббәт һәм бурыс алдында.*

Ошондай уҡ идея "Көймәйек" тигән шиғырҙың да нигеҙендә ята. Йәшлектә мөхәббәт тойғоһо яҙмыштан да бөйөк булып күренһә, яндырһа-көйҙөрһә, хатта йондоҙҙарға үрләтһә, йылдар үткәс, олоғая төшкәс, "тойғо менән түгел, аҡыл менән фекер" төйнәлә икән:

*Ҡорған ояларҙы туҙҙырманыҡ,*
*Ғәзиз күңелдәргә теймәнек.*
*Бәхет микән? Бәхетһеҙлек микән?*
*Икеһе лә барҙыр — көймәйек.*

Тормошҡа ашмаған, ымһындырып ҡына ҡалған мөхәббәт шауҡымы "Хәтеремдә икәү бергә саҡта..." тигән шиғырҙа айырыуса матур (яңғырашы менән) һәм үҙенсәлекле (йөкмәткеһе йәһәтенән) итеп күрһәтелгән:

*Шаян инең, ләкин шаяртманы*
*Тормош менән яҙмыш тигәнең:*
*Нисә йылдар инде башҡа менән*
*Баш ҡуйырға уртаҡ мендәрең.*

Р. Мифтаховтың мотлаҡ кемгәлер төбәп түгел, ә аҫыл заттарҙың дөйөмләштерелгән образын тыуҙырыу ниәтенән яҙылған шиғырҙары ла байтаҡ. Әгәр бер шиғырында ("Һин килгән кис ҡәҙер кисе ине...") ул ҡатын-ҡыҙҙы аҡ фәрештәгә тиңләһә, икенсеһендә иһә ("Сер") уны һис кенә лә төшөнөп етмәҫ сер ҡапсығы тип атай. "Һине күргәс, мин күктәргә мендем..." дә инде "Йыһан яулап була — аңлап булмай ҡатын-ҡыҙҙарҙы" тип танырға мәжбүр. "Хоҙай менән һөйләшеү" тигән шиғырындағыса:

*—Эй, Хоҙайым, ниңә ҡатын-ҡыҙҙың*
*Ахмаҡтарын ергә тараттың?*
*—Аҡыллыһын ир-ат ҡәҙерләмәй,*
*Ахмаҡтарын, әйҙә, яратһын,*

— тип бер аҙ шаяртып алырға ла булдыра.

Һуңғы ваҡытта Р. Мифтаховтың лирик геройы ла, шағир үҙе лә тормош асылы, ерҙә йәшәү мәғәнәһе, кешеләр араһындағы мөғәмәлә, шулай уҡ ваҡыт һәм арауыҡ, сәбәп һәм һөҙөмтә, ҡапма-ҡаршылыҡтарҙың берҙәмлеге һәм көрәше кеүек фәлсәфәүи төшөнсәләр менән нығыраҡ ҡыҙыҡһына башланы. Әгәр ирекле формала яҙылған "Ғүмер... Ижад... Күпме ҡалды икән?" тигән ҡыҫҡа ғына бер шиғырында автор "Ижад ҡәләмдәрем — үҙ ҡулымда, тәҡдир ҡәләмдәре — Хоҙайҙа" ти икән, был уның тәрән уйланыуҙарынан киләләр.

"Шашмайым, көйөнмәйем" дә — тормош диалектикаһына ҡоролған шиғыр. Йәшәү диалектикаһының асылы иһә шунда: шатлыҡтар менән ҡайғылар һәр ваҡыт йәнәш атлай. Лирик геройҙың ерҙә йәшәү фәлсәфәһе түбәндәге ике юлға һыйған:

*Ян-яҡтарға ауып китмәҫ өсөн*
*Донъя йөгөн тигеҙ йөкмәйем.*

Уның фекеренсә , тормошта аҙашмаҫ, ерҙә юғалмаҫ өсөн берҙән-бер сара ла, берҙән-бер юл да — юғары маҡсатҡа ынтылыу ("Аҙашмаҫҡа..."). Һәм был донъяла иң ҙур ғәйеп — "алдарыңа бер маҡсат та ҡуймай, бушҡа йәшәү..." ("Иң ҙур ғәйеп"). Ошо типтағы ҡыҫҡа шиғырҙарҙа шағирҙың үҙ характеры ла сағылып китәлер, бәлки. "Шатланмағыҙ"ҙа, мәҫәлән, ул ниндәй генә хәлдәрҙә ҡалһа ла, ҡыҙғаныс кешегә әйләнмәҫкә тырышасағын белдерә; "Ышанам"да, күпме генә алдамаһындар, аҫтан киҫеп өҫтән ялғамаһындар, барыбер кешегә ышанысын юғалтмаясағын белдерә; "Ҡурҡам бары..."ла лирик герой — шағир "бары ялған һүҙ һөйләүҙән, әйтер ерҙә — өнһөҙ ҡалыуҙан" ғына ҡурҡа. Йә иһә Рәшит Солтангәрәевтың вафатына бағышлап яҙылған бына был юлдар кемдәрҙе генә уйға һалмаҫ икән: "Телдәремдә тереләргә әйтер әрнеүҙәрем: белһәк икән туғанлыҡ һәм дуҫлыҡ ҡәҙерҙәрен" ("Телдәремдә ..."). Рәми Ғарипов иҫтәлегенә арналған "Ниңә шулай?" тигән шиғыр ҙа "Телдәремдә..." шикелләрәк яңғырай,

Шағирҙың үҙе, шағир менән уның лирик геройы араһындағы нисбәт хаҡында һүҙ сыҡҡас, Р. Мифтаховтың "Ҡәҙерлеһең, Ваҡыт" һәм "Хыял" тигән шиғырҙарына ла туҡталып китһәк, һис яҙыҡ булмаҫ. Минең ҡарашымса, улар икеһе лә — бик фәһемле, иғтибарҙы йәлеп итерлек әҫәрҙәр. "Ҡәҙерлеһең, Ваҡыт"та Шағир Ваҡыт менән әңгәмә ҡороп ебәрә. Шул әңгәмә ваҡытында Ваҡыт Шағир характерындағы ҡайһы бер һыҙаттарҙы асып һала:

*Оҙаҡ ектең һин атыңды,*
*Эҙләп ижад затыңды.*
*Кеше баҡырҙарын йыуып,*
*Юғалттың алтыныңды.*

*Ҡаныңдан килгән "бәлә"ң бар:*
*Намыҫ һәм баҫалҡылыҡ.*
*Иҫән саҡта уларҙы һис*
*Баһалап бармай халыҡ.*

"Хыял" — "Ҡәҙерлеһең, Ваҡыт"тың дауамы шикелләрәк ҡабул итеlә. Был шиғырҙа иғтибар ваҡыттың туҡтауһыҙ, хатта аяуһыҙ үтеүенә йүнәлтелгән. Шағирҙың бөтә теләге — яҡты донъянан "оят кисермәй" китеү. Шул уҡ ваҡытта ул мәңгегә юғалмаясағына ла өмөтөн өҙмәй, ер өҫтөндә йыры ҡалырына ла ышанысын юғалтмай. Ваҡыт аяуһыҙ осһа ла, шағир уның бер генә минутын да өмөт-хыялһыҙ үткәрмәй. "Ҡәҙерлеһең, Ваҡыт" менән "Хыял"ды "Юлдағы уй"йөпләп ҡуйғандай: унда ла шағир үҙенең эске кисерештәре менән уртаҡлаша һәм "Йәш егеттәй юлда ауһам икән, ҡарт йыландай ятмай, бөгөлмәй" тигән теләген белдерә.

Ижад юлын "Өскөл хаттар"(1972) тигән йыйынтыҡ менән башлап ебәргән Риф Мифтахов етмешенә

еткәндә Бөйөк Ватан һуғышы темаһына тоғролоҡ һаҡлай. "Ағиҙел" журналының 2005 йылғы 11-се һанында донъя күргән "Бергә йыйһаң...." тигән шиғырҙы "Өскөл хаттар"ҙың үҙенсәлекле бер дауамы тиергә була:

*Һалдат хатын әгәр бергә йыйһаң,*
*Тыуыр ине быға ҡәҙәре*
*Һис булмаған һәм дә булмаясаҡ*
*Йән тетрәткес йөрәк әҫәре.*

Заманында фашист илбаҫарҙарына ҡаршы трагик та, героик та көрәште сағылдырған әҫәрҙәр әҙ яҙылманы. Төрлө телдәрҙә, төрлө жанрҙарҙа. Ләкин Л. Толстойҙың "Һуғыш һәм солох" романына тиң эпопея әле һаман тыумаған. Шуға күрә Р. Мифтаховтың "Васыят ҡалдырған" тигән бәләкәй генә шиғырында күтәрелгән мәсьәлә менән килешмәй сара юҡ. Ә был әҫәрендә автор, минең уйымса, Бөйөк Ватан һуғышы темаһына өр-яңы ҡараш ташлаған: "Һуғыш тураһында бик күп яҙҙыҡ" тип өс тапҡыр ҡабатлай ҙа дүртенсегә: "Яңылышам — бик әҙ яҙылған" тигән көтөлмәгән боролош яһап ҡуя. Ун бер юлдан торған һуңғы строфала бер нисә генә шиғри һөйләм ярҙамында һуғыштың зәһәрлеге күҙ алдына баҫтырылған һәм әҫәрҙең төп идеяһы ла шунда асылған:

*Яу ҡырында ятып ҡалған яугир*
*Һәр быуынға васыят ҡалдырған:*
*Һуғыш уты ҡабат ҡабынасаҡ,*
*Беҙ туҡтаһаҡ иҫкә алыуҙан,*
*Беҙ туҡтаһаҡ уны яҙыуҙан.*

Шиғырҙан бер үҙе айырылып торған "Һуғыш тураһында бик аҙ яҙҙыҡ..." тигән иң һуңғы юл әҫәргә үҙенә башҡа колорит өҫтәй.

Һуңғы йылдарҙа ғына ижад ителгән "Һалдат булдым" тигән шиғырҙа ла, лирик геройҙан һалдатта хеҙмәт иткән йылдарын хәтерләтеү аша, шағир тос фекер әйтеүгә ирешкән:

*Атай-ағайҙарҙың ҡаны менән*
*Беҙ донъяға Еңеү яуланыҡ.*
*Яуҙа ҡылған улар батырлығын*
*Беҙ һалдатта нығыраҡ аңланыҡ.*

Бында быуындар бәйләнешенә ишара яһалғанлығы хаҡында һөйләп тә тораһы юҡ. "Ил хәстәре билгә һалдат ҡайышындай уралған" тигән метафорик сағыштырыу ҙа — шағирҙың поэтик табышы, тиһәм, бәхәс уятмаҫ.

Фани донъяла йәшәгәндә үк үҙҙәре тураһында яҙылған китап-монография уҡып шатланған шағирҙарҙы бәхетле шағирҙар тип атар инем. Донъя күләмендәге ҡайһы ғына әҙәбиәтте алып ҡараһаң да, ундайҙар күп булмай. Беҙҙә лә шулай — бармаҡ менән генә һанарлыҡ: Сәйфи Ҡудаш, Мостай Кәрим, Назар Нәжми, Рауил Бикбаев. Күптән түгел ошо исемлеккә Риф Мифтахов килеп өҫтәлде — күренекле ғалим Әхмәт Сөләймәнов уның хаҡында "Йондоҙҙарҙан шағир йылынған" тигән монография баҫтырып сығарҙы.

Риф Мифтахов ижады тураһындағы минең был уйланыуҙарымды уның "Бәхет тауы" тигән шиғыры ла ҡеүәтләй һымаҡ. Ҡарап тороуға — ябай ғына шиғыр, ә уның төбөндә ғәйәт ҙур фәлсәфә — ерҙә йәшәү фәлсәфәһе ята. Баҡһаң, был ергә килгән бер генә кеше лә төйәген һайлап алмаған — ни яҙған шуға ризалашып йәшәй. Ләкин, шулай булыуға ҡарамаҫтан, бөтә кеше лә бәхетле булырға, уның емештәрен татырға хаҡлы. Тик, ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, күптәр өсөн бәхеткә ирешеү хыял ғына булып ҡала. Әммә әҙәм балаһы барыбер ҙә уға ынтылырға тейеш. Әллә ни юғары дәрәжәләргә эйә булмаһа ла, Риф Мифтахов, минеңсә, — үҙенең сағыу ижады, намыҫлы хеҙмәте менән бәхет яулаған шағир.

**Әнғәм ХӘБИРОВ.**
**Бөрө ҡалаһы.**

# *Башҡортостан яҙыусыларының сираттағы съезы алдынан*

## ӘҘӘБИӘТ ТОРМОШ ДӘРЕСЛЕГЕМЕ БӨГӨН?

**(Шарттар үҙгәрһә, талаптар ҙа үҙгәрә; уларға ярашлы шәхестәр тыуа)**

*Һүҙ сәнғәтендәге художестволы һынландырыуҙың төп өс формаһын (теҙмә, сәсмә, драма) башҡортҡа яҡын йылҡы малы менән сағыштырһаҡ (әлбиттә, һәр сағыштырыу аҡһай), тәүгеһе – бәйге юртағы, икенсеһе – йөк аты, өсөнсөһө теге икәүһенең сифаттарын үҙенә берләштергәндәй тәьҫир ҡалдырыр ине. Тәбиғәттәгеләй, һәр өс форманың алыштырғыһыҙ үҙ урыны. Был бәхәсһеҙ. Әммә дөйөм әҙәби процесс барыбер ҙә проза кимәле менән баһаланалыр кеүек. Шиғриәт – ул хыял, күңелдең мөғжизәүи мәлде мәңгеләштерергә талпыныуы. Ә уны тәнҡитсе нисек аңлата-баһалай ала?!. Хыялды нисек тикшермәк кәрәк? Был мөмкинме? Һорауҙы былай ҡуйыуҙың мәғәнәһе бармы? Шуға ла шиғриәттең үлсәмдәре уғата шартлы, бигерәк шәхсән. Унда, күбеһенсә, бары тойомлауҙар аша ғына эш итергә тура килә. Әйтәйек, күптәр билдәле әҫәргә ҡарата «Бына был, исмаһам, шиғыр!» тиеү менән тулыһынса килешә, шиғырҙың шиғырлығын интуитив аңлай, әммә уның юғарылығы нимәлә булыуын аңлатыу ҡыйынлыҡтар тыуҙырасаҡ. Был юҫыҡтан Хәсән Назарҙың Ғайса Хөсәйеновҡа бағышланған шиғыры бик фәһемле:*

> *Шиғыр нимә? Ай-һай, ҡыйын*
> *Шул һорауҙан уҙыуы.*
> *Уны аңлай барған һайын*
> *Ауырыраҡ яҙыуы.*
> *Өркөтөр һымаҡ шиғырҙы*
> *Асылын асып бөтөү.*
> *Ул бит – тетрәнеүҙәр үтеү,*
> *Ул бит – асыштар көтөү...*

*Шиғриәт – донъяны образлы күреү. Балта оҫтаһы, ҡайынға ҡарап, унан нимәләр эшләп булыу мөмкинлеге, урмансы уның йәше, таҙамы-серекме икәнлеге, алыпһатар уны баҙарға сығарғанда күпме аҡса эшләп буласағы хаҡында уйланыуы бар. Шағир иһә уны берсә Рәсәй символы, берсә моңһоулыҡ билдәһе итеп күрәсәк, берсә һылыу ҡатын-ҡыҙға оҡшатасаҡ.*

*Шиғриәттән айырмалы рәүештә, прозаны (унда ла ысынбарлыҡты художестволы ҡабул итеү булыуына ҡарамаҫтан) анализлау, баһалауҙа объективлыҡҡа ирешеү, уҡыусыны үҙ фекерҙәреңә ышандыра алыу сағыштырмаса еңелерәк һымаҡ. Хәйер, ашаған белмәй – тураған белә. Тимәк, мәсьәләнең елегенә төшәйек тиһәк, «рухи азыҡ» әҙерләүселәрҙең тап үҙҙәренә мөрәжәғәт итеүҙән дә шәберәге булмаҫ. Әйтәйек, Әмир Әминевҡа, Гөлсирә Ғиззәтуллинаға.*

**Фәнил КҮЗБӘКОВ:**

– Әмир, һинең ижадыңды киң ҡатлам уҡыусылар йылы ҡабул итә, билдәле әҙипһең. Төп әҙәби баҫмабыҙ «Ағиҙел»дең баш мөхәррире булараҡ, бөгөнгө прозаны тулайым күҙаллайһың, сөнки әҙәби процесс барыбер ҙә журнал биттәрендә бара. Әҙәбиәтебеҙҙең үткәнен ҡыҫҡаса байҡап, ирешелгәндәр фонында әлеге хәлебеҙгә бәйле ниҙәр әйтер инең?

**Әмир ӘМИНЕВ:**

– Академик Ғайса Хөсәйеновтың, прозабыҙ кимәле бик түбән кимәлдә шул әле, тигән фекере менән тулыһынса килешәм. Ғалим-әҙип үҙенең был борсолоуын тәүгә әйтмәй. Мин үҙем дә ошо турала күп тапҡырҙар яҙғаным, проза секцияһы рәйесе вазифаһын атҡарғанда съезд, йыллыҡ дөйөм йыйылыш трибуналарынан һөйләгәнем булды. Яҙған, һөйләгән ваҡыттарҙа, ошонан һуң, һәр хәлдә яҡын арала, прозабыҙҙы балҡытырҙай, күренеш булырҙай повесть, хикәйә йәки роман тыуыр, тигән оптимистик уйҙа була торғайным. Ҡыҙғаныуҡа ҡаршы, төптө яңылышҡанмын: күренеш тип нарыҡларлыҡ айырым әҫәр ҙә күренмәй, дөйөм күтәрелеш барһа ла, бик яй бара. Ул, әйтерһең дә, – танк йәки тимер юл составы, өндәп, саҡырып ҡына ҡуҙғатырлыҡ нәмә түгел икән.

Һүҙ ҙә юҡ, әҙәбиәтебеҙ элекке СССР халыҡтары әҙәбиәттәре, бөгөнгө Рәсәй халыҡтары әҙәбиәттәре фонында ҙур әҙәбиәт һаналды һәм бөгөнгө көндә лә шулай булып ҡала. Әйтәйек, Мостай Кәрим ижады донъя кимәлендә яңғыраны һәм уның исеме арҡылы башҡорт шиғриәте бар ҡитғаларға ла билдәле булды. Нәжиб Асанбаев, Азат Абдуллин, Флорид Бүләков драматургияһының айырым өлгөләре шулай уҡ элекке СССР, бөгөнгө Рәсәй театрҙары сәхнәләрендә ҙур уңыш менән барҙы, юғары наградалар менән бүләкләнде, бәғзеләре бөгөн дә бара. Ә прозабыҙ һуң? Миңә ҡалһа, шиғриәт, драматургия өлөшөнә төшкән әлеге уңыштар, ҙурҙан ҡупҡанда, уны урап үтте, алда әйткәнемсә, бөгөн дә ауыҙ тултырып һөйләрлек әҫәр тыуҙыра алғаныбыҙ юҡ. Уның сәбәптәре талант ҡытлығында ғына ла түгелдер, хәйер, уныһы ла – ҙур сәбәптәрҙең береһе, ә традицияларҙың булмауындалыр. Башҡорт – тәбиғәт балаһы, шунлыҡтан уның тәбиғәт ҡосағында, иркенлектә, ҡай яғыңа ҡараһаң да күҙ етмәҫлек киңлектә тыуған бөйөк ауыҙ-тел ижады, фольклоры, эпосы, мәшһүр ҡурайы, оҙон көйө, аҡыл һәм хис-тойғонан туҡылған юғары шиғриәте, һоҡланғыс бейеүе бар. Быларҙы бер халыҡ та ҡабатлай ҙа, уҙа ла алмай – быуат-быуаттар буйы ул гәүһәрҙәр шымарған, камиллашҡан һәм бөгөнгө юғары нөктәһенә килеп еткән. Улар беҙҙең өсөн – Египет пирамидалары ла, Ҡытай стенаһы ла, Римдағы Колизей ҙа, грек статуялары ла, Леонардо да Винчи ҙа, Моцарт та...

Әлбиттә, беҙ үҙебеҙҙең эпостарҙы, әкиәттәрҙе, риүәйәттәрҙе, башҡа төрки халыҡтар менән уртаҡ булған ҡайһы бер бөйөк сәсмә ҡомартҡыларҙы бөгөнгө прозабыҙҙың инеше тип нарыҡлай алабыҙ, һәм ул дөрөҫ тә, әммә улар барыбер ҙә, нигеҙҙә, телдән-телгә тапшырыла килгән ҡомартҡылар, шуға ла беҙ уларҙы ысын мәғәнәһендә бөгөнгө әҫәрҙәребеҙҙең тәүге биттәре тип атай алмайбыҙҙыр.

Үткән быуаттың 20-се йылдар башында яҙылған «Боролош»тан (Ғәйнан

Хәйри), художестволы камиллыҡтан бигерәк сәйәси камиллыҡ юҫығында ижад ителгән байтаҡ публицистик повесть, хикәйәләрҙән бирле илебеҙҙә, республикабыҙҙа әллә күпме сәйәси-ижтимағи ваҡиғалар булып үтте, власть, идеологиялар алышынды, репрессиялар һөҙөмтәһендә төрмә-лагерҙарҙа, Бөйөк Ватан һуғышы яландарында миллионлаған-миллионлаған кеше ҡырылды. Шул иҫәптән – әллә күпме яҙыусы, шағир, драматург. Миңә ҡалһа, Октябрь түңкәрелеше, Граждандар һуғышы тыуҙырған «Боролош», «Ырғыҙ» (Һәҙиә Дәүләтшина), «Кәмһетелгәндәр»ҙән (Зәйнәб Биишева) башҡа, халыҡ хәрәкәт-күтәрелешен бындай ҙа юғары кимәлдә тасуирлаған ҙур полотнолар булманы ла шикелле. Улар беҙгә роман жанрының киң мөмкинлектәрен асты. Илде коллективлаштырыу, индустриялаштырыу йылдарының әҙәбиәте шулай уҡ тулыһы менән сәйәси ҡанундарға буйһондо. Хәйер, ул заманда башҡаса яҙыу мөмкин дә булмағандыр...

Бөйөк Ватан һуғышы йылдары прозаһы, нигеҙҙә, очерктарҙан, очеркка тартым хикәйәләрҙән, патриотик публицистиканан тора, роман юҡ. Тораҡ, әлбиттә, романдар тыуҙы («Мәскәү юлы», «Зеелов тауҙары»), байтаҡ хикәйә, повесть, хәтирә-иҫтәлектәр булды, тик улар күбеһенсә һаман «Ура, беҙ еңдек, беҙ иң көслө армия, совет һалдаты бер нәмәнән дә ҡурҡмай» тигән рухта булды, һәр һуғыш, һәр алыш беҙҙекеләрҙең еңеүе менән тамамланды, һанһыҙ ҡорбандар, юғалтыу-еңелеүҙәр, сигенеүҙәр күрһәтелмәне, һәм был Бөйөк Ватан һуғышын бер яҡлы ғына яҡтыртыуға килтерҙе. Ҙурҙан ҡупҡанда, беҙ ошоға тиклем генерал Шайморатов, герой-генерал Таһир Күсимов, ике тапҡыр герой-летчик Муса Гәрәев, «ҡара генерал» Даян Мурзин, башҡа ҡаһармандар тураһында күптән тулы ҡанлы художестволы романдар яҙырға тейеш инек. Был бурыс шулай уҡ милли геройыбыҙ Салауат Юлаев, полководец Муса Мортазин шәхестәренә лә ҡағыла. Әлбиттә, Әхмәтзәки Вәлиди («Сыбар шоңҡар»), Миңлеғәле Ғөбәйҙуллин («Тыуған көн»), Кинйә Арыҫланов («Кинйә») хаҡында романдар, пьесалар бар, Таһир Күсимов («Генерал Күсимов»), Ҡараһаҡал, («Ҡараһаҡал»), Мөхәммәтсәлим Өмөтбаев, Исмәғил Тасимов, Батырша, Алдар Исәнгилдин, Бәҙәрғол Юнаев (Ғайса Хөсәйенов) тураһында документаль йә художестволы-документаль повестар, башҡа жанр өлгөләре бар, ләкин былар ғына аҙ. Ул әҫәрҙәрҙе яңынан нәшерләүе лә ҡыйын, унан замана үҙгәрә, яҙылған ваҡытта билдәле булмаған йәки тыйылған документтар табыла, иң мөһиме, теге йәки был шәхес йәшәгән дәүергә бөгөнгө көн бейеклегенән яңы ҡараш кәрәк. Улар тураһында һәр быуын үҫеп-өлгөрөп еткән һайын яңы әҫәрҙәр яҙырға кәрәк, юҡһа онотола, халыҡ хәтеренән юйыла бара. Ысын булһа, татар яҙыусыһы Ғариф Ахунов бер сара-осрашыу ваҡытында әҙиптәребеҙгә, эх, егеттәр, һеҙҙең тарих беҙҙә булһа, беҙ әллә нәмәләр яҙыр инек, тип әйткән, тиҙәр. Уға эйәреп, миңә лә «Эх, егеттәр!» тиергә генә ҡала.

Ә 70 – 80-се йылдарҙы мин прозабыҙҙың тарихи романдар дәүере тип иҫәпләйем. Әҙәбиәтебеҙ тарихында үҙенә күрә феноменаль күренеш булды был. Мин был күренеште XV–XVI быуаттарҙа Көнбайыш Европа илдәренең күпселегендә бер-бер артлы үткән Яңырыу эпохаһы («Возрождение»), XVIII быуаттағы Мәғариф («Просвещение») осорҙарына йәнәш

ҡуям һәм үткән быуаттың 90-сы йылдар башында суверенитет яулауға килтергән милли күтәрелештең рухи инеше тип ҡарайым. Тап ошо әҫәрҙәр («Бөркөт ҡанаты», «Төньяҡ амурҙары», «Кинйә», «Думбыра сыңы», «Һауыр ҡумта» һ.б.) милләттең күҙен асты, тарихыбыҙ, тарихыбыҙҙа бөйөк шәхестәребеҙ барлығын күрһәтте, күңелдәрҙә сикһеҙ ғорурлыҡ тойғоһо уятты. Әхмәтзәки Вәлиди, Муса Мортазин, Абдулҡадир Инан, тар даирәләргә генә мәғлүм булған башҡа милләттәштәребеҙҙең исем-шәрифтәрен, эшмәкәрлеген асыу, тыйылғандарын ҡайтарыу, хеҙмәттәрен киң ҡатлам уҡыусыға еткереү, улар тураһында художестволы әҫәрҙәр ижад итеү унһыҙ һис мөмкин булмаҫ ине.

XIX быуат рус әҙәбиәтенең алтын быуаты тип нарыҡланған. Рәсәйҙә башланған һәм актив рәүештә барған сәйәси, социаль, иҡтисади, техник күтәрелеш ижтимағи тормоштоң бөтә сфераларына үтеп инә һәм ил алдына киҫкен проблемалар, хәл итәһе социаль мәсьәләләр төйөнө килтереп ҡуя. Ошо күтәрелеш мәҙәниәткә, әҙәбиәткә лә ҡағылмай ҡалмай: Пушкин, Лермонтов шиғриәте, Гоголь, Достоевский, Толстой прозаһы, Чехов, Островский драматургияһы – ошоноң бер сағылышы ул. Яуланған бейеклек унан һуң да, XX быуатта ла, байтаҡ көслө әҫәрҙәр тыуҙыра (Шолохов, Платонов, Булгаков, Бунин), әммә уларҙың береһе лә алда атаған өс титан кимәленә етә алманы. Рус прозаһы һүнде йәки кирегә китте тигән һүҙ түгел был – бейек нөктәлә оҙаҡҡа ҡалып булмай – ә атаған титандар күтәргән юғары ҡимmәттәрҙе ваҡлап, шул заманға яраҡлаштырып аңлатыу-күрһәтеү ул. Ана шул юғары критерийҙар, бай традициялар, өлгөләр булыуы арҡаһында ла рус прозаһы бөгөн дә олпат булып ҡала килә, һәм уның Шукшин, Астафьев, Распутин, Белов һымаҡ оло әҙиптәре бар. Ә мин, башҡорт прозаһына ла ошондай алтын быуат килер, тигән өмөт менән йәшәйем һәм ижад итәм. Беҙ уны әҙерләйбеҙ, беҙгә тиклем бер нисә быуын әҙерләгән, беҙҙән һуң да әҙерләйәсәктәр. Килер ул, килер, вулкан да ер ҡуйынында көс-ҡеүәт йыйып ята-ята ла бер килтереп ата бит...

**Фәнил КҮЗБӘКОВ:**

– Мостай ағайҙың бер ни тиклем әсенеп яҙғандарын иҫкә төшөрҙөң: «Римдағы Колизей төҙөлгәндә һәм емерелгәндә (уның харабалары ғына ла мөһабәтлеге менән иҫ китерлек бит), минең ырыуымды башлап ебәрәсәк әҙәм тарих заманына сыҡмағайны әле. Сирия сүлдәрендәге гүзәл мәрмәр ҡала – әкиәти Пальмира сәскә атҡан саҡтарҙа, ул үҙенең атына атланмаған булған әле... Ә Әбуғалисина үҙенең таң ҡалдырғыс фәнни асыштарын яһағанда, Низами үҙенең үлемһеҙ поэмаларын яҙғанда, Рафаэль Санти тиңдәшһеҙ шедеврҙарын тыуҙырғанда, Бөйөк Петр батҡыл урында донъялағы иң мәшһүр ҡалаларҙың береһен һалғанда, ул тыныс һәм олпат ҡиәфәттә эйәр өҫтөндә ултыра ине инде. Моцарттың, Бетховендың, Чайковскийҙың һоҡландырғыс моңдары бөтә ер йөҙөнә яңғырап таралған мәлдә, ул үҙе өсөн, үҙ далаһы өсөн үҙенең һағышлы оҙон көйөн көйләй ине... Бөтә тормоштоң бына шулай ағыраҡмаҫ һыу һымаҡ булыуында, ә инде шул тиклем йомарт рухлы, көр күңелле, һәләтле халыҡтың үҙ ижади көсөн, үҙ талантын бик аҙ ғына күләмдә эшкә егә алыуында кем ғәйепле һуң? Беҙ оҙаҡ ваҡыттар буйына бөтә донъя цивилизацияһынан ситтә ҡала килдек. Был беҙҙең ғәйебебеҙ түгел – беҙҙең

бәләбеҙ. Тарихи яҙмышыбыҙ шундай булды. Ләкин тарихты ҡәһәрләп тә, уға рәхмәт әйтеп тә булмай — ул беҙҙе ишетмәй. Тарихтан бары һабаҡ ҡына алалар...»

Әҙәбиәтебеҙ ғорурлығы булған Мостай Кәримдең фекерҙәре менән: «Моцарт, Бетховен, Чайковский моңдарына үрелеп башҡортоң «Сыңрау торна»һы ла, «Урал»ы ла асманға ашҡан, Низами поэмалары менән йәнәш башҡорт зыялылары ғына түгел, ә иҫке төрки телен белеүселәр Ҡол Ғәлиҙең «Йософ Ҡисса»һын ятлаған, «Урал батыр» ҡобайырының тәүге варианттары беҙҙең эраға тиклем һөйләнелгән, ғөмүмән, беҙҙең ата-бабалар рухи ҡиммәттәрҙе матди байлыҡтан өҫтөн ҡуйған» тип бәхәскә лә инеп булыр ине, әммә төп идея менән килешмәй мөмкин түгел: донъя цивилизацияһынан артта ҡалғанбыҙ. Һәм был, ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, дауам итә. Эйе, һин әйткәнсә, шиғриәттә бай традицияға эйәбеҙ. Шуға ла, сағыштырмаса булһа ла, күпмелер дәрәжәлә кимәл һаҡлана. Ә прозабыҙ йәшерәк...

Әҙәбиәттең тормош дәреслеге кимәленә күтәрелә алыуы, тәү сиратта, уның фәлсәфәүи күтәременән (юғары художестволылыҡ кәрәклеге тураһында әйтеп тә тормаҫтан) һәлмәклегенә бәйле булһа кәрәк. Был йәһәттән шиғриәттә шағир-философтар (шартлы рәүештә шулай атайыҡ. Улар рәтенә Мостай Кәримде, Назар Нәжмиҙе, Муса Ғәлиҙе, бөгөнгөләрҙән Хәсән Назарҙы, Мәүлит Ямалетдинды, Тамара Ғәниеваны һ.б. индереп булыр ине. Төптән уйлағанда, әлбиттә, һәр кем үҙенсә философ – тик кеше менән кеше араһы – ер менән күк самаһы!) осраштырһа ла, прозала әҙип-философтар (беҙ күҙаллағанса) юҡ самаһында. Ә әҙип-психологтар? Рус әҙәбиәтендә әҙип-философ тип Толстойҙы атаһаҡ, әҙип-психолог тип Достоевскийҙы күрһәтер инек, моғайын. Кеше психологияһына тәрәнерәк үтеп инә алыу йәһәтенән Гөлсирә Ғиззәтуллина менән Әхмәр Үтәбай ижадына шәхсән өмөт бағлайым...

**Әмир ӘМИНЕВ:**

– Дөйөм тарих майҙанында һәр халыҡтың үҙ территорияһы булған кеүек, тәғәйен генә үҙ өлөшө лә бар. Кемдер нимәлер уйлап тапҡан, үҙенеке иткән, тамғаһын һалған... Компас, тәгәрмәс, дары, карта, радио, китап, фәнни-географик асыштар. Әйтәйек, фән һәм техника асыштары, промышленность йәһәтенән ҡарағанда, әлбиттә, башҡорт, башҡа дала халыҡтары кеүек, бер нисә быуат алда ултыраҡ тормошҡа күсеп, мәҫәлән, ҡалалар һалған, паровоздар, пароходтар, мануфактура машиналары төҙөгән, университеттар, донъя диңгеҙ һәм океандары буйлап гиҙеп яңы ер-ҡитғалар күргән Көнбайыш Европа илдәре менән сағыштырғанда цивилизациянан артта ҡалған. Был йәһәттән уларҙы бөгөн дә ҡыуып етеү икеле, сөнки улар һаман камиллаша, үҫә, барға өҫтәй генә бара, ә беҙ улар әллә ҡасан үткәнде саҡ барлыҡҡа килтерәбеҙ. Был артта ҡалыу мәҙәниәткә лә, әҙәбиәткә лә, сәнғәткә лә ҡағылмай ҡалмай. Һөҙөмтә барыбыҙға ла билдәле.

Ләкин цивилизацияға, тау түбәһенә төрлө яҡлап та менеп булған һымаҡ, һәр халыҡтың үҙ юлы. Беҙ ҙә ауырлыҡтар менән булһа ла маҡсатыбыҙға ирешербеҙ. Тик туҡтап ҡына ҡалмайыҡ, китә бирәйек. Ә әҙәбиәткә килгәндә, беҙ үҙебеҙҙең ҡаҙанда ғына ҡайнайбыҙ, сит өлкә,

республикаларға, үҙәккә сығыу юҡ. Шуға ла әҙәбиәтебеҙҙә, атап әйткәндә, прозабыҙҙа, ниндәйҙер киңлек, масштаблыҡ, ҙур проблемалар күтәреү етешмәй, үҙендә замандың ҡырҡыу социаль һыҙланыуҙарын йөрөткән сағыу образдар күренмәй, форма, композиция йәһәтенән эҙләнеүҙәр ҙә юҡ фиғылында. Мин Мостай Кәрим феноменын, мәҫәлән, тәбиғәт биргән ҙур талант өҫтөнә, уның элекке СССР, донъя буйлап сәйәхәт ҡылыуында ла күрәм. Илдәр, ҡитғалар күреү өҫтөнә, яңы кешеләр, ғөрөф-ғәҙәттәр, милли традициялар менән танышыу уға күп нәмә биргән, зиһенен байытҡан, күңелен үҫтергән, ижадына шифалы йоғонто яһаған. Йөрөгән аяҡҡа йүрмә эләгә – барған-булған еренән яңы кәйеф, эмоциялар, ҡыуаныс, аптырау-һоҡланыу менән һуғарылған шиғырҙар, юлъяҙмалар алып ҡайтҡан. Аралашыу – үҫеү, камиллашыу, байыу тигән һүҙ. Шул етмәгәс, беҙ – урыныбыҙҙа, кисә баҫып торған еребеҙҙә, тимәк, алға китеш юҡ. Әлбиттә, мин мәсьәләне үтә ябайлаштырам – теләгән һәр кеше йөрөр ҙә талантлы әҫәрҙәр яҙыр ине – бында һүҙ тап ана шул талантлы йәштәрҙең аралашыуы хаҡында бара.

Әҙәбиәттең тормош дәреслеге кимәленә күтәрелә алыуы, тәү сиратта, уның фәлсәфәүи күтәременең һәлмәклеге тап ана шул киңлектә, масштаблыҡта, кеше, йәмғиәт алдына ҙур социаль проблемалар ҡуйыуҙа ла.

Бөгөнгө прозала ундайҙар бармы һуң? Бар. Әҙип-философтар исемлегенә мин беренсе сиратта Н. Мусин, Р. Солтангәрәев, М. Ямалетдин, әҙип-психологтар рәтенә Т. Ғиниәтуллин, С. Шәрипов, Г. Яҡупова, һин атаған Г. Ғиззәтуллина менән Ә. Үтәбайҙы индерер инем. Әлбиттә, һәр сағыштырыу аҡһай, әммә миңә шулай күренә.

**Фәнил КҮЗБӘКОВ:**

– Гамбург үлсәмдәрен күҙ уңында тотоп, Әмир, һин үҙеңә, ҡәләмдәштәреңә ниҙәр эшләргә, нисек эшләргә кәрәк тип уйлайһың?

**Әмир ӘМИНЕВ:**

– Ниндәйҙер яңы кимәлгә күтәрелер өсөн бөгөн беҙгә нимәләр эшләргә кәрәк һуң, тип, ысынлап та, күп уйлағаным бар. Бер ҡараһаң, яуап өҫтә генә ята кеүек, икенсе ҡараһаң, алда әйткәнемсә, бик тәрәндә, йәғни айырым теге йәки был әҙиптең үҙендә генә түгел, ә йәмғиәт үҫешендә, милли үҙаңда, дөйөм мәҙәни күтәрелештә. Уңыштар булды бит. Мәҫәлән, заманында Мостай Кәримдең шиғриәтенән тыш прозаһы, тәүҙә балалар өсөн яҙылған повестары, унан етди прозаһы күп телдәргә тәржемә ителде. Талха Ғиниәтуллиндың айырым хикәйә, повестары рус теленән тыш байтаҡ сит телдәргә тәржемә ителеп, күп кенә илдәрҙә нәшерләнде. Әхиәр Хәкимдең романы Рәсәй премияһын алды, бынан тыш үҙәк матбуғатта донъя күргән башҡа айырым әҫәрҙәрҙе лә күрһәтергә була. Әлбиттә, Мәскәүҙә йәки сит илдә баҫылып сығыу ғына әҫәрҙең шәплегенә дәлил була алмай, йыш ҡына был эш авторҙың йылғырлығынан торғанын да беләбеҙ, мин инде, уларҙың художестволы ҡиммәттәренә ҡағылмай, факт булараҡ һанап ҡына китәм.

Хәҙер һорауға яуап биреп ҡарайым. Миңә ҡалһа, иң тәүге сиратта беҙгә, килтереп сығара алмам, тип үҙендән, шулай буламы инде әҫәр, тип

башҡаларҙан (тәнҡитсенән, ҡәләмдәштәрҙән, ябай уҡыусынан) ҡурҡыу тойғоһо ҡамасаулай, йәғни психологик барьер ҡулды бәйләй. Ә ул инде айырым яҙыусының ғына бәләһе түгел, дөйөм милләт бәләһе – бер нисә быуат дауамында Рәсәй батшалығының аҫыуы-киҫеүе, ҡырыуы, яндырыуы ҡанға һеңгән. Хатта бөгөнгө кешеләрҙең ҡанында ла бар ул. Ҡандағы ул зәғиф күҙәнәктәрҙән ҡотолоу өсөн беҙгә, ай-һай, тағы бер нисә быуат кәрәкмәгәйе! Был – бер. Икенсенән, тормош материалын әҙәбиәт материалы итә белмәү. Ваҡиғаларҙы хронологик рәүештә теҙеп сығыу ғына «әҫәр яҙҙым» тигән һүҙ түгел әле. Уны һайларға, һайлағанын да киҫергә, өҫтәргә, үҫтерергә кәрәк. Өсөнсөнән, миңә ҡалһа, сюжет ҡороу – шулай уҡ мөһим талаптарҙың береһе. Мин быға форма өлкәһендә эҙләнеүҙәрҙе лә өҫтәр инем. Уҡыусы күңелен нимә менән яулап була? Ихласлыҡ менән. Мәҫәлән, мемуарҙар, көндәлектәр, автобиографик яҙмалар, хәтирәләр ни өсөн ҡыҙыҡһынып уҡыла? Ана шул ихлас, асыҡтан-асыҡ яҙылғаны өсөн. Юҡһа беҙ әҫәрҙә нимәнелер әйтеп бөтөрмәйбеҙ, яҡшы булып күренергә тырышабыҙ, осло мөйөштәрҙе «киҫәбеҙ», проблемаларҙы йәшерәбеҙ йәки йомшартабыҙ, ә уҡыусы ярты дөрөҫлөктө, алдаҡты шундуҡ һиҙә...

Әйткәндәрем, бәлки, ҡырҡыуыраҡ та яңғырайҙыр, ләкин фекерҙәрем, әгәр уларҙы фекер тип атап булһа, башҡорт прозаһын тағы ла камилыраҡ, уҡымлыраҡ күрергә теләүҙән. Беләм, мин әйтеүҙән генә бер нәмә лә үҙгәрмәҫ, шулай ҙа йәштәр араһынан бер йәки ике ҡәләмдәшем ҡолаҡ һалып, ижадында ҡулланһа йәки етдиерәк ҡараһа, бурысым үтәлде, тип иҫәпләйәсәкмен. Был инде фекерҙәштәрем бар тигән һүҙ. Ә фекерҙәштәр булғанда, ҙур эштәр башҡарырға мөмкин.

**Фәнил КҮЗБӘКОВ:**

– Һинең ижад хаҡындағы бер мәҡәләлә, Әмир, мин шундай фекер үткәргәйнем: «Әҙип... асылда, ваҡ йәнле кешеләрҙең маҡсатһыҙ ғүмер һөрөүҙәренең мәғәнәһеҙлелеген, быңдай тормоштоң сикләнгәнлеген күрһәтә, шул нигеҙҙә ояла белеү, намыҫ, йәмғиәт, милләт алдында яуаплылыҡ кеүек әхлаҡи проблемаларҙы бар ҡырҡыулығында күтәрә. Бөгөнгө тормошобоҙҙа әҙәмдәрҙең күбеһе ваҡлана (ә ваҡ йәндәрҙән оло кисерештәр ҙә, оло эштәр ҙә көтөп булмай) барыуына бәйлелер был. Ихтимал шулайҙыр, әммә, форма, сюжет, конфликт йәһәтенән төрлөлөккә ынтылған кеүек үк, көслө характерҙарға мөрәжәғәт итеү ижадты байытмаҫ инеме икән? Ни тиһәң дә, эскелектән, әшәкелектән генә тормай бит донъя. Тормошто алға әйҙәр шәхестәр ҙә юҡ түгел. Төпсөрлө әҙип әҫәрҙәрендә шундай геройҙарҙы ла күрәһе ине». Ошондай кәңәштәргә иғтибар иткәнһеңдерме, юҡмы, башҡа сәбәптәр арҡаһындамы – быныһы ул тиклем мөһим дә түгелдер, моғайын – нисек кенә булмаһын, геройҙар ҙурыраҡ проблемалар менән яна («Бер кәмәлә...»нең төп геройы Билал), ваҡиғалар киңерәк планда яҡтыртыла («Танкист»), дөйөмләштереүҙәр иртәгәге көн яҡтылығында («Ҡытай-город»). Был хаҡта үҙең ни әйтә алыр инең?

**Әмир ӘМИНЕВ:**

– Йәмғиәтебеҙ камил түгел (хәйер, уның ҡасан камил булғаны бар?), көнитмешебеҙҙә кисекмәҫтән хәл итәһе проблемалар бихисап. Уларҙы хәл итеү йәһәтенән, әлбиттә, күп нәмә эшләнә, ләкин, теге йәки был сара

ауырлыҡ менән һәм һуңлап башҡарылғас, тормош барышы тиҙлегенә һис өлгөрә алмай. Һөҙөмтәлә беҙ йәнә һуңлайбыҙ. Һуңлайбыҙ ҙа бер быуатты бер һикереүҙә үтергә ынтылабыҙ. Улай булмай ул – һәр нәмә үҙ ваҡытында һәм тәбиғи рәүештә башҡарылырға тейеш. Әҙәби персонаж, миңә ҡалһа, ошо ике ут, бәхәс, иҫкелек менән яңылыҡтың, намыҫ менән намыҫһыҙлыҡтың көрәше уртаһында булырға тейеш. Ярайһы уҡ примитив, ябай аңлатма, ләкин төп герой – авторҙың үҙе бит, уның уй-фекерен, идеяһын илтеүсе, тимәк, автор үҙе әлеге һин әйткән көслө характерлы, актив, эҙләнеүсән, һәр нәмәлә эше булған шәхес булыуы фарыз. Автор ни тиклем бәләкәй калибрлы булһа, геройы ла шул сама инде. Бөгөн тик эскелек, күршең йәки туғаның менән килешмәүсәнлек тураһында ғына яҙыу осоро үтте, һәр хәлдә үткәрергә кәрәк, – әлбиттә, улары ла мөһим – хәҙер беҙҙең алда ҙурыраҡ ҡына түгел, космик проблемалар тора: глобализация, тирә-яҡ мөхитте, ерҙе, телде, ауылды, мәктәпте һаҡлап ҡалыу мәсьәләләре. Йәнә бер мөһим аспект. Республикабыҙ ҡара һәм һары тәнлеләр менән тулды. Улар беҙҙең ҡыҙҙарҙы ала, бында ҡалып тамыр йәйә – былар барыһы ла республикала социаль көсөргәнешлекте арттыра – күбәйеп китһәләр, үҙҙәренең талаптарын (фатир, мәктәптәрҙә айырым кластар, дәүләт теле...) ҡуйғандарын көт тә тор. Үҙем, проза социаль булырға тейеш, тип тылҡығас, бөгөнгө яҙыусының төп бурысын тап ошо мәсьәләләрҙе яҡтыртыуҙа күрәм. Ә үҙемдең һин атаған повестарға килгәндә, тап шулай тип уйланыммы икән яҙған саҡта – белмәйем. Хәйер, күңел төбөндә булғандыр. Минең өсөн иң мөһиме – фекер, идея, персонаждың, тимәк, мин авторҙың уҡыусыға әйтер һүҙе. Ҡалғаны, дөрөҫөрәге, бөтәһе лә ошоға буйһондорола. Ә уҡыусыға бөгөн урамда, үҙенең тирә-яғында барған төрлө буяулы тормош ҡыҙыҡ, ул унан үҙен борсоған һорауҙарға яуап табырға тырыша, сағыштыра, баһа бирә, фәһем ала. Шуға ла, әйтәйек, нисек кенә сәйер яңғырамаһын, ерҙе һатыу, һатып алыу мәсьәләһен («Ҡытай-город»), оло быуын вәкилдәренең аяныслы тормошон («Танкист»), кеше менән тирә-яҡ мөхит, тәбиғәт байлыҡтарын һаҡлау-ҡурсалау («Бер кәмәлә...») фекерҙәре тәүҙә идея рәүешендә тыуҙы, шунан уға тормош өрөү башланды...

Заман башҡа – заң башҡа. Тормош, тормошта йәшәү ҡағиҙәләре, ҡиммәттәр тиҙ үҙгәрә. Әйтәйек, минең бала саҡта, йәшлек йылдарында ғына кешенең бер-береһенә мөнәсәбәте, намыҫ, ғәҙеллек, тоғролоҡ төшөнсәләре бөтөнләй икенсе ине, 30 – 40 йыл эсендә, 180 градусҡа уҡ булмаһа ла, бөгөн күп нәмә бөтөнләй икенсе юҫыҡҡа бороллдо. Ул миңә генә түгел, һәр кемгә лә шулай. Ләкин әҙип ностальгияға бирелеп кенә йәшәй алмай, улай көн итергә тейеш түгел. Жванецкий әйтмешләй, ул ил буйынса дежурный, шуға күрә һәр формацияла ла уның эше бар: кеше, етәксе, йәмғиәт алдына проблема ҡуйыу...

**Фәнил КҮЗБӘКОВ:**

– Ысын ижадсы заманы менән бергә атларға мәжбүр – мин бында һинең фекерҙе дауам итәм. Шунһыҙ ул иңенә һалынған миссияны тейешенсә үтәй алмай. Ә тормош һуңғы 20 – 25 йыл эсендә, үҙең әйтмешләй, ысынлап та, тиҙ һәм ҡырҡа үҙгәрҙе, хатта йәштәр (был осраҡта Гюго әйткәнде иҫкә төшөрәйек тә: «40 – йәшлектең ҡартлығы, 50 – ҡартлыҡтың йәшлеге», үҙебеҙҙе – уларҙы айырыусы, уртаһында тороусы быуын тип иҫәпләйек) йылдам алышыныусы

ваҡиғаларҙы күрәгенсә барлап-баһалап өлгөрә алмай. Өлкән быуын иһә, дөйөм алғанда, бөгөндө кисәге күҙлектән сығып баһалай (был да кәрәк, әммә был ғына етмәй. Теләһә ҡайһы күренеште лә иртәгәһе көн бейеклегенән ҡарарға ынтылыу зарур). Тапалған һуҡмаҡты таҡырайтыуыбыҙҙың төп бәләһе лә шунда: йәштәребеҙҙең күпселеге ололар артынан эйәрә. Был хаҡта яҙыусыларҙың XIV съезы алдынан Флорид Бүләков бик әсенеп әйткәйне. Биш йылдан һуң да, хәл ыңғай яҡҡа үҙгәрҙе, тип әйтеп булмай.

Тормош һәүетемсә аҡҡан йылдарҙа әҙиптәрҙе ижади командировкаға сығарыу формалары бар ине – тормошто өйрәнеү өсөн. Заманына күрә ыңғай һөҙөмтәләр ҙә бирҙе ул. Рәшит ағай Солтангәрәев, мәҫәлән, шул нигеҙҙә көн ҡаҙағына һуҡҡан бына тигән әҫәрҙәр яҙҙы. Мин быны, ижади командировка ҡатмарлы проблеманы тулыһынса хәл итә, тигәндән әйтмәйем. Тормошто төрлөсә өйрәнеү хәсиәтенән сығып әйтәм. Һәр кем үҙенә ҡулайын, мөмкин булғанын һайлай. Ә бөгөнгө ысынбарлыҡты белмәйенсә замандашты ҡыҙыҡһындырырлыҡ ниндәй әҫәр яҙа алырға мөмкин?!

**Әмир ӘМИНЕВ:**

– Был һорау-фекергә алда әйткәндәремдә ниндәйҙер кимәлдә яуап булды ла шикелле. Быуындар алмашыныуы – бик сетерекле нәмә. 2008 йылдың сентябрендә Дағстанға Рәсүл Ғамзатовтың тыуыуына 85 йыл тулыуға арналған тантаналарға барғанда Рәсәйҙең төрлө төбәктәренән килеүсе шағирҙарҙан бер нисә кеше «Нисек Мостайһыҙ?», «Ундай шағирығыҙ тағы бармы?» тигәнерәк һорауҙар бирҙе. Әлбиттә, Мостай һымаҡ шағирҙар йыл һайын тыуып тормай, йөҙ йылға бер тыуһа әле, эш бында уға бәрәбәр талант, дөрөҫөрәге, ана шул быуындар алмашыныуы хаҡында бара. Бер кемде лә ҡабатлап йәки уға йәнәш баҫтырып булмай, һәр ижад кешеһе индивидуум, әммә ниндәй ҙур әҙип арабыҙҙан китһә лә, дөйөм әҙәби процесс һүнмәҫкә, дауам итергә тейеш. Мин икенсе нәмә хаҡында ла уйлайым. Алда әйткән тарихи романдар осоро хаҡында. Юҡ-юҡта бөгөн дә улар яҙылып ҡуя, ләкин ул саҡтағы миҡдарҙа түгел – пик үтте, ул үҙенең бурысын үтәне, ә бына йәштәр араһында ул жанрға тотоноусы күренмәй. Шуныһы хафаға һала.

Ғөмүмән, был проблемаға мин үтә лә пессимистик ҡараштa түгелмен. Ундай бәхәс элек тә булған, әле лә бара, алда ла туҡталмаҫ. Әҙәбиәт тарихына күҙ һалһаң, Аллаға шөкөр, ҡайһы бер осорҙарҙа ниндәйҙер һүлпәнәйеү, тематика ярлылығы күҙгә ташланһа ла, сылбыр өҙөлмәгән, тәбиғәт ҡанундарына ярашлы, ололар китә торған, йәштәр килә торған. Бында мәсьәлә, миңә ҡалһа, икенселә: ниндәй йәштәр килә, алдағы быуындың ижадын үҫтереп, байытып алып китеүсеме, әллә үҙенә тиклемге булғанды ҡабатлаусы ғынамы? Ҡабатлаусы ғына булһа – хөрт, алға китеш юҡ тигән һүҙ. Дөрөҫөн әйткәндә, беҙ күбебеҙ, әлеге әйтмешләй, үҙебеҙҙең ололарҙан ғына өлгө алабыҙ, хикәйә йәки повесть, роман улар яҙғанса булырға тейеш, тип уйлайбыҙ. Туғандаш әҙәбиәттәрҙе, сит ил әҙәбиәтен уҡыу юҡ, уларға юғары уҡыу йорттарында ла тейешле иғтибар бирелмәй, күрәһең, ә дөйөм кругозор киңәйһен өсөн тап башҡа әҙәбиәт өлгөләре менән дә танышып барырға, уларҙың яҙылыу формаһын, сюжет-композиция төҙөлөшөн, образдар системаһын, фекер, идеяһын

күрергә, өйрәнергә, хатта ҡулланып ҡарарға кәрәк бит. Камиллыҡтың сиге юҡ. Уҡый-уҡый, таныша-таныша, уйлай-фекерләй үҙеңдең әҫәреңдә лә ҡулланыр-файҙаланырлыҡ бер еге барыбер ҙә килеп сыға ул, һис юғы ниндәйҙер ассоциация тыуҙыра күңелдә. Йәшлек – эҙләнеүҙәр, эксперименттар, үҙ-үҙеңде эҙләү осоро. Донъя әҙәбиәте тарихына ҡараһаң, күп бөйөк әҫәрҙәр әҙиптәрҙең тап йәшлек осорҙарында яҙылған. Лермонтов, Туҡай шиғриәте, Ершовтың «Конек-Горбунок» әкиәте (19 йәштә), Грибоедовтың «Аҡыллылыҡ бәләһе» комедияһы (29 йәштә), Константин Ивановтың «Нарспи» поэмаһы (17 йәштә), Шолоховтың «Тымыҡ дон»ы (23 йәштә), Рәшит Назаров әҫәрҙәре...

Ә Рәшит Солтангәрәев заманын бөгөн һағынып ҡына иҫкә төшөрөргә ҡала. Сөнки, ҙурҙан ҡупҡанда, ул саҡта әҙәбиәткә ҡараш барыбер ҙә йылыраҡ, йомшағыраҡ, иғтибарлыраҡ ине хөкүмәт тарафынан. Әҙиптәрҙе ижади командировкаларға ебәреү үҙе генә ни тора. Әлбиттә, уларҙы ла төрлө кеше төрлөсә файҙаланды, ә бына Рәшит ағайға ул ҙур материал бирҙе һәм ул материал роман, байтаҡ повесть, хикәйәләр яҙырға мөмкинлек тыуҙырҙы. Белмәйем, хәҙер ундай мөмкинлектәр юҡтыр, заман башҡа – заң башҡа. Хәйер, берәй икенсе төрлө варианттар уйлап табылһа, йәштәр өсөн шәп булыр ине лә...

**Фәнил КҮЗБӘКОВ:**

– Әҙиптәр ҙә – йәмғиәт балаһы, әлеге болғауыр заман емеше. Теләйбеҙме, теләмәйбеҙме, әҙәби процесты ошо йәмғиәт торошонан айырып ҡарап булмай, ысынлап та. Алдараҡ был хаҡта үҙең дә әйтеп киттең. Бөгөнгө ысынбарлыҡ иһә, – әйтерһең дә, өҙөлөргә етешкән проблемаларҙы сырмаған йомғаҡ. Мәсьәләләрҙең йылдар буйына хәл ителмәүе, тоҡана башлаған өмөттәрҙең осҡон мәлендә үк һүндерелеүе битарафлыҡ һаҙлығына этәрә. Айына егерме мең һум алып эшләгән йәш кешенең дә үҙенә ҡасан да булһа айырым фатир ала алырына өмөтө бик самалы. Сараһыҙлыҡ! Ошондай хәлдә иртәгәһе көнгә ышанысты нисек тыуҙырырға? Икенсе яҡтан ҡараһаҡ, быйыл Рәсәй урмандары дөрләгәндә ябай кешеләрҙең бер ниндәй күрһәтмәһеҙ утҡа дәррәү ҡаршы күтәрелеүе, үҙен-үҙе ойоштороуы уйлыларға күп нәмә тураһында һөйләй бит. Халыҡҡа ышаныс күрһәтер кәрәк. Хеҙмәт кешеһенә таянырға, уны эшләтергә генә түгел, уға үҙенсә йәшәргә мөмкинлек бирергә кәрәк. Ә чиновниктарҙың күпселеге быныдай үҙгәрештәрҙән уттан да былайыраҡ ҡурҡа. Сөнки был осраҡта уның кәрәкһеҙлеге, арбала бишенсе тәгәрмәс кенә булыуы асыҡланасаҡ. Беҙгә, әҙиптәргә, уйланаһы, асаһы, һүрәтләйһе нәмәләр күп ул. Үҙебеҙҙең цехты ла ваҡыты-ваҡыты менән елләтеп алыу хәжәте бар...

**Әмир ӘМИНЕВ:**

– Фекереңде дөрөҫ аңлаһам, бында һүҙ йәштәрҙең бөгөнгө һәм иртәгәһе көнө, власть органдарының халыҡ менән мөнәсәбәте тураһында бара. Икеһе лә, ҡарашымса, бөгөнгө йәшәйешебеҙҙең иң ҡырҡыу проблемаларынан. Йәштәргә бөгөн ысынлап та ҡыйын: фатир алыу, эшкә урынлашыу өсөн ифрат күп көс, энергия, түҙемлек һәм... ҙур аҡса кәрәк. Ә аҡса юҡ. Һөҙөмтәлә күптәр фатирһыҙ интегә, уҡыу йортонда алған

белеме буйынса эш таба алмай, үҙен йәки ғаиләһен аҫрау өсөн икенсе йәки аҙ түләнгән эшкә барырға мәжбүр була. Был дөйөм статистик схема ҡайҙалыр шулайҙыр, бер ерҙә икенсе төрлөрәктер, ҡайҙалыр фатирлы булыу еңелерәктер, хеҙмәт хаҡы ла сағыштырмаса юғарылыр, кемгәлер ата-әсәләре ярҙам итәлер, әммә, дөйөм алғанда, был проблемалар бар һәм ҡайҙа ла социаль көсөргәнешлек тыуҙыра. Был – ҡалала, ә ауылда йәштәргә тағы ла ауырыраҡ: колхоздар бөткәс, эш юҡ һәм йәштәр Себер тарафтарына сығып китергә, сезонлы шабашкаға йөрөргә мәжбүр. Былар ниндәйҙер кимәлдә иҡтисадҡа, финанслауға бәйле. Шуға уларҙы яйлап булһа ла хәл итеү өмөтө бар. Ә бына идеология бөгөнгө йәштәргә ауыр, күп йәһәттән аңлайышһыҙ тормошта үҙ-үҙҙәрен табыуға ярҙам итәһе урынға, киреһенсә, боҙа, тарҡата, ҡоторта. Бындай пропаганда йәш быуынды ғына түгел, илде эстән тарҡатыу өсөн юрамал эшләнмәйме икән, тип тә уйлап ҡуяһың хатта. Әйтәйек, үҙәк телевидение бер нисә каналдан параллель рәүештә Америка боевиктарын, үлтереш, атыш, талау, көсләү менән тулы кинолар күрһәтә. Бала-саға, малай-шалай, мультфильмдар ҡарайһы урынға, шуны ҡарай, гәзиттәр, бигерәк тә йәштәр өсөн тәғәйенләнгән «Комсомольская правда» фотоларын тәүге биткә сығарып тороп теге йәки был артистың, йырсының, олигархтың ғаилә хәлдәрен, нисә һөйәркәһе, иттә нисә балаһы, донъя буйлап һибелгән һарайҙары, йорттары, машиналары, яхталары тураһында яҙа. Йәш ғалимдар, врачтар, уҡытыусылар, сәйәсмәндәр, ғөмүмән, өлгө булырҙай намыҫлы эшләгән йәштәр тураһында – ләм-мим. Тормош үҫешен бит тәүгеләр түгел, икенселәр билдәләй, уларҙың көндәлек фиҙакәр хеҙмәте арҡаһында бара. Ғөмүмән, үҙәк матбуғат актив һәм даими рәүештә йәш күңелдәргә көс культын, аҡса, байлыҡ культын пропагандалай. Художестволы әҙәбиәт тип нәшерләнгән йылтыр тышлы, яҡшы ҡағыҙлы китаптарҙың да күбеһе шулай уҡ кешенең түбән инстинкттары, үлтереш, атыш, талаш тураһында. Һөҙөмтәлә йәштәрҙә, бөтәһе лә ярай, бөтәһен дә эшләргә мөмкин, тигән фекер тыуа, һәм ул иптәштәре, йәмғиәт алдында көслө, сос, таҫыллы булып күренер өсөн маймыл һымаҡ кино, китап геройҙарының ҡылыҡтарын ҡабатлай башлай. Бындай «егетлектәр»ҙең нимәгә алып барыуы, ни менән тамамланыуы һәр кемгә мәғлүм.

Әлбиттә, республикабыҙ, ил буйынса йәштәр үҙҙәре лә, ололар ҙа төрлө акциялар, саралар, осрашыуҙар ойоштора. Уларҙы ыңғай эшкә йәлеп итеү, эскенән, наркотиктарҙан, тәмәкенән арындырыу өсөн былар бик кәрәк. Миңә ҡалһа, әҙәбиәт, мәҙәниәт, сәнғәт әһелдәре лә дөйөм мәғәнәлә шул сараларға ҡушылырға, ярҙамлашырға тейеш. Бәлки, үҙҙәре урамға сығып түгел, ә әҫәрҙәре, сығыштары, мөрәжәғәттәре менән – исемле, вазифалағы кешеләрҙең һүҙе тәьҫир итмәй ҡалмай ул. Йәш быуынға күберәк матурлыҡты, гүзәллекте күрһәтергә кәрәк, ыңғай герой миҫалында йүнәлеш бирергә, өндәргә, саҡырырға, оло быуындың яҡшы традицияларын пропагандаларға. Йәмғиәттә позитив көс күберәк, негатив көс уға ҡарағанда әҙерәк булһа ла, ул берҙәмерәк, ойошҡаныраҡ. Шуға ла беҙгә, йәғни йәмғиәткә, ошо таҙа һәм ыңғай көстәргә ойошорға, тупланырға, үҙ тирәбеҙгә йәштәрҙе лә ылыҡтырырға кәрәк. Шул саҡта ғына беҙ ул негативты туҡтата аласаҡбыҙ.

Власть органдарының халыҡ менән мөнәсәбәтенә килгәндә, минең ҡарашса, хәл былай. Социализм осоронда ябай кешеләр менән етәкселәр араһында ниндәйҙер тигеҙлек бар ине, материаль яҡтан да айырма әллә ни ҙур булманы. Ҡырағай капитализмға һөйрәп индергәйнеләр – мин уны икенсе төрлө атай алмайым – етәкселәр күҙгә күренеп байыны ла китте: үҙҙәренең ҡул аҫтындағы предприятиеларҙы, заводтарҙы приватизацияланылар, банкротлыҡҡа эләккәндәрен ҡулға төшөрҙөләр һ. б. – бөгөн ниндәйҙер тигеҙлек тураһында һөйләргә лә түгел. Капитализм экономик формацияһы мотлаҡ байҙарҙан һәм ярлыларҙан тора, шуға ла бөгөн әлеге ике ҡатлам араһында торған һайын ара ҙурыраҡ була барыуына һис аптырарға ярамай һәм был аралыҡ киңәйә генә барасаҡ. Ҡыҙаныҫҡа ҡаршы.

Һөйләшеүҙең төп темаһына килгәндә, аралашыу барышында мин үҙ фекерҙәремде белдерә барҙым инде. Шуға ла, әйтелгәндәрҙе ҡабатлап тормаҫтан, ҡайһы бер нәмәләрҙе тезистар рәүешендә генә билдәләгем килә.

Һәр дәүерҙең үҙ әҙәбиәте. Әҙәбиәт йәмғиәт үҫеше менән йәнәш бара, бәлки, шул үҫеш-үҙгәрештең әхлаҡи, мораль, психологик өлөшөн әҙерләйҙер ҙә. Беҙ йыш ҡына тарихты тарихи китаптарҙан түгел, художестволы әҙәбиәт аша беләбеҙ, шәхестәрҙе әҙәби китаптар аша хәтерләйбеҙ. Дәүер үҙгәреү менән әҙәбиәт тә үҙгәрә, тимәк, уға булған талаптар ҙа үҙгәрә, уның социаль, әхлаҡи, граждандлыҡ бурыс-талаптарын, проблемаларын асыҡларға, күрһәтергә тейеш була. Заманында ил батшаһы «мәҙәниәт тороп торор» тиһә лә, мәҙәниәт тороп тормай, ул йәшәүен, кешеләрҙе ҡыуандырыуын дауам итә. Был донъяла нисек гәзит-журналһыҙ, китапһыҙ, йырһыҙ, бейеүһеҙ, театрһыҙ, һынлы сәнғәтһеҙ йәшәмәк кәрәк? Ундай ҡырағай тормошто күҙ алдына килтереүе лә ҡыйын даһа...

**Фәнил КҮЗБӘКОВ:**

– Гөлсирә, әйҙә, һөйләшеүҙе дауам итеп, башлыса прозаға ҡағылышлы уйлашайыҡ әле. Әлбиттә, дөйөм әҙәбиәткә, ижадҡа бәйле проблемаларҙы ла урап үтә алмабыҙ. Бына шәхсән һинең өсөн нимә ул ижад?

**Гөлсирә ҒИЗЗӘТУЛЛИНА:**

– Күңел ихтыяжы. Иң ауыр мәлдәремдә, был тормошта миңә терәк булырҙай бер нәмә ҡалмаған кеүек булғанда яҙыуға «бауыр баҫканым» хәтеремдә. Ғөмүмән, мин йәшәүгә ныҡ талапсан кешелер, моғайын, шуға күрә үҙ ғүмерем менән генә йәшәү күңелһеҙ булып киткән ваҡыттар була. Шундай ваҡыттарҙа икенсе яҙмыштар тураһында уйлана башлайым. Шуға күрә лә минең бер китабым «Йөҙ ҙә бер ғүмерем» тип атала. Уны яҙған ваҡытта, йөҙ ҙә бер хикәйә аша йөҙ ҙә бер яҙмышты күңелем аша үткәрермен, тип уйлай инем. Һәм был тап шулай ҙа. Ул китап яҙылыуын дауам итә, тимәк. Шул уҡ ваҡытта мин күңел ихтыяжы менән икмәклек-тоҙлоҡ аҡса эшләй алған бәхетле кеше лә. Йәғни ижад минең өсөн кәсеп тә булып сыға.

**Фәнил КҮЗБӘКОВ:**

– Әҙәбиәт, ниндәй осор, ниндәй ижтимағи-иҡтисади системаныҡы, ниндәй милләттеке булыуына ҡарамаҫтан, кешенең күңел матурлығын данлауҙы маҡсат итеп ҡуя. Ә һин, яҙыусы булараҡ, үҙеңә ниндәй маҡсат ҡуяһың?

**Гөлсирә ҒИЗЗӘТУЛЛИНА:**

– Дөрөҫөн әйткәндә, минең өсөн ижад – стихиялы процесс. Ниндәйҙер фекер әйтәйем, шул идеяны үткәрәйем тип яҙмайым. Әммә, һорау бирелгәс, яуап ҡайтарырға кәрәк, тип махсус уйланғанда… Бөгөнгө заманда кешелек информация ҡойононда йәшәй. Донъя уға бихисап ҡырҙары менән асыла, ошо ғәрәсәт эсендә нимә яҡшы, нимә насар, ҡайҙа яҡты, ҡайҙа ҡараңғы икәнен дә аңлауы ҡыйынлаша. Шундай шарттарҙа һәр яҙыусы – Интернетта яҙыусыларҙы ла күҙ уңында тотҡанда, улар бихисап – үҙ фекерен алға һөрә, үҙ ҡарашын пропагандалай. Мин иһә, үҙем яратҡан донъя, үҙ күңелемә яҡын кешеләр һәм үҙем һоҡланған ҡиммәттәрҙе ярата алһам, һис юғында уларға иғтибар йәлеп итһәм, алдыма йәмғиәт тарафынан ҡуйылған бурысым үтәлгән, тип уйлар инем.

**Фәнил КҮЗБӘКОВ:**

– «Бөтәһе лә яратырға мин алтын тәңкә түгел», – тигәнме әле Бунин… Әҙәм балаһы сәңгелдәгендә үк әсәһенең йылмайыуына яуаплап ауыҙ йыра, әйтелгәнде отоп алып һөйләшергә өйрәнә, һуҙылған ҡулға тотоноп атлап китә… Атай-әсәй тәрбиәһе, мәктәп, юғары уҡыу йорто, үҙ аллы тормош… Үҙеңдең уҡытыусыларың итеп кемдәрҙе күрәһең?

**Гөлсирә ҒИЗЗӘТУЛЛИНА:**

– Иң беренсе сиратта, әлбиттә, атайым менән әсәйем. Улар бик аҡыллы, булдыҡлы һәм тәрән кешеләр ине. Уларҙың һабағын ғүмерҙә лә онотаһым юҡ... Башланғыс синыфта уҡығанда өй эше итеп инша яҙырға ҡушҡайнылар. Шул тиклем бирелеп, яҙғанымдан кинәнес табып башҡарҙым быны. Осона сығып, ҡыуанып, инде йыйыштырып ҡына һалам тигәндә, ҡара тамыҙып, бөтә эшләгәнемде юҡҡа сығарҙым да ҡуйҙым бит. Атайым, илап ултырғанымды күреп, хәлемде аңлап, миңә Лев Толстойҙың ҡаймаҡҡа төшкән ике тәлмәрйен хаҡындағы хикмәтен тотторҙо. Шундай һабаҡтар аша мин һис ҡасан да төшөнкөлөккә бирелергә, ҡул ҡаушырып ултырырға ярамағанлығын аңлай барҙым. Икенсе мәл синыфташ ҡыҙыҡайҙың свитерына ҡыҙыҡтым, көнләшеп ҡараным. Атайым һиҙеп ҡалған. Алтын балыҡҡа бәйле ғибрәтле әкиәт һөйләгәне хәтерҙә. Берәү алтын балыҡ эләктергән икән: ебәр, теләгәнеңде үтәйем, тик теләгәнең күршеңә һинекенә ҡарағанда икеләтә күберәк буласаҡ, тигән. Ҡыуанаһы ерҙә ҡайғыға ҡалған был. Ни өсөн тиһәң, күршеһенән харап ныҡ көнләшә икән. Уйлаған-уйлаған да: «Бер күҙем сыҡһын», – тигән теләк белдергән. «Бына нисек була: көнләшкән кешегә алтын балыҡ та ярҙам итә алмай», – тине атайым... Һәр ерҙә беренсе булырға ынтыла инем. Берҙән-бер көн еңелеп ҡайтып индем. Түгелеп илайым... Атайым таҙа дәфтәр бите алырға ҡушты. Һыҙыҡ һыҙҙы ла: «Йәле, шуны ҡыҫҡарт», – ти. Улай итеп ҡарайым, былай итәм – барып сығырлыҡ түгел. Атайым теге һыҙыҡ аҫтына икенсене, оҙонораҡты, һыҙҙы. «Ҡыҫҡарҙымы тәүгеһе?» – ти. Шулай мин бәләкәйҙән башҡалар менән түгел, ә үҙ-үҙем менән ярышырға, үҙемде үҫтерергә кәрәклеген аңланым...

Йәнә бер хикмәт күңелдән сыҡмай. Баҡсасыға һәр үҫенте үҙенең ғәжәйеп теләктәрен белдергән: йөҙөмдөң имәндәй мөһабәт булғыһы, уҫаҡтың

раузалай сәскә атҡыһы, ҡайындың хөрмәләй емеш биргеһе килгән. Үтәлгән теләктәре. Тик имәндәй мөһабәт йөҙөмдөң емеше ауыҙға ҡабырлыҡ түгел ҡаты, уҫаҡтың сәскәләре, әйтерһең, йәбештереп ҡуйылған, ҡайындың хөрмәһенән мунса еҫе килә, ти. Ситтә генә иһә, балҡып, хуш еҫтәр таратып, гөлйемеш сүгәләгән. Энәләре лә үҙенеке... Мине Гөлсирә Ғиззәтуллина итеп ҡабул итһендәр, мин Хоҙай Тәғәлә яралтҡан Гөлсирә булып асылырға теләйем...

Уҙған быуаттың 70-се йылдарында булһа кәрәк, Мәскәүҙән билдәле әҙип килә. Аралашыу мәлендә Зәйнәб Биишеваға: «Һеҙгә яҡшы – һеҙҙең Мостайығыҙ бар!» – ти икән. «Шулай, – тип килешкән апайыбыҙ. – Уның яурындары шул тиклем киң: хатта артында кемдәр тороуы күренмәй ҙә...» Милли әҙәбиәтте бер-ике кеше генә тыуҙыра алмай...

**Фәнил КҮЗБӘКОВ:**

– Бәхәсһеҙ. Хатта Пушкинды Пушкин итеүсе мөхит тураһында һүҙ йөрөтөргә мөмкин. «Пушкин осоро әҙиптәре» тигән һүҙбәйләнеш тә осраҡлы түгелдер, моғайын...

Тормоштағы уҡытыусыларыңа бәйле хәтирә-уйланыуҙарҙы дауам иткәндә...

**Гөлсирә ҒИЗЗӘТУЛЛИНА:**

– Ағайым менән апайым, ғүмер буйы туғанлыҡ тойғоларының ни тиклем изге һәм юғары булғанына инандырып, тормоштоң ысын ҡиммәттәренә өйрәтә. Улым менән ҡыҙым, ошо замандың кешеләре булараҡ, бөгөнгө тормоштағы үҙгәрештәргә яраҡлашырға ярҙам итә. Дуҫтарыма ҡарап тотҡан юлымдың дөрөҫмө, юҡмы икәнен һәр ваҡыт самалап торам. Мине яратҡан һәм яратмағандарҙан бик күп нәмәгә өйрәнәм. Ижадҡа рухландырған әҙәбиәт уҡытыусыларым тыуған ауылым Иҙәш мәктәбенән Роза Ахун ҡыҙы Ахунова менән Республика беренсе интернат-мәктәптән Фәрзәнә Фәйзи ҡыҙы Абдуллинаға әйтеп бөтөргөһөҙ рәхмәтлемен. Миндәге һәләт осҡонон тап уларҙың иғтибары ләүкетеп ебәрҙе. Амстердамдың ирекле университетында миңә үҙенең даирәһендә бөтөн донъяға танылған ғалим профессор Епп Талстраның семинарҙарында ҡатнашыу бәхете тейҙе. Унда барыр алдынан уҡ дуҫтарымдың береһе, немец ғалимы доктор Томас Каут: «Ысын ғалимдың ниндәй булырға тейешлеген күргең килһә, профессор Талстраның дәрестәрендә булырға тырыш»,– тигәйне. Үҙ фәненә мөкиббән киткән ысын мәғәнәһендәге остаздың аураһында булыу үҙе генә ниндәй ыңғай йоғонто яһағанын тойҙом. Ул семинарҙарында үҙенең дә ниндәйҙер һорауҙары булған проблемаларҙы фекер алышыуға ҡуя, үҙе лә беҙ, студенттар, менән бергә асыштар яһай. Ҡайһы берҙә һорауҙарға яуап таба алмағанда, унан әҙер яуап көтһәң, ул балаларса ихласлыҡ менән: «Белмәйем шул, – тип әйтеүҙән һис тә тартынмай һәм: – Беҙҙән дә күберәк белһен, шул яуаптарҙы тапһын, тигән өмөт менән уҡытабыҙ бит һеҙҙе», – тип әйтә торғайны. Мин уны йыш хәтергә алам, һәм донъяла шундай кешенең барлығын белеүҙән генә лә күңелгә рәхәт булып китә.

Әле килеп, ике йәш ярымлыҡ ейәнсәрем менән өс айлыҡ ейәнем өйрәтә. Быны мин һүҙ матурлығы өсөн генә әйтмәйем, ысынлап та шулай. Бына беҙ Камилә менән баҡсаға китеп барабыҙ. Ул һәр бер йән эйәһе менән

һөйләшеп бара: «Һаумы, бөжәк!» – ти ул. Бара-бара ла йәнә: «Һаумы, күбәләк!» Бына күл буйына килеп етәбеҙ ҙә, беҙгә серәкәй ябырыла. Мин уларҙы һуғам. Ҡарайым, ҡыҙым уларҙы ҡыуып ҡына ебәрә. «Үлтер, үлтер», – тием. Ә ул миңә күҙҙәрен тултырып аптырап ҡарай: «Өләсәй, улар бит бөжәк!» Ә Даниярҙың аяҡ-ҡулы менән бәхетле тыбырсынып, ауыҙ йырып, тормошҡа ниндәй кинәнгәнен күреп, донъяның ысынлап та матур икәнен аңлайһың...

**Фәнил КҮЗБӘКОВ:**

– Ә бит ижад кешеһе өсөн бала күңелен аңлай алыу, тирә-йүнгә уның күҙе менән бағыу – башланғыстарҙың башланғысы. Был сифатты һаҡлай алыу, үҙенә күрә, көйө киткән музыка ҡоралын көйләргә булышҡан камертон кеүектер. Ижадта был камертон менән үҙеңде, ижад емештәреңде тикшергеләп алыу бик кәрәк...

Талант эйәһе, билдәле милләт вәкиле булараҡ, уның солғанышында формалаша, үҫә, нығына, халҡын алға әйҙәй башлай. Әммә күпселектең уны аңламауы бар. Бына ошондай конкрет шәхескә мөнәсәбәттә лә милләттең, халыҡтың аң кимәле, рухи бейеклеге баһаланасаҡ. Был мөнәсәбәт, күренеүенсә, үҙе критерийға, үлсәмгә әүерелә. Шул уҡ ваҡытта әҙәм балаһы үҙе лә йәмғәтселектең ғәҙел баһаһына мохтаж.

**Гөлсирә ҒИЗЗӘТУЛЛИНА:**

– Үҙ илеңдә пәйғәмбәрҙәр булмай, тигән әйтем бар бит. Юҡҡа ғынамы ни Назарет ҡалаһы кешеләре, Ғайсаның пәйғәмбәрлек ҡылып йөрөгәнен ишеткәс, бик ғәжәпләнгән. Яңы ғына ялан тәпәй йүгереп йөрөгән бер балтасы малайының шундай шәхескә әйләнеүенә ышаныуы ысынлап та улар өсөн ҡыйын булған. Икенсе бер әйтем дә бар: «Тауҙың бейеклеген күрер өсөн унан алыҫтараҡ булырға кәрәк». Шулай булғас, әле арала йәшәп ятҡан талантлы замандашыңды күрә белеү, уны тейешле рәүештә баһалау, уны ҡәҙерләй белеү өсөн ысынлап та милләттән ҙур зирәклек талап ителә. Әммә бында баһаның ике төрө тураһында һүҙ йөрөтөү кәрәктер: ысын мәғәнәһендә зауыҡлы әҙәбиәт һөйөүселәр баһаһы һәм рәсми баһа. Рәсми баһаның ни рәүешле яһалғанын, оҙаҡ йылдар әҙәби даирәлә ҡайнағанлыҡтан, беҙ һинең менән яҡшы беләбеҙ. Ә бына халыҡ һөйөүе – ул серле процесс: күңел эше һәм был баһа аҙаҡтан йыш ҡына дөрөҫкә сыға, ваҡыт һынауын үтә. Ә ҡайһы ваҡыт уҡыусылар ҙа яңылыша. Хәйер, былай тип әйтеү дөрөҫ тә түгелдер. Уҡыусы бит баһа бирәм тип уҡымай, уға теге йәки был яҙыусының әҫәре оҡшай йәки оҡшамай. Шуға күрә баһаны, ул мөһим нәмә булһа ла, ижадсыға төп критерий дәрәжәһенә күтәрергә ярамайҙыр. Сөнки теге йәки был баһаға ҡарап ҡына ижад итә башлаһаң, көрсөккә килеп терәлеүең бик мөмкин. Иң мөһиме, таланттарҙың һәр төрлөһө тыуып, үҫеп, сәскә атып, емеш биреп торһон. Ә бының өсөн халыҡтың үҙенең булыуы, йәшәүе һәм сәскә атыуы кәрәк.

**Фәнил КҮЗБӘКОВ:**

– Бына ошо халыҡ менән шәхес, халыҡ менән әҙип мөнәсәбәттәренә туҡталыңҡырап китәйек әле. Әйтәләр бит: һәр халыҡ әлегеһе мәлдә үҙе менән идара итеүсе даирәләргә лайыҡ. Йәғни, баш баҫып йәшәй икән, дөйөм алғанда,

ошо хәле менән ризалаша. Эйе, уның мөңгөрләүе, аш өйөндә кемделер эттән алып этҡә һалып һүгеүе лә мөмкин, йәғни тел тирмәнен дыңғырлатып бушҡа әйләндереүе, ә һуҡыр тинлек тә эш эшләмәүе бар. Әҙипмен тигән әҙип иһә туған халҡының рухи бөтөнлөгө тураһында уйламай булдыра алмай. Осорҙоң иң ҡырҡыу проблемалары фонында башҡорттоң башҡорт булып ҡалыуын, ниндәй хәлдә ҡалғанда ла иң күркәм кешелек сифаттарын һаҡлауын ылыҡтырғыс итеп һүрәтләй, йәки, киреһенсә, әшәкелеккә ҡаршы түҙеп торғоһоҙ тойғолар уята ала икән, үҙенән дә бигерәк, ул милләтен күтәрә.

**Гөлсирә ҒИЗЗӘТУЛЛИНА:**

– Талантлы шәхестең дөйөм кешелектең хазинаһына аҫыл өлгө булып өҫтәлерлек әҫәр ижад итеүе милләтен ысынлап та күтәрә. Мәҫәлән, бөгөнгө көндә сыуаштың Геннадий Айги тигән шағирын егерме беренсе быуат шағиры тип бөтөн донъяла ҙурлайҙар, уның шиғриәте аша халҡын да беләләр һәм ихтирам итәләр икән, был бит – шәхес өсөн баһалап бөткөһөҙ мәртәбә. Ә шундай шәхес булыу – халыҡтың үҙе өсөн ҙурлыҡ. Әммә йыш ҡына талант эйәһе йәмғиәттән алданыраҡ бара. Шуға күрә, ғәҙәттә, типкеләнеп, аңламауға дусар булып йәшәй. Шул уҡ Айги ҙа бит нисәмә йылдар аслы-туҡлы йәшәргә мәжбүр булған. Халҡы ла уны бары тик асыҡлыҡ осоро етеп, уны Көнбайыш Европала бик юғары баһалағандарын белгәс кенә күтәрмәләп алған. Күреүебеҙсә, тормош – бик ҡатмарлы нәмә.

**Фәнил КҮЗБӘКОВ:**

– Ә йәйрәп ятҡан илдең кеме генә юҡ! Ҡобайырҙа әйтелгәнсә:

*«Бир»ҙән башҡаны белмәгән*
*Бейе лә бар был илдең...*
*Тыуған ерен һаҡлаған*
*Батыры бар был илдең...*

Ҡайһы саҡ, бөгөнгөбөҙҙө уйлағанда, шундай һығымта ла яһарға мөмкин:

*...Йөҙ Бохайыр*
*Бер Салауат артында.*

Ә Салауат ялҡынлы һүҙен дә әйткән, һүҙен һанламағандарға яу булып та ябырылған... Яуҙы мин был осраҡта тура мәғәнәһендә ҡулланмайым, әлбиттә. Һүҙ әшәкелеккә ҡаршы түҙеп торғоһоҙ мөнәсәбәт булырға тейешлеге хаҡында. Юҡһа бит ҡайһы бер етәксе булған бәндәнең булдыҡһыҙлығы бар донъяға фаш ителгәс кенә, ул урынынан алына. Икенсе сик тә бар: хужаларға ярай алмаһаң, үҙ эшеңдә берҙән-бер һөнәрмән бул – барыбер һинән ҡотолоу юлын табасаҡтар... Ошондай ысынбарлыҡты художестволы дөйөмләштереү ҡайҙа? Эйе, китаптар ҙа сығарабыҙ, премиялар ҙа алабыҙ, тик тулайым әҙәби процесс ҡәнәғәтләндерерлекме әҙипмен тигән әҙипте, талапсан уҡыусыны?

**Гөлсирә ҒИЗЗӘТУЛЛИНА:**

– Минеңсә, бөтә нәмә лә ихтыяждан. Ихтыяж була икән, халыҡ ауыҙын асыр. Ауыҙын асырға мәжбүр була икән, әйтер һүҙе лә, сәсәндәре лә табылыр...

Китаптар сыға, тиһең. Алты йылдан ашыу нәшриәттә эшләгәнлектән, ҡайһы бер китаптарҙың нисегерәк сыҡҡанын яҡшы беләм. Ҡайһы бер

графомандарҙың президенттың үҙенә яҙып (Рәхимовҡа ғына түгел, Ельцинға, Путинға) сығарыу, шул уҡ ваҡытта талантлы, әһәмиәтле китаптарҙың йылдар буйы ятыу осраҡтары бар. Оптимист булып: «Талантлы әҫәр иртәме-һуңмы барыбер үҙенә юл яра», – тип әйтергә мөмкин. Әммә ваҡытында иғтибар етмәгәнлектән, күңеле төшөүҙән бик күп әҫәрҙәрен яҙмай ҡалған кешеләрҙе лә беләм. Ә тәнҡит мәҡәләләре, премияларға килгәндә… Республиканың көн һайын сыға торған иң төп гәзите «Башҡортостан»да ун ике йыл буйы әҙәбиәт, сәнғәт һәм мәҙәниәт бүлегендә әҙәби хеҙмәткәр булып эшләнем. Шуға күрә был әйберҙәрҙең кухняһын яҡшы беләм, мәҡәләләрҙең нисек яҙылыуы, премияларҙың нисек бирелеүе буйынса хәбәрҙармын. Мәҫәлән, Салауат Юлаев премияһының кемгә бирелергә тейешлеген күп осраҡта бер төркөм йәки хатта бер кеше хәл итә. Ҡайһы ваҡыт уның ҡарары ижадсының талантын, яҙғанының кимәлен бөтөнләй иҫәпкә алмай. Йәғни премиялар, баһалар – бер яҡта, әҙәби процесс икенсе яҡта бара. Шуға күрә, ул нәмәләргә мөмкин тиклем битарафыраҡ булырға кәрәк, тигән уйҙамын. Был, бәлки, минең үҙ-үҙемә ниндәйҙер кимәлдә һаҡланыу реакцияһылыр. Яҙышҡан кешегә ундай нәмәләр менән мауығыу бик ҡурҡыныс, хатта рухи яҡтан үлемесле йоғонто яһай. Яҙыусыға ижад итеү өсөн ҡәләм алып, аҡ ҡағыҙ менән күҙмә-күҙ ҡалыу етә, тигәндә беҙ бер нәмәне әйтеп бөтөрмәйбеҙ. Бәлки, күҙ тейеүҙән ҡурҡабыҙҙыр. Ижад иткәндә һин яңғыҙ түгелһең, киреһенсә, ниндәйҙер бер инешкә барып тоташаһың. Бары шунда ғына рухи ҡәнәғәтләнеү алырлыҡ әҫәр яҙып була. Шау-шыу, ығы-зығы менән артыҡ мауыға башлаһаң, ана шул инешкә юл ябыла. Ижадсы өсөн китабы баҫылмауы, премияһы булмауына ҡарағанда, шул инешкә юл ябылыуы ҙурыраҡ фажиғә. Ә, бәлки, киреһенсә, шул инешкә юлдары ябылғандар асырғанып, исмаһам, быныһын булһа ла алайым, тип дан-шөһрәт, премия тигән ялтырауыҡтар өсөн йөҙ йыртырға тотоналыр? Ғөмүмән, тормош та, әҙәм балаһы ла – бик ҡатмарлы нәмә. Шулай уҡ һин әйткән әҙәби процесс та…

**Фәнил КҮЗБӘКОВ:**

– Ә һинең геройҙарың, Гөлсирә, башлыса, бөгөнгө тормоштан, үҙҙәренең яҙмышынан ҡәнәғәт түгел. Уҡыусы булараҡ, быны мин, бөгөнгөсә йәшәргә ярамай, тип ҡабул итәм... «Ҡәҙерле бала» исемле хикәйәң, «Күбәләккә әйләнеү» повесы менән танышҡас, ә бит донъяны барыбер ҙә һөйөү тота; һөйөү юғала икән, тормоштоң ҡото китә, әҙәм бер ниҙән дә толҡа тапмай башлай, тигән фекергә ҡайта-ҡайта инандым. Бөгөнгө йәшәйешебеҙҙең (был бигерәк тә ауылдарҙа нығыраҡ күҙгә бәрелгән һымаҡ) ҡотһоҙлана барыуы ана шул йәшәү үҙәге, йәшәү мәғәнәһе булған һөйөүҙең, кешеләрҙең бер-береһенә, тыуған еренә, иленә, халҡына, уның үткәненә ҡарата һөйөүҙең юғала барыуындалыр һымаҡ... Әҫәрҙәремдәге ваҡиғалар ҙа, геройҙар ҙа тормоштан, тиһең. Әҙибә Гөлсирә өсөн тормош дөрөҫлөгө менән художестволы дөрөҫлөк араһында айырма бармы?

**Гөлсирә ҒИЗЗӘТУЛЛИНА:**

– Юҡ... Тормош күп яҡлы, ҡатмарлы, ҡапма-ҡаршылыҡлы. Уны уйлап сығарыу ҙа кәрәкмәй. Күрә, тоя белеү мөһим... Тормош логикаһына,

кешеләге кешелелеккә ышаныр кәрәк... Күптәрҙең башҡаларға ышанмайынса ҡарағанға ғына алданыуҙарын беләм. Аллаға шөкөр, кешеләргә ышанам һәм ошоғаса мине алдай алғандары юҡ. …Әҫәр геройҙарына килгәндә, һәр характерҙың үҙенең логикаһы бар. Йыш ҡына үҙең уйлап сығарған геройҙы ла нимәлер эшләтергә мәжбүр итеп булмай. Шуның кеүек, тормоштоң да үҙ логикаһы бар. Йыш ҡына беҙ уны аңлап та етмәйбеҙ.

**Фәнил КҮЗБӘКОВ:**

– Һинең тәүге әҫәрҙәреңдә ҡара буяуҙар күберәк һымаҡ ине. Яңыраҡ сыҡҡан китабың иһә «Тормош шау сәскәлә» тип исемләнде…

**Гөлсирә ҒИЗЗӘТУЛЛИНА:**

– Тормошомда, эргә-тирәмдә ҡара буяуҙар күберәк ине. Ғөмүмән, мин тормошто трагедия күҙлегенән ҡабул итә торған кешемен. Тирем үтә йоҡа. Шул уҡ ваҡытта геройҙарымды тормошоноң иң ауыр сағында тотоп алып, уларҙың яҡтылыҡҡа сығыу юлын һүрәтләү минең өсөн һәр ваҡыт мауыҡтырғысыраҡ. Бер генә айырма: элек мин, уларҙы алып сығып еткерә алмай, сараһыҙлыҡтан үлтереп ҡуя торғайным. Проблемаларҙы хәл итеүҙең берҙән-бер юлын үҙем дә шунда күргәнгәлер. «Тормош шау сәскәлә» тигән исем башта хыялымда тыуҙы. Оҙаҡ йөрөнө. Тормоштоң ысынлап та шау сәскәлә икәненә үҙем ысынлап та инанғанға тиклем.

**Фәнил КҮЗБӘКОВ:**

– Байтаҡ хикәйәләреңдең сюжетын эскелеккә бәйле конфликт тәшкил итә. Йәмәғәтселек эскелектең ҡот осмалы һәләкәткә илтеүен аңлау хәлендә түгел булһа кәрәк. Беҙ быны аңлар сикте үткәнбеҙҙер һымаҡ. Ысынында иһә милләттең киләсәгенә янаған афәт был, әҙәм балаһының мейеһенә, ҡанына инеп урынлашҡан йоғошло сир. Уны дауалау табиптарҙың ғына ҡулынан килә торған эш түгел. Әҙипте Рух һаҡсыһы тибеҙ икән, ул саң ҡағыу менән генә тыныслана аламы? Әҙип күҙлегенән ил тотҡалары, йәмәғәтселек, матбуғат, мәктәп нимә эшләргә тейеш?

**Гөлсирә ҒИЗЗӘТУЛЛИНА:**

– Был хикәйәләрҙе яҙған ваҡытта мин үҙем эскелек даръяһының уртаһында ҡалған бер бәләкәй генә утрау кеүек йәшәй инем. Шуға күрә был афәттең ни тиклем ҡот осҡос икәнен бик яҡшы беләм. Эскелек үҙенең күп йөҙлө булыуы менән мәкерле. Аҙ ғына миҡдарҙа алкоголь күңел күтәргес тә, ныҡ арығанда хәл өҫтәп ебәрә, ныҡ өшөгәндә йылыта һәм башҡалар. Ул бит башта дауа булараҡ ҡулланылған. Һәм бына шул сикте үтмәү бик ҡыйын, хатта мөмкин түгел дәрәжәлә. Минеңсә, айырым кеше өсөн иң ҡурҡынысы шул. Сөнки мин бер апайҙы беләм: ғүмере буйы дөрөҫ, тәртипле, юғары әхлаҡлы булып йәшәне, балалар уҡытты, өйө мәҙәниәт үҙәге булды. Инде өлкәнәйеп бөткәс, бабайы вафат булғас, яңғыҙлыҡҡа һәм ҡайғыға сыҙай алмайынса аҙлап ауыҙ итә башланы ла эскесегә әйләнеп үлде. Эскелек сире – үҙ-үҙеңде яйлап ҡына үлтереү. Башты боғалаҡҡа тығыу, вена ҡырҡыу кеүек үк бер сара. Әммә тәүгеләре тәүәккәллек талап итһә, быныһы үтә ҡурҡыныс кеүек түгел, упҡынға яйлап алып китә, сиккә еткәндә инде әҙәм балаһында ниндәйҙер кешелек сифаттары аҙ

ҡалған була. Йәмғәтселектең, шуны тәшкил иткән үҙебеҙҙең дә был мәсьәләгә мөнәсәбәте ҡатмарлы бит. Араҡы акциздары менән ҡаҙнаны тултырған дәүләт, уны һатып байыусы бихисап кешеләр тураһында әйтеп тә тораһы юҡ. «Сама белеп эскәндә уның бер зыяны ла юҡ» тигән эскеселәр. Эскелекте пропагандалау эскелек насар тигәнгә ҡарағанда мең тапҡыр күберәк. Теләһә ҡайһы рус фильмын ал: араҡыһыҙ бер проблема ла хәл ителмәй, шешәһеҙ бер табын да юҡ. Беҙҙең үҙ-ара шаярыуыбыҙ ҙа шул араҡы менән эскелек тирәһенән китмәй бит. Шул даръяла «араҡы насар» тигән фекер бер тамсы кеүек бөтөнләй юғалып ҡала. Ислам диненең генә был мәсьәләгә мөнәсәбәте эҙмә-эҙлекле – ярамай, тамсыһы ла харам! Шул йәһәттән тормошобоҙға ислам диненең әүҙем килеп инеүе, уның йәштәр араһында таралыуы – ыңғай күренеш. Мин алкоголде принципиаль рәүештә ауыҙына ла алмаған байтаҡ йәштәрҙе беләм. Был бик өмөтлө. Шул уҡ ваҡытта ауылдарҙа дәртләнеп донъя көткән, тормоштан тәм табып йәшәгән йәштәрҙең күбәйеүе лә ҡыуандыра. Уларҙың матур өлгөһө, балаларға дөрөҫ тәрбиә бирер тигән өмөт бар. Әҙип – Рух һаҡсыһы, тиһең. Әҙипте артыҡ идеаллаштырмайһыңмы? Ул Рух һаҡсыһы булырға тейеш талантлы шәхестәрҙең күбеһе шулай уҡ эскелек упҡынынан йотолдо түгелме ни? Әле ниндәйҙер бер тойғо миңә, эскелектең иң ҡурҡыныс осоро үтте, тигән кеүек.

**Фәнил КҮЗБӘКОВ:**

– Миңә ҡалһа, әле беҙҙең йәмғиәт иң ҡурҡыныс һыҙат буйынса бара: яҡтылыҡҡа ынтылырмы, ҡара упҡынға убылырмы – әйтеүе ҡыйын. Әҙиптәр – Рух һаҡсыһы, тиеүем уларға Күк (яҙмыш!) тарафынан ниндәй миссия йөкмәтелгәнлеген ҡайта-ҡайта иҫкә төшөрөргә теләүҙән...

Һинең дин менән ҡыҙыҡһыныуың, Тәүратты тәржемәләүең буйынса хәбәрҙармын. Былар һиңә тормошто, уның нигеҙҙәрен, кешеләр өсөн нимә ҡиммәт булырға тейешлеген асыҡлау өсөн кәрәкме, әллә һин үҙеңдә тыуған һорауҙарға яуаптар эҙләйһеңме? Бәлки, донъяны күҙаллауҙы киңәйтеү, тәрәнәйтеү ихтыяжынандыр был?

**Гөлсирә ҒИЗЗӘТУЛЛИНА:**

– Иҫке Ғәһедте тәржемә итеү менән шөғөлләнгән проектҡа башта мин осраҡлы ғына барып эләктем. Эштең нисек булырын, нимәнән ғибәрәт икәнен дә асыҡ белмәйенсә. Артабан тәржемә эшен яҡшы атҡарыу өсөн боронғо йәһүд телен, унан инглиз телен өйрәнергә кәрәк булды. Тәржемә эше барышында ғәйәт мауыҡтырғыс, талантлы, аҡыллы кешеләр менән таныштым, ҡайһылары менән дуҫлашыу бәхетенә лайыҡ булдым. Офоғом киңәйҙе, үҙ-үҙемә баһам күтәрелә төштө. Яҙышҡан кешегә быныһы ла бик мөһим. Иҫке Ғәһед тә (Тәүрат – уның бер өлөшө), Яңы Ғәһед тә, – Ҡөрьән кеүек үк, Аллаһы Тәғәлә тарафынан бирелгән изге китаптар, тиҙәр. Атеизм рухында тәрбиәләнгән быуын булараҡ, быға ышанмауыбыҙ, етди алмауыбыҙ ҙа ихтимал. Әммә кешелек тарихына әйтеп бөтөргөһөҙ ҙур йоғонто яһаған, меңдәрсә йылдар буйына миллиондарса кешенең иғтибарын яулаған, кешелектең иң бөйөк шәхестәрен ижадҡа илһамландырған был китаптарҙы уҡыу, тәржемә итеү зиһенде лә, күңелде лә һис шикһеҙ байыта. Шул уҡ ваҡытта асығын әйтәм: мин дин белгесе лә, диндар кеше лә

түгелмен, әлегә дин менән артыҡ ҡыҙыҡһынмайым да. Мин – тәржемәсе һәм үҙ эшемде мөмкин тиклем яҡшыраҡ башҡарырға ғына теләйем.

**Фәнил КҮЗБӘКОВ:**

– Ижад серле, сөнки әҙип, башлыса, үҙе генә күҙаллаған, хыялында ялралтҡан донъяны «асып» күрһәтә... Һинең «сер»ең нимәлә, Гөлсирә?

**Гөлсирә ҒИЗЗӘТУЛЛИНА:**

– Әҙәбиәт белгесе, тәнҡитсе булараҡ, был һорауҙы һинең үҙеңә бирер инем, Фәнил. Бармы ул Гөлсирә Ғиззәтуллинаның сере? Ғөмүмән, ундай яҙыусы, уның иғтибарға лайыҡ булырлыҡ берәй әҫәре бармы? Әллә бер сынаяҡ сәй эскәндә бисә-сәсә һөйләшкән юҡ-барҙы яҙған, аш бүлмәһе, бала табыу йорто тирәһендәге проблемаларҙан башҡаны белмәгән, бары тик бер төркөм, әлеге шул бисә-сәсәләр тарафынан ғына маҡталып йөрөгән бер графоман ғына бармы? Дөрөҫөн әйткәндә, минең ир-аттарҙан (уларҙы, үҙемә тәғәйен генә мөнәсәбәттәрен белмәгәс, хатта ҡәләмдәштәрем тип әйтергә лә баҙнат итә алмайым) ошонан ғәйре баһа ишеткәнем әлегә юҡ.

**Фәнил КҮЗБӘКОВ:**

– Серҙе үҙеңдән систереп, еңел ҡотолмаҡсы булғайным да... Күрәһең, айырым мәҡәлә әҙерләргә тура килерҙер... Әлегә иһә, әҙәбиәт өлкәһенән күпмеләр хәбәрҙар булғанлыҡтан, шуны ғына әйтәйем: Гөлсирә Ғиззәтуллина тигән әҙибәнең һәр әҫәрен ҡыҙыҡһынып көтөп алыусылар бихисап, бөгөнгө башҡорт прозаһының ғорурлығы булырҙай әҫәрҙәре лә бар («Ҡәҙерле бала», «Һөйөүем доғаһы» һ.б. хикәйәләре, «Һәҙиә», «Күбәләккә әйләнеү» повесы...) Ә иң-иңе әле яҙылмаған...

Һин әйткән проблемалар – көндәлек тормош бит. Шағир шул ваҡиғаларҙы шиғриәт кимәленә күтәрә алһа, яҙыусы, фәлсәфәүи дөйөмләштереп, йәшәйеш мәғәнәһен асыҡлаһа, теге миссияны үтәүгә өлөш шул була инде. Һинең хафаларыңды аңлайымдыр кеүек. Бындай шик-шөбһәләнеүҙәр ысын ижадсыны борсомай ҡалмайҙыр, моғайын... Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, әлеге Рух һаҡсыһы булырға тейешле ҡайһы берәүҙәр власть ялсыһына әйләнә шул. Ундайҙарҙы талантлы ҡәләмдәштең ижади яҙмышы уйландыра тиһеңме ни?!. Улар өсөн милләттең бөгөнгөһө лә, киләсәге лә ҡоро һүҙ генә...

**Гөлсирә ҒИЗЗӘТУЛЛИНА:**

– Был һорау менән үпкәмде белдермәйем. Ихлас әйтәм. Хатта үпкәләргә урыным да юҡ, сөнки, Аллаға шөкөр, иғтибар юҡҡа зарланыу гонаһ булыр ине. Әҙәбиәт белгесе Гөлфирә Гәрәева үҙенең хәҙерге прозаға арналған тәнҡит әҫәрҙәрендә бер ваҡытта ла мине онотмай. Беҙ Гөлфирә менән университетта уҡығанда бер бүлмәлә йәшәнек, әммә уның ижадыма булған иғтибарының бары беҙ шәхсән таныш булған өсөн генә түгеллеген беләм. Сөнки минең үҙемдең уға бер тинлек файҙа ла эшләгәнем юҡ. Талантлы татар шағирәһе, педагогия фәндәре кандидаты Лилиә Сәғиҙуллинаның «Күңел йорто» повесыма яһаған анализы, хикәйәләремә мөнәсәбәте хатта үҙемә лә бик ҡыҙыҡ булды. Ир-егеттәр араһынан Азамат Юлдашбаевҡа рәхмәт. Ғөмүмән, Азаматтың ара-тирә, юл ыңғайында ғына сәмгә тейеп алыуы ла файҙалы. Тик, иғтибар итһәң, һанаған кешеләрем

араһында башлыса ҡатын-ҡыҙҙар. Тимәк, беҙ үҙ-үҙебеҙҙе генә хеҙмәтләндерәбеҙме? «Ә ниңә, шулай булһа насармы ни?» тигән уйға килдем әле күптән түгел. Был фекергә килергә бер бик аҡыллы кеше менән һөйләшеү ярҙам итте.

Уңайы сығып, үҙем өсөн мөһим тип һанаған бер нисә хикәйәмдең руссаға тәржемәһен юғары зауыҡлы, әҙәбиәтте, ғөмүмән, донъя әҙәбиәтен, яҡшы белгән, үҙ аллы фекер йөрөткән, талапсан бер танышыма уҡыттым. Шунда мине бик ныҡ ғәжәпләндергән бер нәмә булды. Үҙем өсөн бик ҡәҙерле булған ике хикәйәмде ул шунда уҡ ситкә һалып ҡуйҙы: «Былары тик ҡатын-ҡыҙҙарса хикәйәләр. Хатта ҡатын-ҡыҙҙар менән булған айырым ваҡиғалар, дөйөмләштереү кимәленә лә күтәрелмәгәндәр. Шуға күрә улар минең өсөн бөтөнләй ҡыҙыҡ булманы», – тине ул. Ул быны, рәнйетмәҫкә тырышып, бик һаҡ, аяп әйтте. Шунда миңә ҡатын-ҡыҙҙар өсөн бөтөнләй ят булыу ихтималлығы беренсе тапҡыр ныҡлап барып етте. Әммә шул уҡ хикәйәләрҙең бик күп ҡатын-ҡыҙ уҡыусыларымдың күңеленә яҡын икәнен белгәнлектән, быны аңлау рәнйетмәне. Әлбиттә, бында уйландырырлыҡ икенсе бер нәмә бар: тимәк, мин был проблемаларҙы ир-егеттәрҙе лә тетрәтерлек кимәлдә яҙа алыу оҫталығына күтәрелмәгәнмен.

**Фәнил КҮЗБӘКОВ:**

– Һин бер-ике кешенең генә фекеренә таянып һығымта яһайһың булһа кәрәк... Әҙәбиәтте енескә ҡарап бүлеү шартлы ул. Әлбиттә, бар ҡатын-ҡыҙҙар өҫтөнлөк биргән авторҙар, бар күберәк ир-аттар иғтибарлағандары. Ләкин, миңә ҡалһа, төп критерий – әҫәрҙең талант тарафынан донъяға килеүендә. Шуға ла, ҡиблалар алышынған, үлсәмдәр буталышҡан, фекерҙәр аймылышҡан заманда уңын – уңға, һулын – һулға һалырҙай ғәҙел баһалар бик кәрәк. Инде танылған әҙиптең дә сейле-бешле, ә башлап яҙыусының бына тигән әҫәре булыуы мөмкин. Мәҫәлән, Рәмилә Торомтаеваның «Диван» хикәйәһе («Ағиҙел», 2010, № 4) үҙенсәлекле алымы менән диҡҡәтте ала: күпте күргән диван әҫәр геройы ролендә сығыш яһай. Авторҙың уны образ кимәленә еткерә алыуы, шартлылыҡҡа ышандырыуы ҡиммәт. Көнбайыш әҙәбиәтендә осраштырылған был алым, тимәк, беҙҙә лә ярайһы уңышлы ғына ҡулланылған. Рәмиләнең традицион алымдағы «Аҡҡа ғына төшһөн исемдәр» («Шоңҡар», 2010, № 5) хикәйәһе лә йылы тәьҫир ҡалдыра).

Бына ошондай шартлылыҡты уҡыусы ҡабул итерҙәй «уйната» алыуы менән Нияз Алсынбаевтың фантастикаға тартым әҫәрҙәре («Рамзай мажаралары», «Серле мосафир») иғтибарға лайыҡ.

Мөжәүир хәҙрәткә бәйле мауыҡтырғыс хикәйәләр серияһы ижад иткән Лира Яҡшыбаева «Бөтәбеҙгә бер Ер шары»нда дин менән фәнде «ҡауыштырып» ҡарарға ниәтләгән. Был уғата ҡатмарлы бурыс... Әлегә, ул уңышлы башҡарылған, тип әйтеп булмай. Әҫәр схема рәүешенән уҙып, тулы ҡанлы тормошҡа үҙ аяғы менән баҫа алмаған. Бындай әҫәрҙәр рәтенә Хәйҙәр Тапаҡовтың (инде исем-аты булған һәләтле генә әҙиптең) «Ҡурсаҡ» («Ағиҙел», 2010, № 1) хикәйәһен дә индерергә мөмкин. Әгәр ҙә әҫәргә «йән өрөлгән» булһа, ул, моғайын, ваҡиғалар һөрөлөшөнә ярашлы «Бала» тип исемләнер ине! Былай иһә ул, тышҡы ялтырауығы булһа ла, йәнһеҙ ҡурсаҡ рәүешенән уҙа алмаған...

Ә һин, Гөлсирә, ҡәләмдәштәрҙән кемдәрҙе иғтибарланың?

**Гөлсирә ҒИЗЗӘТУЛЛИНА:**

– Мәрйәм Бураҡаеваның «Арғымаҡ» тип аталған китабын һоҡланып, ундағы фекер тәрәнлегенә, һүрәтләнгән ваҡиғаларҙың фәһемлелегенә кинәнеп уҡыным. Фәрзәнә Аҡбулатованың әҫәрҙәре һәр саҡ ҡыҙыҡһыныу тыуҙыра, сөнки Фәрзәнә донъяға минең кеүек ҡарамай, фекер йөрөтөүе лә, яһаған һығымталары ла башҡаса. Шул уҡ ваҡытта уның менән ризалашмайынса ла сараң юҡ. Уның бына шул, ихтыярымды шаҡарып, үҙенә буйһондороу ҡеүәһе ҡыҙыҡ. Таңсулпан Ғарипованың ижадын сағыу бояуҙар менән, уларҙы ҡуйы һалып, иркен яҙған рәссамдың картиналарына оҡшатам. Уҡыусы булараҡ, уның талантының йоғонтоһонан күңел йәрәхәте алғаным да бар. Уның «Ҡыҙыл башмаҡтар» тигән хикәйәһен уҡып сыҡҡандан һуң тетрәнеүҙән ысын мәғәнәһендә ауырып киткәнемде хәтерләйем. Шул ваҡытта уның ижадының көслө йоғонтоһон тойҙом. Таңсулпанды шундай тәрәнтен, рухи инеш һуғара, ҡеүәт бирә һәм яҙғаны, көслө дарыу кеүек, күтәрә алғандарҙы сихәтләндерә, ә көсһөҙҙәрҙең күтәрә алмауы ла ихтимал шикелле тойолдо. Зөлфирә Ҡаҙаҡбаеваның сабыр аҡылы, күңел байлығы менән мул һуғарып яҙған хикәйәләрен яратам. Ә Зөһрә Бураҡаева бөтөнләй миңә таныш булмаған, әммә мин белергә теләгән донъя, ҡала йәштәре, ҡала менталитеты тураһында яҙа алыуы, яҙа башлағаны менән мауыҡтыра, әммә һаман да шуны ныҡлап дауам итеп алып китмәүе менән көйөндөрә лә. Әгәр ҙә беҙҙә меценатлыҡ күренеше булһа, берәй бай кеше аҡсаһын йәлләмәй, китап яҙҙырырға биргеһе килһә, иң беренсе сиратта Зөһрәне бикләп ултыртып яҙырға мәжбүр итергә кәрәк булыр ине, тип уйлайым.

Беҙ күптән инде, үҫмерҙәр өсөн әҙәбиәт юҡ, тип борсолабыҙ. Бөгөнгө үҫмерҙәрҙе мауыҡтырырлыҡ әҫәр яҙыуҙың ни тиклем ҡатмарлы булыуын үҙем, мәҫәлән, бик яҡшы самалайым. Улар хәҙер бөтөнләй башҡа, үҙҙәренә бер айырым донъяла йәшәй кеүек миңә. Әле Учалыға барғанда ана шул ауыр бурысты уңышлы атҡарып сыға алырлыҡ кеше менән таныштым. Әнисә Янбаева «Ирәмәлдә күк бүре» тигән тәүге китабы менән уҡыусыларҙың иғтибарын йәлеп иткәйне инде. Әле лә уның башы тулы фантазия, фекер йөрөтөүе заманса, донъяға ҡарашы үҙенсәлекле булыуы ҡыуандырҙы ла, һоҡландырҙы ла.

Бында мин махсус рәүештә ҡатын-ҡыҙҙарға ғына туҡталам. Сөнки былар – ҡәләмдәш булараҡ ҡараштарым.

Шулай ҙа баһаның ни тиклем субъектив булыуын һәм әҙәбиәттә вазифаһы буйынса ниндәйҙер күләмдә сәйәсәт яһарға тура килгән кешегә ни ҡәҙәрле һаҡ булырға зарурлығына нәшриәттә эшләгәндә төшөндөм, һәм был миңә ғүмерҙә лә онотолмаҫлыҡ һабаҡ булды.

Ул ваҡытта «Китап» нәшриәтенең нәфис әҙәбиәт редакцияһы мөдире урынбаҫары булып эшләй инем. Бер мәл бер прозаик ағай (хәҙер ул мәрхүм инде, ауыр тупрағы еңел булһын) килеп инде. Уның китабын әҙерләй инек. «Һеңлем, китабымдың тиражын өс мең генә итеп ҡуйғанһығыҙ. Бигерәк аҙ бит. Шуны бер нисек арттырыу сараһын күрергә кәрәк ине», – тине ул. Дөрөҫөн әйтергә кәрәк, ул ағайҙы, ғөмүмән, яҙыусы тип иҫәпләмәй һәм әҙәби даирәгә осраҡлы ғына килеп эләккән һәм биләгән вазифалары арҡаһында ғына яҙыусы тип иҫәпләнеп йөрөгәнгә һанай инем. «Өс

мең дә артыҡ күптер әле», – тигәндәй, эстән генә көләмһерәп ҡуйһам да, йөҙ йыртмаҫҡа тәрбиәм еткәнгә әле лә ҡыуанып бөтә алмайым. Ике-өс йылдан һуң бер районға командировкаға барҙым һәм ауыл китапханасылары менән осраштым. Әҙәбиәт, яҙыусылар тураһында матур әңгәмәнән һуң китапханасыларҙың береһе: «Һеңлекәш, ошондай уҡымлы китаптарҙы күберәк тираж менән нәшер итеп булмаймы? Ҡайтҡас етәкселәрегеҙгә шул хаҡта әйтегеҙ әле. Сират тороп уҡыйҙар бит. Ул сиратты теркәү өсөн хатта махсус журнал асырға тура килде. Берәйһе саҡ ҡына оҙаҡ тотһа, асыуланышырға торалар», – тине лә күп уҡыуҙан туҙып бөткән теге китапты күрһәтте.

Шунда мин үҙ зауығыңа ғына таянырға ярамағанды, һинең һүҙең, фекерең башҡа кешеләрҙең дә мәнфәғәтенә йоғонто яһағанда бик уйлап, һаҡ эш итергә кәрәклегенә төшөндөм. Кемдер ыуылдырыҡ ярата, уның һәр бөртөгөнән ләззәт алып, кинәнеп ашай. Кемдер уны ашҡа ла һанамай. Уның өсөн картуфтан да тәмле ризыҡ юҡ. Әҙәби әҫәрҙәр – рухи аҙыҡ, һәм беҙ һәр кемдең ихтыяжын ҡәнәғәтләндерергә тейешбеҙ. Быны аңлау бик шәп, бик ваҡытлы булды.

**Фәнил КҮЗБӘКОВ:**

– Ғүмер баҡый кешелектең иң бөйөк аҡыл эйәләре баш ватҡан һорауҙы бирәйем әле: йәшәү асылы ниҙә ул, Гөлсирә?

**Гөлсирә ҒИЗЗӘТУЛЛИНА:**

– Белмәйем... Бәхетле булыуҙалыр, тип уйлайым. Бәхетте, әлбиттә, һәр кем үҙенсә аңлай. Хатта бер кеше лә ғүмеренең төрлө мәлендә бәхетте төрлөсә ҡабул итә. Әммә күҙәткәнем бар: бары тик үҙенә йәшәйешме, Алламы, тәбиғәтме тарафынан һалынған орлоҡтарҙы үлтермәйенсә, уларҙы үҫтереп сәскә аттырған, үҙенең һәләттәрен тормошҡа ашырған кешеләр, ниндәй генә ауырлыҡтарға осрамаһын, тормоштан һәм үҙҙәренән ҡәнәғәтерәк була.

**Фәнил КҮЗБӘКОВ:**

– Башҡорт әҙәбиәтенең киләсәге бармы? Һин нисек уйлайһың?

**Гөлсирә ҒИЗЗӘТУЛЛИНА:**

– Яңы шарттар – яңы талаптар тыуҙыра. Тормош үҙгәрә, уҡыусы үҙгәрә, тимәк, шул уҡыусының ихтыяжын үтәгән, уны алға әйҙәгән яңы яҙыусылар барлыҡҡа килә. Ә ул ниндәй телдә, ниндәй саралар ҡулланып яҙыр – быныһы икенсе мәсьәлә. Элекке ҡараштарҙан арынған яҙыусылар башҡортса яҙырмы һәм уларҙың элекке ҡараштарҙан арынған уҡыусылары булырмы? Ғөмүмән, тормош процестары менән идара итеп буламы, әллә беҙ уңышлы һәм уңышһыҙ ғына итеп уларға эйәрә генә алабыҙмы?

Миңә, яҙыусы булараҡ, бөгөн нимә эшләргә? Иртәгә нисек булыры билдәһеҙ, тип яҙыуҙан туҡтарғамы, әллә, яҙмайынса булдыра алмайым икән, ҡулымдан килгәнсә яҡшыраҡ итеп яҙыуҙы дауам итергәме? Яҙмай булдыра алмайым икән, был минең тормошомдоң ләззәте икән, ҡасан ләззәттән туҡтап ғазапҡа әйләнгәнсә – яҙасаҡмын. Мин бары шуны ғына беләм.

**Рәүеф**
**НАСИРОВ**

## ЯРҘАМ ЭҘЛӘП – ШӘРЕҠКӘ



*Ғәбделхәй Ҡорбанъәлиев.*

Арыһаң, асығып хәлдән тайһаң, артыҡ бер аҙым яһауы ла ауыр. Бында иһә барыр урының айырым аҙымдарҙан ғына тормай – улар бихисап. Бөтөн Себер киңлектәрен, тайгалар аша үтеп, Байкал аръяғына, Маньчжурияға барып етергә, көрт баҫҡан һәм боҙға әйләнгән тайғаҡ юлдарҙан биш мең саҡрым араны үтергә кәрәк. Аттарға атланып, унан саңғыға баҫып, 1919 йылдың аҙағы – 1920 йылдың яҙғы өҙәремендә үтә ошо юлды өс меңгә яҡын башҡорт егете. Ни эҙләп бара улар Алыҫ Көнсығышҡа, Япон диңгеҙе ярҙарына? Ниндәйерәк файҙа күрергә ниәтләнәләр?

Киләсәк күҙ йомдора, ти халыҡ. Һәр хәлдә, әлегә хәтле башҡа һыймаҫлыҡ ҡатмарлы поход-ҡа сыҡҡас та күп яугирҙар биргәндер үҙҙәренә үҙҙәре был һорауҙы. Әммә өмөт тигән нәмә йөрөтә шул һәр бәндәне. Ҡоралды башҡорттар хәрәкәтен ойоштороусыларҙы ла йонсотҡан булырға тейеш ошо һорау, әммә уларҙы шул уҡ ышаныс алға әйҙәй. Ғәҙеллектең барыбер еңәсәгенә, донъя йәмәғәтселегенең башҡорт халҡына ярҙам итәсәгенә булған ышаныс.

Буранлы, һыуыҡ айҙарҙа дауам иткән был хәрби хәрәкәттең үҙе тураһында һүҙ башлағанға тиклем Башҡортостанда ниндәй хәлдәр булғанын саҡ ҡына иҫкә төшөрөп үтәйек.

Октябрь инҡилабынан һуң, 1918 йылдың 15 ноябрендә Башҡорт Үҙәк шураһы Башҡортостан биләмәһен Рәсәй Федератив Республикаһының автономиялы өлөшө тип иғлан итә. Ҡарарҙы шул уҡ йылдың 8 – 22 декабрендә үткәрелгән Ҡоролтай ҙа тәсдиҡ итә. Ошо мәсьәлә буйынса һөйләшеп килешеү өсөн Шура

---

*Рәүеф Насиров (1935) Учалы районының Ҡужай ауылында тыуған. Оҙаҡ йылдар матбуғат органдарында эшләне. Яҙыусылар союзы һәм Журналистар союзы ағзаһы. Авторҙы 75 йәше менән ҡотлайбыҙ!*

рәйесе Шәриф Манатов Петроградҡа юллана һәм, Халыҡ Комиссарҙары Советы Рәйесе В.И. Ленин менән аңлашҡандан һуң, большевиктар фирҡәһе сәйәсәтенә таяныуын белдерә.

Ырымбурҙа башҡорт милли хәрәкәте башында ҡалған Әхмәтзәки Вәлидигә Ш. Манатовтың Советтар яғына күсеүе оҡшамай, ул үҙенең большевиктарға ҡаршылығын белдерә. Тиҙҙән башҡорт хөкүмәте менән бергә ҡулға алынған Вәлидов төрмәнән ҡотолоу менән үк Силәбегә аҡ чехтарға ҡасып, большевиктарға ҡаршы ҡоралл көрәш ойоштора. Ниһайәт, Совет хөкүмәте Башҡорт автономияһын танырға әҙерлеген һәм Ҡыҙыл Армия составында үҙ аллы башҡорт хәрби частарын булдырыуға ризалығын белдергәс, 1919 йылдың 18 февралендә Башҡорт хөкүмәте һәм Башҡорт корпусы ҡыҙылдар яғына сыға. Улар араһында Муса Мортазин полкы ла була.

Ләкин Ҡыҙыл Армия етәкселегенең, урындағы большевиктарҙың мәкерлелеге тәүге көндәрҙә үк күренә. Башҡорт полктары (Муса Мортазиндың 1-се полкынан башҡа), килешеүгә ҡарамаҫтан, ҡоралһыҙландырыла, ризалашмаған һалдаттарҙы сығарып аталар, иҫән ҡалғандары хәрби әсирҙәр сифатында лагерҙарға оҙатыла. Уларға ҡарата көс ҡулланалар, йәберләйҙәр, кейемдәрен тартып алалар. Быларҙың барыһы ла документтарҙа теркәлгән.

Ҡыҙыл Армия етәкселеге Муса Мортазин һыбайлыларының ҡоралһыҙланыуын талап итә, әммә башҡорт сәрдары, ныҡлыҡ күрһәтеп, үҙ полкының кәмһетелеүенә юл ҡуймай. Апрель башында 1-се полк тағы аҡтар яғына сығып китә. Сәбәбе шул уҡ: ҡыҙыл комиссарҙарҙың башҡорт халҡынан көлөүе, төрлөсә йәберләүе, йыртҡыслыҡтар эшләүе, ғәйепһеҙ башҡорттарҙы аттырыуы, ҡатын-ҡыҙҙы мәсхәрәләүе. Муса аҡтар яғына сығып полкын да, үҙен дә һаҡлап алып ҡала. Уның төп маҡсаты – үҙ халҡы менән бергә булыу, уны яҡлау.

Арғаяш тирәләрендә тупланған 3-сө башҡорт полкының Алыҫ Көнсығышҡа юлланыу сәбәптәре лә шуға оҡшаш. Советтар менән ваҡытлыса ғына килешеү төҙөлгәнен аңлаған Зәки Вәлиди ҙә, күпмелер ваҡыт уҙғас, капиталистик илдәрҙең, айырыуса Япониянын ярҙамға килеү мөмкинлеген иҫенән сығармай, ошо йәһәттән пландар ҡора. Бында Башҡорт шураһы ағзаһы итеп һайланған Ғәлимйән Тағандың иҫтәлеген килтереү урынлы. “1919 йылдың 7 февралендә мине Вәлидов үҙенә саҡыртып алды һәм парламентер сифатында ҡыҙылдарға барып килергә тәҡдим итте, – тип яҙҙы ул. – Башҡорттарға нисек тә булһа үҙҙәренең ерле автономияһын һаҡлау мөһим ине. Сөнки адмирал Колчак та беҙҙе хәрби-ялан судына бирергә, ә Башҡорт хөкүмәтен таратып ебәрергә ҡушты. Берҙән-бер юл ҡалғайны – “үҙебеҙҙең” ҡан дошмандарға, большевиктарға, күсеү. Шуның өсөн генә булһа ла: әгәр большевизм оҙаҡ һаҡланмаһа, беҙ большевизмды файҙаланып ҡалабыҙ; һәм, киреһенсә, әгәр ул нығынһа һәм оҙаҡ йәшәһә, быны менән бигерәк тә ризалашырға тура килер. Мин уға, Силәбегә (Ҡорбанғәлиевҡа тип аңларға кәрәктер – **Р. Н.**), бәлки, бармай торорға кәрәктер, Омскиға уның менән бергә китеү артығыраҡ булыр, тигән тәҡдим әйттем, әммә Вәлидов килешмәне. Уның Дутов менән дә, Шәреҡ менән дә эштәре бешмәй ине, шуға күрә хәле шәптән түгел ине. Ә мөҙҙәте етеп, Көнсығыштан беҙҙең өсөн яраҡлыраҡ хәрәкәттәр башланһа, беҙ шуларҙы ҡаршыларға өлгөрөрбөҙ...” “Кисен Вәлидов мине тағы саҡыртып алды. Был юлы ҡәтғи талап ҡуйып, әйтелгән бурысты үтәргә ҡушты. Мин шул уҡ төндө ҡайтып киттем – Силәбегә ҡасыуҙы артығыраҡ күрҙем”.

Ғ. Тағандың яҙыуынса, З. Вәлиди ҡыҙылдар яғына сыҡҡанға тиклем, йәғни Темәстә торғанда уҡ, ҡыҙылдарға күсеүҙе ваҡытлыса сара тип һанаған һәм, алты-ете хөкүмәткә хеҙмәт итеп, береһе менән дә рәтле бәйләнеш булдыра

алмағас, З. Вәлиди Урта Азияға, баҫмасылар яғына, китергә мәжбүр була. Әлегә хәтлем атҡарылған эштәрҙән ҡырҡа баш тартып, яңынан ҡоралды көрәш юлын һайлау Совет хөкүмәтенең милли сәйәсәтенә ҡарата ризаһыҙлыҡ артыуҙан ғына түгел, ә З. Вәлидиҙең төп хыялына барып ялғаныуынан да эшләнә был аҙым. Күңел түрендә йөрөгән ул хыял – Башҡортостан, Төркөстан, Ҡаҙағстан, Сибирия һәм казачий хөкүмәттәрен берләштереп, Рәсәйгә ҡаршы торорлоҡ көслө "Шәрҡи иттифаҡ" берләшмәһен төҙөү. Буш уйҙырма булмай был. Ошо хаҡта 1917 йылдың 8 – 20 декабрендә "Башҡорт тауышы" гәзите лә асыҡтан-асыҡ яҙып сыға. Халыҡтарҙың асыуы көсәйеүенә сәбәп етерлек ине: Граждандар һуғышы осоронда аслыҡтан, ауырыуҙарҙан Рәсәй тик 1917 – 1922 йылдарҙа ғына ла үҙенең һәр унынсы кешеһен юғалта – Рәсәйҙең 190 миллионлыҡ халҡынан 18 миллион кеше. Ә башҡорт халҡы ике мәртәбәнән дә артыҡ кәмей: 1914 йылда 1,5 миллион башҡорт булһа, 1923 йылға уларҙың 600 меңе генә иҫән ҡала. Геноцид йә иһә тотош халыҡты юҡ итеүҙе маҡсат итеп ҡуйған дәүләт сәйәсәте түгел инеме был? Шуны ла иҫтән сығарырға ярамай: китаптарҙа, матбуғатта ҡабартылып күрһәтелгән Ҡыҙыл Армия Башҡортостанда үҙен баҫҡынсы кеүек тотто: әлегәсә тыныс йәшәгән ауыл халҡының ҡаны йылғалар булып аҡты.

Бына ошондай енәйәтсел режимға ҡаршы яңынан ҡорал күтәргән һәм үҙ маҡсатына ирешеү өсөн Төркөстандың тау-сүлдәренә юлланған Вәлидиҙе ғәйепләп буламы? "Башҡортостандан да ун дүрт арҡадашым бөгөн үк Төркөстанға һәм Ҡаҙағстанға алдан билдәләнгән урындарға юлға сығасаҡ, – тип яҙа ул "Хәтирәләр"ендә. – Бер төркөм арҡадаштарым Ҡаҙағстанда һәм Төркөстанда көрәшкә әҙерләнеү эштәре менән шөғөлләнде. Ноябрҙә улар Хорезмдың Ҡуңғрад ҡалаһында йыйылырға, ә икенсе төркөм, Үзбәкстандағы баҫмасылар араһында ойоштороу эштәрендә ҡатнашҡандан һуң, 1921 йыл башында Бохарала тупланырға тейеш, тип һүҙ ҡуйыштыҡ..."

Күренеүенсә, З. Вәлидиҙең ниәттәре ваҡ түгел – бөтөн Урта Азияны күтәреү. Ә бына башҡорт милли хәрәкәтенең икенсе тармағы (шулай атарға батырсылыҡ итәйек. Уға Силәбе яҡтарында, Барын-Табын, Ҡара-Табын, Ялан Ҡатай башҡорттары араһында абруйы ҙур булған Ғәбделхәким ишандың улдары етәкселек итә – **Р. Н.**) Совет власы менән көрәшеүҙе башҡасараҡ күҙ алдына килтерә, улар туранан-тура буржуаз Японияға өмөт бағлай. Дөрөҫ, улар йәшәгән Арғаяш, Ҡоншаҡ төбәктәрендә Силәбе, Златоуст большевиктарының йоғонтоһо ла көслө була. Бында ярайһы уҡ ҡыҫҡа ваҡыт эсендә Совет власы урынлаша, шул уҡ ваҡытта милли хәрәкәт яҡлылар уңышлы ғына ҡоралды көстәр туплай. Сары станцияһы, Ҡуяш ауылы эргәһендә, Кыштым, Екатеринбург йүнәлешендә улар ҡыҙылдарға ҡаршы көрәш йәйелдереп ебәрә. Асылда тап бына Ҡорбанғәлиевтар, бигерәк тә капитан дәрәжәһенә күтәрелгән Һарун Ҡорбанғәлиев, тырышлығы менән ошонда Башҡорт ғәскәренең иң ҡыйыу 3-сө полкы ойошторолоп, ҙур ғәскәргә нигеҙ һалына. Ошо хәрби көстәргә ҡарата тупланған дөйөм ҡарашты сағылдырыу өсөн Себер ғәскәрҙәре атаманы Анненковтың 79-сы әмеренә мөрәжәғәт итәйек.

"Ғәскәрем араһында мобилизация буйынса алынып, үҙ иректәре менән ҡалған башҡорттар ҙа һуғышты, – ти атаман. – Ҡулдарындағы ҡорал менән үҙ хоҡуҡтарын яҡлау өсөн баш күтәргән Башҡортостан улдары, форсаттың әһәмиәтле булыуын аңлап, кейем вә аҙыҡ алмаған хәлдә, һуғыштың бөтөн ауырлығын егетлек вә тыныс ҡалып күтәрҙе. Башҡорттар үҙҙәренең Башҡортостанының инсаф (ғәҙел) вә шәрифле (иғтибарлы) балалары лияҡаттарын (лайыҡлы булыуҙарын) күрһәтте. Былар һәләкәт вә ауырлыҡтарға ҡурҡмай ҡарай ала. Дошманды ла туҡмай беләләр. Ауыр вә фиҙакәрәнә хеҙмәте өсөн прапорщик

Тереғолов менән капитан Мужаловҡа, бөтөн офицерҙарға вә һуғышҡан бөтөн башҡорттарға самими (ысын күңелдән) рәхмәтемде белдерәм. Автономиялы Башҡортостанға вә йәш башҡорт әрдүсенә парлаҡ муафәҡиәт (уңыш) теләйем. Былар ирекле халыҡтың хоҡуҡтарына тейергә теләгән һәр берәүҙең ҡото осорлоҡ булһын".

Икенсе документ – Ырымбурҙа поляк ғәскәре төркөмдәрен ойошторған офицер В. Панковичтың хаты.

"Йәш Башҡортостан ғәскәренә сәләм! – тип башлай ул һүҙен. – Хаҡиҡи хөрриәт өсөн көрәш майҙанына яңы бер ҡеүәт атылды: башҡорт милләте! Был милләт хәҙергә ҙур түгел, фәҡәт рухы илә бик көслө ғәскәр етештерҙе. Был ғәскәр. йәшлегенә ҡарамайынса, үҙен Екатеринбург, Орск, Һамар вә Аҡтүбә фронттарында бик яҡшы яҡтан күрһәтте, көсөн танытты.

Башҡорттар ҡатнашҡан һуғыштарҙа булған кешеләр башҡорттарҙың мәтанәт (ныҡлы) егетлек вә саҙаҡаттары хаҡында бик ҙур ихтирам менән һөйләй. Улар һуғыша ла белә, һис ҡурҡмай, һөжүм ҡылырға һәләтле. Кәрәк булһа, ысын ҡаһарман кеүек үлә лә белә.

Был хасияттар (сифаттар), әлбиттә, айырым тырышлыҡ, бер тәрбиә арҡаһында түгел, былар һис шөбһәһеҙ халыҡтың үҙ тәбиғәте, бар халыҡтың хасиятылыр..."

Төрмәнән сығарылғас та З. Вәлидиҙең шунда уҡ Силәбегә китеүе бер ҙә осраҡлы түгел: берҙән, Силәбеләге аҡ чехтар менән бәйләнешкә инеп, уларҙан тиҙерәк ярҙам алыу; икенсенән, Ырымбурҙа һаҡ аҫтындағы Башҡорт хөкүмәтенең эшен дауам иткән Арғаяш зыялылары менән уртаҡ тел табып, башҡарма власть эшмәкәрлеген дауам иттереү; өсөнсөнән, Башҡорт ғәскәрен ойошторорға тотонған Ҡорбанғәлиевтарға таяныу.

Шуныһы бик кинәндерә ине: Вәлиди Силәбегә килгәнгә тиклем үк Нуриағзам Таһиров, Ғәлимйән Таған, Ғәбделҡадир Сөләймәнов, Ғәбделхәй Иркәбаев кеүек арыҫлан егеттәр эште ойоштороп та ебәргән. Барыһы ла – был төбәкте үҙҙәренең биш бармағы кеүек яҡшы белгән Арғаяш, Ҡоншаҡ, Ялан-Ҡатай яҡтары егеттәре. Халыҡты ысын-ысындан ихтилалға күтәргән һымаҡ улар. Төньяҡ-көнсығыш олоҫ егеттәре, мобилизация иғлан итеүҙе көтөп тә тормайынса, ҡулдарына ни тура килде шуны тотоп күтәрелеп сыҡҡан. Ситтәр тарафынан үҙҙәренең ҡыҫыла башланыуына түҙеме ҡалмаған урындағы халыҡ, борондан ҡалған ғәҙәт буйынса, башҡортлоғомдо онотмағанмын әле, тип сәмләнеп, илемде ат ҡороғо менән булһа ла ҡурсалармын тип, яуға сыҡты.

Әхмәтзәкиҙең, асылда сит ергә килеп, артыҡ ауырлыҡтарға осрамайынса ғына дәүләт эшен ҡайтанан яйға һала алыуына, халыҡ күтәрелеше тураһында мәғлүмәттәр йыйып, уға йүнәлеш бирә башлауына һис тә аптырарға ярамай. Ырымбурҙа саҡта бөтөнөҙ ыҙғыштар араһында башы ҡайнаған, аҙым һайын һатлыҡ шивинистарҙың этлектәренән арый төшкән кешенең бындағы ысын башҡорт офицерҙарының, урыҫ араһында бик үк юғалып бөтмәгән милли зыялыларҙың ярҙамын тойоу күңелгә ятышлы ине.

Төньяҡ-көнсығыш башҡорттарының бер төптән күтәрелеү сәбәптәрен уларға бөтөнләй ят кеше, Силәбе Халыҡ власының хеҙмәт министры социал-демократ Майскийҙың һүҙҙәренән дә күрергә була. Ул шулай уҡ инандырырлыҡ итеп большевиктарҙың сәйәсәтен ғәйепләй, чехословактарҙың маҡсатын да асып һала. "Николай заманында дүрт йыл буйына һуҙылған һуғышта, – ти ул, – арыған һалдаттарға ситтән кем генә булһа ла солох вә икмәк вәғәҙә иткән, улар шуның артынан эйәрҙе. Хакимиәткә ҡыҙыҡҡан сәйәсмәндәрҙең бөтөн файҙаланған нәмәләре шул ине. Ләкин улар, эш башына ултырып алғас, ауыҙ күпертеп

вәғәҙә иткән нәмәләрҙең береһен дә үтәй алманы, киреһенсә, бер генә фәкиргә лә бер тинлек файҙа килтермәне. Киреһенсә, уларҙы бер-береһенә ҡаршы ҡотортто, һуғыштырҙы. Бына шундай властың дауам итеүе бер кем ҡаршыһында ла мөмкин вә мөҡәбул түгел ине. Һәм шулай килеп сыҡты ла.

Чехословактар, Рәсәйҙең аяҡтан йығылырға торғанын күреп, ҡәрҙәштәрен быңдай һәләкәт-болаларҙан ҡотҡарыр өсөн, бөгөн Силәбе ҡалаһын да ҡулдарына алды. Улар, шуралар хөкүмәтенә Германияның ныҡ йоғонто яһауын күреп, бында Рәсәйҙе залимдар ҡулынан таҙартыр өсөн эшкә кереште... Шулай уҡ улар Силәбе районындағы башҡорттарҙың большевиктар тарафынан нисек таланғанын, иҙелгәнен күреп, башҡорттарҙың аңлы егеттәре, чехословак һәм казактар менән аңлашып, башҡорттарҙы бәләнән ҡотҡарыу өсөн "Народная власть" янында Башҡорт шураһы төҙөп, эш башланы..."

Башҡорт хөкүмәтенең генә түгел, ошоғаса йәшәп килгән Арғаяш кантон Советының да чехословактар ҡанаты аҫтына килеп һыйыныуы хаҡында әйтеп үтергә кәрәк. Т. Ғисмәтиҙең яҙыуынса, яңы стиль менән 15 майҙа Совет власы осоронда 16 олоҫто берләштергән Арғаяш кантон Советы ағзалары Силәбе өйәҙ комиссариаты тарафынан ҡулға алына. Махсус комиссия Арғаяш кантон Советын контрреволюцион эшмәкәрлектә ғәйепләй һәм уны юҡ итергә ҡарар сығара. Совет ағзалары, ҡарар ревтрибунал тарафынан раҫланғанға тиклем Мәтәл ауылынан бер ҡайҙа ла сыҡмайбыҙ, тип ҡултамғаларын бирә. Ә инде чехословактар Силәбегә килеп ингәс, башҡорттар ҡайтанан йыйын үткәрергә була. Ул 2 июндә Ғәбделхаҡ Ғәбитов рәйеслегендә үтә һәм, "чехословактарға ышаныс белдерергә, улар кеше талаусы Совет хөкүмәтен емерер өсөн бер таяныс булыр тип, был хәрәкәткә ҡушылып китә". Икенсе көндө кантон йыйыны вәкилдәре сифатында Сәғит Мирасов, Ғәбделхаҡ Ғәбитов, Нуриағзам Таһиров чехтар менән аңлашыу өсөн Силәбегә китә. Делегаттар әйләнеп ҡайтып, һөйләшеүҙең һөҙөмтәһен һәм чехтарҙың да халыҡ хөрриәте, социализм өсөн көрәшеүҙәрен һөйләп биргәс, йыйын Силәбе Халыҡ власы эргәһендә "Башҡорт шураһы" төҙөргә ҡарар сығара. Сәғит Мирасов, Нуриағзам Таһиров, Тәҡи Ғисмәти, Ғәбделхаҡ Ғәбитов, Фәтих Сөләймәнов, Ғариф Мөхәмәтйәровтар яңы ойошманың ағзалары булып һайлана.

Арғаяшта ойошҡан "Башҡорт шураһы" 3 июндә, Силәбегә килгәс, "Дадин" исемле гәзит нәшер итә башлай (уның өс һаны сығып өлгөрә). Ул башҡорт халҡына төрлө хитабнамәләр менән мөрәжәғәт итә. Хәрби отрядтар бүлеген ойоштора һәм тәү тапҡыр мосолман ротаһын төҙөй, ләкин һуңғыһы, большевиктарҙың ҡотҡоһона бирелеп, тарҡала. Шул уҡ ваҡытта мөрәжәғәт менән танышҡан Султай, Мәтәл олоҫтары, йәштәргә мобилизация иғлан итеп, уларҙы Силәбегә оҙата. Был хикәйәттән шундай көтөлмәгәнерәк һығымта яһарға мөмкин: Ырымбурҙа ҡулға алынып, таратып ебәрелгән Башҡорт хөкүмәтенең эше бөтөнләй үк һүнеп ҡалмай, уның вазифаларын Сәғит Мирасов, Нуриағзам Таһиров, Ғәбделхаҡ Ғәбитовтар асылда өҫтәренә ала һәм Силәбелә "Башҡорт шураһы"н ойоштора. Әхмәтзәки Вәлидиҙең дә ашығып Силәбегә килеп етеүенең тағы бер сәбәбе шул булырға тейеш: башланған эшкә рәсми төҫ биреп, уны үҫтереп ебәреү.

Әхмәтзәки Вәлиди хөкүмәтенең ҡайһы бер ағзалары ла килеп етеп, төбәктә иғлан ителгән мобилизацияны дөрөҫ тип таба һәм башҡа башҡорт олоҫтарына ла фарман тарата. 1918 йылдың 27 майында Нуриағзам Таһировтың ҡултамғаһы менән "большевиктар тарафынан туҙҙырылған Башҡорт Милли мәркәз (үҙәк) шураһы вә уның бүлектәре булған төбәк башҡорт шураларының да тергеҙелеүе, ләкин мәркәз шура ағзалары йыйылғансы уның вазифаһын Силәбелә эшләгән башҡорт шураһы үҙ өҫтөнә алыуы тураһында" иғлан баҫыла. "Мәркәз

шура рәйеслегенә һайланған Сәләх әфәнде Атнағолов бында булмағанлыҡтан, уның урынына Сәғит Мирасов һайланды, – тиелә унда. – Мәркәз шура рәйесе урынбаҫары Әхмәтзәки әфәнде хөкүмәт эштәре менән мәшғүл булып, истиғфа ҡылыу (ғәфү үтенеүе) сәбәпле, ул мәркәз шураның фәхри (почетлы) рәйеслелегенә, ә уның урынына рәйес урынбаҫары итеп Нуриағзам Таһиров һайланды".

Башҡорт хөкүмәте Силәбенең Халыҡ власы комитеты менән араны өҙмәй – унда үҙенең вәкиле итеп прапорщик Ғәлимйән Таҡановты ҡалдыра. Шул уҡ көндө яңы фармандар сығарылып, Н. Таһировҡа малиә (финанс) бүлеге менән идара итеү бурыстары йөкмәтелә. Башҡортостан хөкүмәтенең хәрби шөғбәһе хозурында Хәрби совет бүлеге төҙөлөп, уның етәксеһе итеп поручик Ғәбделхаҡ Ғәбитов, сәркәтибе итеп прапорщик Тереғолов, ағзалары итеп Ғәлимйән Таҡанов, прапорщик Ғариф Мөхәмәтйәров, Тәҡи Ғисмәти, Ғәбделхәй Иркәбаевтар һайлана.

Әхмәтзәки Вәлидиҙең Силәбегә килеп, тиҙ арала Башҡорт хөкүмәтенең эшмәкәрлеген һәм хәрби эштәрҙе көйләп ебәреүенә тап бына ошо зыялыларҙың фиҙакәрлеге сәбәпсе. Уларҙың тырышлығынан башҡа бер ни ҡылып булмаҫ ине, моғайын. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, был төбәк зыялыларының башҡорт автономияһын яулаған саҡта уйнаған ролен тарихсыларыбыҙ әлегә саҡлы ентекле өйрәнмәгән. Әхмәтзәки Вәлиди үҙе лә "Хәтирәләр"ендә улар хаҡында ни эшләптер тулыраҡ һөйләп бармай.

Силәбелә ҡайтанан аяҡҡа баҫтырылған хөкүмәт эргәһендә ысын башҡорт офицерҙары ғына түгел, ә милли хәрәкәттең асылын, шулай уҡ чехословактар сәйәсәтен аңлатыусы бер төркөм талантлы пропагандистар – Т. Ғисмәти, Ф. Сөләймәнов, В. Ғәбитов кеүек журналистар һәм шағирҙар төркөмө туплана.

Ошо осорҙа ҡыҙылдарҙың иң көслө ғәскәренең береһе – Н. Каширин, В. Блюхер отрядтарына ҡаршы Үрге Яйыҡ, Белорет тирәләрендә Әмир Ҡарамышев, Муса Мортазин уңышлы хәрәкәт итә. Златоуст, Сысерть заводтары эргәһендә лә ҡыҙыу һуғыштар бара.

Ә. Вәлидиҙең төрмәнән сығып, Ырымбурҙан киткәненә ике ай уҙа. Ике ай. Бер уйлаһаң, күп ваҡыт та түгел. Ә атҡарылған эштәрҙе барлаһаң, иҫ китерлек! Сөнки төрлө тарафтарға таралышып бөткән һәм йәшенеп йөрөгән хөкүмәт ағзаларын табып, ҡайтанан дәүләт органдары тергеҙелә, уларҙың эше яйға һалына. Урал аръяғы башҡорттары бер йоҙроҡҡа туплана. "Ваҡытлы" тип аталһалар ҙа, тирә-йүндәге хөкүмәттәр менән бәйләнеш булдыра. Яңы Башҡорт хөкүмәте ҡорал таба, ғәскәр ойоштора. Көслө ғәскәр, һәм вәлидовсылар башҡорт халҡы бәхете өсөн һуғыш аса. Аяуһыҙ һуғыш. Уны күптәр танырға мәжбүр була. Һөҙөмтәлә Башҡорт автономияһына ғәмәли нигеҙ ташы һалына. Бына ошонда – Силәбе һәм Арғаяш яҡтарында.

Әхмәтзәки Вәлидов 1920 йылда (быныһы икенсе тапҡыр) Тамъян-Ҡатай кантоны аша Силәбегә үтеп китә. Уның Учалы яҡтары менән бәйләнешкә инеүе быны менән генә тамамланмай. Был килеүе Вәлидовтың Төркөстанға китергә әҙерләнеүе менән бәйле булһа кәрәк (быны беҙ фараз рәүешендә яҙабыҙ – **Р. Н.**).

Хәҙер инде Японияға китеүселәр хаҡында. Ләкин иң башта Ҡорбанғәлиевтарға ҡағылышлы белешмә. Был зат ифрат ҙурға оҡшай. Беҙгә уларҙың иң өлкәндәренән бер ни тиклем таныш булғаны – Ғәбделхәким хәҙрәттер. Сығышы менән Ҡурған яғынан, Ялан-Ҡатай башҡорттарынан. Арғаяш мөхитенә килеп урынлашып, шул мосолмандар араһында тәғлим-тәрбиә менән мәшғүл була. Әммә хәҙрәт ислам дине тәғлимәте, инсафлыҡ тәрбиәләү менән шөғөлләнһә лә, йөрәгендә мәкерлек ағыуы ла йөрөткән булһа кәрәк. Уның был сифаты Зәйнулла хәҙрәт Рәсүлигә ҡарата булған мөнәсәбәтендә сағыла. Тамъян-Ҡатай кантонының (хәҙерге Учалы районы уға ҡараған – **Р. Н.**) Аҡҡужа ауылында дини

йолаларҙы атҡарыуҙа, балалар уҡытыуҙа ғәжәп алдынғы аҙымдар яһаған Зәйнулла хәҙрәт Рәсүли хаҡында диндәштәре: “Зәйнулла үҙенең остазы Ғәбделхәкимде уҙҙырып ебәрҙе”, – тигән хәбәр тарата. Рәсүлиҙең уңыштарына Ғәбделхәким көнсөллөк кисерә һәм ул, үҙе ише бер нисә мулла менән бергәләп, “Зәйнулла диндәштәрҙе юлдан яҙҙыра, батша хөкүмәтенә ҡаршы әрме тупларға йыйына” тип шикәйәт яҙыуҙа ҡатнаша һәм Зәйнулла хәҙрәтте һөргөнгә ебәреүгә өлгәшә.

Алма ағасынан йыраҡ төшмәй, тиҙәр. 1859 йылда Силәбе өйәҙенең Миҙиәк ауылында тыуған, ошонда уҡ һәм артабан Троицкиҙа уҡып ҡайтҡан, ғүмерен муллалыҡ хеҙмәтенә бағышлығын Ғәбиҙулла ла атаһын ҡабатлай. Арғаяш яҡтарының тарихын өйрәнгән һәм ғүмеренең һуңғы йылдарын Бешкәк ҡалаһында үткәргән журналист Тайфур Көсөков та, тарихсы Мөхәмәҙиә Ғәбиҙуллин да, Силәбе ҡалаһында йәшәүсе Ҡәйүм Ҡушаев та (Башҡорт Үҙәк Башҡарма Комитеты рәйесе Хафиз Ҡушаевтың ҡустыһы), Тажиҡстандан Тойғон Таһиров та (Нуриағзам Таһировтың улы) был юлдарҙың авторына яҙған хаттарында Ғәбиҙулла Ҡорбанғәлиевҡа сәйәси яҡтан да, шәхси планда ла кире баһа бирҙеләр, алдынғы ҡарашлы йәштәрҙе эҙәрлекләүенә миҫалдар килтерҙеләр. Ләкин аҡһаҡ ишандың холоҡ-фиғеленең нигеҙе күпкә ҡатмарлы. Ҡорбанғәлиевтар ғаиләһенең тормошон өйрәнеүсе тарихсы Шәриф Шәриповтың һөйләүенсә, мәҫәлән, Ғәбиҙулла 1912 йылда уҡ әле Полиция Департаменты тарафынан Петропавловск ҡалаһына һөргөнгә ебәрелә. Ғәйебе: йәнәһе, ишан башҡорттарҙы урыҫтарға ҡаршы ҡоторта, Балҡан христиандары менән һуғыш алып барған төрөктәрҙе яҡлаша.

Ғәбиҙулланы ахунлығынан, ишанлығынан мәхрүм итәләр. Ахун дәрәжәһен уға 1918 йылда ғына кире ҡайтаралар.Әммә шунда уҡ әйтеп үтеү кәрәктер: Ғәбиҙулла ишандың Ҡара-Табын, Ялан-Ҡытайҙар – ғөмүмән, төньяҡ-көнсығыш башҡорттары араһында йоғонтоһо ҙур булыуын, абруйы арҡаһындамы, ҡурҡытыпмы, төрлө социаль ҡатламдарҙы үҙ ҡулында тотоуын да оноторға ярамай.

Ишандың алты малайы булыуы билдәле: Мөхәмәтғәбделхәй, Мөхәмәтһарун, Әбделәүәл, Мөхәмәтәнсәр, Заҡуан, Абдулла. Үсеп, ир ҡорона ингәндәре араһында иң танылғаны һәм башҡорт халҡы тарихында ҙур урын алғаны – Ғәбделхәй. Үсеп еткәс, бөтә аңлы осорон Совет власы менән көрәшеүгә арнай, уға ҡаршы ғәскәр тупларға тотона. Ул ерҙе социалистик милеккә әйләндереүгә ҡырҡа ҡаршы була һәм башҡорттар өсөн милли автономия булдырыу өсөн сығыш яһай. Ырымбурҙа үткән I Башҡорт ҡоролтайында ҡатнаша. Уның делегат булып һайланыу тарихы фәһемле. Арғаяштарҙың иҫләүенсә, ябай халыҡ Арғаяш кантонынан делегатлыҡҡа кандидат итеп үҙҙәре бик ихтирам иткән Вафа Сөләймәновты, ә батша хөкүмәте яҡлылар кадет Ғәбделхәйҙе күрһәтә. Бәхәс үҙара яғалашыуға барып етә, ахырҙа, ҡоролтайға икеһен дә һайлайҙар.

Ҡорбанғәлиев хаҡында Әхмәтзәки Вәлиди «Хәтирәләр»ендә бына ни яҙа: «Минең ер мәсьәләһе буйынса докладымда социализм идеялары һәм ҙур ер биләмәләрен бүлешеү тезисы булғанлыҡтан, миңә ҡаршы сыҡтылар, әммә фекерҙәре ҡабул булманы. Электән консерватив һәм яңылыҡ дошманы сифатында танылған был ғаилә вәкиле Ғәбделхәй Ҡорбанғәле, үҙенә бер төрлө хәбәр һөйләп, Үҙәк Комитет программаһына бөтә башҡа эштән алда динде яҡлау бурысын ҡуйыу фекерен алға һөрҙө…»

1917 йылдың 20 декабре. III Башҡорт ҡоролтайы. «Был конгреста Арғаяш кантоны башҡорттарынан Ғәбделхәй Ҡорбанғәлиев менән Минһаж исемле арҡадашы, монархист урыҫтар менән берләшеп, оппозиция тәшкил итергә маташты…» (Зәки Вәлиди, «Хәтирәләр», 159-сы бит). Зәки Вәлидиҙең

Ғәбделхәйҙе һәр ваҡыт монархист урыҫтар араһында күреүе аңлашыла: был юлынан Ғәбделхәй ахырғаса тайпылмай. Уның ғәмәлдәге аҙымдары ысынлап та батша хөкүмәтен яҡлаған һымаҡ тойола. Ләкин уның алыҫтағы маҡсатын күҙ алдына баҫтырһаҡ, өҙөп әйтеү тарихы дөрөҫлөккә тап килмәй.

Йәмғиәттең һынылыш осорона хас былдай буталсыҡ хәлде Себер хөкүмәтенең үҙ мәнфәғәтендә файҙаланып ҡалырға тырышыуын, Ҡорбанғәлиевтарҙың да Совет власына ҡаршы ҡотҡо таратыуын беҙ әлегә Зәки Вәлиди яҙмаларынан сығып ҡына баһалайбыҙ. Мәҫәлән, ул «Хәтирәләр»ендә бына ни яҙа: «Башҡорт ғәскәре Силәбенән Ырымбурға күскәс, етди таяныстан мәхрүм ҡалған генерал Ханжин шул яҡтан урыҫ монархистары менән бәйләнешкә ингән, Барын-Табын ырыуы Миҙиәк ауылы байы, исеме иҫкә алынған имам Ғәбделхәй Ҡорбанғәлиев менән аңлашҡан. Улар Ташкент фронтындағы башҡорт ғәскәренең күпселеген Арғаяш кантоны башҡорттары тәшкил итеүҙән файҙаланырға тырышты…» («Зәки Вәлидигә ҡаршы» тип аңларға кәрәк – **Р. Н.**).

Бер осор Вәлиди менән Ғәбделхәй Советтарға ҡаршы фронт һыҙығының бер яғында булһалар ҙа, улар үҙ-ара һис тынышмай, бер-береһенең өҫтөнән «верховный” хаким Колчакка ялыу артынан ялыу яуҙыра. Быныңсәбәбен, моғайын, шулай ғына аңлатырға кәрәктер: З. Вәлиди Башҡортостан автономияһы булдырыу мәсьәләһендә Колчактан да, уның ише Ҡорбанғәлиев эйәрсәндәренән дә яҡлау тапмай, ә Ғәбделхәй шул уҡ мәсьәлә буйынса Вәлидиҙең Совет власы менән бәйләнешкә инергә тырышыуын яратмай. Һәм ошо уларҙы ҡан дошманға әүерелдерә.

1918 йылдың 1 мартында «Башҡортостан» гәзите яңы ғына ойошторолған Башҡортостан Ваҡытлы Революцион Советының ҡарары тураһында хәбәр итә. Ҡарарҙың 9-сы пункты Ғәбделхәй Ҡорбанғәлиевҡа бағышлана. «Самодержавиены нығытыу яғында булған, әлегә тиклем байыу маҡсатында (?) башҡорттар араһында һуғыш асырға тырышҡан Ғәбделхәй Ҡорбанғәлиевты ҡулға алыу тураһында бойороҡ таратырға»,– тиелә унда. Ҡарарҙың большевиктар позицияһында торған БВРС (А. Дәүләтшин, Ф. Солтанбәк, Ғ. Алпаров, Б. Шәфиев һ.б.) тарафынан сығарылғанын онотмайыҡ.

Ә бына вәлидовсыларҙың 1919 йылдың 18 февралендә башҡорт һалдаттары араһында тараҡҡан (И. Алкин имзаһы менән) өндәмәһендә Башҡорт ғәскәрҙәре етәкселеге Совет власының Башҡортостан мөстәҡиллегенә ҡаршы килмәүе, ә Дутов, Колчак менән бергә «һатлыҡ йән Ҡорбанғәлиевтар»ҙың ҡаршы тороуы аңлатыла.

Бер-береһе менән ут та бысаҡ булып йәшәгән ике лагерь әҙерләгән документтар былар. Уларҙың икеһендә лә Ҡорбанғәлиевҡа ҡарата бер үк төрлө мөнәсәбәт – дошманлыҡ хисе. Эш шуға барып етә ки, Ырымбурҙа Каруанһарай паркында Башҡорт ғәскәрҙәренең параны барған саҡта Ғәбделхәй пропагандаһына бирелгән бер төркөм Барын-Табын һалдаттары, Вәлидиҙе үлтереү ниәте менән, уға ташлана. Был көтөлмәгән хәлде Вәлиди «беҙҙең офицерҙар үлтергән Минһаждың үсен алырға теләүе» менән аңлата.

Был ваҡиғанан һуң, «Хәтирәләр»ҙә әйтелеүенсә, Ғәбиҙулла ишан, улы Ғәбделхәй өсөн ғәфү үтенгән һымаҡ, Зәки Вәлидигә килеп етә. Башҡортостан хөкүмәте башлаған хәрәкәт уйын эш түгеллеген аңлаған Ҡорбанғәлиев «тире турһыҡҡа ҡымыҙ тултырып, башҡа бүләктәр менән Силәбегә килеп, мине күрҙе. Ғәфү үтенде. Офицер улы Һарунды беҙгә хеҙмәт итергә ебәрәсәген әйтте. Шулай итеп, Минһаждың үлеме арҡаһында Башҡортостан эсендә беҙгә ҡаршы («Милли хәрәкәткә ҡаршы» тип аңларға кәрәк – **Р. Н.**) хәрәкәт булдырыу мөмкинлеге юҡҡа сыҡты. Был беҙҙең өсөн ҙур ҡаҙаныш ине»,– тип кинәнес белдерә Вәлиди.

Ләкин ҡыуаныс кисерергә иртәрәк булып сыға. Вәлиди 1919 йылдың яҙында, Колчактан төңөлгәс, уны ташлап Советтар яғына сыға. Ғәбделхәй иһә, Себер хөкүмәтенән айырыла алмайынса, тиҙҙән Омск ҡалаһына китәсәк.

1919 йылдың 19 февралендә РСФСР хөкүмәте вәкилдәренең Башҡортостан хөкүмәте делегацияһы менән алып барған һөйләшеүҙәрендә Ҡорбанғәлиевтар хаҡындағы һүҙҙәр иғтибарҙы йәлеп итә. Башҡортостан хөкүмәте делегацияһы етәксеһе М. Ҡулаев унда быны ни ти: «Ҡорбанғәлиевтың булышлығы менән ике кантон Башҡортостан хөкүмәте йоғонтоһонан йолоп алынды. Ҡорбанғәлиев башҡорт халҡы исеменән Колчакка шуны белдерә: башҡорт халҡы, йәнәһе, элек-электән бер генә власты яҡлаған». РСФСР хөкүмәте вәкиле В. Смирновтың: «Барыһы ла беҙҙең ҡул аҫтында, тип раҫлайһығыҙ, ләкин беҙ бында һөйләшеүҙәр алып барған башҡорт саңғысылары, һеҙҙең «ҡырағай дивизия» тип аталған частар Колчак менән бергәләп беҙгә ҡаршы һуғыша», – тип дәғүә белдерә, һәм Ҡулаев быны танымайынса булдыра алмай. «Беҙҙең полктарҙың береһе – 3-сө полк – Колчак яғында ҡалды,– ти ул.– Беҙ уны тартып ала алманыҡ».

Был тәңгәлдә 1918 йылдың көҙөндә булған ваҡиғаларҙы иҫкә алыу урынлы булыр: Вәлиди етәкселегендәге Башҡорт хөкүмәте, Ырымбурҙан Силәбегә ҡасып килгәс, милли ғәскәр төҙөү мәсьәләһендә Ҡорбанғәлиевтарҙың ярҙамына таяна. Һуңғылары I Башҡорт съезында (1917 йыл, 19 июль), мөстәҡил милли ғәскәри частар ойошторорға кәрәк, тигән фекергә тоғро ҡалып, башҡорт милли полктарын ойоштороуға ҙур өлөш индерә, аҡса менән ярҙам итә. Ул ғына ла түгел, Силәбе – Златоуст тирәләрендә Мөхәмәтғәбделхәй менән Ғәлимйән Таған тарафынан төҙөлгән һәм улар етәкселек иткән 3-сө полк Башҡорт ғәскәренең иң берҙәм, иң уҫал хәрби берәмеге булып танылa. Ошо уҡ полкта уның 1-се батальонына Ғәбиҙулланың икенсе улы Мөхәмәтһарун командалыҡ итә.

Ошонан сығып ҡына ла Ҡорбанғәлиевтарҙы, башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәтенә ҡаршы көрәшкән, тип түгел, ә ошо ҙур хәрәкәттең айырым бер тармағына етәкселек иткән, үҙенсәлекле рәүештә башҡорттарҙың азатлығы өсөн һуғышҡан, тиһәк, дөрөҫөрәк булыр ине.

Ғәбделхәйҙең тормош юлын өҙөк-һурыҡ документтарҙан байҡағанда ла уның һәр аҙымды башҡорт халҡы мәнфәғәтенән сығып яһауын күрергә була: ҡоролтайҙарҙа Ғәбделхәй башҡорт ерҙәрен һатыуға ҡырҡа ҡаршы сыға, тик, ниңәлер, «үҙе өсөн яңы биләмәләр алырға тырыша» тигән һүҙҙәр ишетә; Ш. Манатов 1918 йылдың ғинуар башында Учредительный Йыйылышта ҡатнашыу өсөн һәм Башҡорт Автономияһын төҙөү тураһында һөйләшеү өсөн В. Ленинды күрергә тип Петроградҡа барырға сыҡҡас, уны Ғәбделхәй оҙатып бара (Ш. Шәриповтың раҫлауынса). Петроградтан Ҡорбанғәлиев 1918 йылдың августа ғына (фронт аша!) ҡайта. Өфөлә булғанында уның 1919 йылдың 17 апрелендә Омскиға Колчактың махсус бүлегенә (особый отдел), полковник Федоровҡа яҙған хаты һаҡланған. Был хатта Ҡорбанғәлиев Өфө Мосолмандар дини идаралығының башҡорттарҙы татарлаштырыу сәйәсәте уҙғарыуы тураһында хәбәр итә һәм, башҡорт халҡы мәнфәғәтендә ошо учреждение бинаһын (ул бик ҙур, ти) ваҡытлыса тартып алырға кәрәк, тип тәҡдим индерә һ.б.

Башҡорт милли хәрәкәте етәкселәренең береһе, һуңынан күренекле ғалим булып китәсәк Ғәлимйән Таған (Тайфур Көсөкөвтың раҫлауынса, дөрөҫө – Таганаев) 1997 йылда «Башҡорттар – Байкал аръяғында» тигән яҙмаларын баҫтырып сығарҙы (матбуғатҡа тапшырыусыһы – тарихсы Әмир Юлдашбаев – **Р. Н.**). Унан күреүенсә, башҡорт яугирҙары, башҡа аҡ гвардиясылар төркөмдәре менән берлектә, Совет власына ҡаршы торған көстәрҙең төп терәге булған Омск ҡалаһына йыйыла. Был хаҡта халыҡ хәтерендә бөгөнгәсә һаҡланған хәтирәләр ҙә юҡ

түгел. Мәҫәлән, Туңғатар олоҫона ҡараған Ҡужай ауылы ҡарттарының иҫләүенсә, аҡтарҙың бер ҙур төркөмө Уй йылғаһының башынан өс-дүрт саҡрым түбәндәрәк «Айғыр туғайы» тигән һаҙмат урында торған. Нишләп туҡталғандар бында? Моғайын, Златоуст – Үрге Яйыҡ юлын күҙәткәндәрҙер. Ошо аулаҡ урындан тура көнсығышҡа, ялан яғына, Троицк, Омск тарафына теләгән ваҡытта сығып китергә мөмкин. Әлбиттә, алыҫ юлға йыйынған ғәскәр буш ҡул менән китмәгән: бик күп мал алған. Бына ул – 1920-1921 йылдарҙағы аслыҡтың бер сәбәбе: ошо төбәк ауылдарында тәғәм итерлек бер ни ҡалмаған.

60-сы йылдарҙың аҙағында миңә Учалы районының ҡыҙыл партизандары исемлеген төҙөргә тура килгәйне. Барлығы – бигерәк тә Ахун, Иманғол ауылдары вәкилдәре – 500-ләгән кеше теркәлде. Ә башҡорт ауылдары кешеләре ҡайҙа булған һуң? Һәр ауылдан – берәр-икешәр генә кеше. Аҙаҡ аңлашылды: улар ҡырылып бөткән йә аҡтар менән көнсығыш тарафтарға сигенгән. Тамырҙары ла ҡалмаған.

1919 йылдың сентябре. Омск ҡалаһы. Башҡорттарҙың тәғәйенләнгән вәкиле эргәһенә Башҡортостандың төрлө өйәҙҙәренән биш – ун кеше йыйыла. Шунда уҡ Башҡорт Хәрби советы рәйесе штабс-капитан Һарун Ҡорбанғәлиев менән Башҡорт Кесе ҡоролтайы ағзаһы Ғәлимйән Тағанов та ҡатнаша. Көньяҡ армия командующийы генерал Белов һәм хәрби министр генерал Ханжин ярҙамында башҡорттарға казак үҙидараһы хоҡуғын биреү мәсьәләһе күтәрелә. «Башҡорттарҙың милли төркөмө» төҙөлөү тураһында союздаш илдәрҙең вәкилдәренә лә еткерелә.

Милли хәрәкәттең маҡсаты ябай һәм аңлайышлы: ҡораллы башҡорттар төркөмө (өс меңгә яҡын кеше) Японияға тиклем бара ла, ярҙам һорап, уның хөкүмәтенә мөрәжәғәт итә. Әгәр япондар Совет Рәсәйенә һөжүм яһай ҡалһа, улар менән бергәләп Уралға ҡайта һәм автономиялы республика ойоштора. (Был сәйәси поход тураһында етерлек документтар булмағанлыҡтан, ентекләп яҙыу мөмкин түгел. Беҙ уның эре-төрө факттарына, ҡайһы бер документтарына ғына туҡталабыҙ – **Р. Н.**).

«Башҡорттарҙың Милли төркөмө программа»һынан: «Боҙлауыҡтар аша яһалған беҙҙең поход дөйөм маҡсатҡа буйһона, ул – Рәсәйҙәге буржуаз-демократик һәм капиталистик ҡоролош шарттарында башҡорттарҙың мәнфәғәтен һәм үҙ аллы идаралығын тәьмин итеү». Бәй, был бөгөнгө ынтылыштарҙы хәтерләтә түгелме һуң? «Айырым төркөм»дөң программаһы башҡорттарҙың тарихи яҙмышына ла барып ялғана. «Башҡорттар боронғо быуаттарҙан алып урыҫ халҡына ҡарата дуҫлыҡ мөнәсәбәтен һаҡлай, – тиелә унда. – Бөйөк Петр Грамотаһын алып, Урыҫ дәүләтенә үҙ ирке менән ҡушылды, ә ул, үҙ сиратында, башҡорт ерҙәренең тейелмәҫлеген һәм милли көнкүрешен тәьмин итә. Был хаҡта 14 башҡорттоң Петроградта, Дәүләт китапханаһында, һаҡланған акттарҙағы ҡултамғалары ла һөйләй».

Ғәлимйән Тағанов яҙыуынса ла, «башҡорттар, үҙ күршеләре урыҫ халҡына ихлас мөнәсәбәттә булып», бөгөнгә хәтле суверенлы хоҡуҡтарын һаҡлай. Был ирекенлек уларҙың 1812–1814 йылдарҙағы Ватан һуғышына 60 полк ебәреүҙәре, немецтарға ҡаршы булған «Ете йыллыҡ һуғыш»та ҡатнашыуҙары, прустар тылына 12 башҡорт полкы ебәреүҙәре һәм Берлинды баҫып алыуҙары һ.б. батырлыҡтары менән аңлатыла. 1911-1912 йылдарҙа иһә генерал-губернатор Сухомлинов батша хөкүмәте алдында Башҡорт ғәскәрҙәрен ҡайтанан тергеҙеү тураһында тәҡдим индерә. Шул уҡ мәсьәлә 1917 йылғы Февраль инҡилабы башланғас тағы ҡуҙғатыла... Федераль ҡоролош – автономия өсөн көрәшкән бөтә сәйәси көстәрҙең дә төп ҡарашы бер үк. Йәғни ниндәйҙер кимәлдә үҙаллылыҡты һаҡлау.

Бына шунда Башҡорт ғәскәрҙәрен ойошторояуға һәм уны һаҡлап алыуға күп тырышлыҡ һалған Муса Мортазиндың ҡарашын да иҫкә алып үтәйек. Граждандар һуғышынан һуң Башҡортостан Үҙәк Башҡарма Комитеты Рәйесе итеп һайланған бригада командиры ла Үҙәк властар алдында бер нисә тапҡыр шул бер үк һорауҙы ҡуя. «Нисек инде ул, үҙ аллы республика була тороп та, исмаһам бер һалдат тоторға хаҡың булмаһын?!» – тип нәфрәтләнә ул. Юҡ, булмаһа, булмай икән: Мәскәү башҡорт яугирҙарының батырлығын һәр ваҡыт маҡтап-хурлап торһа ла, уларға бер ҡасан да үҙ аллы ғәскәр төҙөү хоҡуғын бирмәй.

Омскиға килгәс тә өмөттәре әллә ни аҡланмаған башҡорттарҙың күбеһе шунда тороп ҡала. Шәреҡкә килеүселәр, унан бергәләп, ҙур көстәр менән көнбайышҡа йүнәлеүҙәрен аңлар һәм ошо аң автономиялы үҙидаралыҡ төҙөүгә бер нигеҙ булыр, тип уйлай. Көнсығышҡа китеүселәр аҡтарҙың төрлө частары составына инә – улар араһында башҡорт халҡы вәкиле һәм Башҡорт Хәрби советының ике ағзаһы.

Мөхәмәтғәбделхәй 3-сө полк менән биш мең саҡрымлыҡ юлға ҡуҙғалғас, артынан ғаиләһе лә китә. Ҡорбанғәлиевтар Петропавловскиҙа осрашырға тейеш була. Ләкин сәйәхәттәренең башында уҡ аҡ казактар тарафынан таланып, ниндәйҙер бер станцияла тороп ҡала. Артабан ҡыҙыл частар уларҙы ҡулға ала. Ғәбиҙулла кескәй улы – 16 йәшлек Әбделвәли менән Стәрлетамаҡҡа килтерелеп, хөкөм ҡарамағына тапшырыла. Яҡлашыуҙы һорап, ишан ул саҡта Башревком рәйесе булған З. Вәлидовҡа мөрәжәғәт итә. Ләкин бынан бер ни ҙә килеп сыҡмай. Ишанды һәм уның улын Ашҡаҙар йылғаһы буйына сығарып аталар.

Шулай итеп, Ҡорбанғәлиевтар һәм Вәлиди араһында бергә эш итерлек аңлашыу булғандыр, тип әйтерлек түгел. Ләкин, ҡайһы бер документтарға эйәреп, Ҡорбанғәлиевтарға «батша яҡлы реакционерҙар» тип ҡырҡа баһа биреү үтә бер ҡатлы, тимәк, тулы баһа булмаҫ ине. Эш бында күпкә ҡатмарлыраҡ. Ғәбделхәйҙең Силәбе тирәһендәге башҡорттарҙың байтағын үҙе артынан эйәртә алыуына ҡарағанда, ул етәкләгән хәрәкәттең социаль базаһы ныҡлы, идеялары ла әүрәтерлек күренә. Әлегә хәтлем Ҡорбанғәлиевтарҙы «монархист» тигән ҡалыпҡа ғына бикләп, башҡорт милли хәрәкәтенә яҡын юлатмай килделәр. Ләкин, улар башҡарған эштәрҙе ентекләберәк тикшергәндән һуң, фекер үҙгәрә һәм, Ғәбделхәйҙең ҡараштары З. Вәлидиҙекенән әллә ни айырылмай, Ғ. Ҡорбанғәлиевтың сәйәсәте һуңғыһының: «Беҙ большевиктар ҙа, меньшевиктар ҙа түгел, беҙ башҡорттар ғына», – тигән осҡор һүҙҙәренән бик алыҫ та түгел, тигән һығымта яһарға тура килә.

Билдәле булыуынса, З. Вәлидовтың Совет власы менән һөйләшеүҙәр башлап ебәреүенең төп маҡсаты – Төркөстанға, шуның эсендә Башҡортостанға ла, мөстәҡиллек алыу. Иң мөһим пункттарҙың береһе – Башҡорт ғәскәрҙәрен тарҡаттырмау, милли хәрби берәмек алып ҡалыу. Күп йәһәттән Ғәбделхәй Ҡорбанғәлиевтың маҡсаты ла шуға оҡшаш: Рәсәй батшалығы яғында булһа ла, большевиктар булмаған шарттарҙа республиканы башҡорттар өсөн һаҡлап алып ҡалыу, башҡорт халҡының дәүләт кимәлендә территориаль хоҡуҡтарын яҡлау. Алыҫ Көнсығышҡа барып етеп булһа ла Башҡорт ғәскәрен хәрби берәмеккә әйләндереү. Үҙ маҡсатына ирешеү өсөн Ғәбделхәй 1919 йылдың декабрендә, Красноярскиға барып етмәҫтән алда, Ачинск ҡалаһында уҡ башҡорт яугирҙарын бер дивизияға туплауҙы һорап генерал Каппелгә мөрәжәғәт итә – Каппель ризалыҡ бирмәй. Аҡ армияның башҡа генералдары менән дә ҡат-ҡат һөйләшеп ҡарай, хатта япон ғәскәрҙәре етәкселеге менән дә бәйләнешкә инә. Ләкин урыҫ генералдары Ҡорбанғәлиевтың тәҡдимен кире ҡаға.

1920 йылдың 9 марты. Штабс-капитан Һарун Ҡорбанғәлиевтың башҡорт отряды, ҡыҙыл партизандар менән һуғыша-һуғыша, Читаға барып инә. Был бойороҡто уға Урал отряды начальнигы – үҙе хәүефле юлды поезда ғына үткән генерал-майор Круглевский биргән була. Имам Ғәбделхәй поезға ултырмай, ә башҡорттарҙың милли кадрҙары тупланған төркөм йәйәүләп кенә барырға тейеш була. Чита эргәһендә һуғыштарҙа Һарун Ҡорбанғәлиев һәләк була.

12 март. Башҡорттарҙың милли төркөмө етәксеһе Ғәбделхәй беренсе тапҡыр атаман Семеновҡа инеп сыға. Ике көндән һуң атаман уны үҙ өйөндә ҡабул итә. Һөйләшәләр. Атаман Ҡорбанғәлиевты аңлай һәм башҡорттарҙы бер хәрби берәмеккә тупларға вәғәҙә итә.

2 апрель. Барон Унгерндың саҡырыуы буйынса, Ҡорбанғәлиев штабс-капитан Тағанов менән бергәләп өс көнгә Харбин (Ҡытай) ҡалаһына барып ҡайта. Осрашыу һөҙөмтә бирмәй.

Рәсәйҙең Көнсығыш яғы ҡораллы көстәренең башкомандующийы атаман Семенов башҡорт халҡының вәкиле итеп һайлап ҡуйылған Ғ. Ҡорбанғәлиевты үҙенең янында ҡалдырыуы тураһында бойороҡ яҙа. Хәрби етәкселек менән ҡат-ҡат һөйләшеү һөҙөмтәһендә – Ырымбур казак ғәскәрҙәре тәртибендә Башҡорт төркөмөнә лә казак хоҡуҡтары бирелә.

14 – 16 май. Ошо хаҡта Башкомандующий Семенов махсус грамота яҙа, Башҡорттарҙың милли идаралығын хөрмәтләргә ҡуша, Башҡорт ғәскәре тураһында положение эшләргә һәм уны үҙенә раҫлаттырыу өсөн тапшырырға бойора.

17 июнь. Ошо тантаналы ваҡиғаны байрам итеү өсөн Читаға Алыҫ Көнсығыш армияһының иң юғары хәрби чиндары, генералдар йыйыла. Почетлы ҡарауыл теҙелә. Мосолмандарҙан икмәк-тоҙ ҡабул иткәс, атаман Семенов уларҙың ҡаршыһына сығып баҫа, атаман штабы начальнигы генерал Хрещатицкий грамотаны ҡысҡырып уҡый. Шунан, грамота биреүгә яуап итеп, башҡорттарҙың Хәрби милли идараһы рәйесе Ғ. Ҡорбанғәлиев сығыш яһай. «Һеҙ, Ғәли йәнәптәре! – ти ул. – Башҡорттарға шундай ҙур иғтибар бүлгәнегеҙ өсөн ихлас күңелдән рәхмәт белдерәм. Үҙ еребеҙҙән, Башҡортостандан, айырылып, көн-төн Шәреҡкә табан хәрәкәт иткәндә, беҙ урыҫтарҙың юғары власы, ниһайәт, беҙҙе аңлар һәм киләсәктә лә, дәүләт тәртибен тергеҙә башлағас та, элекке етәкселәр ебәргән хаталар ҡабатланмаҫ, тип өмөтләнәбеҙ… Рәсәй власы беҙгә үҙ ҡәрҙәштәребеҙ алдында аҡланырға мөмкинлек бирер, тип уйлайбыҙ. Юғиһә, уларҙың: «Һеҙ ни өсөн киттегеҙ һәм нимә алып килдегеҙ?» – тип әйтеүҙәре мөмкин…»

Ғ. Ҡорбанғәлиев, артабан япон ғәскәрҙәре штабы начальнигына мөрәжәғәт итеп, һеҙҙең яҡын күршегеҙ булараҡ, һуғышсан азиаттарҙы үҙебеҙҙә күрергә һәм кеше хоҡуҡтарын тергеҙеүегеҙҙе теләйбеҙ, ти. 5-се япон дивизияһы начальнигы генерал-лейтенант Судзукиның башҡорт ғәскәренең почетлы казагы итеп һайланыуы тураһында белдерә. Тантанала почетлы ҡарауыл оҙатыуында Башкомандующий янында һаҡланған мосолман байрағы булдырыу тураһында әмер иғлан ителә, уның 12 чиндан торған штабы булдырыла, эш хаҡтары билдәләнә һ.б.

Әммә артабан армияның хәле киҫкенләшә. Хәрби-милли идаралыҡ 16 августа Даурияға күсә, башҡорт һәм татарҙарҙан торған Өфө дивизияһы Читала ҡалдырыла. Октябрҙең урталарында ҡыҙылдар Читаны уратып үтә, ә Башкомандующий аэропланға ултырып ҡаса. Ғ. Ҡорбанғәлиев, армия етәкселеге исеменә хат яҙып, уның менән бәйләнешен өҙөүе тураһында белдерә, ә 1920 йылдың 7 ноябрендә Маньчжурияла уға тапшырылған Идаралыҡтың эшен туҡтатыуы тураһында бойороҡ сығара. 14 ноябрҙә Идаралыҡ рәйесе вазифаһын Тағановҡа ҡалдырып, Ҡорбанғәлиев Японияға китә.

Илдә ҡалған Башҡорт ғәскәрҙәре ҡыҙылдар яғына сыҡҡас, башта ҡоралһыҙландырылыуын иҫкә төшөрөү урынлы. Аҙағыраҡ уларҙың айырым полктары Көнбайыш фронтҡа ебәрелеп, юҡҡа сығарыла. Илдән ситкә китеп, Байкал аръяғына барып еткән ике мең самаһы башҡорт һалдаттарын да шул уҡ яҙмыш көткән була: үҙ аллы хәрби берәмек була алмайынса, улар таралып бөтә. Һөҙөмтәлә Башҡорт ғәскәрҙәренең эске милли мәнфәғәтен ҡәнәғәтләндереү йәһәтенән элек Зәки Вәлиди менән Муса Мортазин Колчактан бер ниндәй ҙә яҡлау тапмаһа, хәҙер Ҡорбанғәлиев та Алыҫ Көнсығыш армияһы командованиеһынан – Каппель, Семеновтарҙан һуҡыр тинлек тә файҙа күрмәй. Урыҫтарҙан башҡа бер милләткә лә ташлама яһалмаясағын бик һуңлап аңлап ала Ғәбделхәй. Әхмәтзәки Вәлиди «Хәтирәләр»ендә Ғәбделхәйҙең үҙ хатаһын таныуы, Ғәлимйән Таған аша Вәлидиҙән ғәфү үтенеүе тураһында яҙа. Бына ошолай күңелһеҙ тамамлана Ҡорбанғәлиевтың хәрби миссияһы. Ғәбделхәй ҡоралдаштары менән Ҡытай сиге аша үтә, 1925 йылға тиклем Маньчжурияла йәшәй, унан Японияға күсеп китә. Ғәбделхәйҙең дини эшмәкәрлек осоро башлана.

1927 йылдың ғәйет мәжлесендә яҙмыш ташҡынына эләгеп Японияға барып сыҡҡан башҡорттар һәм татарҙар үҙ балаларының мосолман йолаларын, үҙҙәренсә уҡыу-яҙыуҙы онотоуҙары хаҡында гәпләшеп ултыра. Әмәлгә дарыу тигәндәй, мәхәллә ағзалары араһында имам һәм мөҙәрис Мөхәмәтғәбделхәй Ҡорбанғәлиевтың да булыуын белеп ҡалғас, уны күтәреп алалар. Ғәбделхәй, диндәштәренең үтенесе буйынса, Япония хөкүмәтенә мөрәжәғәт итә. Шул уҡ йылдың 2 октябрендә хөкүмәттең ризалығы менән башланғыс мосолман мәктәбе асылып, дини һәм милли дәрестәр бирелә башлай. Ун йыл үткәс, был мәктәп, рәсми талаптарға яуап бирерлек хәлгә килтерелгәс, рәсми уҡыу йорттары рәтенә индерелә. Ул өс кенә бүлмәне биләй.

Хөкүмәт мосолман мәктәбенең мөдире итеп Мөхәмәтғәбделхәйҙе раҫлай. Татарстандың «Гасырлар авазы» журналы (1966, 1-се һәм 2-се һандар) яҙыуынса, бында беренсе имтихан 1928 йылда булып, VI синыфты 4 шәкерт тамамлай, 1929 йылда улар VII синыфты бөтөрә, 1930 йылда – 22, 1931 йылда – 21, 1933 йылда 33 шәкерт уҡый. Мәктәптең эске малия (финанс) эштәрен Сания Ҡасимия алып бара. Уға 7 кешенән торған башҡарма һәйәт булышлыҡ итә: Мөхәмәтғәбделхәй хәҙрәт (рәйесе), ағзалары: Закир Шакири, Хужәхмәт Ваһап (сәркәтип), Сабир Жамил, Закир Илмәти, Мотаһар Яхши, Әхмәт Мөхтәсиб.

1932 йылдың 2 октябрендә, мәктәптең асылыуына биш йыл тулыу айҡанлы, байрам ойошторола. Банкетта Японияның ҙур ғилем эйәләре ҡатнаша. Ғәбделхәй хәҙрәт Токиола мосолман общинаһына етәкселек итә, мәҙрәсә, типография төҙөтә. Ғөмүмән, нәшриәт эшен яйға һалыу буйынса күп эш башҡара ул. Үҙе лә ижад итә. Уның, мәҫәлән, 1924 йылда нәшер ителгән «Панславизм һәм Урал-Алтай халыҡтары», «Һинд-Европа һәм Урал-Алтай халыҡтары» тигән хеҙмәттәренең Японияла һаҡланыуы асыҡланды.

Әлбиттә, башҡорт кешеһенең шулай ҙур эшмәкәрлек йәйелдереп ебәреүе ҡайһы бер әҙәмдәргә оҡшамай. Бында татарҙарҙың күренекле шәхесе Ғаяз Исхаҡиҙың да килеүе, мосолмандар менән етәкселекте үҙенә алырға тырышыуы һәм башҡорттарға бойкот иғлан итеүе билдәле. Ошо арҡала был ике абруйлы заттың үҙ-ара низағлашып, һуғышып китеүе лә мәғлүм. Ғәбделхәйҙең иғанә аҡсаһына мәсет һалдырып, үҙ халҡына (төркиҙәргә) күрһәткән хеҙмәте ҙур маҡтауға лайыҡ. Тыуған яҡтың тарихын яҡшы өйрәнгән һәм һуңғы ваҡыт Мейәс ҡалаһында йәшәгән Мөхәмәтғаяз Байбуриндың һөйләүенсә, мәсет һалынып бөткәс, Мөхәмәтғәбделхәй хәҙрәт уны күрһәтеү өсөн Япония императорын

саҡырған икән. Мәсет ҡыйығы аҫтына оҙон итеп алтын хәрефтәрҙә башҡарылған ғәрәп һүҙҙәренә төртөп, император:

– Бында нимә тип яҙылған?– тип һорай.

– «Лә илаһи иллалла, мөхәммәҙрәсулулла»,– ти Ғәбделхәй.

– Минең исемде яҙғанһығыҙҙыр, тип уйлағайным,– ти, кәйефе ҡырылып, император. – Алып ташлағыҙ яҙыуҙы.

– Яҙыуҙы алһаҡ, мәсет үләсәк, – ти хәҙрәт.

Император мәсеткә инмәй, боролоп ҡайтып китә һәм Ғәбделхәй хәҙрәтте буйһонмағаны өсөн Япониянан һөрөргә әмер бирә.

Был хәлде миңә Байбурин ҡарт 70-се йылдарҙа уҡ һөйләгәйне. Үкенескә ҡаршы, һәр һүҙен ентекләп яҙып барылмаған. Хәҙер ҡайһы бер нәмәләр аңлашылып етмәй. Очерктың башында Зәки Вәлиди һәм Ҡорбанғәлиевтар араһында шәхси планда ла ниндәйҙер конфликт булыуына ишара яһағайныҡ. Һуғыштан һуң булған осрашыуҙан да сер асылмай, З. Вәлиди быға «Хәтирәләр»ендә лә бер нисек тә асыҡлыҡ индермәй. Тик былай тип кенә яҙып китә ул: «Бөгөн ғаиләһе (Ғәбделхәйҙең – **Р. Н.**) Токиола, бер ҡыҙы Төркиәлә булып (ҡайһы ҡыҙы, ул нисек Төркиәгә барып сыҡҡан? – **Р. Н.**), икеһе лә русса һәм инглизсә уҡыны».

М. Байбуриндың хәтерләүенсә, ғаиләһенең Төркиәлә һәйбәт кенә йәшәп ятыуын белеп ҡайтҡан Ғәбделхәй Силәбелә тағы бер ҡот осҡос хәбәр ишетә: баҡһаң, Вәлиди уның атаһын, тағы ҡустыһын аттырған, имеш. Шуны белеп алғас, Ғәбделхәй хәҙрәт үҙ сәсен үҙе йолҡа, Зәки менән ипле һөйләшеп ултырыуына йәне көйә. Был хәбәрҙең күпмеһе дөрөҫ, дөрөҫкә ниндәй ялған өҫтәлгән – әйтеүе бик ҡыйын. Әммә был ике тарихи шәхес – З. Вәлиди менән Ғ. Ҡорбанғәлиев араһында, тағы ла киңерәк планда алғанда, ике ҙур зат – Зәйнулла ишан менән аҡһаҡ Ғәбиҙулла ишан араһында бөткөһөҙ тартҡылаш булғанлығы ғына бәхәсһеҙ.

Ғәбделхәй хәҙрәт Силәбегә ҡайта, тинек. Уны бындағы мосолмандар яҡшы белә. Бер мәжлестә, Ғәбделхәй бик ғилемле кеше, күпте белә, тип маҡтап ултыралар. Тик ҡунаҡтар араһында Мөжәһит тигән әҙәм: «Сталин уны төрмәнән тиккә генә сығармаған», – тип шик тыуҙыра. Хәй үҙе лә Силәбегә юҡҡа ғына килеүен, бында төпләнеп яңылышлыҡ эшләүен аңлай.

Икенсе бер урында тағы мәжлес ҡоралар. Беренсе булып әлеге Мөжәһит бара. Байға: «Ғәфү ит, иртәрәк килдем бит әле», – ти. «Бик яҡшы эшләгәнһең, – ти бай. – Һөйләшеп ултырырһығыҙ, һин түрге өйгә ин».

Инһә, күрә: мейес артында, ҡәнәфиҙә, Ғәбделхәй ултыра.

– Һу! Минән дә иртә килгән кеше бар икән! – ти ул, уңайһыҙланып.

– Йә, хәлдәр нисек, Мөжәһит?

Иҫәнлек-һаулыҡ һорашҡас, Ғәбделхәй хәҙрәт Мөжәһиттән уның хаҡында нимәләр һөйләп йөрөүен һорай. Мөжәһит, һөйләмәнем, тип танғас, Ғәбделхәй үҙенең Сталин менән һөйләшеп ҡайтыуын, сәләмәтлегенең бик ҡаҡшауын, өйөнә лә кермәйенсә ситкә барып ҡайтыуын һәм Силәбелә булмаһа, башҡа ерҙә урын табасағын әйтә.

Ғәбделхәй 1972 йылдың 22 сентябрендә Силәбе ҡалаһында донъя ҡуя.

Бына шундай әсе яҙмыш. Үҙенсә бөтә Башҡортостан бәхете өсөн ал-ял белмәй көрәшкән, Урал ҡаяларынан алып Япония утрауына тиклем биш мең саҡрымдан ашыу бәлә-ҡазалар тулы юл үтеп тә файҙалы бер ни тапмаған бер башҡорт уҡымышлыһының тормошо. Сит яҡтарҙың ҡояшынан ғына түгел, хатта тыуған тупрағынан да биҙә төшкән һәм ҡанаты ҡайырылған ҡарағоштоң һуңғы көндәре.

## ХӘЛИТ МИН, ҒАФУРИҘЫҢ ЕЙӘНЕ, ӘНҮӘРҘЕҢ УЛЫ...

Мин 1948 йылдың 1 июнендә донъяға тыуғанмын. Ошо уҡ йылды олатам Мәжит Ғафуриҙың мемориаль өй-музейы тәүләп үҙенең ишектәрен асҡан.

...Һигеҙем тулғас, «Өфө – Мәскәү» поезы мине Мәскәүҙәге күҙе насар күргән балалар өсөн махсус мәктәп-интернатҡа алып китте. Баш ҡаланың М.В. Ломоносов исемендәге дәүләт университетында уҡып йөрөгән ағайым, беҙҙе ҡаршы алып, Мәскәүҙә йәшәгән туғандарыбыҙға әйҙүкләне. Миңә, шундай ҙур ҡалаға тәүләп аяҡ баҫҡан балаға, барыһы ла ҡыҙыҡ: бына кешеләрҙе үҙе аҫҡа төшөргән һәм өҫкә мендергән эскалатор, электр уттары аҫтында ялҡылдап торған сағыу вагондар... Кемдеңдер яғымлы тауышы «Ботаник баҡса туҡталышы» тип иғлан итте.

Аллы-гөллө сәскәләрҙе күкрәгемә ҡыҫҡан килеш мәктәп тупһаһынан күтәрелеп барғаным хәтеремдә уйылып ҡалған. Миңә бар донъя бер төҫкә мансылған төҫлө: парталар, таҡта, хатта уҡытыусыбыҙ Антонина Антоновнаның кофтаһы ла йәм-йәшел. Мәктәптәге тәүге көн... Беҙ, балалар, ҙур, киң тәҙрәләр аша яҡтыртҡан ҡояштан әлһерәп, тәнәфес еткәнен көтәбеҙ ҙә коридор еләҫенә ашығабыҙ. Шунан, өшәнес һалҡынлыҡтан дер-дер ҡалтырап, яңынан класс бүлмәһенә инерҙе зарығып көтәбеҙ.

Һанай китһәң, мәктәп хәтирәләре байтаҡ: Һиндостандан Нурия исемле сөмҡара тәнле ҡыҙыҡай менән дуҫлашыу, ашханала шәфҡәт туташы ҡулынан аш ҡалағы менән балыҡ майын уртлау, ВДНХ янындағы киң майҙанда парадҡа әҙерләнеүсе һалдаттарҙың боронғо рус көйҙәренә һайт-дваға баҫып йөрөүен күҙәтеү...

Әсәйем йә яҙыусыларҙа, йә ғилми хеҙмәткәрҙәрҙең өйөндә көн күрҙе. Ял көндәрен ул мине үҙенең янына ала торғайны. Мәскәүҙәр әсәйемде, мәҙәниәтле сауҙагәр ғаиләһенән сыҡҡан кеше һәм башҡорт, татар әҙәбиәттәре классигы Мәжит Ғафуриҙың килене булараҡ, ихтирам итәләр ине.

Йыл ярымдан һуң беҙ Өфөгә ҡайттыҡ, һәм мин уҡыуымды шунда дауам иттем.

***

Рәсәйҙең ниндәй генә төбәгендә булма, алыҫ-алыҫҡа, офоҡтар артына китеп, уның зәңгәрһыу алыҫлығында ирееп юғалған тимер юлдарын күргән бар. Һәм бөтә ерҙә – бер нисә айға, бәғзеләре – мәңгегә.

Алыҫ Кавказға уҡыр өсөн йыйынған көнөмдө лә яҡшы иҫләйем. Перронда беҙ өсәү – мин, әсәйем, атайым. Атайым, Әнүәр Ғафури, арҡамдан һаҡ ҡына ҡаҡты ла былай тине: «Ярай, улым... Яҡшы ғына уҡы инде. Мин һинең, ниһайәт, профессияға эйә булыуыңды теләйем». Вокзал өҫтөнән «Иғтибар! «Новокузнецк – Кисловодск» поезына ултырырға саҡырабыҙ» тигән һаңғырау иғлан таралды. Шулай итеп, ҡояш нурҙары аҫтында йылҡылдап торған поезд

мине яңы тормошҡа ҡарай алып китте. Вагонда әсәһе менән китеп барған 4-5 йәштәр тирәһендәге ҡыҙыҡай нәҙек кенә тауышы менән бер туҡтауһыҙ дәртле йырҙар һуҙҙы...

Кисловодскиға эңерҙә генә еттек. Ун ете вагонлы поезд ҡаланың буйынан-буйы һуҙылды ла, бетон стенаға терәлеп, туҡтап ҡалды. Әсәйем менән, ҡул сумаҙандарыбыҙҙы эләктереп, перронға сыҡтыҡ. Вагондан тышҡа һибелешкән халыҡтың кемеһе ҡайҙа етте, шунда юҡ булып бөттө. Беҙ станция янындағы эскәмйәләргә ултырҙыҡ та ят, таныш булмаған ҡаланың баҙлап янған уттарына ҡарап уйға талдыҡ. Кисловодскиҙағы массажистар әҙерләү мәктәбенең барлығы хаҡында әсәйем менән бер йыл элек ишетеп белгәйнек. Хат сыймаҡлап һалғас, саҡырыу ҡағыҙы ебәрҙеләр. Алырҙармы беҙҙе, юҡмы? Ике йыл йәшәрменме мин был ҡалала, әллә... бер аҙнанан уҡ ҡайтып китерменме?

Таң һарыһынан кешеләрҙән белешеп, иҫке генә автобуста «Профессиональ массажистар мәктәбе»нә юлландыҡ. Ике ҡатлы йорттоң бер бүлмәһенә урынлаштырҙылар. Плащтарыбыҙ менән бөркәнеп, тиҙ үк йоҡоға талдыҡ.

Медкомиссия беҙҙең физик сәләмәтлекте, интеллектуаль кимәлде энәһенең ебенән алып ҡарап сыҡҡандан һуң, әсәйем менән Кисловодск менән танышырға сығып киттек. Ҡала миңә бик оҡшаны: иҫ киткес матур күл, колонналар, ҡупшы парк. Ҡаланы бейек тауҙар уратып алған. Унда йөрәк сирлеләрҙе торренкур алымы буйынса дауалайҙар. Торренкур – тау һуҡмаҡтары буйлап атлау ысулы. Тау һауаһы кешеләрҙең йөрәк, нервы системаһына ыңғай тәьҫир итә икән.

30 августа беҙҙе ҙур залға йыйҙылар. Уҡырға ҡабул итеүселәрҙең исемлеген уҡый башланылар. Минең фамилиямды ла ҡысҡырып ишеттерҙеләр: «Ғафуров!» Мөғжизәлер был!..

Уҡыуҙар башланды. Тәүҙә ҡыйынға тура килгәйне, аҙаҡ өйрәндем. Иң ауыры – сит-ят тарафтарға, уның кешеләренә өйрәнеү булғандыр. Хәтһеҙ ваҡыт ҡаланың тимер юл вокзалын эҙләү менән мәшғүл булдым. Шыпыртын ғына ҡайтып китеү ине теләгем. Әсәйем менән тәүләп ошо ҡалаға килгәндә күрҙем, булдым бит инде, ҡайҙа икәнлеге иҫемдән юйылған. Поезд тауышы ишетелә, ә вокзал – юҡ. Ғәжәп...

Уҡыу йылының беренсе көндәрендә «икеле»ләрҙе лә байтаҡ ҡына эләктергеләнем. Хәтерләү ҡеүәһе түбән, лекцияларҙа конспекттарҙы яҙып өлгөрмәйем, етмәһә, күҙҙәрем хөрт күрә... Һуңынан, әсәйем Кисловодскиға килеп, дәрестәргә бергәләшеп әҙерләнә башлағас, хәлдәр арыулана төштө. Ул башҡа студенттарҙың конспекттарын ала ла ҡысҡырып уҡый, мин яйлап күсерәм. Йәнә шул: Кисловодскиҙа әсәйем өс хужала, йыйыштырыусы булараҡ, алмашлап йәшәне – былар барыһы ла мине хәстәрләү, янымда булыу өсөн эшләнде. Мең рәхмәт инде ҡәҙерлемә.

Кешеләр төрлө төбәктән йыйылған: Мотря менән Марценюк – Молдавиянан, Кальянис – Литванан, Гамлет Гасанбеков – Дағстандан...

Барыбыҙ ҙа бик татыу, күңелле йәшәнек. Шәмбе һайын йыр-моңға һәләтлеләр концерт ҡуя, тансылар ҙа ойоштоpола.

Ике йыл уҡыу дәүере үтеп тә китте. Тәүгеһендә анатомия, физиология, биология, философия, физкультура кеүек предметтарҙы үттек. Икенсе йылын массаж серҙәрен өйрәнеүгә бағышланыҡ: һыйпау, өйкәү, йомшартыу... Һәр бер сирҙең үҙ тәьҫир итеү зонаһы бар, имеш. Массажист, сирле тәнде дауалау өсөн кеше организмын биш бармағы кеүек яҡшы белергә бурыслы, тип тылҡыны беҙгә уҡытыусыларыбыҙ.

...Бына массажист профессияһына эйә булыуыбыҙҙы иҫбатлаусы ҡыҙғылт

тышлы танығлыкты ҡулыбыҙға тапшырҙылар. Барыбыҙҙы ла ихлас күңелдән ҡотлағандан, тәбрикләгәндән һуң, мәктәп директоры әсәйем ултырған яҡҡа ҡараш ташланы ла былай тип әйтте: «Фиҙакәр һәм тырыш хеҙмәте өсөн Хәлит Ғафуровтың әсәһенә – айырым рәхмәт!» Барыһы ла ихласлап ҡул сабырға тотондо...

Ошо һүҙҙәр, күп йылдар үтеп, әсәйем вафат булғас, тәрәнерәк яңғыраш алған төҫлө булды. Май айы ине. Тирә-йүн ап-аҡ, хуш еҫле сәскәләргә төрөнгән. Бар донъя әсәйем менән хушлаша кеүек тойолдо.

...Самолетта Кисловодск өҫтөнән күтәрелеп, һуңғы тапҡыр ҡалаға ҡараш ташлағанда, бында башҡа бер ҡасан да әйләнеп ҡайта алмаясағымды белмәй инем әле.

***

Атайымды иҫләһәм, тәү сиратта уның киң, яҫы маңлайы һәм йылмайыуы, тура, ғорур һыны күҙ алдыма килеп баҫа. Унан, гүйә, ниндәйҙер шатлыҡ ипкене килә торғайны.

Беҙҙе, билдәле яҙыусы Мәжит Ғафури улының ғаиләһе булғас, бай, дәрәжәле, тип уйлайҙар ине. Иң ҙур байлығыбыҙ иһә – яҙыу машинкаһы. Атайым тарафынан фронттан алып ҡайтылған кескәй генә был машинка өйөбөҙҙөң иң түрендә, тәҙрә янындағы өҫтәлдә ултырҙы. Шунда уҡ – ҡағыҙҙар өйөмө, Көнбайыш Европа әҙәбиәтенә ҡараған әҫәрҙәр... Атайым руссанан татарсаға оҫта тәржемә лә итә ине.

Яҡындарыма бәйле иҫтәлектәрҙе һаман да күңелемдә ҡәҙерләп һаҡлайым. Бына беҙ – әсәйем, атайым, мин – аҡлан уртаһындағы усаҡ янында теҙелешеп ултырғанбыҙ. Эргәлә генә ике-өс кеше һыймалы турист палаткаһы, котелокта түгелә-сайпыла уха ҡайнай... Шулай уҡ атайымдың хистәргә бирелеп, онотолоп фортепианола уйнағаны, яҙыу машинкаһында туҡ-туҡ килеп баҫып ултырыуы, минең менән бергәләп рәсем төшөрөүе күҙ алдымдан китмәй.

Егерме йылға яҡын тома һуҡыр көн күреүемә ҡарамаҫтан, хәтерем әллә күпме фотоһүрәттәр сағылышын һаҡлай. Бер фотоһүрәттә – атайым, әсәйем һәм биш йәшлек мин Пушкин аллеяһындабыҙ. Ҡыш. Әсәйемдең шунда миңә: «Улым, беҙ хәҙер фотоға төшәбеҙ», – тип әйткәне иҫемдә. Мин, сабый аҡылым менән: «Һуңынан кире нисек менәбеҙ, әсәй?» – тип һораған булам.

...Ағиҙел йылғаһының ярҙарын тоташтырып, тимер юллы ҙур баҫма йәйелгән. Ошо баҫма буйлап ҡасандыр атайым фронтҡа уҙған. Ағайым ошо уҡ юл менән Мәскәүгә университетта уҡырға юлланды. Минең дә Кисловодскиға юлым, тимәк, бөгөнгө көн менән бәйле тормош юлым, ошо баҫма аша башланғайны.

Кешеләрҙең дә хәтер сәхифәләре ике ярҙың – бөгөнгө менән үткәндәрҙең баҫмаһы ул.

**Авторҙан:** *олатайым Мәжит Ғафуриҙың тыуыуына быйыл 130 йыл тулды. Яҙмаларымды ошо датаға арнайым.*

**Хәлит ҒАФУРИ.**

**Матбуғатҡа Ләйсән МАРАҠАНОВА әҙерләне.**

# «БАШҠОРТ... МАТУР ЙӘШӘРГӘ ТЕЙЕШ»

Аҫылғужаның «Мәңгелек тупһаһында» исемле йыйынтығына (Өфө, 1994) шиғырҙар, поэмалар һәм либретто ингән. Ошо китапты ҡулыма алып, шиғырҙарын яңынан уҡыған һайын үҙенсә бер яңылыҡ табам. Уның шиғырҙарына тәбиғәтте йәнләндереп ҡарау хас. Мәҫәлән:

*Башҡортостан!*
*Мәғрур исемеңдә*
*Сал тауҙарҙың күрәм һындарын,*
*Ишетәмен саф-йор йылғаларҙың*
*Йән иреткес көмөш сыңдарын! –*

(«Балҡып ятҡан төйәгем»)

тигән юлдарҙа Башҡортостан, уның тәбиғәте тере йән һымаҡ һүрәтләнгән. Шағирҙың тыуған илгә булған оло хистәре тәбиғәт, ер-һыу менән бәйләнгән. Шағир теле ошо хис-тойғоно ябай күҙ менән күрерлек, тойорлоҡ, хатта тауышын ишетерлек дәрәжәгә күтәрә. Башҡортостандың исемен генә телгә алғанда ла, уның ҡолағында тотош тыуған ерҙе хәтерләтеп, ҡурай моңо сыңлап китә. Шағир теле шулай итеп тауыштың һиҙелер-һиҙелмәҫ тулҡындарын көсәйтеп бирә лә төрлө тауыштар моңонда үҙенең хис-тойғоларын шартлау хәленә еткерә.

Бына бер миҫал: «Күкрәгемә күктәр һыйған һымаҡ Тәүге тапҡыр һине (Йүрүҙәнде – **М. Б.**) күреүҙән!» Кеше күкрәгенә күктәр һыймай, әлбиттә, әммә тыуған илгә, тыуған ергә һәм халҡыңа булған күккә ашырҙай мөхәббәт хисе күкрәктә, йөрәктә йөрөтөлә. Ошо хаҡта бәйән итә шағир.

«Хушлашам Палдиски менән» шиғырында «Ҡолағыма тауыш яғылғандай – Кем шыбырлай? «Салауат мин...» тигән юлдар иғтибарҙы тарта. Аҫылғужа шиғырҙары кешеләр менән һөйләшә, уларға туранан-тура өндәшә, уларға өгөт-нәсихәт уҡый, хатта оран һала. «Салауаттың йәше»ндә «Ҡалҡандыр ғәзиз ғүмеркәйе Халҡы азатлығы һағында» тип яҙа. Шағир бында «Салауат халҡы менән мәңге бергә» тигән ҙур фәлсәфәүи һығымта яһай. Тимәк, Салауат мәңге башҡорт халҡының азатлыҡ, ирек идеяһы менән бәйле булып ҡаласаҡ.

«Йүрүҙән» шиғырын алайыҡ. Шағир Йүрүҙән тауышында башҡа йылғаларҙың да «йән иретерлек өндәр»ен ишетә. Йәғни Йүрүҙән йылғаһына хозурланыу тотош Башҡортостанға булған оло тойғо булып яңғырай. Ғөмүмән, Аҫылғужаның шиғырында төрлө тауыштар йыш ишетелә, «тартай ҡысҡырҙы... Тауышы һыу тартҡан сығыр (шағыр-шоғор – **М. Б.**) һымаҡ»; «Туҡ-туҡ ҡаға ямғыр, гүйә, туҡ-туҡ сүкей мейемде»; «Миллион һумлыҡ техника, Миллион һикерештәр, Миллион боҙоҡ тауыштар» һ.б. Һуңғы миҫалда тауыш төрлөлөгө хатта һан менән көсәйтеп ебәрелә. Шул уҡ ваҡытта йәмһеҙ тауыштарҙың күплеген, мәғәнәһеҙлеген һыҙыҡ өҫтөнә алыр өсөн ябай халыҡ телендәге һүҙҙәрҙе лә шиғырына индереп ебәрә: «Нисек түҙмәк был зарымды Ҡырҡ ҡабат ҡаҡылдамай (ҡат-ҡат туҡымай – **М. Б.**).

«Салауаттың диңгеҙгә әйтеп ҡалдырғаны», «SOS!?», «Класташтарға», «Заман йырҙарынан зар», «Берәүҙең хаттарынан», «Драма», «Күңелдәргә юл ярам» шиғырҙарында, мәҫәлән, үҙенсәлекле әңгәмә формалары бар. Был шағирҙың оҫталығы, уның шиғыр формаларын ишәйтеү өҫтөндә лә эшләгәнен күрһәтә.

Аҫылғужа үҙе ут шәхес булды, шуға күрә шиғырҙарында кеше ихтыярына бирелмәгән тәбиғәт, күңел, мөхәббәт стихиялары ҡайнауы бер ҙә ғәжәп түгел. Был – уның ихтыяр көсөнән тыш ташып сыҡҡан тойғо-хистәре. Һыу, һауа, ут, елбуран образдары һәм башҡа тойғолар уның ысынбарлыҡты күрә белеү һәләтен көсәйтеп күрһәтә. Быға миҫалдар бик күп: «Уйнаҡ тулҡындары Сөндәрҙең», «Ашҡаҙарҙың алҡын ағыштары, шаршыларын Эйек, Ыҡтарҙың»; «Ялҡын ләүкетер ҡуҙ»; «Һорғолт күгем ерҙең ҡосағына Ауа ине, ваҡ-ваҡ ямғыр булып, өнһөҙ генә Яуа ине...», «Тормош диңгеҙенә бата-бата, Кисергәндә хәтәр мәлдәрҙе»; «Һыу-һауанан ағыу һемерәбеҙ»; «Ел үтер тишектәр»; «Усаҡ ләүкене»; «Күңел усағы»; «Иң татлыһы ине ут сағым»; «тандыр тартҡан усаҡ»; «ҡуҙҙар һүрелер»; «өйгә саптым. Ут ҡапҡандай ҡапыл салғыйыма...»; «Ер һелкенә. Ел һыҙғыра. Күктәрҙә йәшен йәшнәй»; «Мөхәббәт еле»; «Ерем тулай. Ер шарына. Күктәр ярыла кеүек». Ә шулай ҙа ошо стихиялы, ҡеүәтле, емергес тәбиғәт көсөн кеше, йәмғиәт тәьҫиренә бәйләй, лирик геройҙың «Хистәр ҡойоно»на, «йөрәктәге уттар»ына. «Күңелдәге билдәһеҙ уттың Теремек ҡуҙы тулау»ға, йәғни йәмғиәттә барлыҡҡа килгән кире яҡтарҙы ауыр кисереү тойғоһона килтереп терәй. Әлбиттә, мөхәббәт хисе, тыуған илгә һөйөү тойғоһо кешенең бөтә булған психик һәм физик тойғоларын уята.

Кешегә хас күңел тойғолары, хәрәкәт, тән ағзалары йөрөшөн Аҫылғужа ҡошхайуандарға, балыҡтарға күсерә: «Ҡарап-ҡарап, башын сайҡап алды, Юшауынан туҡтап, алаша...», «Туҡылдай ҙа тыңлай тумыртҡа Ҡарағайҙың иркен һулауын»; «Мин дә бар, бар бында!» тигәндәй Ҡарға хәбәр һалды алыҫтан...», «Тулҡын телле сал Балтика»; «Ҡоллоҡ хәлем, тамам сауыҡтырып, Елегемде һура ғына...»; «Тағы ла әйт, диңгеҙ»; «Минең хаҡты даула, диңгеҙ»; «Ҡайҙа һыуҙы Ҡайнатҡан балыҡтары?», «Ҡоштар туйы»; «Йондоҙҙар көлөшкән була» һ.б. Бындағы сағыштырыуҙарҙа ҡайһы бер күренештәр оҡшашлыҡ йә айырмалыҡ йәһәтенән тиңләштерелә һәм шиғырҙың тәьҫир көсөн арттырыр өсөн сифаттары бик ныҡ арттырып күрһәтелә. Хәрәкәт, ишара теле ярҙамында тормош күркәмлеген, тәбиғәттең кеше менән тығыҙ бәйләнешен, тәбиғи тормоштоң йылдам үҫешен һүрәтләй. Тәбиғәт уның шиғырҙарында шағир һәм уҡыусы уртаһында гел мәғәнә өҫтәүсе үҙәк ролен үтәп тора. Шуға күрә лә тел шиғриәттең нигеҙе булып, ул мәғлүмәтте тулыландырыу функцияһын үтәп кенә ҡалмай, ә художестволы һүрәтләү сараһы, фәлсәфәүи мәғәнәне аңлатыр объект та була.

Аҫылғужаның, шағир булараҡ, тағы бер үҙенсәлекле алымына тап булдым. Ул төҫтәр менән уңышлы эш итә. Таш образдары менән төҫтәр йыш осрай уның шиғырҙарында: алтын ҡул, ҡорос рух, көмөш, аҫыл таш, гәлсәр йәйғор, таш-тупраҡ, күңелдәге таш, ҡайындарҙың алтындары, «Алтынҡойроҡ – Көмөшъял»ым һ.б.

Һыуҙы, күҙҙе, ҡоштарҙы, аттарҙы, тәбиғәт билдәләрен һүрәтләгәндә төҫтәрҙе һәм уның тондарын бирер һүҙҙәрҙе киң ҡуллана: ҡантүш турғайҙар, аҡ донъя, сал Ҡөрьән, сал аят, һорғолт күк, йәшел моң, сал ағай, күҙҙәр диңгеҙе, йөҙҙәр диңгеҙе, бөләңгерт ут, аҡ көн, бөләңгерт осҡон, аҡ таж, һары моң һ.б.

«Күңелем усағы» шиғырындағы «Ҡайындарға йәшел моңдар бөркөп, Дөрләп-Дөрләп яна усағым» тигән юлдар бик ҡыҙыҡлы: шағир уй-хәтерендә балҡып иҫкә алынған һағышлы йәшлеген ана шулай матур сағыштырыуҙарҙа һүрәтләп биргән.

Аҫылғужа ат образдарын яратып һүрәтләй. Уның аттары төрлө төҫтә, хатта кеше кеүек һөйләшәләр. «Әкиәт менән осрашыу», «Йәшел ат», «Башҡынайым

утлыҡсаға...», «Юртаҡтарҙы аҡ сергеләр ябып...», «Ысын булырҙай төш». «Ҡыуайыҡ, дуҫ, аттарҙы!», «Ағайҙар», «Исем һәм ат» шиғырҙары бының асыҡ миҫалы. Атҡа бәйле терминдар ҙә бихисап: Аҡбуҙ, ҡонан, алаша, йәм-йәшел ат, Ҡырҡмыш тай, Арғымаҡ, Толпар, Дөл-дөл, йүгән, кәртә, нуҡта, даға, сана, утлыҡса, юшай, дилдбегә, ҡамсы, тәртә һ.б.

Төшкә ингән йәшел ат «Башын алыр, имеш, алдарында Йүгән сыңғылдатҡан кеше генә».

Аҫылғужаның халыҡ мәҡәл-әйтемдәрен, сеңләүҙе, хатта һәр кемгә билдәле булған таҡмаҡты шиғырҙарында уңышлы ҡулланыуын күрәһең: «Ситтә олтан булыу һәйбәт»; «ауыҙ менән һауанан ҡош ауламай», «Бушҡа ауҙармай бушты», «үткәреп энә күҙенән». Улар шиғыр мәғәнәһен ыҡсымлата төшә.

*Иртән тороп тышҡа сыҡһам,*
*Һыйыр һайрай амбарҙа,*
*Тауыҡтарға тоҙ ялаттым,*
*Бесән һалдым ҡаҙҙарға.*

Был миҫал «Күҙҙе асҡас» шиғырынан алынды.

Ситләтеп әйтеп, өгөт-нәсихәт биреүгә ҡоролған аллегорик әҫәр – мәҫәлде Аҫылғужа шиғырын тасуири йәһәттән көслө, тәьҫирле итеү өсөн ҡуллана: «Күҙҙе асҡас», «Тапмайҙар», «Исем һәм ат», «Үҙгәрештән үҙгәрештәр». «Иҫке мәҫәлдең яңы варианты» шиғырына урыҫ әҙәбиәтенән «Аҡҡош, Суртан һәм Ҡыҫала» («Лебедь, Шука и Рак») мәҫәленең бер нисә юллыҡ өлөшө һүрәтләү сараһы булараҡ килеп ингән.

Аҫылғужа «Татлыларҙың татлыһы ни?», «Уйһыулыҡта, таңғы һиллек һаҡлап...», «Мәңгелек тупһаһында», «Тиҙлек», «Мин тамуҡҡа эләгермен, бәлки...», «Әйләнә Ер, аға йылдар...», «Ғүмер», «Күңелдәргә юл ярам», «Тыуымдан ҡалмаған, үлемдән дә ҡалмаясаҡ» шиғырҙарында тормош һәм яҙмыш тураһында тәрән уйлана.

Донъяның фанилығын «Әйтемгә ҡаршы әйтем» шиғырындағы юлдар раҫлап та ҡуйған кеүек: «Хәҡиҡәт тигәндәре лә һис тә тыуымайҙар бәхәстә».

«Ағайҙар» шиғырында әҙәби донъяға сығыу ҡыйынлығы, өлкәндәрҙең йәштәрҙе йомош-юлға йөрөтөп, инде 40-ҡа етһәләр ҙә уларға юл бирмәй, хатта аяҡ салыуҙары, ярҙам урынына үҫергә бирмәүҙәре кеүек тормоштоң ауыр баҫҡыстары һүрәтләнә. «Исем һәм ат» шиғырында исем алыуҙы модаға әйләндереүсе яҙыусыларҙан көлә, «Эш бит исемдәрҙә түгел, Әлеге шул есемдә» тигән һығымта яһай.

Шиғырҙарҙа дини йолалар ҙа арыуыҡ урын ала: «Тәңребеҙ үҙе ясин сыҡҡан Батырыбыҙ йыназаһында!» («Салауаттың йәше»), «Сал Ҡөрьәндән уҡый сал аят: «Аят моңо күҙ йәштәрем аша Ағыла ла һеңә был ергә», «Һиңә мәңгелек ул хаҡ донъянан Аҡ донъяға тартып алырға?» («Һиңә һуңғы төйәк булған ерҙә...»); «Минең рухҡа бәлки аят уҡыр...», «Теге донъя» («Салауаттың диңгеҙгә әйтеп ҡалдырғаны»); «Үҙе алдан хәстәрләүсе «Үҙ балаһы ҡәберен» («Кем тиһегеҙ?»); «ниндәйҙер Көс ҡуйған сират» (“Ғүмер»); «Тағы күпме йыл йәшәрбеҙ – Бынығын күктән һора»; «Йәшәгәнбеҙ әллә мәрттә» («Күҙҙе асҡас»). «Һөйөүгә лә күҙ тейә, ти... Был – яман күҙҙән микән?» – тигән юлдарҙа дини хөрәфәт урын алған. «Мин тамуҡҡа эләгермен, бәлки...» шиғыры тотош йолаға ҡоролған. Дини ҡарашса, һәр кешенең гонаһы теркәлеп барған ғәмәл дәфтәре, теге донъяла гонаһлы кешеләрҙең йәнен яфалай торған эҫе урын тамуҡ һәм үлгән гонаһһыҙ бәндәләрҙең йәне урынлаша торған матур, рәхәт, мул донъя, йәннәт-ожмах шиғыр юлдары менән һүрәтләнгән. Шиғырҙың һуңғы юлы шағирҙың характерына тап килгән кеүек. Аҫылғужа Бизмән йондоҙлоғонда тыуған, шуға күрә лә һәр нәмәне үлсәп

һөйләште, өйҙә мөнәсәбәт нисбәтен дә тоторға тырышты. Редакцияла эшләгән саҡтарында, «Китап» нәшриәте директоры булғанда, үҙ файҙаһын күреп, аҡса йәки күстәнәс алып йөрөмәне. Ришүәтте ене һөймәне.

*Мин йөрөрмөн сикһеҙ киңлектәрҙә,*
*Барын алмай, тапмай юҡтарын,*
*Тамуҡ күреп ожмах баҡсаларын,*
*Ожмах күреп тамуҡ уттарын...*

тигән юлдарында уның характеры асыҡ сағылған. Ул бизмәнсе булғас, ике яҡ нисбәтен дә бер тигеҙ тоторға тейеш.

«Анонимкаға рәхмәт йыры» шиғырында ошондай юлдар бар:

*Барса анонимщикты ла*
*Ҡыласаҡмын фәрештә –*
*Аллаға ни кәрәкмәй ҙә*
*Ғәҙел булыу һәр эштә.*

Бында шағирҙың күңелһеҙ уйҙары, бысраҡлыҡ менән тулған донъяға дәһри ҡарау сифаттары сағылып ҡалған.

Шағирҙың шиғырҙарында осраған әкиәт, төш алымдары ла уның күңел хистәренең тәрәнлеген, әҫәренең эмоциаль көсөн асыуы менән иғтибарға лайыҡ. Мәҫәлән, лирик герой төшөндә «Йәшел ат» күрә, йүгән сыңғылдатырға уйлай, ә «Әкиәт менән осраша» шиғырында ат ҡылдары табып ала һәм уны аңғармаҫтан өтөп ебәреүгә күҙ асып күҙ йомғанса Алтынҡойроҡ-Көмөшъял алдына килеп баҫа: ат уны һул ҡолағынан индереп уңынан сығарырға саҡыра һ.б. «...Ауылды гел Күрә башланымсы төшөмдә» («Берәүҙең хаттарынан»).

Аҫылғужаның шиғырҙарында конкрет тарихи ваҡиғалар, ер-һыу атамалары, заман һулышы, ваҡыт арауығы асыҡ күрһәтелә. Салауат, Палдиски, Балтика, Башҡортостан, Өфө, Баймаҡ, Ирәндек, Иң күбе – гидронимиялар, Башҡортостандың данлыҡлы йылға-һыуҙарының атамалры: Һаҡмар, Йүрүҙән, Эйек, Ағиҙел, Сөн, Ҡариҙел, Эҫем...

«Үҙгәрештәге үҙгәрештәр», «Күҙҙе аҫҡас», «Иҫке мәҫәлдең яңы варианты», «Тапмайҙар», «Анонимкаға рәхмәт хаты», «Заман йырҙарынан зар» шиғырҙары быға миҫал.

Аҫылғужа – лирик шағир. Урманлы-йылғалы Баймаҡ егете булараҡ, уның шиғырҙарында ағастар атамаһы ла мул ҡулланыла: муйыл, ҡайын, уҫаҡ, миләш, саған, шыршы, ҡарағай, йүкә һ.б.

Шулай итеп, Аҫылғужа «Мәңгелек тупһаһында» тигән йыйынтығында үҙен уратып алған тәбиғәт, ғүмер һәм мәңгелек, кеше яҙмыштары, таҙарыу һәм үлем хаҡында тос фекер йөртә. Образлы, халыҡсан тел ярҙамында автор лирик, фәлсәфәүи, фәнни һәм дини картиналар тыуҙыра.

Аҫылғужа шиғырҙары хаҡында һүҙ йөрөткәндә бер хатты миҫал итеп килтермәй булмай. Бына ул:

«Хөрмәтле Динислам ағай!

*«Башҡортостан» гәзитенә һеҙҙең 1996 йылдың 2 сентябрендә яҙған хатығыҙ миңә осраҡлы рәүештә быйыл, 12 майҙа ғына, килеп юлыҡты. Редакция хеҙмәткәрҙәре уны баҫырға ла әҙерләгән булған, ни сәбәптәндер донъя күрһәтмәгәндәр, миңә бирергә лә «онотҡандар». Булғылай ундай хәлдәр. Ярай, ҡулыма килеп эләгеүе – үҙе бер шатлыҡ.*

*Хатығыҙға, ысынлап та, бик ҡыуандым. Минең күп йылдар элек, Германияла айҙан ашыу эшләгән осорҙа, яҙылған шиғыр һеҙҙә бик һәйбәт тойғолар уятҡан*

*икән – яҙыусыға бик ҙур һөйөнөс бит инде. Һеҙҙең Бөйөк Ватан һуғышы тураһындағы әҫәрҙәргә иғтибар итеүегеҙ ҙә – бик күңелле хәл. Башҡорт кешеһе грамотаһыҙ түгел ул.*

*Мин ысынлап та Германияла 1971 йылда булған сағымда беҙҙең һалдаттар ерләнгән бик күп ҡәберлектәрҙе күрҙем. Бик тәрбиәләп ҡарайҙар ине уларҙы. Шунда «С Урала», «Из Башкирии» тигән бер нисә ҡәбер таштарына иғтибар иттем. Фамилиялары төрлөсә ине... Өфөгә ҡайтҡас, сит-ят яҡтарҙа баштарын һалған яҡташтарым хаҡында уйланып яҙғайным ул шиғырҙы («Яҡташ янында» –* ***М. Б.****). Фамилияһын шиғыр ҡалыбы өсөн ҡайнымдың исеменән яһаным. Ҡайным Юлдашбаев Хәмиҙулла тәүге һуғышта немецтарҙа әсир йөрөгән, немецса яҡшы һөйләште, хатта өйләнеп тә ҡала яҙған. 1888 йылғы ине, 1974 йылда вафат булды. Шәп кеше ине. Федоровка районы Юлдаш ауылынан бөрйән ырыуы башҡорто. Күп белә ине. Шуның хөрмәтенә исеменән фамилия яһаным...*

*Ә инде һеҙҙең еҙнәгеҙ Хәмиҙуллин Талип ағай, тимәк, минең ҡайным шикелле рәк кеше булған. Яу ҡырында сит яҡта ҡалыуы бик йәл. Мин Хәмиҙуллиндар кеүек меңәрләгән яугирҙәр рухын бик хөрмәт итәм. Әсәйемдең тәүге ире Әйүпов Зәки ҙә, мәҫәлән, хәбәрһеҙ юғалған. «Хәбәрһеҙ юғалғандар» тигән шиғырым да бар, уға көйҙәр ҙә яҙылған, тик, ниңәлер, башҡармайҙар ғына.*

*Динислам ағай, үҙегеҙ ҡайһы тирәләрҙә һуғыштығыҙ? Башҡорт дивизияһында түгелме? Мин үҙебеҙҙең атлылар дивизияһы хаҡында ике повесть яҙҙым. Береһе «Ниндәй көн был?..» тигән китабыма индерелгән. Икенсеһе 1995 йылдың ноябрендә «Ағиҙел» журналында сыҡты, «Ҡайҙа генерал?» тип атала. Хәҙер өсөнсөһөн яҙам (ҡыҙғаныстҡа ҡаршы, яҙып өлгөрмәне –* ***М. Б.****), ул атлылар дивизия артиллеристары Ғәбит Әхмәров (Советтар Союзы Геройы, минең бажа, хәҙер мәрхүм) һәм яҡташым, Темәстән Миңлегөл Арыҫланов (иҫән әле) тураһында булыр. Үҙегеҙҙең яу йылдарындағы эштәрегеҙ хаҡында нисек теләйһегеҙ, шулай итеп яҙып ебәрегеҙ күп-күп итеп, мин бында эшкәртеп һеҙҙең исемдән берәй журналда баҫтырырмын. Үҙегеҙ ауырынһағыҙ, берәй туғанығыҙҙан әйтеп яҙҙырығыҙ. Яугирҙәр иҫтәлеге беҙгә бик ҡәҙерле бит.*

*Хәмиҙуллин Талип ағайҙың һәм Фатима еңгәйҙең улы Әҙехәмиттең атаһы иҫтәлегенә тоғро булып йәшәүенә, әсәһен ҡарауына, дүрт малай үҫтереүенә айырата һөйөндөм. Кесе улы Әнүәрҙең һабантуйҙағы ат сабыш еңеүе бик ҡыуандырҙы, сөнки бала саҡтан үҙем дә ундай ярыштарҙа ҡатнаша торғайным, әле лә ат яратам.*

*Үҙегеҙҙең һаулыҡ-таҙалыҡ нисек? Бирешмәйһегеҙҙер, сөнки һеҙҙең кеүек ут-яу үткән кешеләр ныҡ була ул. Артабан да бирешмәй йәшәгеҙ, донъяны матур итеп күтәрегеҙ... тып көтөгөҙ, балаларығыҙ, ейән-ейәнсәрҙәрегеҙ, туғандарығыҙ һәйбәт йәшәһен. Башҡорт башҡа халыҡтарҙың күҙен ҡыҙҙырып, матур йәшәргә тейеш. Мин үҙем дә шулай йәшәргә тырыштым. Әле 53 йәш менән барам...*

*Һау булығыҙ!*

14 май 1998 йыл. Аҫылғужа Баһуманов».

Был хатты Аҫылғужаның ижадына өҫтәмә итеп килтерәм, ул мин яҙғандарҙың ҡайһы берҙәрен раҫлап тора. Унан яҙыусының үҙенең уҡыусылары менән тығыҙ бәйләнештә йәшәүен дә асыҡ күрһәтә.

**Миңниса БАҺУМАНОВА.**

*2010 – Бөтә Рәсәй*
*халыҡ иҫәбен алыу йылы*

# БЫУАТТАР ТУПЛАҒАН ТӘЖРИБӘ

2007 йылда «Китап» нәшриәтендә күренекле башҡорт тарихсыһы Рим Янғужиндың «Этнический состав населения Башкортостана» тигән китабы донъя күрҙе. 2002 йылғы Бөтә Рәсәй халыҡ иҫәбен алыу мәғлүмәттәренә арналған хеҙмәттең «Баш һүҙ»ендә киң йәмәғәтселек өсөн фәһемле фекерҙәр байтаҡ.

Халыҡ иҫәбен алыуҙың элекке һәм хәҙерге үҙенсәлектәрен белеү мөһим әһәмиәткә эйә, тип яҙа автор. 1897 йылғы Рәсәй империяһы халҡының дөйөм иҫәбен алыу ҙа ентекле иғтибарға лайыҡ. Рус дәүләтендә ғөмүмән халыҡ иҫәбен алыу XV–XVI быуаттарҙа ғына башлыса ер һалымы йыйыу өсөн индерелеп, уның мәғлүмәттәре Яҙыу кенәгәләрендә (писцовые книги) туплана. Һалым берәмеге булып ул саҡта ерен, ҡаралтыларын һәм «тартыу көсө»н (үгеҙ, йылҡы малы) – үҙ эсенә алған хужалыҡ иҫәпләнгән. Ошоға бәйле артабан хужалыҡ иҫәбе халыҡ тураһында мәғлүмәт йыйыуҙың төп формаһы булып китә. 1678 һәм 1710 йылдарҙа ошондай һуңғы иҫәп алыу уҙғарыла. Швеция менән Рәсәй араһында һуғыш ҡыҙған мәлдә, 1710 йылда, үткәрелгәне, һалым түләүсе хужалыҡтарҙың 20 процентҡа кәмеүен асыҡлай. Петр I уны танымай һәм 1678 йылғы иҫәп буйынса һалым йыйыуҙы дауам итә. Илдең ауыр финанс хәлендә ҡалыуы батшаны йән башына ҡарап һалым һалыуға күсергә мәжбүр итә. Шулай итеп, халыҡ иҫәбен алыу формаһы үҙгәрә, һалым иҫәбе булып ир заты иҫәпләнә башлай.

1718 йылдың 26 ноябрендә Петр I рәүиз үткәреү тураһындағы указға ҡул ҡуя. Тәүге рәүиз 1718–1719, һуңғыһы 1857–1859 йылдарҙа уҙғарылып, ирҙәр, шул иҫәптән рекруттар, һаны алына. III рәүиздән башлап ирҙәр менән бергә ҡатын-ҡыҙҙар тураһында ла мәғлүмәттәр тултырыла. VII рәүиз, «йәшенә, енесенә, быуынына йәки ҡәбиләһенә һәм законына ҡарамай», бөтә кешеләрҙе лә иҫәпкә ала. VIII, IX һәм X рәүиздәрҙә иҫәп алыу ҡағыҙҙарының формалары аныҡлана, уларҙы тултырыу буйынса күрһәтмәләр эшләнә V–X рәүиздәр мәғлүмәттәре Башҡортостан Республикаһының Үҙәк дәүләт тарихи архивында һаҡлана. Уларҙы ҡарап, XIX быуаттың тәүге яртыһында Башҡортостандың этник составы нисек булғанын күҙ алдына килтерергә мөмкин. Һуңғы рәүиздәр менән бергә Рәсәйҙә хужалыҡ иҫәбен алыу ҙа тергеҙелә. Был дәүләттең хужалыҡ тормошон белеүгә ҡыҙыҡһыныуы артыуын күрһәтә, сөнки илдә төп һалым түләүсе булып крәҫтиәндәр ҡала килә. Хужалыҡ иҫәбен алыу программаһы ике яҡлы булып, берҙән, иҡтисади мәғлүмәттәр туплаһа, икенсенән, демографик хәлде, мәҫәлән, йәш, енес, мәшғүллек, миграция мәсьәләләрен дә өйрәнә.

XIX быуаттың 40-сы йылдарында үткәрелгән кадастр отрядтары эшмәкәрлеге лә илдәге иҡтисади һәм демографик хәлде асыҡлауға ҙур өлөш индерә. 1845

йылда асылған Император рус географик йәмғиәтендә эшләй башлаған йәш иҡтисадсы-статистар төркөмө крәҫтиәндәр тормошоноң төрлө яҡтарын иҫәпкә алыу һәм яҙып ҡалдырыу менән шөғөлләнә. 60-сы йылдар башында батша хөкүмәтенең статистика бүлегенә Н. П. Семенов-Тян-Шанский етәкселек итә. Тап шул йылдарҙа статистика киләмле реформаларға дусар ителә лә инде. Иҫәп алыуҙа бөтә халыҡ ҡатнаша башлай, кешенең йәше, енесе, милли сығышы, ҡайһы ҡатламдан булыуы, белеме һәм шөғөлө күрһәтелә.

1897 йылғы Рәсәй халҡының дөйөм иҫәбен алыуға тиклем илдә 1860 – 1889 йылдарҙа айырым ҡалаларҙа һәм губерналарҙа һайланма иҫәп алыу үткәрелә. Мәҫәлән, ошондай иҫәп 1861, 1862, 1864, 1869, 1881 йылдарҙа Петербург ҡалаһында, 1871, 1882 йылдарҙа Мәскәүҙә үткәрелеп, уларҙа ярайһы ҡиммәтле тәжрибә туплана. 1897 йылғы иҫәп алыу халыҡ-ара статистика ойошмаларының кәңәштәрен, ҡайһы бер илдәрҙең тәжрибәһен иҫәпкә алып үткәрелә. Кампания алдынан П. П. Семенов-Тян-Шанский етәкселегендә бик ҙур ойоштороу эше башҡарыла. 1870 йылда Бөтә Рәсәй статистары съезы булып уҙа, 1874 йылда ошо съезд йоғонтоһо нигеҙендә иҫәп алыуҙы үткәреү положениелары проекты эшләнә. Проект комиссия тарафынан 20 йыл үткәс кенә раҫлана. Баш иҫәп алыу комиссияһына етәкселек итеү эске эштәр министрына йөкмәтелеүе был эшкә ҙур әһәмиәт бирелеүе тураһында һөйләй. Урындарҙағы иҫәп алыу комиссиялары башында губернатор йәки өйәҙ дворяндары башлығы тора. Иҫәп алыусы итеп уҡытыусылар, руханиҙар, ябай кешеләрҙең иһә иң белемлеләре тәғәйенләнә. Улар 14 һорауға яуап алырға тейеш була: 1) фамилияһы, исеме һәм атаһының исеме; тома һуҡырлыҡ, һаңғыраулыҡ, аҡылдан яҙыу тураһында билдә ҡуйылған; 2) енесе, 3) ғаилә башлығына мөнәсәбәте; 4) нисә йәштә; 5) ғаилә хәле; 6) ҡайһы ҡатламға ҡарай, байлығы йәки дәрәжәһе; 7) тыуған ере; 8) теркәлгән урыны; 9) ғәмәлдә ҡайҙа йәшәй; 10) дине; 11) туған теле; 12) белеме: а) уҡый-яҙа беләме; б) ҡайҙа уҡый, уҡыған; 13) ни менән шөғөлләнә, кәсеп итә, вазифаһы йәки хеҙмәте; 14) хәрби хеҙмәткә мөнәсәбәте.

1897 йылдағы иҫәп алыу ҙур әһәмиәткә эйә була. Милләткә ҡағылышлы һорау туранан-тура бирелмәһә лә, туған тел һәм дин тураһында белешмә теге йәки был халыҡтың иҫәбен асыҡларға мөмкинлек бирә. Ырымбур губернаһында йәшәгән 1,6 миллион кешенең, мәҫәлән, 254 – 561 меңе, йәғни 16 проценты башҡорт булған. Рустар 1126040 кеше (70 процент), татарҙар 92926 (5,8), украиндар – 2,3, мордвалар – 2,2, башҡалар 4,6 процент тәшкил иткән. Өфө губернаһы халҡы 2196642 кешегә етеп, башҡорттар 899910, йәғни 40,9 процент, рустар – 834135 (37,9), татарҙар 184817 (8,4), типтәрҙәр – 39900 (1,7), мишәрҙәр – 20900 (0,7) һ.б. теркәлгән. Мариҙар, сыуаштар, украиндар, удмурттар ҙа күренә. Бынан тыш, Вятка губернаһында 13909, Пермдә – 85395, Һамарҙа – 57242, Һарытауҙа 1262 башҡорт теркәлгән. Шулай итеп, 1897 йылғы Рәсәй империяһының дөйөм халыҡ иҫәбен алыу илдә 1312360 башҡорт йәшәүен асыҡлаған.

1920 йылғы иҫәп алыу Граждандар һуғышы шарттарында үтә, ғәмәлдә тамамланмай. Кампания Башҡорт Автономиялы Республикаһы барлыҡҡа килеү мәлендә, административ сиктәр үҙгәреү менән бәйле, бер нисә тапҡыр ҡайтанан ҡарала. Тарихсы Р. М. Раимовтың мәғлүмәттәре буйынса, 1917 йылда «Башҡортостан биләмәләрендәге халыҡ» 3134 мең кеше булып, башҡорттар 1186 мең, йәғни 36,4 %, татарҙар иһә 459,6 мең (15%) тәшкил иткән. Р. Ғ. Кузеев фекеренсә, 1920 йылда Оло Башҡортостанда 3290 мең кеше йәшәгән, шул иҫәптән

башҡорттар – 960 – 1050 мең, татарҙар – 266,8 мең, типтәрҙәр – 146,6 мең, мишәрҙәр – 166,2 мең. Башҡорт халҡының күпләп кәмеүе Беренсе донъя һәм Граждандар һуғыштарында күпләп ҡырылыу менән аңлатыла. Айырыуса Граждандар һуғышында тиҫтәләрсә мең башҡорт язалап үлтерелә.

1920 йылғы иҫәп буйынса Өфө губернаһының Минзәлә өйәҙендә 156789 башҡорт теркәлгән. Татар АССР-ы ойошторолғас, был өйәҙҙе Башҡортостандан айырып, яңы республикаға ҡушалар. Дәүләт – административ фактор йоғонтоһонда Минзәлә башҡорттары татар этносы тарафынан «йотола» башлай, һәм 1926 йылғы иҫәп алыуҙа улар ни бары 1752 кешегә ҡала.

1926 йылғы иҫәп буйынса Башҡортостанда 2665836 кеше теркәлгән. Шуларҙың 625845-е – башҡорт (СССР-ҙа барлығы 713684), 1064707-һе – рус, 461871-е – татар, 135960-ы – мишәр, 23390-ы типтәр булған. Төп халыҡ иҫәбенән Арғаяш кантонында йәшәгән 40984 башҡортто алып ташлағанда, республикала титуллы милләт вәкилдәре – 22,8 %, рустар – 40,3 %, татарҙар – 18 %, мишәрҙәр – 4,3 %, типтәрҙәр 0,9 % күренә. Был иҫәп осоронда башҡорттарҙың икеләтә тиерлек кәмеүе ҡоролоҡ арҡаһында килеп тыуған ҡаты аслыҡ, тиф һәм ваба ауырыуҙары менән аңлатыла. 1926 йылда мишәрҙәр һәм типтәрҙәр һуңғы тапҡыр иҫәпкә индерелә.

Мишәрҙәр фин-уғыр сығышлы төрки халыҡ булып, Октябрь инҡилабына тиклем айырым этнос булараҡ иҫәптә йөрөтөлә. Әммә уларҙың тулыһынса ойошоп бөтөүе билдәле тарихи сәбәптәр арҡаһында өҙөлөп ҡала. Мишәрҙәрҙең үҙ аңы көслө, улар үҙҙәренең мишәр икәнлеген яҡшы аңлай һәм яйы сыҡҡанда күрһәтә килә. Типтәрҙәр ҙә – Октябрь инҡилабына саҡлы формалаша башлаған төрки халыҡ. XVIII быуатта типтәрҙәрҙең төп өлөшөн төрлө сәбәптәр арҡаһында общинанан сыҡҡан һәм шуның менән аҫабалыҡ хоҡуғынан мәхрүм ителгән башҡорттар тәшкил иткән. Артабан типтәрҙәр иҫәбенә татар, мари һәм башҡалар ҙа индерелә башлаған. Типтәрҙәрҙең ойошоп бөтөүенә Совет дәүләтенең ер мәсьәләһе буйынса яңы сәйәсәте сик ҡуйған.

1939 йылғы иҫәп буйынса Башҡортостанда 3158969 кеше теркәлеп, шуларҙың 671118-е – башҡорт, 1281347-һе – рус, 777230-ы татар булған. Мишәр һәм типтәрҙәрҙе татар этносына индереү арҡаһында һуңғылары 13 йыл эсендә ике тапҡыр самаһына арта. Республиканың милли составы проценттар күҙлегенән ҡарағанда түбәндәгесә булып китә: башҡорттар – 21,2 %, рустар – 40,6 %, татарҙар – 24,6 %, башҡалар 13,6 %.

1959 йылда үткәрелгән СССР халыҡтарының иҫәбен алыуҙа Башҡортостанда 3341609 кеше күренә. Башҡорттар 737711, йәғни 22,1 процент, рустар 1418147 (42,4), татарҙар – 768566 (23), башҡалар 417185 (12,5) процент теркәлгән.

1970 йылғы иҫәп буйынса Башҡортостандың этник йөкмәткеһе түбәндәгесә: башҡорттар – 892248 (23,4 процент), рустар – 1546304 (40,5), татарҙар 944507 (24,7), сыуаштар – 126638 (3,3), мариҙар – 109638 (2,9), удмурттар – 27918 (0,7), белорустар – 17985 (0,5), немецтар – 12104 (0,3), йәһүдтәр – 6668 (0,2) һ.б. Иҫәп буйынса республикала йәшәүселәр 3818075 кешегә еткән.

Туғыҙ йыл эсендә, йәғни 1979 йылғы иҫәп алыуҙа, Башҡортостан халҡы әллә ни артмаған – 3844280 кеше. Этник күҙлектән ул түбәндәгесә күренә: башҡорттар – 935880 (24,3 процент), рустар – 1547893 (40,3), татарҙар – 940446 (24,5), сыуаштар – 122344 (3,2), мариҙар – 106793 (2,8), украиндар – 75.571 (2), мордвалар – 35900 (0,9), удмурттар – 25.906 (0,7) һ.б.

1989 йылғы иҫәп алыуҙа Башҡортостанда титуллы милләттән 863808 (21,9

процент), рустарҙан 1.54829 (39,3), татарҙарҙан 1120707 (28,4), сыуаштарҙан – 118509 (3), мариҙарҙан 105768 (2,7) һ.б. кеше теркәлә. Украин, мордва, удмурт, белорус, немец һәм йәһүдтәрҙән тыш, ҡаҙаҡ, әзербайжан, үзбәк, грек һәм әрмәндәр ҙә күренә. 1989 йылғы иҫәп буйынса СССР-ҙа барлығы 1449 мең башҡорт йәшәгән. Шуларҙың 59,6 проценты үҙ республикаһында көн күргән. Силәбе өлкәһендә 161,2 мең, Ырымбурҙа – 53,3 мең, Пермдә – 52,3 мең, Свердловскиҙа – 41,5 мең, Төмәндә – 41,1 мең, Ҡурғанда – 17,5 мең, Һарытауҙа – 15 мең, Һамарҙа – 10 мең, Татарстанда – 19,1 мең, Удмуртстанда – 5,2 мең, шулай уҡ Ҡаҙағстанда – 41,8 мең, Үзбәкстанда 34,8 мең башҡорт теркәлгән. Бынан тыш, башҡорттар Тажикстанда, Украинала, Балтик буйы республикаларында һ.б. йәшәгән.

Башҡорт әҙәби телен көньяҡ һәм көнсығыш башҡорт һөйләштәре нигеҙендә барлыҡҡа килтереү, төньяҡ-көнбайыш һөйләш үҙенсәлектәрен инҡар итеү арҡаһында төньяҡ-көнбайыш башҡорттар мәҙәни-тел үҫешенән ситләшә. 1970 – 1980 йылдарҙа был төбәктең башҡорт ауылдарында туған телде өйрәнеүҙе индереүҙе 80-се йылдар аҙағында КПСС өлкә комитетының ул саҡтағы беренсе секретары Р. Х. Хәбибуллиндың ҡаты тыйыуы был процесты тағы ла көсәйтте. Төньяҡ-көнбайыш башҡорттарға ҡарата уйланмаған милли сәйәсәт алып барыу һөҙөмтәләре статистикала ла сағылыш тапты. 1926 йылғы иҫәп буйынса республикалағы 625,8 мең башҡорттоң 280 меңе туған теле тип татар телен күрһәтә, 1939 йылда ундайҙар – 306 меңгә, 1959 йылда – 309 меңгә, 1979 йылда 333 меңгә еткән. 1979 – 1989 йылғы иҫәп алыуҙарҙа башҡорт халҡы үҙ республикаһында, бер ниндәй тышҡы йоғонто кисермәйенсә 72,1 меңгә кәмей. СССР буйынса иһә 78 меңгә арта.

Башҡорттар нигеҙҙә төньяҡ-көнбайыш райондарҙа аҙая. 1979 йылғы иҫәп буйынса, тип яҙа Р. Ғ. Кузеев, Балтас, Благовар, Борай, Бүздәк, Дүртөйлө, Йәрмәкәй, Илеш, Кушнаренко, Миәкә, Тәтешле, Туймазы, Саҡмағош һәм Яңауыл райондарында башҡорттар 251694 кеше теркәлһә, 1989 йылда 142106-ға ҡала. Ошо уҡ арала татарҙар, үрҙә атап үтелгән райондарға Краснокама һәм Өфө райондарын да индереп, Бүздәк районын алып ташлағанда, 151547-нән 251232-гә күбәйгән. Был, билдәле, башҡорттарҙы «татар» итеп яҙҙырыу һөҙөмтәһе булып, унда татар ижтимағи ойошмалары, киң информация саралары, Ҡазандың шовинистик рухлы ғалимдары ҙур роль уйнаны.

Башҡорттарҙың үҙ республикаһында кәмеүендә миграция күренештәре лә сағылыш тапмай ҡалманы. Республиканан ситтә йәшәгән башҡорттарҙың 150 мең самаһына артыуында 114 меңләбе тап миграция өлөшөнә тура килә. 2002 йылға Бөтә Рәсәй халҡы иҫәбен алыу «Бөтә Рәсәй халҡы иҫәбен алыу тураһында» яңы федераль закон нигеҙендә ойошторолдо. Иҫәп ҡағыҙҙары махсус әҙерлекле иҫәпселәр тарафынан демократик нигеҙҙә – һорауҙарға яуап биреүселәрҙең ихтыярын иҫәпкә алып булдырылды. Улар ысынбарлыҡты сағылдыра.

**Мәхмүт ХУЖИН әҙерләне.**

# ТЫЙЫУ ЙОЛАҺЫ

## Асылдан тайпылма

Бөтә донъяла, төрлө ил ҡәүемдәрендә ижтимағи тормошҡа, көнитмешкә, шәхси сифаттарға, әхлаҡ-әҙәпкә бәйле меңәр йылдар буйына ҡулланылған, йола-ҡағиҙәгә әйләнгән эш-ҡылыҡ тәртиптәре, ғөрөф-ғәҙәттәр, аманаттар бар. Улар оҙайлы ваҡыт ҡат-ҡат һыналып, күп ҡабатланып, ырыу, йәмғиәт ағзаларының ғәҙәтенә кергән. Йәшәйешкә ҡағылған, кешеләрҙең холҡон, үҙ-ара мөнәсәбәттәрен көйләүгә ҡоролған йолаларҙан, ҡағиҙәләрҙән тыйыу ғәҙәттәре лә бар. Әйтәйек, берәй эш-ҡылыҡҡа рөхсәт бирмәү, уны туҡтатыу, ғәмәлгә ашырмау, бәғзе теләккә, хис-тойғоға, кисереш-ярһыуға ирек ҡуймау, тотанаҡһыҙлыҡты, тәртипһеҙлекте тыйыу, кешене тынысландырыу, баҫылдырыу…

Тыйыу кешеләргә, ғаиләгә, ырыуға, ҡәрҙәштәргә, ғөмүмән, йәмғиәткә, йортилгә имен, ырыҫлы йәшәү өсөн ҡулланылған йола, ҡанун булған. Уны тотмағандар бәлә-ҡаза күргән, язаға тарттырылған. Табу, тыйыу вә аманаттар йыйымы, әхлаҡи ҡанундар һымаҡ, боронғо мифологияла, йәғни риүәйәттәрҙә, хикәйәттәрҙә сағылыш тапҡан.

Билдәле булыуынса, тыйыу – Аллаһы Тәғәлә биргән әмер һәм уны боҙмау, асылдан тайпылмау фарыз. Дини хикәйәттәрҙә тасуирланыуынса, Һауа (Ева) йылан йәки иблис ҡотҡоһона әүрәп, Әҙәм уға эйәреп, ожмах баҡсаһында изгелекте һәм яуыҙлыҡты танып белеү ағасынан тыйылған емеште ауыҙына ала. Аллаһы Тәғәлә әмерен боҙоу, яңылышыу Әҙәм менән Һауаны һәм бөтә кешелек донъяһын ыҙа сигеүгә, бәхетһеҙлеккә төшөрә. Илаһ тарафынан яза бирелеп, Әҙәм ҡатыны менән ожмахтан ҡыуыла, үҙҙәре лә, нәҫелдәре лә тәғәмен, икмәген тиргә батып табыуға дусар ҡылынып, үлемһеҙлектән мәхрүм ителә. Шулай итеп, гонаһ ҡылыу әҙәм затының төп асылын, тәбиғәтен, булмышын үҙгәртә, кеше әхлаҡи йәһәттән Хоҙай яралтҡан өлгөһөн, рәүешен юғалта. Илаһ юлынан тайпылыу бына шулай башлана. Тыйыуҙы изге һанамай, һанға һуҡмай эш итеүселәр, йолаларҙы, ҡағиҙәләрҙе боҙоусылар тән йәки йән яфаларына дусар була.

Илаһ хасил иткәндә, ҡушҡанды һанламау, ҡәҙерләмәү – иң гонаһлы эш-ҡылыҡ, һис ҡасан ярамаған, ғөрөф-ғәҙәткә һыймаған яҙыҡ. Боронғо йәһүд риүәйәтендә изге каста башы Аарондың улдары Надав менән Авиуд сакраль йөкләмәләрен үтәүҙең тәүге көнөндә үк Яхвеның уты менән ялмана. Сөнки улар, серле ут ҡабыныуҙы көтмәйенсә, “ят ут“ тоҡандыра. Аарон йәнә үгеҙ ҡиәфәтендә алтын тәре яһай һәм ботҡа табыныуға һалынған тыйыуҙы үтәмәүе менән Яхвеның нәфрәтен тыуҙыра, Моисейҙың яҡлауы арҡаһында ғына ҡотолоп ҡала.

Яхве илаһ тәүге пәйғәмбәр Моисей аша Синай тауында ун дини ҡанун, йәғни Хоҙай алдында инсандың (кешенең) тәртибен тәьмин иткән, холҡон көйләгән тыйыуҙар, әмерҙәр ебәрә. Быға тағы ла йола, әхлаҡ, хоҡуҡ сифатындағы байтаҡ ҡушыуҙар өҫтәлә. Был хоҡуҡи һәм этик нормалар дин, ғаилә, йәмәғәт, гражданлыҡ нигеҙҙәре һымаҡ ҡабул ителә: бер Аллаға табыныу, ғаилә, шәхес, йәмғиәт именлеге, ата-инә абруйы, ир-ҡатын, енси мөнәсәбәттәр әҙәбе…

Тарихҡа баҡһаҡ, тәүтормош ҡәүемдәрендә һәм артабанғы йәшәйештә афәт, бәлә-ҡаза хәүефенән ҡурсаланыр, ҡотолор өсөн берәй нәмәгә, эш-ҡылыҡҡа, ниндәйҙер һүҙгә табу һалынған. Табу кешене, көнкүреште тейешле ҡағиҙәләргә буйһондорған. Буйһонмағандар илаһи көстәр тарафынан язаланасағына ышандырылған. Көнитмеш, ижтимағи тормош йолаларға, ҡанундарға ярашлы булырға, кешеләр иһә тыйыуҙарға күнергә бурыслы. Бер әкиәттә батша әйтеүенсә: “Батшалығымдың һауаһы шундай: кем дә кем буйһона – шул иркен тын алып, рәхәт йәшәй, кем буйһонмай – шул тыны ҡыҫылып, интегеп үлә“.

Боронғо Ҡытай сығанаҡтарынан мәғлүм булыуынса, мәшһүр дәүләт төҙөүсе Киджа халҡын йолаларҙы үтәргә, ғәҙеллеккә, төрлө кәсептәргә өйрәтә, һигеҙ тыйыу һала. Кешеләр өйҙәрен бикләмәй, урлашыу, әҙәпһеҙлек бөтә. Этик нормалар, кешеләр араһындағы мөнәсәбәт ҡағиҙәләре теркәлгән “Бөйөк закон“ (Хунь фань) көнкүреште күркәм, ҡотло итә. Шулай итеп, йолалар, әхлаҡ-әҙәп нормалары, тыйыуҙар йорт-ил ырыҫын, именлеген тәьмин итә, улар этик, эстетик, педагогик, социологик һәм хоҡуҡи әһәмиәткә лә эйә.

Библияла иһә йәшәйешкә ҡағылышлы ун ҡанун (заповедь) бирелгән һәм улар, ғәмәлдә, тыйыуға ҡайтып ҡала:

– Я Господь, Бог твой, Который вывел тебя из земли Египетской, из дома рабства; да не будет у тебя других богов пред лицом Моим.

– Не делай себе кумира и никакого изображения того, что на небе вверху, и что на земле внизу, и что в воде ниже земли; не поклоняйся им и не служи им, ибо Я Господь, Бог твой, Бог ревнитель, наказывающий детей за вину отцов до третьего и четвертого рода, ненавидящих Меня, и творящий милость до тысячи родов любящим Меня и соблюдающим заповеди Мои.

– Не произноси имени Господа, Бога твоего, напрасно, ибо Господь не оставит без наказания того, кто произносит имя Его напрасно.

– Помни день субботний, чтобы святить его; шесть дней работай и делай в них всякие дела твои, а день седьмой – суббота Господу, Богу твоему: не делай в оный никакого дела ни ты, ни сын твой, ни дочь твоя, ни раб твой, ни рабыня твоя, ни (вол твой, ни осел твой, ни всякий) скот твой, ни пришелец, который в жилищах твоих; ибо в шесть дней создал Господь небо и землю, море и все, что в них, а в день седьмой почил; посему благословил Господь день субботний и освятил его.

– Почитай отца твоего и мать твою, чтобы тебе было хорошо и чтобы продлились дни твои на земле, которую Господь, Бог твой, дает тебе.

– Не убивай.

– Не прелюбодействуй.

– Не кради.

– Не произноси ложного свидетельства на ближнего твоего.

– Не желай дома ближнего твоего; не желай жены ближнего твоего, ни поля его, ни раба его, ни рабыни его, ни вола его, ни осла его, ни всякого скота его, ничего, что у ближнего твоего.

Дөрөҫ йәшәү рәүеше ҡағиҙәләре күрһәтелгән, күркәм әхлаҡҡа, сафлыҡҡа өндәгән, кешеләрҙең күңел күҙҙәрен асыусы бер нур, иманлылар өсөн тура юл булған изге Ҡөрьәндә лә байтаҡ тыйыуҙар тәҡдир ителгән:

– Улар Алланан башҡа икенсе илаһҡа доға ҡылмай, Алла харам ҡылған йәнде хаҡһыҙға үлтермәй һәм уйнаш ҡылмай. Әгәр берәй бәндә быны эшләһә, язаһын алыр.

– Ысынлап та, Алла ғәҙел булырға һәм изгелек ҡылырға, яҡындарға бүләк бирергә ҡуша, зина ҡылыуҙан, тыйылғанды эшләүҙән, кешеләргә йәбер-золом ҡылыуҙан тыя.

– Эй, улым! Намаҙ тор, яраҡлы тип табылған эшкә дәртләндер, яраҡһыҙ эштән

тый һәм һиңә нимә ҡағылһа ла сабыр ит… Кешеләр алдында сырайыңды һытма, Ер йөҙөндә маһайып йөрөмә. Һәр тәкәбберҙе, маҡтансыҡты Алла яратмай! Йөрөшөңдө самалап, уртаса йөрө, тауышыңды түбәнәйт.

– Эй һеҙ, иман килтергән кешеләр! Күп уйҙарҙан һаҡланығыҙ, сөнки ҡайһы бер уйҙар – гонаһ. Шымсылыҡ ҡылмағыҙ, бәғзеләрегеҙ икенселәрегеҙ тураһында ғәйбәт һөйләмәһен.

– Һәр хурлыҡлы ант итеүсегә буйһонма: яманлаусыға, ғәйбәт таратып йөрөүсегә, яҡшылыҡтан тыйыусыға, енәйәтсегә, гонаһлыға, тупаҫҡа, бынан һуң нәҫел-нәсәпһеҙгә.

– Һис бер иманһыҙға һәм гонаһлыға эйәрмә.

– Изгелектә һәм тәүәккәллектә бер-берегеҙгә ярҙам итегеҙ, дошманлыҡта һәм гонаһта ярҙам итмәгеҙ.

– Белмәгән нәмәгә эйәрмә! Ҡолағың, күҙең һәм күңелең һине яуапҡа тартыр.

– Етемдәр бәлиғ булғанға саҡлы уларҙың малына яҡын килмәгеҙ, килешеүҙе үтәгеҙ. Етемде йәберләмәгеҙ.

– Үлсәүҙе дөрөҫ ҡылығыҙ, үлсәгән ваҡытта дөрөҫ үлсәгес менән үлсәгеҙ.

– Эй һеҙ, иман килтергән кешеләр! Бер халыҡ икенсе халыҡты мәсхәрә итмәһен, ихтимал, тегеләр былардан яҡшыраҡтыр, бер ҡатындар икенсе ҡатындарҙан, ихтимал, яҡшыраҡтыр. Үҙ-үҙегеҙҙе хурламағыҙ, ҡушамат исем аташмағыҙ.

– Туғандарға тейешлеһен бир һәм ярлыларға, юлсыларға, исраф ҡылма.

Ҡөрьәндә иң мөһиме – Нур. Әле килтерелгән тыйыуҙар был нурҙы көсәйтә, балҡыта ғына. Быны ентекләберәк төшөндөрәйек. Изге китапта әйтелгәнсә, кем Алланың тыйған нәмәләрен ололаһа, был уға Раббыһы ҡаршыһында хәйерлерәк. Диндарҙарға Уның мөхәббәте шундай даирәле вә сикһеҙ, бөтә тыйыуҙары ла шәхесте, ғаиләне, йәмғиәтте күркәмләндереүгә, яҡшыртыуға, юғарыға күтәреүгә бағышланған, кешеләрҙе рухи яҡтан камил, бәхетле итеүгә йүнәлтелгән. Тыйыуҙарҙы тотоуға ынтылыу эске нурҙан, яҡтылыҡтан, хәҡиҡәтте төшөнөргә, тойорға күңел менән тартылыуҙан килә. Хоҙай Тәғәлә аҡылы бәндәләрҙе үлем өсөн йәшәргә һәм йәшәү өсөн үлергә өйрәткән. Был күк көмбәҙенән таралған яҡты балҡыш һымаҡ илаһи нур булып “Урал батыр“ эпосында ла сағылған.

Үлем күрә алмай ҡаңғырған ҡарт үлемһеҙлеккә бәйле илгә йола булырҙай шундай мәңгелек тыйыу әйтә:

*Донъяла мәңге ҡалам, тип,*
*Донъялай ғүмер һөрәм, тип,*
*Үлемгә буй бирмәҫкә,*
*Уны йола итмәҫкә,*
*Йәншишмәнән эсмәгеҙ,*
*Миндәй хурлыҡ күрмәгеҙ…*
*Мәңге ҡалам, тимәгеҙ,*
*Йәншишмәнән эсмәгеҙ.*

Эпоста раҫланыуынса, “донъяла мәңге ҡалыр эш, донъяны матур төҙөгән, бағты мәңге биҙәгән – ул да булһа яҡшылыҡ“.

## Тәғәмгә табу

Боронғо дәүерҙәрҙә үк бәғзе тәғәмгә, үҫемлектәргә, аш-һыуға табу һалынған. Күп төрлө ҡыр үҫемлектәренең, емеш-еләктең, ҡайһы бер бәшмәктәрҙең ныҡ ағыулы булыуын ҡанбабалар тәүтормош мәлендә үк танып белгән. Әйтәйек, күкшел һарғылт сәскәле, ваҡ ҡына орлоҡло үләнде, йәғни тилебәрәнде ашау ҡәтғи тыйылған, сөнки ул тилертә. Ваҡ япраҡлы ҡыуаҡта ҡыҙарып бешкән, ымһындырып торған емеште, йәғни бүре еләген тәғәм итеү ярамай.

Әҙәмгә хайуандар өҫтөнән хакимлыҡ итеү хоҡуғы бирелә, уларҙың фәҡәт ҡанһыҙландырылған итен генә ашарға рөхсәт ителә. Мәгәр үлем яҙаһы менән кешене ҡорбан итеү, үлтереү тыйыла: "Кем кеше ҡанын ҡоя, уның үҙенең ҡаны ҡойоласаҡ, сөнки кеше Аллаһы Тәғәлә өлгөһө һәм рәүеше буйынса бар ҡылынған". Әҙәм балаларын тура юлға өндәгән Ҡөрьәндә әйтелеүенсә, Аллаһ биргән ризыҡты ашағыҙ, эсегеҙ, ләкин һаҡ булығыҙ, аҙғынлыҡ, боҙоҡлоҡ таратмағыҙ. Һеҙгә шулар тыйыла: үләкһә, ҡан, сусҡа ите, Алланың исеме түгел, башҡаның исеме әйтеп салынған, быуып йәки бәреп үлтерелгән, бейеклектән йығылып төшөп йәки мал һөҙөп үлтергән хайуан ите, йола буйынса боғаҙланғандан башҡа – емтек ашаусы йыртҡыс ите һәм шулай уҡ һын алдында салынған ҡорбан ите, фал уҡтары менән бүлгеләнгәне. Былар – харам. Ғөмүмән, рөхсәт ителгән аҙыҡ менән ризыҡланғанда ла сама самаһын үтмәҫкә тейеш, күп ашау — яҙыҡ, саманан тыш күп ашау – гонаһ. Илаһ ҡушҡанса, эй, инсандар, ер йөҙөндәге ризыҡтарҙың хәләл һәм саф, таҙаларын ғына ашағыҙ.

Шумер мифологияһында ер аҫты донъяһы тәғәменә табу һалына. Эвен, эвенк мифтарында ҡатындарға айыу түшкәһенең ҡайһы бер өлөштәрен тәғәм эйеү тыйыла. Башҡорт халҡының "Урал батыр" эпосында сағылғанса, Йәнбирҙе менән Йәнбикә "бала үҫеп еткәнсе, үҙе йәнлек тотҡансы, баш-йөрәкте ашауҙан, һыуһынға ҡан эсеүҙән балаларын тыйғандар, һис ярамай, тигәндәр".

Балалары иҫ белеп, Шүлгәнгә ун ике, Уралға ун тулғас, береһе, арыҫлан менәм, икенсеһе, шоңҡар сөйәм, тип маҙаһына тейгәс, Йәнбирҙе улдарына былай тигән:

*Икегеҙ ҙә – баламһыҙ,*
*Күҙемдәге ҡарамһыҙ,*
*Тешәр сағығыҙ уҙмаған,*
*Быуынығыҙ ҡатмаған,*
*Ҡулға суҡмар тоторға,*
*Ҡошҡа шоңҡар сөйөргә,*
*Әле арыҫлан менергә*
*Миҙгелегеҙ етмәгән.*
*Мин ни бирһәм – ашағыҙ,*
*Мин ҡушҡанды эшләгеҙ.*

Йәнбирҙе улдарын тыйыу менән генә сикләнмәй, ә утыҡҡансы, йәғни үҫеп тамам көскә ултырғансы, йола буйынса нимә мөмкин икәнен өйрәтә: "күнегергә һыбайға, ана, болан менегеҙ, сыйырсыҡтың тыуына яғылбайҙы сөйөгөҙ, һыуһағыҙ уйында, ана, аҡ һыу эсегеҙ, ҡапырсаҡҡа тултырған ҡандан ауыҙ тартығыҙ".

Бында беҙ боронғо тәрбиә сараларынан тыйыу, һәр теләккә ирек бирмәү, тотанаҡһыҙ ҡылыҡҡа юл ҡуймау йолаһын күрәбеҙ. Ваҡыты, мәле етмәйенсә атай-инәй тарафынан йәш үҫмерҙәргә көҫәгән нәмә рөхсәт ителмәгән. Тыйыуға ҡарамай, Шүлгән "ҡапырсаҡтан аҙ-аҙлап ҡанды һемереп эскән", ата һүҙен тотмаған – оролған да бәрелгән тигәндәй, кешеләрҙе ишһенмәҫ, яҡшылыҡты тиңһенмәҫ ыулы йөрәкле затҡа әйләнгән. Ата йөҙөн – ят, инә һөтөн ыу иткән, үҙе лә игелек күрмәгән, ҡәрҙәштәренә лә күрһәтмәгән.

Фәһем шунда: нимә ярамай, күңел шуны көҫәһә лә, тыйылған емеш тәмле тойолһа ла, инә хәтере, ата хаҡы өсөн үҙенде лә, нәҫел-нәсәбеңде лә хур ҡылмаҫ, бәхетһеҙ итмәҫ өсөн тыйылғанға ыҡламау зарур. Ғөмүмән, һәр кемгә үҙен тота белеү, тыйнаҡ булыу хәйерле вә сауаплы. "Урал батыр" эпосында – һунарға, тәғәм эйеүгә бәйле – башҡорт халҡы өсөн мәңгелек тыйыу тасуирлана:

*Урал тоҡомо ҡоштар, тип,*
*Бер туғандай күрешеп,*
*Ау аулауҙан тыйышып,*

*Аҡҡош тотоп еймәҫкә,*
*Тип һәр кемгә әйтешеп,*
*Аҡҡош үрсеп киткән, ти.*
*Аҡҡош ите кешегә*
*Шуға харам икән, ти.*

Уйым-уйым күлдәрҙәге дейеүҙәрҙең ҡоһоро теймәһен өсөн, барыһы менән хушлашып, Урал халҡына, улдарына шуны әйтә:

*Күлдең һыуын эсмәгеҙ,*
*Эсеп әрәм булмағыҙ,*
*Хараплыҡҡа төшмәгеҙ.*

Башҡорттарҙың ғәҙәти аш-һыуы: бишбармаҡ, ҡуллама, ҡаҙылыҡ, өйрә, ҡорот, ҡатыҡ, эремсек, әжекәй, талҡан, ҡымыҙ, буҙа, айран, бал балы, бал, балтырған, ҡуҙғалаҡ, ҡымыҙлыҡ, йыуа, еләк-емеш… Ғәмәлдә башҡорт аштары бер-берећенә ярашлы, сәләмәтлек өсөн шифалы булған. Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, хәҙер беҙ һаулыҡты уйламай, үҙ-ара ҡушыла, берләшә алмаған ризыҡ менән туҡланабыҙ.

Бер ултырғанда ит, йомортҡа, сыр, сөтләүек кеүек аҡһымлы аҙыҡтарҙы икмәк, бәрәңге һәм татлы емештәр менән тәғәм итергә ярамай. Икмәк, бәрәңге, борсаҡ, банан һәм башҡа углеводлы аҙыҡты – лимон, әфлисун, ананас, помидор, сейә кеүек емештәр; һөт, ҡаймаҡ, һыйыр, үҫемлек майҙарын ит, йомортҡа, сыр, сөтләүек менән ашарға ярамай. Бер туҡланғанда һөт, йомортҡа, сыр, балыҡты, икенсе мәртәбә икмәк, бутҡа, туҡмасты тәғәм итергә мөмкин. Ҡайнар аш, сәй, йә иһә һалҡын һурпа, эсемлек ҡулланыу, ашағанда һыу эсеү тыйыла. Башҡорт бисәләре сәй эсә – ут эсә, тигән әйтем ярамағанға ишаралыр, моғайын. Сәләмәт булайым тиһәң, дөрөҫ туҡланыу хәйерле. Был хаҡта хәҙер мәғлүмәт, белешмә етерлек.

## Тәбиғәткә зыян ҡылыуға табу

Бер төр табу тәбиғәт, йыһан аһәңдәшлеген боҙмауға, тирә-яҡ мөхиткә зыян ҡылмауға ҡағыла. Самодий мифологияһында Ер-инә, тәбиғәт ауыртыуҙы тойған тере йән һымаҡ тасуирлана. Мәҫәлән, ергә һөңгө, бысаҡ менән сәнсеү, ҡаҙыҡ ҡағыу тыйыла.

Кет мифологияһы буйынса, беренсе бөйөк шаман Дох үҙ арҡадаштары менән күккә сәфәр ҡылғанда, уның ҡатыны, тыйыуға буйһонмай, бысраҡ кейем ала һәм һөҙөмтәлә алты йәшендең инәһе уның ғаиләһен уты менән көйҙөрә. Боронғо Иран ҡомартҡыһы “Авеста“ла “Бысраҡ әйберҙе һыуға тыҡҡансы, һыуҙың таҙалығын уйла“, тиелә. Урта бронза быуатында хасил Арҡайым торағында һыуҙы бысратыу тыйылған, керле әйберҙе яҡшылап таҙартҡандан һуң ғына һыуға һалып йыуылған. Арҡайым һәм “Калалар иле“ ҡәүеме йәшәгән ерҙәрендә ғаләмдең өлгөһөндә төҙәрәктәр, дүрткелдәр яһап, донъя ҡороп, аһәңле йәшәйешкә ынтылған, Ер менән Йыһан бәйләнешен, ярашлығын, килешлеген, тәбиғәт гармонияһын боҙмаған. Зат-нәҫелдәр, яңы быуындар ҡанбабалар йолаһын, ҡарашын изге һанаған, ҡәҙерләгән һәм үҙҙәренең йәмғиәт ҡоролошонда ҡулланған.

Кеше менән тирә-яҡ мөхит донъяһы изге мөнәсәбәткә ҡоролған. Әҙәм балалары тәбиғәт менән килешеп йәшәгән, уның ҡанундарын һаҡлаған. Төҙөү, яһау, булдырыу, ижад итеү тәбиғәтте боҙмаған. Боронғо ышаныу-инаныуҙар, тыйыуҙар шуға инандырған. Арҡайымда тирә-яҡ мөхит менән мөнәсәбәт яҡын туғандарса булған. Меңәр йылдар үткәс тә был ер – тәү асылында. Үҙенә генә хас туғайҙары, ҡалҡыулыҡтары, тупрағы, һыуы, үҫемлектәре, тереклек донъяһы булған ерҙәрҙә арҙар ипле эш итеп, һаҡлыҡ менән генә балсыҡ һәм ағастан үҙҙәренең торлағын, “Калалар иле“н төҙөгән. Бының өсөн, әлбиттә, соҡорҙар ҡаҙырға тура

килгән. Ҡаҙылған ер, балсыҡ, ғәмәлдә, төҙөлөшкә киткән тупраҡ миҡдарына тиң булған. Был шуны аңлата: кешеләр күсеп киткән, торлаҡ бөткән осраҡта был ер тәбиғи хәленә ҡайтҡан. Тикшерелгән мәҙәни ҡатлам хәҙер ҙә таҙалығы менән айырылып тора. Бында бөтә нәмә илаһи йолаға, ғаләм ҡоролошона ярашлы булған. Арҙар үҙҙәренең йолаларын, рухи ҡиммәттәрен изге күреп һаҡлаған һәм бик ентекләп ғәмәлләштергән. Был – хәҙерге быуындар өсөн ғәйәт оло аҡыл һәм һабаҡ алырлыҡ илаһи үрнәк.

Тирә-яҡ мөхиткә шундай аңлы, һаҡсыл мөнәсәбәт әле беҙ ғүмер иткән төйәктә дүрт мең йыл элек булған. Хәҙер иһә кеше үҙен ғаләмдең бер өлөшө икәненә төшөнһә лә, тыйыуҙарҙы һанға һуҡмай, тәбиғәтте үҙ мәнфәғәттәре өсөн генә файҙалана, тирә-яҡ мөхит ҡанундарын боҙа, тәбиғәтте яһилдарса һәләк итеп, үҙен дә һәләкәткә илтә. Әлеге рухи, әхлаҡи, экологик торғонлоҡ, бәлә-ҡаза нәҡ шул хаҡта һөйләй.

Боронғо риүәйәттәр табу һалынған урындар, йәғни тауҙар, мәмерйәләр, күлдәр тураһында ла һөйләй. Грек мифологияһында аркад батшаһы Эпит Посейдондың әҙәмдәргә тыйылған мөҡәддәс урынына инә. Тиҙҙән Эпит һуҡырая һәм үлә.

Башҡорт халҡының “Аҡ бүре“ әкиәтендә инәләрен эҙләргә сыҡҡан өлкән ул, шунан уртансы ул юлдаштары менән ҡара урманға инеп, аттарын ебәреп, үҙҙәре йәшел үләнгә түшәлеп ята. Улар янына бер кеше килә лә:

– Кем ҡушты һеҙгә бында килеп, рөхсәтһеҙ минең урманымды, үләнемде тапап йөрөргә? – ти.

– Кит бынан, ғауғалама, һин бер үҙең, беҙ күмәк. Юғиһә, үҙеңде һәләк итербеҙ, – ти егеттәр.

Шул саҡ урман кешеһе әпсен-төпсөн уҡый ҙа тегеләргә ҡарап өшкөрә. Былар шул урында таш булып ҡата ла ҡуя.

“Уғланы Ҡороҡса батыр“ әкиәтендә килен йәрәшергә алыҫ юлға сыҡҡанда өйҙә ҡалған Ҡороҡса әйтә: “Ике ерҙә хәтәр бар, шунда туҡтамағыҙ. Матур йылға буйында ҡунмағыҙ, матур күл бар, унда ла ҡунмағыҙ“. Әйләнеп ҡайтып килгәндә йәйрәп ятҡан күл буйында аталары, ҡунмайыҡ, тип ҡарай, ләкин уландары тыңламай. Иртән тороуға уларҙы бер аждаһа ҡойроғон ауыҙына ҡабып әйләндергән дә ятҡан. Ҡороҡса батырға шул арҡала байтаҡ һынауҙар үтеп, кәләшен аждаһанан ҡотҡарырға тура килә.

“Юлбат“ әкиәтендә егеттәрҙе йыртҡыс януарҙарҙан ҡотҡарған бүре әйтә: “Был тау – бер юханың төйәге. Бындағы бер әйбергә лә теймәгеҙ, һыуын эсмәгеҙ, алмаһын ашамағыҙ“. Юлбат тыйыуға ҡарамаҫтан, ағалары тауҙан сылтырап аҡҡан, тирә-яғында алмалары ҡыҙарып бешкән шишмә буйында ятып ҡала, һыуын эсә, алмаларын ауыҙ итә. Йоҡлап ятыусыларҙы иҫ китмәле ҙур йылан урап ала. Ағайҙарын сығарған өсөн Юлбатҡа аждаһа  батша ҡуйған бөтә ауыр шарттарҙы үтәргә ҡуша. Шулай итеп, тыйылған ерҙә төн ҡунырға, һыу эсергә, емештәрҙе ашарға, болондарҙы тапарға, урманды ҡыйратырға ярамай.

Ғөмүмән, кеше илаһи ҡөҙрәткә эйә тәбиғәт менән аңлашып, ерҙәге урынына төшөнөп, уны иң яҡын туған кеүек күреп, һөйөп йәшәргә бурыслы. Башҡорт юрау-һынамыштарына бәйле, урманда, ҡырҙа ҡыуыш ҡорор, ағас ҡырҡыр, табынға ултырыр алдынан: “Ер хужаһы, ағас эйәһе, ошо урманда төйәкләнергә, бесән сабырға, утын ҡырҡырға рөхсәт ит“, – тип һорау кәрәк. Нигеҙ ҡорғанда ла шулай итеү хәйерле. Өй һалғанда асыуланышырға, тиргәшергә ярамай, ҡыуаныу яҡшы. Йәшәр өсөн өй һатып алғанда хужаһын рәнйетеү килешмәй. Бөтәһенә лә тығылыусы, бөтә ерҙә етешеүсе булараҡ, шайтанды иҫкә төшөрөү тыйыла.

Боронғо төркиҙәрҙең бағымсылары, шамандары инаныуынса, урмандар, үҫемлектәр, тауҙар, күлдәр, йылғалар – бар донъя  йәнле, бөтә ер-һыу, мөхит

рухтар менән тулы: “рух – үҙе тауҙыр, ә тау үҙе – рухтыр“. Абдулҡадир Инан “Шаманизм: тарихта һәм бөгөн“ китабында яҙыуынса: “Шаман доғаларынан асыҡ аңлашылыуынса, шамандар тау рухтарына туранан-тура мөрәжәғәт итеп, һәр нәмәне тойоусы бер барлыҡ итеп таныған… Бер риүәйәттә һүрәтләнеүенсә, монголдар тарафынан эҙәрләнгән алтайҙар Ҡарағай тауына килеп урынлаша һәм тау рухына арнап ҡорбан сала. Ошо берҙән-бер тау урман менән ҡапланған була, шуға ла монголдар юлды таба алмай. Шулай итеп, алтайҙар ҡотолоп ҡала һәм хәҙергәсә Ҡарағай тау улар өсөн изге һанала“.

Ҡанбабалар үҫемлек, тереклек донъяһын изгеләштергән һәм һаҡлаған. А. Инан билдәләүенсә, “урман һәм ағас культы, боронғо дәүерҙәрҙә йәшәгән ырыуҙарҙың урман байлыҡтары, һунарсылыҡ менән көн күреүенә һәм шул айҡанлы фәлсәфәүи ҡараштарына бәйле. Мәҫәлән, Иранда Мәкү ханлығында ҡараҡойондар йәшәгән ауылдарҙың береһе Софу янында изге урман бар. Бындағы ағастарҙы киҫеү түгел, уларға тейеү ҙә – ҙур гонаһ. Урман өсөн ҡорбанға салынған хайуандарҙың һөйәктәре ошонда күмелгән, ҡатындар ағастарға сәскәләр бәйләгән. Урман культына бағышланған байрам өсөн биш көн буйы һарыҡ һөтө йыйылған.

Урман башҡа ҡәүемдәрҙә лә мөһим культтарҙың береһе иҫәпләнә. Яҡут һунарсылары туғыҙ йәнле урман рухы булыуына инана. Рухтарҙың иң бөйөгө, хужаһы ла бар. Улар һунарсыларҙы ҡурсалай, бәрәкәт килтерә. Һунарсылыҡ менән көн иткән шор төркиҙәре лә урман рухын бик ихтирам итә. Уларҙың инаныуынса, рухтар һунарсының ғәйепһеҙ һәм тура һүҙле булыуын теләй. Аусы ауға сығыр көндө енси мөнәсәбәткә инеү тыйыла. Өйҙә ҡалған ғаилә ағзалары ла тәбиғи асылға ярашлы изге эштәр генә ҡыла. Һунарсылар ауҙан ҡайтҡанға тиклем күңел асыу, уйын, көлкө, шаярыу ярамай“.

## Тыйылғанға теймәү

Башҡорт халыҡ әкиәттәрендә тыйылғанға ҡағылмау күренештәре күҙаллана. “Алтын ҡауырһын“ әкиәтендә егет ялтырап ятҡан алтын ҡауырһынды алайым тиһә, аты телгә килеп: “Эй, егет, был алтын ҡауырһынға күҙең ҡыҙмаһын, алма, бәләһе күп булыр“, – ти. Төлкө лә: “Теймә ул ҡауырһынға, күп яфа сигерһең!“ – тип иҫкәртә. Әммә егет алтын ҡауырһынды алып, ҡуйынына тыға. Ысынлап та, тыңламауҙың бәләһе күп була. Егет ҙур ҡайғыларға төшөп, саҡ үлемдән ҡотолоп, ҡала.

“Алтындуға батыр“ әкиәтендә Буҙ аты Алтындуғаға: “Ошо ҡая ташҡа мен. Унда бер һәйбәт өй булыр, ул өйҙә ҡыҙҙар уйнап ултырыр, алтын-көмөштәр тулып ятыр. Һин ул өйгә инмә, ҡыҙҙарға, алтын-көмөшкә теймә, юҡһа һәләк булырһың. Унда икенсе бер насар ғына өй булыр, һин шуныһына ин. Ишек төбөндә сөйҙә элеүле торған ҡылысты ал да төш, ул һинең йәнең“, – ти. Алтындуға тыйыуҙы боҙмай. Ағалары иһә: “Юлда бер урында бик матур емеш баҡсаһы булыр. Ул баҡса янында туҡтамағыҙ, емешенә теймәгеҙ, юҡһа һәләк булырһығыҙ“, – тигән тыйыуҙы тыңламай, һәм шул арҡала Алтындуғаға дейеүҙәр менән алышырға, үлеп терелергә насип була.

## Утҡа ҡағылған тыйыу

Боронғо ҡәүемдәр ҡарашынса, ут тере лә, изге лә, әкиәттәрҙә иһә – батша. Абдулҡадир Инандың “Шаманизм: тарихта һәм бөгөн“ хеҙмәтендә ут культына бәйле тәү асылдар күрһәтелә. Йүлген тәңре кешеләрҙе ут тоҡандырырға өйрәткән һәм: “Был ут – атабыҙҙың ҡөҙрәтенән сыҡҡан ялҡын“, – тигән. Шунан бирле алтай һәм яҡуттарҙа саҡматаш ут ҡото биреүсе һанала. Алтайҙарҙың доғаларында ут “Ҡояш менән Айҙан бүлеп сығарылған“ тиелә. Ут тураһында көфөр,

хилаф һүҙҙәр әйтелмәй, уға төкөрөү, ут менән уйнау ҡәтғи тыйыла. Төркиҙәр утҡа доғалар уҡыған, ҡорбан һонған. Уларҙың инаныуынса, ут насар рухтарҙы ҡыуған, һәр нәмәне таҙартҡан.

Шамандар утҡа ҡарап күрәҙәлек ҡылған, юраған. “Манас“ эпосында Манастың бабаһы Жакип хан утҡа бағып килендәренә уларҙы нимә көтәсәген юраған. Яҡуп хан иһә яҙмышының нисек булырын белеү өсөн һәр ваҡыт ут ярҙамында күрәҙәлек иткән. Үзбәк ханы Кожугум, сатырҙан сатырға йөрөп, утҡа ҡарап, усаҡҡа май һалып, ҡатындарға кемдең улы, кемдең ҡыҙы буласағын әйткән. Уттың ҡыҙыулығына, ялҡын телдәренең төҫөнә, утын сығарған тауышҡа ҡарап, ни булырын юрағандар.

Манси мифологияһында ут хужабикәһе – ете телле, ҡыҙыл күлдәкле ҡатын. Ул утҡа ҡағылған йола-тыйыуҙарҙы боҙған өсөн язаға тарттыра. Ут менән һаҡ булырға кәрәклек, был йәһәттән тыйыуҙар халыҡ әйтемдәрендә лә асыҡ сағылған: утҡа төкөрмә, ауыҙың бөрөшөр; ут менән шаярмайҙар; балтанан ҡурҡма, уттан ҡурҡ; ут менән һыу бөтә нәмәне юҡ итә; бурҙан ҡала, уттан ҡалмай… Халыҡ аҡылы йәшен утынан һаҡланыу кәрәклеген дә иҫкәртә: йәшен йәшнәгәндә яңғыҙ ағас йәки тәҙрә янында торма; бисмилла әйт; башыңа кей; йүгермә; шым ултыр…

## Көнгә ҡағылған тыйыу

Халыҡ ижадында көнгә ҡағылған тыйыуҙар ҙа күҙәтелә. Көнсығыш роман ҡәүемдәре мифологияһында ундырышлылыҡты кәүҙәләндергән сихырсы ҡыҙҙарға үҙ көнөндә, йәғни 24 июндә, тыйыуҙарҙы боҙған өсөн һантыйлыҡ, һаңғыраулыҡ, телһеҙлек ебәрелә.

Боронғо славян традицияһы ҡатнашсыһы Пятница көнөндә ҡатын-ҡыҙ йөн иләмәй, күлдәк йыумай. Пятницаның күҙен саңландырмаҫ өсөн, ирҙәр ер һөрмәй. Тыйыуҙы боҙһаң, Пятница төрлө бәләгә дусар ҡылыуы, күҙ ауырыуҙарына һабыштырыуы ихтимал.

Телгә алыуыбыҙса, Библиялағы ун ҡанундың береһе шәмбегә ҡағыла. Уны изгеләштереү өсөн шәмбене хәтереңдән сығарма, алты көн эшлә һәм үҙеңдең төрлө ғәмәлдәреңде бойомға ашырыуға бағышла, ә етенсе көндө, шәмбене (әүәлге көн иҫәбе буйынса шаббат – аҙнаның һуңғы көнө), – Илаһҡа, үҙеңдең Аллаңа бағышла, был көндө эшләмә, үҙең дә, улың да, ҡыҙың да, ҡолоң да, малың да, өйөңә килеүсе лә. Сөнки Илаһ күкте, ерҙе, диңгеҙҙе һәм уларҙағы бөтә нәмәне бар иткән, ә етенсе көндө тынысланған. Илаһ шәмбе көнөнә фатиха ҡылып, уны изгеләштергән.

Мосолмандарҙа иһә әүәл йома ете көн араһы һаналып, был көн изгеләштерелгән. Ҡөрьәндә шулай тиелә: “Әй иман килтергән кешеләр! Йома көндө намаҙға саҡырғас, Аллаһты зикер итергә ашығығыҙ һәм алыш-биреште ҡалдырып тороғоҙ. Беләһегеҙ килһә, был һеҙҙең өсөн тағы ла хәйерлерәк булыр“.

## Боролоп ҡарауҙы тыйыу

Хикәйәт-риүәйәттәрҙә ҡарауҙы тыйыу хәл-күренештәре лә һүрәтләнә. Иң йыш тыйылғаны – боролоп ҡарамау. Был мотив йоланы мотлаҡ тотоу мөһимлегенә ишаралай. Грек мифологияһында музыканың әүрәткес ҡөҙрәте менән һуғарылған Орфейҙың уйнауынан хайран Аид үлеләр донъяһынан остаздың ҡатыны Эвридиканы ҡабат ергә ҡайтарырға вәғәҙә бирә. Мәгәр өйгә инмәйенсә Орфей ҡатынына ҡарамаҫҡа тейеш була. Бәхетле ир һөйгәне менән ергә ҡайта, ләкин, тыйыуҙы онотоп, әйләнеп ҡарай һәм Эвридика шунда уҡ ер аҫтына инеп юғала.

Йәһүд риүәйәтендә Хоҙай Тәғәлә тарафынан юҡ ителергә тейешле Содом ҡалаһынан Лотты ғаиләһе менән алып сыҡҡанда фәрештәләр артҡа боролоп ҡарауҙы тыя. Ләкин Лоттың ҡатыны әйләнеп ҡарай һәм тоҙ бағанаһына әүерелә.

Арт – күҙгә, йөҙгә кире тараф, йәғни алдың ҡаршыһы. «Артҡа табан» тигәндең насарға китеү мәғәнәһе лә бар. Килтерелгән һәм башҡа миҫалдарҙан аңлашылыуынса, әйләнеп ҡарау – уңышһыҙлыҡ, кире һөҙөмтәле хәл билгеһе, именлекте боҙған күренеш һымаҡ күҙаллана. Был башҡорт халыҡ ижадында ла төҫмөрләнә. "Йылҡысыҡҡан күл" риүәйәтендә һөйләнеүенсә, серле егет, аусы башҡортто бейәгә атландырып, былай тигән: "Һин алға ҡарай кит, бейә артынан күлдән йылҡы малы сығыр, тик артыңа әйләнеп ҡарама". Бер аҙ барғас, аусы артында аттар кешнәүен, тояҡтар тупылдауын, бейәләр сеңрәүен ишеткән. Күпмелер барғас, ул түҙмәгән, артына әйләнеп ҡараған. Ҡараһа, күлдән көтөү булып сығып килгән йылҡының яртыһы күлгә кире сумған, ярға аяҡ баҫҡандары ғына тороп ҡалған.

"Заятүләк менән Һыуһылыу" эпосында, егеттең Балҡантауға барып етмәй тороп артҡа боролоуы арҡаһында, гел бер төҫлө сысҡан һыртлы ҡола мал тулыһынса ер йөҙөнә сыҡмай. Был күренеш эпоста ошолай һүрәтләнә. Һыу батшаһы Заятүләкте саҡырып ала ла:

– Бына һиңә бер арғымаҡ, шуның ялына тотон. Иллә мәгәр һыуҙан сыҡҡанда артыңа әйләнеп ҡарама, – ти.

Заятүләк арғымаҡты менеп, Һыуһылыуҙы алдына ултырта ла һыу төбөнән сығып китә. Уның артынан сысҡан һыртлы йылҡы малы ла эйәрә. Кешнәшкән тауышҡа түҙә алмай, Заятүләк артына әйләнеп ҡарай. Ҡарауы була, йылҡы малының яртыһы кире һыуға инеп китә. Ярға сығып өлгөргәне генә Заятүләктең малы була. Ләкин кире күлгә сумған мал эпоста бәхетһеҙлек һымаҡ һүрәтләнмәй. Заятүләк менән Һыуһылыу Балҡантауҙа донъя көтә. Һыу төбөнән сыҡҡан мал үрсеп, байығып китәләр. Көн килгәнгә һөт биреп, төн ҡунғанға ут биреп, килгән-киткәнгә төйәк булып, оҙон, рәхәт ғүмер кисерәләр.

## Ярамағанға ҡарауҙы тыйыу

Һаҡларға ҡушылған, йәшерелгән нәмәне, кәрәкмәгәндә ҡарау ҙа тыйылған. Грек мифологияһында һуғыш һәм еңеү, шулай уҡ аҡыл, белем, сәнғәт, төрлө кәсептәр алиһәһе Афина Гефестың орлоғонан Ер Гея тыуҙырған бәпесте, ул ятҡан ҡумтаны Аглавра һәм уның ҡыҙ туғандарына һаҡларға бирә. Афинаның тыйыуына ҡарамай, ҡыҙҙар ҡумтаны аса һәм йылан кәүҙәле баланы күрә. Афина тәьҫиренән һантыйланған ҡыҙҙар акрополдән ташланып һәләк була.

Монгол риүәйәтендә һүрәтләнеүенсә, дүрт егет олоғайған Хохәдәй мәргәнгә торлаҡты һаҡларға ҡалдыра, мәгәр билдәле һауытты асыуҙы тыя. Һауытҡа йәшен уҡтары һәм ҡанатлы кейем һалынған була. Хохәдәй ике тапҡыр тыйыуҙы боҙа. Шулай ҙа егеттәр уны йәшен уҡтарын һаҡлаусы итеп ҡалдыра, ләкин уларҙы фәҡәт аллалар ҡушыуы буйынса ғына ҡулланырға бойора.

Йөҙгә ҡарамау тыйыуы ла булған. Грек мифологияһында сағылыуынса, Психея бер ҡасан да иренең йөҙөн күрмәҫкә тейеш була. Әммә ул ҡыҙыҡһыныуына сыҙай алмай, төнөн шәм яндыра һәм йәш аллаға шул тиклем һоҡланып ҡарай – Амурҙың наҙлы тәненә ҡайнар май тамсыһы тамғанын да тоймай. Амур юҡ була. Психея бик күп һынауҙар үтеп, ыҙа күреп, тере һыу алырға ер аҫтына төшөп йәрен ҡайтарырға мәжбүр була. Тыйыуҙы боҙоу ҡатынды утҡа, һыуға төшөрә.

## Ҡәрҙәштәргә өйләнеүгә табу

Боронғо дәүерҙәрҙә үк табу тәү сиратта ҡауышыу, никах, ир-ҡатын мөнәсәбәттәре йолаларын үтәү һәм һаҡлауға ҡағылған. Күп ҡәүемдәрҙә экзогамия өҫтөнлөк иткән, бер ырыу эсендә үҙ-ара өйләнешеү тыйылған. Ҡан бутамаҫ, сәләмәт нәҫел булдырыу өсөн башҡорттарҙа ете ят кешеләр менән генә никахлашыу рөхсәт ителгән.

Ҡан-ҡәрҙәштәр менән ҡауышыуҙы тыйыу грек мифологияһында ла һүрәтләнә. Эоланың ҡыҙы Канака ағаһы Макареяға ғашиҡ була һәм уның менән енси бәйләнешкә инә. Инабатһыҙ ҡушылыуҙан тыуған бәпесте Эола үлтерә һәм ҡыҙына ла үҙен үҙе юҡ итергә бойора.

Үҙәк Америка индеецтарының аллаһы Кецаль-коатль иҫерткес эсемлек эсеп, үҙ табуҙарын боҙоп, ҡыҙ туғаны менән гонаһ ҡыла. Айнығас, ғөрөф-ғәҙәткә һыймаған, һис кенә лә ярамаған яҙыҡ ҡылғанын аңлай һәм Көнсығыш тарафына сығып китеп, шунда мәрхүм була, тәне яндырыла.

Тоетама-Химэ тураһындағы япон мифында экзогамия табуһы һалынған дөйөм тотемдан (бында крокодил йәки кашалот) булған ир менән ҡатын никахҡа инеү күренеше сағыла. Диңгеҙ батшаһы ҡыҙы Тоетама-Химэ ире Хоори һәм тыуасаҡ балаһы менән бергә ҡалырға теләп, диңгеҙҙән ергә сыға. Тыйыуға ҡарамаҫтан, Хоори бала табыу күренешен ҡарай. Уның улын имәнес хайуан (крокодил, кашалот) тыуҙыра. Һөҙөмтәлә ҡатыны Тоетама-Химэ ерҙе ҡалдырып китергә һәм мәңге диңгеҙ төпкөлөндә йәшәргә мәжбүр була.

Әйткәндәй, ырыу йәмғиәте ваҡытында ырыу төркөмөнөң нәҫел башы, терәге итеп табынған тотемы (ҡош, йәнлек, үҫемлек) булған. Башҡорттар тотем итеп ҡоштарҙы йөрөткән. Әйле төркөмөнә ҡараған Әйле (Әйҙе), Ялан Әйле, Һарт Әйле (Алтауҙы), Тырнаҡлы, Түбәләҫ, Мырҙалар, Төрөкмән, Дыуан, Ҡаратаулы ырыуҙарының тотемы, йәғни ҡошо – шоңҡар (бөркөт, торна, аҡҡош), төп тамғалары – ай тамға, дөйә муйын, һигеҙле, ағасы – тирәк (муйын), ораны – һандал (салауат). Көҙәйҙәрҙең ҡошо – бөркөт (ҡарсыға), тамғалары – ҡаҙаяҡ, өҙәңге, һәнәк, тырма, ағасы – имән. Мәҫәлән, борон ҡошо – бөркөт, ағасы имән булған яҡын ҡәрҙәштәргә өйләнешеү хуш күрелмәгән. Бер аймаҡ, ара ҡәрҙәштәргә парлашыу, һис шикһеҙ, тыйылған.

Ҡөрьәндең ән-Ниса (Ҡатындар) сүрәһендә билдәләнеүенсә, "һеҙгә инәйҙәрегеҙгә, ҡыҙҙарығыҙға, апай-һеңлеләрегеҙгә, атай-инәйегеҙ менән бер туған ҡатын-ҡыҙҙарға, ир һәм ҡыҙ туғандарығыҙҙың ҡыҙҙарына, һөт инәләрегеҙгә, имсәктәш апай-һеңлеләрегеҙгә, ҡатындарығыҙҙың инәләренә, һеҙ ҡушылған ҡатынға эйәрә килгән аҫрау ҡыҙҙарығыҙға (әгәр ҡатынға ҡушылмаған булһағыҙ, ул ваҡытта ғына гонаһ булмай), үҙ ҡанығыҙҙан булған улдарығыҙҙың ҡатындарына, ике ҡыҙ туғанға, ирле ҡатындарға өйләнеү тыйыла. Әгәр һеҙ тыйылған гонаһтарҙан һаҡланһағыҙ, беҙ һеҙҙе насар эштәрҙән алыҫ тоторбоҙ һәм гүзәл индереү менән индерербеҙ".

Башҡорт халыҡ ижадында йәш етмәйенсә ҡушылыу ярамағанлығы ла төҫмөрләнә. "Ғәҙел батша" әкиәтендә Хөсәйенде хан ҡыҙы менән икәүһен аҡ келәткә бикләп ҡуялар. Шул мәлдә егет:

– Мин һинең янда ҡуна алмайым, мин балиғ түгелмен, балиғ булғас килеп алырмын, – тип сығып киткән.

– Ярай, мәргән егет, һин ҡасан килеп алһаң да, мин көтөрмөн, – тип ҡыҙ вәғәҙә биреп ҡалған.

## Ир-атҡа һәм ҡатын-ҡыҙға тыйыу

Ир-атҡа һәм ҡатын-ҡыҙға тыйыу, уны боҙған өсөн язаға дусар ҡылыныу Әҙәм менән Һауа ғәйебенән килә. Аллаһы Тәғәләнең тыйыуын, әмерен үтәмәгәне өсөн Әҙәм ғәләйһиссәләмгә ун бәлә бирелә. 1. Аллаһы Тәғәләнең шелтәһе. Ҡөрьән-Кәримдә әйтелә: "Аллаһы Тәғәлә һеҙҙе был ағастан тыйманымы?" 2. Хөллә һәм таждан яланғас ҡалыу. "Асылды был икәүҙең ғәүрәттәре" (Ҡөрьән-Кәрим). 3. Әҙәм ғәләйһиссәләмдең йөҙө, тәне ҡаралды. 4. Ожмахтан сығарылды. 5. Әҙәм Һауанан йөҙ йыл, икенсе риүәйәт буйынса ике йөҙ йыл айырылып торҙо. 6. Әҙәм менән шайтан араһында дошманлыҡ көсәйҙе. 7. Гонаһлы исемен күтәрҙе. 8. Шайтан әҙәмдең балаларына һәм малдарына ҡатышты. 9. Донъя зинданына ябылып, һыуыҡ, эҫелек һәм төрлө ауырыуҙар менән һыналды. 10. Тормошо төрлө мәшәҡәттәргә дусар螺 ителде.

Хаҡ Тәғәлә Һауаға әйтте: “Хата эш ҡылдың, шул сәбәпле яланғас ҡалдың, бәләгә тарының, Әҙәмде лә ҡайғылы, яланғас иттең“. Аллаһы Тәғәләнән хитаб ҡылынды: “Әй, Һауа, йәннәттән сыҡ, һине ун биш бәлә менән һынаясаҡбыҙ. Был гонаһ шомлоғонан ҡыҙҙарың Ҡиәмәт көнөнә ҡәҙәр һыналыр. 1. Хәйез (күрем), нифас ҡаны ҡыҙҙарыңа аманат булһын. 2. Туғыҙ ай бала күтәрһендәр. 3. Бала тапҡанда үлем әсеһен татыһындар. 4. Ғиҙҙәт михнәтен сикһендәр. 5. Ирҙәре хөкөмөндә булһындар. 6. Талаҡ ирҙәр ҡулында булһын. 7. Мираҫта ярты-лаш кәм ҡалһындар. 8. Шәһаҙәт биреүҙә. 9. Аҡылда. 10. Диндә кәм булһындар. 11. Сәләм биреүгә мәхрүм булһындар. 12. Йома намаҙҙарынан һәм йәмәғәт менән уҡылған намаҙҙарҙан. 13. Пәйғәмбәрлектән. 14. Батша булыуҙан, хәлифәлектән. 15. Мәхрәмһеҙ сәфәр ҡылыу хәрәм булһын“.

Бер риүәйәттә һөйләнелеүенсә, мең йәшкә еткәс, Әҙәм ауырып китә. Балаларын йыйып, Аллаһы Тәғәләнең тыйыуҙарына, әмеренә буйһонорға, шайтанға ҡаршы торорға, ҡатындарға йөрөмәҫкә бойора. Барса нәсихәттәрҙән, васыяттарҙан биш васыят менән ғәмәл ҡылырға, балаларға уларҙы кәңәш, теләк итергә ҡуша. 1. Күңелемде донъяға түгел, ожмахҡа бағланым, мәшәҡәт күрҙем. 2. Һәр ғәмәлдең аҙағын уйла, эшемдең ахырын уйламаған өсөн ошо хәлгә төштөм. 3. Ҡатын һүҙенә ҡарама. Мин ҡатын һүҙенә ҡарап бәләгә тарыным. 4. Һәр эште кәңәшләш, әгәр тыйылған емеште ашамаҫ элек фәрештәләр менән кәңәшләшһәм, мин был бәләгә тарымаҫ инем. 5. Теләһә ҡайһы ғәмәлде башлағанда эсең бошһа, уны ташла. Бойҙай ағасына яҡын барғас, күңелем тулҡынланды, эсем бошто. Ашағандан һуң ожмахтан сығарылдым. Бынан тыш, Әҙәм балаларына Мөхәммәт Мостафа пәйғәмбәрҙең нурын яҡшы һаҡларға ҡушты. Сөнки Хаҡ Тәғәлә Мөхәммәт ғәләйһиссәләм нурынан әҙәмде бар ҡыла, ул нур әҙәмдән Һауа инәгә күсә.

“Пәйғәмбәрҙәр тарихы“ китабында әйтелеүенсә, ҡатын-ҡыҙға ла, ир-егеттәргә лә нәфселәрен тыйыу фарыз. Йософ ғәләйһиссәләм әйтә: “Хәҡиҡәттә нәфсе – яуызлыҡҡа бойороусы, әҙәмдәрҙең нәфсеһе ҡылған боҙоҡлоҡто етмеш шайтан ҡыла алмаҫ“. Башҡорт халыҡ әйтемдәре лә нәфсехур, йәғни нәфсе ҡоло булыу яман ҡылыҡ икәнен аңғарта: нәфсеһенә баш булмаған – шайтанға эйәрер; нәфсеңде тыймаһаң, нәфсең туймаҫ, нәфсеңә хужа булһаң, нәфсең йыуаш булыр; нәфсенең сиге юҡ; нәфсене һимертһәң, үҙеңә бәлә өҫтәлер…

Ир – ҡатын мөнәсәбәттәренә бәйле серҙе сисмәү тыйыуы ла күҙәтелә. Был грек һәм рим мифологияһында ла сағылған. Ида тауы буйында көтөү көткән Анхис янына уның матурлығына хайран мөхәббәт һәм гүзәллек алиһәһе Афродита килә һәм үҙен Отрей батша ҡыҙы итеп таныта. Енси яҡынлыҡ ҡылғандан һуң Афродита Анхисҡа унан Эней исемле данлы батырҙы тыуҙырасағын әйтә, әммә серҙе бер кемгә лә сисмәҫкә ҡуша. Ләкин дуҫтары менән һыйланғанда Анхис тыйыуҙы боҙа һәм шуның өсөн уны Зевс йәшене ата.

Дәрт, мөхәббәт, өйләнеү, туй, ғаилә тормошона ҡағылған өгөт-нәсихәттәр үҙара мөнәсәбәттәрҙе көйләүгә, әхлаҡ-әҙәп ҡағиҙәләрен белеүгә, тотоуға йүнәлтелгән.

Ҡыҙ оҙатыу, килен ҡаршылау әйтемдәрендә ошондай тыйыу рәүештәре күҙәтелә: төҫөң боҙоп, теш ыржайтып, балаҡай, йәмәғәтеңде үртәмә; кейәү йортона барғас, албырғанма, ҡыҙыҡай; ҡабағанан ҡаптырма, төйләгәндән типтермә, ен-шайтанды индермә, иблисте еткермә; һыу башлауҙа тәү башлап, ҡоро күнәк күтәрмә; урынһыҙға һүҙ ҡатып, гонаһҡа батма, киленсәк; ireңә ҡаршы һүҙ әйтеп, ауыҙың асма; һүҙ йөрөтмә, ошаҡсы булма, ауылсы булма; ҡәйнәң ҡушҡан йомошто ташлап ҡасма; телсәнләнеп, ҡысҡырып, саусы булма; күҙең-башың йымылдап, күҙсән булма; олтороғың ҡалтырап, тегендә-бында йөрөмә… Киленгә ҡайныһы, ҡайнағалары менән әҙәпһеҙләнеп һөйләшеп тороу ярамаған. Халыҡ әйткәнсә, ҡайнаға яйҡайтып тормаҫ, килен кирелеп тормаҫ.

Хоҙай Тәғәлә ҡатын-ҡыҙға ошоларҙы бойора: урламаҫҡа, уйнаш ҡылмаҫҡа, балаларын мәхрүм итмәҫкә, ялған һөйләмәҫкә, хупланған эштәргә ҡаршымаҫҡа; йәнә оят ерҙәрен һаҡларға, үҙҙәренең биҙәктәрен күрһәтмәҫкә, түштәрендәге уйымдарына бөркәнсектәрен ҡапларға, зина ҡылған ҡатындың һәр береһенә йөҙәр ҡамсы һуғырға, боҙоҡлоҡ һәм аҙғынлыҡ таратмаҫҡа, сит ирҙәр менән ҡыланып һөйләшмәҫкә…

Кейәүгә сығам, ир менән имен, татыу йәшәйем тигән ҡатын-ҡыҙ тыйыуҙарҙы үтәргә бурыслы. Саам мифологияһында тылсымлы болан-әүермән Мәндәш егет үҙенә әҙәм затынан кәләш әйттереүҙе һорай. Өс апай-һеңленән кесеһе генә Мәндәштең инәһенең тыйыуҙарын тыңлай, әпсен-төпсөн, арбау һүҙҙәре әйтеп, ғәмәлен башҡара, боландар менән яғымлы мөғәмәлә итә һәм Мәндәштең ғүмер юлдашы, хәләле дәрәжәһенә лайыҡ була. "Уғыҙ хикәйәте"ндә дәлилләнеүенсә лә, йән, ҡан тартыуы, бер-береңә күңел ятыуы, ғаилә татыулығы һәм ныҡлығы ир менән ҡатындың бер иманда булыуында, бер бөтөнлөгөндә.

Бәндәләргә Хаҡ Тәғәләнең тыйыуҙарын, әмерҙәрен, ҡанбаба Әҙәмдең өгөт-нәсихәттәрен, васыяттарын оноторға ярамай. Уларҙа – фәһем, һабаҡ, быуындан-быуынға тапшырылырға һәм үтәлергә тейешле аманат. Был тыйыу, кәңәш рәүешендә мәҡәлдәрҙә һәм әйтемдәрҙә лә күренә: һөймәгәнгә һөйкәлмә; ауылдан ҡыҙ алма ла мал алма; ирең булмаҫтайға иренеңде бирмә; көндәш күргәндең ҡыҙына ҡыҙыҡма; тиңһеҙҙе тиңгә тартма; ҡатынды үҙеңдән башҡа ҡунаҡҡа ебәрмә; ҡатындар һүҙенә алданма; кеше иренә ышанып, түшәк йәймә; ҡатыныңа сереңде һөйләмә; ҡатыныңды ҡапыл бөкмә; аҙғынға эйәрһәң, аҙырһың, тоғро юлдан яҙырһың…

## Исемгә тыйыу

Борон аллаларҙың ысын исемдәре йәшерелеп, икенсе төрлө аталған. Библияға ярашлы, теләһә ҡайҙа, кәрәккән-кәрәкмәгәндә изге исемдәрҙе телгә алыу ярамаған. Илаһтар культы, уларҙы ҙурлау, уларға табыныу йолалары – бар ҡәүемдәргә хас күренеш. Ғәрәп мифологияһы буйынса, тыуҙырыусы, бар ҡылыусы, йыһанда аһәң, тәртип урынлаштырыусы бөтә донъя хакимы Душара Илаһтың тыйылған исеменең бер төрө, алмашы иҫәпләнә. Тереклек һәм уңдырышлылыҡ аллаһы Аарра яҡтылыҡ һәм ҡояш һыҙаттарын үҙендә һынландырып, Душара менән берҙәй танылған. Аллат иһә – күк һәм ямғыр алиһәһе. Был исем Илаһтың тыйылған төрө булыуы ихтимал, тигән фекер бар. Аллаһ та, Хоҙай ҙа тыйылған исемдең алмашы, уртаҡ исем илаһтан яһалған, тип фаразлана.

Йемен мифологияһында Саба дәүләтендә ил хакимы Алмаках (Илмаках) Илаһтың тыйылған исеменең варианты итеп тоҫмаллана. Илмаках – Илу алла исеменең бер төрө. Ай һәм һуғарыу аллаһы Вадд та Илуҙың ҡушаматылыр, тип уйланыла. Ай аллалары Сами, Син да Илуҙың алмаш исемдәре булһа кәрәк. Зат Бадан, Зат Зәһрән, Зат Сәнтим, Зат Химйәм ҡояш алиһәһенең тыйылған исеменең төрлө рәүештәре итеп ҡабул ҡылына.

Иран риүәйәттәрендә аҡыллы хаким Ахурамазда (Ахура Мазда) Зәрдөшт һәм Ахеменид пантеондарында бөйөк Илаһтың тыйылған исеменең алмашы һанала. Табу һалынған исемдәр грек, рим мифологияһында ла осрай. Ғөмүмән, Аллаһы Тәғәлә туҡһан туғыҙ исем менән йөрөтөлгән. Ысын исем-шәрифте йәшереү, алмаштары менән аталыу – яуыз көстәр йоғонтоһонан һаҡланыу, хилафлыҡтан ҡурсаланыу, туранан-тура танытмау, белдермәү сараһы.

Борон башҡорт халҡында исем ҡушыуға бәйле "Тәүге исем", "Ғүмерле исем", "Эт исеме" кеүек йолалар булған. Тәүге исемде, йәғни йүргәк исемен кендек инәһе ҡушҡан. Бәпесте хатта аҙ ғына ваҡытҡа ла яңғыҙ ҡалдырыу ярамаған. Был уны ен-шайтандан һаҡлау, алмаштыртмау әмәле булған.

Абдулҡадир Инан "Шаманизм: тарихта һәм бөгөн" хеҙмәтендә яҙыуынса,

ғәҙәт буйынса яҡуттарҙа ла баланың бәләкәй саҡтағы  исеме ысын исеме тип иҫәпләнмәгән. Быңдай йола боронғо уғыҙҙарҙа ла күҙәтелгән. Егет-еләнгә ҡаһарманлыҡ күрһәткәндән һуң ғына Деде Ҡорҡут исем ҡушҡан.

Монголдар иһә яңы тыуған баланы өс көн буйы ҡаҙан аҫтында һаҡлаған. Был ваҡытта инәһе ҡурсаҡ менән мәшғүл булған. Һуңыраҡ ата-инә: “Балабыҙ үлде!“ – тип ҡысҡырған да ҡурсаҡты бер соҡорға күмгән. Баланы тыныс ҡалдырһын өсөн яман рухтарҙы шулай күҙ яҙҙырғандар. Үлем рухын алдар өсөн яҡуттарҙа яңы тыуған баланы күршеләргә “һатыу“ йолаһы булған.

Балаһы булмаған йәки үлеп торған башҡорттар ҙа үлем рухынан арынырға ынтылған. Бәпес тыуғас та, кендек әбейе уны тышҡа алып сыҡҡан. Өй тирәләй бер аҙ йөрөгәс, тәҙрәнән өндәшкән: “Сит тарафтан бер бәпес килтерҙем, һатып алыусы булырмы?“ Шунан һатыулашыу башланған, һатыусыға хаҡ итеп, мәҫәлән, тимер киҫәге бирелгән. Яңы тыуған балаға иһә Тимер, Һатыбалды, тәненә көс-ҡөҙрәт өҫтәр өсөн Теребай, Үлмәсбай кеүек исемдәр ҡушылған.

Шулай итеп, бала сәләмәт, сыҙамлы, оло ғүмерле булһын өсөн Йәнтимер, Тимерйән, Таштимер, Йәноҙаҡ, Тимербикә, Йәнбикә исемдәрен биргәндәр. Исемдең магик тылсымы, ҡөҙрәте бар, исемдәр кешенең холоҡ-фиғелен, ҡылығын, үҙен тотошон, яҙмышын билдәләй, тип уйланылған. Ысын исемде йәшереү, яуыздарҙан һаҡланыу өсөн кешеләр ҡушамат исемдәр ҙә йөрөткән, һәм был ғәҙәт беҙҙең көнкүрештә лә күҙаллана.

***

Халыҡ ғөрөф-ғәҙәтендә тыйыуҙар бихисап һәм йәшәйештең бөтә яҡтарына ҡағыла. Алдашма, ғәйбәт һөйләмә; текәлеп ҡарама, бәпескә күҙең тейер; быҙауға, бәрәскә күҙең теймәһен; малға типмә, аяғың ҡорор; кеше әйберенә ҡағылма, ҡулың ҡорор; бысаҡты кешегә ҡаратма; мылтыҡты кешегә төҙәмә; ай яҡтыһында йоҡлама; ҡулыңды тый, телеңде тый; зыяратҡа бармаҡ төртөп күрһәтмә, бармағың серер; мәйетте оҙатмайынса юлға сыҡма; мәйеттең юлын ҡыйма; зыяратта кәрәкте ҡулға тотторма, ергә һал; һыуҙы ағым ыңғайына алма; юлға сыҡһаң, кире боролоп кермә, юл уңмай; тупһаға баҫып торма, үҫмәҫһең; бесәйҙе рәнйетмә, ҡарғышы төшәр; мөгөҙлө йыланды, туҙбаш йыланды үлтермә, ҡаза килер; үрмәксене үлтермә, зат-зәүерең ҡорор; эңер менән аҡшам араһында йоҡлама; салғының, бысаҡтың йөҙөн өҫкә ҡаратып һалма, бәлә-ҡаза көҫәмә; йома көн кер йыума, тырнаҡ алма; алған сәсте, тырнаҡты теләһә ҡайҙа ташлама, утҡа яҡ…

Тыйыуға бәйле аҡыллы кәңәштәр ҙә бирелгән, теләктәр ҙә әйтелгән: тыя барһаң, тыйнаҡлы булыр; тыйнаҡһыҙ үҫкән ҡыҙҙа бәрәкәт юҡ; тыйнаҡһыҙ йортта йән тынмаҫ, йәм тормаҫ; баланы йәштән өйрәт… Тимәк, үҙеңде тота, тыйнаҡ була белеү сифатын ата-инә, ололар өйрәтергә, күндерергә бурыслы. Әйтәйек, беҙҙе үҫмер саҡта шундай ғәмәлдәрҙән тыя торғайнылар: үтә ныҡ шаярыуҙан, бер ҙә юҡҡа көлөүҙән, үсекләшеүҙән, әрепләшеүҙән, алама һүҙ әйтеүҙән, төндә йөрөүҙән, һорауһыҙ, рөхсәтһеҙ әйбер алыуҙан, кемделер йәберһетеүҙән, тыҡшайыуҙан, тызрайыуҙан…

Шулай итеп, тыйыу – ыңғай төшөнсә, йола, күренеш. Ул әҙәми заттың тәбиғәтен, ҡылығын, холҡон, тәртибен көйләү вә тәрбиәләү сараһы, кешеләрҙең үҙ-ара мөнәсәбәт, йәмғиәткә ҡарата ҡараш, йәнә эш, йәшәйеш, тормош-көнкүреш күрһәтмәләре һәм ҡағиҙәләре булып тора.

**Сәлимйән БӘҘРЕТДИНОВ,**
**филология фәндәре кандидаты.**

## Фән, философия һәм йәмғиәт: БАШҠОРТОСТАН ҮЛСӘМЕ

Үткән йыл Новосибирск ҡалаһында “Фән. Философия. Йәмғиәт” исемле V Бөтә Рәсәй философия конгресы уҙҙы. Форум эшендә илебеҙҙең төрлө төбәктәренән, шулай уҡ АҠШ-тан, Европа һәм Азия илдәренән меңдән ашыу ғалим ҡатнашты. Конгрестың дүрт көн барған эшендә 8 пленар доклад, 40-тан ашыу секция ултырыштары, тиҫтәләгән “түңәрәк өҫтәл“, бер нисә симпозиум үткәрелде. Был сараларҙа бөгөнгө донъя һәм Рәсәй йәмғиәтенең үҫеш проблемалары, ошо йәһәттән фәндең һәм философияның әһәмиәте, уларҙың үҙҙәренең үҫеш мәсьәләләре ҡаралды.

Рәсәй философтарының V конгресы эшендә Башҡортостан философтары ла әүҙем ҡатнашты. Форум материалдары йыйынтығында беҙҙең республикабыҙҙың 60-тан ашыу ғалимының тезистары донъя күрҙе. Был, бөтә Рәсәй өлкәләре һәм республикалары менән сағыштырғанда, Мәскәү һәм Новосибирск ҡалаларына етә иң юғары күрһәткес. Шуныһы ҡыуаныслы: философтар араһында Өфөнән генә түгел, Сибай, Стәрлетамаҡ, Белорет һәм башҡа ҡалаларҙан да вәкилдәр бар ине. Тимәк, Башҡортостанда фәлсәфәүи фекерләү өлкәһендә эш киңәйә бара. Бигерәк тә Башҡорт дәүләт университетының Сибай институтында фән һәм философия өлкәһендә эҙләнеүҙәрҙең йәнләнеүе иғтибарға лайыҡ. Әлбиттә, һәр ғалим төрлө кимәлдә һәм йүнәлештә эш итә. Әйтәйек, үрҙә атап үтелгән 60-тан ашыу Башҡортостан философының күбеһе конгресҡа килмәгәйне. Бының төп сәбәбе шунда: хәҙер күп ойошмалар үҙ хеҙмәткәрҙәренә командировка хаҡын түләмәй. Форумға күбеһе үҙ иҫәбенә килгән. Улар араһында Рәсәй философтары даирәһендә ихтирам ҡаҙанған, әүҙем эшләүсе ғалимдар Ф.С. Фәйзуллин, В.С. Хажиев, У.С. Вилданов, З.М. Тимербулатов, Р.С. Истамғәлин, Г.Б. Вилданова, С.Н. Семенов һ.б. – бөтәһе 10-лап кеше. Яҡташтарыбыҙҙың сығыштарын коллегалары, минеңсә, ҙур ҡыҙыҡһыныу менән ҡабул итте. Конгрестың темаһынан сығып, ундағы фекер алышыуҙарҙа ҡатнашҡанда тыуған тәьҫораттар аҫтында, республикабыҙҙа фән һәм философияның үҫеше, уларҙың ижтимағи тормошо, халҡыбыҙ яҙмышына бәйлелеге тураһында миндә төрлө уйҙар тыуҙы. Шуларҙың ҡайһы берҙәре менән бүлешеп үтке килә.

***Башҡортостан фәне һәм уның халыҡ тормошондағы роле.*** Заманында яуланған суверенитеттың иң ҙур емештәренең береһе булып Башҡортостан Фәндәр академияһын ойоштороу булғайны. Академияның үткән осорҙа башҡарған эштәре тураһында төрлө рәсми докладтарҙан, киң информация

сығанаҡтарынан, статистика мәғлүмәттәренән яҡшы билдәле. Юғары уҡыу йорттарында һәм башҡа ғилми учреждениеларға фәнни эшмәкәрлек ярайһы йәнләнде. Был турала ла шулай уҡ күп яҙалар. Әле был мәҡәләлә фәндең төрлө тармаҡтарының халҡыбыҙҙың тормошонда ниндәй роль уйнауы тураһында һүҙ алып барырға ине. Тормошобоҙҙа фәндең ғәйәт ҙур урын алыуын иҫбатлап тороу кәрәкмәй: фән булмаһа, бөгөнгө кеше тәүтормош йәмғиәт ҡоролошо кимәлендә ғүмер һөрөр ине.

Шуны әйтергә кәрәк: әле һүҙ тәбиғи һәм техник фәндәр тураһында бармай. Улар халыҡтың мәнфәғәтен етештереү тармаҡтары аша ҡәнәғәтләндереп, уның рухи тормошона бик ҡағылмай. Бында иғтибар үҙәгендә ижтимағисәйәси, социаль-гуманитар фәндәр буласаҡ, сөнки улар ғына йәмғәтселекте рухи яҡтан байытып, тулы милләт итеп үҫтерә. Был ике фән йүнәлештәре араһында медицина, ауыл хужалығы, экология айырым урын биләй: улар ҙа халҡыбыҙ мәнфәғәтен туранан-тура ҡәнәғәтләндереүгә хеҙмәт итә.

Ошо күҙлектән сығып ҡарағанда, һуңғы йылдарҙа иң уңышлы һөҙөмтәләргә ирешеүселәр рәтенә беҙ тарих өлкәһендә эшләүсе ғалимдарыбыҙҙы индерә алабыҙ. Күптән билдәле: тарихы булмаған халыҡ дәрәжәле була алмай. Беҙҙең республикала хәҙер тулы мәғәнәһендә оло тарих мәктәбе (историческая школа) бар, тип ышаныслы әйтергә мөмкин. Халҡыбыҙҙың тарихы быуат төпкөлдәренән алып бөгөнгө көнгә тиклем ярайһы өйрәнелеп яҡтыртыла. Бигерәк тә беҙҙең археологтар, этнографтар, башҡорт ихтилалдарын, Октябрь инҡилабы осорон, ауылдар тарихын өйрәнеүселәр уңышлы эшләй. Арҙаҡлы тарихсыларыбыҙ араһында ғорурлыҡ менән Ә. Вәлиди, Ә. Усманов, Б. Юлдашбаев, Р. Кузеев, И. Аҡманов, Н. Мәжитов, Р. Янғужин, Н. Бикбулатов, М. Ҡолшәрипов, Ә. Әсфәндиәровтарҙы атап китергә кәрәк.

Республикала шулай уҡ әҙәбиәт һәм тел, иҡтисад, социология, педагогика, психология, сәнғәт өлкәһендә лә белгестәр яҡшы кимәлдә ғилми эшмәкәрлек алып бара. Тел белеменең юғары кимәлле һәм оло мәктәбенең арҙаҡлы вәкилдәре Ж. Кейекбаев, Ҡ. Әхмәров, М. Хәйруллина, Н. Мәҡсүтова, С. Миржанова, З. Ураҡсин, М. Зәйнуллин, Ғ. Сәйетбатталов, Н. Ишбулатов, И. Ғәләүетдинов, А. Ғәлләмов, Э. Ишбирҙин, Ф. Хисаметдинова, В. Псәнчин, Ә. Аҙнабаев һ.б. Башҡортостан фәненең ғорурлығын тәшкил итә. Медицина, ауыл хужалығы, экология фәндәре буйынса эшләүсе ғалимдарҙың уңыштары ла ярайһы билдәле.

Әлбиттә, бар өлкәлә лә бөтәһе лә ал да гөл, тип әйтеп булмай. Әле ҡул теймәгән эштәр башҡарылғанына ҡарағанда күберәк. Әйтәйек, халҡыбыҙ тарихының күп кенә осоро тарих фәне тарафынан әле өйрәнелеп бөтөрөлмәгән. Бигерәк тә совет осоро бөгөнгө яңы ҡараштан сығып тикшереүгә мохтаж. Шулай уҡ "үҙгәртеп ҡороу", суверенитет иғлан итеү, социаль-иҡтисади реформалар йылдары тарих ҡанундары күҙлегенән сығып яҡтыртылмаған. Иҡтисад белгестәре халыҡ мәнфәғәтенә ярашлы, бөгөнгө заман талап иткән кимәлгә яуап бирерлек эҙләнеүҙәр алып бармай. Шул уҡ фекерҙе социологтарға, педагогика һәм психология белгестәренә ҡарата ла әйтергә мөмкин. Был өлкәлә күренекле психологыбыҙ Вадим Сафин башлаған халҡыбыҙҙың психикаһын өйрәнеү, уны сәләмәтләндереү юлдарын эҙләү менән әүҙемерәк шөғөлләнергә кәрәк. Әҙәби тел өлкәһендәге яңылыҡтар барлыҡ осорҙа ла тәрәнерәк уйлап тормошҡа ашырылырға тейеш. Төптән уйланылмаған яңы

үҙгәртеүҙәрҙе әленән-әле индереүгә тел бик өлгөрөп етмәгән, тигән фекер уята. Социологтар халҡыбыҙҙың бөгөнгө тормош сифатын һәм хәлен ысынбарлыҡҡа ярашлы, тулыраҡ күрһәтергә бурыслы. Педагогия фәне тарафынан Мәрйәм Бураҡаева башлаған халыҡ педагогикаһын, тормош һабаҡтарын киңерәк өйрәнеү, тормошҡа ашырыуға ынтылыу күп яҡлы файҙа бирәсәгенә минең, мәҫәлән, иманым камил.

Шулай итеп, Башҡортостандағы фәнни тормош республиканың үҫешенә йоғонто яһауҙа, халыҡ ихтыяжын тулыраҡ мәнфәғәтен ҡәнәғәтләндереүҙә ҙур роль уйнай. Был процесс, әлбиттә, фәндәрҙең үҫеше философия менән тығыҙ бәйләнешле барғанда ғына уңышлы буласаҡ.

***Башҡортостан философияһының бөгөнгө хәле һәм перспективаһы.*** Башҡорт халҡының фәлсәфәүи фекерләүе бөтә башҡа донъя халыҡтарынығы кеүек мифология, эпик әҫәрҙәр, дини әһелдәрҙең хеҙмәттәре, ихтилал юлбашсыларының халыҡҡа мөрәжәғәттәре, этнографтарҙың, сәсәндәрҙең, мәғрифәтселәрҙең, яҙыусыларҙың һәм шағирҙарҙың ижады аша сағыла. Был турала «Башҡортостан энциклопедияһы»нда “Башҡортостанда фәлсәфәүи фекерләү” тигән бүлектә бик яҡшы бәйән ителгән. М. Өмөтбаев, М. Аҡмулла, Р. Фәхретдинов, З. Рәсүлев һәм башҡа мәғрифәтселәребеҙҙең, бөгөнгө мәғрифәт фәне өлкәһендә эшләүсе ғалимдарыбыҙҙың ижады профессиональ мәғрифәт философияһына нигеҙ һалыуға булышлыҡ итә. Сәнғәт философияһының оло бөтмәҫ-төкәнмәҫ темаһы – «Башҡорт халыҡ йырҙарының фәлсәфәүи тәрәнлеге” тигән йүнәлештә булыр ине. Үрҙә әйтелгән тарихсыларыбыҙҙың хеҙмәттәре, бигерәк тә Ә. Вәлидиҙең тарихи ижады башҡорт тарихы философияһының ғына түгел, бәлки, бөтә донъя тарихы философияһының бер өлөшө булып тора. Профессор В. Хажиев «Йәшәйеш һәм уҡымышлыҡ хәҡиҡәттәре» (Истины бытия и познания. Өфө, 2007 й.) тигән китабында “Башҡорт мифологияһында космос һәм буталыш” (Хаос и космос в башкирской мифологии) исемле мәҡәлә аша ҡыҙыҡлы фәлсәфәүи анализ биргән. Тәрән һәм ентекле фәлсәфәүи эҙләнеүҙәр Закирйән Әминевтың «Боронғо башҡорттарҙын космогоник күҙәтеүҙәре» (Космогонические воззрения древних башкир) тип аталған китабында ла күренә.

Дөйөм алғанда халҡыбыҙҙың фәлсәфәүи аңы тарих, этнография, фольклор, әҙәбиәт, һынлы сәнғәт, театр белгестәренең һ.б. күп авторҙарҙың (М. Буранғолов, Ә. Харисов, К. Мәргән, Ә. Вахитов, М. Минһажетдинов, К. Әхмәтйәнов, М. Сәғитов, Ф. Камаев, Ғ. Хөсәйенов, Л. Атанова, Һ. Сәйетов, Ф. Нәҙершина, Ә. Сөләймәнов, Р. Шәкүр һ.б.) хеҙмәттәрендә фәлсәфәүи һығымталар аша яҡтыртылған. Ошо һығымталар профессиональ философтар тарафынан дөйөмләштерелеп, ниндәйҙер үҙенсәлекле башҡорт әҙәбиәте, мәғрифәте, мәҙәниәте һәм сәнғәте философияһы эшләнһә, бик фәһемле булыр ине. Халҡыбыҙҙың фәлсәфәүи фекерләүе, әлбиттә, иң тәрән һәм киң рәүештә күп һанлы яҙыусыларыбыҙҙың һәм шағирҙарыбыҙҙың әҫәрҙәрендә сағыла. Уларҙың бөтәһен дә һанап китеү, айырыуса әҫәрҙәрен анализлау бик күп урын алыр ине.

Профессиональ философия мәктәбе беҙҙә совет осоронда ғына барлыҡҡа килә. Республикала философияның үҫешенә бигерәк тә Башҡорт дәүләт университетында философия факультеты асыу ныҡлы этәргес булды. Әлбиттә, уға тиклем дә беҙҙең быуаттар төпкөлөнән килгән халыҡ философияһын

тикшереүҙәр, күп кенә ғалимдарыбыҙҙың халҡыбыҙ яҙмышына бағышлаған фәлсәфәүи эҙләнеүҙәре иғтибарға лайыҡ ине. Улар араһында бигерәк тә Д. Вәлиевтың, З. Рәхмәтуллинаның хеҙмәттәре баһалап бөткөһөҙ әһәмиәткә эйә. Һуңғы йылдарҙа был өлкәлә профессорҙар Д. Азаматов, В. Хажиев уңышлы эшләй. Социаль философия өлкәһендә БР Фәндәр академияһы академигы, профессор Ф. Фәйзуллин Рәсәй кимәлендәге үҙенсәлекле фәлсәфәүи мәктәп булдырҙы. Шул уҡ ваҡытта, Д. Азаматовтың өҫтә әйтелгән конгресс материалдарында баҫылған хеҙмәтенән сығып шуны ла әйтергә мөмкин: әле беҙҙә "ижтимағи фекерләүҙең күп осорҙары тикшеренеүһеҙ ҡала килә". Күренеүенсә, халҡыбыҙҙың фәлсәфәүи үҙаңын тикшереүҙә профессиональ философия тарафынан эшләнәһе эштәр күп әле.

Философияның ҡайһы бер тармаҡтары республикабыҙҙа әле ныҡлап үҙләштерелмәгән, тип әйтергә кәрәк. Улар араһынан республика кимәлендәге сәйәсәт философияһын, иҡтисад философияһын, сәнғәт философияһын, әҙәбиәт философияһын, халыҡ психологияһы философияһын һ.б. йүнәлештәрҙе атарға мөмкин. Күренекле психолог В. Сафиндың ҡарашы тәрән фәлсәфәүи методологияға таянғанын билдәләп китеү урынлы.

Айырым бер мөһим фәлсәфәүи проблема булып бөгөн халҡыбыҙҙың дини философияһын булдырыу тора. Билдәле, башҡорттарҙың динде ҡабул итеүе, уға мөнәсәбәте, уның ҡанундарын үтәү тәртибе башҡа халыҡтарҙыҡынан бер ни тиклем айырыла. Кемдеңдер Аллаһ барлығына ышаныу-ышанмауына ҡарамаҫтан, беҙ ата-бабаларыбыҙ тотҡан динде ихтирам итергә, уға мәҙәниәттең мөһим бер өлкәһе, халҡыбыҙҙы ойоштороусы, уның рухи һәм әхлаҡи тормошона йөкмәтке биреүсе мөһим көс итеп ҡарарға бурыслыбыҙ. Әгәр дин йолаһы буйынса беҙ донъя ҡуйған яҡындарыбыҙҙы иҫкә алмаһаҡ, бала тыуғанда, никах ҡорғанда һәм башҡа осраҡтарҙа дини йолаларҙы башҡармаһаҡ, рухи тормошобоҙ күпкә ярлы булыр ине. Әлбиттә, шул уҡ ваҡытта дингә ҡарата ғилми ҡараш булдырыу, уның ысын йөкмәткеһен белеү, ысынбарлыҡҡа тура килгән һәм килмәгән яҡтарын аңлау ҙа бик мөһим. Халҡыбыҙҙың дини философияһын тикшереүҙә профессор А. Юлдашбаева-Юнысованың тарихи хеҙмәттәре иғтибарға лайыҡлы.

Дөйөм алғанда, Башҡортостан философтары бөгөн көндәлек философия дәрестәре уҡытыу, философия фәненән кандидатлыҡ минимумы буйынса имтихан алыу, тармаҡтан электән килгән традицион проблемалары буйынса эҙләнеүҙәр, республика тормошона ҡағылған ҡайһы бер мәсьәләләрҙе тикшереү менән мәшғүл. Был эштәр үҙҙәре үк башҡа фәндәрҙең һәм йәмғиәттең үҫешендә ярайһы роль уйнай. Шул уҡ ваҡытта Башҡортостан философтары ныҡышмалы рәүештә республикабыҙҙың актуаль ижтимағи тормошон тәьмин иткән ҙур проблемаларға, халыҡтың социаль, рухи һәм әхлаҡи үҫеш мәсьәләләренә иғтибар биреп еткермәй. Әйтәйек, үрҙә әйтелгән философия конгресына тезистар яҙған 60-тан ашыу Башҡортостан ғалимдары араһында туранан-тура республикабыҙ проблемаларына арналған доклад яҙыусылар бер ҡул бармаҡтары менән генә һанарлыҡ. Шул уҡ ваҡытта беҙҙең философтар хәҙерге осорҙа актуаль булған иң мөһим проблемаларға тейешле иғтибар бирмәй, "ваҡ темалылыҡ" менән мәшғүлдәр. Ҡайһы бер философтар синергетика тәғлимәтенең йөкмәткеһен тейешле кимәлдә белеп етмәй тороп та, уға кире ҡарашын йәшермәй. Ә был тәғлимәт хәҙер фән һәм философия

өлкәһендә көндән-көн популярлаша бара һәм ғилми эҙләнеүҙәрҙә яҡшы һөҙөмтә бирә. Шулай уҡ бөгөн көн үҙәгендә торған һәм фәнни эҙләнеүҙәрҙә яҡшы методологик ҡулланма була алырлыҡ, әммә философтар тарафынан тейешлесә баһаланмаған фәлсәфәүи тәғлимәттәр араһында “тотороҡло үҫеш” теорияһы, глобалистика, универсаль эволюционизм, ноосферогенез, тринитаризм һәм башҡа перспективалы йүнәлештәр бар.

Фәндең тормошобоҙҙағы әһәмиәте тураһында беҙгә киң билдәле булһа, философия ниндәй роль уйнай икәне күптәргә таныш түгел. Фән булмаһа, бөгөнгө уңайлы фатирҙар, автомобилдәр, компьютерҙар, кеҫә телефондары һәм башҡа бик кәрәк цивилизация емештәре булмаҫы еңел аңлашыла. Әммә бөгөнгө ғилми эҙләнеүҙәрҙә фәлсәфәүи методологияға таянмай тороп, уңышҡа өлгәшеү мөмкин түгел. Тимәк, фәнде үҫтереү аша философия беҙҙең тормошто яҡшыртырға ярҙам итә. Көндәлек ижтимағи тормошта ла тейешле фәлсәфәүи ҡараш менән эш иткән кешеләр уңышҡа күберәк өлгәшә. Дөйөм алғанда, философия фәне, фәлсәфәүи фекерләү аҡыллы һәм әхлаҡлы йәшәйеш ҡанундарының сығанағы булып тора.

***Башҡа илдәр ғалимдарының эҙләнеү өлгөләре.*** Новосибирскиҙа үткән Рәсәй философия конгресында көнсығыш философияһына, дин философияһына, сәнғәт философияһына арналған секциялар ҙа әүҙем эшләне. Бында Үзбәкстан, Ҡаҙағстан, Әзербайжан, Ҡырғыҙстан дәүләттәрендәге, Бүрәт, Дағстан һәм Саха (Яҡут) республикаларындағы философия мәктәптәренең эҙләнеүҙәр тәжрибәһе ҙур ҡыҙыҡһыныу тыуҙырҙы. Бешкәктән Н. Осмонованың “Милли фәлсәфәүи традицияларҙы өйрәнеүҙең теоретик проблемалары”, А. Кожомуратовтың “Бөгөнгө Ҡырғыҙстанда дини ситуация” (Религиозная ситуация в современном Кыргызстане), Г. Ысманалиеваның “Ҡырғыҙ халҡының фәлсәфәүи аңын өйрәнеү мәсьәләһенә ҡарата” тигән сығыштары күптәр өсөн фәһемле булды. Был йүнәлештәге әңгәмәләрҙең йөкмәткеһен күҙ алдына килтереү өсөн бер нисә сығыштың темаһын әйтеп китеү етә: Алматынан – С. Нурмуратов “Ҡаҙаҡ халҡының донъяуи аңының ҡиммәтмәғәнә үҙенсәлектәре”, А. Кулсариева – “Мультилингвизм мәҙәниәт-ара диалог шарты”; Элистанан М. Уланов – “Буддизм мәҙәниәте бөгөнгө фән йөкмәткеһендә”, К. Наднеева – “Ҡалмыҡ буддизмында кеше тураһында тәғлимәт”; Махачкаланан С. Мослимов – “Ислам диненең этикаһы тураһында”, Н. Уруджева – “Милли мәғрифәт системаһында этик ҡиммәттәр”; Черкесскиҙан М. Шенкао – “Этностың үҙаңы проблемаһы”; Абакандан Л. Анжиганова – “Этник донъяуи үҙаң: эстәлек, структура, функция”. Бүрәтстандың күренекле философ-ғалимы В. Мантатов донъяның тотороҡло үҫеш проблемаларын буддизм тәғлимәтенә бәйләп үткәргән эҙләнеүҙәре менән бөгөн Рәсәй һәм донъя кимәлендә танылыуға лайыҡ. Был сығыштар иғтибар үҙәгендә булды. Беҙҙең республикала ла көнсығыш диндәре философияһын өйрәнеүселәр бар икән: Стәрлетамаҡтан Т. Бәширов “Дзен-буддизмда аңлау проблемалары: коандар ысулы” тигән тезистарын баҫтырған. Беҙҙең өсөн шуныһы фәһемле: был темаларҙы тикшереүселәрҙең күпселеге – профессиональ философтар. Әйтеп үткән темалар, халҡыбыҙ философияһы проблемалары беҙҙең философ ғалимдарҙың тикшеренеүҙәрендә лә шулай уҡ сағылыш тапһа, бик урынлы булыр ине.

Мин конгреста кеше, тәбиғәт һәм йәмғиәт араһындағы үҙ-ара мөнәсәбәт

тураһында доклад яһаным. Уны үҙемдең тотороҡло үҫеш һәм глобализация темаларына арналған хеҙмәттәремә, бигерәк тә күптән түгел Башҡортостанда ЮНЕСКО тарафынан үткәрелгән кеше потенциалы буйынса эҙләнеүҙәрҙең, уларҙың һөҙөмтәләре буйынса экология темаһына баҫылған докладыма таянып эшләнем. Сығыш тыңлаусыларҙа ярайһы ҡыҙыҡһыныу уятты, һорауҙар, фекер алышыуҙар әүҙем булды. Был проблемаларҙың актуаллеген беҙ бөгөн илебеҙ дусар ителгән тамуҡҡа оҡшаш ҡоролок афәте, янғындар һәм башҡа бик күп күренештәр аша беләбеҙ. Конгресс материалдары йыйынтығында баҫылған сығышымдың тезистарын килтереп үтәм.

Кеше эшмәкәрлеге тәбиғәт торошона ҡаршы килә. Ысынлап та, әҙәм балаһының тәбиғәте күп ҡырлы. Ә уны уратып алған тәбиғәттең төрлөлөгө тағы ла күберәк. Ләкин кешелә тәбиғәттең башҡа ағзаларында булмаған үҙенсәлек бар: ул – интеллект һәм рухи йөкмәткене эсенә алған аң. Бер яҡтан ҡарағанда, аң кешене башҡаларҙан өҫтөн ҡуя. Уның тирә-яҡта берҙән-бер күренеш икәнлеген раҫлай, кеше үҙенең аңы ярҙамында үҙ мәнфәғәте өсөн тәбиғәтте файҙалана, хатта үҙгәртергә ынтыла. Шулай итеп, кеше тәбиғәттең тәбиғи үҫешен боҙа, ғәмәлдә – емерә. Кешенең тирә-яҡ мөхиткә йоғонто яһамай йәшәй алмауын күҙ уңында тотоп, шундай һорауҙар ҡуйырға мөмкин: цивилизация тәбиғи процестарҙы емермәй генә йәшәй аламы? Кеше тирә-яҡ мөхит менән бәйләнешкә ингәндә үҙенең интеллектын тейешле дәрәжәлә файҙаланамы? Тәбиғәтте үҙ мәнфәғәтендә файҙаланғанда әхлаҡлылыҡ ҡанундарын һаҡлаймы? Һуңғы һорауға яуап ҡәнәғәтләнерлек түгел: кеше тирә-яҡ мөхиткә ҡарата интеллектын дөрөҫ файҙаланмай, ғөмүмән, уның тәбиғәткә мөнәсәбәтен юғары әхлаҡлы тип әйтеү мөмкин түгел. Тимәк, кешенең биосфераға кире йоғонтоһон кәметеү өсөн саралар күреү зарур. Бәлки, кешенең үҙенең интеллектын файҙаланыу иҫәбенә тирә-яҡ мөхиттең хәлен яҡшыртырға бурыслы булыуы хаҡында һүҙ алып барырға ла кәрәктер.

Әҙәм балаһы әлегәсә йәшәүен дауам итһә, уға тағы күпме ғүмер ҡалған? Әллә уға, ихтыярын егә алмаған наркоман йәки алкоголик кеүек, үҙ-үҙен юҡ итеүгә күп ҡалмағанмы? Бөгөнгө тикшеренеүҙәр шуны күрһәтә: кешенең йәшәү рәүеше әлегесә ҡалһа, уға яҡты донъяла урын тиҙҙән ҡалмауы ихтимал. Тимәк, йәшәү рәүешен үҙгәртеү мотлаҡ. Дөрөҫ, быға ҡаршы сығыусылар ҙа юҡ түгел. Улар, әлбиттә, байлыҡҡа күмелеп йәшәй һәм кешелектең киләсәге уларҙы һис кенә лә борсомай. Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, ошондай фекер йөрөтөүселәр араһында эшлекле кешеләр, сәйәсмәндәр, хатта дәүләт башлыҡтары ла бар.

Хәҙерге йәшәү рәүеше нисек булырға тейеш? Әлеге донъя йәмғәтселегендә тотороҡло үҫеш концепцияһынан башҡа идея юҡ. Хатта был концепция ла төрлө сәбәптәр арҡаһында ғәмәлгә ашырылмай килә. Яҡын киләсәктә кешелектең был концепцияға етди иғтибар бирәсәгенә шик ҡалмай. Тик ҡасан? Кешелектең аҡылға килеүе бик һуң булмаҫмы?

**Хәлил БАРЛЫБАЕВ,**
**иҡтисад фәндәре докторы,**
**РФ Президенты ҡарамағындағы**
**Дәүләт хеҙмәте академияһы профессоры.**

## РУХИ ХАЗИНАЛАР ЙЫЙЫП...



*Мөхтәр Сәғитов портреты.*
Риф Абдуллин рәсеме.

...Мөһабәт тауҙар, ҡара урмандар, мөләйем кешеләр... Ошо илаһи матурлыҡты күреп ғашиҡ була шағирҙар һәм «...быуаттарҙың баш өҫтөнән ҡарап мәғрур тора ҡаялар» тип илһамланып-илһамланып шиғыр яҙа.

...Риүәйәттәр, был төбәккә 6000–8000 йыл элек бөрйән кешеләре килеп йәшәй башлаған, ти. Бынан 700 – 750 йылдар элек хозур тәбиғәт ҡосағына һыйынып, ҡайғы-хәсрәтһеҙ донъя көткән бер мәлдә, былар ҙы ҡыҫырыҡлап, ҡыпсаҡтар килеп ултыра башлай. Ер өсөн һуғыш китә. Ете ырыу батшаһы Мәсем хан ошо мөһим мәсьәләләрҙе хәл итеү өсөн йыйын йыя. Ыҙғыш, талаш, һуғыш китә. Бөрйән ырыуы башлығы Ҡарағоломбәт бей ҡыпсаҡтарҙың башлығы Бабсаҡ бейҙе үлтерә һәм уны ерләргә тупраҡ бирмәй. Ә башҡорттарҙа элек шундай йола булған: кешене үлгән ерендә күмергә! Ҡыпсаҡтар үҙ ауылдарына ҡайтып, аттарға, дөйәләргә аҫылған һауыттарға, һалдарға тупраҡ тейәп Аҡбулат ауылына килә. Бабсаҡ бейҙең кәүҙәһен атҡа ултыртып, уның тирәләй тупраҡ өйәләр һәм бейек уба ҡалҡып сыға.

700 йыл (965) уҙғас, археологтар был убаны ҡаҙып, 2 метрҙан оҙонораҡ кеше һөлдәһен һәм ат һөйәктәрен табалар. Тимәк, был хәлдәр ысынлап та булған, тип иҫәпләргә мөмкин. Әлеге ваҡытта кеше һөлдәһе һәм ат һөйәктәре Санкт-Петербург археология музейында һаҡлана. Ә убаны 1990 йылда тәртипкә килтереп, яҙыулы оло таш менән билдә ҡуйылды.

Башҡорт халҡының «Урал батыр», «Аҡбуҙат», «Бабсаҡ менән Күсәк» кеүек боронғо эпик әҫәрҙәрен иҫкә төшөрөү менән шундуҡ тел осона «бөрйән» һүҙе килә. Уның артынса легендаларға бай Шүлгәнташ мәмерйәһе, алҡынып ятҡан Йылҡысыҡҡан күле, мөһабәт һәм мәғрур Мәсем, Баҙал, Ҡурыуҙы тауҙары бер-бер артлы күҙ алдына баҫа, ә ҡолаҡ төбөндә дәртле йыр яңғырай:

*Бөрйән ере – гел аҫыл таш,*
*Аҙым һайын хазина шул, эх кенә!*

Ошо ғәжәйеп ваҡиғалар һаҡлаған ҡара урман, тауҙар, ҡаялар араһындағы



*Мөхтәр Сәғитовтың Иҫке Собханғолдағы йорт-музейы.*

иң матур ауылдарҙың береһе — Бөрйән районы үҙәге Иҫке Собханғолда 1933 йылдың 27 августында күренекле фольклор белгесе, яҙыусы Мөхтәр Сәғитов тыуған. Ул урта мәктәптә уҡыған йылдарында уҡ халыҡ ижадын йыйыу менән мауыға. Әсәһе Фәхерниса апай моңло тауышы менән халыҡ йырҙарын башҡара. Әсәһенең апаһы Өммөхаят инәй һүҙгә лә оҫта, йырсы ла була. Уларҙың «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу», «Бабсаҡ менән Күсәк», «Алпамыша менән Барсынһылыу» кеүек әҙәби ҡомартҡыларҙы һөйләгәнен, «Сәлимәкәй», «Зөлхизә», «Буранбай», «Арғужа» һәм башҡа халыҡ йырҙарын, ҡобайырҙарҙы тыңлап үҫеү, улар менән һоҡланыу, хисләнеү фольклор белгесе булып китергә ярҙам иткәндәр егеткә.

Мөхтәр Сәғитовтың Иҫке Собханғолдағы музейы уның тормошо һәм ижады хаҡында эҙмә-эҙлекле һөйләй. Экспонаттар уның 9 балалы ғаиләлә өсөнсө булып тыуыуын, бәләкәй сағын һәм мәктәп йылдарын, промартелдә эшләүен, Хәрби-Диңгеҙ Флотында дүрт йыл буйы даръялар гиҙеүен, Иҫке Монасип ете йыллыҡ мәктәбендә уҡытыусы булып эшләүен, унан һуң Башҡорт дәүләт университетында белем алыуын бәйән итә. Бында шул саҡтағы фотолар, ата-әсәләренең көнкүреш әйберҙәре, уларҙың йәшәү шарттарын, кәсеп-шөғөлдәрен аныҡлаусы ҡомартҡылар ҡуйылған.

Башҡорт дәүләт университетында уҡыған осоронда ул әкиәттәр, йырҙар, легендалар, риүәйәттәр һәм башҡа фольклор өлгөләре йыя, артабан ул саҡтағы СССР Фәндәр академияһының М. Горький исемендәге Донъя әҙәбиәте

институты аспирантураһына инә. Бер нисә йылдан «Бабсаҡ менән Күсәк» эпосы буйынса филология фәндәре кандидаты дәрәжәһенә диссертация яҡлай. Әйткәндәй, был ҡомарҡыны Мөхтәр үсмер сағынан уҡ яттан белгән.

Музейҙа ғалим диссертацияһының ҡулъяҙмаһы, башҡорт эпик әҫәрҙәрендә күп тапҡыр телгә алынған Шүлгәнташ мәмерйәһе һәм Йылҡысыҡҡан күле эргәһендәге таштарҙың макеттары ҡуйылған. «Шүлгән» һүҙенә аңлатма ла яҙылған: «шу» – су, һыу һәм «үлгән», тимәк, «шүлгән» һүҙен «үле һыу» тип тәржемә итергә мөмкин. Билдәле булыуынса, әлеге ваҡытта ла Тибет тауҙарында үле һәм тере һыулы күлдәр бар, шуға был атаманың килеп сығышы тураһында уйланырлыҡ.

Ғалим Белорет районы Ҡаһарман ауылында фольклор материалдары йыйған саҡта аҡһаҡалдарҙан Тамъян ырыуы башлығы кенәз Шәғәле Шаһмандың ҡәберлеге ошо ауылда икәнлеген ишетеп, уны барып күрә һәм матбуғат аша йәмәғәтселеккә еткерә.

Мөхтәр Сәғитов – етмештән артыҡ ғилми хеҙмәт, ике монография, хикәйәләр, юлъяҙмалар, төрлө темаларға яҙған мәҡәләләр авторы. Ул хикәйәләрендә тәбиғәтте тасуирлауға етди иғтибар бирә. Яҙыусыға тәбиғәт образы персонаждарының эске кисерешен тәрәнерәк асырға, хатта тышҡы ҡиәфәтен күҙ алдына баҫтырыуға ла хеҙмәт итә.

Миҫал өсөн «Һандуғас һайрағанда» исемле хикәйәһенән бер өҙөк.

«...Көн аяҙ, күктә бейәләй ҡәҙәре лә болот әҫәре юҡ, бөтә урман-тау ҡояш нурына ҡойонған ине. Тирә-яҡта ағастарҙы тирбәлдереп ҡоштар һайрай, ә үҙем ҡыр сәскәләренең хуш еҫенә иҫереп киләм. Оҙон ҡайын ағастары уратып алған бәләкәй генә аҡланға килеп етер алда, ғәжәп бер күренеш күреп, туҡтап ҡалдым. Мин, нимәнеңдер ауҡаларҙы ярып ҡаршы килеүен һиҙеп, мылтыҡты курокка ултыртып, ағас артына боҫтом. Ялбырап үҫеп ултырған ҡайын ботаҡтарын ҡулы менән ситкә һирпеп, утыҙ йәштәрҙәге бер ҡатын килеп сыҡты ла миңә ун биш аҙымдар етмәй туҡтаны. Ул, күҙен ҡыҫа биреп, ағас баштарын ҡарарға, нимәнелер иғтибар менән тыңларға кереште.

Уның йөҙө миңә ғәҙәттән тыш матур күренде. «Нишләп йөрөй икән был һылыу ҡатын? Төшөммө был өнөммө?» – тип мин хайран ҡалдым. Һөлөк кеүек таҙа, һылыу ҡатын көлөмһөрәп бер аҙ ҡарап торҙо ла, эҙләгән нәмәһен тапманы булһа кәрәк, йөҙөнән йылмайыуы ҡасып, ҡырҡа боролоп, аҡланға табан атланы...»

Гүзәл тәбиғәт ҡосағында үҫкән Мөхтәр Сәғитовтың таланты күп ҡырлы. Ул – ғалим-фольклорист-эпосовед, яҙыусы-прозаик, музыкант-башҡарыусы. Уның боронғо башҡорт көйҙәрен һыҙғыртҡыста, думбырала, ҡумыҙҙа уйнауын замандаштары, яҡташтары һағынып һөйләй. Музейҙа ошо музыка ҡоралдары ла бар.

Иң түрҙә – Башҡортостандың атҡаҙанған рәссамы, Шәйехзада Бабич исемендәге республика дәүләт йәштәр премияһы һәм Назар Нәжми исемендәге премия лауреаты, скульптор Мәүлетбай Хәлилов эшләгән бюст. Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты, Башҡортостандың атҡаҙанған, Рәсәйҙең һәм СССР-ҙың халыҡ рәссамы, Рәсәй Художество академияһы академигы Әхмәт Лотфуллин һәм Башҡортостандың атҡаҙанған рәссамы Риф Абдуллин ижад иткән портреттары урын алған.

Музейҙа уның ғаиләһенә бағышланған экспозициялар ҙа бар. Улар ҡатыны



*Мөхтәр Сәғитовтың ғаиләһенә бағышланған экспозиция.*

Тәлиғә Нәсретдиновна, ҡыҙҙары Гөлшат, улдары Юлай хаҡында һөйләй.

Күренекле ғалим һәм яҙыусы Мөхтәр Сәғитовтың Иҫке Собханғолдағы музейы 1995 йылдан эшләй. Ошо ваҡыт эсендә унда ғилем, әҙәбиәт һәм фольклор менән ҡыҙыҡһынған йөҙ меңгә яҡын уҡыусы булып киткән.

Мөхтәр Сәғитов 1964 йылдан алып ғүмеренең һуңғы көнөнә саҡлы СССР Фәндәр академияһының Башҡортостан филиалы Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының фольклор һәм сәнғәт бүлегендә эшләй. Хеҙмәттәштәре Фәнүзә Нәҙершина, Әнүр Вахитов, Салауат Галин, Ниғмәт Шоңҡаров, Кирәй Мәргән менән Башҡортостанды урап сыға, күрше өлкәләрҙәге башҡорт ауылдарын ҡыҙыра, халыҡ ижады ынйыларын туплай. Музейҙа ошо хаҡта һөйләгән материалдар ҙа байтаҡ.

– Мөхтәр Сәғитов мосафир фольклорсы ине, – тип хәтерләй уның замандашы һәм яҡташы, Башҡортостан Фәндәр академияһы академигы Әхмәт Сөләйманов. Ул Саха (Яҡут) илендәге ҡәрҙәштәребеҙ янына, Тыва, Таулы Алтай иленә, Үзбәкстан, Ҡаҙағстанға, Төркиәгә, Румынияға барҙы, төрлө ғилми конференцияларҙа башҡорт халыҡ ижады менән донъя ғалимдарын таныштырҙы. Уның юлъяҙмалары, фәһемле ғилми хеҙмәттәр – шулай уҡ музей түрендә.

Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты, күренекле ғалим-фольклорсы, яҙыусы Мөхтәр Сәғитовтың ғилми эштәре – бөгөнгө ғалимдар өсөн оло бер хазина...

*...Һинең йыйған хазиналар, ана,*
*Йымылдашып ята нур сәсеп.*
*Үҙең һаман йөрөйһөңдөр төҫлө*
*Нурҙар йыйып, нурҙар өләшеп...*

**Фәнис ЯНЫШЕВ.**

## ЯҠТЫ КҮҘ ЙӘШТӘРЕ...

*(Мәғәфүр Хисмәтуллиндың тыуыуына 95 йыл)*

Моғайын, борон-борон заман әҙәм балаһы, бер илаһи мәлдә үҙенең тойғоларын башҡаларға һүҙ менән әйтеп тә, аңлатып та бирә алмайынса аҙаплана торғас, күкрәген тултырып йырлап ебәргәндер... Уның йырында тыуған еренә һөйөүе, тирә-яҡтың гүзәллегенә, тормош матурлығына һоҡланыуы сағылғандыр. Ғөмүмән, кеше тауышы — Хоҙай тарафынан яратылған иң камил музыка ҡоралы ул. Кеше тауышынан да бай, ҡөҙрәтле, шул уҡ ваҡытта нескә музыка ҡоралының булыуы мөмкин түгел. Мәғәфүр Хисмәтуллиндың тауышын тыңлаған һайын бына шундай һығымтаға киләм мин. Быйыл Мәғәфүр Хисмәтулла улына 95 йәш тулған булыр ине...



Миңә, шөкөр, уның менән күп тапҡырҙар аралашыу бәхете тейҙе. Тәүге тапҡыр уның тауышын ҡасан ишеткәнемде аныҡ ҡына хәтерләмәйем, әммә бик бәләкәстән был сихри тауыштан әҫәрләнеп, уның йырҙарын йырлап йөрөгәнемде беләм. Әсәйемә эйәреп театрға барам, репетицияларҙа ултырам; опера, балет спектаклдәрен ҡат-ҡат ҡарайым, оҡшаған урындарын ятлап бөтәм. “Салауат Юлаев” операһында әсәйем Нажиә Аллаярова — Әминә, Мәғәфүр ағай — Салауат. Был опера ҡуйылған кистә түҙемһеҙләнәм, тулҡынланам, Салауаттың Әминәһе менән хушлашҡан һуңғы арияһын көтәм...

Хәтеремдә, мине 7 йәшемдә музыка мәктәбенә алып барҙылар. Ҡабул итеү имтиханында: “Иң яратҡан йырыңды йырла”, — тигәстәре, мин бик хисләнеп: “Һүндергәндәр минең күҙ нурымды...” — тип йырланым.

Бәләкәй баланың опера арияһын, етмәһә ирҙәр арияһын йырлауы оло уҡыусыларҙы ғәжәпләндерҙе лә, көлдөрҙө лә. Ә мин иһә уларға ҡарап ғәжәпләндем: үҙҙәре бит, иң яратҡаныңды йырла, тинеләр... Мәғәфүр Хисмәтуллин сәнғәтенең тетрәнгес көсөнөң бер сағылышы булғандыр был, күрәһең...

Аҙаҡтан да былдай тетрәнеүҙәр күп булды. Йырсының 70—80-се йылдарҙа йырлаған ҙур һәм бәләкәй партиялары, режиссер эштәре менән даими таныша барҙым. Ә инде Башҡортостан телевидениеһының музыкаль тапшырыуҙар редакцияһында эшләй башлағас, Мәғәфүр ағай менән бөтөнләй икенсе юҫыҡта — партнерҙарса аралашырға, күп тапҡырҙар осрашырға тура килде. Уға сикһеҙ рәхмәтлемен: һис тә һауаланмайынса, мин әҙерләгән тапшырыуҙарҙа бик теләп, бик ихлас ҡатнашты; бәләкәй генә хеҙмәтемде лә юғары баһалап, күңелемде үҫтерергә тырышты. Башҡортостан телевидениеһы видеотекаһында бергәләп эшләгән унлаған тапшырыу һаҡлана. Улар араһында — кино таҫмаһына төшөрөлгән "Фатиха" документаль фильмы (режиссеры — Ф. Сафиуллина), "Ҡош юлы", "Йылдар үтә, моңдар ҡала", "Йөрәк хәтере" телевизион циклдарынан тапшырыуҙар (режиссеры — З. Миңлейәрова), йырсының юбилей кисәләренән репортаждар һ.б. Уның менән булған осрашыуҙар миндә онотолмаҫлыҡ хәтирәләр ҡалдырҙы, күп нәмәләргә өйрәтте.

Мәғәфүр Хисмәтуллиндың ижади тормошо тулыһынса тиерлек Башҡорт дәүләт опера һәм балет театры менән бәйле. Театрҙа эшләгән 40 йыл ғүмере эсендә тыуҙырған 60-ҡа яҡын ролен, тиҫтәләгән режиссерлыҡ хеҙмәттәрен, йәмәғәт эштәрен барлап ҡына ла уның ошо театрға ни тиклем күп көс һалғанын төҫмөрләйһең. Опера театрының һәр бер мәрмәр ташы уның тауышын хәтерләй кеүек, сөнки артистың ҡаҙаныштары — театрҙың ҡаҙаныштары, яҙмышының йондоҙло мәлдәре театр тарихының да иң юғары уңыштарына әүерелде. Әле үҙе тере саҡта уҡ театрҙың ул йырлаған осоро "Хисмәтуллин осоро", тип аталырға хаҡлы икәнлеген барыһы ла аңлай ине.

Ә бит һәр заманда ла таланттар, һәләтле сағыу йырсылар тыуа килә. Тик халыҡ тарафынан бөйөклөк юғарылығына күтәрелә алғандары һанаулы ғына. "Хисмәтуллин феномены"ның сере, минеңсә, ябай ҙа, ҡатмарлы ла. Уның нигеҙендә, әлбиттә, — тамырҙары менән тыуған еренә ерегеп үҫкән тәбиғи талант. Әммә ошо тәбиғәт бүләгенә аныҡ аҡыл менән тәрән фекерләү ҡеүәһе һәм хайран ҡалырлыҡ, фантастик дәрәжәләге егәрлелек ҡушылмаһа, талант та һайығыр ине. "Хисмәтуллин феномены", моғайын, ошо өс төшөнсәнән торалыр.

М. Хисмәтуллиндың ижад биографияһы ғәжәйеп бай һәм — иң мөһиме — күп яҡлы. Ғөмүмән, уның актерлыҡ булмышы киң таралған "амплуа" төшөнсәһен инҡар иткән кеүек. Бер кистә — Салауат батыр, икенсеһендә — иҫерек Яппар, өсөнсөһөндә — хәйләкәр немец Бомелий йәки яуыз Көбәк тархан. Йырсының тауышында тамашасы берсә нескә күңелле шағирҙың хис-тойғоларын, берсә ябай крәҫтиән ҡартының үткер аҡылын, берсә трагик геройҙың эске һыҙланыуҙарын ишетеп тетрәнер ине. Улар менән бергәләп янды, ашҡынды, һөйҙө, иланы һәм көлдө... Артистың иҫтә ҡалырлыҡ образдары бихисап, әммә сәнғәт донъяһында тотҡан урынын, уның артислыҡ ҡаһарманлығын асыҡлау өсөн бер генә ролен атау ҙа етә. Ул, әлбиттә, Салауат образы.

М. Хисмәтуллин башҡорт сәнғәтендә беренсе Салауат түгел. Уға тиклем милли герой драма сәхнәһендә һәм кино экранында Арыҫлан Мөбәрәков тыуҙырған образ аша һынланып, халыҡ күңелендә лайыҡлы урын алып

өлгөргәйне. Мөбәрәковтың Салауаты — яугир, ил батыры. Хисмәтуллиндың Салауаты иһә, иң тәүге нәүбәттә, — шағир. Тыуған иле менән хушлашҡан («Хуш, Уралым») арияһында ла, «Әминәм» арияһында ла тамашасы алдына эскерһеҙ, шиғри күңелле, гәлсәрҙәй саф йөрәкле йәш егет килеп баҫа. Тап шундай — үҙ иле өсөн йәнен фиҙа ҡылырға әҙер торған, оло йөрәкле шәхес кенә халҡын яуға күтәрер көс тапҡандыр, тип ышанаһың да, Салауат мотлаҡ шундай булғандыр, тип уйлайһың...

Мәғәфүр Хисмәтулла улының Салауат партияһын әҙерләгәнен һөйләгәне иғтибарға лайыҡ. Уға Салауатты икенсе составта әҙерләргә ҡушалар. Тимәк, беренсе состав артистары репетиция яһап бөткәс, ваҡыт ҡалһа — дирижер менән шөғөлләнә алаһың, ҡалмаһа — юҡ. Ә театр Мәскәүҙәге әҙәбиәт һәм сәнғәт көндәренә әҙерләнә, ваҡыт бик тар (һүҙ 1955 йылдағы ваҡиғалар хаҡында бара). Беренсе состав артистары менән көн-төн репетициялар уҙғарыла. Сәхнәлә барған бер репетицияны ла ҡалдырмай тыңлап, ҡарап ултыра йырсы, һәм, нимә генә эшләмәһен, ҡайҙа ғына бармаһын — эсенән генә Салауат булып йырлай, Салауат булып уйлай; төштәрендә лә уны күрә, уның хаҡында хыяллана... 1955 йылдың йәйендә Мәскәүҙә булған хәлде бөгөн легенда һымаҡ ҡабул итәбеҙ, ә бит ундай осраҡтар театр донъяһында әленән-әле ҡабатланып тора.

...Спектакль барышында төп герой партияһын башҡарған йырсы ҡапыл тауышынан яҙа, һәм Хисмәтуллинға ашығыс рәүештә кейенеп, операның уртаһынан сәхнәгә сығырға ҡушалар. Юғиһә, эш харап: театр яҙмышы, республика сәнғәтенең абруйы ҡыл өҫтөндә... Мәғәфүр Хисмәтуллинға шул саҡта Салауат хаҡында уйланып үткәргән төндәре, хыялый көндәре, бер туҡтауһыҙ эҙләнеүҙәре ярҙамға килгәндер: уның Салауаты күпте күргән Мәскәү халҡын таң ҡалдыра, һоҡландыра, әсир итә. Опера барышын күҙәтеп тороусы танылған дирижер Небольсин, һоҡланыуынан түҙмәйенсә, сәхнәгә йүгереп менеп, күтәреп ала Мәғәфүрҙе... Зал алҡыштарға күмелә, шау-шыуҙан, "браво"ларҙан шартлар сиккә етә... Артистың йондоҙло сәғәте театрҙың ғына түгел, ә тотош Башҡортостан сәнғәтенең еңеүенә әүерелә: донъяға башҡорт классик операһының тыуыуын тап ошо мәлдән иҫәпләргә кәрәк. Бында һис тә арттырыу юҡ, сөнки, барыһына ла мәғлүм булыуынса, сәнғәт әҫәре, ҡасан ижад ителеүенә ҡарамаҫтан, донъяға ысын мәғәнәһендә башҡарылған мәлдә тыуа. Юғиһә, хатта гениаль әҫәрҙәр ҙә ҡағыҙҙа ҡалыр ине...

«Салауат Юлаев» операһы әле булһа сәхнәләрҙән төшмәй. Тап ошо спектакль театрҙың һәм, ғөмүмән, башҡорт опера сәнғәтенең үҙенсәлекле визит карточкаһы, символы дәрәжәһенә күтәрелде. Бында, әлбиттә, М. Хисмәтуллиндың өлөшө баһалап бөткөһөҙ ҙур. Башҡарыусылар алмашына тора, тамашасы ла үҙгәрә, тик әле лә, премьера спектакленә ярты быуаттан ашыу ваҡыт уҙғас та, Хисмәтуллиндың Салауаты башҡорт опера сәнғәтенең иң юғары ҡаҙанышы булып тора.

Мәғәфүр Хисмәтуллиндың репертуары, беренсенән, үҙенең киңлеге менән хайран ҡалдырһа, икенсенән, уның магнит таҫмаһына сағыштырмаса әҙ яҙылыуы менән ғәжәпләндерә. Быны ул үҙенең үтә ентекле һәм шуға ла яй эшләүе менән аңлата торғайны. Ул радио студияһына бер ҡасан да сейлебешле әҫәр менән килмәгән. Быныһы — Мәскәү консерваторияһында, профессор Евгений Енохович класында үткән мәктәп һөҙөмтәһе. Бар булмышы менән үҙенеке итмәй, камиллыҡ дәрәжәһенә еткермәй тороп, йырсы бер әҫәрен дә эфирға сығармаған. Башҡортостан радиоһында сығыш яһай башлаған саҡтарында барлыҡ концерттар ҙа тура эфирҙа яңғыраған, ә был

үҙе үк башҡарыусы алдына юғары талаптар ҡуя. Осрашыуҙарыбыҙҙың береһендә Мәғәфүр ағай былай һөйләгәйне.

...Ул саҡта Сөйөмбикә Кулибаева радио дикторы вазифаһында эшләгән, яңы ғына өйләнешкән саҡтары. Мәғәфүр ағай иртәнге концертҡа саҡырыла, программала — Т. Кәримовтың "Һинең йырың" романсы.

"Сөйөмбикә минең сығышымды иғлан итте, мин йыр башланым:

*Һин йырланың кисә, мин тыңланым,*
*Күҙ алдымда хәҙер һин генә.*
*Мин онотмам һинең йырҙарыңды,*
*Күңелемдә сыңлар гел генә...*

*Йөрәгемә һеңеп, ул йырҙарың*
*Ҡалыр, ахры, миндә мәңгегә.*
*Һин үҙең дә, бәлки, онотторһоң,*
*Онотмамын уны мин генә..."*

Йырлап бөттөм дә Сөйөмбикәгә ҡарайым — ул илай... Киләһе йырымды әйтә алмай илай. Таһир Кәримовтың үлемһеҙ моңо уны шул тиклем тулҡынландырғанмы, үҙенә төбәп йырланған кеүек булғанмылыр инде... Ул илағас, минең дә күңел тулды, әммә концерт бит дауам итергә тейеш. Пианисткаға ымлайым: "Артабан уйна", — тип. Шулай итеп, киләһе номерыбыҙҙы иғланһыҙ йырланыҡ. Ул арала Сөйөмбикә лә үҙен ҡулға алып, һөйләшер хәлгә килде..."

«Фатиха» («Благословение», 1996 йыл) фильмының сценарийын яҙған саҡта миңә Мәғәфүр ағай менән айырыуса йыш осрашырға тура килде. Күберәген сәнғәт академияһында (ул саҡта — институт) осрашабыҙ, Мәғәфүр ағай унда уҡытып йөрөй ине әле. Ағай, хәтирәләргә бирелеп, әҫәрләнеп бала сағын һөйләй, мауығып-мауығып театр, сәнғәт, йыр мәсьәләләре хаҡында фекер алышабыҙ... Ул саҡта ла, һуңыраҡ булған осрашыуҙарҙа ла уның балаларса бер ҡатлылығы, ихласлығы һәр ваҡыт ғәжәпләндерә ине. Тамсы ла мин-минлек, маһайыу юҡ. Телмәрен арияларҙан, йырҙарҙан өҙөктәр менән аралаштырып, ҡайһы бер урындарҙа һикереп тороп, хәрәкәтләнеп-бейеп тә ала. Берсә шарҡылдап көлөп ебәрә, берсә күҙҙәренә йәш тула. Мәрхүмә Сөйөмбикә апайҙы хәтеренә алғанда, уға бик ҡыйын икәнлеген күрҙем...

Әлбиттә, 30 минутлыҡ фильмға барыһын да һыйҙырып бөтөрлөк түгел. Бала сағында булған ваҡиғаларҙың береһе хәтергә уйылып ҡалған. 5-6 йәшлек Мәғәфүр ауылы янында ятҡан Мүкле күлгә төшөп китә лә бата башлай. "Күл тәрән, хатта төпһөҙ", — тигән даны сыҡҡан. Бик оҙаҡ көрәшә малай, тик кейемдәре һыуланып, төпкә, утрау аҫтына тарта. Хәлһеҙләнеп, күл төбөнә китеп бөттөм, тигәндә, уның бәхетенә, һыу буйына ауыл ҡатындары килеп сыға. Малайҙы күреп ҡалып, көйәнтә ырғаҡтарына эләктереп, тартып сығаралар. Мәғәфүр ағай: "Мин, шулай итеп, донъяға яңынан тыуған кеше, шуға ғүмерем оҙон", — ти торғайны.

1959 йылда Башҡортостанда телестудия асыла. Ошо тантанаға арналған беренсе телевизион концертта Мәғәфүр ағай "Урал", "Байыҡ" йырҙары, Сөйөмбикә апай "Сәлимәкәй" йыры менән сығыш яһай. Ул саҡтағы тойғоларын, яңынан кисергәндәй, тулҡынланып һөйләне ул: студияның байрамса биҙәлеше, режиссерҙың ҡабат-ҡабат репетициялар уҙғарыуы, камералар алдында башта ҡаушауы... Барыһы ла уның хәтеренә онотолмаҫлыҡ булып

уйылғайны: «Радио һәм телевидениелағы сығыштар минең өсөн һәр ваҡыт оло мәктәп булды..." Был һүҙҙәрҙә Мәғәфүр ағайҙың һәр бер эшкә оло яуаплылығы, үҙенә ҡарата ҡәтғи талапсанлығы ярылып ята. Телевидениелағы сығыштарҙы ул театр спектаклдәренә ҡарағанда ла ҡатмарлыраҡ тип иҫәпләне. Йыр йәки романс Мәғәфүр Хисмәтуллин өсөн кескәй, әммә тос эстәлекле моноспектаклгә әүерелә ине, сөнки ике-өс минут барған йыр оҙонлоғонда образ тыуҙырырға, уны иҫбатларға, тамашасыға еткерергә кәрәк.

"Йыр — ул хеҙмәт", — был фекергә Мәғәфүр Хисмәтулла улы ҡабат-ҡабат әйләнеп ҡайта ине. "Еңел йырлайһың, тиҙәр... Ә миңә бер ҡасан да йырлау еңел булманы. Йырлау сәнғәте — ул ауыр хеҙмәт. Концерт булһынмы ул, спектаклме — бар көсөңдө һалып, ҡара тиргә төшөп эшләмәһәң — сәнғәт булмай ул, тамашасыға барып етмәй...»

Ғәмәлдә, М. Хисмәтуллиндың сәнғәте ябай һәм бөйөк аҡылды иҫбатлай: ниндәй генә һөнәр эйәһе булмаһын, кеше үҙен-үҙе үҫтерһә генә камиллыҡҡа яҡынлаша ала. Был фекер — артистың ғүмерлек ижад принцибы. Ниндәй генә үрҙәргә үрләһә лә, ул бер ҡасан да үҙ өҫтөндә эшләүҙән туҡтаманы һәм, режиссер, педагог булараҡ, башҡаларҙан да шуны талап итә торғайны.

"Нимә ул моң?" тигән һорауға Мәғәфүр Хисмәтулла улының яуабы бер булды: "Моң — ул кеше. Бына бында ул — моң (күкрәгенә күрһәтә). Бүтән ерҙә юҡ моң, ул — күңел... Бик моңло ине инәйем, кешелекле ине...» Ҡайһы бер йырсылар хаҡында һүҙ барғанда, әсенеп: «Тауышы бынамын тигән, әммә күңеле буш, фекер юҡ», — ти ине. Баҡтиһәң, ысынлап та, кешенең тауыш яңғырашынан уҡ ниндәйерәк кеше икәнен «иҫәпләп» сығарып була икән: аҡыллымы, буш ҡыуыҡмы, яҡшы кешеме, әллә "моңһоҙмо"...

Хисмәтуллиндың лирик-драматик теноры өсөн сисә алмаҫтай техник мәсьәләләр юҡ ине, буғай. Барлыҡ диапазонында ла берҙәй тигеҙ яңғырашлы, түбәнге регистрҙан алып иң юғары ноталарға тиклем берҙәй сифатлы, яғымлы, саф тауыш... Йырсы сәнғәтенең нигеҙе, төп ҡиммәте — тауыштың тембр матурлығы. Был йәһәттән Хисмәтуллиндың тауышы — һирәк осрай торған хазина ине. Унда ниндәйҙер эске нәзәкәтлек һәм аристократтарса зауыҡ (ябай ауыл егетендә!), күңел юғарылығы һәм тыйнаҡлыҡ һыҙаттары һиҙелеп тора. Ә инде һәр тенор өсөн иң сетерекле булған юғары ноталарҙа был тауыш күңелдең иң нескә ҡылдарын тартып, тәндәрҙе земберләтә, тулҡынландыра, әҫәрләндерә... Көсөргәнешле хеҙмәт аша дөйөм вокаль мәҙәниәткә эйә булырға, күнекмәләр ярҙамында башҡарыу оҫталығын шымартырға мөмкин. Әммә тауыш матурлығы — бары тик тәбиғәттән бирелгән байлыҡ, уға яһалма рәүештә ирешеп булмай.

Опера йырсыһы һәм опера режиссеры. Был ике һөнәрҙең һәр ҡайһыһы айырым ғүмер талап итә, М. Хисмәтуллинда иһә улар бер үк шәхестең ике тиң өлөшө булып, бер-береһенә үрелеп үҫешкән. Уның режиссерлыҡ эштәре исемлегендә 13 спектакль, улар араһында — донъя классикаһы, рус опералары, башҡорт авторҙарының әҫәрҙәре. Йырсының ижадын яҡындан белгәндәр өсөн уның режиссерлыҡ тәжрибәләре һис тә ғәжәп хәл булып тойолманы, киреһенсә, сәхнә эшмәкәрлегенең тәбиғи дауамы тип ҡабул ителде. Ысынлап та, опера йырсыһының ихтыяждарын энәһенән-ебенә хәтлем белмәй тороп, нисек опера ҡуймаҡ кәрәк? Һәм, киреһенсә, режиссерлыҡ һәләте уға тәрән сәхнә образдары тыуҙырырға булышлыҡ итте. З. Исмәғилевтың «Шәүрә» операһы — уның режиссер булараҡ иң уңышлы эштәренең береһе. Операла Хисмәтуллин Көбәк тархан ролен башҡара. Был персонаж бер

тапҡыр ғына — пролог өләшөндә генә күренә, әммә вокаль партияһының көсөргәнешлелеге, образдың сағыулығы, психологик эстәлеге менән ҡабатланмаҫ тәьҫорат ҡалдыра. Хисмәтуллин-йырсы менән Хисмәтуллин-режиссер талантының илһам емеше ул — Көбәк. Ә З. Исмәғилевтың "Ҡоҙаса" музыкаль комедияһындағы Яппар, — киреһенсә, спектаклдең үҙәгендә, башынан аҙағынаса сәхнәлә. Был кире, сатирик образ Хисмәтуллин-режиссер тарафынан шундай тормошсан итеп күрһәтелгән, — моғайын, һәр бер ауылдың бына шундай Яппары барҙыр. Тормошсан һәм һөйкөмлө, хәйләкәр һәм бер ҡатлы ҡартты Башҡортостанда һәм Татарстанда, Урта Азияның төрлө ҡалаларында яратып, алҡышлап ҡаршы алды тамашасы... Роль өҫтөндә эшләгәндә унын өсөн мөһим һәм ваҡ әйберҙәр юҡ ине. Һәр бер ролендә — ҙур булһынмы ул, бәләкәйме — камиллыҡҡа ынтылды артист һәм, вокаль мәсьәләләрҙән тыш (улар, әлбиттә, иң тәүге сиратта хәл ителергә тейеш), образ өҫтөндә эшләүгә ғәйәт ҙур әһәмиәт бирә белде. Сәхнәлә үҙеңде тотоу, хәрәкәттәр, күҙ ҡараштары, костюм, грим дөрөҫлөгө — унын өсөн барыһы ла булды. Бында уға, һис шикһеҙ, ижад юлын драма театры сәхнәһендә башлауы ярҙам иткәндер.

Һәр ҙур талантҡа хас төп һыҙат — ул сама белеү. Камиллыҡ үҙе шул сама тойғоһон аңлаталыр ҙа, сөнки ниндәй жанрҙы алма — трагедиямы, комедиямы — саҡ ҡына арттырыу, йәки, киреһенсә, еренә еткермәү — алдашыуға килтерә. Тамашасы уны шундуҡ һиҙә, күрә, аңлай. Һәм... сәнғәт юҡҡа сыҡты тигән һүҙ. Мәғәфүр Хисмәтуллинды сама тойғоһо бер ҡасан да ташламаны, ул тойғо уға тәбиғәт тарафынан бирелгәйне. Бына ошо тойғо унын халыҡ йырҙарын башҡарыуында ла айырым-асыҡ сағыла. Башҡорт оҙон көйҙәрен йырсы, милли башҡарыу традицияларын Италияның ***bel canto*** сәнғәте менән органик рәүештә ҡушып, классик юғарылыҡҡа күтәрә. "Урал", "Һандуғас", "Азамат", "Шәүрә", "Үткән ғүмер" — был йырҙар бер нисә быуынды патриотик тойғола тәрбиәләне, зауыҡландырҙы, рухи аҙыҡ бирҙе; йәш йырсылар өсөн өлгө булып хеҙмәт итте. Әйткәндәй, бөгөн башҡорт сәхнәһендә оҙон көйҙәрҙе башҡарыусылар күбәйҙе, әммә йыш ҡына йырсыларға башҡорт моңона хас сама тойғоһо етеңкерәмәй... Һөҙөмтәлә тыңлаусылар "башҡорт йыры" тигән исем аҫтында самаһыҙ күп семәрле-мелизмлы әллә татар, әллә төрөк, әллә әзербайжан көйөн тыңларға мәжбүр... Был йәһәттән Мәғәфүр Хисмәтуллиндың сәнғәте, һис шикһеҙ, оҫталыҡ мәктәбе булырлыҡ. Мәғәфүр Хисмәтуллиндың репертуарындағы һәр бер йыр унын ижадында тәғәйен урын биләй, һәр ҡайһыһы тап унын ғына тойғоларын еткерә төҫлө. Ә. Дауытовтың "Әсәйемә хат" йырына, ул һис шикһеҙ, үҙ әсәһенә булған сикһеҙ һөйөүен һалған, юғиһә, йырҙа был тиклем дә үҙәк өҙгөс һағыш, наҙ булмаҫ ине:

*Сәләм һиңә, әсәйем, йыраҡ-йыраҡ ерҙән,*
*Сәләм һиңә йөрәгем түренән...*

Мәғәфүр ағай әсәһен тәрән ихтирам, йылылыҡ менән хәтерләр ине. Бала сағында йоҡларға ятҡас, әсәһенең нимә эшләһә лә, әкрен генә йырлауын тыңларға ярата ул. Әсәһенең, ябай крәҫтиән ҡатынының, ирен Герман һуғышына оҙатып, ғүмере буйы көтөүен, барлыҡ ҡайғыларын да йырға һалып күңелен бушатыуын аҡылы менән аңламаһа ла, йөрәге һиҙгәндер... Моңға тартылыуы, нескә күңел, матурлыҡты тоя белеү һәләте һәм, әлбиттә, гүзәл, йомшаҡ тембрлы тауышы — барыһы ла әсәһенең мираҫы. Улының ғәҙәттән тыш һәләтен күреп-аңлап, уны баш ҡалаға юлланырға өгөтләүсе лә — әсәһе. Унын эскерһеҙ һөйөүе буласаҡ артистың барлыҡ эштәренә фатиха биреп,

ғүмере буйы күңелен йылытып торасаҡ. Әсәһенең исеме лә бит — Фатиха... Олоғайып, үҙе атай, олатай булғас та, Мәғәфүр ағай әсәһен наҙлы һағыш, рәхмәт тойғолары менән телгә алыр ине. Ғәмәлдә, әсәһенең фатихаһын туған халҡының оло ҡаҙаныштарға илһамландырған фатихаһы тип ҡабул итте ул. (Документаль фильмды ла беҙ "Фатиха" — "Благословение" тип атаныҡ.)

Мәғәфүр ағайҙың ғүмер юлында тағы ла бер изге йән эйәһе осрамаһа, бәлки, мәшһүр халыҡ йырсыһы формалашмаҫ ине. Ул — йырсының тормош иптәше Сөйөмбикә Кулибаева апай. Мәғәфүр ағай, һис йәшермәйсә, башҡорт халыҡ моңон тап унан үҙләштереүе хаҡында һөйләй торғайны: "Мин — Иглин башҡорто, беҙҙең яҡта боронғо оҙон көйҙәр бик һирәк; һалмаҡ көйҙәр, таҡмаҡ-бәйеттәр генә йырлана беҙҙә. Классик оҙон көйҙәрҙе, уларҙың боролош-мелизмдарын, йәғни моңон миңә Сөйөмбикә бирҙе. Баймаҡ театрында эшләгән саҡта таптым бит мин уны, ә ул яҡтарҙа матур йырсылар күп. Сөйөмбикә ғәжәп моңло йырсы ине..."

Ҡатын-ҡыҙ мөхәббәте мөғжизәләр тыуҙыра ала. Сөйөмбикә апай бар ғүмерен Мәғәфүр ағайға, улына, артабан ейәндәренә арнап йәшәне. Сағыу талант, матур тауыш эйәһе, ул да, бәлки, сәхнә йондоҙо була алыр ине... Башҡортостан радиоһы фондында һаҡланған бер нисә йырынан уның халыҡсан, үҙенсәлекле башҡарыу оҫталығы төҫмөрләнә. Тик ул, башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарына хас тыйнаҡлыҡ, сабырлыҡ менән, ирен ҡайғыртыуҙы, ғаилә, йорт мәшәҡәттәрен үҙ өҫтөнә алыуҙы өҫтөнөрәк күргән. Йөрәгендәге моңон түкмәй-сәсмәй Мәғәфүренә тапшырыуы Сөйөмбикә апайҙың иренә үҙ фатихаһын биреүе булғандыр. Шуға ла, хәләлен юғалтҡас, Мәғәфүр ағай етемһерәп ҡалды, юҡһынды, уның хаҡта йыш һөйләр ине.

Артистың һуңғы йылдарына нур биреп, ҡартлыҡ осорон кисерергә ярҙам итеүсе тағы ла бер ҡатын-ҡыҙ — ул килене Фатима Борис ҡыҙы. Марат Мәғәфүр улының хәләл ефете, уның ике улының әсәһе, ҡәйнәһенең вафатынан һуң, Хисмәтуллиндар ғаиләһенең ҡотон һаҡлаусы изге йәнгә әүерелде. Мәғәфүр ағайҙы сырхаған саҡтарында дауалаусы ла, йыш үҙгәреүсән кәйефен күтәреп, бала урынына тәрбиәләүсе лә булды килене. Фатима Борис ҡыҙының, осетин милләтенән булһа ла, башҡорт йырсыһының моңон тәрән аңлап, уны артист һәм кеше буларак хөрмәтләй, тейешенсә баһалай белеүе — үҙе үк уның күңел юғарылығы хаҡында һөйләй. Килене — йырсының тәүге биографы ла: Мәғәфүр ағайҙың тапҡыр һүҙҙәрен, таҡмаҡтарын, хәтирәләрен даими теркәп барыу уның ғәҙәтенә әйләнгәйне. Мәғәфүр ағай иһә уның иғтибарлылығы, үҙенә ҡарата ихтирамы өсөн һәр ваҡыт рәхмәтле булды. Хисмәтуллиндарҙың өс быуынды берләштергән ғаиләһендә хөкөм һөргән йылылыҡ, рухи берҙәмлекте һиҙмәү, күрмәү мөмкин түгел ине. Ололарҙы ололай белеү ғәҙәте уларҙың ғаилә ҡанунына әүерелгән, балаларға ла күскән, һәм был тәртиптең һағында бер яҡтан Марат Мәғәфүр улы торһа, икенсе яҡтан — Фатима Борис ҡыҙы. Ә йорттағы «һауа торошо» — һис һүҙһеҙ, хужабикәнән, ҡатын-ҡыҙҙан тора.

Мәғәфүр Хисмәтуллиндың ижады меңәрләгән кешенең күңелен яуланы, үҙенә ғашиҡ иттерҙе. Шығырым тулы концерт залдарында сығыш яһаған саҡтарында уның йырына ҡушылып нисәмә йөрәк ярһып типкәндер, нисәмә пар күҙ яратып баҡҡандыр... Ә оҙон һәм бәрәкәтле тормош юлында уға көс һәм дәрт биреүсе, оло ҡаҙаныштарға илһамландырыусы, өшөгән саҡтарында үҙ ҡулдары менән йылытыусы — ошо өс ҡатын-ҡыҙ.

Мәғәфүр Хисмәтуллин үҙен бәхетле итеп тойҙомо икән? Был һорауыма уның яуабы, һәр ваҡыттағыса, көтөлмәгәнсәрәк, үҙенсәлекле булып сыҡты.

"Беләһеңме, исемем нимәне аңлата? — тип һораны һәм үҙе үк яуап та бирҙе: — Мәғәфүр ул — "ғәфү ителгән" тигән һүҙ. Тимәк, минең бар гонаһтарым да алдан уҡ ярлыҡанған... — Мәғәфүр ағай кеткелдәп кенә көлөп ала ла шунда уҡ етдиләнә: —Бәхет ул — яратыуҙа. Ғүмер буйы яратып, бар көсөмдө биреп эшләнем. Тамашасымдың ихлас яратыуын татыным, ә бит халыҡ һөйөүен һатып алып булмай..."

М. Хисмәтуллиндың сәнғәт яҙмышы, ысынлап та, бәхетле булды. Уны ғүмере буйы яратҡан геройы — Салауат һыны оҙата барҙы. Нисә тапҡыр сыҡҡандыр ул сәхнәгә Салауатты йырларға: йөҙмө, меңме? Быныһы билдәһеҙ. Тәүләп исемен ил кимәлендә яңғыратҡан, данға күмгән роле — Салауат, һәм һуңғы тапҡыр Башҡорт дәүләт опера һәм балет театры сәхнәһенә сығыуы ла "Салауат Юлаев" спектаклендә булды.

...1995 йыл. Опера театры. Спектакль артистың 80 йәшлек юбилейына арналғайны. Әммә кисәгә йыйылған халыҡ ҡәҙимге спектаклдең түгел, ә иҫ киткес тамашаның шаһитына әүерелде. Операның беренсе актында Салауат ролендә Мәғәфүр Хисмәтуллинды күргәс, зал аяғүрә тороп алҡышланы. Олораҡ тамашасылар был мәлдә артистың тиҫтәләгән йыл элек тәүләп сәхнәгә күк атҡа атланып балҡып килеп сығыуын хәтерләгәндер... Кисәнең режиссеры Марат Хисмәтуллиндың ижади асышы булды был: оло Салауат, куплеттарын йырлап бөткәс, башынан ҡамсат бүркен һалып, йәш Салауат — Хәмит Ишбулдинға кейҙерҙе. Шуның менән мәшһүр артист сәхнә менән хушлашты, йәштәргә үҙ фатихаһын бирҙе... Был арала күмәк хор артистары араһында сәхнә костюмын кейгән Марат Хисмәтуллинды, бәлки, күптәр танымағандыр ҙа. Олоғайған атаһының сикһеҙ тулҡынланыуын аңлап, янында булыуҙы хәйерлерәк күргәндер, ахыры, улы...

Спектакль артабан ҡәҙимгесә дауам итте. Иң ҙур тетрәнеү тамашасыны операның һуңғы сәхнәһендә көтә ине әле. Әминәне "үлтергәс", залда ҡапыл ут һүнде һәм кино экраны пәйҙә булды. Экранда Әминә — Баныу Вәлиева кәүҙәһе өҫтөндә эйелгән Салауат — йәш Мәғәфүр Хисмәтуллин. Һәм залды сихырлап, моң ағылды: «Һүндергәндәр минең күҙ нурымды...» Был минуттарҙа күҙ йәштәрен тыйыу мөмкин түгел ине. Залдағы һәр кем — нисә йәштә, ниндәй милләттән булмаһын — был мәлдә ҡабатланмаҫ Салауат менән хушлашты, уға ҡушылып моңланды, уның менән бергә иланы...

Ҡайһы бер ғалимдар раҫлауынса, бәхет ғүмерҙе оҙайта. Ә шулай ҙа, олоғайып та сәхнәлә йәшәүсе талант эйәләре бөтә донъя кимәлендә бармаҡ менән генә һанарлыҡ. 80 йәшенә тиклем сәхнәлә йырлаған Мәғәфүр Хисмәтулла улы өсөн ысын бәхет ижад, сәхнә, йырһыҙ мөмкин булмағандыр.

Италияның бөйөк йырсыһы Джильи хаҡында: "Уның тауышында туған халҡының түгелмәгән күҙ йәштәре яңғырай",— тигән бер белгес. Был һүҙҙәр Мәғәфүр Хисмәтуллиндың ҡабатланмаҫ сәнғәтенә тулыһынса тап килә. Уның тауышында ла бит башҡорт халҡының бәхет-шатлыҡтары, хыялдары, ҡайғы-хәсрәте, ҡаһарманлығы, Уралына булған һөйөүе мөлдөрәмә тулышып, түгелмәгән күҙ йәштәре булып сыңлай. Яҡты күҙ йәштәре булып...

**Миләүшә ИҘРИСОВА,**
**музыка белгесе**.

*2010 – Бөтә Рәсәй халыҡ иҫәбен алыу йылы*

# ҺЕҘГӘ ИҪӘП АЛЫУСЫ КИЛДЕ

Уны нисек танырға? Беренсенән, яурыны аша һалынған зәңгәр портфелгә ҡарап. Был сумкала «Федеральная служба государственной статистики» тигән яҙма күҙгә бәрелеп тора. Иҫәп алыусының муйынында иҫәп компанияһы эмблемаһы төшкән зәңгәр шарф, шулай уҡ муйынында һыбыҙғы ла булыуы ихтимал. Иҫәпсе үҙе менән алып килеп тултырасаҡ бланкылар өсәү: беренсеһе «А» тигәне аныҡ кеше тураһында мәғлүмәттәр туплау, икенсеһе – «П» тип аталғаны һеҙ йәшәгән торлаҡҡа ҡағылышлы белешмәләр һәм өсөнсөһө – «С» йорттоң адресын, унда йәшәгән кешеләр исемлеген теркәү өсөн тәғәйенләнгән.

Тәүге бланкыға ярашлы, иҫәп алыусы беренсе һорауға – (уның ғаилә хужаһы булмауы ла ихтимал) яуап биргән кешенән башҡаларҙы ошо кешегә ҡарата туған-тыумасалығы буйынса билдәләй. Әйтәйек, ҡатыны, ҡыҙы йәки улы, атаһы йәки әсәһе һ.б. Әгәр ҙә ул башлап яҙылған кешегә туған түгел икән – шундай уҡ билдә ҡуйыла.

Тәүләп белешмә тултырылған кешенең енесе, тыуған йылы һәм көнө, тыуған урыны тураһында һорауҙарҙан һуң никахта тороу хаҡында белешмә бирелә. Был төркөмдә «айырылған», «тол», «бер ҡасан да никахта тормаған» тигән яуаптар менән бергә «никах теркәлгәнме?» тигән һорау ҙа бар. Был тәбиғи, сөнки рәсми мәғлүмәттәр буйынса 2002 йылда Башҡортостанда һәр унынсы ғаилә теркәлмәгән никахта торған. Граждандлыҡ тураһындағы белешмәнән һуң 7-се булып, «ҡайһы милләткә ҡарайһығыҙ?» тип бирелгән һорау аҫтында «Рәсәй Федерацияһы Конституцияһының 26-сы статьяһына ярашлы» тигән аңлатма тора. Төп закондың 1-се пунктын уҡыйыҡ. Унда, «Һәр кем үҙенең милли сығышын билдәләргә һәм күрһәтергә хоҡуҡлы. Бер кем дә милли сығышын билдәләү һәм күрһәтеүгә мәжбүр ителә алмай», тиелгән. Был, әлбиттә, ата-әсәгеҙ башҡорт икән, рус булып та яҙыла алаһығыҙ, тигәнде аңлатмай.

Белемгә ҡағылышлы 8-се һорау бер нисәгә бүленгән, һәм ул һеҙҙең ниндәй белемгә, әйтәйек, «башланғыс», «урта», «юғары» эйә булыуығыҙҙы асыҡлауҙан тыш, бөтөнләй белем алмауығыҙҙы һәм уҡый-яҙа белеүегеҙҙе лә теркәргә бурыслы. Иҫәп алыусы «фән кандидаты» йәки «фән докторы» булыуығыҙ йәки белемегеҙҙе дауам итеүегеҙ менән дә ҡыҙыҡһынасаҡ. Әйтергә кәрәк, бындай мәғлүмәттәр элек йыйылмаған.

9-сы пункттағы һорауға яуап биргәндә, һеҙҙең рус телен белеү-белмәүегеҙ асыҡлана. Сит ил телдәренән, әйтәйек, инглиз, француз, ҡытай, ғәрәп һ.б. ҡайһыһын белеүегеҙҙе лә һораясаҡтар. Туған тел тураһындағы һорау был төркөмдә өсөнсө булып теркәлгән. Уға яуап биргәндә, ҡайһы берәүҙәрҙең аптырап ҡалыуы ла ихтимал. Туған тел ул тел белә башлағанда һөйләшкән, йәғни тел асылған тел. Ғәҙәттә ул үҙ халҡыңдың теле була.

Иҫәп алыусыны, ә уның йөҙөндә дәүләтте һеҙҙең килем сығанаҡтары ла ҡыҙыҡһындырыр. Уның төп эш урыны, әйтәйек, мәктәп, кооператив хужалыҡ, йә булмаһа шәхси ярҙамсы хужалыҡ, пенсия, эшһеҙлек буйынса пособие, торлаҡты ҡортомға биреү һ.б. булыуы ихтимал. Һеҙҙең нисә урында эшләүегеҙ, төп эштә кем: ялланып эшләүсеме әллә, киреһенсә, кешеләр яллап эшләтеүсе булыуығыҙ, эш урынығыҙҙың Рәсәйҙәме, әллә башҡа дәүләттәме икәнлеген аныҡ теркәү ҙә мөһим. Эшһеҙҙәргә мотлаҡ, «һуңғы айҙа эш эҙләп ҡаранығыҙмы?» тигән һорау биреләсәк.

Миграция мәсьәләһенә ҡағылышлы һорау – 12-се урында. Һеҙҙең ошо ауыл йәки ҡалала ҡасандан алып даими йәшәүегеҙҙе белеү дәүләт өсөн мөһим. «Былтыр октябрҙә ҡайҙа йәшәй инегеҙ?» тигән һорау бирелһә лә, аптырап ҡалмағыҙ.

15 йәшлек һәм унан оло ҡатын-ҡыҙға биреләсәк һуңғы һорау – «Нисә бала тыуҙырҙығыҙ?» Үле тыуған бала иҫәпкә инмәй. Тәүге баланың тыуған көнө һәм йылын атарға ла кәрәк булыр. Үрҙә әйтелгәнсә, «П» бланкыһындағы һорауҙар торлаҡҡа ҡағыла. 1-се һорауға яуап биргәндә, йәшәгән торлаҡтың төрөн: шәхси йортмо, дәүләт фондымы, күп фатирлы йортмо, ятаҡмы, ҡунаҡханамы йәки башҡа төрлө торлаҡмы икәнлеген асыҡлап әйтеү мөһим. Торлаҡтың ҡасан, ниндәй материалдарҙан (кирбес, ағас, панель һ.б.) төҙөлөүен дә теркәйәсәктәр. Йәшәгән урынығыҙҙың уңайлыҡтары, санитар-гигиена талаптарына яуап биреү-бирмәүе тураһындағы 4-се төркөм һорауҙар исемлеге оҙон. Электр уты үткәрелгәнме, һыу селтәре, канализация, ванна йәки душ, мунса йәки сауна, кухня һ.б. бармы кеүек аныҡлаусы һорауҙар күп. Өйөгөҙ нисек йылытыла, бәҙрәфе эстәме, эҫе һыу киләме, сүп-сарҙы урамға үҙегеҙ сығараһығыҙмы, әллә махсус торбаға түгәһегеҙме, тип тә ҡыҙыҡһынасаҡтар.

Һәр фатирға йәки бер бүлмәле фатирға белешмә айырым тултырыла. «Айырым фатирмы» әллә «коммуналь фатирмы», «майҙаны күпме», «нисә бүлмәле», телефон, антенна, радио бармы, тип тә белешәсәктәр.

Һәр йорт хужалығы (русса – «домохозяйство») буйынса һорауҙар айырым теркәлгән. Унда нисә кеше инә, күпме бүлмә биләп йәшәйҙәр, Интернеттан файҙаланаламы, кеүек һорауҙар сағылыш тапҡан.

«С» бланкыһында торлаҡтың ҡайһы районда йәки ҡалала булыуы, урамы, йорттоң тәртип номеры, фатир номеры асыҡлана. Теге йәки был торлаҡта йәшәүселәрҙең һәр береһенең фамилияһы, исеме һәм атаһының исеме тулыһынса яҙылыуы мотлаҡ. Икенсе таблицаға ошо торлаҡта ваҡытлыса йәшәгәндәр өсөн «В» бланкыһы тултырыла. Унда енесе, тыуған йылы, даими йәшәгән иле, Рәсәйгә килеүҙең маҡсаты, гражданлыҡ һ.б. һорауҙарға яуаптар индерелгән.

Иҫәп алыуҙа йәмәғәтселектә имеш-мимеш тыуҙырасаҡ һорауҙарҙы ла асыҡлап китәйек. Мәҫәлән, иҫәп алыусыға бер ниндәй ҙә документтар күрһәтеү талап ителмәй. Һорауҙарға яуап телдән бирелә. Мәғлүмәт биреүҙә Интернеттан файҙаланыу мөмкин түгел, сөнки ул саҡта мәғлүмәттәрҙең «йәшерен»леге юғала. Шул уҡ ваҡытта яуаптарҙы кем биреүен дә теүәл билдәләү мөмкин түгел. Иҫәп мәғлүмәттәренән һалым инспекцияһы йәки миграция хөкүмәте файҙаланыуы ихтимал, тигән хәүеф тә урынһыҙ, сөнки беренсенән, «Л» бланкыһында мәғлүмәт биреүсенең исем-фамилияһы ҡуйылмай; икенсенән, әгәр кемдәлер шундай хәүеф тыуа икән, тимәк, ул кеше үҙе тураһында ялған мәғлүмәт тарата.

Шулай уҡ иҫәп бланкыһында килем күләме сағылыш табыуы хаҡындағы имешмимештәр ҙә урынһыҙ. Бер кем дә һеҙгә, күпме эш хаҡы алаһығыҙ йәки йыллыҡ килемегеҙ күпме, тигән һорау бирмәйәсәк. Бланкыла килем сығанаҡтары ғына урын ала. Иҫәп алыусыны фатирға индереү мотлаҡмы, иҫәп алыу ваҡытында милиция йөрөйәсәкме, иҫәпкә инеүгә мәжбүр итәсәктәрме, кеүек һорауҙар биреүселәрҙе етди граждандар тип әйтеүе лә ҡыйын. Әлбиттә, иҫәп алыусыны ишек алдында тотоу – әҙәпһеҙлек, ә бына кампанияла ҡатнашыуҙан күрәләтә ситләшеү – гражданлыҡ бурысын үтәүҙән баш тартыу тип кенә баһаланырға мөмкин.

Ошо йәһәттән халыҡ иҫәбен алыу нимәгә кәрәк тигән һорау өҫтөндә баш ватыусыларға тос яуап ҡайтарыу мотлаҡ. Беренсенән, бер генә цивилизациялы илдә лә унан баш тартмайҙар. Донъяның иң алдынғы дәүләттәренән береһе Японияла халыҡ иҫәбе биш йылға бер алына. Дәүләттә күпме кеше йәшәүен теүәл белмәй тороп, бер генә ил парламенты һәм хөкүмәте отошло социаль-иҡтисади сәйәсәт алып бара алмай. Айырыуса үҙен «социаль дәүләт» тип атағандары теге йәки был социаль программалар: һаулыҡ һаҡлаумы әллә пенсияларҙы арттырыуҙы, мәғарифмы әллә инфраструктураны үҫтереүме – барыһы ла статистик мәғлүмәттәр нигеҙендә эшләнә.

Иҫәп алыуҙа ҡатнашыу – ул һәр кемдең гражданлыҡ бурысы.

**Мәхмүт ХУЖИН.**

## Ат аунаған ерҙә төк ҡала...

*Күлдә йөҙгән аҡ өйрәк*
*Ҡыр ҡәҙерен белмәҫ.*
*Ҡырҙа йөрөгән туғаҙаҡ*
*Һыу ҡәҙерен белмәҫ.*

Асан-Ҡайғы.

Башҡортостан экологияһы. Ә экология ниҙән башлана? Иң боронғо башҡорт һүҙе – “Ер-һыу”. Эйе, боронғо башҡорттар тәбиғәткә табынып йәшәгән. Ер-һыуҙың мәғәнәһен аңлау өсөн, Көньяҡ Уралдың физик картаһына күҙ һалайыҡ. Боронғо башҡорт төйәге Көньяҡ Урал элек-электән күп халыҡтар өсөн әһәмиәтле урын һаналған. Әйтергә кәрәк, ер йөҙөндәге оло йылғаларҙың береһе булған Волга йәки Иҙел, ҡайһы бер сығанаҡтар буйынса, Ағиҙел йылғаһы башынан юл ала. Ысынлап та, Ағиҙел башланған урындың әһәмиәте ниҙә? Ул – климатҡа йоғонто яһаусы урын. Был тирәнән башҡа йылғалар ҙа юл ала. Каспийға, әүәлге Хазар диңгеҙенә, Волга менән Ағиҙел генә түгел, хәҙерге Урал йәки Яйыҡ та барып ҡоя. Ә шулай ҙа бар йылғалар ҙа Каспийға аҡмай, Төньяҡ Боҙло океанына ҡаса. Ә бына Уй һәм Миәс Тубылға ҡоя, Тубыл – төньяҡ йылғаһы.

Климат төҙөүҙә Башҡортостанда тағы бер әһәмиәтле урын бар – Стәрлебаш-Бәләбәй ҡалҡыулығы. Бында Төньяҡ океанға ҡасыусы йылға юҡ, барыһы ла Ағиҙелгә йә Уралға ашыға. Дим, Ашҡаҙар, Өршәк, Стәрле, Ҡыуғанаҡ, Тәтер, Уяҙы – һәр береһенең үҙенсә йәме лә, тәме лә бар. Шулай итеп, Башҡортостандың йәме лә, тәме лә ошо урындарҙа тыуа, башлана. Боронғо башҡорт әйтмешләй, эскән һыуың – шатлығың, байлығың. Эйе, элгәре башҡорттар һыуға ихтирамлы булған, “Һин ҡайһы яҡтан?” – тип түгел, ә “Ҡайһы һыуҙы эсәһең?” – тип һораған. Мин – Һәләүек буйы башҡорто, ошо йылға һыуын эсеп үҫтем. Мин бәләкәй саҡта Һәләүек һыуы күҙ йәшеләй саф ине.

Эйе, һыу эсеп кенә тамаҡ туймай. Шуныһын да әйтәйем: минең бала саҡ сталинизм ерлегендә барлыҡҡа килгән аслыҡ шарттарында үтте. Яҙҙарын тамаҡ ялғарға аҙыҡ бөтөнләй тиерлек булмай торғайны. Беҙ балтырған, йыуа, ҡаҡы һәм башҡа үләндәр менән туҡланып, ас үлемдән ҡотола алдыҡ.

Хәҙер әхлаҡи экология тураһында әйтеү урынлы булыр. Беҙ, балалар, тау баштары йәшәргәс, йыуаға китәбеҙ. Беҙҙең арттан оло йәштәгеләр:

– Йыуаны тамыры менән йолҡмағыҙ, икенсе йылға үҫмәйәсәк, – тип әйтеп ҡала. Ә беҙ йыуаның тамыры тәмлерәк, туҡлыҡлыраҡ та икәнен беләбеҙ. Ләкин, ололар көңәшен тотоп, йыуаны өҙөп кенә йыябыҙ. Беҙ, өләсәй менән икәүләп, өс-дүрт квадрат метр урындан бер тоҡ балтырған йыйып алғыланыҡ. Ә хәҙер квадрат километрҙан да бер тоҡ йыя алмайһың. Ҡымыҙлыҡ, монар көпшәһе кеүек үләндәр бөтөнләй юғалды.

Кеше ғәйепле, сөнки әхлаҡи экология боҙолдо.

# Һәләүек

Егерме йылдар самаһы элек илебеҙҙә сәйәси хәлдәр киҫкенләшеп, Мәскәүҙә власть бүлешеүселәр әүҙемләшһә, Башҡортостанда Иштуған һыуһаҡлағысын төҙөүгә ҡаршылар урамға сыҡҡайны. Матбуғатта экология тураһында бәхәс дәррәү күтәрелде, үҙҙәрен "белгес" итеп күрһәтеүселәр ифрат күбәйҙе. Сәйәси маҡсаттарым булмаһа ла, мин дә ун ике дәфтәр битенә яҙылған хеҙмәтемде "Стерлитамакский рабочий" гәзите редакцияһына алып барҙым. Мин унда кесе йылғаларҙы, беренсе нәүбәттә Һәләүекте, күрһәткәйнем. Редактор Һаҙый ағай Арыҫланов яҙыуымды иғтибарһыҙ ҡалдырманы. Ул үҙе лә Һәләүек һыуын эсеп үҫкән, һәм ул был теманы тейешле кимәлгә күтәрҙе.

Һәләүек Баш Алатау итәгенән башланып Ағиҙелгә ашыға, Шәке тауы алдынан үтеп, үҙ юлын тамамлай. Үкенескә ҡаршы, был йылға тураһында һөйләүҙе үткән заманда һүрәтләү уңайлыраҡ.

Һәләүек шаршылары. Шаршылар тауышы сабый сағымдан бирле ҡолаҡ төбөмдә. Хәҙер шаршылар юҡ тип әйтерлек, Һәләүек ятыуҙары ла юҡҡа сыҡты.

Һәләүек туғайҙары. Ожмахҡа оҡшаған туғайҙар, бер нисә саҡрымдарға һуҙыла, муйыл, балан, ҡарағат ҡыуаҡтарының иҫәбе-һаны юҡ ине. Хәҙер улар ҙа юҡ. Элгәре Һәләүек һәр яҙ ҡотороп ағып, үҙенә яңы юлдар һалып, яңынан-яңы күлдәр хасил итте. Ә хәҙер уның күлдәр яһарлыҡ хәле юҡ. Торналар түйын ҡарап тороу үҙе ни тора ине! Хәҙер торналарға урын тар. Ә балыҡтар? Һәләүек ҡушылдығы Ҡашалаҡта ғына иҫәпһеҙ бәрҙеләр ҡайнашты. Хәҙер Ҡашалаҡта бәрҙеләр түгел, ҡоморойҙар ҙа күренмәй. Һәләүектә беҙ атайым менән бер бот самаһы ауырлыҡтағы ҡыҙыл балыҡтар тота инек. Һайыҡты Һәләүек, һайыҡты.

Бәлә ҡайҙан килде, ҡасан башланды? Монголдар яуы, аҡ батшалар заманында ла юрматылар Һәләүектә төйәк ҡорорға бер кемгә лә форсат бирмәгән. Ә бына И. Сталиндың тоғро ярҙамсыһы Л. Берия Һәләүектә бер кемдән һорамай ГУЛАГ филиалын аса, бер түгел ике төрмә төҙөтә. Ошо көндәрҙән Һәләүек бәләгә тарыға.

Килмешәктәр йылғаға иҫәпһеҙ бәләләр килтерә. "Кулактар"ҙы ҡайҙа ҡуйырға белмәгән ваҡытта, Әптек ауылы ерендә "лагерь" ойоштороla. Һәләүек ярында ҡасабаға нигеҙ һалалар. Килмешәктәр сүп-сарҙы Һәләүеккә ташлар була. Текә ярҙа суска фермаһы төҙөп ултырталар. Ә балыҡты ағыулап та, шартлатып та бөтөрөү башлана.

Кремлдә Никита Хрущев етәкселек итә башлағас, ике төрмәнең береһе бөтөрөлә, әммә Әптек һәм башҡа ауылдарҙың ерҙәре законлы хужаларына ҡайтарып бирелмәй. Киреһенсә, йылғаның һул яҡ ярында яңы совхоз ойоштороla. Ҡатын-ҡыҙҙар төрмәһендә кейем тегеү ойошторолғас, совхозға төрлө яҡтан кешеләр саҡырыла.

Һәләүек өсөн иң ҙур бәлә 1969 йылда килде. Йылғаның ағымында саф һыулы ҡушылдығы бар. Ул да Һәләүек кеүек тауҙарҙан ағып сыға ла Хажы ауылынан өс саҡрым өҫтәрәк бәләкәй генә күлгә төшөп юғала. Ә Хажы ауылы янында ошо йылға ер аҫтынан бәреп сыға. Был сығанаҡтың исеме – Берҡамыт. Имеш, элекке ваҡыттарҙа берәү ошо күлгә аты, арбаһы менән батып юғалған. Ауыл эргәһендә урғылып сыҡҡан һыуҙан теге аттың ҡамыты ғына килеп сыҡҡан. 1955 йылдарҙа был сығанаҡта ыҡсым, ҡупшы ғына бина төҙөлөп, ҙур булмаған электр станцияһы эшләй башланы. Ул бер нисә ауылды яҡтыртырлыҡ электр энергияһы бирҙе.

Стәрлетамаҡ ҡалаһының ҙурайыуы Һәләүек яҙмышын ҡырҡа үҙгәртте, 1969 йылда Берҡамыт һыуын, бер метр йыуанлыҡтағы торба аша ҡалаға ағыҙа башланылар. Тимәк, Һәләүектең кәмендә өстән бер өлөшө кәмене, туғайҙар өсөн ҡурҡыныс тыуҙы. Ә бит Һәләүек бассейны өс ҡаланың: Стәрлетамаҡ, Ишембай, Салауаттың үпкәһе. Һәләүек туғайҙарына иғтибар кәрәклеге тураһында мин редакцияларға байтаҡ яҙҙым, йылғаға ярҙам кәрәклеген аңлатып маташтым. 80-се йылдарҙа беҙ, Арыҫланов ағай менән, кәңәшләшеп, Һәләүектә, Әптек ауылы тирәһендә кооператив ойоштороу маҡсатын ҡуйҙыҡ. Балыҡ, ҡош-ҡорт үрсетеү, йәшелсә үҫтереү, ә иң мөһиме, туғайҙарҙы ҡарау өсөн кәрәк ине был. Проблеманы аңлаусылар бар, әммә аҡса табыу ҡыйын ваҡыт. Ун йыл йөрөп, бер тинлек ярҙам таба алманым.

Мине “Сода” берекмәһенең генераль директоры В. Титов ҡына аҙ-маҙ өмөтләндерҙе, тик ул был эште ярҙамсыһы Н. Мотовиловҡа йөкмәтте. Төбәк тәбиғәтенә иң ҙур зыян килтереүселәрҙең береһе, иң матур тауҙарҙан булған Шәкене юҡ иткән “Сода” комбинатының экологияны һаҡлау өсөн ҡуйылған белгесе Н. Мотовилов мине оҙаҡ йүгертте. “Юҡ, булмай”, – тип әйтергә оҙаҡ баҙнат итмәгән, ахыры. Аҙаҡ ул мине генераль директор урынбаҫары Баҡыевҡа алып инде. Икәүләп “юҡ” тигәнде әйттеләр.

Эйе, Стәрлетамаҡ ҡалаһына һыу үткәргес торбалар һалғанда уҡ Һәләүектә өс быуа төҙөлөп, уларҙың береһе тыуған ауылым Әптек янында булды. Был урында элек Маҡар районының “Красный партизан” колхозының тирмән быуаһы бар ине. Колхоз тирмәне 25 йыл самаһы эшләне, ә быуа бер генә тапҡыр ҙа йырылманы. Ә бит элгәре яҙғы ташҡындар ҙа ҡеүәтлерәк була торғайны. Ағастан һәм ташып килтерелгән тупраҡ менән таштан ғына торһа ла, ҡараусыһы булғас, быуа төҙөк килеш ҡала килде. Бетондан төҙөлгән дамба иһә үҙ алдына емерелде. Эйе, мин тауыш күтәргән мәлдә быуаны һаҡлап ҡалып була ине әле. Ул ваҡытта бер нисә машина ҡырсын, аҙ-маҙ бетон етә ине. Ә хәҙер уны төҙәтеү өсөн байтаҡ сығым кәрәк. Дамбаны проектлаусы, минеңсә, тейешле кимәлдәге белгес булмаған, ә төҙөүсе был турала уйлап та бирмәгән. Иң мөһиме, объектты ҡабул итеүсе Салауат Юлаев исемендәге колхоз етәксеһе актҡа ҡул ҡуйғанда дамбаны ҡарап та тормаған, акт күсермәһе миндә лә бар.

Билдәле, дамбаның Һәләүек кимәлен тейешенсә тотоп, туғайҙы һаҡлауы маҡсатҡа ярашлы. Ә мин дамбаға икенсерәк күҙлектән ҡарарға уйлағайным. Мин ябай инженер түгел, проектлау эшен дә беләм, конструкторлыҡ һәләтем дә бар. Эйе, Һәләүек, Шәке темаһы менән мауығып, мин күп етәкселәрҙең кем икәнлеген белдем. Бына Рәсәй Дәүләт Думаһының элекке депутаты М. Хәкимовтың фекере: “Мин Башҡортостандың бар йылғалары өсөн көйөнәм, ә Һәләүектә эшем юҡ”. Депутатлыҡ мандатының ваҡыты сыҡҡас, Хәкимов Мәскәүҙә ҡала алманы, әле лә Берҡамыт һыуын эсеп ята. Әлеге депутат С. Әхмәтовҡа, ул ваҡыттағы ҡала башлығына, нисек кенә тырышһам да, инеп булманы. Ә бына беренсе урынбаҫары Черновтың әйткән һүҙе: “Пиши куда угодно, у тебя ничего не выйдет”.

...1996 йылдың йәйендә миңә Яңы Әптектәге “Ағиҙел” совхозында булырға тура килде. Ни күҙем менән күрәм, Т-150 тракторы Һәләүек уртаһында алға-артҡа йөрөп ята. Шулай итеп, тракторсы төшкө ашҡа ҡайтыр алдынан тракторын йыуа. Трактор әле генә химик утау яһап йөрөгәйне. Контораға йүгереп барһам, директор С. Ғәйнуллин үҙендә ине. Нәфрәтемде уға еткерҙем. Директор ярҙамсыларын саҡыртып алды, тейешле күрһәтмәләр бирҙе. Ошонан һуң механизаторҙар һәм уларҙың етәкселәре миңә бүрегә ҡараған кеүек ҡарай башланы, һөйләшмәҫ булдылар, янымдан һүгенеп үттеләр.

Был совхозда урындағы халыҡ аҙ, барыһы ла тип әйтерлек килгән-киткән кешеләр. Шуға ла тәбиғәткә ихтирам юҡ. Ә тәбиғәткә төкөрөп ҡарау тойғоһо ҡасаба төҙөлә башлағанда уҡ тыуҙы. Бер урам бында “Нахаловка” тип атала. Сөнки ул Әптек ауылынан тартып алынған ваҡытта Әптеккә ҡалдырылған ергә инеп һалынған. Шуныһы ла ҡыҙыҡлы: Нахаловканы төрмә һаҡсылары өсөн түгел, ә “кулактар” үҙҙәре өсөн төҙөгән. Мин “кулактар нахаллыҡтары” тураһында күп һөйләй алыр инем. Был – икенсе тема.

## Әхлаҡи экология

Тәбиғәтте һаҡлауға республикабыҙҙа ҙур әһәмиәт бирелә. Стәрлетамаҡ ҡалаһының Элеватор урамындағы биш ҡатлы бинала тәбиғәтте һаҡлау идаралығы урынлашҡан. Был идаралыҡҡа Башҡортостандың көньяҡ-көнбайыш өлөшөн күҙәтеү аҫтында тотоу бурысы йөкмәтелгән. Минең ошо идаралыҡта булып, уның тәүге начальнигы Ә. Әпсәләмов менән Һәләүек, башҡа ҙур булмаған йылғалар яҙмышы тураһында ла һүҙ башлап ҡарағаным бар. Әңгәмә оҙаҡҡа барманы, сөнки уларҙы иң элек ҡала экологияһы борсой, ә Һәләүек тураһында уйларға ваҡыттары ҡалмай икән.

Ә хәҙер бында – яңы етәксе, тимәк, эште икенсерәк ҡуйыу маҡсаты менәндер. Бер нисә көн йөрөгәс, бик ҡыҙыҡлы яуап алдым. Идара начальнигы һәм өлкән белгесе Т. Кононова белешмәләр менән матбуғат биттәрендә үҙҙәре генә эш итәсәктәре тураһында әйтте. Аңланым, ә шулай ҙа “Сода”, “Каустик” кеүек предприятиеларҙың тәбиғәткә зыяны тураһында һорауҙар бирҙем. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, яҡшы йыһазландырылған, күп штатлы идаралыҡ был предприятиелар эшенә ҡыҫыла алмай икән. Уларҙы тик федераль органдар ғына күҙәтә ала, имеш.

Бер нисә көндән, мин “Стерлитамакский рабочий” гәзитенән уҡып, ер-һыу мәсьәләһе лә ныҡ күҙәтеү аҫтында икәнен белдем. Бәләкәй йылғаларҙы хәстәрләү ҙә юғары баһаға лайыҡ икән. Идаралыҡ тарафынан һуңғы ваҡыттарҙа ғына 61 иҫкәртеү яһалған, 215,5 мең һумлыҡ 39 штраф һалынған. Ә бына миллиондарса һумлыҡ зыян хаҡында ләм-мим. Атмосфераны боҙоуҙа Стәрлетамаҡ ҡалаһы әүҙем эшләй. 2007 йылда ғына һауаға 103,7 мең тонна ҡалдыҡтар сығарылып, бер йылда ғына улар 9,1 мең тоннаға артҡан. Ағиҙелгә 2007 йылда, 111,75 миллион кубометр бысраҡ һыу ағыҙылған! “Сода” берекмәһе ағыҙған дистеллер шыйыҡса 1 миллион 762,7 мең тонна тәшкил итә. Тәбиғәтте һаҡлау идаралығы мәғлүмәттәренсә, атмосфераны күҙәтеү көсәйәсәк, биш автоматлаштырылған станция төҙөлөп, йыһаздары Германиянан килтереләсәк. Ҡалала сүп-сар “етештереү” ҙә кәмемәй: 2006 йылдағы 1736,7 мең тоннанан, 2007 йылда 1911 мең тоннаға етеп, 9,1 процентҡа артҡан.

Ә экология идаралығы тупһаһын бер аҙнанан ашыу тапағас, күңелем һүрелде, шикләнеү ҙә тыуҙы. Тимәк, информация йәшерелә, оҫта йәшерелә. Автоматик контроль станциялары булыр ҙа. Ә информация кем өсөн? Минеңсә, ай һайын күрһәткестәр теркәлгән бюллетендәр сығарыу маҡсатҡа ярашлыраҡ. Улар менән теләгән һәр кем таныша алһын.

Тағы бер һорауым яуапһыҙ ҡалды. 1973 йылда ҡаланың көнбайышында атом заряды шартлатылды. Өс баллы был шартлауҙан өйҙәр һелкенде. Шартлау ер аҫтында ҡыуышлыҡ барлыҡҡа килтереп, унда “Сода” берекмәһенең дистеллер шыйыҡсаһы тултырылырға тейеш ине. Ул урында “Сода”ның “Кама-2” объекты төҙөлдө. Бында радиация кимәле үлсәнәме, бушлыҡ тулғанмы – яуап юҡ. Күп йылдар бысраҡ һыу шунда аҡты. Ә хәҙер Ағиҙелгәме? Шыйыҡса, ер аҫтынан юл табып, өҫкә сыҡмаймы икән? Байтаҡ ваҡыт үткәс шул тирәгә үк Йыһандан ҙур метеорит килеп төштө. Көлөп алдым: “Ай-һай, Йыһанда барыһын да һиҙәләр, беләләр. Йығылғанды түбәләйҙәр?”

Стәрлетамаҡта һәр кеше йылына 8 тонна самаһы сүп-сар “етештерә”. Әгәр был һанды ер шарындағы 6 миллиард кешегә ҡабатлаһаҡ, хәүефле һан 50 миллиард тонна килеп сыға. Сүпкә күмеләбеҙ түгелме? Ҡайҙан йыйыла һуң ул сүп-сар?

Бына алдымда ҡатырғанан яһалған ярты литрлы кефир һауыты. Исеме матур – “Даренка”, биш һүрәте бар, яҡшы материалдан эшләнгән. Ҡапҡасы ла пластмассанан, бороп асылмалы. Кефирын эскәс, һауыттың бер кәрәге лә ҡалмай. Тимәк, ул сүпкә әйләнә.

Минең ниәт тәүҙә экология өлкәһендәге уңыштар тураһында яҙырға ине. Стәрлетамаҡтағы экология идаралығының тупһаһын ике аҙна самаһы тапағас, был уйҙан ҡайттым. Эйе, автоматик күҙәтеү станциялары төҙөлә, киләсәк көндәребеҙ тулыһынса автоматика ҡарамағына биреләсәк.

Юрматылар ғорурлығы, Казбекка тиңдәш Шәке тауы ла тулыһынса ер менән тигеҙләнде. Ә был фактты ҡасан, ҡайһы экрандарҙа күрһәтерҙәр икән? Һәләүек туғайҙарының зарын ниндәй автоматика, ҡасан күҙәтә алыр? Ағиҙелгә “Сода” берекмәһе ағыҙған меңәр тонна дистеллер шыйыҡсаһын ниндәй автоматика иҫәпләй?

Хәтер дәфтәренә күҙ һалайыҡ. “Сода” заводы ауыл халҡының, башҡорт атының көсө менән төҙөлдө. Ул үҫте, илде байытты, бер ҡасан да банкротлыҡ ҡурҡынысы

аҫтында булманы, киреһенсә, күптәргә ярҙам итте. Ә хәҙер “Сода”ға кем хужа? Ҡайҙа көн күрә ул? Мәскәү Рублевкаһындамы, Тель-Авивтамы? Беҙгә билдәһеҙ, ә белгәндәр өндәшмәй.

Бына шулай, хәҙер яңы төшөнсә талап итеlә – әхлаҡи экология. Кемдәрҙер, бәлки, Торатауҙы йәки Йөрәктауҙы шартлата башларға пландар ҡоралыр. Ағиҙел аға бит әле, аға. “Сода”ға яҡын “Аҡ диңгеҙ” тигән урын бар. Юҡ, Негев йәки Невада сүллектәренә оҡшамаған ул, ә кеше ҡулы менән яһалған диңгеҙ, тоҙло, ағыулы. Уны ҡоштар ҙа урап үтә, унда микробтар ҙа көн күрергә теләмәй.

## Юлдар, юлдар...

Әйтерһең дә, юлдар тәбиғәткә ҡаршы тороу өсөн төҙөлгән. Эйе, юлдар бәйләнеш өсөн. Ә бәйләнеш изгелекле лә, яуызлыҡлы ла була. Элегерәк Әптек ауылы янында Һәләүек ярҙарын эре ҡарағай бүрәнәләрҙән төҙөлгән күпер тоташтара ине. Уны батшалар ваҡытында һалғандар, башҡа ауылдарҙа бындай мөһабәт күперҙәр булманы. Ошо күпер аша йәй урталарында, һәр йыл күмәк ҡатын-ҡыҙ, күбеләге әбейҙәр, йәйәүләп үтә ине. Күмәктәр, бер генә йөҙ кеше түгел, барыһы ла тоҡсай менән, ялан аяҡтар.

Был әбейҙәр, ҡатындар иң ҡыҫҡа юл менән Табынға (хәҙерге Ғафури районындағы ҡасаба – **И. Н.)** юл тота ине. Табынып өсөн генә түгел, дауаланыу өсөн дә. Олоғая төшкәс кенә аңланым, был – ҡыҫҡа юл. Табын-Верхотор юлы – колониаль юл. Минеңсә, урыҫтар “Табын” һүҙен башҡорттарҙан үҙләштергән. Күрәһең, башҡорттар үҙҙәре бында табыныу урыны һайлаған, шифалы сығанаҡтарҙан да файҙалана белгән. Шифалы урынға Алла үҙе лә “килеп-киткән”, быныһы – христиандар традицияһы.

Богоявленск баҡыр заводынан һуңғараҡ Верхотор заводы төҙөлгән. Был завод 1,7 миллион бот баҡыр иретеп биргән. Ҡыҙыҡ, был тирәлә баҡыр ятҡылығы юҡ. Руданы Ҡарғалынан ташығандар, утын, руда ташыу өсөн иң уңайлы йөк ташыусы башҡорт аты, ә йөксө, урман киҫеүсе һуҡыр бер тингә эшләгән башҡорттар булған. Башҡорт ерҙәрендә шулай итеп тиҫтәнән артыҡ баҡыр иретеү заводтары төҙөлөп, бер нисә миллион тонна баҡыр етештергән.

Әптек ауылы тирәһендә лә юлдар етерлек. Яңы Әптек ҡасабаһынан да туп-тура, Сағыл тауы башына менеп китә лә тауҙан төшөп, әлеге Иҫке Әптек болондарын тапап үтә. Руль артында ултырыусылар хәҙерге көндә теләһә ни урында юл һала, болондарҙы боҙа. Беҙ бәләкәй саҡтарҙа болонға ат арбаһы менән инергә рөхсәт ителмәне.

Ә хәҙер Һәләүек туғайында шәхси автомобилдәр тиҫтәләп йөрөй, машиналарын шунда йыуалар, сүп-сарҙарын Һәләүеккә ырғыталар. Элек ваҡытында болондарҙа машиналарҙың иҫәбе-һаны юҡ.

Ни әйтергә теләйем? Яңы, өр-яңы закон кәрәк. Юлдар ғына түгел, һуҡмаҡтар схемаһы ла урындағы ауыл хакимиәтендә раҫланһын әйҙә. Һәр ауыл хакимиәтендә экология инспекторы булыу мотлаҡ. Бар донъяны бысратып ятҡан комбинатҡа рөхсәтһеҙ бер кем инә алмай, ә барлыҡ саф һауа, һыу биргән урындарға юл һәр кем өсөн асыҡ. Ҡайҙа барабыҙ? Ниндәй юлдан?

Стәрлебаш районының Тәтер-Арыҫлан ауылы яғынан район үҙәгенә илткән юл бар. Унда Әжәл тауын менгәс, бик йәмле сәтләүек ҡыуаҡлыҡтары үҫә, әммә сәтләүеге өлгөрә алмай, сей килеш һындырып бөтөрәләр. Был юлда “Туҡтарға ярамай!” тигән билдә ҡуйыу кәрәк. Туҡтаған кешенән штраф түләтергә, ә сәтләүекте рөхсәт менән генә йыйырға. Ғөмүмән, ҙур юлдарҙан болон, йылға буйҙарына рөхсәтһеҙ инеүҙе тыйырға кәрәк. Юғиһә, ике тиҫтә йылдан барыбыҙ ҙа, был тәбиғәткә ни булған, тип аптырашырбыҙ.

**Ишғәле НУРҒӘЛИЕВ.**
**Стәрлетамаҡ ҡалаһы.**

# Зәңгәр катер – бәхет символы

Хөрмәтле редакция! Һеҙгә хат, йәғни Сабир Шәриповтың ижады буйынса рецензия юҫығындағы яҙмаларымды ебәрәм.

Күренекле прозаиктың «Зәңгәр катер» исемле романы – бөгөнгө тормош һулышы бөркөлөп торған күләмле әҫәре. Ул «Ағиҙел» журналында (2008 йыл, 3 – 7-се һандар) баҫылып сыҡты, тулы вариантта айырым китап булып та нәшер ителде. Роман композицион йәһәттән ҡатмарлы бер нисә сюжет линияһына ҡоролған. Автор һәр бүлек башында эпиграф килтерә һәм шуның менән әҫәрҙең эске асылына бер ни тиклем яҡтылыҡ төшөрә.

Әҫәр сюжеттың кульминация булырҙай өлөшө менән асыла. Төп героиня Кәримова Лираны өйөнән дауаханаға алып китәләр: ҡыҙҙа флюорографиянан һуң башланғыс стадияла туберкулез ауырыуы табыла. Өфөләге университеттың иҡтисад факультетының 4-се курсында уҡыусы 20 йәшлек студентҡаның тормошо бер минутта селпәрәмә килә. Әммә Лира бирешергә теләмәй – үҙендә артабан йәшәрлек көс таба. Әсәһе Фәниҙә образында көслө һыҙаттар бирелгән: ире Барыйҙың серле, фажиғәле вафат булыуына ҡарамаҫтан, ике балаһын да ел-ямғыр тейҙермәйсә, башҡаларҙан кәм-хур итмәйсә үҫтерергә тырыша.

Данир – аспирант, Лираның һөйгән егете, ә һуңынан инде тормош иптәше. Күпме араларын боҙорға теләмәһендәр, улар бер-береһенә тоғро ҡала һәм ауырлыҡтарҙы бергә үткәрә.

«Зәңгәр катер»ҙа актуаль темалар күтәрелә: дин, әҙәп-әхлаҡ, патронаж тәрбиә, бурлыҡ, ғәҙелһеҙлек, туберкулез афәте, аҡса ҡоло булыу, ер һатыу, власть әһелдәре һәм ябай халыҡ, милләт-ара дуҫлыҡ, өй-ер бүлешеү, йолалар, им-том, экстрасенслыҡ, фольклор мотивтары һ.б. – шуныһы менән әҫәр ҡиммәтле. Тормош үҙенсәлектәрен бөтә тулылығында күрһәтеү – прозаиктың оҫталығы, тиергә мөмкин.

Көнүҙәк проблемаларҙың береһе – эскелек. Ауылда ололар самогон ҡайнатып, йәштәрҙе аҙҙырһа, йәш егет Рәшиттең ғүмере лә шул арҡала өҙөлә, райүҙәктә иһә шәфҡәт туташы Зилә интегә. Рәшиттең өйләнергә теләгән һөйгәне Мая яңғыҙ, тыуырға өлгөрмәгән улы атайһыҙ ҡала, ә ҡарт әсәһе Камилә әбей һуҡырайып, ҡайғыға бата.

Ауылдың абруйлы кешеләре, әле хаҡлы ялдағы уҡытыусылар – Солтан менән Сәйҙә образдары айырым иғтибарға лайыҡ. Улар яҙмышы аша әлеге көндәге мәктәп тормошо, юғары уҡыу йорто проблемаларын күрергә мөмкин. Улар балалар йортонан тәрбиәгә Әмирә исемле ҡыҙҙы алалар, сабыйға бөтә көстәрен, ата-әсә һөйөүен бирергә тырышалар. Үҙҙәренең ике бәлиғ балалары булыуына ҡарамаҫтан, бәләкәй етемгә бәхетле тормош, яҡты киләсәк бүләк итәләр.

...*Лира йыш ҡына бала сағындағы ваҡиғаны хәтерләй: моторлы кәмәлә – уныһы зәңгәр – йәш кейәү һәм аҡ күлдәкле кәләш йөҙөп китеп бара. Был Клара Булатовнаның туйы булып сыға.* Һуңынан Лира менән Данир ҙа, Ҡариҙел тулҡындарын ярып, катерҙа бәхетле киләсәккә юл тота. Романға исем биргән зәңгәр катер – яңы, яҡшы тормошҡа ышаныс, бәхетле көндәр символы. Зәңгәр – тыныс күк йөҙө, Ҡариҙел – тормош даръяһы, ә катер – кеше яҙмышы. Кеше үҙ асылын, йәшәү мәғәнәһен аңлап, тормошта үҙ урынын тапһа, тимәк, катер дөрөҫ йүнәлештә йөҙөп бара.

«Зәңгәр катер» нигеҙендә ысынбарлыҡ, заман-көнкүреш проблемалары, халыҡ тормошо ята. Әҫәр уҡымлы, төрлө жаргондар, фольклор үҙенсәлектәре менән биҙәлгән, Ҡариҙел һөйләше, диалектизмдар урыны менән самаһыҙ ҙа бирелгән. Мәгәр роман Сабир Шәриповтың прозаик булараҡ яҙыу оҫталығын раҫлай һәм бөгөнгө социаль проблемаларҙы яҡтыртыуы менән актуаль.

**Сулпан ИШМОРАТОВА,**
**БДУ-ның 4-се курс студенты.**

# *Әҙәби-мәҙәни мөхит*

***

Башҡортостан Яҙыусылар союзы бинаһында Һәҙиә Дәүләтшина исемендәге әҙәби премия лауреаты Кәтибә Кинйәбулатованың 90 йәшлек юбилейына арналған осрашыу үтте. Шағирәне күркәм байрамы менән БР Дәүләт Йыйылышы – Ҡоролтай комитеты, Яҙыусылар союзы идараһы рәйесе Рауил Бикбаев ҡотланы. Ихлас теләктәргә Башҡорт ҡатын-ҡыҙҙар, «Мәрхәмәт» йәмғиәттәре, «Башҡортостан ҡыҙы», «Ағиҙел», «Аҡбуҙат» журналдары, «Башҡортостан» гәзите редакцияларынан шағирәләр Гүзәл Ситдиҡова, Йомабикә Ильясова, Тамара Юлдашева, Гөлназ Ҡотоева, Лариса Абдуллина, Киров районы хакимиәтенең мәҙәниәт бүлеге начальнигы, шағирә Зөлфиә Ханнанова, З. Биишева исемендәге «Китап» нәшриәтенән Ринат Камал, С. Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Ирек Кинйәбулатов та ҡушылды.

***

М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театрында фронтовик-шағир, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, Өфө ҡалаһының почетлы гражданины Хәниф Кәримдең (Хәниф Кәрим улы Кәримов, 1910 – 1983) тыуыуына 100 йыл тулыу айҡанлы әҙәби-музыкаль сара үткәрелде. Йыйынды инеш һүҙ менән халыҡ шағиры Рауил Бикбаев асты, артабан ҡәҙер һәм хөрмәт кисәһен ойоштороуға күп көс һалған Башҡорт дәүләт педагогия университеты проректоры, филология фәндәре докторы, профессор Рәйсә Хәниф ҡыҙы Хәйруллина, унып ике һеңлеһе, Х. Кәримдең яҡташы – Үрге Ҡыйғы ауылында тыуып үҫкән шағир Радик Хәкимйән иҫтәлектәре менән уртаҡлашты.

Зал тулы төрлө быуын әҙәбиәт һөйөүселәргә Хәниф Кәримдең тормош һәм ижад биографияһын сағыу күҙаллатҡан «Тауҙарға артылғанда» исемле телефильм күрһәтелде, оло юбилей айҡанлы сығарылған буклеттар, календарҙар таратылды.

Байрамда, күренекле сәхнә оҫталары менән бер рәттән, студенттар ҙа ҡатнашты, Хәниф Кәрим һүҙҙәренә популяр йырҙар яңғыраны. Иртәгәһенә юбилей саралары әҙиптең йәнтөйәгендә – Ҡыйғы районында дауам итте.

***

Баймаҡ районының Таһир ауылында күренекле шағир, прозаик, драматург, тәржемәсе Сәләх Кулибайҙың (1910 – 1976) тыуыуына 100 йыл тулыуға арналған әҙәби-мәҙәни осрашыуҙар үтте. Ауылдың дөйөм урта белем биреү мәктәбендә уҡыусылар линейкаһы рәүешендә осрашыу ойошторолоп, унда уҡыусы балалар, уҡытыусылар, шағирҙың ауылдағы һәм сит яҡтарҙан махсус ҡайтҡан туған-тыумасалары ҡатнашты. Уҡыусылар әҙиптең шиғырҙарын тасуири уҡыны. Әҫәрҙәре буйынса һүрәт төшөрөү конкурсында еңеүселәргә Маҡтау грамоталары, Сәләх Кулибай исемендәге фонд етәкселегенең аҡсалата премияһы тапшырылды.

Таһир ауылында тыуып үҫкән йәнә бер күренекле шағир, Бөйөк Ватан һуғышында батырҙарса һәләк булған Хөсәйен Ҡунаҡбай менән яугир шағир Сәләх Кулибайға мәктәп алдында ҡуйылған һәйкәл-стеллаға тере сәскәләр һалынды.

Ауыл клубында дауам иткән осрашыу кисәһендә Башҡортостан Яҙыусылар союзы идараһы рәйесе урынбаҫары Ҡәҙим Аралбаев, «Ағиҙел» журналының

баш мөхәррире Әмир Әминев, Яҙыусылар союзының Сибай төбәк ойошмаһы етәксеһе Хәйҙәр Тапаҡов, район һәм ҡала башҡорттары ҡоролтайы рәйесе Әмир Сәйғәфәров, район үҙәк китапханаһы директоры Луиза Дәүләтшина, шулай уҡ шағирҙың туғандары, ауылдаштары сығыш яһап, иҫтәлектәре, хәтирәләре менән уртаҡлашты. Әҙиптәр клуб, мәктәп китапханаһына үҙ китаптарын, шулай уҡ башҡа яҙыусылар йыйынтыҡтарын бүләк итте.

Кисә район мәҙәниәт һарайы артистары, һәүәҫкәрҙәр сығыштары менән аралашып барҙы, клубта сәхнә түренә шағирҙың ҙур һүрәте эленеп, уның әҫәрҙәренән торған стенд та ойошторолғайны.

***

2 октябрҙә, Башҡортостандың халыҡ шағиры Мәжит Ғафуриҙың тыуыуына 130 йыл тулыу айҡанлы, уның тыуған яғында – Ғафури районының Еҙем-Ҡаран ауылында хәтер кисәһе уҙҙы. Төрлө тарафтан йыйылған ҡунаҡтар, шағирҙың туған-тыумасалары, әҙәбиәт һөйөүселәр тәүҙә уның исемен йөрөткән паркты, илһам шишмәһен, музейын ҡараны, бюсына сәскәләр һалды, унан клубҡа йыйылды. Ауыл халҡы, ҡунаҡтар алдында Башҡортостан Диниә назараты мөфтөйө Нурмөхәмәт хәҙрәттең изге теләктәрен тыңлағандан һуң, район башҡорттары ҡоролтайы башҡарма комитететы рәйесе Ғәлинур Ҡалмурзин, район хакимиәте башлығы вазифаһын башҡарыусы Анатолий Ващенко, Башҡортостан Яҙыусылар союзы идараһы рәйесе урынбаҫары Ҡәҙим Аралбаев, академик Ғайса Хөсәйенов, БДУ профессоры Ғиниәт Ҡунафин, шағир Ирек Кинйәбулатов, әҙиптәр Рәшит Сабитов, Әмир Әминев, драматург Кәбир Аҡбашев, Мәжит Ғафуриҙың Өфөләге йорт-музейы директоры Фәнис Янышев, “Мәжит Ғафури. XXI быуат” фондынан Люциә Камаева, Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры директоры Рәйес Исмәғилев, “Красноусольск” шифаханаһы директоры Фаяз Мәжитов, Республика әҙәбиәт музейы хеҙмәткәре Альмира Шәрипова, шағирҙың ейәне Хәлит Ғафури һ.б. сығыш яһап, шағир ижады, айырым әҫәрҙәре һәм китаптары, уның башҡорт әҙәбиәтендә тотҡан урыны һәм бөгөнгө көндә лә актуаллеге, ижадының төрки әҙәбиәттәре мөхитендә юғары баһаланыуы хаҡында һөйләне.

Кисә мәктәп балалары, ауыл фольклор ансамбле, район мәҙәниәт һарайы артистарының сығыштары, “Ҡара йөҙҙәр” спектакленән өҙөк күрһәтеү, Рәсәйҙең атҡаҙанған артисы Йәмил Әбделмәновтың йыры һ.б. концерт номерҙары менән аралашып барҙы.

***

Бәрәкәтле Бәләбәй ере төрлө милләт әҙәбиәттәренә күренекле шағирҙар, яҙыусылар биргән төбәктәрҙән һанала. Быйыл тыуыуына 120 йыл тулған сыуаш әҙәбиәте классигы Константин Иванов та ошо яҡтан.

Шағирҙың тыуған ауылы Ыҫлаҡбашта был байрамда Өфөнән Башҡортостан Республикаһы мәҙәниәт министры урынбаҫары Ирина Мәхмүтова, Халыҡтар дуҫлығы йорто директоры Вилмир Аҙнаев, Башҡортостан сыуаштары съезы башҡарма комитеты рәйесе Валерий Сидоров, шағир Ирек Кинйәбулатов, Яҙыусылар союзының өлкән әҙәби консультанты Александр Леонидов, йәш шағир Ринат Сөләймәнов ҡатнашты. Ә Сыуаштандан мәҙәниәт министры урынбаҫары Вячеслав Фошин, Сыуаштан Яҙыусылар союзы идараһы рәйесе Сергей Павлов, Чебоксарҙағы К. Иванов музейы директоры Светлана Азамат, сыуаш халыҡ шағиры Порфирий Афанасьев, башҡа сәнғәт һәм сәхнә оҫталары бай әҙәби-музыкаль программа менән килгәйне. Юбилей сараларында Бәләбәй районы хакимиәте башлығы Ю. А. Мурмилов ҡатнашты.

***

Башҡортостан һәм Татарстан дәүләт китап нәшриәттәре дирекциялары тарафынан ике республикала алмаш китаптар сығарыу буйынса килешеүгә – 15 йыл... Шуға ярашлы Татарстанда – «Каләмнәр туганлыгы», Башҡортостанда «Ҡәрҙәшлек кәштәһе» серияһы булдырылып, күршеләрҙә башҡорт әҙиптәренең – 30, ә беҙҙә татар әҙиптәренең 30 китабы донъя күрҙе. Ошо уңай менән ике

туғандаш республиканың Яҙыусылар союздары, дәүләт китап нәшриәттәре ике серияла сыҡҡан ҙур ғына төркөм күренекле авторҙарҙың осрашыуын байрам юҫығында билдәләне.

Ике республика ҡапҡалары эргәһендә татар ҡәләмдәштәрен башҡорт әҙиптәре һәм Илеш районы вәкилдәре икмәк-тоҙ менән ҡаршыланы. Үрге Йәркәйҙең иҫтәлекле урындары менән танышҡандан һуң барса халыҡ район мәҙәниәт йортона йыйылды. Фойела күргәҙмәләр эшләй, татар һәм башҡорт китаптары һатыла, автографтар өләшелә...

Сәхнәгә ТР Яҙыусылар союзы идараһы рәйесе Илфаҡ Ибраһимов етәкселегендә ҡәрҙәш әҙиптәр күтәрелә. Күпселеге Татарстандың халыҡ яҙыусыһы исемен йөрөтә, араларында Ғабдулла Туҡай исемендәге дәүләт премияһы лауреаттары ла байтаҡ.

ТР Дәүләт Советы депутаты Роберт Миңнуллин, «Казан утлары» журналының баш мөхәррире Рауил Фәйзуллин, «Мәҙәни йома» журналының баш мөхәррире Зиннур Мансуров, сатирик Марсель Ғәлиев, яҡташыбыҙ Рәдиф Ғаташ, өлкән йәштәге әҙиптәр Фоат Саҙрыев менән Мөсәғит Хәбибуллин, Татарстан китап нәшриәте директоры Дамир Шакиров, Башҡортостандан Дәүләт Йыйылышы – Ҡоролтай комитеты, Яҙыусылар союзы идараһы рәйесе, халыҡ шағиры, С. Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Рауил Бикбаев, З. Биишева исемендәге «Китап» нәшриәте директоры Зөфәр Тимербулатов, уның урынбаҫары Ғәлиә Ғәлимова, шағирҙар – С. Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаттары Ҡәҙим Аралбай, Ирек Кинйәбулатов, Ф. Туғыҙбаева, Һ. Дәүләтшина исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Гөлфиә Юнысова, Әнисә Таһирова, сатирик Марсель Сәлимов, прозаиктар – Ғәлим Хисамов, Сабир Шәрипов, Ринат Камал сығыш яһаны. Район хакимиәте башлығы Илдар Мостафин бындай сараны киләсәктә лә уҙғарыу зарурлығын билдәләне.

Әҙиптәрҙең һүҙе йыр-моң менән аралашып барҙы. Татарстандың халыҡ артистары – йырсы Фердинанд Сәләхов менән гармунсы Кирам Сафиев, Башҡорт дәүләт филармонияһы ҡурайсыһы Азат Биксурин, Илеш таланттарының номерҙары алҡыштар ҡаҙанды.

Сөн ашаһындағы бәрәкәтле Аҡтаныш тупрағында муниципаль район башлығы Энгель Фәттәхов, ике республика әҙиптәрен ихлас ҡаршылап, уларға Аҡтаныштың ял паркын, тыуған яҡты өйрәнеү музейын күрһәтте. Мәҙәниәт йортонда ойошторолған әҙәби-музыкаль кисәлә «Ҡәрҙәшлек кәштәһе» һәм «Каләмнәр туганлыгы» серияларында китаптары баҫылған әҙиптәр фәһемле фекерҙәр әйтте, Аҡтаныш һәүәҫкәрҙәре иһә һоҡланғыс концерт күрһәтте.

***

Татарстан Республикаһының Алабуға ҡалаһында август айында Марина Цветаева ижадына арналған V халыҡ-ара Цветаева уҡыуҙары булып үтте. Алабуға музей-заповеднигының генераль директоры Гөлзада Руденко, осрашыуҙа ҡатнашыусыларҙы сәләмләп, тантананы асыу өсөн тәүге һүҙҙе ТР мәҙәниәт министры Зилә Вәлиеваға бирҙе.

Уҡыуҙарҙа Испания, Италия, Чехия һ.б. илдәрҙән, Рәсәйҙең төрлө ҡалаларынан 80 вәкил ҡатнашты. Марина Цветаеваның шиғырҙары төрлө телдәрҙә яңғыраны. Был уҡыуҙарҙа Башҡортостандан шағирә, тәржемәсе Әнисә Таһирова Марина Цветаеваның эҙҙәре Башҡортостан ерендә лә ҡалыуын билдәләне һәм шағирәнең шиғырҙарын рус, башҡорт телдәрендә уҡып ишеттерҙе.

***

Башҡортостан Республикаһы Президенты Рөстәм Хәмитовтың Указына ярашлы, заманса драматургияны үҫтереүгә ҙур өлөш индергәне, гуманизмдың, ватансылыҡтың изге традицияларын һаҡлағаны, әүҙем йәмәғәт эшмәкәрлеге өсөн Скворцов Константин Васильевичҡа С.Т. Аксаков исемендәге әҙәби премия бирелде. Яңы лауреат – Рәсәйҙең күренекле шағиры һәм драматургы, РФ Яҙыусылар союзы идараһы рәйестәше.